# БАШҠОРТ ХАЛЫҠ ИЖАДЫ



V

ТОМ

# BASHKORT PEOPLE'S CREATIVE ACTIVITY

## HISTORIC EPOS

# БАШКИРСКОЕ НАРОДНОЕ ТВОРЧЕСТВО

## ИСТОРИЧЕСКИЙ ЭПОС

# BASKURT HALIK FOLKLORU

## TARIHI DESTANLAP

УФА
КИТАП
2000

# БАШҠОРТ ХАЛЫҠ ИЖАДЫ

## V ТОМ

### ТАРИХИ ҠОБАЙЫРҘАР, ХИКӘЙӘТТӘР (ИРТӘКТӘР)

ӨФӨ
КИТАП
2000

ББК 82.3 (2 Рәс=Баш)
Б 29

Мөхәрририәт: *Әхмәт Сөләймәнов* (баш мөхәррир), *Ҡәҙим Аралбаев, Рауил Бикбаев, Салауат Галин, Нур Зарипов, Эрнест Ишбирҙин, Фәнүзә Нәҙершина, Зиннур Ураҡсин, Сабир Шәрипов, Ғайса Хөсәйенов.*

Төҙөүсеһе — *Нур Зарипов.*
Инеш мәҡәлә, аңлатмалар һәм һүҙлектең авторы — *Нур Зарипов.*
Томдың яуаплы мөхәррире — *Зиннур Ураҡсин.*
Нәшриәт мөхәррире — *Фәниҙә Исхаҡова.*

**Күсереп баҫтырғанда томға һылтаныу мотлаҡ.**

Редакционная коллегия: *Ахмет Сулейманов* (главный редактор), *Кадим Аралбаев, Равиль Бикбаев, Салават Галин, Нур Зарипов, Эрнест Ишбердин, Фануза Надршина, Зиннур Ураксин, Сабир Шарипов, Гайса Хусаинов.*

Составление, комментарии и глоссарий — *Нура Зарипова.*
Ответственный редактор тома — *Зиннур Ураксин.*
Редактор издательства — *Фанида Исхакова.*

**При перепечатке ссылка на том обязательна.**

**Башҡорт халыҡ ижады:** 5-се том. Тарихи ҡобайырҙар, хикәйәттәр (иртәктәр). — Өфө: Китап, 2000. — 392 бит.

Был томға нигеҙҙә тарихи эпостар (эпик ҡобайырҙар, хикәйәттәр, иртәктәр) индерелде. Уларҙың ҡайһы берҙәре күп томлыҡта тәүләп баҫтырыла. Томда шулай уҡ батырҙар тураһындағы сюжетһыҙ ҡобайырҙар ҙа урын алды.

ТП — 34

ISBN 5-295-02264-1 (т. 5)
ISBN 5-295-01393-6

© Составление Зарипова Н. и Сулейманова А., 2000

# ТАРИХ ҺӘМ ЭПОС

## I. Боронғо халыҡ ижадында үҙаң сағылышы

*(ҡыҫҡаса экскурс)*

Баштан уҡ шуны иҫтә тотайыҡ: милли үҙаң — үҙ ырыуыңды һәм боронғо ата-бабалар төйәк иткән ер-урыныңды таныу, үҙ халҡыңдың тарихи яҙмышын аңлау, уның ижтимағи тәрәҡҡиәтенә булышлыҡ итеү, ил-йорт берлегенә таянып, үҙ аллы дәүләт ҡороу һәм шул тарихи үҫештә төрлө социаль ынтылыштарҙың дөйөм милли мәнфәғәттәр менән берләшеүен тәьмин итеүсе тойғо һәм кисерештәрҙе үҙ эсенә алған ифрат ҡатмарлы төшөнсә ул. Тап шундай киң мәғәнәһендә милли үҙаң һәр халыҡтың йәшәүе, һәр яҡтан үҫеүе өсөн иң кәрәкле бер шарт булып тора; ҡайһы милләт кешеһе булыуыңды билдәләүҙә хәл иткес күрһәткестәрҙең береһе иҫәпләнә.

Әлбиттә, милләт төшөнсәһе тарихи үҫештең һуңғыраҡ дәүерендә, буржуаз йәмғиәттә генә барлыҡҡа килә. Әммә һәр халыҡтың иң элек үҙен, үҙе йәшәгән мөхитен аңларға теләүе бик боронғо замандарҙа уҡ яралып, тарихи йәшәйеш, ижтимағи үҫеш шарттары менән тығыҙ бәйләнештә төрлөсә, ҡайһы берҙә хатта үтә ҡаршылыҡлы кисерештәр үтеп, һаман киңәйә һәм аныҡлана килгән. Ул ҡаршылыҡтарҙы тикшереү — тарихсылар, этнологтар, философтар эше. Фольклорсыларҙы иһә алға ҡуйылған проблеманың халыҡ ижадындағы сағылышы ҡыҙыҡһындыра.

Фольклор атамаһы үҙе уҡ, инглиз теленән тәржемә итһәк, халыҡ аҡылы тигәнде аңлата. Хәҙерге фәнни мәғәнәһендә фольклор — халыҡтың ижади эшмәкәрлегенең, йәғни борон-борондан донъяны нәфис күҙлектән танып-белергә тырышыуының милли художестволы кәүҙәләнеше ул. Тарихи ҡараһаң, унда, ысынлап та, ижадсы халыҡтың үҙен, үҙе йәшәгән мөхитте, донъя ҡоролошон нисек аңлауы, рухи булмышы һәм аҡыл дәрәжәһе, художество таланты сағыла. Ахыр сиктә, халыҡтың үҙенең поэтик образы тарихи үҫештә һәм мөһабәт бер күркәмлегендә алға баҫа.

Дөйөм алғанда, был поэтик образ ифрат күп яҡлы, күп ҡырлы. Билдәле ғөрөф-ғәҙәттәр ерлегендә формалашҡан һәр жанр уны үҙенсә эшкәртә, халыҡ аңының йә теге, йә был яғын тулыраҡ сағылдыра. Ҡыҫҡаса әйткәндә, мәҡәлдәрҙә, мәҫәлән, халыҡтың борондан туплана килгән тормош тәжрибәһе, объектив ысынбарлыҡты күҙәтеү, таныш-белеү һөҙөмтәләре дөйөмләштерелгән образлы фекер, кире ҡаҡҡыһыҙ хәҡиҡәтте раҫлау формаһында бирелә. Тыуған ил һәм батырҙар тураһындағы ҡобайырҙарҙа ил-йорт берҙәмлеге, милли азатлыҡ һәм ҡаһарманлыҡ тойғолары, тарихи үҫешкә һәм халыҡ ихтыяждарына ыңғай мөнәсәбәт төп урынды алһа, дидактик ҡобайырҙарҙа әхлаҡ нормалары, йәғни халыҡтың социаль норматив мәҙәниәте сағыла. Йырҙарҙа тыуған ил ҡәҙере, уның үҙенә башҡа гүзәллеге, бала саҡтан күңелгә һеңеп ҡалған нәфис күренештәр, кеше тормошонда мөһим роль уйнаған милли йола һәм хөрөфтәргә, теге йәки был ваҡиғаға, хәлгә, фактҡа ҡарата тыуған кисерештәр тетрәткес бер моң булып ағыла. Бәйеттәрҙә иһә шулай уҡ тарихи-милли ысынбарлыҡҡа бәйле хәлдәр — күпселектә ижтимағи ҡоролошта йә айырым шәхестәрҙең яҙмышында килеп сыҡҡан фажиғәләр, йөрәк өҙгөс ауыр кисерештәр көйгә һалып бәйән ителә. Риүәйәт һәм легендаларҙы башҡорттарҙың килеп сығышы, ер-һыу атамалары (тыуған ер башланғысы), ырыу-ара мөнәсәбәттәр, мөһим ваҡиғалар һәм башҡа үҙ-ара бәйләнештәр хаҡындағы иҫтәлектәр-хәтирәләр, йәғни халыҡ күңелендә һаҡланған йәнле тарих тип, йәки халыҡтың «үҙ биографияһы» тип ҡараһаҡ, әкиәттәрҙе халыҡтың бәхетле тормош тураһындағы хыялын, социаль тигеҙлек, ғәҙеллек, батырлыҡ, гүзәллек идеалдарын тасуирлаған әҫәрҙәр тип әйтергә мөмкин. Быларҙың һәммәһе — шулай уҡ халыҡтың үҙаңын, донъяға үҙенсә ҡараштарын, нәфис һүҙгә һәүәҫлеген билдәләүсе күренеш.

Шулай ҙа халыҡтың үҙ-үҙенә һәм башҡа халыҡтарға мөнәсәбәте, үҙ тарихына һәм хәҙерге заманына бәйле гражданлыҡ тойғолары, бүтән жанрҙарҙан бигерәк, героик эпоста — ҡобайырҙарҙа һәм хикәйәттәрҙә төйөрөмөрәк сағыла. Был, әлбиттә, осраҡлы хәл түгел.

«Бик боронғо замандарҙан бирле фольклор өҙлөкһөҙ һәм үҙенсәлекле рәүештә тарихҡа юлдаш булып килә». А. М. Горький тарафынан әйтелгән был фекер айырата эпос жанрында раҫлана. Сөнки эпик әҫәрҙәр, ғәҙәттә, йәмғиәт ҡоролошондағы тарихи үҙгәрештәргә йәки халыҡ тормошонда булып үткән ҙур ваҡиғаларға бәйле рәүештә ижад ителәләр. Әлбиттә, улар конкрет ваҡиғалар йылъяҙмаһы ла, фотографик хроника ла, башҡа тарихи документ та түгел. **Героик эпос — боронғо замандың халыҡ аңындағы поэтик сағылышы, художестволы фантазияла йәнләндерелгән тарих ул.** Бында боронғо ата-бабаларҙың ысынбарлыҡты аңлауы, ижтимағи эшмәкәрлеге фантастик төҫмөрҙәрҙә хикәйәләнә; халыҡ тормошо өсөн йәндәрен дә аямаған ҡаһармандар юғары баһалана. Рустарҙың мәшһүр фольклорсыһы Ф. И. Буслаев «Бытовые слои русского эпоса» исеме менән 1871 йылда баҫылып сыҡҡан хеҙмәтендә рус халыҡ эпосын «тормоштоң поэтик кәүҙәләнеше генә түгел, ә халыҡтың

тарихи үҙаңының сағылышы ла ул», тип аңлатҡан. «Былиналарҙа рус халҡы үҙенең тарихи уҙғанын таныған»[1], — тип яҙған.

Беҙҙең эпик ҡомартҡыларҙа башҡорт ырыуҙарының берҙәм халыҡ булып ойошоу барышын шәйләргә, этник үҙаң үҫешенең эҙмә-эҙлекле сағылышын бик асыҡ тойорға мөмкин.

Әйтәйек, иң боронғо «Урал батыр» эпосын алһаҡ, унда тарихи ысынбарлыҡҡа бәйле ваҡиғалар түгел, ә халыҡтың тарихҡаса булған «биографияһы» кәүҙәләндерелеүен аңларға була. Бай тәбиғәтле Уралды үҙҙәренең тыуған төйәге тип таныған беҙҙең иң боронғо ата-бабаларыбыҙ был донъяның ҡайҙан килеп сығыуы, тереклектең нисек башланыуы тураһында баш ватҡан; бәлки, быуаттар буйыналыр, яңынан-яңы аҡыл эйәләре, йырауҙар һәм сәсәндәр ҡатнашлығы менән шуға яуап эҙләгән һәм, ниһайәт, тапҡан: үҙен солғап ятҡан тауҙарҙы ул бүтән һис niҙән түгел, ә Урал батыр тураҡлаған дейеүҙәрҙән, ә төньяҡтан көньяҡҡа һуҙылған һыртты Урал батырҙың ҡәберенә өйөлгән тупраҡтан барлыҡҡа килгән тип уйлаған; тәбиғәттең йәшәреп, кешелек донъяһының мәңгелек булып ҡалыуын — Урал батырҙың Йәншишмәнән уртлап бөрккән һыуынан, Уралда ҡош-ҡорт, йәнлек һәм хайуандарҙың күбәйеүен — батырҙың ҡатыны, Ҡояш ҡыҙы Һомай артынан эйәреп килгән мал-тыуарҙың үрсеүе, ә Ағиҙел, Яйыҡ, Һаҡмар, Нөгөш йылғалары, бында ишәйеп киткән халыҡ һәм йәнлектәргә һыу етмәй башлағас, Урал батыр улдары ерҙе алмас ҡылыс менән ярып сығарған йылғалар улар, тип аңлатҡан. Әлбиттә, бындай «аңлатма»ла, беҙҙең хәҙерге белеүебеҙсә, тәүтормош кешеһенең мифологик ҡараштары сағыла. Әммә тәүге быуындар тарафынан яһалған был «асыш» (ә уның төп мәғәнәһе — Уралтауҙы яуыз заттарҙан яулап алынған изге ер итеп һанау) һуңғылар өсөн дә шул саҡлы йәтеш булып тойолған, йәнлеккә бай Урал тауҙары, һыуы тоноҡ Ағиҙел, Яйыҡ, Һаҡмар, Нөгөш буйҙары башҡорттарҙың тыуған иле итеп танылған.

Әгәр этник үҙаң тыуған ер тойғоһо менән башлана икән, тимәк, «Урал батыр» ҡобайыры ошо башланғыстың яралғыһы, шишмә башы һымаҡ ҡабул ителә. Йәншишмәнән алып бөрккән һыу донъялағы тереклекте мәңгелек иткән кеүек, **тыуған ер тойғоһо — халыҡты берләштереүсе, уны бөйөк эштәргә ҡанатландырыусы, көс-ҡеүәт биреүсе изге сығанаҡ** дәрәжәһендә. 1981 йылда ғына Рәшит Әхтәровтан яҙып алынған «Уҙаҡ-Туҙаҡ — балабәшнәк ярсығы» тигән ҡобайырҙа боронғо ата-бабаларыбыҙ төйәк иткән Уралдың һуңғы быуындарҙы үҙенә тартҡан изге Ер-һыу төшөнсәһендә алға баҫтырылыуы әле әйтелгәнде раҫлай һәм бик әҫәрләндерә. Ер-һыу — төрки телле халыҡтар өсөн уртаҡ булған был поэтик образ, барған һайын тәрәнерәк лирик һыҙаттар менән ишәйеп, ил-йортҡа мөхәббәт, Ватанға һәм юғары идеалдарға тоғролоҡ, актив граждалыҡ хистәре менән ҡушылып, беҙҙең бөтә фольклорҙың сағыу биҙәктәрен һәм үҙәк идея йүнәлешен тәшкил итә. Бы-

[1] Буслаев Ф. И. Народная поэзия. Исторические очерки. — СПб., 1887. — С. 257.

ның иң нәфис миҫалдары — Тыуған ил тураһындағы ҡобайырҙар («Ай Уралым, Уралым», «Урал тигән илем бар» һ. б.), «Урал», «Башҡорт ере», «Йыуасалы» ише тарихи йырҙар. Ә йорт хайуандарын изгеләштергән хикәйәттәрҙә, айырата «Ҡуңыр буға» әҫәрендә тыуған ер тойғоһоноң затлы үгеҙ образында һынландырылыуы (кеше түгел, хатта мал да үҙ илен онотмай — ҡасан да булһа бер әйләнеп ҡайта!) — ошо изге мотивтың Урал тәбиғәтенең күркәмлегенән тыуған кисерештәр менән үрелеп, йыр-моң булып ағылыуы «Ҡуңыр буға» эпосының юғары художество үҙенсәлеген билдәләй.

«Урал батыр» эпосының идея әһәмиәте, әлбиттә, тыуған ил тойғоһон башлап ебәреүгә генә ҡайтып ҡалмай. Унда дөйөм кешелек әһәмиәтендәге тема — кешенең үлемһеҙлеге өсөн бөтә яуыз көстәргә, шул иҫәптән, Әжәлгә ҡаршы көрәш проблемаһы күтәреләһәм бик аҡыллы хәл ителә.

Сағыштырығыҙ. Беҙҙең эранан ике мең йылға яҡын элек яҙмаға күсерелгән шумер (һуңынан вавилон) эпосының геройы — көсғәйрәтен ни эшләтергә белмәгән Гильгамеш, мәҫәлән, барлыҡ яуыз көстәрҙе тар-мар итеү маҡсаты менән юлға сыға. Быны ул мәңгелек дан ҡаҙаныу өсөн эшләй. Үҙе кеүек үк ғәҙәттән тыш ғәйрәтле йән дуҫы — юлдашы Энкиду менән бергәләп, ул ете ҡатлы Ливан тауҙарында шифалы кедр урмандарын һаҡлаусы Хумбабаны, йәғни күктән төшөрөлгән утә йырткыс үгеҙҙе, аяуһыҙ алышта еңә (был Урал батырҙың шундай уҡ мифик персонаж — Ҡатил батшаның үгеҙе менән көрәшен хәтерләтә!). Ошо еңеүе менән Гильгамеш, ысынлап та, дан ҡаҙана. Әммә көтмәгәндә иптәше Энкиду үлгәс, ул үлемдән ҡурҡа башлай һәм шуға ҡаршы дауа — мәңге йәшлек сәскәһен эҙләй (әкиәттәрҙә — тере һыу, «Урал батыр» ҡобайырында — йәншишмә). Ҡулға ала алмаҫлыҡ сәнскеле ул сәскәне Гильгамеш океан төбөнән (һыу аҫты батшалығынан) алып сыға, ләкин файҙалана алмай: сәскәне йылан урлай, Гильгамеш тыуған иленә буш ҡул менән ҡайта. Тимәк, аҙаҡ сиктә барыбер уңышһыҙлыҡҡа осрай, гел генә ҡаршылыҡтар тыуҙырып торған аллалар алдында көсһөҙ булып ҡала.

Ә Урал батыр?

Ул да үлемгә ҡаршы сара эҙләй. Әммә үҙе өсөн генә түгел. Ә бөтә йән эйәһенә үлем килтереүсе Әжәлде юҡ итеү өсөн, тереклектең мәңгелеге өсөн! Был эпоста сағылған халыҡ аҡылының тәрәнлеге лә шунда күренә: ул кешенең үлемһеҙлеген мәңге йәшәү менән түгел, ә уның халыҡ бәхете, донъя именлеге өсөн башҡарған эштәре менән бәйләй. Йәншишмәнең һыуын эсеп, хәҙер һис үлә алмай йонсоған, «бар һөйәге ҡаҡшаған, тәнендә ит ҡалмаған» ҡарт ауыҙынан был идея бик дәлилле ишетелә:

Мәңге ҡалам тимәгеҙ,
Йәншишмәнән эсмәгеҙ.
Донъяла мәңге ҡалыр эш —
Донъяны матур төҙөгән,
Бағты мәңге биҙәгән —
Ул да булһа яҡшылыҡ.

Ҡуккә лә осмаҫ — яҡшылыҡ,
Һыуға ла батмаҫ — яҡшылыҡ,
Утта ла янмаҫ — яҡшылыҡ,
Телдән дә төшмәҫ — яҡшылыҡ.
Бары эшкә баш булыр,
Үҙеңә лә, кешегә лә
Мәңге йәшәр аш булыр.

Урал батыр образының тәрән гуманистик мәғәнәһе батыр шәхесенең үҙ халҡына береккәнлегендә, әле әйтелгән идея балҡышында асығыраҡ беленә:

Бөтә серҙе аңлағас,
Урал юлға сыҡҡан, ти;
Йәншишмәгә барған, ти,
Һыуын уртлап алған, ти;
Үҙе сапҡан юлына,
Дейеүҙән өйгән тауына
Һыуҙы шунда бөркkән, ти:
— Тау, урмандар йәшәрһен,
Мәңге үлмәҫ төҫ алһын,
Ҡошо һайрап маҡтаһын,
Халҡы йырлап хуплаһын,
Ерҙән ҡасҡан дошмандар
Бары күреп һоҡланһын,
Ил һөйөргә ил булып,
Ер һөйөргә бағ булып,
Дошман күҙен ҡыҙҙырып
Балҡып торған ер булһын!

Урал батырҙың ихлас башҡарған был эшендә ни саҡлы тыуған ерҙе ҡәҙерләү, киләсәк быуындар өсөн күркәмлеген һаҡлау хәстәрлеге күренә. Шул уҡ ваҡытта тәбиғәтте һаҡлау тураһында беҙҙең бөгөнгө заман талаптары менән дә ни тиклем ауаздаш ул!

«Аҡбуҙат», «Заятүләк менән Һыуһылыу», «Аҡһаҡ ҡола», «Ҡара юрға», «Ҡуңыр буға», фольклорсыларҙың уртаҡ ҡарашынса, башҡорттарҙа тәүтормош община ҡоролошоноң емерелеү осорон сағылдыралар. Дөйөм алғанда, уларҙың тематик йөкмәткеһен башлыса ғаилә өсөн көрәш мотивтары тәшкил итә. Шуныһы характерлы, «Аҡбуҙат» һәм «Заятүләк менән Һыуһылыу» сюжетында эпик геройҙарҙың үҙенә яҙған ҡыҙҙы ситтән, хатта һыу аҫты батшалығынан эҙләүҙәре (экзогамия күренеше), «Урал батыр» ҡобайырындағы кеүек, мифик заттарға ҡаршы көрәш фонында һүрәтләнә. Батырҙар эҙләгән ҡыҙҙар ҙа шау ғына кеше һүрәтендә түгел, ә тәү тапҡыр ғәҙәттән тыш серле төҫтә («Аҡбуҙат»та алтын өйрәк «кейемендә», ә тегеһендә ғәләмәт оҙон сәсле, яланғас Һыуһылыу һынында) алға баҫалар. Һәүбән дә, Заятүләк тә үҙҙәренә тап булған ана шул мифик ҡыҙҙар артынан һыу аҫты батшалығына төшәләр һәм,

күп төрлө ҡаршылыҡтарҙы еңеп, ҡыҙҙы алып, бик күп мал эйәртеп, ер өҫтөнә сығалар.

Эпик геройҙың үҙенә тейешле ҡыҙҙы табып, илгә мал эйәртеп ҡайтыуы йәмғиәт ҡоролошона яңы баҫҡысты — хосуси милектең тыуыуын, шул нигеҙҙә патриархаль ырыу ҡоролошоноң башланыуын сағылдыра. Ф. Энгельстың әйтеүенсә, «Йорт хайуандарын эйәләштереү, уларҙы көтөү-көтөү итеп үрсетеү байлыҡтың быға саҡлы ишетелмәгән сығанаҡтарын барлыҡҡа килтерә һәм бөтөнләй яңы ижтимағи мөнәсәбәттәрҙе тыуҙыра»[1]. Шулай итеп, «патриархаль ғаилә менән беҙ яҙылған тарих өлкәһенә инәбеҙ»[2].

Ошоға бәйле рәүештә, фольклор ижадсыларының аңында ла яңы һыҙат-сатҡылар барлыҡҡа килә. Ул — тыуған ергә мөхәббәт тойғоһо, ил-йорт азатлығы, ғәҙел тормош тойғоһо. Һыу аҫты батшалығы нисек кенә бай һәм йәмле булмаһын, эпос геройҙары унда ҡалырға теләмәйҙәр. Шуны уҡ батырҙар тураһындағы әкиәттәрҙә күрергә мөмкин. Тик бында сит илдәрҙә геройҙарҙың кисерештәрен һүрәтләүгә бик күп урын бирелмәй. Ғәҙәттә, оҙон ҡолғаға менгәс (батша ҡыҙын яусылап килгән батырҙарҙы һынау эпизодтарын иҫегеҙгә төшөрөгөҙ), тыуған-үҫкән яҡтарын күреп, батыр күҙенән йәш тамыуын, аҙаҡ мотлаҡ рәүештә тыуған илгә әйләнеп ҡайтыуын, батша булып, бөтә кешегә иркен тормош урынлаштырыуын әйтеү менән сикләнелә. Эпоста иһә күңел нескәлектәрен дә күрергә була. Мәҫәлән, тыуған ерҙе һағыныу тойғоһо Заятүләк образында айырата әҫәрләндергес. Һыуһылыу биргән тылсымлы көҙгө лә был тойғоно баҫа алмағас, һыу батшаһы бында Балҡантауҙы күсереп килтертә. Ә Заятүләк уны күреп бына нимә ти:

Тауҙы тауға оҡшатып,
Тимер менән ҡоршатып
Алып килгән тауығыҙ —
Балҡантауым был түгел.

Ҡарағыҙсы: ни ҡәҙәр аныҡ, ни ҡәҙәр ҡәтғи ул тыуған ер тойғоһо фольклорҙа! Уның халыҡ күңеленә хөрлөк, тәбиғи байлыҡ идеалдары менән тоташҡан конкрет (реалистик!) һыҙаттары, башҡорттарға аңлайышлы хозур биҙәктәре бар:

Балҡантауҙың бейеге —
Бөйөрөндә уйнар кейеге;
Һыулап ҡаҡҡан ҡаҙыҡтай
Һыуһары күп Балҡантау.
Айыры ҡолаҡ, йылтан күҙ
Бүреһе күп Балҡантау;
Алпан-толпан атлаған
Айыуы күп Балҡантау;

---

[1] Маркс К., Энгельс Ф. Соч. 2-ое изд. Т. 21. — С. 57.
[2] Шунда уҡ. 61-се б.

Ҡырға ҡарап ҡыя торған
Ҡарһағы күп Балҡантау;
Ҡыҙ балалай биҙәнгән
Төлкөһө күп Балҡантау;
Оя яһар, түл йәйер
Ҡоштары күп Балҡантау...
Йәйеп ҡуйған бәрхәттәй
Урманы күп Балҡантау...

Күп ҡобайырҙарҙа һәм «Иҙеүкәй менән Мораҙым» эпосында Уралтау образын хәтерләткән был шиғри характеристиканың халыҡ телендә йыш ҡына бер көйгә һалып, айырым һөйләнеүе, әлбиттә, тыуған ер һағышы менән аңлатыла.

Һәүбән тормошонда был һағыш ил батырҙарының оло вазифаһын аңлау менән үрелә.

Уралдың һылыу ҡыҙҙары
Һыу төбөндә һарайҙа
Ҡан илаһа быҒауҙа,
Шул быҒауҙы сисмәһә,
Уралға ул булырмы? —

ти Һәүбән, һыу батшалығына урлап килтерелгән ҡатын-ҡыҙҙарҙың ауыр хәлен күреп-әсенеп. Шул уҡ ваҡытта бында батыр менән халыҡ араһындағы бәйләнеш тә асығыраҡ күренә. Атаһының усаллығы менән янаған Нәркәскә Һәүбән шулай яуап ҡайтара:

Яу аҫһа ла атайың,
Тайшанмаҫҡа уйым бар.
Яңғыҙлатмаҫ үҙемде —
Урал тигән илем бар.

«Аҡбуҙат» һәм «Заятүләк менән Һыуһылыу» хикәйәттәрендә тыуған ер тойғоһон, ысын мәғәнәһендә патриотизм дәрәжәһенә күтәреп, ил-халыҡ азатлығы өсөн ныҡышмалы көрәш идеялары менән бәйләү — был инде халыҡ аҡынның яңы тарихи баҫҡысҡа күтәрелеүен раҫлай.

«Алпамыша менән Барсынһылыу», «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу», «Алдар менән Зөһрә», «Бабсаҡ менән Күсәк» эпостарында инде тарихи үҫештең беҙгә яҡынραҡ баҫҡысы һүрәтләнә. Быларҙа ғаилә өсөн көрәш ер өҫтөндә «тәбиғи» шарттарҙа алып барылып, аҙаҡ сиктә йә ил эсендә ғәҙеллек, тигеҙлек урынлаштырыу идеялары менән («Алпамыша...»), йә ырыу-ара татыулыҡ һәм берләшеү мотивтары менән килеп тоташа («Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу», «Алдар менән Зөһрә»). «Бабсаҡ менән Күсәк» («Күсәк бей») эпосында шул уҡ идея ырыу-ара бәрелештәрҙе, ҡан ҡойоштарҙы ҡәһәрләү аша белдерелә. Был — бер. Икенсенән, эпик йөкмәткегә патриархаль феодалсылыҡ дәүеренә хас тарихи-социаль төшөнсәләр

килеп инә, этнос йәки ҡәбиләселек билдәләре киңәйә һәм аныҡлана төшә. Әйтәйек, Алпамыша ғәҙәттән тыш көслө бәһлеүәнде һынлан-дырған батыр ғына түгел инде, уның йөҙөндә халыҡ илдә тыныслыҡ һәм тигеҙлек урынлаштырыр ғәҙел ханды ла күрергә теләй. Алпамышаның илгә ҡайтып, яуыз Ҡолтүбәне үлтереп, Барсынһылыуҙы янынан үҙенә алып, хан булып ултырыуында халыҡтың ана шул хыялы сағыла.

«Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу», «Алдар менән Зөһрә» хикәйәттәрендә ғаилә мәсьәләһен хәл итеүҙә геройҙарҙың бер-береһенә мөхәббәт тойғолары ла ҙур роль уйнай: сюжет үҫтерелешендә боронғо йәшәйеште, ырыу-ара феодаль мөнәсәбәттәрҙе һәм тарихи ынтылыштарҙы сағылдырған деталь йәки эпизодтар байтаҡ урын ала. Былар бөтәһе лә эпос йөкмәткеһенең тарихи ысынбарлыҡҡа яҡынайыуы, реалистик элементтар менән байыға һәм конкретлаша килеүе хаҡында һөйләй.

«Бабсаҡ менән Күсәк» («Күсәк бей») эпосында ҡасанғы хәлдәр сағылыуы тураһында башҡорт фольклористикаһында берҙәм генә фекер юҡ. Ҡайһы бер ғалимдар (Ә. Харисов) әҫәрҙә XV — XVI быуат хәлдәренең сағылышын күрһә, икенселәр (М. Сәғитов) уны башҡорт ырыуҙарының боронғораҡ дәүеренә, IX — XI быуаттарға алып барып тоташтыра. Нисек кенә булмаһын, был эпоста башҡорт ырыуҙарының үҙҙәре араһындағы көрәш сағылыуы, үҙ-ара ыҙғышыу, ҡан койошоу-ҡарымталашыуҙың һәләкәтлелеге күрһәтелеүе, үҙ-ара татыулыҡ һәм берҙәмлек идеалдарының яҡланыуы бәхәсһеҙ. Бында шулай уҡ социаль һәм этник төшөнсәләрҙең дә тарихи яҡтан байтаҡ аныҡланыуын күрергә була. Әгәр бығаса эпик геройҙарҙың этник сығышы һәм индивидуаль характер үҙенсәлектәре хаҡында һөйләргә мөмкинлек булмаһа, йыш ҡына улар үтә дөйөмләштерелгән сифаттарҙа мифологик образдарга алып барып тоташтырылһалар, «Бабсаҡ менән Күсәк» эпосында инде геройҙар башҡорт ырыуҙарының төп батырҙары вазифаһында алға баҫтырылалар, кайһы бер варианттарҙа хатта «бей» ҡушаматы (феодализм осоронда ғәҙәттә ырыу башлығына бирелгән чин-дәрәжә) менән «Бабсаҡ бей», «Ҡарағоломбәт бей», «Күсәк бей» тип йөрөтөлә. Шуның менән бергә иң ҡыҙыҡлыһы — бында һәр герой үҙ эше, үҙ холҡо менән тап сәнғәтсә ҡылыҡһырлап күрһәтелә.

Башлыса мифологик ҡараштар ерлегендә тыуған боронғо героик эпос әҫәрҙәрен аллы-артлы күҙҙән кисереү эпик ижадта халыҡ аңының үҫеш баҫҡыстарын асыҡларға ярҙам итә.

## 2. Тарихи эпос

Был томға ингән әҫәрҙәр халыҡ хәтерендә тәрән эҙ ҡалдырған тарихи ваҡиғаларға ҡарата ижад ителеүҙәре, сюжет үҙәгендә халыҡ тормошона бәйле ваҡиғалар, башлыса кеше нәҫеленән булған батырҙар һәм шулай уҡ кеше нәҫеленән булган дошман персонаждар һүрәтләнеүе менән III — IV томдарҙа ҡаралған мифологик эпостан ныҡ айырыла.

Теге йәки был сюжеттың ҡасан барлыҡҡа килеүен, әлбиттә, өҙөп кенә әйтеп булмай. Сөнки фольклор әҫәре — күп быуындарҙың ижад емеше. Унда төрлө заман ҡатламдары булырға, йәғни элгәрерәк һөйләнгән сюжетҡа һуңғыраҡ дәүер күренештәре, яңы мотивтар өҫтәлергә мөмкин. Шулай ҙа йөкмәткелә һаҡланған төп тематик мотивтарға һәм заман билдәләренә ҡарап, әҫәрҙең башлыса ҡайһы осорға ҡарауын, ҡасанғы тормошто, ынтылыштарҙы сағылдырыуын белеп була. Шул билдәләргә таянып, был томдағы әҫәрҙәрҙең асылда ике тарихи дәүергә ҡарауын танырға мөмкин.

**Беренсе** — XIII быуат уртаһынан, йәғни илгә монголдар ябырылыуынан башлап XVI быуаттың уртаһына саҡлы булған дәүер. Был дәүерҙә эпос әүәлдән килгән традицион формаларында (ҡобайыр һәм хикәйәт) үҫеүен дауам итә; сит ил баҫҡынсыларына, беренсе сиратта Алтын Урҙа дәүләтенә, унан һуң Нуғай, Ҡазан ханлыҡтарына һәм эске дошмандарға ҡаршы көрәш үҙәккә алына («Иҙеүкәй менән Мораҙым», «Мәргән менән Маянһылыу», «Тарғын менән Ҡужаҡ», «Ек Мәргән» һ. б.).

**Икенсеһе** — XVI б. уртаһынан, йәғни башҡорт ырыуҙары Рус дәүләтенә ҡушылғандан һуңғы дәүер. Бынһында инде үҙәк тема башҡорттарҙың бер яҡтан «үҙ» феодалдарына, икенсе яҡтан — урыҫтан башҡа халыҡтарҙы «сит бауыр» тип таныған самодержавиеның колониаль сәйәсәтен, урындағы хакимдарҙың баш-баштаҡлығына ҡаршы милли көрәш төҫөн ала («Ҡараһаҡал», «Юлай менән Салауат» һ. б.).

## Баҫҡынсы хандарға ҡаршы көрәште сағылдырған ҡомартҡылар

Тарихсыларҙың раҫлауынса, X — XI быуаттарҙа уҡ башҡорттар араһында ырыусылыҡ мөнәсәбәттәре тарҡалып, феодаль мөнәсәбәттәр тыуа һәм, патриархаль йомоҡлоҡтан сығып, ваҡ ырыуҙарҙың берләшеүенә табан ынтылыштар һиҙелә башлай. XII — XIII быуаттарҙа башҡорттар йәшәгән ерҙәрҙә башында хандар торған эре ырыу берекмәләре барлыҡҡа килә. Шуның конкрет миҫалы итеп Көньяҡ Уралда Ете ырыу берекмәһен, хәҙерге Башҡортостандың көнбайышындағы легендар Ялыҡ ханға буйһонған ҡәбиләләр берекмәһен күрһәтәләр[1].

Ырыуҙарҙы берләштереү идеяһы — XII — XIII быуаттарҙа башҡорттарҙың халыҡ булып ойошоуы өсөн хәл иткес тарихи проблема ул. Был хаҡта ла етди һүҙҙе беҙ тәү башлап фольклорҙа күрәбеҙ. Батырҙар тураһындағы экиәттәрҙә һәм «Алпамыша» эпосында яуыз көстәргә ҡаршы көрәштә арыу-талыу белмәҫ батырҙың,

---

[1] *Ҡарағыҙ:* Очерки по истории Башкирской АССР. Т. 1, часть первая. — Уфа, 1956. — С. 41; Кузеев Р. Г. Происхождение башкирского народа. Этнический состав, история расселения. — М.: Наука, 1974. — С. 450 — 462; Бикбулатов Н. В. Башкиры. Краткий этноисторический справочник. — Уфа, 1995. — С. 8 — 10.

аҙаҡ сиктә йыш ҡына батшалыҡтарҙы берләштереп, «ғәҙел батша» булып ултырыуын йәки халыҡтың үҙе тарафынан һайлап ҡуйылыуын этник берҙәмлек һәм дәүләтселек тойғоһоноң тәүге саткылары тип ҡарарға мөмкин. Ә бына 1920 йылда Ғәбит сәсәндән яҙып алынған «Семьрод — ете ырыу» тигән әҫәрҙә ил-йортто, ырыуҙарҙы берләштереү мәсьәләһенең инде халыҡ ҡарамағына сығарылып, ғәмәли көн тәртибенә ҡуйылыуын күрәбеҙ. Бында бөтәһенән бигерәк Уралтау тураһында тау башҡорттары менән ялан башҡорттары араһында ҡупҡан «бәхәс» иғтибарҙы тарта. Башҡорттар әле бер ил булып берләшмәгән, һәр ырыу тик үҙ иләүен — үҙ төбәген хуп күргән заманда, һәр ике яҡтың йырсылары-сәсәндәре, Уралды йә маҡтап, йә яманлап, үҙ йырҙарын йырлайҙар.

Быны, әлбиттә, юҡтан һүҙ көрәштереү, йә булмаһа хатта, әйтештәр жанрындағы һымаҡ, сәсәндәрҙең йорлоғон, һүҙгә оҫталығын, тапҡырлығын һынау тип кенә ҡарарға ярамай. Бында берләшеүгә йөҙ тотҡан ырыуҙарҙың ил-йорт өсөн урын «һайлауы» тураһында — тимәк, этник берлектең географик нигеҙе тураһында етди һүҙ бара. «Ете ырыу» ҡобайыры — башҡорт ырыуҙарының касандыр борон (XII быуат ахыры — XIII быуат башында) үҙ-ара берләшеп, үҙ аллы дәүләт ҡороуға аҙым яһауҙары тураһында халыҡ күңелендә һаҡланып ҡалған шәһадәтнамә ул.

«Шәһадәтнамәлә» алға баҫҡан мәсьәләне хәл итеүҙә ҡараштар айырыла икән — уның быныһы ла һис осраҡлы түгел, ә тарихи бер законсылыҡ менән аңлатыла: халыҡ йәшәгән ер-территорияның тәбиғи формаһы (ландшафт) бер төрлө генә булмаһа, уға бер-береһенән алыҫ йәшәгән ырыуҙарҙың мөнәсәбәте лә төрлөсә булырға мөмкин[1].

Башҡорт ҡәбилә һәм ырыуҙарының сәйәси йәһәттән берләшеп, берҙәм халыҡ булып ойошоу барышы татар-монгол илбаҫарҙары тарафынан өҙөлә: 1236 йылда башҡорттар Оло Иҙел (Волга) буйы болғарҙары менән бер рәттән илбаҫарҙар тарафынан яуланып, Алтын Урҙа дәүләтенә бойондороҡло булып ҡала.

Башҡорттарҙың монгол баҫҡынсыларына ҡаршы көрәше хаҡында тарихи мәғлүмәттәр аҙ. Әммә Батый хандың Болғар дәүләтенә ҡаршы походы (1236 йыл) Көньяҡ Урал алды аша үтеп, бында башҡорт ҡәбиләләренең ҡаршылығына осрауы билдәле. Шул замандағы ҡанлы ваҡиғалар хаҡында халыҡ күңелендә мәңге юйылмаҫ иҫтәлектәр ҡалған, телдән һөйләнгән тарих булып беҙҙең быуынғаса килеп еткән. (Был баҫманың 2-се томында «Бошман-Ҡыпсаҡ батыр», «Аҡман-Тоҡман» һәм шул рәттәге башҡа риүәйәттәрҙе ҡарағыҙ.) 1924 йылда Хәйбулла районы Смаҡ ауылында 106 йәшлек Мөхәммәҙи бабай, мәҫәлән, Өфөлә Совпартшколала уҡыған Рәхмәтуллин Мөкимгә шундай бер «тарих» һөйләгән: «Бынан ете йөҙ йылдар элек башҡорттар үҙҙәренең дошманына ойошҡан рәүештә ҡаршы торғандар. Башҡорт ҡәбиләләре һуғышҡа ғәйрәтле халыҡ булған. Һуғыш бит, еңелгән ваҡыттары ла булмау мөмкин

---

[1] *Ҡарағыҙ:* Бромлей Ю. В. Очерки теории этноса. — М., 1983. — С. 193.

түгел. Башҡорт ҡәбиләләрен Алтын Урҙа ханлығы һуғышып еңгән. Был йыр шул саҡтағы ваҡиғаны күрһәтә:

Алтын Урҙа ханлығы
Арыҫлан илгә яу асты.
Үҙән, Яйыҡ буйҙарын
Ҡыҙыл солға ҡан итте.
Бик күп эштәр башланы,
Күркле илде таптаны[1].

1967 йылда Йылайыр районы Юлдыбай ауылында 47 йәшлек Сөнәғәт Хәкимйән улы Ҡашҡаровтан Ниғмәт Шоңҡаров яҙып алған икенсе бер материалда Батый ханға ҡаршы тороп һуғышҡан башҡорттар араһында хәҙерге Юлдыбай ауылы кешеһе Бүкәт менән Үләй исемле батырҙар булыуы ла әйтелә. Шул ике батыр Батый хандың Мамыт тигән бер һалдатын хатта әсир итеп алып ҡайтҡандар, имеш[2].

«Күркле ил» өс йөҙ йыл буйына баҫҡынсылар аяғы аҫтында тапалып, тағы күпме ҡан һәм күҙ йәштәрен үҙенә һендермәһен, «ғәйрәтле халыҡ» Алтын Урҙаға ҡол булырға теләмәгән: Урал ҡаяларына һырышып, азатлыҡ даулаған, яйы сыҡҡан һайын, арыҫлан йөрәкле ҡаһарман улдарын изге яуға күтәргән. Әммә көстәр тигеҙ булмағас, былары ла фажиғәле тамамланған. Шундай фажиғәләрҙең береһе тураһында тетрәткес бер иҫтәлек — «Һуңғы һартай» тигән легенда[3].

Башҡа легенда һәм тарихи риүәйәттәрҙән айырмалы буларак, беренсе заттан (Һартай ырыуының башлығы Ялыҡ бейҙең үҙ исеменән) һөйләнгән был легендала монгол илбаҫарҙарына йәки, легенданың үҙендә әйтелгәнсә, «Аҡһаҡ Тимер яуына» ҡаршы башҡорттарҙың айбарлы һуғышыуҙары[4], «йәйге эҫелә себен ни тиклем булһа, шул тиклем» ғәскәр менән илде баҫып алған монголдарҙан

---

[1] Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтының 1967 йылда уҙғарылған фольклор экспедицияһы материалдары. — Рәсәй Фәндәр Академияһы, Өфө ғилми үҙәгенең архивы (артабан «Ғилми архив» тип ҡыҫҡартып әйтелә). Ф. 3, оп. 65, д. 2. — 272 — 273-сө биттәр. М. Рәхмәтуллиндан (1898 йылғы) Н. Д. Шоңҡаров яҙып алған.

[2] Ғилми архив. Күрһәтелгән дело, 282-се бит.

[3] Ошо баҫманың 2-се томы: Риүәйәттәр, легендалар. — Өфө, 1996.

[4] Тарихсы-этнограф Раил Кузеевтың тарихи сығанаҡтарға таянып раҫлауынса, легендала 1391 йылда Аҡһаҡ Тимер менән Туҡтамыш араһындағы һуғыш сағыла, ул һуғышҡа башҡорттар Туҡтамыш яғынан ҡатнаша (*Ҡарағыҙ:* Кузеев Р. Г. Происхождение башкирского народа. — С. 473). Шулай булыуы ла бик мөмкин, әлбиттә. Әммә беҙҙең өсөн бында шуныһы мөһим: Һартай ырыуы Алтын Урҙаны яҡлап түгел, ә үҙ ерҙәрен, урмандарын, болондарын һаҡлап һуғыша. Сөнки, билдәле булыуынса, 200 меңдән торған Аҡһаҡ Тимер яуы килгәндә лә, ҡайтҡанда ла башҡорттар йәшәгән ерҙәрҙән уҙа һәм үҙ юлындағы бөтә ырыуҙарҙы талап, ҡыйратып китә (*Ҡарағыҙ:* Греков Б. Д., Якубовский А. Ю. Золотая Орда и ее падение. — М. — Л. Изд-во АН СССР, 1950. — С. 354 — 361).

еңелеп, ырыу башлығы яңғыҙ ҡалған хәлдә лә Ялыҡ бейҙең дошмандан аяуһыҙ үс алып йөрөүе бәйнә-бәйнә хикәйәләнә.

Ил-йорт берҙәмлеге һәм үҙ аллы дәүләтселек ҡараштары «Иҙеүкәй менән Мораҙым» ҡобайырында артабан үҫтерелә. Күп кенә төрки халыҡтары өсөн уртаҡ сюжетҡа ҡоролған, шуға ғилми әҙәбиәттә дөйөм исем менән «Идиге» эпосы тип йөрөтөлгән был әҫәрҙең милли варианттарындағы уртаҡ мотивтар һәм үҙенсәлектәр аңлатмалар бүлегендә етерлек әйтелгәнгә, ә тарихи нигеҙе, образдар системаһы, художество эшләнеше күптән түгел генә сыҡҡан ғилми баҫмала (Иҙеүкәй менән Мораҙым. Тарихи ҡобайыр. — Өфө: Китап, 1994) шаҡтай киң яҡтыртылғанға күрә, бында, алға ҡуйылған төп мәсьәләгә бәйле рәүештә, ҡыҫҡаса ғына туҡталабыҙ.

Был тарихи эпостың башҡорт варианттарында, бигерәк тә М. Буранғолов яҙмаһында яманатлы Алтын Урҙа хандарына ҡаршы көрәш, Көньяҡ Уралда башҡорт ырыуҙарын берләштереп, килмешәк хандарға-баҫҡынсыларға ҡаршы торорлоҡ ил төҙөү маҡсаты, шул ерлектә халыҡ күңелендә тыуған хыял һәм төҫмөрләүҙәр сюжет үҙәген тәшкил итә. Шуға ла бында геройҙарҙың физик көстәрен һынландырып күрһәтеүҙән бигерәк, уларҙың тыуған илгә мөнәсәбәттәрен, рухи һыҙаттарын һәм героик характер үҙенсәлектәрен һүрәтләүгә күберәк урын бирелә.

Тыуған ил азатлығы, халыҡ мәнфәғәттәре күҙлегенән ҡарағанда, Иҙеүкәй менән Сатмыр хан араһындағы мөнәсәбәттәрҙе кәүҙәләндергән бер эпизод (эпостың XXI бүлеге) бик ҡыҙыҡлы. Мораҙымдың илсеһе Уралда бейҙәрҙең үҙ-ара тартҡылашыуҙары тураһында хәбәр килтергәс, Иҙеүкәй Сатмыр хандан үҙ иленә ҡайтарыуҙы һорай. Ләкин хан, мәкер ҡороп, батырға өс йомаҡ әйтә: яуабын тапһаң, ҡайтаһың, йәнәһе.

Сатмыр хан йомаҡтары Иҙеүкәйҙе нисек тә ҡоралһыҙ ҡалдырыуға йүнәлтелгән. Был иһә, бер яҡтан, йомаҡсының башҡа илдәрҙе баҫып алыу, үҙенә буйһондороу кеүек яуыз ниәттәренә барып тоташһа, икенсе яҡтан, батырҙың гражданлыҡ намыҫына ҡағыла: уның ҡулында Туҡтамышты һәм башҡа дошмандарҙы тураҡлаған ҡылыс — Урал батырҙан ҡалған изге аманат; ҡоралды һатыу — илеңде һатыу тигән һүҙ! Шуға ла Сатмыр хан тарафынан ҡуйылған шарттар тәү ҡарашҡа еңелсәрәк күренһәләр ҙә, — асылда, ике яҡ өсөн дә көсөргәнешле психологик бәрелеш төҫөн ала. Иҙеүкәй Сатмырҙың тыштан әҙәпле, эстән мәкерле һорауҙарына тапҡыр яуаптары менән аҙаҡ сиктә хандың үҙен төп башына ултырта һәм әле кәрәге бөтмәгән Урал батырҙың булат ҡылысын үҙ ҡулында һаҡлап ҡала.

«Иҙеүкәй менән Мораҙым» ҡобайырының демократик йөкмәткеһен асыҡлауҙа Һабрау ҡарт образы ҙур әһәмиәткә эйә. Ул «Аҡбуҙат» эпосындағы Тарауыл ҡарт, йә булмаһа «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу» хикәйәтендәге (Т. Беляев версияһы) Мәскәй әбей, «Алдар менән Зөһрә»лә төрлө ҡиәфәттә тап булған әүлиә һәм сихырсылар шикелле, геройҙарға юл өйрәтеүсе, уларҙың киләсәген алдан әйтеүсе генә түгел. Һабрау ҡарт ваҡиғалар үҫешендә баштан алып аҙаҡҡа тиклем актив роль уйнай. Иң киҫкен мәлдәрҙә әйткән

ялҡынлы һүҙҙәре менән ул бөтә нәмәгә ҡыҫылышы булған ил ҡарты, күп быуындарҙың тормош тәжрибәһен туплаған тәрән аҡыллы аҡһаҡал, гел генә тыуған ил һәм халыҡ яҙмышын ҡайғыртыусы, күңеле түренән бәреп сыҡҡан изге уйҙары, йөрәктәргә үтеп инер хистәре менән батырҙарҙы көрәшкә дәртләндереүсе сәсән булып алға баҫа. Хәҙергесә әйткәндә, һабрау ҡарт — Иҙеүкәйҙең юл яҙлыҡтырмаҫ идея етәксеһе, халыҡтың абруйлы кәңәшсеһе ул.

Ҡыҫҡаһы шул: Иҙеүкәй башҡорт ырыуҙарын Алтын Урҙаға ҡаршы аяҡландыра, Уралда тупланған ғәскәренә йәнә Сатмыр хандан ярҙам алып, ҡаты һуғышта Туҡтамыш ғәскәрен тар-мар итә; аҙаҡ үҙен үлтереп, тураҡланған кәүҙәһен ҡоҙғондарға ташлай; ҡоллоҡта йәшәгән батырҙарҙы илдәренә ҡайтара;. һуңынан улы Мораҙым менән бергәләп, Уралда башҡорт ырыуҙарын яфа сиктергән Тора ханды һәм башҡа яуыз бейҙәрҙе ҡыйратып, илдә тыныслыҡ урынлаштыра, үҙ аллы ил, ғәҙел тормош ҡороу өсөн юл аса.

Бында, әлбиттә, тарихи ысынбарлыҡҡа тап килгән дөрөҫлөк юҡ, бары хыял ғына. Әммә ошо хыялда күп халыҡтарҙың героик эпосына хас бик мөһим тарихи ынтылышты, йәғни, башта уҡ әйткәнебеҙсә, **милли үҙаллылыҡ,** йәки **үҙ аллы дәүләтселек** тойғоһон асыҡ сағылдырыуы менән «Иҙеүкәй менән Мораҙым» ҡобайыры башҡорт халыҡ ижадында этник үҙандың яңы тарихи баҫҡысҡа күтәрелеүен раҫлай.

* * *

XV — XVI быуаттар, Башҡортостан тарихында ифрат ҡатмарлы был осор, берҙән, баҫҡынсы хандарҙың, икенсенән, урындағы феодалдарҙың һәм ырыу башлыҡтарының (бейҙәрҙең) өҙлөкһөҙ ыҙғыштары, ҡанлы һуғыштары менән характерлана. Халыҡ ижадында башлыса ошо дәүергә ҡаршы яңы эпик сюжеттар барлыҡҡа килә: «Мамай хан хикәйәте», «Мәргән менән Маянһылыу», «Тарғын батыр» («Тарғын менән Ҡужаҡ»), «Ек Мәргән» һ. б.

Мамай тарихта Ших-Мамай исемендә билдәле. Ул — XVI быуаттың беренсе яртыһында, йәғни Нуғай урҙаһында ваҡ ханлыҡтарҙың үҙ-ара ыҙғыштары көсәйгән мәлдә, үҙәк власҡа вассал хәлендә йәшәгән Нуғай ханы. Хикәйәттә ул, Көньяҡ Уралды биләгән Муса хандың ун ике улының береһе, ағай-энеләрен һуйып, башҡа халыҡтарҙы талаусы, баҫҡынсы хан тип баһалана.

Ҡаҙаҡ, нуғай варианттарынан айырмалы рәүештә, башҡорт вариантында халыҡҡа дошман Муса хан улдарының береһе генә һүрәтләнә. Хикәйәтсе Мамайҙың бөтә эш-ҡылыҡтарын тәфсилләмәй, ә «яу сабырға яратыр, һәммәһен ҡырыр-ҡыйратыр, барсаһын баш әйҙереп, үҙенә ҡаратыр иманһыҙ... батыр» булыуын һөйләп, уның кешелекһеҙлеген алға баҫтыра. Хәҙисә Ҡусабаева тасуирлауынса, Мамай — «иманһыҙ» кеше, «ир яманы», яуыз хан. Шулай дөйөмләштереп хикәйәләү арҡаһында Мамай, тарихи Ших-Мамайҙы ғына иҫкә төшөрөүҙән бигерәк, бөтә Алтын Урҙа хандарының яуызлыҡтарын сағылдырған типик образ дәрәжәһенә күтәрелә.

Хикәйәт залим хандарға халыҡтың әсе нәфрәте, уларҙан үс алыу тойғоһо менән һуғарылған.

Халыҡ эпосын, халыҡ аңының үҫешен өйрәнеүҙә «Ек Мәргән» хикәйәте айырым иғтибарға лайыҡ.

Был сюжетты өс өлөшкә бүлергә мөмкин: 1) башҡа ҡәбиләләрҙе талап яманат ҡаҙанған Туғыҙаҡ әбей уландарының ҡарымтаға килгән яу тарафынан үлтерелеүе; 2) иҫән ҡалған Ектең тәбиғәт ҡосағында үҫеп, батыр ҡорона инеүе; көнбайыш башҡорттарын Ҡазан ханлығына ҡаршы яуға күтәреүе; 3) һуңғы яуҙа еңелеп, Ектең Ҡазан ханына үҙ ирке менән бирелеүе һәм, ханға тиңһеҙ мәргәнлеген күрһәтеп, ярлыҡаланыуы.

Фажиғә менән тамамланған беренсе бүлекте шулай аңларға була: аҡыл эйәләре сәсәндәр башҡорттарҙың сит хандар ҡул аҫтында ҡалыуының сәбәбен ырыуҙарҙың тарҡаулығында, ырыу башлыҡтары бейҙәрҙең үҙ-ара ыҙғышы, мал-мөлкәттәрен урлашып (барымталашып) һәм шул нигеҙҙә ҡарымталашып йәшәүҙәрендә күргәндәр. «Ек Мәргән» хикәйәте был сәбәпте, тап һүҙ сәнғәте талап иткәнсә, конкрет образдар аша һынландырып күрһәтә; тыштан бик мөләйем күренгән Туғыҙаҡ әбей тормошон аҫтын өҫкә килтереп, барлыҡ ырыуын ҡырҙыртып бөтөрөп, «яу сапҡан — яу ҡылысынан үлер» тигән ҡарашты үткәрә. Ошо идея менән әҫәрҙең тәүге өлөшө «Мамай хан» менән «Күҫәк бей» хикәйәттәренә ауаздаш.

Сюжеттың икенсе, төп өлөшө төрки халыҡтарының уртаҡ эпик традициялары ерлегендә үҫтерелә. Бында идея йөкмәткеһен аңлауҙы ауырлаштырған мотивтар күренмәй. Тик ике деталгә туҡталыу кәрәк. Береһе — геройҙың исеме, икенсеһе — батырҙың үҙ ирке менән дошманға бирелеүе.

Әҫәрҙән аңлашылыуынса, буласаҡ герой ун йәшенә саҡлы, тәбиғәт ҡосағында кейектәр менән генә аралашып, исемһеҙ үҫә. Исемде уға төшөндә атаһы ҡуша: «Исемең Ек булһын, йәйәң ныҡ булһын!» — ти. Боронғо төрки телендә **ег** һүҙе яҡшы, игелекле тигәнде аңлата. Эпик геройҙың **Ег** (әйтелештә — **Ек**) тип исемләнеүе осраҡлы түгел, әлбиттә. Исемдең үҙендә үк сәсәндәр халыҡты хандар золомонан ҡотҡарыр изгелекле батырҙы күрергә теләгәндәр.

Көнбайыш башҡорттарын Ҡазан ханлығына ҡаршы аяҡландырып, ханға яһаҡ түләүҙе туҡтатҡан Ек Мәргәндең һуңғы һуғышта үҙ ирке менән дошманға бирелеүе, Ә. Н. Кирәев әйткәнсә (ә ул хаҡлы), героик эпоска хас түгел[1]. Шулай ҙа быны осраҡлы хәл йәки «материалды әҙәбиләштергән кеше» тарафынан индерелгән ят нәмә тип ҡарау дөрөҫ булмаҫ. Сөнки боронғо сюжеттың үҙендә булмаһа, унын өсөнсө киҫәге лә булмаҫ ине. Күрәһең, сәсәндәр халыҡтың өмөтө бағланған батыр һынлы батырҙың дошманға баш һалыуы кеүек хурлыҡлы хәл менән фабуланы осларға теләмәгәндәр, өсөнсө өлөшөн ижад иткәндәр. Ошонда хикәйәттең бөтә «сере» йәшерелгән. Иғтибар итегеҙ: тотҡонда ятҡан батыр үҙенең ғәҙәти бер эше —

---

[1] Кирәй Мәргән. Башҡорт халҡының эпик ҡомартҡылары. — Өфө, 1961. — 260-сы б.

мәргәнлеге менән ханға хеҙмәт күрһәтеп, азат итеlә, хатта иленә ҡайтарып ебәреlә.

Быны көрәшеп-көрәшеп тә үҙенә азатлыҡ яулап алмаған халыҡтың, ханға ярап, иреккә сығыу өмөтө, унан мәрхәмәт көтөү, рәхимлегенә ышаныу кеүек, асылда, дини аристократия тарафынан тағылған идеалистик ҡараштарға бәйле рәүештә тыуған бөтөм, тип кенә аңларға мөмкин. Был иһә этник үҙаңға өҫтөнлөк иткән идеологияның йоғонто яһауын дәлилләй.

Дөйөм алғанда, тема уртаҡлығы, төп геройҙар характерына ҡағылышлы мотивтарҙың оҡшашлығы яғынан «Мәргән менән Маянһылыу», «Тарғын батыр» йәки «Тарғын менән Ҡужаҡ» — бер кәштәлә торған әҫәрҙәр. Уларҙың икеһендә лә башҡорттарҙың Нуғай ханлығына ҡаршы булыуы сағыла. Азатлыҡ көрәше мөхәббәт темаһы менән үрелеп, романтик планда үҫтереlә һәм ыңғай хәл итеlә. Ошо күҙлектән ҡарағанда, «Мәргән менән Маянһылыу» — поэтик төҙөклөгө яғынан да, идеяһының аныҡлығы менән дә еңел аңлайышлы. Халыҡтың эстетик идеалы тыуҙыра алған бөтә гүзәллекте үҙендә туплаған Маянһылыу ҙа, уны һөйгән йәш батыр Мәргән дә тыуған илгә һәм мөхәббәткә тоғролоҡтары, аҙаҡ сиктә хыялда ғына булһа ла, нуғай ханының башын киҫеп, илгә азатлыҡ, дөйөм шатлыҡ килтереүҙәре менән хәтерҙә ҡала. Сюжет һәм образдар эпик традициялар ерлегендә эшкәртеlә.

Ҡаҙаҡ һәм нуғайҙар менән уртаҡ сюжетҡа ҡоролған «Тарғын менән Ҡужаҡ» хикәйәте иһә — ҡатмарлыраҡ әҫәр. Сюжет һәм халыҡтың эпик репертуарында үҙенсәлекле төҫ алған Н. Ильминский баҫтырып сығарған ҡаҙаҡ варианты, мәҫәлән, Тарғындың хәрби батырлыҡтарын күрһәтеүгә ҡоролған. Бында ул ил-халыҡ бойондороҡһоҙлоғон һәм шул уҡ ваҡытта шәхес азатлығын яҡлаусы батыр булып алға баҫа. Шуныһы характерлы, шәхси ирек һөйөүсе батыр ҡайҙа ғына килмәһен, һәр урында был ханлыҡтың үҙаллылығы өсөн дошман яуына ҡаршы сыға, ғәҙәттән тыш батырлыҡтар күрһәтеп, еңеү килтерә. Шуға ҡарамаҫтан, бер генә хан да уны үҙенеке итмәй, ҡыйырһыта, кәмһетә. Аҙаҡ, бер һуғышта батыр имгәнгәс, уны бик ауыр хәлендә ташлап китәләр. Шулай итеп, бер яҡтан, ил-халыҡ бойондороҡһоҙлоғо өсөн көрәш, икенсе яҡтан, хан менән батыр араһындағы социаль ҡаршылыҡ ҡаҙаҡ аҡыны Марабай һөйләгән сюжеттың төп конфликт һыҙығын тәшкил итә; герой характерындағы психологик ҡаршылыҡтарҙы ғына түгел, ваҡ ханлыҡтарға бүленгән феодаль йәмғиәттең ижтимағи ҡаршылыҡтарын да аса.

Башҡорт варианттарының нигеҙендә лә, асылда, ошо уҡ конфликт ята, әммә бында Тарғындың яугирлеген киң һүрәтләү юҡ. Үҙәккә батырҙың үҙенә тейешле ҡыҙҙы юллау сюжеты алынып, конфликт шәхес азатлығын яҡлау, ирекле мөхәббәтте хуплау йүнәлешендә хәл итеlә. Әҫәр, «Мамай хан хикәйәте» кеүек үк, яуыз хандарҙан үс алыу тойғоһо менән ослана.

Хикәйәттә традицион сюжеттың яңы тарихи шарттарҙа халыҡтың рухи ихтыяждарына яҡынайтылыуы, персонаждарҙың яңы мотивтар менән ҡылыҡһырланыуы иғтибарҙы тарта.

Батырҙың үҙенә яраҡлы ҡыҙ эҙләп юлға сығыуы — эпоста борондан килгән мотив. Был әҫәрҙә уның ғәмәлгә ашыуы үҙенсәлекле. Батыр үҙенә тейешле ҡыҙҙы ғәҙәти тормош шарттарында таба, юлда һис ниндәй ҡаршылыҡтарға осрамай. Ҡыҙ ҙа өйрәк, аҡҡош йәки бүтән ҡош ҡиәфәтендә түгел, ә ғәҙәти ҡыҙ. Варианттарҙың береһендә лә, мәҫәлән, «Аҡбуҙат» йәки «Заятүләк менән Һыуһылыу»ҙағы шикелле тартҡылашыу ҙа, «Алпамыша»лағы кейек көс һынашыу ҙа, ғәҙәттән тыш ауыр шарттар ҡуйып, албырғатыу ҙа юҡ. Шул уҡ ваҡытта бында «Ләйлә менән Мәжнүн», «Буҙйегет» ҡиссаларындағыса үтә ҡыҙыу мөхәббәт ялҡыны ла дөрләмәй. Танышыу, бигерәк тә Хисамов вариантында, үҙенең тәбиғилеге, ике йәш йөрәктең эскерһеҙлеге, үҙ-ара тиҙ аңлашыуы менән иғтибарҙы тарта. Егеттең ҡыҙ менән танышыуын ғәҙәти һүрәтләү яғынан «Тарғын батыр» берҙән-бер әҫәр түгел. «Ҡыпсаҡ егете менән башҡорт ҡыҙы» исемендәге һөйләгән диалогта ла, асылда, шуны уҡ күрәбеҙ.

«Тарғын менән Ҡужаҡ» исемендә Кирәй Мәргән яҙып алған варианттарҙа ла осрашыу-танышыу тәбиғи шарттарҙа һүрәтләнә. Йәштәрҙең ырыу-ара йыйындарҙа осрашып танышыуҙары борондан килгән йола булған кеүек, көрәштә еңеп сыҡҡан батырға ҡыҙ биреү — фольклорҙа киң таралған традиция. «Алпамыша» эпосында, мәҫәлән, был шартты Барсынһылыу хатта үҙе ҡуя, батырҙар менән үҙе көрәшә. «Тарғын менән Ҡужаҡ»та иһә был мотив геройҙарҙың реаль тойғолары менән үрелә: көрәштә еңеп сыҡҡан батырҙы ҡыҙ үҙе һайлай, һис ниндәй шарт ҡуймайынса, уға бисә булырға ризалығын белдерә. Тимәк, мөхәббәт тойғоһо өҫтөн ҡуйыла.

Марабай аҡын һөйләгән ҡаҙаҡ вариантында ла эш шулай тора.

Варианттарҙың бөтәһендә лә егет менән ҡыҙҙың ҡауышыу теләге (ирекле мөхәббәт) ата ҡаршылығына осрай. Ни өсөн Аҡсахан ҡыҙын Тарғынға бирмәй?

Ҡаҙаҡ вариантында Аҡсахан, ҡыҙы Тарғын менән ҡасып киткәс, халҡын йыйып, бына нимә ти: «Мин был ҡыҙымдың ул ҡырғыҙ менән киткәненә риза түгелмен, ул ҡара кеше ине. Ҡыҙым китһә, кәрәк ине хан балаһы менән, ... ҡара кеше менән китте ...». Башҡорт вариантында ла Аҡсахан менән Тарғын араһында ғәмәлдә шул уҡ социаль тигеҙһеҙлек ята. Тимәк, сюжетта социаль мотив төйнәлә. Икенсе төрлө әйткәндә, Аҡсахан «ҡара кеше», йәғни түбән ҡатлам кешеһе, менән туғанлашырға хурлана.

«Заятүләк менән Һыуһылыу», «Ҡара юрға» һәм «Алпамыша»ның ҡайһы бер варианты егеттең ҡыҙҙы алып үҙ иленә ҡайтыуы, ғаилә ҡороуы менән тамамлана. «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу»ҙың бер варианты, «Таһир менән Зөһрә», «Буҙйегет» ҡиссалары ғашиҡтарҙың фажиғәле үлеме менән ослана. «Тарғын менән Ҡужаҡ» хикәйәтендә иһә батырҙың ҡыҙҙы үҙенә алыуы менән сюжет башлана ғына. Бөтә ҡаршылыҡ, ҡыҙ өсөн көрәш алда тора.

Сюжеттың был өлөшөндә хәл-ваҡиғаларҙың шаҡтай ҡатмарлы психологик төҫ алыуы, варианттарҙың мәсьәләне төрлөсә хәл итеүе күҙгә ташлана. Тарғын менән Ҡужаҡтың бәрелешен һүрәтләгән эпизодтарҙа, әлбиттә, ике идеологик тенденция, атап әйткәндә, ғаилә ҡороу мәсьәләһендә реакцион йолаларҙы яҡлаған патриар-

халь-феодаль ҡараш менән шәхес азатлығын, йәштәрҙең мөхәббәт тойғоларын хуплаған прогрессив-демократик ҡараш сағыла. Әммә бер-береһенә ҡапма-ҡаршы булған был ике тенденцияның бәрелешен эстетик баһалауҙа варианттар араһында берҙәмлек һиҙелмәй. Әгәр өс вариант мәсьәләне өс төрлө хәл итә икән, был уларҙың төрлө шарттарҙа барлыҡҡа килеүен йәки бер үк хикәйәттең төрлө мөхиттә төрлөсә һөйләнелеүен, тимәк, сәсәндәрҙең әле идея яғынан бер төптән булмауын күрһәтә.

«Тарғын батыр» тигән вариантта Ҡужаҡты билдәле дәрәжәлә «халыҡтың аңын үҙендә туплаған ҡарт батыр» тип, Ҡирәй Мәргәнсә баһаларға мөмкин. Ә тегеләрендә ул — бары Аҡсахандың ихтыярын үтәүсе, патриархаль-феодаль көнкүреш йолаларына йәбешкән яуыз көс. Шуға күрә лә ул М. Бәширов вариантында йәштәр ҡулынан хаҡлы язаһын ала.

Хикәйәттең үҙәк геройы Тарғынға килһәк, уны ғаилә мәсьәләһенә ҡарата гуманистик мөнәсәбәттәрҙе талап итеүсе һәм, аҙаҡ килеп, яуыз хандарҙан барыбер үс алыусы йәш батыр, халыҡтың прогрессив ҡараштарын сағылдырыусы ыңғай образ тип баһаларға тейешбеҙ.

Әҫәрҙә Аҡйондоҙ (Аҡъюныс) ҙа үҙ мөхәббәте өсөн актив көрәшеүсе персонаж булыуы менән әһәмиәтле.

Шулай итеп, азатлыҡ өсөн көрәш мотивтары «Мамай хан хикәйәте»ндә хандарҙы ҡәһәрләү юҫығында асылһа, «Мәргән менән Маянһылыу» ҡобайырында батырҙарҙың халыҡты яуыз хандарға ҡаршы күтәреүе яҡлана. Ә «Ек Мәргән» хикәйәтендә хандарҙың үҙҙәренән изгелек көтөү, аяу өмөт итеү кеүек сикләнгән ҡараштар сағылып ҡала. «Тарғын менән Ҡужаҡ» сюжетында азатлыҡ мотивтары, яңы рухи ихтыяждар менән үрелеп, тарихи-милли үҫештәге ҡаршылыҡлы процестар һәм ҡапма-ҡаршы идеялар бәрелеше кәүҙәләнә.

* * *

Исемдәре халыҡ күңелендә һаҡланған батырҙар тураһында бер иш ҡобайырҙар («Сура батыр», «Сүкем батыр», «Баязит батыр», «Аҡшам батыр», «Көбәк батыр», «Түлгән батыр» һ. б.) айырым иғтибарға лайыҡ.

Был ҡобайырҙарҙа композицион бөтөнлөк тә, эҙмә-эҙлекле сюжет та юҡ. Улар — тулы көйгә беҙҙең көндәргәсә килеп етә алмаған эпик сюжеттарҙың айырым ярсыҡтары, халыҡ хәтерендә һаҡланып ҡалған өлөштәре генә. Ҡайһы берҙәре (мәҫәлән, «Сүкем батыр», «Салауат батыр») батырға трафарет характеристиканан ғына торһа, башҡалары йә герой тормошонан айырым эпизодтарҙы, йә уның хәрби шарттарҙа тыуған кисерештәрен генә сағылдыра.

«Сүкем батыр» ҡобайыры, мәҫәлән, аңлатмаларҙа килтерелгән мәғлүмәттәрҙе иҫәпкә алһаҡ, Башҡортостандың төньяҡ-көнсығышында йәшәгән Һалйот ырыуы башҡорттарының Себер ханлығына ҡаршы көрәшен сағылдырған героик йөкмәткеле ҙур әҫәр булғандыр, моғайын. Һәр хәлдә ҡобайырҙың икенсе строфаһы эпик сюжет башланғысын хәтерләтә:

Ошбу һалйот ерендә
Ҡиң өйөрҙәр йөр(ө)гәндә,
Шул малдарҙы таларға
Күсем хан яуы килгәндә,
Ҡамсат бүркен ҡыңғартып,
Уҡ-һаҙаҡтарын тағып,
Сүкем сыҡҡан яу һалып,
Арғымаҡҡа атланып.

Ә артабан сюжет үҫтерелеше, күрәһең, һуңынан ҡыҫҡарған: нисә быуат элек булып үткән ҡанлы бәрелештәрҙең теүәллеге кәмей килеп, халыҡ хәтерендә тик төп геройҙың ҡаһарманлығы тураһында поэтик информация ғына һаҡланып ҡалған:

Дөлдөл кеүек осҡан ул
Буҙъюрға ман сапҡанда,
Таш-ҡаяны ватҡан ул
Һаҙағынан атҡанда...

Иғтибар итегеҙ, информацияла оло эпос һәм әкиәт батырҙарына хас ғәйрәтлелек сифаттары һанала. Әммә артабан гиперболик характеристика тыуған-үҫкән ер тойғоһо менән «кәметелеп», эпик батырлыҡ ил-халыҡ азатлығы хаҡына ҡаһарманлыҡ күрһәтеү булып конкретлаштырыла, поэтик информацияла тарихи реаллек һәм милли патриотизм тойғоһо өҫтөнлөк ала:

Сүкем батыр бирмәне
Тыуған-үҫкән ерҙәрен,
Ҡурпылы тибендәрен,
Йылҡылы өйөрҙәрен...

Тулы сюжеты онотолоп, ҡобайыр тексы геройға ана шулай поэтик характеристикаға ғына тороп ҡалһа ла, эпик хикәйәләүҙә боронғо традицияларҙың яңы мотивтар, реалистик тойғолар менән үрелеүен асыҡ күрергә мөмкин. Халыҡ тормошонан бер иҫтәлек булыуы өҫтөнә, әҫәр шул яғы менән дә әһәмиәтле инде.

Ҡаҙаҡ һәм нуғай халыҡтарында «Шора батыр» исемендә ҙур эпик сюжет таралғанлығы билдәле (аңлатмалар бүлеген ҡарағыҙ). «Сура батыр» ҡобайыры был сюжеттың боронғо башҡорттарға ла таныш булыуын раҫлай.

«Баязит батыр» ҡобайыры Баязит батырҙың «карттар оран биргәндә» бик ғәйрәтләнеп атҡа менеүе, әммә «Нуғай мырҙа ғәскәрен ҡуй-һарыҡтай, ҡан ҡалтыратып, онтаҡлап иленә ҡайтыр ир» булһа ла, шул яуҙа ятып ҡалыуын әсенеү-үкенеү тойғоһо менән һүрәтләһә, «Акшам батыр» иле өсөн дошманға ҡаршы сыҡҡан батырҙың антын, һуғыш алдынан тыуған ғәйрәтле кисерештәрен генә аңлата. «Түлгән батыр» — малды ҡыуып алып киткән дошман артынан сапҡан батырҙың монологы. Шулай уҡ монолог формаһын-

да һөйләнгән «Ялп-йолп иткән яңғыҙ ябалаҡ...» ҡобайырында, ғәскәре ҡыйралып, яңғыҙ тороп ҡалған батырҙың кисерештәре, ил эсендә үҙенә тоғро иштәр табып, дошмандан үс аласағына ышаныҫы сағыла.

«Ҡөбәк батыр» ғәҙәттән тыш бер психологик ситуацияны күҙ алдына баҫтырыуы менән айырыла: кәләш әйттереп, туй үткәрергә йыйынған мәлдә һуғышҡа киткән батыр, дошманды ҡыйратҡас, әйләнеп ҡайтһа — йәрәшкән кәләше уға хыянат иткән. Намыҫын һаҡлай алмаған хыянатсыл кәләштең ире алдында бик еңел генә «аҡланыуы» был ҡобайырҙың юмористик йөкмәткеһен тәшкил итә, һәм шул яғы менән ул көләмәстәр темаһына яҡын тора.

«Тәүеш Мәргән» һәм «Мораҙым менән Буһҡын» ниндәйҙер ҙур эпик сюжеттарҙың ҡыҫҡарып ҡалған варианттарына оҡшай. Һуңғыһында тормош-көнкүреш формалары (малсылыҡ һәм игенселек) араһында булған ҡаршылыҡтарҙың сағылыуы был әҫәрҙең тарихи әһәмиәтен арттыра.

Тәү ҡарашҡа өҙөк-ярҡа ғына күренһәләр ҙә, был ҡобайырҙар билдәле шарттарҙа батырҙарҙың эске кисерештәрен ана шулай асыҡ сағылдырыуҙары менән әһәмиәтле.

Бында шуны ла айырым әйтеү кәрәктер. Һаналған ҡобайырҙар, «Сура батыр»ҙан башҡалары, берәр вариантта ғына яҙып алынған. Геройҙары — һис шикһеҙ, конкрет шәхестәр. Был иһә — халыҡтың ултыраҡ тормошҡа күсеүенә бәйле күренеш: һәр төбәк үҙ батырын тыуҙыра, ҡобайыр, уның хаҡында иҫтәлек-хәтирә булып, шул тирәлә генә йәшәй. Әммә урындағы сәсәндәргә «таныш» булған геройҙың «биографияһы», ғәмәли батырлыҡтары ентекләп һөйләнмәй, ә шаблонға әйләнгән шиғри юлдар менән сикләнелә, иғтибар бары үрҙә асылған кисерештәргә йүнәлтелә. Һөҙөмтәлә образ геройҙың үҙ йөҙөн, индивидуаль характер һыҙаттарын түгел, бәлки тыуған-үҫкән ил менән ир-егет араһындағы идеаль мөнәсәбәттәрҙе һынландыра. Баязит та, Аҡшам да, Түлгән дә, башҡалары ла, асылда, ил өсөн ҡорбан булған ҡаһармандар булып алға баҫа.

Шул уҡ ваҡытта, геройҙар ни саҡлы оло маҡсаттарға тоғролоҡло итеп һүрәтләнмәһен, һәр ҡайһыһында әйтелеп бөтмәгән ниндәйҙер һағыш, үкенес, ауыр яҙмыш һыҙатлана. «Сүкем батыр», «Салауат» ҡобайырҙарында быны «фәлән батыр ир ине» тип, үткән заманды һағышлы һүрәтләү формаһы һиҙҙереп торһа, ҡалғандарында геройҙың фажиғәле яҙмышын йә туранан-тура хәбәр итеү, йә шуға ишара яһау ауыр тойғо ҡалдыра.

## Башҡорттар Рус дәүләтенә ҡушылғандан һуңғы эпик ижад

Башҡорт ырыуҙарының Рус дәүләтенә ҡушылыуы башҡорт халҡының тарихи үҫешендә мөһим боролошто билдәләгән ваҡиға булды.

«Башҡортостандың Рус дәүләтенә ҡушылыуы Нуғай, Себер, Ҡазан феодалдарының аяуһыҙ иҙеүенә сик ҡуйҙы, феодаль тарҡау-

лыкты, феодалдарҙың үҙ-ара сабыуылдарын бөтөрҙө... Бер дәүләт эсендә берләшеү башҡорттарҙың халыҡ булып ойоша алмау ҡурҡынысын юҡҡа сығарҙы. Территория яғынан да, сәйәси яҡтан да берләшеү башҡорт халҡының тамам формалашыуы тигәнде аңлатты. Башҡортостандың Рәсәйгә ҡушылыуы башҡорт һәм рус халыҡтарының өҙлөкһөҙ дуҫлығына юл асты...»[1].

Үҙәк рус дәүләтенә ҡушылыу башҡорт халҡының артабанғы иҡтисади, политик һәм рухи тормошонда прогрессив әһәмиәткә эйә булһа ла, самодержавие политикаһының баштан уҡ башҡорт халҡына ҡаршы булыуын әйтергә тура килә.

Әммә башҡорттарҙың тарихи яҙмышы өсөн айырата шуныһы мөһим ине: милли-колониаль һәм социаль иҙеү көсәйгән һайын, самодержавиеның реакцион сәйәсәтенә һәм урындағы феодалдарҙың синфи мәнфәғәтенә ҡапма-ҡаршы рәүештә, хеҙмәтсән халыҡ күңелендә бер-береһенә тығыҙ бәйләнгән ике тойғо көсәйҙе. Уның береһе милли һәм социаль азатлыҡ өсөн көрәште ныҡышмалыраҡ дауам итеү булһа, икенсеһе — бөйөк рус халҡына тәрән ихтирам һәм дуҫлыҡ тойғоһо, уртаҡ Ватан Рәсәйҙе «халыҡтар төрмәһе» иткән батшалыҡҡа ҡаршы көрәштә рус халҡы тирәһенә тупланыу, берләшеү тойғоһо ине.

XVI быуаттың уртаһынан Октябрь революцияһына саҡлы дүрт йөҙ йылға яҡын был ара фольклор әҫәрҙәрендә ифрат ҡатмарлы сағылыш алған. Ҡатмарлылыҡ бөтәһенән элек ижтимағи үҫештең үҙенә, әле әйтелгән ике тойғо — ике яҡлы тарихи ынтылышҡа бәйле булып, ижадта ҡаршылыҡлы, ваҡыты-ваҡыты менән хатта ҡапма-ҡаршы идеялар бәрелешенә йәки үтә көсөргәнешле кисерештәргә юлыҡтырған. Быны боронғо эпик традицияларҙы яңыса дауам иткән «Ҡарас менән Аҡша», «Ҡарас менән Ҡараһаҡал», «Ерәнсә сәсән», «Байыҡ Айҙар сәсән», «Бүгәсәүгә ҡушылып, ир-батырға ҡуш булып...» тигән үҙенсәлекле әҫәрҙәрҙә лә, сәсәндәрҙең һүҙ ярышын кәүҙәләндергән әйтештәрҙә лә, тыуған ил һәм батырҙар тураһындағы ҡобайырҙарҙа ла, әхлаҡ һәм тормош-көнкүреш фәлсәфәһен сағылдырған дидактик ҡобайырҙарҙа ла асыҡ күрергә була. Шул уҡ ваҡытта ҡаршылыҡтар, әлбиттә, һәр әҫәрҙә уның жанр тәбиғәтенә һәм идея йөкмәткеһенә бәйле рәүештә үҙенсәлекле сағыла.

Миҫалға фольклорсыларҙан бигерәк тарихсылар өсөн әһәмиәтле (әммә бығаса һис кем телгә алмаған!) «Ҡурғаусылыҡ» һәм «Старшина Мәсәғүт» исемле ике ҡобайырға туҡталып үтәйек. Икеһе лә башҡорт ырыуҙарының Рус дәүләтенә ҡушылыу мәлендә сығарылған.

Шуныһы ҡыҙыҡлы, беренсе ҡобайыр («Ҡурғаусылыҡ») ырыу алдына килеп баҫҡан мәсьәләне хуп күрмәй. Иҙел — Үҙән араһы

---

[1] Кузеев Р., Юлдашбаев Б. 400 лет вместе с русским народом. — Уфа, 1957. — С. 64 — 65. *Был хаҡта шулай уҡ ҡарағыҙ:* Усманов А. Н. Присоединение Башкирии к Русскому государству. — Уфа, 1960. — С. 162 — 163.

менән Яйыҡ — Иҙел араһының мәңге тыныс булмауына һылтанып һәм уны хәҙер бер яҡтан нуғай, икенсе яҡтан ҡаҙаҡ, өсөнсө яҡтан «кафырҙар» килеп аласағы менән ҡурҡытып, кобайыр авторы халыкты бынан күсеп китергә өндәй. Әммә шул уҡ ваҡытта ул, ырыуҙаштарының икеләнеүен тойғандай:

Өршәк менән Димдәрҙән,
Инйәр менән Симдәрҙән,
Ҡаҫмарт менән Һаҡмарҙан,
Иҙел менән Яйыҡтан
Айырылһаҡ, нишләрбеҙ,
Нишләрбеҙ, ау, нишләрбеҙ?[1] —

тип, бөтөнләй аптырап ҡалған төҫлө. Шулай итеп был ҡобайыр ҡуйылған мәсьәләгә асыҡ ҡына яуап таба алмай әле, ҡаршылыҡлы тойғоларҙы ғына сағылдыра.

«Старшина Мәсәғүт» ҡобайыры, киреһенсә, «Ҡурғаусылыҡ» авторы менән бәхәскә инеп, уға ҡаршы әйтелгән аҡыллы һүҙ кеүек ҡабул ителә:

Айҙын да нуғай ерендә,
Уайҙын да нуғай ерендә,
Тамъяндарҙың илендә,
Данлы ҡыпсаҡ ерендә,
Яй тапҡан бөрйән илендә
Урал тауҙай тау булмаҫ,
Урал тауҙай тау булмаҫ;
Ҡалаға ингән бур булмаҫ,
Хеҙмәт иткән хур булмаҫ,
Ҡазыйлы илдәй ил булмаҫ,
Ҡасмайыҡ, уландар, ҡасмайыҡ,
Ҡасмайыҡ, уландар, ҡасмайыҡ!

Аңлашылыуынса, ҡобайырҙың быныһы мәсьәләгә ыңғай ҡараш белдерә, «ҡазыйлы», йәғни бер хужалы, бер хөкөмлө илдең бөтөнләгән, өҫтөнлөгөн таный, шундай илгә ҙур өмөт бағлай. Был — әлеге-баяғы дәүләтселек тойғоһоноң ҡулай шарттарҙа яңынан ҡабынып, айыҡ аҡыл менән ҡушылыуы тигән һүҙ.

Ә бына «Мәскәү батшалығы ҡул аҫтына ҡалыу айҡанлы» тигән ҡобайырҙы алһаҡ, быныһы, һис шикһеҙ, самодержавиеның колониаль сәйәсәте көсәйгән заманда сығарылған булырға тейеш. Ҡобайыр «аҡ батша» тип танылған батшаның да һис кенә лә «аҡ» (йәғни ғәҙел) булмауына, киреһенсә, «маңлайҙарға туп атып, күкрәктәргә уҡ атып, ата-әсәне һүктереп, башҡа ҡамсы һуктырып», илде иңрәтеүенә, халыҡты тарлыҡта ҡалдырыуына йөрәк әрнеүен һөйләй. Әммә үҙен «ил сәсәне» тип таныткан сәсән «ҡырғын күргән

[1] Ғилми архив. Ф. 3, оп. 12, д. 301. — 3-сө бит.

ил инрәүен» белһә лә, «аҡ батшаның» яуызлыҡтарына ҡаршы торорлоҡ көстө белмәй әле. Ул бары «аҡһаҡалдар йыйылып, батырҙарын маҡташып, һарҡырып аҡкан һабанан, болғар күне ҡабанан ҡуйылығы ҡаймаҡтай, тәмлелеге һарҡыттай» ҡымыҙ эсеп, уйнап-көлөп кенә йәшәгән ҡасанғылыр «хөр» заманды иҫкә төшөрә[1]. Тимәк, халыҡ аңының тарихи сикләнгәнлеген генә аңлата, яуызлыҡҡа ҡаршы көрәш рухы тыуҙыра алмай.

Әле ҡаралған өс ҡобайыр көсөргәнешле заманда милли үҙандың шау бер төрлө генә булмауын, ауыр кисереш — кире тойғолар менән сыбарланыуын күрһәтә.

Рус дәүләте составында йәшәү аҙаҡ сиктә башҡорт ырыуҙарының берләшеүен, халыҡ булып формалашыуын тиҙләтһә лә, антагонизмға ҡоролған батшалыҡ ил эсендәге синфи айырымлыҡтарҙы көсәйтте. Шуға бәйле рәүештә, милли йәшәйештә, милли мәҙәниәттә ҡапма-ҡаршы ике тенденция ҡырҡыулашты. Бының **береһе** феодалдарҙың ханзамандан бирле килгән тормош укладын, иҡтисади мөнәсәбәттәрҙе, тәртип-йолаларҙы һаҡлауға йүнәлтелгән ынтылыштарында, йәки хатта халыҡтың колониаль иҙеүгә ҡаршы күтәрелештәрен үҙҙәренең синфи мәнфәғәттәре өсөн файҙаланырға тырышыуҙарында күренһә, **икенсеһе** киң ҡатлам хеҙмәт эйәләренең урыҫ халҡына яҡынайырға теләүҙәрендә, берҙәм дәүләт эсендә тиң хоҡуҡ, милли тигеҙлек, социаль ғәҙеллек даулауҙарында беленде. Һуңғы быуаттарға ҡараған эпик әҫәрҙәр, атап әйткәндә, «Ҡараһаҡал», «Юлай менән Салауат», «Бүгәсәүгә ҡушылып, ир-батырға ҡуш булып...», «Байыҡ Айҙар сәсән» — һәр ҡайһыһы шул тенденцияларҙы үҙенсәлекле хикәйәләүҙәре менән ҡыҙыҡлы.

XVII — XVIII быуаттарҙа башҡорттар, социаль ғәҙеллек, милли тиңлек даулап, күп тапҡыр баш күтәргәндәр, әммә һәр саҡ еңелеп, батша ғәскәре тарафынан ауыл-йәйләүҙәре үртәлеп, мал-тыуары, ер-һыуҙары таланып, элеккенән дә ауырыраҡ хәлдә ҡалғандар[2]. Милли азатлыҡ өсөн аллы-артлы ҡубып торған яу юлында яңынан-яңы батырҙары, уларҙың ҡаһарман рухы хаҡында, быны батша власы ҡәтғи тыйыуға ҡарамаҫтан, халыҡ күңелендә тетрәткес легендалар һәм риүәйәттәр һаҡланған, моңһоу йырҙар йырланған. Шул иҫтәлектәр нигеҙендә XIX быуатта талантлы сәсәндәр тарафынан «Ҡараһаҡал», «Юлай менән Салауат» ҡобайырҙары ижад ителгән.

Асылда бер тематик циклды тәшкил иткән был әҫәрҙәрҙә образдар системаһы ла, ваҡиғаларҙы хикәйәләү стиле лә уртаҡ. Персо-

---

[1] Ғилми архив. Ф. 3, оп. 12, д. 301. — 7 — 10-сы биттәр.

[2] *Был хаҡта ҡарағыҙ:* Игнатьев Р. Г Хроника достопамятных событий Уфимской губернии // Справочная книжка Уфимской губернии. — Уфа, 1883; Амиров Д. Г. Башкиры. Этнографический очерк. Гл. XI. Башкирские бунты // Труды научного общества по изучению быта, истории и культуры башкир при Наркомпросе БАССР. Вып. 2. — Стерлитамак, 1922; Акманов И. Г. Башкирское восстание 1704 — 1711 г. // Из истории Башкирии / Дореволюционный период/. — Уфа, 1968; его же. Башкирские восстания в XVIII в. — Уфа, 1987.

наждар милли азатлык көрәшенә карата ниндәй позицияла тороуҙарына карап төркөмләнә: бер яҡта батырҙар етәкселегендә халыҡ массаһы хәрәкәт итә, икенсе яҡта — урындағы власть башлыҡтары менән бер төптән эш итеүсе тархандар һәм, халыҡ мәнфәғәттәренә хыянат кылып, тегеләргә һатылған йәндәр. Беренсе кобайырҙа гел генә кеше күңеленә шик-шом һалып йөрөүсе Абдулла, икенсеһендә, заводсылар коткоһона бирелеп, Юлай урынына волость старшинаһы булыр өсөн, юғары органдарға ошаҡ ташыусы Һағынбай тархан кире образдар рәтендә һүрәтләнә.

Йәнә шуныһы үҙенсәлекле: элеккерәк дәүергә караған «Иҙеүкәй менән Мораҙым», «Мәргән менән Маянһылыу», «Тарғын батыр», «Ек Мәргән» сюжеттарында геройҙар тураиан-тура яуыз хандарға каршы сығып, уларҙың күп һанлы ғәскәрҙәре менән алышһа, «Ҡараһаҡал» һәм «Юлай менән Салауат» кобайырҙарында яуызлыҡ сығанаҡтары — батша һәм уның урындағы хакимиәт башлыҡтары — артҡы планға күсерелеп, үҙ исемдәре менән түгел, ә «батша», «янарал» тип, уртаҡ атамалары менән генә телгә алыналар. Төп иғтибар ҡаһармандарҙың героик характерын, халыҡсан рухтарын милли ысынбарлыҡтың эске ҡаршылыҡтарында һынландырып күрһәтеүгә тупланған. Бында эҙмә-эҙлекле рәүештә геройҙарҙың «тормош юлы» алға баҫтырыла. Был «биографияла» тарихи дөрөҫлөккә тап килгәндәре лә, легендар төҫкә манылғандары ла бар. Мәҫәлән: ун биш йәшлек Салауаттың айыуҙар менән һуғышыуы, көтмәгәндә һаҡалы биленә еткән ҡарт менән осрашыуы, уның серле һүҙҙәрен-кәңәштәрен тыңлау (был традицион әүлиә образын иҫкә төшөрә) һ. б. Батша ғәскәре менән хәл иткес бәрелеш алдынан Ҡараһаҡалдың Көсөм батыр ҡәберенә килеп, «дошман уғы теймәһен тип», атына (халыҡ бүләк иткән Ҡара атҡа!) изге тупраҡ һибеүе, шул саҡ аттың да күҙҙәренән йәш тамып, Көсөм батыр ҡәберенең дә һелкенгәндәй булыуы эпик ижадта үтә сағыу романтик миҫалдар рәтендә.

Эпоста уландар ата-бабаларҙың ҡаһарман рухтарын дауам итеүсе батырҙар булып сығыш яһайҙар. Мәҫәлән: ҡырғыҙҙарҙа «Манас», «Сәмәтәй», «Сәйтәк», беҙҙә «Урал батыр», «Аҡбуҙат» һ. б. «Иҙеүкәй менән Мораҙым» һәм әле тикшерелгән ҡобайырҙарҙа шул уҡ традицияның яңы кимәлдә һүрәтләнеүен күрәбеҙ. Был әҫәрҙәрҙә уландар (Мораҙым, Ҡараһаҡал, Салауат), тегеләрҙән айырмалы рәүештә, көрәш юлына аталары үлгәс түгел, ә улар менән бер мәлдә баҫалар, халыҡ мәнфәғәттәре өсөн ҡулға-ҡул тотоношоп, бергә атлайҙар. Аталар ҙа (Иҙеүкәй, Нияз батыр һәм Юлай), әйтелгән уландар ҙа — барыһы ла халыҡты көрәшкә күтәреүсе һәм етәкләүсе батырҙар сифатында һынлана. Был йәһәттән уларҙың телмәрҙәре бигерәк тә әһәмиәтле. Айырата киҫкен мәлдәрҙә халыҡ алдында «телмәр» тотоп, улар башта боронғо батырҙарҙың ҡаһарманлыҡтарын иҫкә төшөрәләр һәм ялҡынлы образдар аша хәҙерге ир-егеттәрҙең ирлек намыҫын уяталар. Күңелдәрҙә ялҡынлы ут ҡабыҙып, халыҡ азатлығы өсөн көрәшкә дәртләндерәләр. Шулай итеп, өлкән быуын геройҙар теләндә лә, йәштәрҙекендә лә бер ишерәк ҡабатланған һәм күп осраҡта батырҙарҙың юғары әхлаҡ сифат-

тарын дөйөмләштергән дидактик ҡобайырҙарҙы иҫкә төшөргән ул һүҙҙәр был әҫәрҙәрҙә юғары идея-эстетик мәғәнәгә эйә. Шул уҡ ваҡытта улар героик сюжетты артабан йәйелдереүҙә композицион роль үтәйҙәр.

Тарихтан билдәле ки, 1773 — 75 йылдарҙағы Крәҫтиәндәр һуғышында урыҫ һәм башҡорттар менән бергә Көньяҡ Уралда һәм Волга буйында йәшәгән бүтән халыҡтар — татарҙар, сыуаштар, мариҙар ҙа ҡатнаша. Оло яуҙа был халыҡтарҙың үҙ-ара хеҙмәттәшлеге, берҙәм ынтылыштары хаҡында һәм халыҡтың хәтерендә риүәйәттәр, тарихи йырҙар, башҡа иҫтәлектәр һаҡланған. Фольклор ижадсылары өсөн яңы һәм үтә ҡатмарлы булыуына ҡарамаҫтан, был тема сәсәндәр иғтибарынан ситтә ҡалмаған. Ҡиң һүрәтләнмәһә лә, шул тарихи берҙәмлеккә бәйле дуҫлыҡ һәм туғандашлыҡ идеяһы әле тикшерелгән ҡобайырҙарҙа ла сағылыш алған. Ҡараһаҡалдың Урал ҡаяларында ҡасып йәшәүсе урыҫ крәҫтиәне Антон менән осрашып, уның ҡайғыһын уртаҡлашыуы, бисәһен ерләүҙә ҡатнашыуы — быға асыҡ бер миҫал. Эпизодтың төп мәғәнәһе, ике геройҙың милли айырымлыҡтарына ҡарамаҫтан, халыҡ массаларының социаль хәленә ҡарата уртаҡ тел табыуында, бер төрлө ҡарашта тороуында асыла.

«Юлай менән Салауат» ҡобайырында иһә халыҡтар араһында туғандашлыҡ идеяһы, социаль ынтылыштарҙың уртаҡлығы асығыраҡ һыҙатлана. Был мотив бөтәһенән элек «маңлайы йөйлө, тупыс бармаҡлы» ҡарт образына бәйләнгән. Тап ошо ҡарт, батша фарманы менән «бунтовщиктарға» ҡаршы яуға сыҡҡан Салауатҡа Бүгәсәүҙең «таш табаҡтан ейгән ир» булыуын, «үҙе менән табаҡташ ҡан илаған урыҫты, татар, башҡорт, сыуашты әбей батша ҡулынан, уға табаҡташ баяр, тархан, бейенән азат итәм барыһын» тип, үҙ тирәһенә «уҙаҡ йыйып, ат менгәнен» һөйләп, Салауат батырҙың был донъяға икенсе тапҡыр күҙен аса. (Беренсеһендә, Салауат ауҙа йөрөгәндә, шулай уҡ көтмәгәндә осрап, уға тарихта ике юл: береһе — борон-борондан яуыз хандар, батшалар, уларҙың ялсылары Тәфтиләүҙәр һәм башҡалар сапҡан юл, икенсеһе — илем өсөн азатлыҡ тип, ғәҙел яуға сыҡҡан Сәйет батыр, Күсем батыр, Аҡай батыр, Ҡараһаҡал һәм Батыршалар сапҡан юл булыуын һөйләп, йәш батырҙың күңелендә ут ҡабыҙғайны.) Аҡһаҡалдың һүҙҙәре был юлы ла хәл иткес роль уйнай: Салауат үҙ ирке менән Бүгәсәү лагерына килә һәм «Петр батшаның» халыҡтарға хатын-мөрәжәғәтен алып, кире ауылына ҡайта. Хат һәм тере шаһиттың ялҡынлы һүҙҙәре күпселек күңелендә өмөт-ышаныс уята. Улар Салауат етәкселегендә борон-борондан үҙҙәре хыял иткән «ғәҙел батша» яғына сыға. Был миҫалдарҙа тарихи дөрөҫлөк сағыла.

«Юлай менән Салауат» ҡобайырында йәнә бер тарихи дөрөҫлөк күҙгә салына. Уныһы түбәндәге юлдарҙа асыла:

Араға дошман тулған һуң,
Яуға барған ирҙәрҙең
Теләге сыбар булған һуң,
Баярҙың бар ҡолдары,

Баяр киткәс етәр, тип,
Башҡорттары, баярҙы
Үҙ еремдән ҡыуғас, тип, —
Бер табандан тормайса,
Бары йортон ҡайғырткас,
Юлай ҙа ары бармайса
Иленә кире ҡайтҡан һуң,
Ҡөс таралған Бүгәстең,
Ҡөсө бөткән Бүгәстең.

Бөтә батшалыҡты дер ҡалтыратҡан Пугачев хәрәкәтенең дә, элеккеләре кеүек, үтә фажиғәле тамамланыуы крәҫтиән психологияһының социаль сикләнгәнлегенә, һәр кем тик үҙ маҡсатын ҡайғыртып, ахырынаса берҙәм хәрәкәт итмәүгә бәйләнгән. Әммә халыҡсан сәсәндәр быға нык уфтанһалар ҙа, ҡобайырҙы килер быуындарға өмөт-ышаныс менән тамамлағандар. Әгәр «Иҙеүкәй менән Мораҙым», «Ҡараһаҡал» ҡобайырҙарының да «Юлай менән Салауат»тағыса бер төрлө ышаныс менән тамамланыуын иҫәпкә алһаҡ, киләсәк быуындарға өмөт бағлау башҡорт халыҡ эпосында үҙе бер традиция дәрәжәһенә күтәрелеүен танырға тура килә. Был традицияла, әлбиттә, ил-халыҡ өсөн ҡорбан булған батырҙар даны һис ҡасан онотолмаясағына, ҡаһарман аталар юлын оло йөрәкле уландар дауам итәсәгенә тәрән ышаныс (быуаттар һуҙымында, ысынлап та, күп тапҡыр аҡланған фәлсәфәүи ҡараш!) сағыла.

Эпик ижадта әҫәрҙән әҫәргә аныҡлана килгән тағы бер образ бар. Ул — үҙендә халыҡ аҡылын, халыҡ ғәмен туплаған сәсән образы: «Аҡбуҙат» эпосында Тарауыл ҡарт, «Иҙеүкәй менән Мораҙым»да Һабрау ҡарт, «Юлай менән Салауат»та — «маңлайы йөйлө, тупыс бармаҡлы аҡ сал ҡарт». Уларҙа, алдынғы аҡыл эйәләре булараҡ, сәсәндәрҙең халыҡ аңын һәм социаль активлығын үҫтереүҙәге ролдәре асыҡ сағыла. Был хаҡта Ҡобағоштоң, ысын сәсәндәрҙең кемлеген аңлатып, «яманлыҡты яҡламаҫ, дошман хәтерен һаҡламаҫ, яҡшылыҡты һөйөр ул, илдең зарын һөйләр ул» тигән һүҙе киң билдәле. Үҙен ил сәсәне итеп таныған, йәғни милли аңы юғары булған сәсәндең халыҡтан айырылғыһыҙ йәшәүе тураһында Ерәнсә сәсән тағы ла асығыраҡ әйткән. Үҙ халҡының мәнфәғәттәрен онотҡан башҡорт бейҙәрен үҙ яғына ауҙарырға тырышҡан ҡаҙаҡ ханы Абдулхайырға башҡорттарҙың ҡаты асыуын белдереп, ул бына нимә ти:

Мин әйтмәйем, күп әйтә, әү,
Күп — сүп түгел, шул әйтә, әү.
Әй, күп — сүп түгел, шул әйтә.
Күп эсендә кем сүп түгел, әү,
Күп һүҙен һәм шул әйтә.
Күп тигәнем халыҡ булыр, әү,
Тотҡан юлы хаҡ булыр, әү,
Әй, һүҙе һөттән аҡ булыр,
Яҡшыға ышыҡтай тау булыр, әй,
Яуызға ҡаршы яу булыр.

«Күп эсендә» «сүп» булмағаны өсөн, гел генә «күп һүҙен» һөйләгәне өсөн дә инде алдынғы сәсәндәрҙең әйткәндәрен халыҡ күңел түрендә һаҡлаған, тыуыр быуындарға изге аманат итеп телдән телгә тапшыра килгән. Беҙҙең быуынға килеп еткән әҫәрҙәр Ҡобағош, Ҡарас, Мәхмүт сәсәндәр ҙә, Ерәнсә сәсән кеүек үк, милли үҙаңдың прогрессив тенденцияһын әйҙәүсе, халыҡтың айыҡ аҡылын арттырыусы эшмәкәрҙәр һынында алға баҫалар.

Поэтик төҙөлөшө, төп образдың драматик үҫтерелеше һәм идея йөкмәткеһенең яңылығы менән «Байыҡ Айҙар сәсән» ҡобайыры айырылып тора. Әҫәр, XVIII быуат баштарында тыуып, йөҙҙән ашыу ғүмер йәшәгән, ялҡынлы йырҙары һәм ҡурай моңдары менән халыҡ хәтерендә күренекле урын алған Байыҡ сәсәндең драматик тормошона һәм сәсәнлек эшмәкәрлегенә бәйле бер нисә эпизодты һүрәтләй. Тәү ҡараштa эпизодтарҙың һәр береһе үҙ аллы әҫәр һымаҡ. Уларҙа тематик төрлөлөк кенә түгел, жанр һәм поэтик стиль айырымлыҡтары ла һиҙелеп тора: беренсе эпизод әйтеш формаһында булһа, икенсе һәм өсөнсөһө халыҡ азатлығын, илдең бойондороҡһоҙлоғон, бөтөнлөгөн данлаған ҡобайырҙар стилендә; дүртенсе эпизод тарихи йырҙар жанрына ҡарай. Бынһының халыҡ күңелендә «Икенсе эрме» тигән йыр булып йәшәүе үҙе үк уның үҙаллылығын иҫкәртеп торған төҫлө. Ләкин быны ябай бер контаминация тип ҡарарға ярамай, ә бүтән әҫәрҙәрҙә лә (мәҫәлән, «Урал батыр», «Аҡһаҡ ҡола», «Ҡара юрға», «Ҡуңыр буға» һ. б.) урын алған һәм, ғөмүмән, фольклор өсөн ғәҙәти булған синкретизм күренеше тип баһаларға кәрәк. Шуны иҫәпкә алһаҡ, идея бөтөнлөгө яғынан был ҡобайырҙы, ысынлап та, героик эпос ҡалыбына һуғылған әҫәр тип һанарға нигеҙ бар. Беренсенән, һәр эпизод бер үк теманы — халыҡ азатлығы һәм тыуған ил бойондороҡһоҙлоғо темаһын үҫтерә; икенсенән, теманы бергә ойоштороусы, эпизодтарҙы бер-береһенә бәйләүсе үҙәк герой бар. Ул — күләмле эпос традицияһында һынландырылған Байыҡ сәсән образы.

Тема бүлектән бүлеккә тәрәнәйә, сәнғәтсә үҫтерелә килә. «Байыҡ сәсәндең ҡаҙаҡ аҡыны Бохар менән әйтешкәне» тигән беренсе бүлектә тыуған ил темаһы шәхес азатлығы мәсьәләһе менән үрелә. Икенсе күренештә ул «ярылып ятҡан» социаль төҫ ала. Байыҡ сәсәндең Салауат батырға әйткәндәрендә үҙ илендә тыныс йәшәргә урын тапмаған аҡһаҡалдың зары ғына түгел, ә хакимдарҙан иҙелгән халыҡ зары сағыла.

«Байыҡ сәсәндең ҡайтанан килеп сыҡҡаны, халыҡҡа туғанлыҡты аңлатҡаны» — сюжеттың үҙенсәлекле кульминацияһы дәрәжәһендә. Бында Рәсәй тарихының үтә драматик бер осоро һүрәтләнә. Французлар яу асып, Мәскәүҙе килеп баҫҡан мәл был. Батшанан башҡорттарға ла, ярҙам һорап, фарман килгән. Шул айҡанлы ил ҡарттары һәм түрәләр, ат-хат еткән ерҙән халыҡты саҡыртып, кәңәшкә йыйылған. Текста асыҡтан-асыҡ әйтелмәһә лә, йыйында ифрат ҡатмарлы кисерештәр ҡайнауы һиҙелә. Батшаның башҡорттарҙан ярҙам һорауын ишеткәс, йыйындағыларҙың күбеһе, үткәндәрҙе иҫкә төшөрөп: «Әйҙә, дөмөгөп китһен батшаһы! Бармайыҡ, ағай-эне», — тип тартышалар төҫлө. Һәр хәлдә йыйындың йөҙ

йәшәр үҙ сәсәнен сәләм дә бирмәй ҡаршы алыуынан һәм Байыҡтың «Ниңәлер һүлпән туйығыҙ — үлек сығыр өй һымаҡ!» тигән һүҙенән атмосфераның үтә көсөргәнешле булыуы аңлашыла.

Йыйынға «башын-күҙен йөн баҫҡан, аҡ һаҡалы биленән ашҡан» Байыҡ сәсән килеп ҡушылғас, ауыр мәсьәләне хәл итеү көтөлмәгәнсә боролош ала. Үҙ ғүмерендә күпте кисергән ҡарт сәсән, ил яҙмышы хәл ителгән саҡта, башҡалар шикелле батшанан күргән яуызлыҡтар өсөн йөрәк әрнеү тойғоһона бирелеп түгел, ә айыҡ аҡылға таянып фекер йөрөтә: олатайҙарҙың, Мәскәүгә үҙҙәре барып, Аҡ батшаға ант итеүҙәрен иҫкә төшөрә; туғандашлыҡты ырыуҡан ҡәрҙәшлеге менән генә түгел, ереккән ер, эскән һыу берлеге, ант биргән ил берлеге менән аңлата. Ошоноң менән дә инде Байыҡ сәсәндең аҡыллылығы билдәләнә. Ул башҡорт халҡының тарихи ынтылыштарын, милли үҙаңында борондан туплана килгән демократик һыҙаттарын бик аныҡ кәүҙәләндергән эпик герой булып алға баҫа.

Дүртенсе эпизодтың әһәмиәте шулай уҡ ҙур. Унда Байыҡ сәсән биргән аҡылдың халыҡ теләгенә тап килеүе, башҡорттарҙың тарихи антҡа тоғролоғо, ил һаҡлауҙа патриотик берҙәмлеге һүрәтләнә.

Шулай итеп, тап бына Байыҡ Айҙар сәсән образы аша башҡорт фольклорында дәүләтселек тойғоһо **ватандашлыҡ** төшөнсәһе менән үрелә. Рәсәй — бер дәүләт эсендә туғанлашҡан халыҡтарҙың уртаҡ Ватаны итеп таныла. Әгәр «Икенсе әрме», «Любизар», «Ҡаһым түрә», «Эскадрон», «Һыр» ише тарихи йырҙарҙы, 1812 һәм 1941 — 1945 йылдарҙағы Ватан һуғыштарында ижад ителгән бәйеттәрҙе лә иҫкә төшөрһәк, башҡорт фольклорында ватандашлыҡ төшөнсәһенең бөйөк илгә тәрән мөхәббәт, оло гражданлыҡ тойғолары менән тығыҙ үрелеүен аңларбыҙ.

Тикшереүҙе дауам итәбеҙ икән, совет осоро фольклорында патриотизм тойғоларының азат халыҡтың рухи күтәрелеше, тиңдәшһеҙ ҡаһарманлығы менән ҡуша сағылыуын, яҙма әҙәбиәттә — халыҡ шағирҙары Мәжит Ғафуриҙың «Мин — ватансы», Мостай Кәримдең «Россиянмын» тигән шиғырҙары һәм башҡа яҙыусыларҙың ил берҙәмлеген, СССР халыҡтарының дуҫлығын-туғандашлығын тәрән сағылдырған юғары художестволы әҫәрҙәре халыҡ ижадына, әле беҙ һөйләгән традицияларға тамырланыуын күрергә була.

* * *

XVI — XVII быуаттарҙа **башҡорт-ҡаҙаҡ бәйләнештәре** ҡатмарлы төҫ ала. Бер яҡтан, ике халыҡтың хеҙмәтсән ҡатламы, ҡанҡәрҙәшлеккә таянып, үҙ-ара татыулыҡҡа, дуҫлыҡҡа ынтыла. Үҙенең рухи байлығын бүлешеп-уртаҡлашып йәшәй. Башҡорт һәм ҡаҙаҡ халыҡтарының ауыҙ-тел әҙәбиәтендә шул нигеҙҙә барлыҡҡа килгән уртаҡ әҫәрҙәр («Алпамыша», «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу», «Тарғын менән Ҡужаҡ» һ. б.) — шуға асыҡ миҫалдар.

Икенсе яҡтан, феодаль ҡатламдар, байлыҡ артынан ҡыуып, күршеләргә сабыуыл яһау, малдарын ҡыуып алып китеү (барымта)

һәм шуға яуап рәүешендә ҡарымтаға килеү кеүек алама ғәҙәтйолаларҙы дауам итәләр; ҡәрҙәш халыҡтарҙы ҡанлы бәрелештәргә юлыҡтырып, үҙ-ара үсләшеү тойғоһон тыуҙыралар. Хеҙмәтсән массаларҙың дуҫлыҡ-туғанлыҡ ынтылыштарына зыян иткән феодаль күренештәр халыҡ ижадынан шулай уҡ ситтә ҡалмаған, яңы тарихи шарттарҙа эпик поэзияның үҙенсәлекле бер темаһына әйләнгән. «Ҡарас менән Аҡша», «Билал менән Дүсән» — шул темаға ҡараған әҫәрҙәр.

Башҡарған эштәренә ҡарағанда, бында геройҙар ил өсөн ҡорбан булған батырҙарҙан күпкә ҡайтыш: «Ҡарас менән Аҡша» хикәйәте 1750 йылдарҙа Башҡортостандың хәҙерге Учалы районы Науруз ауылы башҡорттары менән күршелә йәшәгән ҡаҙаҡтар араһында мал өсөн бер бәрелеште генә тасуир итә. Әммә, шуға ҡарамаҫтан, һоҡландыра, әҫәрләндерә. Был инде сюжеттың художество бөтөнлөгө һәм гуманистик йөкмәткеһе, образдарҙың сәнғәтсә камил эшләнеше менән аңлатыла.

Ҡарас батыр образында беҙ ҡалыпҡа әйләнгән уртаҡ һыҙаттарҙы ғына түгел, ә уның үҙ йөҙөн, үҙ батырлығын күрәбеҙ. Шул уҡ ваҡытта уның шәхсиәте (индивидуаллеге), барымтасыларға ҡаршы сығып, үҙ малы өсөн көрәшеүсе батыр булыуына ғына ла ҡайтып ҡалмай. Хикәйәт Ҡарас батырҙы борондан килгән традицион алымдар менән ҡаһарманлыҡ идеалдары яҡтылығында һүрәтләй. Һөҙөмтәлә **индивидуалләштерелгән** эпик герой, уның сәнғәтсә **дөйөмләштерелгән** образы алға баҫа. Йәнә шуныһы бик мөһим: бында батырҙар ҡылығы шау реалистик шарттарҙа реалистик деталдәр ярҙамында һырлана. Ошо йәһәттән уларҙың үҙ-ара әйтеше һәм атышы ҡыҙыҡлы.

Әйтештә, мәҫәлән, Ҡарастың да, Аҡшаның да үҙҙәренә үҙҙәре биргән баһалары иғтибарҙы тарта. Уны батырҙарҙың үҙ-ара маҡтанышыуҙары тип ҡарарға ярамай, эпик геройҙың үҙ танытмаһы эпоста ғәҙәти күренеш тип аңларға кәрәк. Бындай традицион танытмаларҙа геройҙың *нәҫел ебе асыла, бығаса күрһәткән батырлыҡтары* һанала, алда торған маҡсаты әйтелә. Бында ла шулай. Әммә Ҡарас менән Аҡшаның әйтеше геройҙарҙың үҙ танытмаларынан ғына тормай. Дошманлашыу хәленә еткән батырҙар, Тарғын менән Ҡужаҡ шикелле, үҙ-ара мыҫҡыллашыу юлына ла баҫмайҙар, тәүге осрашыуҙа уҡ бер-береһен үҙенә тиң батыр итеп күрәләр, үҙ-ара ихтирам белдерәләр. Ошо тойғоға бәйле рәүештә, хикәйәткә гуманизм идеяһы килеп инә.

Ҡарас мәсьәләне һәүетемсә хәл итеү яғында:

Ҡан түкмәй, иленде һин күрер булһаң,
Күк, ала — күп йылҡыны ташла, тимен!

Ләкин барымтасылар башлығы, үҙ яғында көстөң күплегенә таянып, ғәҙел тәкдимде кире ҡаға. Эш атышыуға барып еткәс тә, Ҡарас: «Тәүҙә мин уның ҡалъянындағы һаҙаҡтарын ҡыра атайым: мәргәнлегемде күреп, бәлки, малды именлек менән генә ҡалдырып китергә риза булырҙар», — тип, ҡаҙаҡ батыры Аҡшаның бер ҡалъя-

ның туҙҙыра ата. Әммә шундай етди иҫкәртеү ҙә уғрыны аҡылға ултыртмағас, Ҡарас батыр икенсе уғын тегенең үҙенә атырға мәжбүр.

Аҡшаның үлеме — ике батыр көрәшендә береһенең ғәҙәти еңелеүе генә түгел, ә барымтасылыҡ юлына баҫҡан батырҙың ғиләйәтенә күрә яза алыуы ул. Икенсе төрлө әйткәндә, «Ек Мәргән» хикәйәтендәге һымаҡ, был әҫәр ҙә уғрылыҡты хөкөм итә, ысын батырлыҡты ғәҙеллек, кешелеклелек тойғолары менән бәйләй. Аҙаҡ Ҡарастың Аҡшаны үҙе үк тәрбиәләп ерләүе һәм баш осона һаҙағын ҡаҙап китеүе — был инде «үҙ илендә тиң таба алмай йөрөгән» Аҡшаның батырлығына батырҙарса хөрмәт күрһәтеү, үҙенсәлекле апофеоз булып тора. Ике халыҡ батырҙарына үҙ-ара үсләшергә, ҡарымталашырға урын ҡалдырмай. Беҙҙең өсөн был поэтик әҫәр шундай гуманистик йөкмәткеһе менән, айырым бер фактты юғары сәнғәтсәнлек ҡалыбына һуғып, оло мәғәнә аңлатыуы менән ҡиммәт.

## 3. Эпик ижадта сәсәндәр роле һәм художестволылыҡ мәсьәләләре

Эпик әҫәрҙәрҙең формалашыуы талантлы сәсәндәр ижадына бәйләнгән. Сәсәнлек сәнғәте боронғо замандарҙа уҡ тормош серҙәрен, йәшәгән мөхитте, кеше рухын, уның көсөн, мөмкинлектәрен таныпбелергә теләүҙән барлыҡҡа килгән, һәм халыҡтың тарихи үҫешенә, рухи ихтыяждарына ярашлы әҫәрҙәр ижад ителгән.

Эпик традицияларҙы һаҡлау һәм артабан үҫтереү мәсьәләһе башҡорт ғилемендә тәү башлап 30-сы йылдар ахырында Мөхәммәтша Буранғоловтың «Фольклор ижадсылары» тигән хеҙмәтендә күтәрелә[1]. Бында автор, телдән үҙе яҙып алған материалдарға таянып, Ҡобағош, Ерәнсә, Мәхмүт, Ҡарас, Байыҡ, Буранбай, Ишмөхәммәт һәм Ғәбит сәсәндәр тураһында ҡыҙыҡлы мәғлүмәттәр килтерә. Салауат батырҙың сәсәнлегенә ҡағылышлы йырҙарға туҡтала. Аҙаҡ берҙән-бер ошо сығанаҡтан файҙаланып, башҡа ғалимдар башҡорттарҙа сәсәнлек сәнғәте тураһында һүҙ йөрөтәләр[2]. Ләкин теге йәки был сәсәндең эпик поэзия үҫешенә индергән «шәхси» өлөшө, ижад үҙенсәлектәре һаман асыҡланмай ҡала килә. Бының өсөн бер үк сюжеттың төрлө быуын сәсәндәре ауыҙынан яҙып алынған текстары кәрәк. Беҙҙә иһә әҫәрҙәрҙең күбеһе һуңғы быуатта, улары ла «ябай» башҡарыусылар теленән өҙөк-йолҡоҡ ҡына яҙып алынған. Ә сәсәндәрҙән алынған «Урал батыр», «Аҡбуҙат»,

[1] Буранғолов М. Сәсән аманаты. Төҙөүсеһе, баш һүҙ авторы һәм яуаплы мөхәррире Бериән Байымов. — Өфө, 1995. — 38 — 102-се б.

[2] Кирәев Ә. Н. Башҡорт халҡының эпик ҡомартҡылары. — Өфө, 1961. — 69 — 90-сы б. /Русса баҫмаһы — Башкирский героический эпос. — Уфа, 1970. — С. 48 — 61/; Сәғитов М. М. Башкирские сказители и их репертуар // В кн.: Башкирский народный эпос. — М.: Наука, 1977. — С. 484 — 492; Хөсәйенов Ғ. Б. Йырау һәм сәсәндәр // Уның «Заман. Әҙәбиәт. Әҙип» тигән китабында. — Өфө, 1978. — 43 — 61-се б.; Быуаттар тауышы. — Өфө, 1984. — 67 — 80 һәм 123 — 137-се б.

«Иҙеүкәй менән Мораҙым», «Мәргән менән Маянһылыу», «Ҡараһаҡал», «Юлай менән Салауат», «Ерәнсә сәсән», «Байыҡ Айҙар сәсән» ҡобайырҙары бары берәр вариантта М. Буранғолов яҙмалары буйынса ғына билдәле. Тимәк, бында бөтәһенән элек шул яҙмаларға туҡтап үтеү кәрәк.

Мөхәммәтша Ғабдрахман улы Буранғолов (1888 — 1966) фольклор әҫәрҙәре менән шәкерт сағында уҡ ҡыҙыҡһына. Тәү мәлдә ул, әлбиттә, фольклорҙың тарихи ҡиммәтен белмәй. Ҡыҙыҡлы әҫәрҙәрҙе, үҙе әйтмешләй, «иптәштәре араһында әкиәт һөйләп ярышыу уйы менән» генә яҙып ала[1], дөрөҫөрәге, хәтер һандығына һалып ҡуя.

1908 йылда М. Буранғолов «Ваҡыт» гәзитенең һәм «Шура» журналының редакторы Ризаитдин Фәхретдинов менән осраша. Атаҡлы ғалим һәм мәғрифәтсе-яҙыусы, һәүәҫкәр егеттең яҙмаларын хуплап, уға фольклор әҫәрҙәренең тарихи һәм художество ҡиммәтен аңлата, халыҡтың рухи мәҙәниәтен арттырыуҙа сәсәндәрҙең, ҡурайсыларҙың, йырсыларҙың бөйөк роле тураһында һөйләй. Ошонан һуң халыҡ таланттары менән ҡыҙыҡһыныу, улар ауыҙынан әҫәрҙе, уның йөкмәтке һәм художество үҙенсәлектәрен һаҡлап, нисек тә тулыраҡ яҙып алырға тырышыу уның даими бер эшенә әйләнә.

Оло маҡсатына ирешеү юлында ул форсатын да, малын да ҡыҙғанмаған. Фәлән ауылда оҫта йырсы, ҡурайсы, боронғо тарихты белгән сәсән барлығын ишетһә, күстәнәскә тәкә һуйып, уға ашыҡҡан. Тап шулай итеп ул 1917 йылда хәҙерге Күмертау районы Бабалар ауылында Биккужин Ғәтиәтулла сәсәнде барып тапҡан һәм унан «Аҡбуҙат»тың тулы вариантын яҙып алған.

М. Буранғолов үҙе күреп белгән таланттарҙан бигерәк тә Арғынбаев Ғәбитте (1856 — 1921) юғары баһалай. 1907 йылдан бирле уның менән даими бәйләнеш тотҡан, аралашып йәшәгән. Ҡайһы бер барғанында аҙна-ун көн, ә 1920 йылда дүрт ай буйы сәсән янында йәшәп, ғәҙәти шарттарҙа башҡарған әҫәрҙәрен тыңлай, репертуарын өйрәнә. Күбеһен, шул иҫәптән «Урал батыр» эпосын, яҙып ала. «Ҡараһаҡал», «Юлай менән Салауат» ҡобайырҙарын да тәү башлап унан ишетә. Йыл һайын уҙғарылған һабан туйҙарында, ҙур тарихи ваҡиғаларға бағышланған йыйын-бәйгеләрҙә сәсәндәр, ҡурайсылар ярышын күрә. Шул ярыштарҙа йыш ҡына Ғәбит сәсәндең өҫтөн сығыуына шаһит була. Мәҫәлән, 1912 йыл Рус-француз һуғышында еңеүҙең йөҙ йыллығына ҡарата Ырымбур губернаторы ойоштороған бәйгелә һәм 1920 йыл Башҡортостан хөкүмәте уҙғарған бәйгелә беренсе приз Ғәбит сәсәнгә бирелә.

Хәҙерге фән өсөн М. Буранғоловтың Ғәбит сәсәнгә биргән характеристикаһы ҡиммәт: «Ул, һөйләгәндә, үҙен үҙе онота, көләр ерҙә көлә, илар ерҙә илап, әҫәрләнеп тора ла һалҡын һыу эсә, бик оҙаҡ һүҙһеҙ ҡала. Унан үҙе яратҡан көйҙө ҡурайҙа уйнай. Шунан: «Тағы ниндәй көйҙө уйнайым?» — тип һорағас ҡына, йөрәге баҫылғанын беләһең...»

Драматик йөкмәткеле әҫәрҙәрҙе һөйләгәндә үҙе лә хискә биреләүен сәсән шулай аңлатҡан: «Мин донъяны онотам. Ул кешене

---

[1] Буранғолов М. Сәсән аманаты. — 101-се бит.

(әҫәр геройын — *Н. З.*) күҙ алдыма килтерәм дә үҙемде тик шул кешеләр менән бергә хис итәм. Улар менән бергә яуҙа булам. Ҡобайыр ҡайҙа илтһә, мин — шунда».[1]

Миңә 1962 йылда Ҡырғыҙстанда рус әҙәбиәте аҙналығында КПСС Үҙәк Комитеты вәкиле булараҡ ҡатнашырға тура килгәйне. Шул саҡ аҙналыҡты йомғаҡлау концертында 66 йәшлек мәшһүр манассы Саяҡбай Ҡаралаевтың «Манас»тан бер өҙөк башҡарыуын тыңларға-күрергә насип булды. О, үҙе бер ғәҙәттән тыш тамаша ине был! 1939 йылда Ҡырғыҙ халыҡ артисы исемен алған манассы, күҙҙәрен йомоп, бер аҙ тыныс ҡына ултырҙы ла, тәрән итеп тын алғандан һуң, көйләп һөйләй башланы. Артабан көйләгән һайын, йөкмәткегә ҡарап, уның тауышы, интонацияһы, бөтә йөҙө-мимикаһы үҙгәрә. Оҙон строфа-тирадаларҙы башҡарғанда, бер тында әйтеп бөтөрөргә теләп, быулыға, йөҙө ҡыҙара, бурҙатлана, күҙҙәре йә аҡая, йә йомола. Ҡулдары ла һис тик тормай — йә күтәрелә, йә төртөп күрһәткәндәй алға һуҙыла. Ашығып көйләү арҡаһында һүҙҙәре асыҡ ҡына ишетелмәһә лә, ҡырғыҙҙар уны аңлай, әммә тыныс ҡына тыңлап ултырмай. Һөйләүсегә кеүәт теләгәндәй, бөтә зал уға ҡушылып гөжләй, бер иш тойғо-хистәрен һиҙҙереп тора...

Боронғо әҫәрҙең хәҙерге быуынға ла ни ҡәҙәр ныҡ тәьҫир итеүенә мин ана шулай шаһит булдым. Шул тәьҫоратымды Ғәбит сәсәнгә Буранғолов биргән характеристика менән сағыштырам да, драматик йөкмәткеле әҫәрҙәрҙе башҡарғанда хискә бирелеү талантлы сәсәндәр, аҡындар, манассылар өсөн тәбиғи күренеш, ғөмүмән, ауыҙ-тел сәнғәтенең айырып алғыһыҙ бер сифаты, ахырыһы, тип ҡарайым.

1907 йылдан бирле М. Буранғолов бик күп әҫәрҙәр яҙып алған, әммә уларҙы баҫтырып сығарыуҙы үҙ ваҡытында артыҡ ҡайғыртмаған. 1915 йыл «Шура» журналында — бер, 1926 йыл «Башҡортостан» гәзитендә өс йыр легендаһын ғына баҫтырған.

Минең уйымса, бының сәбәбе Буранғоловтың үҙенең әҙәби ижад маҡсаттары менән бәйләнгән. Уны айырата патриархаль-феодаль тормош шарттарында йәштәрҙең фажиғәле мөхәббәт яҙмышы тураһында йыр-легендалар ҡыҙыҡһындыра. Уларҙың һәр береһендә ул тетрәткес драма ятыуын күрә. 1926 йыл «Башҡортостан» гәзитендә баҫылған «Шәүрә килен» тигән мәҡәләһендә: «Бүтән милләттәрҙә булған кеүек, беҙҙең башҡорттарҙа ла бик бай халыҡ әҙәбиәте бар. Быларҙың араһында киләсәктә яҙма әҙәбиәт (роман, драма һ. б.) өсөн нигеҙ итеп алырлыҡтары байтаҡ», — тип яҙып сыҡты.

20 — 30 йылдарҙа М. Буранғолов, башлыса, шундай әҙәби ижад менән шөғөлләнде. Фольклор-этнографик материалдарға нигеҙләнеп, ун бер пьеса яҙҙы. Уларҙың күбеһе драма театрҙары сәхнәһендә уйналды. Ләкин тап ошо өлкәлә үтә ауыр кисерештәргә юлыҡты: вульгар-социологик тәнҡитселәр тарафынан, әҫәрҙәрендә синфилыҡ принцибы томанландырылып, феодаль тормош идеаллаштырыла, тип, нахаҡ бәлә яғылды. Шул арҡала М. Буранғолов

---

[1] Шунда уҡ. 102-се бит.

ҡайһы бер пьесаларын ҡат-ҡат эшкәртергә мәжбүр булды, хатта ике тапҡыр (1937 һәм 1950 йылдарҙа) ултырып та сыҡты. (Икенсеһендә алты йыл лагерҙа булып, КПСС-тың XX съезынан һуң 1956 йылда азат ителде. 1959 йылда тулыһынса реабилитацияланып, ғәйептәре юҡҡа сығарылды.)

Фольклористик эшмәкәрлегенә әйләнеп ҡайтһаҡ, был йүнәлештә уның яҙмышы күпкә өҫтөнөрәк, бәхетлерәк булып сыҡты. Ғүмере буйы йыйған фольклор әҫәрҙәрен ғилми фондҡа индереп ҡалдырыу маҡсаты менән 1938 йылда М. Буранғоловты Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтына эшкә алалар. Ошонда ғына ул үҙ яҙмаларын тәртипкә һалыу менән шөғөлләнә. Һөҙөмтәлә институттың фольклор фонды баһалап бөтөргөһөҙ эпик ҡомартҡылар һәм башҡа жанр әҫәрҙәре менән тулыландырыла. Элекке сәсәндәр, башҡа төр ижадсылар тураһында шундай уҡ ҡиммәтле мәғлүмәттәр алына. Аҙаҡ, 1944 йылда, институт ғалимдарының юллауы буйынса, уға Башҡорт АССР-ның халыҡ сәсәне исеме бирелә.

М. Буранғоловтың фольклор коллекцияһы башлыса латинса хәрефле машинкала баҫтырылған текстарҙан тора. Тәүге ҡулъяҙмалары, күрәһең, ғәрәпсә булғанлыҡтан, тапшырылмаған. Ҡыҙғаныска ҡаршы, улар сәсәндең өй архивында ла һаҡланмаған.

Буранғолов текстарын үҙ-ара һәм бүтән кешеләр тапшырған яҙмалар менән сағыштырыу элек башҡорттарҙа бер-береһенән шаҡтай айырылған сәсәнлек традициялары йәшәүен күрһәтә.

Ғәбит сәсәндән яҙып алынған текстарға эпик сюжетты ҡолас йәйеп әҙмә-әҙлекле хикәйәләү хас. «Урал батыр» эпосында, мәҫәлән, ҡайһы бер строфаларҙың 48 юлға барып етеүе — шул поэтик ҡоластың ҡанат йәйеп талпыныуҙары һымаҡ. Шуныһы «ҡыҙыҡ»: күп юллы строфалар, синтаксис күҙлегенән тикшерә башлаһаң, йыш ҡына күп быуынлы бер ҡатнаш ҡушма һөйләмдән тороуы асыҡлана. Әммә ҡайһы берҙә ҡайһы быуындың ҡайһы һүҙгә (һөйләм киҫәгенә) ҡарауын тиҙ генә белеп бөтөрлөк тә түгел. Стилистик йәһәттән шундай ҡатмарлы шиғри төҙөлөштәр, бигерәк тә, тыуған ер матурлыҡтарын, эпик геройҙың үҙенең һәм даими юлдашы атының ҡеүәтен, башҡа сифаттарын тасуирлағанда ҡулланыла. Башҡорт халҡының эпик поэзияһында был, күрәһең, бик борондан килгән үҙенсәлекле патетика (хискә бирелеү) формаһы булып, һуңғараҡ сәсәндәр ижадында традицион эпик клишеға әйләнгән. «Иҙеүкәй менән Мораҙым» эпосында Иҙеүкәй атына бирелгән тасуирламаның мифик Аҡбуҙатҡа оҡшашлығы, Һабрау ҡарт менән Иҙеүкәй, Ҡараһаҡал, Юлай менән Салауат телмәрҙәрендә Урал тауға бағышланған боронғо ҡобайырҙарҙың ҡабатланыуы шуны раҫлай.

Эпик хикәйәләүҙә шиғри триадаларға ҡоролған патетик стиль беҙгә билдәле XIX быуат сәсәндәре ижадында ҙур ҡаҙаныш һаналған. Ғәбит сәсән уны Ишмөхәммәт Мырҙаҡаевтан өйрәнгән, Ғәбит Арғынбаевтан Мөхәммәтша Буранғолов үҙләштергән. «Иҙеүкәй менән Мораҙым» ҡобайырының ҡулъяҙмаһында яһалған төҙәтмәләр, элекkеһе һыҙылып, киңәйтеберәк яҙылған строфалар боронғо стилде һаҡлауҙа М. Буранғоловтың бик талапсан булыуын күрһәтә. Боронғо тел һәм хикәйәләү үҙенсәлектәрен ныҡ үҙләштергән өсөн дә инде уның яҙмаларында боронғолоҡ рухы асыҡ сағыла.

Был томға ингән әҫәрҙәргә таянып, эпик хикәйәләүҙең бүтән формалары тураһында ла һөйләргә була. Бына, мәҫәлән, XIII — XIV быуатҡа ҡараған «Иҙел йорт» ҡобайырының стилистик үҙенсәлеге: шиғыр юлдары ике тапҡыр әйтелә; һәр юл — үҙенә башҡа ябай һөйләм, йә тиң киҫәктәр дәрәжәһендәге аныҡлауыстар («Балғырғаны беләктәй, Һарынаһы ҡонандай, Сыбар үгеҙ йөрәктәй...» йәки: «Ҡыу ағастай ҡыуарған, Ҡарҙай башы ағарған, Ҡарт һанына кем кергән — Был кәүерҙән шул ҡалыр»); констатацияға, йә һораууяуапҡа ҡоролған һәр бүлек «тамамланған» бер эпизодты, ә бөтәһе бергә үтә ауыр хәлде (фажиғәне) хәбәр итә. «Сүкем батыр», «Ҡөбәк батыр», «Старшина Мәсәғүт» ҡобайырҙарында ла ҡабатланған был форманың оригиналлығы күҙгә бәрелеп тора.

«Баязит батыр», «Аҡшам батыр», «Билáл менән Дүсән» ҡобайырҙарында хикәйәләү стиленең ябайлығы юғарыла әйтелгән лирик мотивтарға бәйләнгән. Шуға өҫтәп, һуңғыһының ҡайғылы йөкмәткеһе менән дә, формаһы менән дә бәйет жанрына яҡын тороуын әйтергә кәрәк.

Башлыса, ҡаһарманлыҡты данлаған, батырҙарҙы, ғәҙәттә, яҡты төҫтәрҙә һүрәтләгән эпос жанрына пессимизмға яҡын тойғо-кисерештәрҙең килеп инеүе осраҡлы түгел, әлбиттә. Донъяла ғәҙеллекте таба алмай яфаланыу, «аҡ батша» тип һаналған урыҫ батшаһынан да ныҡ алданыу, әленән-әле азатлыҡ яулап та, һәр күтәрелештең үтә фажиғәле тамамланыуы — былар бөтәһе лә халыҡ күңелендә ауыр тойғоларҙы, ҡотолғоһоҙлоҡ ҡараштарын тыуҙырған. Шул уҡ ваҡытта ҡобайырсылар ҡәһәрле заман тыуҙырған әрнеүҙәргә күмелеп кенә лә йәшәмәгән, сәбәпселәрен эҙләгәндәр. «Тәүеш Мәргән» ҡобайыры, мәҫәлән, ғәҙәттә, бер цикл формаһында һөйләнгән әйтемдәрҙе ослап ҡуя торған традицион юлдар менән тамамлана:

Һай, бер әҙәмде бай итер,
Бер әҙәмде юҡ итер;
Байҙарҙың кейгәнен
Ҡамҡа менән суҡ итер,
Ашағанын-эскәнен
Ҡаҙы менән ял итер!
«Йә, бер аллам, йә, бер ҡаҙир!» — тигән саҡта,
Берәүҙең яңғыҙ ҙа яңғыҙ башын
Юҡ итер, ау, юҡ итер.

Был инде донъяның тигеҙһеҙлеге өсөн Аллаға тел тейҙереү, ризаһыҙлыҡ белдереү булып тора.

## ҺЫҒЫМТА

Феодализм осоронда халыҡ ижады тарихи ваҡиғаларға нисек кенә тығыҙ бәйләнгән булмаһын, эпоста ул ваҡиғаларҙың бөтә ҡатмарлы бәйләнештәре менән тулы һәм теүәл һөйләнеүен күреп булмай. Уны эҙләргә лә ярамай. Сөнки тарихи ваҡиғаларҙы, тарихи

шəхестəрҙең эшмəкəрлеген халыҡ үҙенең ынтылыштары, үҙенең идеалдары менəн бəйлəй, үҙе аңлағанса баһалай. Һөҙөмтəлə маҡсатҡа ярашлы поэтик традициялар ерлегендə халыҡтың үҙ фантазияһы менəн тулыландырылған, уның тарихҡа үҙ мөнəсəбəтен, үҙ ҡараштарын сағылдырған эпик əҫəр барлыҡҡа килə. Халыҡтың тарихи-милли зауыҡтарына яуап биргəндəре быуындан быуынға тапшырыла килеп, элгəре замандың əҫəрлəндергес бер иҫтəлеге, ата-бабаларҙың рухи ҡомартҡыһы, изге аманаты булып йəшəй.

Эпос үҙ эволюцияһында тарихи ысынбарлыҡҡа яҡынайған һайын, унда мифик заттар, үтə фантастик образдар ғына түгел, боронғо хыялға, мифологик ҡараштарға бəйле мотивтар ҙа кəмей, йə бөтөнлəй юғала. Улар урынын тормошсан ваҡиғалар, кешесел образдар, социаль көрəш мотивтары ала. Фабула йəки сюжет ҡоролошонда иң əһəмиəтле эпизодтар ғына бирелеп, улары ла башлыса тормошсан шарттарҙа күбеһенсə реалистик төҫтəрҙə һүрəтлəнə. Шуға бəйлəнешле рəүештə һуңғы заман ҡобайырҙарында лирик мотивтар, кисерештəр ҙə урын ала. Ҡобайырҙың тарихи йыр һəм бəйет жанрҙары менəн аралашыуы һиҙелə.

Феодаль йəмғиəт үҫешендə, бер яҡтан, синфи айырымлыҡтарҙың көсəйеүе, икенсе яҡтан, ырыуҙарҙы берлəштереү, үҙ аллы халыҡ булып ойошоу тенденцияһы — был ҡатмарлы тарихи үҫеш эпоста шулай уҡ ҡатмарлы тойғо-кисерештəрҙе тыуҙыра. Был, бигерəк тə, Рус дəүлəтенə ҡушылған мəлдə һəм унан һуң ижад ителгəн əҫəрҙəрҙə асыҡ күренə. Əммə шуныһы мөһим: самодержавиеның милли иҙеүенə ҡаршы көрəш Рəсəйҙəн айырылып сығыу идеялары менəн дə, милли сиклəнгəнлек тойғолары менəн дə берекмəй. Киреһенсə, милли һəм социаль азатлыҡ өсөн көрəштə урыҫ һəм башҡа халыҡтар менəн берлəшеү, уртаҡ Ватан Рəсəй яҙмышы хəл ителгəн ауыр йылдарҙа, батша хөкүмəтенəн күргəн кəмһетелеү һəм йəберлəнеүҙəр «онотолоп», урыҫ халҡы менəн бер төптəн изге яуға күтəрелеү, ҡаһарманлыҡ күрһəтеү — йыйып əйткəндə, юғары патриотизм идеялары һəм дуҫлыҡ-туғандашлыҡ тойғолары эпик поэзияның иң сағыу яңы биҙəктəре булып һыҙатлана.

НУР ЗАРИПОВ

## ИҘЕҮКӘЙ МЕНӘН МОРАҘЫМ

### I. Алтын Урҙа башында Туҡтамыш хан ултырғаны, башҡорттарҙың баш эймәй тартышҡаны[1]

Алтын Урҙа башында
Туҡтамыш тигән хан булған,
Ҡул аҫтында күп илде
Ҡолдай итеп биләгән:
Яһаҡ алған малынан,
Ҡолдар алған халҡынан,
Үҙ тигәнсә эш итеп,
Бер хоҙайҙай йәшәгән;
Уралға ла ҡул һуҙып,
Унда халыҡты ҡуҙғаған.
Уралдағы батырҙар:
Ҡыпсаҡ[2], Ҡатай[2], Тамъян[2] —
Урал тауы яғында,
Юрматы[2], Табын[2] тағы ла —
Иҙел, Нөгөш буйында;
Был батырҙарға эйәреп,
Ете ырыуҙан бишеһе
Туҡтамышҡа буйһонмай,
Уға яһаҡ түләмәй,
Халыҡтан ҡолдар алдырмай,
Хандың яуы килгәндә,
Ҡаяларға һарышып,
Ҡара-ҡаршы һуғышып,
Ауыл-ауыл һәр яуҙа,
Йорто-ере үртәлеп,
Ҡатын-ҡыҙы хурланып,

Урал бите, ҡаяһы
Ҡыҙыл ҡанға дымланып,
Батырҙары сергенән
Ҡыҙыл ҡанға йөҙһә лә;
Урал тауҙы уратып,
Хандың яуы ут һалып,
Урал буйын ҡып-ҡыҙыл
Тамуғылай ҡылһа ла;
Күп яуҙағы ҡырғында
Илдең халҡы миктәлеп*,
Ата-әсәһеҙ ҡалышып,
Етем-еҫер тулһа ла;
Аты бөтөп, яу аты
Тай-тулаҡҡа ҡалһа ла;
Биш ырыуҙан биш батыр,
Яраланып ун тапҡыр,
Аттан ҡолап төшһә лә, —
Ян керешен бушатмай,
Ҡулдан булат ташлатмай,
Һаман ҡаршы һуғышҡан.

## II. Шәғәленең хан фарманын килтергәне, Һабрау ҡарттың ил тарихын һөйләгәне; ике һунарсы, биш батырҙың Урҙаға киткәне

Урҙа ханға баш эйгән,
Үҙенә ҙур бейлек алған,
Ирәндек буйы яланды
Үҙенә йәйләү һанаған,
Урап аҡҡан Яйыҡты
Ырыуы ман* һыулаған,
Бар ырыуға баш булған,
Биш ырыуҙан үс алған,
Ялан ерҙең ҙур бейе —
Шәғәле тигән аҡһаҡал
Биш ырыуға килгән, ти,
Хандан илсе булған, ти[3];
Биш ырыуҙың батырын
Барын бергә йыйған, ти;
Хандың фарманын һөйләп,
Илгә алап* һалған, ти:

— «Биш ырыуҙан биш батыр,
Һарайға килеп, янымда
Кәңәш итер бей булһын;
Ике данлы һунарсы,

Һарайға килеп ҡош һайлап,
Һунарымда ҡош сөйһөн;
Бөтә Урал-Алтайҙа
Данлы йырсы, ҡарт сәсән —
Һабрау тигән уҙаман,
Фарманыма буйһоноп,
Урҙам маҡтап йырлаһын»
Тигән һүҙен ҙур хандың
Һеҙгә һөйләп бирергә
Илсе булып килдем мин, —
Тиеп һүҙен бөткән һуң,
Был биш ырыу һөйләшкән,
Уртаға һалып уйлашҡан.
«Күп яу менән миктәлдек,
Килешһәк тә, ярай шул»
Тигән уйҙы белдергән
Батырҙары ла булған.

Биш ырыуҙың иң ҡарты,
Һабрау тигән дан йырсы
Тарҡалышты күргән һуң,
Таянып имән таяҡҡа,
Биленә ҡуйып бер ҡулын,
Оран һалып барына,
Бал ҡорто инәһендәй,
Уртаға килеп сыҡҡан, ти.
Башын баҫып, уйланып,
Батырҙарҙың йөҙөнә
Күҙ йүгертеп ҡаранып,
Кәңәш биргәндәй итеп,
Ошо һүҙен әйткән, ти.

Һабрау:

— Йөҙҙән ашҡан бер ҡарттың
Аяҡ баҫҡанын күргәс,
Бер һүҙ әйтер был ҡарт тип,
Шәмдәй булып тыңлағас,
Булмаһа, бер һүҙ әйтәйем:
Миңә ҡорҙаш булырҙай
Арағыҙҙа уҙаман
Юғын барың беләһеҙ.
Мин күргәнде күрмәгән,
Ишетеп тә белмәгән,
Минең йөрөгән юлымда
Берегеҙ аяҡ баҫмаған.

Борон, борон, борондан,
Мин тыумаҫтан электән,
Олатайға, әсәйгә

Төйәк булған Уралтау!
Аҡһаҡалы, бейҙәре,
Уға эйәреп ырыуы,
Һырҙай ҡанға туҙышып,
Маңлайынан туп үтеп,
Күкрәгенән уҡ үтеп,
Яулап алған Уралтау!
Ай Уралтау, Уралтау,
Ҡошо-ҡорто, йәнлектән,
Буйындағы иленән
Һылыу ҡыҙҙай маҡталып,
Ата-әсәләй һөйөлгән
Иң данлыҡлы Уралтау!
Ай Уралтау, Уралтау,
Ҡуйынын асҡан әсәләй,
Ҡаяһында батырын
Йәшереп һаҡлар тау ине;
Һаба һауыт тултырып,
Аҙаматтар йыйылып,
Ҡыҙ-ҡырҡындар ҡотороп
Башында уйнар тау ине;
Биш ырыуҙың бейҙәре
Үҙенә туплап ырыуын,
Батырҙары яу сабып,
Күп һаҡланған[4] тау ине;
Үҙен һаҡлап яу асҡан,
Сергеһенән ҡан кискән
Батырҙарың һөйәген
Күкрәгендә йыйған тау ине;
Батырын атта уйнатып,
Уяһында үҫкән ҡурайын
Егетенән уйнатып,
Ҡырғын күргән иленең
Моңон-зарын һыҡтатып,
Һылыуынан йырлатып,
Төйәк булған тау ине!

Бына шуның барыһын
Күреп уҙған ҡартыңмын.
Инде һеҙгә ни тием.
Ялтыраған ҡылысын
Батырҙары ҡыныға
Тығыр көнөн күргән һуң?
Яусыл булған ҙур илем,
Ҡул ҡаушырып, буй биреп,
Баш эйергә торған һуң?
Инде маҡтап нишләйем,
Батыры аттан төшкән һуң?
Биш ырыуҙан биш батыр

Ханға китәм тигән һуң?
Ҡәбергә баҫҡан аяғым,
Шалтырап торған һөйәгем,
Бәбәге кибеп секерәйгән,
Тонйораған күҙҙәрем,
Әсәйемдән ҡуш тыуған
Һис ҡартаймаҫ йөрәгем,
Ҡылды ҡырҡҡа ярырҙай,
Яуҙа һөңгө булырҙай,
Һабрау тиеп дан алып,
Йөҙ йыл буйы шаулаған,
Тау-таш ярған йырҙарым
Илем әйткән теләккә
Буйын бирмәй нишләһен?!

Атылған ҡоштай һиҫкәнгән,
Ҡүптән килгән уйым бар.
Шул уйымдың эсендә
Һеҙгә сисер төйөн бар:
Ханға ҡулың биргән һуң,
Ханға түшәк йәйерһең;
Батыр аттан төшкән һуң,
Ханға башың эйерһең;
Ҡылысың ҡынға тыҡҡан һуң,
Хандың ҡоло булырһың.

Батырҙары киткән һуң,
Инәһе үлгән бал ҡорттай,
Илең ҡалыр сыр-сыуға;
Бөтә тапҡан табышың
Һоро ҡорттай талаусы
Бирәүҙе бей танырһың.
Ата-әсәңде һүктерер ул,
Башҡа хандан һуктырыр,
Ирегенән ирекһеҙ
Ҡол булырға эш ҡалыр, —
Шунан бүтән ни тием?

Яйыҡ китһә, юл китер;
Биш ырыуҙы һуғарған
Иҙел китһә, ил китер.
Йәйәү-ялпылы килеп,
Уралыңа ҡул һалыр,
Илдең затһыҙ бирәүһен
Ил өҫтөнә бей ҡылыр.
Яман, затһыҙ бей булып,
Бөтә юлға саң һалыр;
Ханға менәр ат кәрәк, тип
Һайлап, яҡшы ат алыр;

Ҡоҙа-аҙна* булам, тип,
Ун бармағы ҡамыштай,
Утыҙ теше көмөштәй,
Бер бите айҙай балҡыған,
Бер бите көндәй яҡтырған,
Томбойоктай күкрәге
Күпереп үҫеп ҡалҡыған
Һылыуың һайлап тағы алыр.

Сырҡырашып түлләгән
Йылҡыһы күп Уралтау;
Мөңөр-мөңөр мөңөрәгән
Һыйыры күп Уралтау;
Ҡәкре ҡойроҡ, йылтын күҙ
Бүреһе күп Уралтау;
Ҡыҫҡа ҡойроҡ, шеш ҡолаҡ
Ҡуяны күп Уралтау;
Майлап ҡуйған ҡайыштай
Йыланы күп Уралтау;
Алпан-толпан атлаған
Айыуы күп Уралтау;
Ҡыҙ балалай биҙәнгән
Төлкөһө күп Уралтау;
Ояларға урыны мул
Ҡоштары күп Уралтау;
Балығы ялтлап уйнаған
Иҙеле бар Уралтау;
Сәс бауҙары сылтырап,
Ҡарсығалай кәпәйеп,
Һыуға барған һылыуға
Шишмәһе күп Уралтау;
Билге типкән батырға
Ат уйнатып сабырға
Типһәне күп Уралтау, —
Бары ханға ҡол булыр!

Һабрау һүҙен ишеткәс, халыҡта тарҡалыш тыуған. Шулай ҙа биш батыр үҙ-араһы һөйләшкән. Хан ҡолдар алмаҫҡа булғас, «Ике һунарсы, бер йырсы, ырыу башы биш батыр миңә килеп бей булһын!» тигән фарманын ҡулай күреп, бишеһе ханға барырға булған.

Биш батыры бей булып,
Ҡотло, Иҫән һунарсы —
Бары бергә ҡушылып,
Етәүһе киткән Урҙаға.
Ҡотло улы Иҙеүкәй
Атаһына эйәрмәй,
Ҡылысын ҡынға тыҡмай,
Менгән атынан төшмәй,

Хан ебәргән фарманға
Яңғыҙ батыр баш эймәй,
Яуҙан ҡулын һелтәмәй,
Тороп ҡалған Уралда.

## III. Иҙеүкәйҙең, кәңәш һорап, Һабрау ҡартҡа килгәне; Һабрау ҡарттың һынап белгәне

Көндө һанап ай үткән,
Батырҙары киткәнгә
Бер ай түгел, йыл еткән.
Илдән яһаҡ йыйырға,
Бер-бер артлы һарайҙан
Хан фарманы Уралға
Килеп илде шаулатҡан.
Иҙеүкәй, йәш булһа ла,
Ҡул ҡаушырып тормаған.
Бейҙәр яһаҡ йыйғанда,
Ил шаулаған сағында,
Һабрау ҡартҡа барған, ти.
Үҙ уйыны Һабрауға
Теҙеп һөйләп биргән, ти.

Һабрау ҡарт, йәш Иҙеүкәйҙең ҡыйыулығын, ил өсөн янып йөрөүен күреп, байтаҡ уйланып торған да:

«Һөйләй-һөйләй сәсән булырһың, йөрөй-йөрөй күсәм* булырһың» тигән халыҡ һүҙен әйтеп, күһәбә* китмәһен был тип, һиҙгерлеген һынап ҡарау өсөн, Иҙеүкәйгә ошо йомаҡты әйткән, ти:

— Тимер, ҡорос, булатты
Ҡамыр иткән бар микән?
Оҙон, оҙон, оҙон юл
Осона сыҡҡан бар микән?
Арҡауылдың утынан*
Ат утлатҡан бар микән?
Тибенгеһен тирләтеп,
Төндә юртҡан бар микән?
Ҡонаҡ ҡуйҙың ҡойроғон
Яңғыҙ ейгән* бар микән?
Иҙел менән Яйыҡтың
Билен быуған бар микән?
Ҡош тырнағы теймәгән,
Күк ыласын типмәгән
Ҡош та бүтән бар микән?
Ер ҡуйынына инмәгән,
Абау, бауырым, тимәгән,
Бауыры бөтөн бар микән?

Һабрау ҡарттың йомағын ишеткәс, Иҙеүкәй артыҡ уйланып тормаған, шунда уҡ йомаҡтың йәбешкеһен әйтеп биргән:

— Тимер, ҡорос, булатты
Ҡамыр иткән — оҫталар.
Оҙон, оҙон, оҙон юл
Осона сыҡҡан — сауҙагәр.
Арҡауылдың утынан
Ат утлатҡан* — каруансы.
Тибенгеһен тирләтеп,
Төндә юртҡан — юлаусы.
Ҡонан ҡуйҙың ҡойроғон
Яңғыҙ өйгән — һунарсы.
Иҙел менән Яйыҡтың
Билен быуған — балыҡсы.
Ҡош тырнағы теймәгән,
Ҡүк ыласын типмәгән
Ҡош та булыр — торомтай*.
Ер ҡуйынына инмәгән,
Абау, бауырым, тимәгән,
Бауыры бөтөн — бер хоҙай[5].

Был яуапты ишеткәс,
Иҙеүкәйҙең Һабрау
Арҡаһынан һөйгән, ти;
Абау* йөҙөн биҙәрләп,
Үҙ шайҡанын әйткән, ти:
— Ҡуҙағай* егет ҡамҡа тун
Һомғол ул тип һаналмаҫ.
Батырмын тип ат менгән,
Хан һарайы түрендә
Түшәк һайлап һауырына*,
Һәрпәндәшеп йөрөгән,
Тикһеҙ* ханды байманға*
Сәрхәттә ятҡан ерендә,
Илен һалған сурлыҡҡа*
Бейҙәр ҙә биҙәл* булалмаҫ.

Ҡырағa* хандың мәҙеһен*
Иленә монар яһаған —
Иленә мәрҙәҫ* булалмаҫ;
Яу килтәһе* ҡашкаға*
Йәштә ҡорҙаш булһа ла,
Эштә ҡораҡташ* булалмаҫ.

Йүгерек тоҡомо — айғырҙан,
Юрға тоҡомо — бейәнән;
Батырға күлдәк тегерҙәй
Һылыу тыуыр инәнән;

Бүре-айыу һуғырҙай
Батыр тыуыр атанан.

Батыры яуға китергә
Ат эйәрләп торғанда,
Ай-бай һалып илаған
Һылыу һомғол булмаç ул,
Бүре, айыуҙы һуҡһа ла,
Ҡорҙашҡа шыбаҡ* булһа ла, —
Илде туплап, дошманға
Сағыралай* булмаһа,
Иленә таяныс булырҙай,
Ҡашҡа батыр булмаç ул.
[Инде, Иҙеүкәй, һиңә әйтәм,
Һүҙен тыңла ҡартыңдың,
Донъя күргән, ил гиҙгән,
Күп йәшәгән, ир белгән
Ҡартыңмын, ау, ҡартыңмын.][6]
Ҡуш теҙгенгә ултыртып,
Ҡан ерән ат менгәнһең;
Үмәр батыр[7] булатын,
Күҙ йәшенә тапланған
Ҡая битенә ҡайрап,
Ҡулыңа тотоп килгәнһең.
Иҙел, Яйыҡ, Нөгөштөң
Урап әйләп йәйләүен.

Арғыл, арғыл Уралтау
Аҙыра* булғас Урҙаға,
Уралда үçеп түш киргән,
Тернәкселдәр көн күргән,
Биленә һуккан йыландай.
Туп-туп булып йыйылған,
«Йә, уған»* тип уҡталып,
Байманға тип яу сабып,
Ҡыран булып миктәгән,
Ҡалғыған ил күрерһең.
Айһыҙ ҡара төндәрҙә
Ырашҡыға күшегеп,
Талығып, өшөп йөрөгәндә,
Ҡаям түшәк тиерҙәй,
Ҡыраҡы* ирҙе һайларһың.
Урал армыт, типһәндә
Таша* булған сауылдай,
Ҡашҡа булып илендә,
Үмәр тигән ете яттың,
Унан тыуып, ил гиҙгән,
Туғыҙ йәштә әүлиә
Ғәзиз баба улының

Иң кинйәһе Төкләҫтең[8]
Төйәләҫ, Һаҡмар, Яйыҡта
Ҡеҙе, келәгә* бей булған;
Атаңа ҡан-яу асып,
Атаң бейлеген тарҡаған,
Менер атын тай ҡылып,
Йортон-ерен юҡ ҡылып,
Ҡыу баш ҡолдай ҡалдырып,
Әсәңдән сәмсә* систереп,
Ҡуңғылдаҡ ҡыптыр кейҙергән;
Йәш булһаң да яуында,
Үмәр ҡашҡа булатын
Муйыра* тартып һин алғас,
Атаһы ҡәберенән ҡәҙер төн*
Иҙелгә ҡарай ут осҡас,
Байман китәр илдән тип,
Иҙел буйын яғалап,
Һәләүек, Нөгөш араһын
Үҙенә аймаҡ яһаған
Тора бейҙе[9] күрерһең,
Ҡул тамырын тартырһың;
Хандың, Уралға килеп,
Яйыҡты юл иткәнгә,
Иҙел, Үҙәнде алып,
Яйрап ҡуныш иткәнгә,
Көлө уртаҡ бисәләй,
Ханды көндәш күрерме?
Булат ҡылысың танып
Күмһемәһә күкрәге,
Таһкау* яһап, һүҙ асып,
Соғол менән һөйләрһең.

Һабрау һүҙен ишеткәс,
Шул төн Иҙеүкәй ат менеп,
Ысын яһау кейенеп,
Ун ҡорҙашын юлдашҡа
Апкиткән, ти, юл башлап.

## IV. Иҙеүкәйҙең Тора бейгә килгәне, ике арала бәхәс булғаны

Ай, көн йөрөп, ил гиҙеп,
Илде күреп, ир һайлап;
Шәғәле бейгә яу асып,
Күп йыл тынмай һуғышып,
Аҙаҡ сиктә миктәгән
Яйыҡ батырҙы алып;

Дəмми бейҙəн[10] туҡмалған,
Ҡолаҡ, танау мөнтəлгəн
Ҡелəйле[11] батырҙы эйəртеп,
Иҙеүкəй килгəн Тораға.

Иҙеүкəй килгəс Тораға,
Яҡын бармай ҡураға,
Аҡ тирмəгə яҡынлап,
Тыштан сəлəм биргəн, ти.
Тора бейҙең бер ҡоло
Шул саҡ сығып тирмəнəн,
Ҡунаҡ итеп олпатлап,
Ат башынан алған, ти.
Иҙеү аттан төшмəгəн,
Ҡулындағы теҙгенен
Бей ҡолона бирмəгəн.
«Һыу башынан ат менеп,
Илдəн килгəн илсемен;
Бейҙең ажарын күрмəйсе,
Аттан төшмəҫ кешемен!» —
Тигəс, ҡол тирмəнəн
Бейҙе алып сыҡҡан, ти.
Иҙеү аттан төшкəн, ти,
Бейҙең ҡулын тотҡан, ти;
Үмəр баба ҡылысын
Иҙеүкəйҙə күргəс, бей
Аптырауға ҡалған, ти.

Иҙеүкəй:

— Көн менəн төн һанаған
Айы үтеп, йыл тулған;
Йыл, миҙгелгə бүленеп,
Ир быуынын һанаған.
Күп быуындың эсендə
Кем ир булып үҫмəгəн?!

Ат уйнатып Шиханда,
Мал түллəтеп Нарыҫта,
Толпар менгəн Ҡотлоно[12],
Тай-тулаҡ ат мендереп,
Аймағын ҡорҙай туҙҙырып,
Йортон-ерен яндырып,
Ҡамҡа* тунын һалдырып,
Ҡырҡ ямау ҡыптыр тун
Иңбашына һалдырып,
Ҡая эсендə йəнлеккə
Байғош һунарсы ҡылып,
Аҙаҡ сиктə Урҙаға
Ҡолға биргəн[13] быуын был.

Күп ҡандарҙы кистергән,
Күп һыуҙарҙы эстергән,
Күп йәштәрҙе түктергән,
Тернәкселде бейҙәрҙән
Малын муйырып ҡоллатҡан,
Бик борондан аҙамай
Уҙа килгән быуын был.
Быуын-быуын туҡрамай
Уҙа бара, йыл һанап,
Һәр быуындың эсендә
Бейе тыуа алмашлап;
Сабары йөрөй алдында
Юлына маяҡ ҡаҙап.

Бына, ҙур бей, мин һиңә
Туры килдем шуны уйлап:
Көн бөтмәһә, ай бөтмәҫ,
Ай бөтмәһә, йыл бөтмәҫ.
Йыллап быуын уҙыр ул,
Уға кеҙәү табылмаҫ.
Илдең шайҡан шаршыһы
Аҡҡан ҡандар күпсешеп,
Баһат* яһап бейҙәргә,
Маяҡтарын муртайтып,
Бейен барын ҡалғытып,
Бер саҡ ҡыраң ҡылмаҫмы?

Тора бей, үҙенә аҡыл бирергә теләгән йәш Иҙеүкәйҙе һанға һуҡмай, бейлегенә маһайып, былай тигән:

— Сауылдан ҡалған төпһәнән
Үрсеп сыҡҡан ҡыуғындай,
Байлыҡ менән бейлек тә
Атаһынан балаға
Ҡала килә электән.

Тоҡомо бейҙән булмаһа,
Атаһынан ҡалған һуң,
Буйһоноrға ант иткән
Иленән уға ҡарата
Мираҫ бейлек ҡалмаһа, —
Ҡылды ҡырҡҡа ярырҙай
Телле мәрҙәҫ булһа ла,
Ауыҙы ман ҡош тотор
Алғыр ҡашҡа булһа ла,
Тау-таш ауһа өҫтөнә,
Ат башындай йөрәкле,
Тимер, ҡорос-булатты
Ҡамыр итер beләкле

Ҡашҡа батыр булһа ла;
Ел моронлап, емһенеп,
Ҡан көҫәгән бүреләй,
Булат тотоп, яу асып,
Сергеһенән ҡан кисеп,
Үҙе бейлек тапһа ла;
Быуын-быуын үткәндең
Яҙмыш уҙып, ҡан кисеп,
Үҙе бейлек тапҡандың
Йәлсеп аймаҡ ҡорғанын,
Илдә ырыҫ йәйгәнен
Ишетеп тә, күреп тә
Белгәнем юҡ донъяла.

Әле Иҙел, Нөгөштә
Яйыҡ, Эйек һыулаған,
Бөтә Урал буйлаған,
Тимер, ҡорос-булатты
Ҡамыр итер бар микән?
Илде ҡулға алырға
Төн йоҡламай уйланып,
Аттан төшмәй төн буйы,
Тибенгеһен тирләтеп,
Арҡа-ялан утынан
Ут утлатҡан бар микән?
Йөрәге ташып асыуға,
Сая алғыр бүреләй,
Аҙна йөрөп, аш еймәй,
Бер уҡталып ейгәндә,
Яңғыҙ үҙе бер ҡуйҙы
Ейеп бөтөр мыҡты ир
Был аймаҡта бар микән?

Батырмын, тип ат менгән
Сығыр юлын тапмаһа,
Яйыҡ менән Иҙелде
Билен быуып кисерлек
Илдә батыр бар микән?

Ҡош тырнағын тейҙермәҫ,
Күк ыласын типтермәҫ
Йылғыр ҡоштай, аймаҡта
Ер ҡуйынына инеүҙән
Һис бауырын һыҙлатмаҫ
Берәй ҡашҡа бар микән?

Быуын-быуын буйына
Хандан ханға йөрөгән,
Оҙон-оҙон юлдарҙың

Осона сығып етерлек,
Уралда ат уйнатып,
Атын һынап менерлек
Илдә батыр бар микән?

Башы һыйған юлаҡтан
Үтә сыҡҡан йәтсәләй,
Ил күңеленә үтерҙәй,
Ҡыртым* менән ил туплап,
Илде шаршы итерҙәй,
Ҡыраң яһап, ҡалғытып,
Данлы бейҙе ҡолатыр
Берәй ҡашҡа бар микән?
— Сауылдан ҡалған төпһәнән
Үрсеп сыҡҡан ҡыуғының,
Тал ҡаплаһа, үсмәүен;
Урман ҡырыҡмай бей булған,
Йәнлек тотмай тун кейгән,
Барыр юлын белмәгән,
Үҙ ҡулы ман ат башын
Бер сағын да тотмаған —
Түҙгәк менән төпһәне
Айыра таный белерме?

Атаһынан мираҫҡа
Бейлек алған мырҙаның,
Үҙе ултырған иленән
Үҙенә башҡа тағы ла
Ил алдында һөйләгән
Ил теленән айырым
Бер һалмалай ит булһа,
Тимер, ҡорос-булатты
Ҡулында ҡамыр итерме?

Борон-борон, борондан
Ил өҫтөндә ике юл:
Береһе уның — яйырап,
Йәйләү-йәйләү аралап,
Майҡы бейҙең[14] бүләге
Алтын сайғар — табаҡҡа
Илдән айырым аш һалып,
Һәрпәндәгән һөмөрөн
Ҡурайсынан уйнатып,
Ҡолас ташлап елгән юл;
Иле сығып һунарға,
Осҡан ҡоштоң күсенә
Ыласынын сөйгәндә,
Мин бей тигән бей мырҙа:
«Майҡы бейҙән бирелгән

Ҡошом минең ҡарағош», —
Тиеп, яңғыҙ бер үҙе
Ҡамҡа тунын саңлатып,
Һайҙаҡ атын тирләтеп,
Ҡара ҡошон сөйгән юл.

Береһе унның — ил менән
Бер ҡаҙанға аш һалып,
Бергә табаҡташ булып,
Бер ҡуй түгел, бишеһен
Бер ашауҙа бөтөрөп,
Илдең үткән шайҡанын
Уйнай-уйнай ҡурайҙа
Ҡулын болғап үткән юл;
Иҙел, Яйыҡ, Нөгөштән,
Аҡһа, көслө ағырҙай,
Ташһа, тау-таш ярырҙай,
Тиртеп ятҡан көрөндө,
Юлаҡ яһап йәтсәләй,
Олғаштырып йылғаға,
Ҡымтып ятҡан ярынан
Тулҡындырып, таштырып,
Бөтә ерҙе баҫтырып,
Ҡан таптарын йыуырға
Ҡуш беләген һыҙғанып,
Ирҙәр буйлап йөргән юл;
Илдә һаҡлыҡ ыласынды
Ҡарағошҡа сөйөргә,
Аттан төшмәй төн буйы
Тибенгеһен тирләтеп,
Арҡа-ялан утынан
Ат утлатып елгән юл.

Ошо һуңғы юл буйлап
Еләсүке елгәндең
Бына береһе мин булам.
Һинә аҙаҡ һүҙемде
Әйтә килгән ир булам.
Тамыры ҡалған урында
Сауыл үҫмәҫ тейһеңме?
Ыласын үҫкән Уралда
Батыр үҫмәҫ тейһеңме?

Тора бейҙә ҡан ҡойған
Үмәр ҡашҡа булаты,
Ҡотло улы Иҙеүкәйҙең
Ҡулында уйнап, дошмандың
Ҡанына йөҙмәҫ тейһеңме?

Беймен тигән бейҙәрҙең
Йәй ҡояшы — сыуаҡҡа,
Йәйе ҡышҡа әйләнеп,
Ыжғырып буран уйнаған
Көнө килмәҫ тейһеңме?

Ат тирләтеп килгән һуң,
Өйөнә килеп ингән һуң,
Ҡулымдағы булаттан
Күҙең алмай торған һуң,
Әйтә торған һүҙемде
Әйтеп бөтөп үтәйем:

«Ҡуян» йылын «лыу» менән[15]
Алыштырып йыл башын,
«Эт сыуағын» китәреп,
«Әбей сыуағын» сығарып,
Урал битен йылытып,
Атанан мираҫ бей алған
Ирҙең барын ҡыҙҙырып,
Түш йәйҙереп йөрөтмәй,
Ҡая таштар эсенә
Ярғанаттай һырғытып,
«Лыу» йылының таңында
Күтәрелгән сулпандай,
Атын менеп килгән ир —
Мин булырмын — Иҙеүкәй!

Тора бей:

Иҙеүкәй тигән атыңды
Ишетә беләм ҡолаҡтан.
Ат тирләтеп елгәнһең,
Миңә төбәп килгәнһең,
Ырыуыңдан бер илсе,
Ил һүҙене әйтергә
Мәрәй итеп һарайым,
Тоҫҡап тура килгәнһең.
Әйт һүҙеңде, тыңлайым,
Хәҙер ҡулдан килмәһә,
Кәңәш-төңәш итешеп,
Әйтер һүҙем уйлайым[16].

Иҙеүкәй:

— Атамдан алған мал өсөн
Барымта юллап килмәнем;
Һинән ырыуым һаҡларға,
Яуға сығып яҡларға,
Һаҙаҡ тотор ир һорап,
Тағы һиңә килмәнем!

Илем яуын аҫканда,
Дошман көсөн алалмай,
Илеңә ҡарай буҫканда*,
Бейлегеңә маһайып,
Яуыма кәртә булмаҫһың;
Асыҡ йөҙлө илеңдә
Үҙ бауырым тиешеп,
Йылы ҡуйын аҫкандың,
Ҡыҙыл ҡанға күшеккән
Батырымды ҡосҡандың
Ҡуйыныны ҡымтытып,
Һалҡын ҡаршы алмаҫһың;
Көнө-төнө һуғышып,
Ҡаны кипкән батырға
Йылы һыуын биргәндең
Бейлегең мән йөҙөнә
Яман ҡара яҡмаҫһың;
«Уралым ул, бейем ул,
Атам, әсәм, илем ул», —
Тип талпынып килгәнгә,
Мал һуйып, ҡаҙан аҫып,
Көләс йөҙлө торғандың,
Ямғыр теләү уйы ман
Ҡаҙандарын һыуға атып[17],
Йылы ашын түкмәҫһең!
Урҙа хандан Уралға
Килеп аяҡ баҫыуға,
Йөрәгеңдә һаҡлаған
Уйың миңә әйтерһең!
Илде ханға һатыусы,
Ханды байман итеүсе
Яйыҡтағы Шәғәле,
Дәмми бей мән Ыршаҡҡа
Булат ҡылысым тоҫкаһам:
Тешең ҡыҫып ятырһың!

Иҙеүкәйҙең был һүҙҙәрен ишеткәс, Тора бей нишләргә белмәй аптырап ҡалған. Шунан иҫен йыя һалып, уның әйткәнен үтәргә өҫтөнә алған. Ат-хат еткән ерҙән ҡунаҡтар саҡырып, аймағын йыйып, мал һуйып, ҙур туй яһап, Иҙеүкәйҙе ҡунаҡ иткән, бөтәһе алдында һүҙендә торорға ант иткән, ти[18].

Бер нисә көн ҡунаҡ булғас, Иҙеүкәй батырҙарын эйәртеп ҡайтып киткән. Юлда бер аҡланда туктап, ерле еренә ҡайтып халыҡты тупларға, Шәғәле, Дәмми, Ыршаҡ бейҙәргә яу асырға тиеп, кәңәш төйнәп, көн билдәләп, һәр ҡайһыһы үҙ йортона таралған, ти[19].

## V. Иҙеүкәйҙең йәнә Һабрау ҡартҡа килгәне; Һабрауҙың ил зарын һөйләгәне; Иҙеүкәйҙең Дәмми бейҙе ҡыйратҡаны, Ыршаҡ бейҙең Иҙеүкәйгә баш һалғаны[20]

Иҙеүкәй йөрөп ҡайтҡан һуң,
Илдең серен белгән һуң,
Батырҙарҙы күргән һуң,
Һабрау ҡарттың янына
Барып уйын һөйләгән.
Һабрау уны хуп күргән,
Яу тупларға бергәләп,
Тота һалып ат менгән.
Оран һалып Уралға,
Халайыҡты күп йыйған.
Ҡая ташына менеп,
Ҡилгән халыҡҡа ҡарап,
Һабрау һүҙен башлаған:

— Ай Уралтау, Уралтау
Ҡемгә ҡуныш булманы,
Даны киткән һылыуҙай,
Ҡемдән яусы килмәне,
Иҙеленән һыу эскән,
Ат уйнатып буйында,
Һылыу ҡыҙыны ҡосҡан
Ниндәй батыр булманы, —
Барын күргән Уралтау!
Ай Уралтау, Уралтау,
Балаларын һайратып,
Ҡошо ла һөйгән Уралтау;
Ҡөсөктәрен сеңләтеп,
Йәнлеге һөйгән Уралтау;
Тәңкәләй япраҡ үҫтереп,
Ағасы һөйгән Уралтау!
Түркен киткән һыйырҙың
Ҡуңыр буға быҙауы[21]
Ҡүҙ йәштәрен ағыҙып,
Үлән, ағас көйҙөрөп,
Һис ерекмәҫ юл һалып,
«Уралым» тип ҡайтҡан тау!
Барына төйәк булған тау,
Барына әсә булған тау,
Барына ата булған тау!

Уралда тыуған баланың
Теле сыға башлағас,
«Әсә» тигән һүҙҙән һуң,

Икенсеһе — «Уралтау»!
Утыҙ теше сайраған,
Бар һөйәге ҡыйраған,
Ите бөтөп, бар тәне
Тарамышҡа әйләнгән,
Йөҙҙән артыҡ йыл йәшәп,
Уралым тип көйләгән;
Ата-әсәһе үлгәндә
Иман теләп алланан,
Ҡанлы йәшен ҡоймаған
Һабрау ҡарт та тыуған тау,
Һабрау ҡарт та һөйгән тау!

Ай Уралтау, Уралтау,
Урал тигән данлы тау,
Күп ырыуҙы ыҙғытып,
Яу астырған шанлы тау!
Йылына ике түлләгән,
Аҡкоштай һылыу аҡ булып,
Йөнөнән өй көпләгән,
Тиреһенән тун теккән,
Табын, табын туйында,
Ҡунағындың һыйында,
Тәкәләрен ит иткән
Һарығы күп Уралтау!

Бере мән бере йоп булып,
Күкрәгене һыҡтатып,
Сәскә үбеп, бал йыйған,
Илен балға туйҙырған
Бал ҡорто күп Уралтау!

Артынан һуҡмаҡ һыҙҙырмаç,
Алдынан кейек уҙҙырмаç,
Ҡырпыу тояҡ ҡоралайға
Ҡая үрсетеп, маһайтып,
Йәш балалай уйнатып,
Төйәк булған Уралтау!

Яҙҙың һөйөнөс ораны —
Ҡар һыуынан туйынған
Һары күҙәнәк, күк ҡырпыу,
Умырзая сәскәһе,
Ҡыҙарып сыҡкан ҡояштың
Йылыһына ҡотайған
Япрағы күп Уралтау!
Түл йәйергә талпынып,
Осоп килгән ҡоштарға
Тирә-яғы тәңкәләй

Ҡырсын менән биҙәлгән,
Һаҙмыттарын һылыулап,
Екәне, ҡыуы теҙелгән,
Мөлдөрәп торған алдырҙай,
Күлдәре күп Уралтау!

Илде туфандай ҡаплаған
Дейеү пәрейҙе үрсетеп,
Ерҙең сәскә, ағасын,
Типһән, ҡая буйҙарын,
Һыу аҫтында тынсытып,
Зар илатҡан Шүлгәнгә,
Аҡбуҙ толпарын[22] менеп,
Диңгеҙ йөҙөп, яу асып,
Данлы Урал батырҙың[23]
Буйлап килгән һуҡмағы —
Беҙҙең данлы Уралтау!
Ете ырыуҙың[24] барына
Төйәк булған шанлы тау!

Иҙел, Нөгөш, Яйыҡты,
Үҙәк, Эйек, Ҡаҫмартты,
Алты имсәкле еләндәй, —
Барын берҙәй ағыҙып,
Балаһын күреп эйгәндәй,
Әсәләй һуғарып ил иткән,
Барына әсә булған тау!
Урал — илгә ата ул,
Урал — илгә әсә ул,
Уралға тел тейҙергән —
Ата-әсәһен көйҙөргән
Тыума бала, хәжә* ул.

Атаһын ата тимәгән
Илгә батыр булырмы?
Әсәһен әсә тимәгән
Илгә дана булырмы?
Ата ҡәҙерен белмәгән
Илдең ҡонон белерме?
Әсә ҡәҙерен белмәгән
Батырға ата булырмы?
Илен ҡан-яу баҫҡанда,
Атаһыҙ үҫкән уҡ юнмаҫ,
Иле яуға киткәндә
Әсәһеҙ үҫкән йөй текмәҫ.

Ай Уралтау, Уралтау,
Үткән көнөң уйлаһам,
Батырҙарың уҡталып,

Ҡорт илендәй тупланып.
Күрәм һаҡлап торғанын.
Ошо көндә күҙ һалһам, —
Эйәһе үлгән йорт һымаҡ;
Ҡылыс, һаҙаҡ тоторҙай
Батыр бөткән ил һымаҡ;
Тимә бере яусылап,
Ирһеҙ ҡалған ҡатындың
Ишеге асыҡ өй һымаҡ!

Борон үткән ҡан-яуҙың
Ҡаны тамып миңләнгән
Тупрағынан яралған,
Уралына һыҡтанған
Бер батыры юҡмы ни?
Дейеүгә яу асҡанда,
Бер үҙе биш күренгән,
Алдына килгән дошмандың
Һанын һанап тормаған,
Тыуға сөйгән ҡыйғырҙай
Ас бүреләй уҡталып,
Яуын ҡырған йотоноп,
Урал батырҙай ир булып
Тыуған батыр юҡмы ни?

Һөрән һалып яу асҡан,
Ҡылды ҡырҡҡа ярырҙай
Теле майҙай иреткән,
Бөтә эштә сер тотҡан,
Уйлағанда таш йотҡан,
Ата ҡонон юллаған,
Ил намыҫын һаҡлаған,
Уралдан буҫҡан дейеүҙең
Гөбөрлө ҡылып батшаһын,
Шәрә һөлөк яһап дейеүен,
Бөтә Уралды ҡотҡарған
Сура батыр улындай
Бер етем ир[25] юҡмы ни?

Һабрау ҡарттың әрнеүле һүҙҙәрен ишеткәс, бөтә халыҡ уның алдына килеп, Урал ҡаяһын үбеп, илде бирмәй һаҡларға, ил һатыусы бейҙәрҙе илдән ҡыуырға ант иткән. Шул саҡ Иҙеүкәй, аранан сығып, яуға барыр батырҙың бөтәһенә ҡарата үҙенең ҡырҡ һүҙен әйткән:

— Яуға барған батырҙың
Ҡәпәсе берлек — тиң түгел[26],
Яу серене тотмаҫтай
Ауыҙы асыҡ — ир түгел;

Яу күсене күргәндә,
Бәпкә йөнөн ҡалҡытып,
Еләҫ иҫкән елдә лә
Шаулап торған уҫаҡтай,
Йөрәктәре ҡалтырап,
Яуҙан буҫыр ир булһа, —
Яуға барыр ир түгел;
Типһә, тимер өҙөрҙәй,
Сал бөркөттәй беләкле,
Һис бер шауҙан өркмәҫтәй
Булмаһа ҡуш йөрәкле, —
Яуҙа батыр ир түгел.
Иҙеүкәйҙе тыңлағас,
Бары атҡа менгән, ти:
Сыбар йөрәк ирҙәрҙең
Берен ҡуймай Иҙеүкәй
Аранан сүпләп түккән, ти.

Урал яғалай иленән —
Иҙел, Яйыҡ буйынан —
Яйыҡ, Ҡеләйле батырҙар
Билге төйгән урынға,
Яу эйәртеп бары ла,
Бере ҡалмай килгән, ти.
Яуға сабыр юлдарҙы
Иҙеү шунда билдәләп:
Ҡеләйлене мең башы*,
Туҡһан, Сәфәр, Аҙнайҙы,
Ҡаҫҡын, Бикҡол, Ҡаныҡайҙы[27]
Мең эсендә йөҙ башы*
Итеп атҡа мендергән;
Дәмми бейҙе ҡыуырға,
Үҙен бәйләп алырға
Тигән уйын белдергән.

Яйыҡ батырҙы мең башы,
Туғыҙ улын йөҙ башы
Итеп, Тора бей сигенән
Ыршаҡ бейгә[28] ебәргән.

Ике меңен оҙатҡас,
Илдә ғауға ҡуҙғатҡас,
Ҡан ерәненә[29] менеп,
Алты батыры — йөҙ башы,
Үҙе булып мең башы,
Атаһы байман торған ер,
Үҙе уйнап үҫкән ер —
Нарыҫ тауына ҡарап
Яуы менән киткән, ти.

Иҙеүкәй яуы килерен,
Иҙел, Яйыҡ кыҙырып,
Илдә яусы йыйғанын,
Атаһы ырыуын былырҙан
Яулап атҡа менеүен
Тора бейҙән аҫтыртын
Дәмми бей мән Ыршаҡ бей
Оран алып торған, ти.
(Ыршаҡ ман Дәмми бей
Әллә ҡасан ил йыйып,
Батырҙары ат менеп,
Яуға тайяр торған, ти.)

Айҙар буйы яу булған,
Ике яктан яусылар
Иҫәп-һанһыҙ күп үлгән.
Дәмми яуы түҙмәгән,
Буҫыу яғын ҡараған.
Ҡошҡа сөйгән ыласындай
Ҡан һауҙырып күҙенә,
Асыу туплап йөҙөнә,
Иҙеүкәй ярһып уҡталған,
Дәммиҙе ул эҙләгән,
Ҡыраҥ ҡылып бар яуын,
Бейҙе бәйләп алған, ти.

Келәйле мән тап килеп,
Дәмми бейҙең аймағын
Нарыҫ тауға йыйған, ти.
Нарыҫта ҙур туй ҡылып,
Бейҙең малын һый ҡылып,
Һәр ырыуҙың башына
Йөҙ баштарын баш ҡылып,
Бөтә яуҙы бер итеп,
Ыршаҡ бейгә киткән, ти.
Яйыҡ батырға бирешмәй,
Яуҙа алғыр булһа ла,
Аҙаҡкы һуң яуында
Яйыҡ батыр үлһә лә,
Яйыҡ батыр улдары
Һис тә яуҙан буҫмағас,
Иҙеүкәй килеп ҡушылғас,
Ыршаҡ бей ҙә түҙмәгән,
Үҙен үҙе йыуатып:
«Атаң-бабаң бей булһа ла,
Нишләйһең, тоҡомоң ҡор булғас?
Ҡулыңда бейлек булһа ла,
Нишләйһең, яуың хур булғас?
Бөркөт тә, бүре типһә лә,

Ҡаҙға ла сөйөр ҡош түгел;
Ырыуы ла бөткән булһа ла,
Иҙеүкәй ҙә буш ир түгел;
Атаһын яҙмыш хур ҡылһа ла,
Бар иргә лә яҙмыш бер түгел»
Тигән уйын уйлаған;
Ян керешен бушатып,
Уҡ-һаҙағын сорғотоп,
Яуын аттан төшөрөп,
Иҙеүкәйгә баш һалған.

Иҙеүкәй:

— Шоңҡар ҙа оскан яланда
Ябалаҡҡа, бейем, ем теймәҫ!
Ыласын да сөйгән ҡаҙ күсе
Талпынып та осоп мандымаҫ!
Башыңды ла эйеп килгәнһең, —
Булат та ҡылысым йән ҡыймаҫ! —
Тиеп, бейҙе ҡотҡарған;
Бейҙең аймағын йыйып,
Батырҙарын баш ҡылып,
Күп көн шунда уҙғарған.

## VI. Туҡтамыш хандың Иҙеүкәйҙе һарайға баш бей итеп ҡуйғаны

Туҡтамыш хан Урҙала
Был хәлдәрҙе ишеткәс,
Юрматы, Ҡыпсаҡ, Ҡатайҙы,
Тамъян, Табын батырҙы
Кәңәшсе иткән һарайҙа;
Ҡотло менән Иҫәнде
Ҡош сөйөүгә далала
Ҡошсо иткән тағы ла
Үҙе йөрөгән һунарҙа.
Һабрауҙы саҡыртып,
Менәренә ат биреп,
Йөрөрөнә яй ҡуйып,
Ҙур туй булһа Урҙала,
Килеүен уның шарт ҡылып, —
Уралдан ҡол алмаҫҡа
Бары алдында һүҙ ҡуйған.
Урҙала хан янында,
Ҙур бей итеп ҡуйырға,
Һабрауҙы ебәреп,
Иҙеүкәйҙе саҡыртҡан.
Иҙеүкәй, хан саҡыртҡас,

Һабрау ман уйлашып,
Урҙа ханға барған, ти;
Атаһы ман Иҫәнде,
Уралдан киткән батырҙың —
Барыһын да күргән, ти;
Һарайҙағы серҙәрҙе,
Туплап яткан уйҙарҙы,
Батырҙарҙың күбеһе
Хан кушканса эшләүсе,
Илде йөрөп талаусы
Икәнлеген барының
Һорашып, күреп белгән, ти.

Үҙе уйын бирәүгә
Әйтмәй, йәшерен сер тотоп,
Эштең яйын белергә,
Яман, якшының барын
Үҙ күҙенән үткәреп,
Ашы юкка аш биреп,
Туны юкка тун биреп,
Ат кәрәккә ат биреп,
Үҙенә юлдаш итерлек,
Уйҙа серҙәш булырлык
Ирҙәрҙе лә тапкан, ти.

Ил аралап йөрөгән һуң,
Илдә күп сер белгән һуң,
Урҙаға кире кайткан һуң,
Унда бер аҙ торған һуң,
Ат өйрәтеп менеүҙә,
Һунарҙа кош сөйөүҙә,
Һүҙгә сәсән булыуҙа
Ханға егет окшағас,
Хан сакыртып алған, ти.

Туктамыш:

— Ай, егетем, сакырғас,
Урҙама төбәп килгәнһең,
Һарайҙа һин калырһың,
Яурындары укалы,
Алтын һабак төймәле
Камка тундар кейенеп,
Көмөш кәмәр быуырһың!
Тәкәүеренә бәйләнгән
Бауы тора һум алтын,
Ак шоңкар кош бирермен;
Эйәр кашына ултыртып,
Йәйен килеп түлләгән
Кош күсенә сөйөрһөң!

Ҡуян ботло ҡаратҡа
Аҡыҡ ҡашлы, ҡумлы эйәр
Һалып тағы менерһең!
Ил өҫтөнә яу килһә,
Яуыма ҡор башы булып
Яуға ҡаршы сығырһың!

Хан һүҙене ишеткәс,
Ҡара диңгеҙ буйында
Илен талап, ҡан эсеп,
Үҙ иленә һыймайса,
Туҡтамыш ханға килеп,
Баш бей булып Урҙала,
Хан ҡыҙыны алам тип,
Өмөтләнеп йөрөүсе
Сәләхи быға тарһынған.

Хандың бар өс балаһы:
Ҡадирбирҙе[30] — олоһо,
Ынйыбикә — уртаһы,
Ҡинйәбикә[31] — кинйәһе.
Ынйы сыҡһа яланға,
Сәләхи уны һағалап,
Ханға кейәү булырға
Ынйыһына ымһынып,
Һис тә ҡалмай йөрөгән, ти.
Ынйы булған бик иркә:
Уйын-көлкө — кис, иртә;
Алтын, ебәк — кейеме.
Бәйләмәгән ҡолондай,
Бер урынға биш баҫып,
Түшен-башын тертәйтеп,
Сәләхи күңелен елкетеп,
Иҫе-дәрте, белгәне —
Бары уйын булған, ти.

Ханды, нисек булһа ла,
Ҡире ҡағып ҡарарға,
Иҙеүкәйҙе һарайға
Ҡорбаш итеп алмаҫҡа,
Ханға ҡарап Сәләхи
Былай тиеп һүҙ асҡан:

— Ай, оло хан, оло хан,
Үҙең белмәҫ нимә бар
Уҙа килгән быуында.
Алтын тигән ҙур Урҙа
Аҡ Урҙаға ҡалғанын
Беләһең бит, оло хан![32]

Аҡ Урҙанды тирәләй
Яуҙар ҡубып торғанын
Һиҙәһең бит, оло хан!
Ҡандар кисеп сыҡмайсы,
Бейҙән бейгә барырға
Юл табалмай ҡайтыусы
Илселәрең барлығын
Беләһең бит, оло хан!
Уралдан ирҙәр алһаң да,
Һарайҙа бей ҡылһаң да,
Атҡа менгән халыҡтың
Аттан төшмәй йөрөүен,
Һиңә тоҫҡар ҡылысын
Һаман ҡынға тыҡмауын
Ишетеп тә, һиҙеп тә
Тораһың бит, оло хан!

Шундай саҡта һарайҙа
Ханы менән бейҙәрҙең
Илде бергә туплаҫай,
Яуға ҡаршы торорҙай,
Илде ҡулда тоторҙай
Аҡылы кәрәк, оло хан!
Илеңә килгән Иҙеүкәй
Һыналмаған, үҙе йәш.
Урҙа һынлы һарайҙа
Буҙ баланы бей ҡылыу,
Бөтә яуға баш ҡылыу
Ҡулай булмаҫ, оло хан!

Был һүҙҙәрҙе ишеткәс,
Сәләхи уны кәмһеткәс,
Аяҡҡа баҫҡан Иҙеүкәй,
Һүҙ башлаған Иҙеүкәй:

— Ай, оло хан, һүҙ булһын,
Илем, көнөм һау булһын:
Шәрә тыуҙым әсәнән,
Уралым кейем кейҙерҙе;
Үҙ ҡуйынында үҫтереп,
Ыласындарын сөйҙөрҙө;
Йәш булһам да, ат мендем,
Ҡулыма һаҙаҡ тотторҙо.
Уралымды йәмләгән,
Үткән көнөн йырлаған,
Шайкандарын һайраған,
Һандуғасы — ҡошона
Ирек бирмәй яҫҡыған
Бөтә йыртҡыс ҡыйғырға,

Малын ҡырған бүрегә,
Алпан-толпан йәйәүләп,
Умарта ватҡан айыуға
Тоҫкап һаҙаҡ аттырҙы.

Ат уйнатып үҫкән һуң,
Ил аралап йөрөгән һуң,
Уралымды атам тип,
Дүрт йылғаһын әсәм тип,
Шишмәләрен тыуасам* тип,
Нимәрәләй* күреп урманын,
Ейәнсәләй — ҡоштарын,
Ете яттай* — йәнлеген, —
Барын танып белгән һуң,
Һаҙаҡ атмай тукталым.
Уралымда үҫкәнде
Бауырым тип белгән һуң,
Булат алып ҡулыма
Атым менеп, яу сабып,
Уралыма ҡул һуҙған —
Барын дошман тип белеп,
Шуға ҡарай уҡ аттым.

Ай, оло хан, оло хан,
Илемдә ҡакһыр түгелмен;
Бөйҙә* тотҡан ҡулына
Юлбаҫар ир түгелмен;
Урын тапмай йөрөргә
Тыума бала түгелмен!

Ҡолаҡсындай сүл бүреһен,
Ала ҡанат ҡыр ҡаҙын,
Ҡояш төҫөн ашаған
Аҡһыл саптар төлкөһөн,
Боҫор урын тапмаған,
Ең осона етмәгән
Ҡыҙыл сикә ҡуянын,
Тал ҡыуаҡтан зарыҡкан
Анда-һанда ҡош-ҡортон,
Тик һыуыры, саңҡылдап,
Типһәненә шаң биргән,
Ҡыҙарып ятҡан ҡом-ерен —
Береһен ерһеп килмәнем!

Шыр урманда маһайып,
Алпанлаған айыуы;
Һылыу ҡыҙҙай биҙәнгән
Ҡара бауыр төлкөһө;
Кем уҙарҙан һайраған

Ағас һайын ҡош-ҡорто;
Һарайҙағы хан һымаҡ,
Ҡаяһында бөркөтө;
Алдынан ҡош уҙғармаҫ
Күк ҡарсыға, ҡыйғыры;
Мөлдөрәп торған күлендә
Ҡарасайы, өйрәге;
Йырсыһына ҡушылып,
Һылыу ҡыҙ ман ярышып,
Моңон бөрккән ҡурайы;
Тулы ҡойроҡ, ялбыр ялҡ,
Өйөр һаҡлар айғыры, —
Бары бергә маҡтаған
Байман табыр илем бар!
Армыт-армыт япраҡлы
Урал тигән тауым бар.
Уны ташлап нишләйем?!
Арыҫландай беләкле,
Ҡарсығалай йөрәкле
Батыр үҫтергән ете ырыу —
Алмаштырмаҫ илем бар!
Уны ташлап нишләйем?!
Оло башың кесе итеп,
Һин саҡырғас, килдем мин;
Ат тирләтеп, ил ҡуныһ,
Урҙаң йөрөп күрҙем мин;
Кем ҡорһағы күпсегән,
Кем йөрәге күмһегән,
Кем һөйәге билсәйгән, —
Үҙем йөрөп күрҙем мин;
Алтын Урҙа, Аҡ Урҙа,
Аҡ Урҙа ла — ҡалғышып,
Тороп ҡалған бер урҙа;
Урҙала ла сәркәшлек
Ни икәнен белдем мин.
Инде ҡунаҡ булдым мин,
Әйтер һүҙем бөттөм мин,
Ат эйәрләп ҡуйҙым мин,
Аман-иҫән, һау булың,
Үҙ юлыма киттем мин, —

тип, һүҙен ҡырт киҫеп, сығып китә башлағас, хан Иҙеүкәйҙе туҡтатҡан да уны баш бей итеп ҡуйырға тигән фарманын биргән, ти.

## VII. Иҙеүкәйҙең баш бей булғаны, ғәҙел хөкөмсө булып танылғаны

Берҙән-бер көндө һарайға ат етәкләп — дүрт кеше, бер бала етәкләп — ике ҡатын, бер ҡош өсөн ғауғалашып, ике һунарсы килгән. Туҡтамыш хан быларҙың дәғүәләрен хәл итеүҙе яңы баш бейе Иҙеүкәйгә тапшырған.

Хан алдында, һарайҙағы барлыҡ бейҙәр алдында Иҙеүкәй тегеләрҙе берәмләп һорашҡан, дәғүәләрен тыңлаған. Тәүҙә ат етәкләп килгән дүртәүҙең береһе әйткән:

— Атанан беҙ биш туған
Тороп ҡалған ир инек;
Мираҫ булған бер атты,
Шыбаға тотоп, үҙ-ара
Бишебеҙгә бүлгәйнек.
Аттың бер арт аяғы
Аҡһаҡ ине ыуанан —
Уныһы тейҙе Ҡинйәгә;
Башы тейҙе олобоҙға;
Һау ҡалған өс аяғы
Тейҙе беҙҙең өсөбөҙгә.

Бына бер көн атыбыҙ
Айһыҙ ҡараңғы төндә
Барып төшкән игенгә.
Иген эйәһе тотоп,
Түләү килде биш һумға.

Берәр һумды түләүгә
Ағабыҙ күнмәй арала:
«Аяҡ алып бармаһа,
Баш йөрөмәй һис ҡайҙа!
Түләгеҙ һеҙ үҙ-ара», — тип,
Түләүҙән ул баш тарта.

Бына һеҙҙән, оло хан,
Туры хөкөм һорайбыҙ,
Һеҙҙең хөкөм буйынса,
Игенсегә түләйбеҙ.

Быны тыңлап бөткәс, башҡа бейҙәр: «Ат уртаҡ булғас, уртаҡ түләргә инде», — тип, үҙ-араһы кәңәшләшә башлаған икән, Иҙеүкәй ултырған еренән ҡалҡа биреп, үҙ хөкөмөн әйткән, ти:

— Ашайым тип ыуа аяҡ
Үҙе башлап атламаҫ;
Ыуа аяҡ, янбашҡа
Ашаһа ла ит ҡунмаҫ.

Боронғолар һүҙе бар:
«Аҡылһыҙ баш аяҡҡа
Тынғы бирмәҫ бер ваҡыт».
Шуға күрә баш эйәһе —
Һеҙҙең оло ағайығыҙ —
Ике өлөш түләһә лә,
Булмаҫ, тимен, һис наҡыҫ.
Ауырыу аяҡты һөйрәүсе —
Аҡыллы баш, һау аяҡ.
Шулай булғас, кинйәгеҙҙең
Түләмәҫкә хаҡы бар.
Иҙеүкәйҙең хөкөмөнә
Хан да риза булған, ти,
Шулай итеп түләргә
Барына бойороҡ биргән, ти[33].

Шунан инеп, ике аусы
Үҙ дауҙарын һөйләгән:
— Беҙ икебеҙ — Урҙала
Иң дан алған аусыбыҙ.
Ау ауларға далала
Типһән, күлде бүлгәнбеҙ.

Минең ерҙән бер туғаҙаҡ
Осоп китте кире яҡҡа.
Шуны күреп, был аусы
Уғын атҡан туғаҙаҡҡа.
Ул атмаһа, мин ҡошто
Күҙҙән яҙлыҡтырмайса,
Ата һалып ала инем,
Минән алыҫлашҡансы.

Инде үҙегеҙ беләһеҙ
Һунарсылыҡ йолаһын:
Табыу минән, атыу унан,
Табыш уртаҡ булаһын.
Хан бейҙәре — вәзирҙәр
Өнһөҙ тороп ҡалған һуң,
Туҡтамыш хан хөкөмдө
Иҙеүкәйгә тапшырған.

Иҙеүкәй:

— Ерҙе бүлгән булһаң да,
Һауа — уртаҡ, аусылар.
Шулай килгәс дау менән,
Хөкөм ҡылмай ярамай.
Бер шартым бар, аусылар:
Осҡан ҡошто ата алыу —
Мәргәнлектең билдәһе;

Үҙ балаһын алып сығып,
Уға ҡошто тоттороп,
Башын ҡырға сәкәйтеп,
Ике йөҙ ҡуһандан* тороп,
Ҡоштоң күҙен сәп итәр.
Атҡан саҡта яҙлыҡһа,
Йә балаға тейҙерһә,
Башы менән ҡон түләр.
Шундай мәргән булмаһа,
Осҡан ҡошто ата алмаҫ.
Һинең даулап йөрөүең
Ҡолаҡҡа алыр дау булмаҫ.

Сәләхи:

— Бындай мәргән донъяла
Һис бер тыуып үҫмәгән.
Оан[34] ҡалаһы вәзиргә
Иманлы бул тигәндә,
Данлы Ғәли батырға[35]
Башыма уғың тейҙермәй,
Ҡәпәсемде атып сөй,
Ҡираматың күрәйем,
Шунда динең хаҡ тиеп,
Динеңә мин инәйем,
Илемә алап һалайым, —
Тигән һүҙгә баҫынып,
Һаҙағын Ябраил[36] тоҫҡатҡан, —
Ғәли батыр батырлыҡ
Ҡыла алмай аптыраған, —
Тигән һүҙҙе ишеткәс,
Хандар, бейҙәр ҡул ҡуйып,
Булмаҫ шарт, тип шаулаған.
Иҙеүкәй һүҙен һүҙ итеп,
Туғаҙаҡты ҡулға алып,
Шундуҡ һарайҙан сығып,
Бер ҙур майҙан йыйҙырған;
Ҡошто биреп бирәүгә,
Һаҙаҡ алып ҡулына,
Бер һөйәмдәй ҡош башын
Тотоусының үҙенән
Сәккәйттереп ҡуйған, ти;
Янға һалып һаҙағын,
Халыҡҡа ҡарап былай тип,
Ҡошҡа тоҫҡап атҡан, ти:
— Ғәли ҡурҡһа алаптай,
Ҡәпәс сорғоп атыуҙан,
Уралда үҫеп ҡош атҡан,
Ат уйнатып дан тотҡан,
Йөҙөк ҡаштай ҡош күҙен

Актарғансы атыуҙан
Иҙеүкәй куркмаҫ һис касан, —
Тиеп тоҫкап аткан, ти[37].

Һаҙак коштоң күҙенән
Өңөп сығып киткән, ти.
Ханы, бейе, килгән халык
Һүҙһеҙ, тынһыҙ шак катып,
Аптырауға калған, ти.

Халык алдында шул ерҙә
Бер баланы етәкләп,
Килгән ике катындың
Дауын һорап, Туктамыш
Хөкөм кылып бирергә
Иҙеүкәйгә кушкан, ти.

Катындарҙың берәүһе:
— Алты айлык сағында
Ошо балам йәйләүҙән
Бер кис ғәйеп булғайны.
Тап ике йыл тигәндә,
Туғай буйлап күс юлдан
Йәйен йорттан кайтканда,
Сағыл аша түтәнән
Ошо катын бала мән
Миңә килеп осраны.
Ул бала бит минеке,
Сәсен унын аралап,
Колағыны карағыҙ:
Кот койғанда май сәсрәп,
Бешеп калған миңе бар, —
Тип, үҙ дәғүәһен әйткән, ти.

Икенсеһе тағы ла:
— Бала минең үҙемдеке,
Ирем үлгән сағында,
Буйҙа тороп калғайны.
Үҙ бауырым балама
Бынау яуыз бер катын
Юлда килеп укталды.
Бирмәй китһәм, тағы ла
Ас бүреләй үкереп,
Тирә-якка шау һалды.
Бына шуға аптырап,
Һеҙҙән бер хөкөм һорап,
Бынау яуыз катынға
Яза биреүҙе теләп,
Һеҙгә төбәп килгәйнем, —

Тиеп һүҙен әйткән, ти.
Ике ҡатын икеһе лә,
Бала төҫөн үҙенеке
Икәнлеген аңлатып,
Билдәләрен әйткән һуң,
Хан, вәзирҙәр аптырашып,
«Йә, Иҙеүкәй!..» тигәндәй,
Уға бағып ҡалған, ти.

Иҙеүкәй булат ҡылысын
Ҡынынан һурып сығарып,
Баланы ҡашына алған да:
«Юғалттым, тип әйтеүсе,
Төҫө, башын баланың
Бөтә билдәһен белә.
Бала минеке тигәне
Бала төҫөн үҙенә
Оҡшатыу мән тағы ла
Уныҡы һымаҡ күренә.
Шуға күрә баланы
Икегеҙгә уртаҡлап,
Бүлеп бирмәксе булам», —
Тип ҡылысын күтәргәс,
Бала юғалттым тиеүсе,
«Ай, балам!» тип, һығылып,
Һушһыҙ ауған шул саҡта.

Бала үҙемдеке, тип
Бирмәй торған был ҡатын,
Йөрәге лә һыҙламай,
Үҙе һис тә ҡаушамай,
Баҫып торған шул саҡта.

Иҙеүкәй шундуҡ ҡылысын
Ҡире тыҡҡан ҡынына;
Ҡашындағы баланы
Ала һалып ҡулына,
Йәшен һөртөп битенән,
Тәтәй биреп ҡулына,
Хан алдына килгән, ти;
Халыҡҡа ҡарап былай тип,
Үҙ хөкөмөн әйткән, ти:
— Аҙаматтар, был бала
Тапҡан ҡатынға тейә:
Күрҙегеҙ бит барығыҙ ҙа,
Үҙ бауыры булғанға,
Алда үлем күргәнгә
Йөрәге һыҙлап, түҙәлмәй,
Һығылып төштө иҙәнгә[38].

Хәҙер серҙе асырға,
Эштең төбөн белергә
Мин барамын тегеһенең
Йәшәп ятҡан еренә.
Уның был баланы
Урлап алған икәнен
Шунда төпсөп белгән һуң,
Ул ҡатынды йортонда,
Үҙе тыуған ерендә,
Ырыуын йыйып, майҙанда
Дарға аҫып китәмен, —
Тигән һүҙҙе ишеткәс,
«Балам» тигән был ҡатын
Шунда серҙе асҡан, ти:
— Юҡ, мин был баланы
Һатып алдым таулыҡта.
Йыл ярымдан артыҡтыр,
Аҫыраным ҡышлыҡта.
Ҡатын булып ир ҡуйынында
Һис бер бала тапманым,
Ҡатын ҡором үтеп бара,
Бала тәмен татыманым.

Илап әйткәс үҙ ҡайғыһын,
Ул ҡатынды Иҙеүкәй
Ҡотҡарырға булған, ти.
Бала һатҡан кешене
Таптырырға ҡушҡан, ти.
Хан да быға ҡул ҡуйып,
Эҙләүселәрен йыйып,
Был ҡатынға эйәртеп,
Барын шундуҡ оҙатып,
Хөкөм эшен бөткән, ти[39].

## VIII. Сәләхиҙең Иҙеүкәйҙе ошаҡлағаны, Ханбикәнең төш күргәне, Һабрау ҡарттың юрағаны

Һарайҙа торған һайын Иҙеүкәйҙең абруйы арта барған. Бәйгеләрҙә ат сабыштырғанда, ерҙән балдаҡ алыуҙа, көрәштә, уҡтан атыштарҙа берәүгә лә ал бирмәгән. Етмәһә, хан ҡыҙы Ынйыбикәнең, Иҙеүкәйгә ғашиҡ булып[40], һунарға бергә сығып йөрөүенә Сәләхиҙең эсе ҡайышҡан. Сәләхи, хан менән Иҙеүкәйҙе ыҙғыштырыр өсөн, төрлө юлдар эҙләгән.

Берҙән-бер көндө Сәләхи ханбикә янына килгән дә былай тип һөйләгән:

— Бикәм, һин ни уйлайһың?
Дана үҫкән ҡыҙың бар,
Хәзәр* ханы улына
Һорай торған уйы бар.
Ҡаруан-каруан ҡыҙыл мал,
Өйөр-өйөр йылҡы алып,
Баш бей менән хан улы
Ҡилә тигән хәбәр бар.

Ҡыҙың күҙен алдырған,
Иҙеүкәйгә алданып,
Ҡалым-маҙар түләтмәй
Сыҡмаҡ була эйәреп.
Ысын булһа был хәбәр,
Һарайға хурлыҡ түгелме?
Урҙа һынлы ҙур ханға
Байлыҡ юйыу түгелме?

Был һүҙҙәрҙе ишеткәс,
Ханбикәнең төҫтәре
Бер ҡыҙарып, бер уңарған.
Ни әйтергә белмәйенсә,
Урынынан ҡуҙғалған.

Хан ултырған аулаҡта,
Йыуынышып арыҡта.
Ҡыҙарынып, бүртенеп,
Хан янына ханбикә
Барып сыҡҡан шул саҡта.
Күрмәгәнде күрҙем, тип,
Үҙ уйыны төш итеп,
Ханға һөйләй башлаған:

— Ханым, йоҡлап ята инем,
Бер яман төш күрҙем дә,
Йөрәгем һуғып уяндым,
Үҙ-үҙемә ышанмай.
Ян-яғыма ҡарандым.
Күп ултырҙым уйланып,
Уйым етмәй ҡалғынып,
Ынйыҡай тип саҡ ҡына
Һөрән һалып ҡуйманым.
Ынйының бер тар йортта
Йоҡлап ятҡанын күрҙем;
Муйынына уралған бер
Аждаһа йылан күрҙем.
Ҡысҡырырға өнөм юҡ,
Әрсәләргә кемем юҡ,
Һиңә йүгереп килгәйнем,

Һине тағы хур күрҙем:
Һарайҙа намаҙ уҡыйһың, —
Башың яланғас күрҙем;
Тағың* торған ерендә
Бик яман бер уй күрҙем.
Уй эсендә ҡуҙ яна,
Ҡемдер ҡуҙға тын өрә,
Һинең таҡты шул ҡуҙға
Утын итмәксе була.

Ҡурҡыуым шулдыр, оло хан,
Был ни булыр, оло хан?

Туҡтамыш:

— Ай, ханбикәм, был төшөң,
Шайтан төшө булмаһа,
Бик ҡурҡыныс төш икән.
Һарайымда дошманлыҡ
Ҡылған әҙәм бар микән?

Ханбикә:

— Һарайҙағы баш бейең
Ҡулын һала ҡыҙыңа, —
Беләһеңме, оло хан?
Ҡыҙың уға кейәүгә
Сығам тиһә, ҡарыуға
Ужарың ни, оло хан?
Иҙеү алам тигәндә,
Илгә алап* һалғанда,
Талаш-тартыш киткәндә,
Ни уйың бар, оло хан?
Минең бөгәсә күргән төш:
Һинең салмаң осорған,
Ҡыҙҙы ураған ҙур йылан —
Шул булмаһын, оло хан.

Туҡтамыш:

— Ынйыға ҡул һалғанын
Тәү ишетеү, ханбикә.
Ынйы барам тигәндә,
Балаға ужар булырлыҡ
Олпатым бар, ханбикә.
Иҙеүкәй, ҡыҙҙы алам, тип
Алап һалһа Урҙаға,
Кәңәш-төңәш итмәйсә
Әйтеп булмай, ханбикә.
Уралдан килгән ҡарт йырсы,
Күпте күргән ҡарт кеше —
Һабрауҙы саҡыртып,

Һинең күргән төшөндө
Юратайыҡ, ханбикә, —
Тиеп икәү уйлашып,
Һабрауҙы саҡыртып,
Юратырға булғандар...[41]

Бер нисә көн үткән һуң,
Хан ҙур туй йыйған, ти.
Туй таралғас, Туҡтамыш,
Саҡырып алып бейҙәрен,
Ханбикәнең төшөнө
Барына ҡарап һөйләгән,
Төштө юрап биреүҙе
Һабрауҙан һораған.

Һабрау төштө тыңлаған,
Былай тиеп юраған:
— Ынйыны күреү тар йортта —
Һарайҙа баш китерлек
Алдыҡ тулыу, оло хан.
Уны ураткан аждаһа —
Илеңә дошман бераүҙең
Ҡыҙың һөйөү, оло хан.

Таҡ аҫтында уй күреү —
Яҡшыны яман күрһәтеп,
Ҡыртым менән көн күреп,
Ике йөҙлө йөрөүсе
Кешенең эше, оло хан.

Таҡ аҫтында ҡуҙ күреү —
Һарайыңда сер йыйған,
Күңеленде арбаған
Иң яҡының берәүҙең
Дошманлығы, оло хан.

Намаҙ уҡыр сағыңда
Башың ялангас ҡалыу —
Һин уйламаҫ берәүҙең
Тағың алыуы, оло хан.

Был юраүҙы ишеткәс,
Хан, һаҡалын һыпырып,
Аптырауға ҡалған, ти.
Был кешене белергә,
Һарайынан ҡыуырға,
Тиеп ҡарар ҡылған, ти.

## IX. Ғәнәкәнең ҡасып бала тапҡаны, Туҡтамыш хандың уны эҙләткәне[42]

Хан үткәргән ҙур туйҙа һарай ҡыҙҙары ла булған. Сорнайсылар сорнай уйнағанда, ҡыҙҙар бейегән, йыр йырлаған. Араларында Ғәнәкә исемле бер ҡол ҡыҙы Иҙеүкәйҙе күреү менән ғашиҡ булған. Иҙеүкәй ҙә, быны күҙләп тороп, ҡыҙға килеп һүҙ ҡушҡас, икәү-ара һөйләшеп яҡын йөрөй башлағандар, ти.

Ғәнәкә бик аҡыллы,
Үҙе серле булғанға,
Иҙеүкәйҙе Ынйыы ла
Һәр саҡ һөйөп йөрөгәнгә,
Иҙеүкәйҙе һөйөүен,
Иҙеүкәй һүҙ биреүен
Һис бераүгә әйтмәгән.

Иҙеүкәй мән Ғәнәкә
Бер-берене һөйгәнен
Һарайҙағы ҡыҙҙарҙан
Бер-ике ҡыҙ һиҙһә лә,
Һис бераүгә һөйләмәй
Арала сер тотһа ла,
Һүҙ эйәрә һүҙ сығып,
Ҡолаҡтан ҡолаҡ ишетеп,
Хандың ҡыҙы Ынйыға
Был һүҙ барып еткән, ти.

Ынйыы быға түҙмәгән,
Ғәнәкәне саҡыртҡан,
Ҡыҫымға алып, ҡурҡытып,
Иҙеүкәйҙе һөйөүен
Ғәнәкәнән һораған.
Ғәнәкә һис әйтмәгәс,
Һарайҙағы ҡыҙҙар ҙа
Ғәнәкәне яҡлағас,
Ынйыы шул саҡ Ғәнәкәгә
Ҡамсы менән һуҡҡан да:
«Ауыҙың асып һөйләнеп,
Иҙеүкәйҙе һөйәм, тип
Йөрөгәнең ишетһәм,
Атама әйтеп аҫтырып,
Эткә башың ташлармын!» —
Тигән һүҙен әйткән, ти.

Яландарға сыҡҡанда,
Иҙеүкәйгә Ынйыы ла
Үҙ уйыны әйтһә лә,

Иҙеүкәй ҙә уйынан
Хан кейәүе булыуҙы
Күңеленән тартһа ла, —
Ынйыны бер хан улы,
Икенсегә Сәләхи
Алырға тип яусылап,
Иҙеүкәйҙән көнләшеп
Йөрөгәнен белгәнгә,
Бер ҡыҙ өсөн әселәш
Сығарыу һис ярамаҫ,
Тип Иҙеүкәй уйлаған;
Ғәнәкәне һөйөүен
Быға ҡарап ҡуймаған.
Көндәр үткән, ай үткән,
Ғәнәкә буй күтәргән, —
Буйлы булыу серен ул
Иҙеүкәйҙән бүтәнгә
Һис бирәүгә әйтмәгән.
Көндәр һанап буй үҫкән,
Ғәнәкәгә уй төшкән:
«Иҙеүкәйҙән булғанын
Әйтһәм, Ынйынан ҡурҡам;
Әйтмәй, серем йәшерһәм,
Зинасы тип тағы ла
Рисуай итеп урамда,
Тимер тағып муйыныма,
Ҡара яғып йөҙөмә
Үлтерерҙәр барыбер», —
Тигән уйын уйлаған.

Берҙән-бер көн Ғәнәкә,
Һис бирәүгә һиҙҙермәй,
Иҙеүкәйгә белдермәй,
Хан һарайы эсенән
Ҡамышлыҡҡа ҡасҡан, ти;
Ҡамышлыҡта аслыҡта,
Күлдән типкән һыуыҡта
Бер ир бала тапҡан, ти.

Ғәнәкәнең ҡасҡанын
Туҡтамыш хан ишеткәс,
Уның буйы булғанын
Ханбикәһе белдергәс,
Туҡтамыштың уйына
Һабрау ҡарттың теге саҡ:
«Һин уйламаған бирәү
Тағың алыр, хур ҡылыр», —
Тип юраған төш килгән.
Хан йыйҙырған бейҙәрен,

Һөйләп биргән уйҙарын:
«Ғәнәкәне табырға,
Балаһын да, үҙен дә
Һарайға алып ҡайтырға!» —
Тиеп фарман биргән, ти;
«Шундай тыума балалар
Борон-борон, борондан
Батша, хандар баштарын
Юйып килер булғанын
Ишетеп тә, күреп тә
Барығыҙ ҙа белә», — тип,
Эҙәрләргә кешеләр
Ебәрергә ҡушҡан, ти.

Хан ебәргән кешеләр
Күл тирәләй йөрөгәндә,
Ғәнәкә, улын ҡалдырып,
Аулаҡ урын эҙләргә
Киткән саҡта, Иҙеүкәй
Шыр ҡамышлыҡ төбөндә,
Ҡош ояһындай урында,
Балаһына тап булған.
Бала ураған сепрәкте
Ғәнәкә күлдәге икәнен
Иҙеүкәй шундуҡ таныған.
Иҙеүкәй көткән, төн еткән, —
Ғәнәкә һаман ҡайтмаған.
Баланы алғас ҡулына,
Китмәк булып юлына,
Ғәнәкә биргән яулыҡты
Бала ятҡан урынға
Билге итеп ҡалдырған.

Балаһын алып, Иҙеүкәй
Үҙ йортона ҡайтмаған.
Иҫәнбай торған тирмәгә
Тура ҡарай атлаған.

Ишектән барып ингәс тә
Иҙәндә ятҡан баланың
Күкрәгендә — ҙур бысаҡ[43]
Иҫәнбай ман бисәһе
Илағанын күргән дә,
Иҙеүкәй һүҙһеҙ ҡалған,
Бер талай өнһөҙ ҡалған.

Иҫәнбай:

— Йәшлек күптән үткәндә,
Ҡартлыҡ көнөм еткәндә,

Тәңре беҙгә, Иҙеүкәй,
Ике бала биргәйне.
Әсәһе һөтһөҙ булғанға,
Игеҙәктең берәүһе
Аҫҡа үлде, Иҙеүкәй! —

тип, үҙҙәренең ҡайғыларын әйткән. Иҙеүкәйҙең ҡулында бала күреп, ирле-бисәле төпсөп һорашып торған саҡта, былар янына Һабрау ҡарт менән Ҡотлоҡай килеп ингән, ти.

Шунан былар бергәләп
Һарайҙағы серҙәрҙе
Ултырғандар һөйләшеп,
Ғәнәкәне ҡыҙғанып,
Төрлө яҡтан уйлашып.

Иҫәнбайҙың үле балаһын
Ҡамышлыҡҡа илтергә,
Иҙеүкәйҙең балаһын
Иҫәнбайға бирергә;
Ғәнәкәне табырға,
Уны оҙатып Уралға,
Был бәләнән йолорға,
Тигән уйҙа туҡталып,
Иҙеүкәйгә шунда уҡ
Үле бала күтәртеп,
Ҡамышлыҡҡа илтергә
Барыһы ла ҡушҡан, ти.

Иҙеүкәй кире барһа ла,
Таңға саҡлы торһа ла,
Тирә-яғын ҡамыштың
Ҡыҙырып ҡарап йөрөһә лә,
Ғәнәкәне тапмаған.
Үлек баланы ҡуйып,
Тағы билдә ҡалдырып,
Иҙеүкәй таңға әйләнеп,
Торлағына ҡайтҡан, ти.

Урын эҙләп, ҡамышҡа
Ҡайтып килгән сағында,
Хан кешеләре тап булып,
Тоторға тип ябырылып,
Кем уҙарҙан килгәндә,
Һис бер кеше инмәҫтәй,
Йәнлек аяҡ баҫмаҫтай,
Тирә-яғы һелкенеп,
Упҡын ятҡан һаҙлыҡҡа

Ғәнәкә барып ташланған.
Был кешеләр тоталмай,
Үле баланы табып,
Ханға илтеп тапшырған.

Иҙеүкәй быны ишеткәс,
Һабрау ман һөйләшкәс,
Ҡараңғы төшөп, төн булғас.
Ҡеше аяғы һил булғас,
Ҡотло менән Иҙеүкәй,
Исәнбайҙы эйәртеп,
Эҙләй сығып киткән, ти.

Ғәнәкә һаҙға батһа ла,
Көн-төн буйы тырмашып,
Хәлдәренән тайһа ла,
Һыуға һуҙған сауылдың
Ботағына тотоноп,
Төпкә төшөп китеүҙән
Үҙен һаҡлап торған, ти.

Иҙеүкәйҙәр ҡамышты
Ҡәмә менән йырғылап,
Төрлө яҡтан аралап,
Тауыш биреп төрлөсә
Ғәнәкәне тапҡан, ти.
Үлгән Нуретдин менән
Баланы алыштырғанын,
Үле баланы тапҡас,
Хандың тынысланғанын
Иҙеүкәй һөйләп биргән, ти.

Ғәнәкәгә ат биреп,
Ас тамағын туйҙырып,
Бер көн тотмай, Иҙеүкәй
Урал ҡарай оҙатҡан.

## X. Туктамыш хандың Иҙеүкәйҙе үлтерергә йыйынғаны, Иҙеүкәйҙең Уралға ҡасҡаны[44]

Ынйы хәҙер тынғандай,
Иҙеүкәй уға булғандай,
Иҙеүкәйгә һырышып
Йөрөгәнен күргәнгә,
Сәләхи тағы көнләшкән.
Ханбикәгә аулаҡта
Иҙеүкәйҙе ошаҡлап,
Ханбикәне тағы ла
Төрлө яҡтан шаштырған.

Берҙән-бер көн Туҡтамыш
Яңғыҙ-аулаҡ булғанда,
Ҡайғылатып ужарын[45]
Хан янына килгән дә,
Алдап-йолдап иренә
Ханбикә һүҙ аҫҡан, ти:
— Ай, оло хан, оло хан,
Бөгәсә тағы төш күрҙем,
Ул төшөмдө уйлаһаң,
Һиңә яман эш күрҙем:
Ҡара йылан буйындай,
Ҡабырғаңда ит күрҙем;
Яуға сапҡан батырҙың
Тиргә сумған атындай,
Тибенгеңдә тир күрҙем;
Утҡа өткән ҡойҡалай
Ҡарайып ҡалған соңҡаһы,
Һөйәкһеҙ ҡалған башыңды,
Ҡарындыҡтай ҡурышып
Йыйырылған битеңде,
Ат күҙендәй ҙур күҙең
Төнйөрөп бөтөп йомолған, —
Шулай яман төш күрҙем.

Туктамыш:

— Бөгәсә һин күргән төш
Ул ни булыр, ханбикә?
Батырҙарым эсендә
Тарҡаулыҡ юҡ, ханбикә.

Ханбикә:

— Хан һарайы эсендә
Ханы менән батырҙың
Араһы тарҡау булмаһын.
Хан янында ултырып,
Бер һарайҙа аш эскән
Ханы менән батырҙың
Йөрәге тарҡау булмаһын!
Һарай ҡыҙын һөйгән ир —
Уны ханы юйған ир;
Ханы уны тартһа ла,
Ҡонон эҙләп йөрөмәһен!
Бикә итергә йөрөгәнен
Хан үлтереп, тол иткәс,
Йөрәгендәй балаһын
Турап ханы хур иткәс,
Шулар ҡонон алам тип,
Ынйы менән Ҡинйәнең
Береһен урлап китмәһен.

Шул Иҙеүкәйҙән ҡурҡамын,
Башың юйып, хан булып,
Тағың алып ҡуймаһын!
Ожмах һымаҡ көнөңдө
Йәһәннәмдәй яндырып,
Ҡара көнгә ҡалдырып,
Башыңды хур ҡылмаһын[46], —

тип, ханбикә һөйләп торғанда, хан янына батырҙар килеп ингән. Улар инеп, иҫәнлек-һаулыҡ һорашҡас, хан һарай ҡыҙҙарына ашһыу килтерергә бойорған. Былар артынан оҙаҡламай Иҙеүкәй ҙә килгән. Урын күрһәтелгән, бары ла ултырған. Ҡунаҡтарға һыуһын биргәндә, Иҙеүкәйгә бирә торған туҫтаҡҡа ханбикә ыу һалған[47]. Быны күреп ҡалған һарай ҡыҙы, туҫтаҡтарҙы таратып йөрөгәнендә, Иҙеүкәйгә аңлатҡан. Бары ла күтәреп эскәс, Иҙеүкәй еҫкәгән дә, бармағын тығып болғатып, ултыртып ҡуйған[48].

Ханбикә:

— Ай, Иҙеүкәй, ни улай
Еҫкәп кенә ҡуяһың?
Әллә унда эсмәҫлек
Тәм бармы һуң, хоҙайым?

Иҙеүкәй:

— Ашың татлы, ханбикә, —
Әсеткеһе иҫкереп,
Эсәлмәҫлек ыуланған, —

тигән дә сығып киткән[49]. Хан эштең ни икәнен аңламаған. Бейҙәр аптырап ҡалған.

Туҡтамыш:

— Ул ни, хайуандай булып,
Ашты еҫкәп ҡарауы?
Бармаҡ тығып болғатып,
Ултыртып сығып китеүе?

Сәләхи:

— Ай, оло хан, хуп күрһәң,
Үҙем һөйләп бирәйем.
Ашты еҫкәп ҡуйыуы —
Илең белдем тигәне,
Бармаҡ тығып бутауы —
Илең бутармын тигәне[50].

Хан, был һүҙҙе ишеткәс,
Аптырауға ҡалған, ти.
Бар ҡунағын оҙаткас,

Хан менән ханбикәһе
Икәү генә ҡалған, ти.

Ханбикә:

— Бына, ханым, ишеттең,
Мин ҡасандан һөйләнем,
Бер килмешәк кешене
Түргә уҙҙырма, тинем.

Иҙеүкәй һиңә быҡаса
Бер һүҙ әйтмәй килгәйне;
Ишеттеңме инде үҙең
Ни тип сығып киткәнен?

Иҙеүкәй әйтеп ҡуймаҫ ул,
Йәндәй күргән ҡыҙыңды
Ҡалым-маҙар түләмәй
Алып китмәй ҡалмаҫ ул.

Туктамыш:

— Алай булһа, ханбикә,
Бер оло туй яһайыҡ;
Шунда уны мәс ҡылып*,
Аяғынан йығайыҡ;
Ҡул-аяғын бәйләтеп,
Башын шундуҡ киҫтереп,
Беҙ шулай ҡотолайыҡ, —
Тип уйлашып икәүләп,
Туй яһарға булғандар.

Берҙән-бер көн һарайҙа ҙур туйға бейҙәр, сит ҡунаҡтар йыйылған. Аш-һыу әҙерләнгән. Баш бей ҡайтһын инде тигән булып, Иҙеүкәй менән Ынйының һунарҙан ҡайтҡанын көтөп торғанда, Иҙеүкәйҙәр ҡайтып төшкән, ти. Шунан ашау-эсеү, уйын-көлкө башлағандар...[51] Шул мәлде Иҫәнбай кирәгәне яғалап, тирә-яғын һағалап, ошо йырын йырлаған, ти.

— Хан һунарға сығырға
Батырҙарын йыйған, ти.
Һунар тапмай яланда,
Ҡара ҡошто оло хан
Ыласынға сөйөргә
Бауын сисеп ҡуйған, ти.
Өҫтөндәге ҡамҡаны
Сисеп ырғыт бейҙәргә;
Өлкән йыйып, оло туй
Ҡалһын тороп бейҙәргә.
Табаны ялпаҡ буҙ толпар

Эйәрләнгән, сыҡ, һиңә;
Ҡара бөркөт йөнөнән
Әҙерләнгән уҡ һиңә.
Минең атым — Иҫәнбай,
Оран бирәм, бел, һиңә[52].
Иҫәнбай йырын ишеткәс,
Иҙеүкәй ҙә һаҡланған;
Сығып китеп йыйындан,
Буҙ толпарға атланған[53].
Ҡыуа сығыр батырҙар
Атҡа менәм тиһәләр,
Таралғыһы киҫек эйәрҙең,
Ауыҙлығы юҡ, ти, йүгәндең.
Ни эшләргә белмәйсә:
«Иҙеүкәй ҡайҙан белгән һуң?
Ҡыуа сығар батырҙың
Таралғыһын киҫкән», — тип
Аптырауға ҡалғандар.

## XI. Туҡтамыш хандың батырҙарға мөрәжәғәт иткәне; Янбайҙың Иҙеүкәйҙе ҡыуа киткәне; Сәләхиҙең мәкер ҡорғаны[54]

Иҙеүкәй сығып тайғас, Туҡтамыш хан: «Иҙеүкәй һиҫкәнде, хәҙер ул Уралға ҡайтып шау һалыр, илен туплап, яу менән килер», — тип уйға ҡалған, ти. «Әле алыҫ китмәгәндер», — тип, Иҙеүкәйҙе кире бороп алып ҡайтырға бар батырын димләй башлаған[55]:

— Урал, Йайыҡ батырҙың
Ҡотон йәйгән тоҡомдан
Батыр булып тыуған ир,
Бер ырыуға баш булып,
Ус төбөндә ил тотоп,
Даның киткән ҡыпсаҡ бей!
Ҡуш-ҡуш бысаҡ таҡҡан ир,
Ҡуш әҙернә аҫҡан ир,
Дошманды ҡыуа бар, тимен,
Барып йәнен ал, тимен!

Сингә* барып яу асып,
Яман тауҙан юл асып,
Иленә ырыуын туплатҡан,
Һеңгө осонда дошманды
Күбәләктәй уйнатҡан
Тамъян батыр, һиңә әйтәм!
Тамъяндарҙың башы һин,

Инде тороп талпын һин,
Ҡулыңа ҡылыс алсы һин!

Ҡара диңгеҙ буйында
Даның сәскән ҡор башым*,
Илен бәйләп, ҡулыма
Тотоп биргән юлбашсым,
Иле телен алмаған,
Бейенә буй бирмәгән,
Үҙ ырайы булмаһа,
Берәүгә юл ҡуймаған
Сәләх батыр, һиңә әйтәм:
Уғын ҡырҡ нарға аҫҡан,
Урҙамда оло дан тотҡан,
Һарайымда иркә һин,
Сәләхи батыр, ҡор башым,
Дошманымды тотсәле,
Билен шунда бөксәле!

Ҡырым иле эсендә
Ҡараңғыла юл тапҡан,
Бейе ятҡан һарайҙың
Ниргәһенә ут яҡҡан
Ҡарабай батыр, һиңә әйтәм!

Ҡая битенә юл һалып,
Яу килгәндә тайшанмай,
Ат уйнатып юл сапҡан,
Ун мең кешем бер төндә
Һуйып, буйын бирмәгән
Ҡатай батыр, һиңә әйтәм!
Ҡараңғыла юл сапҡан,
Алйығанда һүҙ тапҡан,
Яурының киң, олпатлы,
Арыҫландай йөрәкле
Ҡатай батыр, ҡуҙғалсы,
Ҡоралыңды ҡулға алсы!

Дошмандан һис тайшанмай,
Илен йәйеп яланға,
Иҙел, Димдең типһәнен
Үҙенә торлаҡ ҡылырға
Ат уйнатҡан туғайҙа,
Һаҙаҡ ҡайрап сайында*,
Ырыу тотҡан Юрматы,
Һиңә әйтәм тағы ла:
Дошман илен баҫҡанда,
Яуҙа аймағын һаҡлаған,
Яуға сапҡан сағында,

Күктәй гөрләп күкрәгән,
Иң таянған Юрматым,
Ауыр көндә ҡанатым,
Бар, батырым, барһана,
Барып ҡурҡыу һалһана!

Яның батмандан ауыр,
Дүрт ҡарағас үҙәген
Ярып, уғың юғалған,
Ҡая эсендә ҡуш айыуҙы
Ҡыбырлатмай ҡаҙаған,
Батырҙарҙың эсендә
Иң ҡарты ла һоллоһо,
Табын батыр, һиңә әйтәм:
Арыҫландай ҡысҡырған,
Күп ҙур эштәр башҡарған,
Яуҙа һөңгө һындырған,
Һөңгөгә кеше мендергән,
Ил күңелен тындырған,
Еңмәгән яу ҡалмаған,
Эсһә, ҡанға туймаған
Табын батыр — тойғоном?
Һин дә тыңла бойороғом:
Ҡыйғырҙай тороп ҡуҙғалсы,
Дошманымды ҡулға алсы!
Аму* буйлап Хәзәргә*,
Ҡанһыҙ, илем йәйҙергән,
Буйһондороп һарайға,
Ҡул аҫтыма йыйҙырған,
Ҡыҙыл телең бал төҫлө
Булып, илгә таралған,
Янбай тиеп дан алған,
Һиңә тағы шуны әйтәм:
Һаҙаҡ теймәй, Иҙеүкәй
Батырҙарҙан ҡотолһа,
Сөсө телең арбаһын,
Ҡул-аяғын бәйләһен;
Дар ағаста аҫылған
Иҙеүкәйҙең кәүҙәһен
Илем күреп һил булһын!

Туҡтамыш хан ялуарып,
Батырҙарға әйтһә лә,
Батырҙарҙың берәүһе
Һис бер һүҙен әйтмәгән;
Иҙеүкәйҙең артынан
Ҡыуабыҙ тип, һүҙ биреп,
Тора һалып китергә
Бере баҙнат итмәгән[56].

Сак̡ырылған йыйынға
К̡илә алмай һуңлаған,
Илдә йырсы, ҙур һынсы,
К̡үпте күреп ишетеп,
Йөҙҙән артык̡ йәшәгән,
Тирә-яктың бар хәлен
Күҙ алдындай күреүсе
Һабрау к̡арттың килгәнен
Ханға хәбәр иткәндәр.
Аяк̡ка баҫып барыһы
Һабрау к̡арттың ингәнен
Ҙурлап к̡аршы алғандар.

Туктамыш:

— Һабрау килә тигәс тә,
К̡арасҡыңды күргәс тә,
Оҙон к̡олак̡, һиҙгер күҙ,
Ауыҙы асык̡, сапак̡* һүҙ —
Һабрау инә тигәс тә,
Уйым, һүҙем бүлдерҙем.
Елгән аттан тир сығыр,
Күк йылк̡ынан буҙ тыуыр,
Сәсән ирҙең өнөнән
К̡ыл ярырҙай һүҙ сығыр;
Ак̡ыллы ир башынан
Донъя к̡орор уй сығыр.
Йөҙҙән артык̡ йәшәгән,
Йәне, һөйәге к̡ак̡шаған,
Аҙау теше к̡ойолоп,
Берәм-берәм төшкән һуң,
Хыҙыр[57] йыйып бер ебәккә,
Теҙеп-теҙеп бәйләгән.
Һәр бер эште белеүсе,
Һүҙҙе уйлап һөйләүсе,
Ил өлкәне, Һабрау к̡арт,
Кәңәш һиңә туктаны.
Ак̡ Урҙала һарайым
Аптырауға әйләнде;
Табағымдан аш ейгән
Иҙеүкәй батыр тигәне
К̡ара йыланға әйләнде.
Тел өҫтөнә тел к̡уймай
Кәңәшеңде әйт әле!

Һабрау:

— Эй к̡артыңмын, к̡артыңмын,
Күпте күргән к̡артыңмын.
Урал буйы данлы йорт
Аптырауға к̡алғанын,

Батырҙары ил һаҡлап,
Ҡыҙыл ҡанға батҡанын,
Урал буйлап хандарҙың
Ат саптырып юртҡанын, —
Уны ла күргән ҡартыңмын.

Аҡколомбәт ҡустыһы
Ҡарағоломбәт мырҙаның
Бала һуйып хан булып,
Ырыуын бүре йән яһаған;
Ун ике тотам уҡ тотоп,
Ағаһының кинйәһе
Бабсаҡ бейҙе үлтереп,
Атаһының ҡоно өсөн,
Бабсаҡ улы Күсәккә
Ырыуыны юйҙырған, —
Уны ла күргән ҡартыңмын[58];
Башлыҡ, башлыҡ Сыңғыҙ хан —
Уны ла күргән ҡартыңмын;
Унан аҙаҡ Аблай хан[59], —
Уны ла күргән ҡартыңмын;
Унан аҙаҡ Ҡара хан[60] —
Уны ла күргән ҡартыңмын.

Йөҙҙән йәшем үткәндә,
Ауыҙымда теш бөткәндә,
Ҡоро һөлдә йөрөгәндә[61],
Үҙ дәүерем бөткәндә,
Һеҙҙең дәүер аҙаҡҡа
Тағы килеп еткәндә,
Быуын-быуын хандарҙан
Күп хандарҙы күргәндә,
Ҡош сөйәлмәй ҡалтырап,
Ат менәлмәй аптырап,
Йәштә ҡошто сөймәгән,
Атта уйнап үҫмәгән,
Юлдаш булыр бурҙайын
Сит кешегә тилеткән,
Һылыуы булған Ынйының
Күңелен ситтән алдыртҡан,
Кинйәһе булған Кинйәнең
Атаһы биргән балдағын,
Уны ла ситкә кейҙерткән,
Тәхетеңә мираҫың[62] —
Йәш булһа ла баланды,
Ҡадирбирҙе мырҙаны, —
Уны ла күргән ҡартыңмын.
Ошо йәшемә еткәндә,
Ауыҙымда теш бөткәндә,

Сыҡмаған йән йөрөгәндә,
Ошо йәшемә еткәнсе
Күп илдәрҙе гиҙһәм дә,
Ҡашҡа, ҡашҡа* тигәндең
Күбен күргән булһам да, —
Һинән киткән Иҙеүкәйҙәй
Ғүмеремдә бер ирҙе
Күрмәй торған ҡартыңмын.

Артынан килеп ҡараһам,
Ике яурын араһы —
Батыр йоҡлар саялай;
Алдынан килеп ҡараһам,
Ҡарсыға ҡабаҡ, талғыр күҙ —
Йөрәгеңә ингәндәй.
Батырлығы йөҙөндә,
Ҡырҡыулығы һүҙендә,
Уйлап эшләр эшен дә,
Эйәрле ат ятыр эсендә, —
Иҙеүкәйҙәй батыр ир
Ишетмәгән ҡартыңмын.

Иҙеүкәй, Иҙеүкәй тигән һүҙ —
Урал, Урал тигән һүҙ!
Иҙеүкәй китте тигән һүҙ —
Урал күсте тигән һүҙ!

Иҙеүкәй киткәс, китер ул,
Ҡомһорап сапҡан арыҫландай,
Ҡаныға осҡан ҡыйғырҙай,
Шул китеүҙән китер ул!

Оҙон-оҙон оло юл —
Быуат-быуат батырҙар
Шуны буйлап сапҡан юл.
Шул юл буйлап китер ул,
Сатмыр ханға[63] етер ул,
Һинең бөтә урҙаңды
Аҡ сабаҡтай йоторға,
Алдымда ятҡан йәйендәй,
Ҡарпыйым тип уҡталған
Сатмыр уға ҡул бирер,
Теләгенә юл бирер.
Иҙеүкәйҙәй батырҙы
Яуына ҡорбаш ҡылыр ул,
Ханбикә күргән яман төш,
Уйҙа күргән утлы ҡуҙ
Иҙеүкәй яуы булыр ул.

Арыҫландай үкереп,
Ҡыйҡыу-һөрән һалыр ул.
Ете батырҙы ниргә итеп,
Мең бейле Ноғай йорт,
Йәйеп ятҡан дала йорт,
Яҙғы иттәй бурһығып,
Күптән ҡаҡһып килгән йорт,
Иҙеүкәй шауын ишетһә,
Булат ҡылысын һелтәп,
Иҙеүкәй килеп уҡталһа,
Данлап ҡорған Урҙанды
Ҡыран-яран ҡылыр ул.
Иркәләтеп үҫтергән
Ынйыы менән Кинйәнде
Алып ҡына ҡуймаҫ ул,
Бүреләй ҡырып яуыңды,
Ташлап ҡына китмәҫ ул, —
Көмөш йоҙаҡ һарайҙы,
Алтын тояҡ тәхетте,
Данлап ҡорған урҙанды,
Уйнап-көлгән бәхетте —
Барын тар-мар итер ул.

Әй, оло хан, оло хан!
Иҙеүкәй тигән ҙур ҡашҡа
Ошо киткән китеүҙән
Һарайың килеп баҫыр ул;
Көмөштән һуҡҡан ишекте,
Төшһә тимер суҡмары,
Бер һуғыуҙа асыр ул;
Һарайыңа бей булып,
Кирәгәнде киртер ул,
Киртеп утын итер ул;
Хур ҡыҙындай күрекле,
Һандуғастай ирекле,
Һиңә наҙлы Ынйыны,
Һиңә иркә Кинйәне —
Икеһен дә алыр ул;
Түреңә түшәк һалыр ул,
Иркә үҫкән ҡыҙыңды
Түш аҫтына алыр ул.

Ҡаяла буҫкан ырыуҙың
Ҡонон һинән алыр ул;
Байман йәшәп урҙанда,
Үҙ ырыуын йәйер ул;
Табаныңды телер ул,
Телеп ҡылын һалыр ул;
Өйөр-өйөр эркелтеп,

Илдән йыйған малыңды
Барын ҡыуып китер ул!

Минең һүҙҙе тыңлаһаң,
Барын уйлап ҡараһаң,
Иҙеүкәй кәйеп китһә лә,
Шунда ла ары киткән юҡ,
Иҙелдән[64] ары киткән юҡ.

Ете батыр бей булһын,
Атҡа менеп елдерһен,
Теләген биреп күндерһә,
Иҙеүкәй шуға буй бирһә,
Тыныс ғүмер һөрөрһөң,
Аҙағын үҙең белерһең!

Һабрау һүҙен ишеткәс, Туҡтамыш, уҙған эшенә үкенеп, былай тигән:

— Ете батыр тигәнем —
Етегеҙ ҙә бей ине.
Үҙегеҙ ырыу тотҡанда,
Ил тоторлоҡ бей ине;
Дошман менән дуҫыңды
Айырырлыҡ күҙ булып,
Барығыҙ ҙа ир ине.
Ай, бейҙәрем, бейҙәрем,
Хәҙер атҡа менегеҙ,
Ни теләһә Иҙеүкәй,
Теләген бирәм, тиегеҙ!
Урҙамдан һиңә бер ханлыҡ
Бүлеп бирә тиегеҙ!

Батырҙарҙың берәүһе
Ҡырҡа яуап бирмәгәс,
Сәләхи мән ханбикә,
Муйырғандай ҡарышы
Иҙеүкәйҙе яманлап,
Уҫаллығын һөйләгәс,
Туҡтамыштың тағы ла
Асыуы уттай тоҡанған,
Үпкә ҡатыш бойороп,
Тағын һүҙен әйткән, ти:
— Аралағы дошманды
Берегеҙ күрмәй һыйҙырған!
Йөҙөк ҡашы ынйылай,
Күҙ алмаһы ҡаралай,
Теләктәре юлымда,

Йөрәктәре ҡулымда,
Һис тайшанмаҫ бер булған,
Үҙ бауырым — ҡыҙҙарым,
Улар ҙа күңел алдырған!
Бейҙәрем күҙем йомдороп,
Ҡыҙҙарым күңел аҙҙырып,
Мине яңғыҙ ҡалдырып,
Мине хурлыҡҡа һалырға
Дошмандан сер алдырған!

Иҙеүкәйҙе эҙләүсе,
Уны тота барыусы
Һарайҙа урын алыр ул,
Мамыҡ түшәк йәйер ул,
Күҙ ҡарамдай ҡыҙымдың
Һайлап берен алыр ул![65]
Хандың үпкә һүҙенә
Бары ҡолаҡ һалған һуң,
Ҡыҙым бирәмен тиеп,
Хан вәғәҙә ҡылған һуң,
Сәләхиҙән бүтәндәр,
Ханға кейәү булам, тип
Бары атҡа менгәндәр,
Иҙеүкәйҙең артынан
Ҡыуа сығып киткәндәр[66].

Сәләхи тик ятмаған,
Үҙ уйын ул уйлаған.
Туҡтамыштың болала
Аптыраған сағында,
Иҙеүкәй килеп яу һалып,
Ынйыҡайҙы алыр тип,
Үҙен ҡанға һалыр тип,
Үҙе менән Ынйыҡайҙы
Урлап китмәк уй менән
Хан янында һарайҙа
Былай һүҙгә башлаған:

— Өс йөҙ кеше эйәртеп,
Ынйы менән икәүләп,
Иҙеүкәйҙең артынан
Барайыҡ беҙ, оло хан!
Йорттан сығып киткәнсе,
Иҙеүкәйгә еткәнсе,
Үҙегеҙ мән минән тыш
Һис берәү ҙә белмәһен.
Ынйыны күрһә Иҙеүкәй,
Һүҙен ҡушһа Ынйыҡай,
Килер беҙҙең янға ул;

Шул саҡ инде беҙ уның
Тотоп ҡулын бәйләрбеҙ,
Ҡушһаң, башын киҫербеҙ,
Тере тиһәң, терелэй
Алып ҡайтып бирербеҙ!

Хан быны бик хуп күргән,
Ынйыны ул саҡыртҡан;
Ынйы килгәс, Туҡтамыш
Былай һүҙен башлаған:

— Сәләхи мән яланға
Сығып йөрөп ҡайтырға,
Балам, хәҙер атҡа мен!
Уның менән икәүләп
Ялан сығып йөрөп кил!
Иҙеүкәй күреп килмәҫме?
Һарайға баш булмаҫмы?
Килһә, алып ҡайтығыҙ,
Үҙен ҡорбаш итермен,
Теләһә, кейәү итермен,
Теләһә, тәхетем биреп,
Үҙен ҙур хан итермен.

Ынйыбикә:

— Атаҡайым, Иҙеүкәй
Күк бурҙайын эйәртеп,
Буҙ толпарға атланып,
Ҡайтыр юлға китмәне.
Уны эҙләп сыҡһам да,
Кеше эйәртеп сыҡмамын.

Сәләхи барҙа Иҙеүкәй
Һарайыңа ҡайтмаҫ ул;
Иҙеүкәй инде асыуын
Һис бер саҡта йотмаҫ ул;
Иҙеүкәй килер булһа ла,
Яҡшылыҡҡа килмәҫ ул,
Үҙенекен эшләр ул:
Иң тәүҙә Сәләхиҙең
Ботон ботса ботарлап,
Башын эткә ташлар ул!

Был һүҙҙәрҙе ишеткәс,
Хан ныҡышып тормаған,
Ни булһа ла булыр тип,
Эҙләй киткән батырҙар[ҙың]
Ҡайтыу[ҙар]ын көтөргә —
Хан күңелен туплаған.

## XII. Янбайҙың ҡайтырға өгөтләгәне, Иҙеүкәйҙең баш тартҡаны[67]

Эҙләп киткән батырҙар,
Яйыҡ үтеп, Иҙелдең
Аръяғында, ҡаяла,
Аттан төшөп торғанын
Иҙеүкәйҙең күргәндәр[68].
Иҙеүкәйҙе күргәс тә,
Елә-сүкей барыусы
Батырҙарҙың барыһы
Аттарын шарт туҡтатҡан.
Тоташ бармай, беребеҙ,
Йә булмаһа икебеҙ
Тәүҙә барып күрәйек,
Тиеп шунда уйлашҡан.
«Мин бармайым, һин бар», тип,
Был батырҙар ҡурҡышып,
Төрлө һүҙгә етешеп,
Үҙ-араһы тартышҡан.

«Ҡурыҡһағыҙ барыуҙан,
Яңғыҙ булһа ла, үҙем
Иҙеүкәйгә барам», — тип,
Янбай елеп киткән, ти,
Иҙеүкәйгә еткән[69], ти;
Барып сәләм биргән дә
Ошо һүҙҙе әйткән, ти:

— Ҡайт, Иҙеүкәй, ҡайтһана,
Ҡайт, Иҙеүкәй, ҡайтһана!
Ҡайта Иҙел кисһәнә!
Иле өлкән Урҙаға
Иңкәйеп сәләм бирһәнә,
Ап-аҡ көмөш һауыттан
Хан һарҡытын эсһәнә!

Ынйы менән Кинйәнең
Икәүһен берҙәй бирә хан,
Берәүһен һайлап ҡосһана!
Яурындары таҡталы*,
Төймә бауы тартмалы*,
Ҡара һуҫар тун бирә,
Уны өҫкә кейһәнә!

Аҫыл шоңҡар ҡош бирә,
Ҡул әйләнә сөйһәнә!
Алтын арба эшләтеп,

Өҫтөнә ҡамҡа тышлатып,
Яу ярағын эшләтеп,
Ҡуш арғымаҡ ектереп,
Солтанатҡа* етһәнә!

Ҡолон саҡта, тай саҡта,
Бәйләнмәйсә һөт имгән,
Ҡонан саҡта тағы ла
Уртаҡлашып арҙа* имгән,
Дүнәнендә өйрәткән,
Ебәктән нуҡта һөйрәткән,
Бишеһендә өйөр башы,
Алтыһында ат иткән,
Етеһендә яратып,
Һөйөп менер ат иткән,
Етеп тә болан һуҡтырған
Ат бирә хан, алһана!

Эйәренең ҡашы алтын,
Йүгәненең башы алтын,
Ҡолағын беҙҙәй ҡаҙаған,
Ялын ҡыҙҙай тараған,
Ҡуш йөрәкле яралған,
Йүгереклегә һыналған,
Аждаһа йылан үҙәкле,
Башкүнәктәй танаулы,
Атҡолаҡтай иренле,
Һарымһаҡтай аҙыулы,
Саҡма таштай тояҡлы,
Ҡыйғас ҡамыш ҡолаҡлы,
Алғыр бөркөт ҡабаҡлы,
Ҡыҫыр йылан тамаҡлы
Ҡыҫҡа бәкәл, өкө аяҡ,
Муйындары бер ҡолас,
Ҡуян йөнлө, бута күҙ,
Ҡыҫҡа кикел, туғай ял,
Табаны ялпаҡ, тимер күк —
Йүгерек атты менһәнә!
Менеп, бер донъя гиҙһәнә!
Эйелеп, сәләм бирһәнә!
Өйөр йылҡы бирә хан,
Бәйләп, ҡымыҙ эсһәнә!
Тәхет бүлеп бирә хан,
Батшалыҡты алһана!

Туҡтамыш хандың ҡыҙы
Һағынды ла һарғайҙы,
Һалҡын төшмәй барһана,
Хандың ҡыҙын алһана!

Һин — хан, ул — ханбикә,
Шыбырлашып, һөйләшеп,
Сыңғылдашып, көлөшөп,
Иңбашынан ялғашып,
Ширбәт эсеп, серләшеп,
Байман ғүмер итһәнә!

Туҡтамыш хан, оло хан,
Һиңә үпкә итәсе,
Үпкәң булһа, һин уға
Үҙ ауыҙыңдан әйтһәңсе!

Иҙеүкәй:

— Ҡит, кит, Янбай, кит, Янбай,
Аҡылың юҡ, юҡ, Янбай!
Мин ҡайтмамын, ҡайтмамын,
Ҡайта Иҙел кисмәмен!
Ынйы менән Ҡинйәне
Береһен һайлап ҡосмамын!
Табаны ялпаҡ тимер күк
Ат бирһә лә, менмәмен;
Ҡара һуҫар тун бирһә,
Уны ла алып киймәмен,
Суҡмар ҡулда булғанда,
Эйелеп сәләм бирмәмен!
Алла үҙе бирмәһә,
Ҡеше тәхетенә менмәмен,
Ир булып атҡа менгән һуң,
Бер юл алып йөрөгән һуң,
Ҡатындай булып ҡайтмамын!

Һәлпән-һәлпән йөрөрмөн,
Яңғыҙым да китермен,
Был киткәндән китермен,
Сатмыр ханға етермен!
Хоҙай тәғәлә юл бирһә,
Сатмыр миңә ҡул бирһә,
Илегеҙгә етермен,
Малығыҙҙы улъя итермен!
Ынйы менән Ҡинйәне
Ул яй ҙа был яй итермен!

Иҙән башы — ҡара иҙән,
Ике арала ҡунмаһам,
Илен ҡыраң ҡылмаһам,
Түренә түшәк һалмаһам,
Түш аҫтына ҡыҙын алмаһам,
Туҡтамыштың һарайын
Асыуым ман асмаһам,

Әйткәнемде ҡылмаһам,
Иҙеүкәй атым ҡороһон!
Бөтә затым ҡороһон!
Иҙеүкәй тигән ирҙермен,
Уралда үҫкән ҡашҡамын,
Дуҫым утын һүндермәм.
Дошман утын яндырмам!
Асылын һорамай аш бирмәм,
Атаһын һорамай дан бирмәм!
Уралдағы ҡыйғырмын,
Мин, мин тигән ирҙермен,
Күп ҡашҡаға тиңдермен!
Тауға оялар шоңҡармын,
Тауҙа ҡырлай юртырмын!
Мин ыуҙан да әсемен,
Ширбәт ҡушылһа, сөсөмөн!
Бөтә ағас баш эйгән,
Тамыры һыуға тоташҡан
Йығылыу белмәҫ тирәкмен!
Балта һалһаң, айырылмаҫ,
Һыныу белмәҫ, ҡайырылмаҫ
Имәнгә бөткән ботаҡмын, —

тигән дә Иҙеүкәй китергә булған, ти. Янбай, уның артынан эйәреп, тағы ла һүҙ башлаған:

— Ҡайт, Иҙеүкәй, ҡайтһана!
Ҡитеү уйҙан ҡайтһана!
Ҡамсы тейер муйыныңа,
Ҡан һырғалыр ҡуйыныңа!

Иҙеүкәй:

— Ҡит, кит, Янбай, кит, Янбай!
Асма күҙең, тишермен!
Һөйләмә, телең өҙөрмөн!
Башыңды бауҙай киҫермен!
Ҡаныңды һыуҙай түгермен!
Утауыңды ауҙарып,
Ҡирәгәң утын ҡылырмын!
Сығарағың һындырып,
Уғыңды сыра итермен!
Табаның телеп, ҡыл ҡуйып,
Ҡуйыма көтөүсе итермен! —

тигәс, Янбай ҡурҡып тайшанған[70]. Иҙеүкәй, уны ташлап, Уралға киткән. Янбай иптәштәре янына килеп, Иҙеүкәйҙе бергәләп димләп ҡарайыҡ тиһә лә, барырға ҡурҡҡандар. «Беҙгә хәҙер үпкәләгәндер, ҡайтайыҡ та һабрау ҡартты ебәрәйек», — тип һөйләшеп, Урҙаға кире ҡайтып киткәндәр. Янбай ҡайтмаған, йәнә бер тапҡыр һөйләшеп ҡарамаҡ булып, Иҙеүкәй артынан киткән[71].

Янбай барып еткәндә[72],
Иҙеүкәй ҡайтып Уралға,
Һөрән һалып иленә,
Йыйып бөтә ырыуҙы
Һөйләп торған саҡ булған.

Иҙеүкәй:

— Бынан киткән биш батыр —
Аманат ул Урҙала,
Атам, әсәм, Иҫәнбай
Ҡол ителгән Урҙала.
Илгә ҡайтып әйләнмәй
Һабрау ҡарт тынмаҫ ул,
Мәңге ҡалмаҫ Урҙала.
Атҡа менмәй илебеҙ,
Ҡанға батмай еребеҙ,
Ханға яһаҡ түләүҙән
Арына алмаҫ көнөбөҙ, —
Тиеп һүҙен бөткәнен
Янбай тыңлап торған да,
Халыҡ таралып бөтөп,
Иҙеүкәй бер үҙе ҡалғас,
Иҙеүкәйгә былай тип,
Янбай һүҙен башлаған:

— Иҙеүкәй ҡустым, тағы әйтәм,
Илгә яман уй һалма!
Хандан һиңә бер һүҙ юҡ,
Илде бушҡа дулатма!
Әй, Иҙеүкәй, Иҙеүкәй,
Һин Урҙаға ҡайтһана,
Ханға буйың бирһәнә!
Иле данлы Урҙаға
Ҡайтып сәләм бирһәнә!
Ҡош оялар ҡаяңда
Яман уйың сәсмәсе!
Ҡанһыраған Уралдың
Аҡтыҡ ҡанын ҡоймасы!
Ҡыныға тыҡҡан ҡылысын
Илдең ҡабат һурмасы!
Ағас табаҡҡа һалып,
Ашың һоҫоп йөрөгәнсе,
Ап-аҡ көмөш табаҡтан
Хан һарҡынтын ейһәңсе!
Ҡыптыр тунға уранып,
Уралыңда йөрөгәнсе,
Алтын төймә тағылған,
Ҡамалар ман ҡыйылған,
Төймә бауы таҫмалы

Ҡара һыуһар тун кейеп,
Хан кейәүе булһаңсы!
Уралыңда ҡыҙ күҙләп,
Зарығып алйып йөрөмәсе!
Һине көтөп зарыҡҡан,
Ҡарап күҙе талыҡҡан,
Һағынып йөҙө һарғайған
Ынйы менән Ҡинйәне
Берәһен һайлап ҡосһана!

Уралыңда һунарҙа
Ҡейек ҡарсыға сөйгәнсе,
Һарайҙағы шоңҡарҙы
Ҡул әйләнә сөйһәнә!

Уралыңдың буйында,
Ҡая таштар өҫтөндә,
Арыҡ-турыҡ атың ман
Алпы-һалпы һәлпәнләп,
Салғыйҙарың ялбырлап,
Яу асырға уйланып,
Ағас һаплы һөңгөнө
Ҡоралым тип йөрөгәнсе,
Алтын арба эшләтеп,
Өҫтөңә янат тун кейеп,
Ҡолон тайҙа сағында
Бәйләнмәйсә һөт имгән,
Ҡонан, дүнән сағында
Болондарҙа тыу йөрөп,
Толпар тоҡомо булғанға,
Һәүрегендә өйөрҙә
Һайҙаҡ йөрөп дан алған,
Алтыһында ат иткән,
Етеһендә өйрәтеп,
Йыйындарҙа йүгерткән,
Ҡырас ялын матурлап,
Һылыу ҡыҙҙай тараған,
Маңлайында ҡуш урай —
Толпарлыҡҡа билдә итеп
Бер хоҙайҙан бирелгән,
Маңлайында кикеле
Шәлкем гөлдәй үрелгән,
Ҡалҡыу монда, ҡарсыға түш,
Тилбер атлап йөрөүсән,
Ҡубаға ҡабырға, тар бөйөр,
Биреклеге һыналған,
Туҙбаш йылан үҙәкле,
Башҡүнәктәй танаулы,
Ҡамыш ҡолаҡ, һоҫа теш,
Атҡолаҡтай иренле,

Һарымһактай аҙаулы,
Ата бөркөт ҡабаҡлы,
Өкө кикел, ҡуян бот,
Баҡыр күҙле, суртан һырт,
Асы яңаҡ, ҡырас йөн,
Ҡубаға тояҡ, ҡуш йөрәк,
Бөтә яҡтан һыналған,
Ҡүп йыйында саптырып,
Йүгереклектә дан алған
Тарлан буҙҙы менһәнә!
Түшелдерек, ҡойошҡан,
Эйәр ҡашын, йүгәнен
Алтын менән биҙәтеп,
Данлы өлкән урҙаның
Бөтә яуына баш булып,
Һөйәк һаплы һөңгөһөн
Ҡулыңа алып торһана!
Өйөр-өйөр йылҡыһын
Йәйләүендә бәйләтеп,
Ынйы менән Ҡинйәнән
Бейәләрен һауҙырып,
Ҡымыҙ эсеп ятһана!
Васыятҡа яҙҙырып,
Үҙе үлгәс, һин ҡалып,
Ҡыҙы менән икәүләп,
Шыбырлашып һөйләшеп,
Шарҡылдашып көлөшөп,
Киң һарайҙа яғалашып,
Шербәт эсеп, серләшеп,
Ханбикәле хан булып,
Дәүран ғүмер итһәнә!
Үпкәң булһа ҙур ханға,
Үҙең ҡайтып әйтһәнә!

Иҙеүкәй:

— Урал буйы, ҡая тауҙар
Батыр ҙа итеп үҫтергән,
Урал да буйы ҡанлы юл
Урҙаға илтеп еткергән.
Урал буйы күҙ йәше —
Ханға мине эстергән.
Урал буйы даулы ил —
Ҡанға батҡан шаулы ил,
Ҡаны менән һуғарып,
Миңә һаҙаҡ үҫтергән.
Һөйәк һаплы һөңгөнө
Ҡулыма мин тотмамын.
Урҙаға ҡайтып, баш эйеп,
Тарлан буҙын менмәмен.
Ханға кейәү булам тип,

Ҡыҙын һорап тормамын.
Урал иле бар булһа,
Батырҙары һау булһа,
Уралым данлап үҫтергән
Суҡмар ҡулымда булһа,
Туҡтамышҡа эйелеп
Мәңге сәләм бирмәмен.
Хан булам тип Урҙаға,
Илем һатып тормамын.
Ир булып атҡа менгән һуң,
Илем йыйып алған һуң,
Алпан-толпан булһа ла,
Бер юл табып китермен.

Урҙаға илткән оло юл
Сатмыр ханға илтер ул.
Хоҙа уңған юл бирһә,
Сатмыр хан да ҡул бирһә,
Сатмыр хандан көс алып,
Урал илемде туплап,
Торҡа кейеп башыма,
Ҡорман тағып билемә,
Ҡусәм булып барына,
Урҙаға мин барырмын.
Яуға сыҡһа дау менән,
Ҡамайыл ерен аямай,
Ҡанлы талҡан итермен.

Ҡәперәйгән Сәләхиен,
Илен һатһа Ҡыпсаҡтың,
Уға эйәрһә бүтәндәр,
Ас суртандай ҡарпырмын.
Уралымдан талап алған
Малдарҙы ла ҡайтарып
Үҙ халҡыма бирермен!

Атаһы башын юҡ итеп,
Әсәһе ауыҙын кәмзәйтеп,
Ынйы менән Ҡинйәне
Етем ҡыҙ тип һөйөрмөн.
Түренә түшәк һалырмын,
Тигәнемә етермен,
Туҡтамыштың һарайын,
Аса аҫыл балаҫын —
Барын күкшин итермен.

Ошо үсте алмаһам,
Тигәнемә етмәһәм,

Әйткәнемде ҡылмаһам,
Ҡашҡа исемем ҡороһон!

Мин — мин тимен, тиермен,
Мин — Уралда ирҙермен!
Асыуым уртлап ат менеп,
Тауға оялар шоңҡармын!
Ыуға ҡаршы әсемен,
Ширбәттәйгә сөсөмөн,
Байтирәктәй тирәкмен!
Балта сапһа — айырылмаҫ,
Һис тә һынмаҫ, ҡайырылмаҫ
Имән ағас ботаҡмын!

Мин — мин тигән ирҙермен,
Ат өҫтөндә уйнай, тип,
Ҡәпәс кейгән ир ул, тип,
Асылын һорамай аш бирмәм,
Атаһын һорамай дан бирмәм!

Янбай:

— Ай, Иҙеүкәй, Иҙеүкәй,
Был уйыңдан ҡайтһана!
Ҡамсы теймәҫ муйыныңа
Ҡан һырғаһын төйнәмә!
Мал һуйып туйларҙай
Туйға үҙеңде һуйҙырма!
Ямғыр яуып, Уралың
Сәскә атам тип торғанда,
Уралыңда ҡан ҡойоп,
Гөл-баҡсаны ҡоротма!

Иҙеүкәй:

— Ҡит, кит, Янбай, кит, Янбай!
Яман өнөң быуырмын,
Һөйләмә, телең киҫермен,
Асма күҙең, — тишермен!
Тубырлатып башыңды,
Муйыныңн бауҙай өҙөрмөн!
Харамдан ташҡан ҡаныңды
Ҡөрөндәй итеп ҡойормон!
Утауыңды ауҙарып,
Буҫағаң утын ҡылырмын!
Сағарағын һындырып,
Үҙеңде ҡурҙаҡ иткәндә
Уғыңды шөшлө ҡылырмын! —
Тигән һүҙҙе ишеткәс,
Янбай ауыҙын асмаған,

Айһыҙ ҡараңғы төндә
Урҙаға ҡарап ыҡлаған.

Иҙеүкәй Урал буйында
Ханға яһаҡ йыйғанды —
Барын илдән ҡыуҙырған,
Ханға яһаҡ бирмәҫкә,
Ханға буй ҙа бирмәҫкә
Бөтә ырыуҙы туплаған.
Уралдағы ырыуҙы
Яуға тайяр ҡылған ул,
Үҙе ярҙам һорарға,
Күк бурҙайын[73] эйәртеп,
Сатмыр ханға елгән ул.

## XIII. Иҙеүкәйҙең Сатмыр ханға киткәне, юлда мәмерйәгә ингәне, бер ҡарттан серҙе белгәне[74]

Ирәмәлдә* ат менеп,
Ямантауға еткәндә,
Иҙел ҡырыҡҡан урында,
Атын бороп туҡтатҡан.
Айылын бушатып, атын
Теҙген буйлап утлатҡан.
Күк бурҙайға шул ерҙә
Бер ҡош атып ашатҡан.

Иҙеүкәй ятып йоҡлағас,
Күккә ҡарап күк бурҙай
Моңһоу итеп ологан.
Иҙеүкәй торған һиҫкәнеп,
Бурҙай киткән еҫкәнеп,
Иҙеүкәйҙе эйәртеп;
Шыр урманды аралап,
Бер ҡаяны самалап,
Бер мәмерйә алдына
Эте барып туҡтаған.

Эте баҡҡан күҙенә,
Иҙеүкәй — уның йөҙөнә,
Эт йәбешкән шул саҡта
Ат ҡойроғо ҡылына;
Тап толомдан биш бөртөк
Ҡылды ҡапҡан ауыҙына.
Иҙеүкәй һиҙгән этенең
Ҡыл алырға иткәнен,
Тик Иҙеүкәй белмәгән

Ниңә кәрәк икәнен[75].
Иҙеүкәй ҡылды алғас та
Эт муйынына бәйләгән,
Атты шунда бушатып,
Ашатырға ебәргән.

Иҙеүкәй ҡарап тормайса,
Баҫмалатып ҡалмайса,
Һис бер ниҙән ҡурҡмай,
Ингән эте артынан.

Тау ҡыуышы ҙур ғына.
Һис яҡты юҡ, төн генә;
Тирә-яҡта һис ни юҡ,
Барыр юлы бер генә.
Оҙаҡ ҡына барғандар,
Бара-бара арығандар,
Бара торғас, бер күлгә
Барып етеп алғандар.

Иҙеүкәй күлгә күҙ һалған:
Күлдең иге-сиге юҡ;
Ҡисәм тиһә, бик тәрән,
Үҙе һалҡын бик яман.
Инде хәҙер нишләргә?
Иҙеүкәй аптырап ҡалған.

Эте тапҡан бер ҡайыҡ,
Ишкәге бар, бейе юҡ.
Ҡолаҡ һалып тыңлаған:
Күл тирәһе — топ-тойоҡ.
Иҙеүкәйгә эт ымлаған,
Үҙе ултырып ҡалмаған,
Күлгә төшкән дә йөҙгән,
Һис тә уйлап тормаған.
Иҙеүкәй ултырып ҡайыҡҡа,
Ишеп киткән артынан;
Барып сыҡҡас аръяҡҡа,
Бер ҡош осҡан алдынан.
Эт ымлаған атырға,
Ата һалып алырға;
Ҡылды алып муйынынан,
Ҡошҡа береһен һалырға.

Ҡошто атып алған һуң,
Суҡышынан үткәреп,
Ат ҡылыны таҡҡан һуң,
Ҡош теленә килгән, ти.

Ҡош:

— Мин һайыҫҡан ҡош булам,
Убыр тигән ут булам,
Шыҡырлаһам кәртәндә,
Бейәндән ҡолон һалдырам.
Сыуал япмай йоҡлаһаң,
Алла тимәй ҡаплаһаң,
Өйөңә инһәм төнөндә,
Бер балаһыҙ ҡалдырам.

Һин аткас та ҡурҡҡайным,
Уғың тейгәс үлгәйнем,
Илгә сығып ҡан эсмәй
Харап булдым тигәйнем.
Инде шөкөр хоҙаға,
Йылҡы еҫен еҫкәттең.
Ерҙә осоп эҙләгән
Емтектәрҙе иҫләттең.
Егет, ебәр һин мине,
Мин ярармын бер һиңә,
Юғалғаның эҙләһәң,
Табышырмын мин һиңә[76], —

тигәс, Иҙеүкәй һайыҫҡанды ебәргән дә, юл-маҙар һорашып тормайынса, тағы ла алға киткән, ти. Эте артынан эйәреп бара торғас, бер таулыкта өс яҡҡа айырылған юл сатлығына барып сыҡҡан. Юл сатында: «Уңға китһәң — байлыҡ юл; һулға китһәң — яулы юл; урталағы — серле юл», — тип яҙылған булған, ти.

Иҙеүкәй эткә ҡараған,
Арҡаһынан яраткан,
Юлды һайла, тигәндәй,
Эт башынан һыйпаған.
Эте киткән уртанан,
Батыр киткән артынан;
Барып сыҡҡан ҡоҙоҡҡа,
Ап-аҡ һаҡал бер ҡартҡа.

Был ҡарт этте ҡыумаған,
Эт тә ҡартҡа өрмәгән.
Сәләм биргәс Иҙеүкәй,
Ҡарт сәләмен алмаған.

Эт ымлаған Иҙеүкәйгә
Ҡылды сисеп алырға,
Береһен ҡарттың теленә,
Ҡолағына — икеһен,
Ике ҡулын бер ҡылға

Ҡарттың тотоп бәйләргә.
Иҙеүкәй шулай иткән икән,
Ҡарт ҡуҙғалған, һелкенгән,
Этте тартып алдынараҡ,
Мыш-мыш килеп илаған.
«Һау килдеңме, балам?» — тиеп,
Этте һөйөп һаулашҡан.
Иҙеүкәй күреп был хәлде,
Ҡарттан төпсөп һорашҡан.

Ҡарт:

— Мин ҡарт инем, ҡарт инем,
Күпте күргән ҡарт инем;
Илем яуға бирмәҫтәй,
Ер өҫтөндә таҡ инем.
Төкләҫ менән икәүләп
Ҡәғбәлә* лә булдыҡ беҙ,
Илгә килгән гәүергә*
Бергә һаҙаҡ юндыҡ беҙ.
Һабрау менән икәүләп
Төкләҫкә юлдаш булдыҡ беҙ.
Күп саҡтарҙа өсәүләп,
Бергә серҙәш булдыҡ беҙ.

Баба Төкләҫ әүлиә
Алла менән серләште;
[Уралда тыуған бер батыр
Ил һаҡларҙай булмағас,
Урал батыр ҡылысын
Тотор батыр тыумағас,
Ҡайҙа ятҡан урынын
Һис берәүгә әйтмәне;
Урал күҙен суҡыған
Һайысҡанды тотто ла
Мәмерйәгә бикләне.][77]
Мине ерҙең аҫтында
Сер һаҡларға ултыртты.
Һабрау ҡартҡа Уралда
Ил аралап йөрөргә,
Һул күҙене йоморға[78],
Әүлиәне тыңларға,
Ирмен тигән ирҙәрҙе —
Барыһын бей ҡылырға, —
Уға шундай эш ҡушты.

Мин буйһондом Төкләҫкә;
Шул көндән үк ул мине
Телһеҙ-ҡолаҡһыҙ итеп,
Серле һандығын биреп,

Ошо ташҡа ултыртып,
Әйләндерҙе байғошҡа.
Бер ҡатыным бар ине,
Уны айыртып, тол ҡылды;
Яңғыҙ балам бар ине, —
Бына ошо юлдашың —
Үлмәй торған эт ҡылды.

Һабрау күҙен йомманы,
Һис тә телен тыйманы,
Әйткән һүҙен әүлиәнең
Ҡолағына элмәне.
Һабрау ҡартҡа асыуҙан
Төкләç ҡылды бәддоға:
«Йәшә, — тине, — Уралда,
Үлмә, — тине, — мәңгегә;
Йәшә, — тине, — тарлыҡта,
Ғүмерең үтһен зарлыҡта.
Тамағың ашҡа туймаһын,
Өçтөң кейем күрмәһен,
Тоҡомондан һис берәү
Илдә бейлек ҡылмаһын;
Минең серҙе баландан
Һис бер кеше белмәһен.
Йоҡлар урының таш булһын,
Ҡапҡан ашың ут булһын,
Төкөргәнең ҡан булһын,
Маңлай тирең һыпырып,
Тапҡан-таянған барың
Бейҙәремә пол* булһын, —
Минән доға шул», — тине.
Шуға күрә Һабрау ҡарт
Шыр яланғас, ҡыу ҡалды.

Инде, егет, килгәнһең,
Серҙе хәҙер белгәнһең;
Муйынымдағы асҡысты
Үҙ ҡулыңа алырһың;
Ошо һандыҡ эсенән
Бер ҙур китап табырһың.
Шул китапты уҡығас,
Ни булғанын аңларһың.

Иҙеүкәй һандыҡты асҡан,
Болан тирегә яҙылған
Бер ҙур китапты алған.
Тәүге битте асҡас та,
Китапҡа күҙ һалғас та,
Эсендә ырыуы теҙелеп,

Ҡанға мансып яҙылған
Үҙ исемене күргәс тә,
Аптыраған, таң ҡалған.
Күҙен текләп ҡарағас,
Ошо һүҙҙе уҡыған:
«Ейәнемдән бей булып,
Ҡотло тигән ир тыуыр:
Балдарымдың* кинйәһе,
Иң доғамдың иркәһе[79]
Тора тигән бей батыр
Ҡотло тигән бүләмдең,
Тотмағанға йоламды,
Бейлегене юҡ ҡылыр;
Үҙен, ырыуын — барыһын —
Берен ҡуймай ҡол ҡылыр.
Тыумам* тыуыр Ҡотлонан,
Иҙеүкәй тигән ат ҡуйыр;
Яуыз булыр йөрәге,
Илдә йөрөп, ҡон ҡыуыр,
Унан тыуған ете ят*
Мораҙым тигән ат ҡуйыр,
Бөтә Урал буйында
Һис аямай ҡан ҡойор.
Уралдағы барлыҡ йән
Ҡешене түгел, эт һөйгән
Тоҡомомдан[80] берәүһе
Ошо китапҡа юлығыр.
Үмәр батырҙан ҡалған
Булатымды тотһа ул,
Ниндәй яуҙар килһә лә,
Бөтәһене айҡар ул.
Уралдан дейеүҙе ҡыуған
Урал батыр ҡәберен
Эҙләп барып тапһа ул,
Унын торҡаһын кейеп,
Шүлгәндән сыҡҡан йылҡынан
Ҡоланы һайлап менһә ул,
Ни теләһә, шуны эшләр,
Уралда ҡашҡа булыр ул».

Китапты уҡып бөткән һүң,
Ҡарттан тағы һорашҡан.
Тереләй гүрҙә ятма, тип,
Яҡтылыҡҡа сығарған.

Мәмерйәнән сыҡһалар,
Эйәр, ҡамсы, йүгәне
Үҙе ҡуйған ерендә,
Бере туҙмай, һау торған.

Йүгән тотоп, ат эҙләп,
Иҙел буйына төшһә,
Ҡан ерәнен Иҙеүкәй
Һыу буйында тапмаған.

Эте шул саҡ ҡаяның
Сабып менгән башына,
Утлап йөрөгән бер аттың
Сабып барған ҡашына.

Иҙеүкәй атҡа ҡараһа, —
Үҙ атындай, ялдары
Ятып тора уң яҡҡа.
Күҙе баҡыр, ҡуш аҙау,
Танауының эсендә
Тын юлы ла өс яҡта.
Уң ҡолаҡта иңе бар,
Уйып һалған арт яҡҡа.
Йүгән тотҡанды күргәс,
Ҡойроҡ сәнсеп, ажғырып,
Батырыны һулға алып,
Килеп баҫып тороуы —
Барыһы ла оҡшаған
Иҙеүкәйҙең үҙенең
Ҡуйып киткән атына.
Тик шуныһы оҡшамай:
Төҫө ҡан ерән түгел,
Сысҡан һыртлы ҡола төҫ —
Иҙеүкәй күргән ат түгел.

Иҙеүкәй атты күргәс тә,
Аптырауға ҡалған, ти;
Атын тотоп менгән дә,
Ҡарт янына килгән, ти.
Ҡарт был атты күргәс тә,
Иҙеүкәйгә йылмайып,
Арҡаһынан яратып,
Ошо һүҙен әйткән, ти;
— Атың йөнөн ҡан баҫып,
Ҡан ерән төҫ булғандыр.
Серҙе барып тапкан һуң,
Һин менерҙе белгән һуң,
Ҡола төҫө ҡайтҡандыр[81].
Егет, бушҡа аҙама,
Һөңгө ергә ҡаҙама!
Мен атыңа алла тип,
Яу көндәрем алда тип,
Уралыңды ата тип,
Йылғаларын әсә тип,

Илем яуҙа бирмәм тип,
Етем-еҫерҙең берен
Үҙемә үгәй күрмәм тип.

Шулай тиеп әйткән дә,
Атын эйәрләшкән дә,
Арҡаһынан яратып,
Һау бул, тиеп хушлашып,
Үҙе тороп ҡалған, ти.

Иҙеүкәй атына менгәс,
Ҡарттың янынан киткәс,
Урал батыр ултырҡан
Таш маяғына* еткәс,
Урал батыр ҡәбере
Ҡапыл иҫенә төшкәс,
Шунда туктап Иҙеүкәй
Һайыҫканды саҡырған.

Күҙ асып-күҙ йомғансы,
Иҙеүкәй һүҙе бөткәнсе,
Теге һайыҫкан бында
Осоп килеп тә еткән.
Иҙеүкәйҙең ни өсөн
Саҡырғанын да белгән.
Һайыҫкан уйлап тормаған,
Иҙеүкәйгә юл башлап,
Иҙел ағышын түбәнләп,
Бәлә тауға* ҡаратып,
Осоп алдан киткән, ти.

Уңға, һулға Бәләнән
Аҡкан йылға башынан
Һайлап ҡуныш имәнгә,
Иҙеүкәйҙе көткән, ти.
Иҙеүкәй барып еткәнсе,
Барып аттан төшкәнсе,
Күк бурҙайы ал барып,
Ҡаҙынып, имән төбөнән
Урал батыр торҡаһын
Алып сығып торған, ти.
Башына торҡа кейеп,
Күк бурҙайын эйәртеп,
Ҡола атына менеп,
Иҙеүкәй, һын-яһау булып,
Сатмыр ханға киткән, ти.

## XVI. Иҙеүкәйҙең Ҡабардинды тар-мар ҡылғаны; Фирҙәүесте ҡотҡарып, Сатмыр хандың кейәүе булғаны[82]

Оҙон-оҙон юл буйлап
Сатмыр ханға барғанда,
Уйһыу ерҙә бер егет
Йәйрәп йоҡлап ятҡанда,
Битенә ҡунған себенде
Һирпеп ҡыуып, еләҙләп,
Егет башын алдына
Һалып, мандап* ултырған
Бер һылыу ҡыҙ янына
Иҙеүкәй барып сыҡҡан, ти.

Иҙеүкәйҙе күргәс тә,
Егетенең битенән
Ҡыҙы үбеп уятҡан.
Иҙеүкәй мән был егет
Иҫән-һаулыҡ һорашҡан.
Шул саҡ тағы саянан
Һунарсылай кейенгән,
Талай егет, һөйләшеп,
Бергә килеп йығылған.

Ҡыҙ алдында йоҡлаған
Ҡалмыҡ иле эсендә
Ҡабардин тигән хан икән.
Янындағы һылыу ҡыҙ
Йырсы маҡтап йырлаған,
Фирҙәүес тип дан алған,
Сатмыр хандың ҡыҙы икән.

Был ҡыҙ өсөн күп йылдар
Ярты ил биреп Сатмырға,
Үҙенә һөйөп алырға
Ҡабардин күп интеккән, ти.
Аҙаҡ сиктә, бирмәгәс,
Ҡалымына күнмәгәс,
Һарай ҡыҙҙары менән
Яланға сыҡҡан сағында,
Ҡабардин аңдып торған да
Урлап алып киткән, ти.

Һынын күргәс Иҙеүкәйҙең,
Бер урында биш баҫып,
Ауыҙлыҡ тешләп, сорғотоп,
Ҡолағыны ҡайсылап

Торған атҡа күҙ һалғас:
— Кем һин, егет, ҡайҙан һин?
Ҡайҙа китеп бараһың? —
Тип, Ҡабардин һорашҡан.
Иҙеүкәй исемен әйтмәгән,
Батырлығын йәшермәй,
Ат өҫтөндә уйнаған;
Күлдән осороп ҡош атып,
Ханды хайран ҡалдырған,
Хан үҙенә саҡырған.
Бер аҙ тороп эш күргәс,
Ханға Иҙеүкәй оҡшағас,
Ул Иҙеүкәйҙе ҙурлап,
Һарайына баш ҡылған.
Ҡабардин һәр эшендә
Туҡтамышҡа таянған.
Ике ҙур хан бер булғас,
Сатмыр хан да ҡыҙ юллап
Килеүенән тыйылған.

Иҙеүкәй ҙә тик ятмай,
Ҡабардиндың асыуын
Туҡтамышҡа ыҡлаған.
Сапаҡ телле Иҙеүкәй,
Сәсән һүҙле Иҙеүкәй,
Ҡабардиндың бар яуын,
Күҙ терәгән бар илен, —
Гел үҙенә ҡаратып,
Һарайында тарҡаулыҡ
Оҙаҡламай тыуҙырған.
Арала яу ҡуҙғалған,
Өс көн, өс төн һуғышҡан.
Аҙаҡ сиктә Иҙеүкәй
Өҫтөн булып дан алып,
Хан һарайыны баҫып,
Ҡабардинды үлтергән.
Үҙенә серҙәш ҡорбашын
Ҡалмыҡ иленә хан иткән;
Сатмыр хандың ҡыҙыны
Атаһы янына илткән.

Ҡыҙы ҡайтҡас, Сатмыр хан
Илен йыйып, туй яһап,
Иҙеүкәйҙе данлаған;
Ҡыҙын биреп тағы ла,
Бары эшкә баш итеп,
Уны вәзир яһаған[83].

## XV. Иҙеүкәйҙең Сатмыр хандан ярҙам алғаны[84]

Сатмыр хандың илендә
Аҙмы-күпме торған һуң,
Үҙен танытып, дан сәскәс,
Туҡтамышҡа Сатмыр хандың
Дошманлығын белгән һуң,
Туҡтамыштың Уралға
Яһаҡсылары барып,
Ҡан-яу асып, ил талап,
Яһаҡ йыйғанды ишеткәс,
Иҙеүкәй ханға ингән дә
Былай тиеп һүҙ аскан:
— Ай, Сатмыр хан, Сатмыр хан,
Ата-әсәнән ханлыҡты
Мираҫ итеп алманың:
Юлбаҫар ҙа булғанһың,
Үс алырға йөрөгәнһең,
Сыңғыҙ тоҡомо хандарҙа
Хеҙмәттә лә булғанһың!
Утыҙ йәшкә еткәнсе,
Рәхәт тормош күрмәйсә,
Ханға хеҙмәт иткәндә,
Уң аяҡһыҙ ҡалғанһың.
Утыҙ дүрткә еткәндә,
Күп һынауҙар күргән һуң,
Күп яуҙарҙа булған һуң,
Данлы ҙур хан булғанһың.
Сыңғыҙ хандың тоҡомон
Үҙ илеңдән ҡыуғанһың.
Бына мин дә, тап һиндәй,
Ауырлыҡ ман юл ярҙым,
Атам-әсәм, һөйгәнем,
Ике күҙем ҡараһы
Баламды ла юғалттым!
Барыһынан баһалы —
Даны киткән Уралым
Туҡтамыштан талаттым!
Урманда һаҙаҡ юнғанда,
Атым тотоп менгәндә,
Илем илап ҡалғанда,
Һиңә төбәп юл тоттом.

Һиңә төбәп килгәндә,
Мәкер мән ат менмәнем:
Ҡабардинға яу асып,
Һинең ҡыҙың алайым,

Үҙеңә кейәү булайым,
Тәхетеңә менәйем,
Илеңә хужа булайым
Тигән уйҙа килмәнем!
Атыма менгән сағымда,
Илем илап ҡалғанда,
Йәш туҡтамаҫ күҙенә
Ал урамал* булайым,
Батырҙарын ҡол иткән,
Малын талап ҡыу иткән
Яуыз хандан илемде
Ҡотҡарырға ант иттем.
Уралымда илем бар,
Атҡа менер ирем бар,
Ҡушымтаға шуларға
Көсөң һорар уйым бар.

Иҙеүкәй һүҙен ишеткәс,
Сатмыр хан да шатланған,
Яуға көндө билдәләп,
Бар яранын йыйҙырған.
Шул йыйында Иҙеүкәй
Төш күргәнен һөйләгән:
— Бөгәсә бер төш күрҙем:
Алтын эйәр, аҡбуҙ ат
Ялынан тотоп атландым,
Күктә остом ҡош булып,
Фәрештә мән һөйләшеп,
Түшен түшемә ҡуйып,
Тур тауына* мендем мин.
Ул ни булыр, ярандар?*
Шуны юрап ҡараңдар[85].

Ярандар:

— Бөгәсә һин төш күрһәң,
Аҡбуҙ атҡа һин менһәң,
Мораҙыңа етерһең;
Фәрештә мән һөйләшһәң,
Туҡтамыш ҡыҙын ҡосорһоң;
Тур тауына һин менһәң,
Туҡтамыш тағын алырһың[86], —
Тиеп төштө юрағас,
Бары бергә шат булған.
Иҙеүкәйгә Сатмыр хан
Туҡтамышҡа ҡарышы
Яу асырға көс биргән.

## XVI. Моразымдың Нуретдин исемендә үҫкәне, Туҡтамыштан ҡасып, Уралға сапҡаны, атаһына ҡаршы яуға сыҡҡаны

Иҙеүкәйҙең улына
Бүтән исем ҡушырға
Ата-әсәһе булмағас,
Кем балаһы булыуын
Бөтә илдән йәшергәс,
Нуретдинды алмашып,
Уның урынына ҡалғас,
Һаман шулай Нуретдин
Исемендә йөрөгән.

Иҙеүкәй китеп күп торғас,
Балаһы үҫеп ҙур булғас,
Үҙе уҫал, бик батыр,
Уйнағанда һуғышҡас,
Иҫәнбайҙың бисәһе
Үҙ алдына һөйләнгән:
«Атаһындай, бының да
Башы һыймаҫ бер ерҙә,
Миңә ҡалды бер бәлә
Ҡаңғыртырға сит ерҙә.
Көн дә биш-алты бисә
Килеп тора дау менән,
Башҡайымды был бала
Ашатмағайы яу менән», —
Тип һуҡранып йөрөүен
Ситтән тыңлап, бер кеше:
«Иҫәнбайҙың бисәһе
Тыума бала тапҡан», — тип,
Илгә алап һалған, ти.
Был хәбәр тирә-яҡҡа,
Бер ҡолаҡтан ҡолаҡҡа,
Ханға барып еткән, ти.
«Илдә туҡлыҡ, йоғом* юҡ,
Көндә саңлы ел-дауыл,
Күҙ асырға әмәл юҡ», —
Тип һөйләнеп, шәйехтәр,
Дин башлығы муллалар
Ханға йыйылып барған, ти.
Иҫәнбай ман бисәһе,
Был хәбәрҙе ишетеп,
Нишләргә лә белмәйсә,
Ҡайғырышып ҡалған, ти.

Берҙән-бер көн Нуретдин,
Бик асыулы күҙ һытып,
Намыҫланып, хурланып,
Өйгә ҡайтып ингән, ти.
Иҫәнбайҙар йыуатып,
Әсәһе менән атаһы
Был урҙанан ҡасҡанды,
Олатаһы Ҡотлоно
Иҙеүкәй өсөн аҫҡанды, —
Барын әйтеп аңлатып,
Асып һөйләп биргән, ти.
Егет белгәс бар эште,
Иҫәнбайҙы, бисәһен
Был урҙала тотмайса,
Бергә алып ҡаскан, ти.
Яйыҡ буйлап Уралға
Ҡайтып етеп барғанда,
Шәғәле бей аймағы
Туҡтамышҡа ярҙамға
Атҡа менеп ятҡанда,
Былар барып ингәндәр,
Төрлө халыҡ күргәндәр;
Иҙеүкәйҙең Уралда
Юҡ икәнен белгәндәр.

Нуретдин шул саҡ, ҡырт ҡына
Иҫәнбайҙы туҡтатып,
Былай тиеп әйткән, ти:
— Һеҙ ҡайтығыҙ Уралға,
Мин китәйем былайға:
Илде йөрөп гиҙәйем,
Ни барыны беләйем, —
Тиеп, юлда айырылған.
Шәғәленең йәйләүен
Үтеп китеп барғанда,
Халыҡ тыуына ҡайырылған.
Шәғәле бейҙең үҙенең
Бөтә ырыуын йыйҙырып
Һөйләп торған еренә
Егет барып тап булған.

Шәғәле:

— Сатмыр хан тигән яуыз,
Батыр йыйып, яу асып,
Урал таба килә икән.
Яйыҡты алып нуғайға,
Иҙелде алып ҡалмыҡҡа, —
Барын бүлеп бирә икән.
Мал-тыуарҙы пол* ҡылыр,

Ҡатын, бала-сағаны,
Берен ҡуймай, ҡол ҡылыр.

Шәғәле һүҙен ишеткәс,
Нуретдин дә түҙмәгән,
Батыр һынар майҙанда
Үҙенә тиң эҙләгән:
Ат өҫтөндә уйнаған —
Халыҡ ҡалған хайранға;
Билбау алып көрәшеп,
Ҡош осороп, ҡош атып,
Барынан да ал булып,
Өҫтөн сыҡҡан майҙанда.

Майҙандағы барыһы:
Ҡарт-ҡороһо, йәш-елкен,
«Батыр булып тыуған», — тип,
Ауыҙ һыуы ҡорошоп,
Быны маҡтап һөйләгән.
Шәғәле шундуҡ уҡ-һаҙаҡ
Был батырға һайлатып,
Менеренә яҡшы ат
Эйәрләтеп бирҙергән.
Батыр егет икән, тип
Биш мең яуға баш ҡылған.

Батырҙарҙы йыйҙырып,
Яуға оҙатыр саҡ еткәс,
Йәш-елкенсәк, ҡарт-ҡоро —
Бары йыйылып, хушлашып,
Ҡитергә тип ат менгәс,
Был батырҙан һорашып,
Төрлө яҡтан һүҙ ҡушҡас,
Иҫәнбайҙың улы, тип
Үҙен һөйләй башлағас,
Бер бисә шул сағында,
Ҡуңыр йөҙөн ағартып,
Түҙмәйенсә һүҙ асып,
Иҫәнбайҙың балаһы
Нисә икәнен һораған:
— Иҫәнбайҙа бер бала
Етем тороп ҡалғайны,
Уны меҫкен әсәһе
Ҡамышлыҡта тапҡайны.
Ҡейем кейер донъяһы,
Исем бирер атаһы
Ул баланың булмағас,
Тик әсәһе Мораҙым тип
Уға исем ҡушҡайны.
Хәҙер уның әсәһе

Бармы-юҡмы икәнен
Белмәй йөрәк һыҙлата.
Әсәһе барып табырға
Теләһә лә, баралмай:
Хан аҫырға эҙләтә.
Батыр егет, һин үҙең
Шул баланы беләмһең?
Ата-әсәңдең тел төбөн
Шул турала һиҙәмһең?..

Бисә һүҙен бөтмәҫтән,
Батыр егет һиҫкәнгән;
Аттан ырғып төшкән дә,
Төпсөп, инәлеп, бисәнән
Ҡем икәнен әсәнең
Бик ялуарып һораған.
Әсә ҡурҡып әйтмәгән,
Тәү үҙенән һораған;
Батыр, аулаҡҡа алып,
Баштан-аяҡ һөйләгән.

Әсә шул саҡ, ҡосаҡлап,
Үҙе Ғәнәкә икәнен,
Батырға әсә икәнен,
Ил тетрәткән Иҙеүкәй
Батырға ата икәнен,
Тыуып ҡырыҡ көн торғас,
Ҡамышлыҡта ятҡанда,
Мораҙым тип бер үҙе
Уға исем ҡушҡанын —
Энәһенән ебенә
Барын теҙеп һөйләгән.

Шул сағында Нуретдин
Һис берәүгә белдермәй:
«Мин — Мораҙым, Мораҙым!» —
Нуретдин тип әйттермәй,
Меңбаш булып Шәғәлегә,
Әсәһен алып үҙе мән,
Сатмыр ханға ҡарышы
Яуға киткән, ти, икән.

Ат менеп, яу ҡуҙғалғас,
Яуы шулай ҙур булғас,
Һөйөнсөгә Урҙаға
Шәғәле үҙе сапҡан, ти,
Туҡтамышҡа килгән дә
Шулай тиеп әйткән, ти:

— Ай, оло хан, оло хан,
Һин ҡушҡанды тыңланым:
Әжәлһеҙ ятып үлмәһәм,
Сатмыр ханды ҡолатам!

Ун мең батыр тупланым,
Араһында ир батыр,
Мораҙым тигән бер батыр,
Аҫау тота ҡороҡһоҙ,
Батырҙар ман көрәштә
Көрәше ҡалмай үлекһеҙ.
Тимерең мән тубылғы
Бөгөү өсөн батырға —
Икеһе лә барыбер;
Арҡаның ман тегәр еп
Өҙөү өсөн батырға —
Икеһе лә барыбер;
Батманың ман бармаҡса
Күтәрергә батырға —
Икеһе лә барыбер.
Йөрәге унық — ҡуш йөрәк,
Йоҡоң менән үлемең —
Унық өсөн барыбер!

Шул батырға ат бирҙем,
Биш мең яуға баш ҡылдым.
Яман яуҙы ҡырыр ул,
Ҡуйға килгән бүреләй,
Сатмыр хандың яуыны
Берен ҡуймай быуыр ул, —
Тип һөйләгәс Шәғәле,
Туҡтамыш хан шатлыҡтан
Бары бейен йыйҙырған;
Сатмыр ханға ҡарышы
Барын яуға ҡыуҙырған.

Бер яғынан Шәғәле,
Бер яғынан Туҡтамыш
Иҙеүкәйгә ҡарышы
Ҡаты яуҙы асҡан, ти.
[Сатмыр хандың яу башы
Иҙеүкәй тип берәү ҙә
Күпкә саҡлы белмәгән][87].

Атышҡандар өс-дүрт көн,
Ҡан ҡойғандар өс-дүрт төн.
Был алышта һәр яҡтан
Бик күп кеше үлгән, ти.
Бишенсе көн тыуғанда,

Ерҙе ҡаплап һәр яҡтан
Яу эркелеп килгәндә,
[Тарпан буҙға атланып,
Торҡа кейеп башына,
Ҡалҡан тотоп ҡулына][88]
Иҙеүкәйгә ҡарышы
Мораҙым килеп сыҡҡан, ти.

Ҡылыс уйнап, сатылдап,
Ҡалҡандан ут ялтырап,
Ҡаты һуғыш барғанда,
Иҙеүкәйҙең тауышынан
Күп батырҙар, ҡалтырап,
Ситкә тайпылған саҡта,
Иҙеүкәйҙең тауышына,
Ҡылыс һелтәү һолона,
Ғәнәкә килгән әлһерәп;
Иҙеүкәйгә — Улың! — тип,
Мораҙымға — Атаң! — тип,
Ҡан-ҡарымта эҙләргә
Арағыҙҙа дау юҡ, — тип,
Ике араға ташланған.

Мораҙым ман Иҙеүкәй,
Икәү-ара аңлашып,
Ҡылыстарын ташлаған.
Мораҙым шундуҡ яуынан
Шәғәлене йомарлап,
Ҡулын ҡулса ботарлап,
Сығарып алып ташлаған.

Мораҙымдың бар яуы
Иҙеүкәйҙе танығас,
Мораҙым ҡылыс ташлағас,
Иҙеүкәйгә ыҡтаған.
Туҡтамыштың күп көсө,
Уралдан килгән биш батыр
Тағы ҡорал ташлағас,
Сәләхи ҙә, яңғыҙлап,
Туҡтамышҡа саптырған.

## XVII. Сәләхиҙең әйләнеп ҡайтҡаны, Туҡтамыштың кесе ҡыҙын урлап ҡасҡаны[89]

Эштең барын төшөнгәс,
Сатмыр хандың яу башы
Иҙеүкәй икәнен белгәс,
Урҙаны ташлап китергә,
Туҡтамыштың бер ҡыҙын
Үҙенә бисә итергә,
Тип Сәләхи уйлаған.
Туҡтамышҡа ошоно
Аҡыл итеп һөйләгән:

— Иҙеүкәй ҡуймаç, килер ул,
Ерең-һыуың алыр ул.
Бисәһе өсөн мине аçыр,
Балаһы өсөн улың аçыр,
Атаһы өсөн һине аçыр,
Әсәһе өсөн бикәң аçыр,
Данлы ҡыҙың Ынйыны
Барыбер ҡуймай, бер алыр.
Ҡанлы яуҙар бөткәнсе,
Илең ташлап торһаңсы!
Урыныңа хан ҡылып
Улың ҡуйып торһаңсы!
Сәләхи һүҙен Туҡтамыш
Һис уйлауһыҙ хуп күргән.
Һис иленә һиҙҙермәй,
Күп бейҙәргә белдермәй,
Туҡтамыш хан, ханбикә —
Бер төн икәү юҡ булған.

Туҡтамыш хан киткәс тә,
Иҙеүкәй ҡамап алғас та,
Сәләхи Ынйыға килеп,
Уға хәйләһен ҡороп,
Алып китеү уйы ман,
Уның яйын тартҡан, ти.

Ынйының һис тел төбө
Ҡасыу яҡлы булмағас,
Иҙеүкәйҙең килеүен
Ынйы тартып һөйләгәс,
Сәләхи шул саҡ Кинйәне
Урлап китмәк уйы ман,
Янбайҙы тиҙ саҡыртып,
Икәү кәңәш иткән, ти.

Янбай ҡайтып Ҡырымға
Һыялмаҫын аңлатып:
— Илде талап, мал йыйып,
Аҡ Урҙаға килтереп,
Хан һарайына килеп,
Бей булғас, Янбай, үҙең,
Илең тотоп һуйыр, — тип,
Төрлө яҡтан Янбайҙы
Тәү ҡаҡшатып алған, ти. —
Үҙем ҡайтып нығынһам,
Бары илде ҡулға алһам,
Үҙеңде ҡурсаларға
Үҙ өҫтөмә алам, — тип,
Мөҫөрәтеп* ҡуйған, ти.
Сәләхи шундай һүҙ биргәс,
Серен һөйләп үҙ күргәс,
Янбай быға шатланған,
Урлашырға Ҡинйәне
Үҙ өҫтөнә алған, ти.

Янбай инеп Ҡинйәгә:
— Атаң ҡасып ҡотолдо,
Ағаң ҡалһа, — тотолдо,
Иҙеүкәй килер, ҡуймаҫ ул,
Ҡан ҡойҙормай туймаҫ ул;
Ата-әсәһе, бисәһе,
Балаһының ҡононо
Алмайынса булмаҫ ул.
Атаһы өсөн — ағаңды,
Әсәһе өсөн — бисәһен[90],
Балаһы өсөн бераүең
Аҫмайынса ҡуймаҫ ул.
Минең кәңәш һиңә шул:
Ул килгәнсе, ҡасып тор,
Йә булмаһа, ҡаршы бар!
Данлы ҡыҙы килгән, тир,
Ир ҡәҙерен белгән, тир,
Ынйыны алмай, һине алам,
Тиеп, һиңә һүҙ бирер!

Янбай шулай тип әйткәс,
Ҡыҙыҡай быға алданған;
Һис бераүгә белдермәй,
Ағаһына һиҙҙермәй,
Ҡинйә юлға сыҡҡан, ти.
Аңдып торған Сәләхи
Юлда тотоп алған, ти;
Ҡул-аяғын бәйләтеп,
Ат өҫтөнә һалдырып,
Ҡырым ҡарай ҡаскан, ти.

# XVIII. Моразымдың Сәләхиҙе бастыра киткәне; Туктамыштың һөйәк-һаяғын Иҙеүкәйҙең ҡоҙғондарға һипкәне[91]

Туктамыш хан киткәс тә,
Туктамыштың балаһы
Ҡадирбирҙе хан булғас,
Иҙеүкәйҙең яуынан
Бөтә яуы еңелгәс,
Икмәк-тоҙон ҡулға алып,
Баш һалғанын белдереп,
Иҙеүкәйгә буй биреп,
Яуын ҡаршы алған, ти.
Хан һарайын уратып,
Батырҙарын эйәртеп,
Иҙеүкәй килеп ингәндә,
Ҡадирбирҙе, бикәһе,
Ынйыбикә иркәһе,
Янбай батыр — дүртәүһе
Бергә ҡаршы алған, ти.
Туктамышты, бикәһен,
Сәләхи мән Ҡинйәне
Иҙеүкәй бында күрмәгәс,
Булатын һурып ҡынынан,
Ҡадир ханға[92] уҡталып,
Ҡайҙалығын һораған.
Ҡадир, яуап бирә алмай,
Аптырауға ҡалғанда,
Теҙеп берен ҡалдырмай,
Янбай һөйләп бирган, ти.

Иҙеүкәй ил йыйҙырған,
Талап, тартып алынған
Бөтә малды бирҙереп,
Илдә шатлыҡ тыуҙырған.
Уралдан килгән батырҙың
Бишеһен дә бей ҡылып,
Ҡире Уралға ҡайтырға
Барыһына аңлатҡан.

Биш-алты мең яу алып,
Сәләхиҙе тоторға
Моразымға эш ҡушҡас,
Моразым яуға бармайса,
Ни эшләптер, шыңшығас,
Хандың ике ҡыҙының
Береһен һайлап алырға
Моразымға юл ҡуйған.

Иҙеүкәйҙең әйткәнен
Батырҙары тыңлаған,
Ат менеп, яу эйәртеп,
Бары юлға йүнәлгән.

Иҙеүкәй менән Ғәнәкә,
Өсөнсөгә Фирҙәүес,
Уйнап-көлөп баймандa,
Хандан ҡалған һарайҙа
Бер нисә көн йәшәгән.

Бөтә илдә маҡтаулы,
Үҙе асыҡ сырайлы,
Күрһәң күҙең сағылыр:
Теше — ялтыр, көмөштәй;
Һүҙҙән туймай һөйләшеп,
Һөйләгәндә ҡашы уйнап,
Иҙеүкәйҙең алдында
Уйнап торғас иркәләп,
Яңы турыҡҡан ҡолондай,
Сәскә йыйған бал ҡорттай,
Һыны һылыу шул саҡлы,
Бер күреүҙә арбарҙай,
Ҡыйғас ҡашлы, ҡара күҙ
Фирҙәүесте күргән һуң,
Ынйыҡай бик көнләшкән.

«Сатмыр хан тигән атаһы,
Бер хоҙайҙай, илендә
Данлы ҙур хан булғанға,
Уға көндәш булып мин,
Иҙеүкәйгә барып мин,
Фирҙәүестәй һылыуҙан
Иркәлектә ал булып,
Иң һөйөлгән йәр булып,
Барыбер дан сәсә алмам», —
Тип тағы ла уйлаған,
Иҙеүкәйгә барыуҙан
Ынйы шуға төңөлгән.

Һарайҙа бары уйнашып,
Ашап, эсеп, көлөшөп,
Шатланып көн иткәндә,
Мораҙымдың илсеһе
Ҡабаланып ингән дә:
— Ҡара диңгеҙ яғалай
Ҡараби*, Алуш* тауҙарҙа.
Түнәс* йылға буйында,
Бабуған* тигән йәйләүҙә,

Сәләхи мән яу асып,
Шунда яуын ҡаҡшатҡас,
Сәләхи ҡасып Сағутҡа*,
Һырынышып бикләнгәс,
Моралым ҡыраң яһаны;
Сәләхиҙе үлтереп,
Ҡинйәне тотоп алам тип,
Торлағына барғанда
Ҡинйә бейек ҡаянан
Үҙен үҙе ташланы[93], —
Тигән хәбәр һөйләгән.

Шул саҡ тағы Иҙеүкәйгә
Туҡтамыштың яу йыйып,
Сит батшанан көс алып.
Яу асырға килгәнен
Йәнә бирәү белдергән.

Иҙеүкәй, шундуҡ яу йыйып,
Аттарына менгән, ти;
Туҡтамышҡа ҡарышы
Яуға сығып киткән, ти.
Туҡтамыш ман Иҙеүкәй,
«Ҡамҡалы күл ҡом сәуад»[94]
Тигән күлдең янында
Икәү һуғыш асҡан, ти.

Туҡтамыштың бар яуын
Иҙеүкәй ҡыраң ҡылғас,
Ҡалған яуы бары ла
Һөңгө-ҡылысын һалғас,
Туҡтамыш хан ҡасҡан, ти;
Туҡтамыштың артынан
Иҙеүкәй ҡыуып сапҡан, ти.
Туҡтамыш хан артынан
Баҫмалатып, һайтлатып,
Иҙеүкәй ҡыуып яҡынлап,
Килеп етә башлағас,
Туҡтамыш хан, аптырап,
Ҡамҡалы күл ҡамышына
Аттан төшөп боҫҡан, ти.
Туҡтамыш ингәс ҡамышҡа,
Саптырҙаған тауышҡа
Ҡыҙғатау, аҡсарлаҡтар,
Күтәрелеп барыһы,
Күлде ҡаплап осҡан, ти.

Туҡтамышты турылап,
Ятҡан урынын яҫҡышып,

Бер ҡыҙғатау ҡыҙғылдап,
Баш осонда осҡан, ти.
Туҡтамыш хан: «Һиҙҙерә,
Иҙеүкәйгә белдерә», —
Тип, ҡошҡа инәлеп,
Былай тиеп әйткән, ти:

— Ай, ҡыҙғатау, ҡыҙғатау,
Ҡыҙғатау һин, ҡыҙыл ҡош,
Сыр-сыу һалма, ҡыҙғатау,
Күл ситенә барып төш;
Йәнен һаҡлап ҡасҡан хан
Ҡамышына һырышҡан,
Ҡанатыңды елпетеп,
Муйыныңды һуҙма буш.
Ҡамсы ла тейер муйыныңа,
Ҡан сорғолор ҡуйыныңа,
Һин дә айырылырһың күлеңдән,
Мин дә айырылдым күбемдән[95].

Ҡыҙғатау:

— Туғайымды ҡуйманың,
Һыу буйымды ҡуйманың, —
Саҡ баламды осорһам,
Барын аттың, ит иттең;
Дүрт аяҡлы мал ҡуймай,
Барын ейҙең-ашаның,
Инде килеп бында ла
Ханлыҡ ҡыла башланың![96] —
Тиеп, ҡош һаман
Уранғылап осҡан, ти.
Шунан һиҙеп, Иҙеүкәй
Ханды барып тапҡан, ти,
Ханды һөйрәп алған, ти,
Яу янына килгән, ти.
Ханды килтереп яуына,
Былай тиеп әйткән, ти:

— Һаҙға батҡан ерендә
Муйынын эйҙе — сапманым:
Башын киҫеп ташлауҙы
Батырлыҡтан тапманым.
Ханда кемдең ҡоно бар,
Әйтә торған һүҙе бар!

Һайтлап, һайтлап ҡыуылған,
Илдең күптән табалмай
Сарға төшөп юллаған[97],
Ҡанын ҡоймай малының

Терелəй тотоп ашаған,
Иң уҫалдың бере был,
Ил əҙлəгəн бүре был! —

Тигəн һүҙен əйтеп тə
Бөтəлмəгəн Иҙеүкəй,
Тешен ҡыҫып йөрөгəн,
Күҙенə ҡан һауҙырған,
Һыҡтап йөрөгəн йөрəккə
Ҡара ҡаны ултырған
Яу тынырға бирмəгəн —
Шунда ханды онтаған;
Иҙеүкəй батыр ҡараһа,
Һөйəген дə күрмəгəн[98].

Туҡтамыштың бар яуын
Үҙенə баш эйҙереп,
Туҡтамыштың онталған
Һөйəк-һаяғын йыйҙырып,
Ҡоҙғондарға һиптереп,
Иҙеүкəй ҡайтып киткəн, ти.

## XIX. Ҡадирбирҙе менəн Янбайҙың Иҙеүкəй менəн Мораҙымды ыҙғыштырғаны

Туҡтамыш хандың үлтерелеүен ишетеп, Ҡадирбирҙе, уның бисəһе, Янбай өсəүлəп бик ҡайғырған. Береһе Урҙа башында ҙур хан булыр, икенсеһе ҡорбаш булып, беҙгə юл бирмəй, үҙҙəренə ҡол ҡылыр, тип һөйлəшеп, нисек тə Иҙеүкəй менəн Мораҙымдың араларын боҙорға, ике арала ҡанлы яу астырып булмаҫ микəн тиешеп, кəңəш ҡорған, ти.

Мораҙым ҡайтҡас яуынан,
Ҡадирбирҙе, бикəһе,
Янбай менəн өсəүһе,
Мораҙымға димлəшеп,
Ынйыны ал, тип көслəшеп,
Туй яһамаҡ булған, ти.
Атаһы əйткəн һүҙ булғас,
Əсəһе лə ҡул ҡуйғас,
Мораҙым да был уйға
Риза булған, күнгəн, ти[99].

Ҙур туй яһап һарайҙа,
Мораҙым ман Ынйыҡай
Бергə тора башлаған.
Ирле-ҡатын икəүлəп,

Уйнап-көлөп серләшеп,
Бер-беренән йәшермәй
Һүҙ ҙә һөйләй башлаған.
Ынйы бер төн ятканда,
Иҙеүкәй мән йәш сакта,
Бергә уйнап-көлгәнен,
Иҙеүкәй алам тигәнен
Һөйләп бөткәс, аҙактан
Былай тиеп алдашкан:
— Һине яуға оҙаткас,
Янғыҙ йоклап ятканда,
Кеше-маҙар йоклағас,
Килеп ишек аскан да,
Яныма килеп баҫкан да,
Кулына бысағын алып,
Һуям хәҙер һине тип,
Яғамдан бороп тотто;
Ай-вайыма куймайсы
Шунда атаң мине йыкты.
Улыңа әйткән нәҙерең
Бар тиһәм дә, куймансы,
Үҙе яуға киткәнсе
Төн йоклаған сағымда
Һис янымдан сыкманы.
Инде һуң ни сара бар?
Ошо көндө буйымда
Иҙеүкәйҙән бала бар, —
Тигән һүҙгә Мораҙым
Икеләнмәй ышанған.
«Үҙем тыума булғанға,
Миңә булыр бала ла
Тыума булһын тигәндер!
Һис һырыныр ер тапмай,
Морон төртөр тиң тапмай,
Мине курсып әсәйем
Камышлыкта тапканға,
Тыума егет булғанға,
Минең йөҙҙән көлгәндер!» —
Тип Мораҙым уйлаған.
Һис берәүгә әйтмәйсә,
Асыуланып ғәрләнгән.

Иҙеүкәй яуҙан кайтканда,
Мораҙым өйҙә булмаған,
Ынйы ман Мораҙымдың
Туйын белгәс, Иҙеүкәй
Йөрәгенән һөйөнгән;
Фирҙәүесте уң якка,
Ғәнәкәне һул якка,

Ынйыҡайҙы уртаға
Ултыртҡан да һөйләнгән.

Иҙеүкәй:

— Ынйы аҡыллы ҡыҙ ине,
Минән һис тә тартынмай,
Алам тиһәм, килергә
Әҙер торған ҡыҙ ине.
Уйлап торһаң, ҡарағыҙ,
Мин дә бик саф булғанмын:
Ниндәй аулаҡ саҡта ла
Бер яман эш ҡылманым,
Ирлегемә маһайып,
Бер ҡулым да һалманым.
Ғәнәкә мән араны
Хандың ҡулы йолһа ла,
Баламдан айырып үҙемде
Һарайынан типһә лә,
Ата-әсәмдең барыһын
Минең өсөн һуйһа ла;
Ҡаскы, дошман Иҙеүкәй тип,
Яманатым һатһа ла, —
Үҙем өсөн барымта,
Атам өсөн ҡон юллап,
Илгә ғауға һалманым.
Күңелемде шат тоттом,
Теләгемде ил иттем;
Илем өсөн ут йотоп,
Илем тиеп ат менеп,
Ҡулға ҡоралым алып,
«Ир ынтылһа, таш яра,
Һуҡҡан ерҙән һыу сыға», —
Олатайҙар һүҙенә
Күңелемде беркеттем.

Ынйыны күреп ҡыуанам:
Йәшлегемә бирелеп,
Әгәр яманлыҡ ҡылһам,
Ҡыҙ ҙа күнәр әле, тип
Уҫал уйымды һалһам,
Хәҙер миңә ни оят
Булыр ине был саҡта!
Бына хәҙер үҙ балам,
Бер әйтмәһә, бер әйтер
Ине миңә аулаҡта, —
Тиеп һөйләп, көлөшөп,
Былар ултырған саҡта,
Мораҙым ҡайтҡан һунарҙан;
Һис уйламай-нитмәйсә,

Бер һүҙ әйтмәй, ҡомһарып,
Ҡылысын алып ҡулына,
Атаһына уҡталған.

Ынйы алдан һиҙгәнгә,
Бөтә эште белгәнгә,
Иҙеүкәйҙең һүҙенән
Күңеле йомшап киткәнгә,
Атҡан уктай тиҙлектә
Мораҙымға йәбешкән.
Ынйыҡайға көс бирмәй,
Әсәләре һүҙҙәрен
Һис берәүһен тыңламай,
Иҙеүкәйгә Мораҙым
Ҡылысы ман һелтәнгән.

Ҡылыс тейеп китһә лә,
Күҙ ҡабағын, ҡаштарын
Киҫә ярып үтһә лә[100],
Иҙеүкәй унан үлмәгән,
Һалҡын ҡанын боҙмаған.
Һүҙһеҙ-ниһеҙ ҡылысын
Йыға тартып алған, ти,
Ынйы менән ултырғас,
Мине унан көнләшә,
Тигән уйға ҡалған, ти.

Иҙеүкәй:

— Ай, Мораҙым, Мораҙым,
Егет кенә булһаң, булһана,
Ҡылыстар уҡ тота белһәнә!
Ер йөҙөнә йүргәк Уралды
Ашаһынан аша елһәнә!
Алтын Урҙа, Урал буйында
Сулпан төҫлө балҡып торһана!
Ауыҙың ман һауала оскан
Ҡоштарҙы ла тотоп алһана!

Шулай булһын балам тип,
Атың Мораҙым ҡуйҙырҙым,
Илай-илай ялуарып,
Иҫәнгә[101] башың һыйҙырҙым!
Илем менән һинең өсөн
Күп яфалар күреп уҙҙырҙым!
Сатмыр ханға барып тилмереп,
Туҡтамышты килеп емереп,
Билеңә ҡәмәр быуҙырып,
Ҡыҙынан һине һөйҙөрҙөм!
Тиреҫ тә тотҡан һаҙағың

Үҙ сәбенә лә тоҫҡатып,
Урҙа ла ханын ҡыйратып,
Үҙенде дә баш иттерҙем!
Ҡартайған да көн ошонда,
Уралым да мине көткәндә,
Башымды ошолай хур иттең!

Мин ир ҙә булдым, ир булдым!
Иҙеүкәй ҙә булып дан алдым!
Тоткон яткандарҙы һарайҙан
Барын сығарҙым, тараттым!
Ҡайғыра-ҡайғыра таянған
Көтөүсенең тоткан таяғын
Хандың да ҡулына таянттым!
Томан да баҫҡан юлымды
Эҙләп тә таптым, Мораҙым!
Һуҡыр булһам да, аҙашмам!
Маяҡтар ҡаҡтым, Мораҙым!

Бер атанан биш тыуһа ла,
Атҡа ла менһә, иш булһын!
Илен дә дошман уратһа,
Уҡ атырҙай ҙа ир булһын!
Шулай ҙа булған ҡәрендәш,
Менһә лә, аты арымаҫ;
Ауыр ҙа көнгә ҡалһа ла,
Һис тарлыҡҡа тарымаҫ!
Күкрәгенә уның уҡ керһә,
Тартып та алыр ҡәрендәш;
Ҡәрендәшең булмаһа,
Шунда ла ҡалыр яңғыҙ баш!
Көндө лә болот ҡаплаһа,
Уны ла, балам, ел ҡыуыр;
Бәғерһеҙ ҙә ҡышты яҙ ҡыуһа,
Ер йөҙөндә үрт сығыр;
Ямғыр ҙа яуһа, ер йыуыр,
Күк үләндән, балам, бал тамыр,
Ҡырау ҙа төшһә, ер үлер,
Күк үләндә шул саҡ моң тыуыр!
Ирмен дә тигән ирҙәрҙе
Ил күтәрһә, уны бей итер;
Мин-мин дә тигән ирҙәрҙе
Ил тибәрһә, уны ҡол итер!
Ирмен дә тигән ирҙәрҙе
Ил таныһын уны ир тиеп,
Батырмын да мин тигәнде
Ил таныһын уны батыр тип.
Бәхет тә таптым тигәндең
Көнө лә тыуа төндән һуң;

Эш эшләнем мин тигәндең
Эше һынала йылдан һуң.

Моразым:

— Мин әсәнән тыуғанда,
Йылы урын күрмәнем;
Бала булып үҫкәндә,
Ата-әсә күрмәнем;
Тирбәнергә бишектә
Бишек төҫө күрмәнем;
Бала булып уйнаһам,
Бәғере һыҙлап саҡырған
Әсә тауышын белмәнем.
Ары оролоп-бәрелеп,
Таш бүкәндәй тәгәрәп,
Йоҙороҡка шар булдым!
Моңлап аҡҡан шишмәләй,
Күҙ йәшенә тау булдым![102]
Ата-әсәле балаға
Уйынында яу булдым;
Бар баланың теләндә
«Тыума» һүҙенә тап булдым!
Ун йәшемә еткәндә,
Осор ҡоштай талпындым;
Ун бер йәшкә еткәндә,
Яуға ҡаршы елкендем;
Ун икегә еткәндә,
Артымдан саң уйнаттым;
Ун өс йәшкә еткәндә,
Аҫау өйрәтеп, дан тоттом;
Ун дүрт йәшкә еткәндә,
Күп батырҙы көл иттем;
Ун биш йәшкә еткәндә,
Яуға ҡаршы ат мендем;
Ун алтыға еткәндә,
Атам табып хур булдым;
Ун етегә киткәндә,
Ҡатын алып ер булдым![103]

Бер ҡат күңелем һынған һуң,
Бергә торор уйым юҡ,
Данлы яуын ҡолатҡан
Урҙаң миңә кәрәкмәй,
Түшәгеңде йәйҙергән
Ҡыҙың миңә кәрәкмәй!
Мин Урҙанан китермен,
Китеп, Иҙел кисермен,
Баба булған Иҫәнде
Атам һин, тип танырмын!

Урал битен буйлатып,
Ат уйнатып сабырмын,
Алтын Урҙа шауҡымын
Барын унан ҡыуырмын, —
Тигән һүҙен әйткән һуң,
Мораҙым киткән юлына.
Ынйы ҡалмай, илаулап,
Йәбешеп сыҡҡан сабыуына.
Иҙеүкәй быны тыймаған,
Бөтә эште аңлағас,
Йәш-елкенсәк сал бөркөттән
Көнләшкән, тип уйлаған.

Мораҙым атҡа менгәндә,
Ҡамсы биреп ҡулына,
Ынйыҡай мән икеһенә
Ошо һүҙен һөйләгән:
— Айҙай яҡты нәмә юҡ,
Ҡара болот баҫмаһа;
Ирмен тигән ир булмаҫ,
Серҙең төбөн тапмаһа;
Ҡатын ҡатын булмаҫ ул,
Башҡа муйын булмаһа,
Ҡанға батҡан иренең
Ҡылыс ҡанын һөртмәһә!

Иҙеүкәй әйтеп бөткән һуң,
Мораҙым китергә булғас,
Ҡадирбирҙе һылыуын
Бер аҙ ергә оҙатҡан.
Һылыуының инсеһен:
Көтөү-көтөү һыйырын,
Өйөр-өйөр йылҡыһын
Арттарынан ҡыуҙыртҡан.

Иҙеүкәй илде йыйҙырып,
Сатмыр ханға кәңәшеп,
Бөтә эште уйлашып,
Сатмыр ханға буйһонғас,
Илгә фарман таратып,
Хандың улы Ҡадирҙе
Үҙ иленә бей ҡылған.
Иҙеүкәй, эшен бөткәс тә,
Ҡайны йорто Сатмырға
Күп мал әйҙәп, кире ҡайтҡан.

## XX. Моражымдың Уралда атаһын яманлап һөйләгәне, Һабрау ҡарттың Иҙеүкәйҙе яҡлағаны; Мораҙым Ынйыбикәнең башын сапҡаны, Ҡадирбирҙе менән Янбайҙың башына еткәне, атаһына илсе ебәргәне[104]

Туҡтамыш хан бөткән һуң,
Уралдан ҡул тартҡан һуң,
Тора менән Нарыҫ бей,
Икәү бергә йоплашып,
Уралға ҡул һуҙарын
Сала-сарпы белгән һуң,
Ҡыпсаҡ, Ҡатай, Табындар,
Юрматы, Тамъян — барыһы
Тора бейҙәргә ҡаршы
Яу асырға торғанда,
Илде бергә тупларға
Иҙеүкәйҙе көткәндә,
Ер ҡаплаған мал менән
Мораҙым ҡайтып төшкән, ти.

Быны күргәс батырҙар:
«Бишәүҙән алтау яҡшы, — тип, —
Атаң ҡайтһа етегә,
Атаң ҡуйған бейҙәрҙе
Барын ҡыуып бей булған
Нарыҫты беҙ ҡыуырбыҙ;
Баба Төкләҫтән ҡалған,
Яҡшынан яман тыуған,
Ил таларға йыйынған
Тора бейҙе һуйырбыҙ!» —
Тип шатланған барыһы.

Мораҙым:

— Беҙ-беҙ инек, беҙ инек,
Ат өҫтөндә уйнаған
Ыласын ҡоштай ир инек;
Туҡтамышты емереп,
Аҡ Урҙаның өҫтөндә
Тайшанмаҫтай ир инек.
Яуҙар бөткәс, туй йыйҙыҡ,
Бейә һуйып, һый ҡылдыҡ,
Бер ҡаҙанға һыймаҫтай,
Ике ҡуҫкар* башыны
Бергә һалып, хур булдыҡ.

Хоҙа биргән бәхетемде
Атам урлап бур булды;

Моражым тигән ир даным,
Намыҫым һаҡлап Уржала,
Ҡанына һыуһап атамдың,
Ҡылыс һелтәп ер булды.
Мин булдым мин, мин булдым,
Моражым тигән ир булдым;
Күктә осор шонҡаржы
Ҡулда тотар ир булдым;
Намыҫым тапалып хур булғас,
Мин Уралға боролдом.

Үжем тыума тыуһам да,
Урал — атам тыуған йорт,
Урал — атам үҫкән йорт,
Йылҡыһы ман тулған йорт;
Бейә һауған һөтлө йорт;
Ҡымыж эскән ҡотло йорт;
Ынйы-мәрйен таҡҡан йорт;
Аҡбуж толпар юлынан
Урал тауы тыуған йорт;
Яйыҡ, Ижел батыржар
Бары шунда булған йорт;
Уларжан тыуған балалар
Үж ырыуын йәйгән йорт;
Ҡыпсаҡ, Ҡатай, Тамъяндар,
Юрматыһы, бүтәндәр
Ете ырыуын йыйған йорт.

Үжәкләп һуҡҡан тимере
Миңә хәнйәр булһын тип,
Мин — Уржанан буҫкан ир,
Уралға батыр булам тип,
Атҡа менеп күскән ир,
Ҡолон-бейә бәйләшеп,
Һауыт-һаба тултырып,
Ҡәрендәш-ырыу йыйылып,
Тора бейже, Нарыҫты
Икеһен дә һуйжырып,
Бер рәхәт йәшәргә
Уралыма ҡайтҡан ир!

Моражым һүжен ишеткәс,
Ижеүкәйже сит күргәс,
Моражымдың уйынан
Бар батыр эс тарткан, ти.
Моражымға уйжарын
Бер батыр жа әйтмәйсә,
Ат саптырып, ырыужың
Аҡһаҡалын йыйған, ти.

Аҡһаҡалдың барыһы,
Иҫәнбай ҙа, Һабрау —
Береһе ҡалмай килгән һуң,
Мораҙым үҙе ҡайтыуын
Теҙеп һөйләп биргән һуң,
«Туҡтамышты емереп,
Сатмыр ханға буй биреп,
Айыуҙан алып бүрегә
Урҙаны ҡол итте», — тип,
Иҙеүкәйҙе яманлап,
Һүҙен һөйләп бөткән һуң —
Халыҡ аптырап ҡалған, ти:
«Был ни эш?» — тип, шашынып,
Ике-яры бүленеп,
Төрлө һүҙҙәр сыҡҡан, ти.

Илдә даны сәселгән,
Күпте күргән аҡһаҡал
Һабрау ҡарт түҙмәгән,
Бөтә халыҡты туҡтатып,
Ошо һүҙҙе һөйләгән:
— Иҙеүкәй, Иҙеүкәй тигәнде
Һеҙ барығыҙ беләһеҙ;
Мораҙым, Мораҙым тигәнде
Беҙ үҙебеҙ беләбеҙ.
Иҙеүкәй тигән батыр ир —
Тимер ҡаҙыҡ йондоҙо:
Эңер тип ул йоҡламаҫ,
Таңдан ҡурыҡҡан Өлкәрҙәй,
Байыйым тип ыҡламаҫ!

Иҙеүкәй тыуҙы ир булып,
Яңы тыуған ай булып;
Атҡа менде бер булып,
Урал өсөн көн булып;
Хан, бейҙәргә күренде
Ҡурҡыныслы тау булып.
Ҡыйғаҡ, ҡыйғаҡ нәҙек ай
Көн-төн һанап нурланыр;
Урта ғүмерен һөргәндә,
Матурланып, тулыланыр.
Айҙың моңло булғаны —
Битен монар алғаны;
Көндөң моңло булғаны —
Битен болот алғаны;
Бейек тауҙың үлгәне —
Башын томан алғаны;
Ай мән ҡояштың үлгәне —
Тонйорап барып батҡаны;

Ағыр һыуҙың үлгәне —
Өҫтөн күк боҙ алғаны;
Ир-егеттең үлгәне —
Илен дошман алғаны;
Ҡара ерҙең үлгәне —
Ҡар аҫтында ҡалғаны;
Ата-әсәнең үлгәне —
Баланан хурлыҡ күргәне.
Илдең нурлы булғаны —
Батырының тыуғаны;
Илдең моңло булғаны —
Батырһыҙ тороп ҡалғаны.

Быуын-быуын үткәндә,
Үлемдән ҡалыр нимә бар?

Малдай ҡаза күрмәгән,
Ҡешегә бирһәң, бөтмәгән
Үлмәй торған — яҡшылыҡ;
Илен һөйөп ат менгән,
Көндәй тонйорап батмаған,
Башын монар баҫмаған
Батыр ирҙең исеме бар.
Быуын-быуын үткәндә,
Киң донъяла нимә тар?

Киң донъяла уйнаған,
Ҡупшы итек һайлаған
Ҡунаҡсының итеге тар.

Быуын килгән киң илдә
Урман, үлән үҫкәндә,
Тауҙың буйы йәмләнә;
Быуын килгән киң илдә
Батырҙан батыр тыуғанда,
Батыр юлынан сапҡанда,
Атанан күреп уҡ юнһа,
Илдең йөҙө йәнләнә;
Батырҙан батыр тыуғанда,
Батыр юлынан сапҡанда,
Атаға һаҙаҡ ҡайраһа[105],
Илдең йөҙө тарлана.

Һабрауҙың был һүҙен
Бөтә батыр ишеткәс,
Мораҙымдың тел төбөн
Барыһы ла төшөнгәс,
Бары халыҡ шаулашып,

Иҙеүкәйгә барырға,
Уны эҙләп табырға,
Бөтә эште һорарға,
Тиешеп һүҙ төйнәгән.

Иҙеүкәйҙән һис андай
Яманлыҡ эш булмаç, тип,
Шау-шыу ҡупҡас Уралда,
Мораҙым Урал ташлаған.
Димдең бейе — Нарыç бей,
Был ғауғаны ишеткәс,
Тора бейҙән таланып,
Бик күп ваҡыт интеккәс,
Мораҙымды саҡыртҡан.
Мораҙым барғас, ил йыйып,
Нарыç үҙенең ҡартлығын,
Батырлығы ҡайтҡанын
Илгә теҙеп һөйләгәс,
Бөтә иле, туй яһап,
Мораҙымды бей ҡылған,

Мораҙым Димдә бей булғас,
Бөтә эште ҡулға алғас,
Дим, Ашҡаҙар* буйҙарын
Тора бейҙән айырырға
Яу асмайса: «Тора бей
Был һыу буйҙан ҡул тартһын!» —
Тип, илсеһен ебәргән.
Мораҙымдың һорауын
Тора бей ҙә ҡаҡмаған.
Күрше-күлән дуçлығын
Белдереүгә, үҙенә
Мораҙымды саҡырған.

Былар икәү дуç-татыу,
Бергә бер йыл йәшәгәс,
Алмаш-тилмәш беренә
Ҡунаҡ булып йөрөгәс,
Тора бей ҙә ышанып,
Мораҙымға таянып,
Ямантауҙың итәген,
Иҙел, Яйыҡ, Нөгөштө —
Ҡыпсаҡ, Табын, Ҡатайҙың
Йәшәп ятҡан төйәген
Үҙ ҡулына алырға
Бер саҡ килеп яу асҡан.
Мораҙымды Тора бей
Яуҙа ярҙам итергә
Ат ебәреп саҡыртҡас,

Бер һүҙ әйтмәй Мораҙым
Илселәрҙе ҡайтарған.
Һуңынан да Мораҙым
Тора бейҙе яҡларға
Атҡа менеп сыҡмаған.

Мораҙым батыр бер саҡта
Тәрән уйға талған да,
Ынйыҡайға шомло тел мән
Былай тиеп һүҙ асҡан:
— Атам бер бей булғанмы,
Әсәм бикә булғанмы,
Ниңә тинтәк булдым мин?
«Ирмен тигән ир булмаҫ,
Серҙең төбөн тапмаһа;
Ҡатын ҡатын булмаҫ ул,
Башҡа муйын булмаһа,
Ҡанға батҡан иренең
Ҡылыс ҡанын һөртмәһә», —
Тигән һүҙе атамдың
Нимә булды, Ынйыҡай?

Ынйыҡай:

— Сәсем оҙон булһа ла[106],
Аҡылым юйҙым, Мораҙым!
Тәхет өсөн талашҡан
Ағам, Янбай һүҙенә
Алйотландым, Мораҙым!
Һинән ҡылыс ҡайратҡан —
Яман уйым, Мораҙым!
Ҡылысың ҡанын һөртөргә —
Минең буйым, Мораҙым! —
Тигән һүҙен әйткән дә,
Һушһыҙ булып, Ынйыҡай
Аяғына йығылған.

Мораҙым эште аңлаған,
Уҙған эшкә үкенгән,
Ынйыҡайҙың шул ерҙә
Башын сабып осорған.
Мораҙым йыйған тиҙ яуын,
Алға алған үҙ уйын:
Атҡа менгән алла тип,
Ҡылыс алған яуға тип;
Айлыҡ юлды — өс көндә
Барып еткән Урҙаға.

Атаһы Урҙала булһа,
Тәү атаһын күрмәҫкә;

Тура барып һарайға,
Ҡадир менән Янбайға
Яу асырға уйлаған.

Мораҙым ингәс һарайға,
Ҡадир менән Янбайға
Былай тип һүҙ башлаған:
— Мин — мин инем, мин инем,
Яуға ҡаршы сыҡҡанда,
Батыр торған ир инем!
Аш-һыу эскән сағымда,
Ямандар юҡ, тир инем!
Яуҙан бүтән урында,
Дошманым юҡ, тир инем!
Әжәлем мән аңлашҡан
Мин үлем юҡ, тир инем!
Сауҙагәрҙән бүтәндә
Ике тел юҡ, тир инем!
Ҡосағымда ятҡанды
Серҙәшем ул, тир инем!
Яу, яу тигән яуҙы мин —
Торҡалы ир, тир инем!
Дошман, дошман тигәнде —
Ҡонон эҙләп, ҡан һорап,
Атҡа менгән, тир инем!

Хан балаһы аҡ һөйәк,
Ата дошман һин икән!
Ике телле бер яуыз —
Янбай дошман, һин икән!
Иҙеүкәй мән Мораҙым
Һеҙҙең көткән яу икән!

Мин, мин килдем, мин килдем,
Урҙаңа төбәп, мин килдем!
Иҙелдә ятҡан ҙур илгә
Мал тултырам, тип килдем!

Һиндәй яуыз хандарҙы,
Ҡарыны йыуан Янбайҙы
Айыуҙай тауышын баҡыртып,
Ҡабырғаһын һындырып,
Ҡара ҡанын ағыҙып,
Ат бауырынан йөҙҙөрөп,
Ҡаныгыҙ эсәм, тип килдем!

Бүленә башлаған илеңде
Өрккән ҡуйҙай итергә,

Айырыла башлаған иленде
Айырылған ҡуйҙай итергә,
Яуығыҙ көҫәп, ат мендем! —
Тигән һүҙен Мораҙым
Ханға һөйләп бөткән дә
Янбай менән Ҡадирҙың
Башын сабып өҙгән, ти;
Бөтә илде йыйған, ти.
Элек ханға ҡаршы,
Үҙенә кәңәшсе булған
Бер батырҙы һайлатып,
Урҙаға бей ҡылған, ти.

Был батыр бей булғас та,
Мораҙым фарман тараҡкан:
Иҙеүкәйгә барырға,
Бөтә эштең булғанын
Уға асып һалырға,
Сатмыр ханға бүләккә
Бер өйөр мал ҡыуҙырып,
Мораҙым ошо бейҙе
Шул көн юлға оҙатҡан.

## XXI. Иҙеүкәйҙең ҡайтырға ашҡынғаны, Сатмыр хан менән һүҙгә килгәне, бәхәстә еңеп сыҡҡаны

Аҡ Урҙанан яңы бей
Сатмыр ханға килгәс тә,
Иҙеүкәйҙе тәү күреп,
Бөтә серҙе асҡас та,
Иҙеүкәй эште аңлаған.
Эштең төбөн барын да
Сатмыр ханға әйтмәгән.

Сатмыр хан был йәш бейгә
Ҡырын күҙен һалған, ти.
Иҙеүкәй быға юл ҡуймай,
Сатмыр хандың янында
Был йәш бейҙе яҡлаған.

Иҙеүкәй, бейҙе оҙатҡас,
Был бей аша Уралда
Яу сыҡҡанын ишеткәс,
Сатмыр ханға аулаҡта
Үҙ теләген аңлатҡан:
— Ай, оло хан, уйласы,

Әйткән һүҙем тыңласы!
Үҙең атҡа менмәгән,
Һис тә яуҙы күрмәгән,
Атанан мираҫың итеп,
Ханлыҡ алған ир түгел!

Төнгә аҡкан Иртешен*,
Көнгә аҡҡан Балҡашын*
Ике имсәк һанаған,
Буйында илен йәйҙергән,
Тарбаға тау япрағы
Бер армытҡа баҫҡан да;
«Мин — Сыңғыҙ!»[107] — тип ҡысҡырған,
Оло Сыңғыҙ һуңынан
Ханлыҡ ҡылған Үгәдәй[108]
Төйәк иткән урынға,
Шуны барып алырға,
Һис тә тыныс йоҡламай,
Борсолаһың түгелме?
Өлкә-өлкә бары үҫкән
Иңләп ятҡан типһәнеп
Ҡош-ҡортона ояға —
Осҡаты ман юшаны;
Аты сәсәп, һөмһөрәп,
Сабып килгән батырға —
Күләгәһенә алырҙай
Шыр урманға алышҡан,
Унда-һанда һерәйгән
Күкһәүел тигән ағасы;
Юйып типһән тынлығын
Сыр-сыу килеп сәркелдәй
Һауыр, йомран, сысҡаны;
Ҡоҫоғона аунаған
Туйҙа эскән ҡоҙалай
Табынынан аҙашып,
Ҡамышында йәшәгән
Һаҙға аунаған ҡабаны;
Боҙға ятып бәрәнләп,
Йәше тулып, мандымай,
Көҙгә саҡ йөнө ҡупмаған[109],
Дегәнәккә һырылған
Бүлтеректән ҙур түгел,
Аҡһыл ҡарһаҡ бүреһе;
Ҡуҙ еҫенә ҡалғыған,
Алпанлаған байғоштай,
Ятһа, ҡуныш табалмай,
Унда-һанда күренгән
Аҙап бөткән айыуы;
Яуҙан ҡалған аяҡһыҙ,

Менәренә аты юҡ,
Ҡайта торған йорто юҡ,
Ҡамыш төбөн һаҡлаған,
Ат урлаған ҡараҡтай,
Көндөҙ ятып йоҡлаған,
Осалмайса зарыҡҡан,
Ҡапһаң, ите һаҙ татыр,
Тауыҡ аяҡ, ҡашҡа баш
Күл, йылғала өйрәге —
Бары буйын йәмләгән;
Буйын буйлап йөрөгәндә,
Ҡом бураны уйнаған;
Уба-уба тоҙона
Бөтә иле маһайған;
Өҙәңгенән бүтәндек
Иләндә тимер сыҡмаған;
Сыңғыҙ хандың ясаһын*
Бөтә илгә йола тип,
Оран һалған Сыҡтайҙың[110]
Төйәге булған Алатау*,
Уны ла аламын тип,
Елкенгән — һин түгелме?

Яуҙа үҫкән ир батыр
Өйҙә тыныс йоҡлармы?
Күбәләген, бал ҡортон
Үҙ буйына арбаған;
Алһыу, ҡыҙыл сәскәһен
Ҡулына тотоп һылыуы
Маҡтап, һөйөп йырлаған,
Хоҙай бирер йәннәттән
Туғайы һылыу Уралтау!

Үҙәк буйын ҡараһаң, —
Бәйләнеп ятҡан кәрешкә;
Аҡлан, сағыл буйҙары —
Ҡылған, сәскә һәр төҫтә;
Ҡолағында алҡаһы
Елберләгән һылыуҙай,
Көнәркәш үҫкән ағаслы;
Балаһын көткән әсәләй,
Ҡуйынын асҡан ҡаялы;
Ҡайнап-ҡайнап, ҡабарып,
Ҡалҡып килгән болоттай,
Бик алыҫтан күгәреп,
Ҙур япраҡлы ағастай
Күренеп ятҡан Уралтау!

Бер йәнде лә ҡуймаҫтай —
Бөтәһен айҡап йөрөгән
Айыу, бүре, бөркөтө —
Улар ҙа һөйгән Уралтау!

Ҡанаттарын талдырып,
Түл йәйергә ынтылып,
Туғайын, күлен һағынып,
«Уралым!» — тип саңҡылдап,
Йәш баланың күңелендә
Моңло аппаҡ аҡкоштар —
Улар ҙа һөйгән Уралтау!
Таң сулпаны ҡалыҡҡас та,
Таң һыҙылып атҡас та,
Һаҙ талын һайлап һайраған
Һандуғас та һөйгән тау!

Йылғыр елдән ҡағылмай,
Һүҙҙәрен сит аңламай,
Араһына ят кермәй,
Көңгөр-ҡаңғыр серләшкән
Егет менән һылыуҙай,
Көмөштәй улаҡтан сылтырап,
Йылғыр аҡкан йылғаһы —
Улар ҙа һөйгән Уралтау!

Ботағы алтын алҡалай,
Япрағы көмөш тәңкәләй,
Теҙелеп күккә артылған,
Ағасы ҡаплап өҫкәйен
Йәмләндергән Уралтау!
Күлендә йөҙгән ҡаҙ, өйрәк,
Талында һайрап ҡоштары,
Йәш балалай уйнаған
Битендәге йәнлеге —
Бары маҡтаған Уралтау!
Барына әсә — Уралтау!
Барына ата — Уралтау!
Шунда үҫкән мин батыр,
Миңә лә ата — Уралтау!

Атам кейәү булған ер,
Әсәм килен булған ер,
Өҫтөм ап-аҡ йыуған ер,
Ҡолон айғыр булған ер,
Ятып ҡалған бер бәрәс
Мең ҡуй булып үргән ер!
Һәр төҫтәге йылҡынан
Өйөрө туғай тултырған,
Балығы тайҙай тулаған,

Баҡаһы ҡуйҙай һыулаған,
Ете ырыу, ун ике йорт —
Урал һөтө Иҙелем
Барыһын да һуғарған;
Һыуы тәмен һалмаған,
Эсмәгән йән ҡалмаған
Иҙел, Яйыҡ, Димдәрҙең,
Һаҡмар, Эйек, Әйҙәрҙең* —
Ата-бабам бары ла
Быуын-быуын торған ер!
Ата-әсәләй Уралын,
Үҙе тыуған төйәген
Һөймәгән ир булырмы?
Әсәм тыуған бейек тау —
Баба Төкләс һарайы.
Иҙелдә тороп уҡ атһа,
Яйыҡҡа барып юғалған;
Үҙе тауҙа ултырып,
Ун ике бейҙе үлтергән,
Теләгенә еткергән,
Тояғы ергә теймәгән
Толпарҙан ғына ат менгән,
Үҙе һөйгән дусына
Артығым китә тимәгән.
Баба Ғәзиз улынан —
Әүлиә Төкләс бабанан
Тора тигән ул тыуған.
Иҙел, Димдең буйында,
Атанан ҡалып, бей булған —
Ата юлын ҡыумаған
(Илем шунан ҡыураған*,
Шуға йөрәге ташмаған)
Илгә батыр булырмы?
Ат уйнатҡан батырҙың
Барын сүпләп хур иткән,
Ҡәпәс кейгән батырҙың
Барын йыйып ҡол иткән,
Һылыу ҡыҙҙың барыһын,
Егетен һуйып, тол иткән,
Ҡөләс йөҙлө илемдең
Күҙ йәшене күл иткән,
Батыр тыуған йорттарҙың
Барыһын да көл иткән
Нарыҫ тигән бер батыр
Ил таларға яу йыйған.
Шул дошманға яу асмай,
Батыр ятып тынырмы?
Иле ҡанға батҡанда,
Ҡанһыраған илене

Яҡлап сапмаған егет
Илгә батыр булырмы?
Үҙ илемә ҡайтайым,
Баба Төкләҫ тауына
Менеп уғым атайым!
Иҙелем быуып, тынсытып.
Илемә ирек бирмәйсә,
Малын алып, йонсотоп,
Ил талаусы бейҙәрҙе —
Барын илдән ҡыуайым!

Иҙеүкәйҙең был һүҙен
Сатмыр аулаҡ тыңлаған,
Сер һыйырҙай бейҙәрен
Йыйып, барын һөйләгән.
Ҡәңәш-төңәш иткәндә,
Сатмыр хандың бейҙәре
Иҙеүкәйҙең теләген
Береһе лә ҡаҡмаған.
Сатмыр хан да шул саҡта,
Йылмайып ҡарап торған да,
Иҙеүкәйгә ҡарата
Былай һүҙен башлаған:

— Ай, Иҙеүкәй, Иҙеүкәй,
Ҡайҙа баҫһаң, шул ерҙә
Ни теләһәң — эшләнең.
Туҡтамышта торғанда,
Бөтә хаким, аптырап,
Бер яуапһыҙ ҡалғанда,
Һин яуапһыҙ ҡалманың.

Һинән булдым һорарға:
Берәү барған баҙарға
Бер йөк күмер һатырға;
Һораған өс етмештек[111]
Йөгөндәге барына.
Алыусы ҡарап торған да,
Ун етмештек биргән дә,
Нәмә булһа йөгөндә —
Һатып алған барын да.
Күмерен өйгә илттергән,
«Йөккә ат та инә», — тип,
Алып ҡалған атын да.

Миңә килгәс дау ҡылып,
Һатыусыны ҡаҡтым да,
Алыусыға була, тип
Алып бирҙем атын да.

Бына шул эште һин
Нисек хөкөм итер инең,
Хаким булһаң әгәр ҙә?

Иҙеүкәй:

— Күмер һатҡан һатыусының
Бите ҡара, күңеле аҡ;
Илдә туған теле бер,
Унын бүтән теле юҡ.
Йөк тигәнем күмер тип,
Тартыусы йөк түгел тип,
Йола ҡушҡан эш күреп,
Йөгөн барын һатам тип,
Бар булғанын һатҡан ул.

Алыусы ул сауҙагәр, —
Ике күңел, ике тел:
Бер күңеле һөйләшкән, —
Һатыусыны алдарға
Икенсеһе уйлашҡан.
Йөгө өҫтөндә ултырып,
Сауҙа итһә һатыусы,
Алыусы унын үҙен дә
«Бар булғаны» иҫәпләп,
Мәңге тотоп ҡол итһә,
Алыусының ирке бар!

Сатмыр хан:

— Кейәү булдың үҙемә,
Ҡара яҡманың йөҙөмә.
Айырылыр дуҫ эйәрҙең
Арт ҡашын һорай, тигәндәй,
Үпкәләштән булмаһын,
Яуға барыр сағымда
Балтаһыҙ ҡыуып урманға
Мине оҙата, тигәндәй,
Күңел ҡалыу булмаһын!
Мине Сатмыр яһаған
Ҡылысымды үҙеңә ал;
Күп яуҙарға йөрөткән,
Һине Иҙеүкәй таныҡан
Булат ҡылысың, аямай,
Ҡомартҡы итеп миңә һал!

Иҙеүкәй:

— Әйткән һүҙең һүҙ булһын,
Арала уй бер булһын:
Ҡылысың тотоп биргәндә,
Ни булһа ла, — берлектә

Миңә булһа, шул саҡта
Булатымды бирәйем!

Элеүле торған булатын
Иҙеүкәй алырға ымлаған.
Сатмыр хан да шул сағын
Биленә таҡҡан ҡылысын,
Алтын һаплы ҡылысын
Иҙеүкәйгә бирергә
Уң ҡулына алған, ти,
Халыҡ күреп торған, ти.

Иҙеүкәй шунда Сатмырҙың
Ҡылыс менән уң ҡулын
Бергә ҡуша тотҡан да:
— Ҡылыс менән берлектә
Ни булһа ла миңә, тип
Һүҙ ҡуйыштыҡ, оло хан!
Ҡылыс тотҡан уң ҡулың,
Ҡылыс таҡҡан муйының,
Үҙең әйткән хөкөмсә,
Миңә була, оло хан!

Быны ишеткәс, Сатмыр хан
Үҙе ҡылған хөкөмдөң
Баш китерлек, ҡурҡыныс,
Бер яман эш икәнен
Үҙ эсенән уйлаған.
Шунда, ултырған ерендә,
Хөкөмөнө боҙҙороп,
Ат алыусы артынан
Бер кешене ебәргән.

Сатмыр хан:

— Тау-таш ярыр батырһың,
Ил тоторҙай аҡылың бар;
Яу сабырға ат менһәң,
Ил эйәртер һының бар.
Тағы әйтер һүҙем бар,
Ҡуя торған шартым бар.
Ошо һүҙемдең осон
Табып сисһәң, Иҙеүкәй,
Ни теләһәң, ҡарыуһыҙ
Бирә торған уйым бар;
Ышанмаҫтай һүҙең мән
Һүҙем алдыҡ сығарһаң,
Ала торған ҡоном бар.

Борон үҫкән бер үлән,
Оҙон булған был үлән.
Бер батыр ат менгән дә
Ҡүләгә буйлап сапҡан, ти,
Өс көн, өс төн киткән, ти,
Осона саҡ еткән, ти.

Бына, Иҙеүкәй, һин батыр,
Яуабың бир ошонда.
Яуап бирмәй аҙаһаң,
Алдыҡ ул тип арбаһаң,
Булатың ҡалдыр йортомда!

Иҙеүкәй:

— Йолаһыҙ ҙа ундай эш
Була килә донъяла.
Бына беҙ бер атанан —
Берәү түгел, өс бала.
Атам, бейлеген юйғас,
Мал-тыуары булмағас,
Табып алған бер бәрән —
Таштан тыуған ҡаяла.
Бәрән булған өс көнлөк,
Иртән үҫкән бер айлыҡ,
Ике көндә — бер йыллыҡ;
Тәкәһе юҡ, ние юҡ,
Бишенсе көн был бәрән
Бер туҡтамай бәрәнләп,
Бер көн тыуған бәрәнгә
Мал тупланыҡ — иҫәбе юҡ.

Шул полона атайым
Ҡырыҡ нар алды егергә;
Өс ағайым, йөк тейәп,
Ситкә китте сауҙаға.
Өс ағам да ҡайтманы,
Атам эҙләп тапманы.
Бына хәҙер мин белдем
Уларҙың ҡайҙа булғанын,
Уларҙың малын талап,
Ниндәй кеше алғанын;
Һинең өҫтә күргән һуң
Ҙур ағамдың сапанын,
Һин үлтергән икән, тип
Бына хәҙер уйланым.

Минең һүҙҙе алдыҡ, тип
Икеләнеп уйлаһаң,
Үҙең шартың буйынса,

Ни һораһам, ҡарыуһыҙ,
Минә күп яу бирәһең.
Минең һүҙҙе ысын, тип
Раҫларға тырышһаң,
Ошо бейҙәр алдында
Ағамдарҙың ҡоно өсөн
Үҙ башыңды бирәһең.

Быны ишеткәс, Сатмыр хан
Аптырауға ҡалған, ти.
Үҙ әйткәнсә, Иҙеүгә
Бик күп яуын биргән, ти.

## XXII. Иҙеүкәйҙең Уралға ҡайтҡаны, Мораҙым менән аңлашҡаны

Иҙеүкәй берҙән-бер көнө
Яуға батырҙар һайлап,
Фирҙәүесте бергә алып,
Эйәрҙәре алтынлы,
Йүгәндәре көмөшлө,
Икеһе лә бер төҫлө
Буҙ толпарға атланып,
Урал ҡарай юл тотҡан.
Яйыҡ аша сыҡҡан, ти,
Бәләкәй генә Төйәләҫ
Тигән һыуҙың буйында
Баба Төкләҫ ҡәбере
Янын төйәк иткән, ти.
Иҙеүкәйҙең килгәнен
Мораҙым да ишетеп,
Батырҙарын эйәртеп,
Бәхилләшә килгән, ти.

Иҙеүкәйҙең яу башы,
Төрөкмән батыр — ҡор башы,
Бөтә йөгөн бушатып,
Тирмә ҡороп шул ерҙә,
Ат саптырып бейҙәргә,
Быны хәбәр иткән, ти.
Ат менеп, ер һелкетеп,
Төн эсендә бөтә ил,
Инәһен тапҡан бал ҡорттай,
Барыһы килеп еткән, ти.

Мораҙымды саҡырып
Иҙеүкәй алған аулаҡҡа,

Һабрауҙы — уң яҡҡа,
Иҫәнбайҙы — һул яҡҡа,
Ҡыпсаҡ, Табын, Ҡатайҙы,
Тамъян ман Юрматыны —
Барын теҙеп ултыртып,
Эштең барын һорашҡан.
Иҙеүкәйгә Мораҙым,
Береһен дә ҡалдырмай,
Энәһенән ебенә
Барын теҙеп һөйләгән.

Иҙеүкәй:

— Батыр ҙа батыр икән һин,
Урҙаны ташлап, Уралға
Ҡайтып киткән батыр һин!
Тора бейгә дуҫ булып,
Нарыҫ бейҙең торлағын
Төйәк иткән батыр һин!

Биләнсек башы биш тирәккә
Билге төйгән батыр һин!
Тора бейҙең еренә
Еле лә ҡаҡҡан батыр һин!
Бейҙән дуҫың күп булғас,
Биш бейәгә бер ҡолон
Тилеп яткан батыр һин!
Тыныс ятҡан Урҙаны —
Уны ла ынйытҡан батыр һин!
Морон төрткән Сатмырҙы
Шомға һалған батыр һин!
Ыласын ҡунмаҫ ҡарағас
Яһап киткән Урҙама
Аяғында типкес юҡ,
Йөҙләп тыуын бер ҡыйғыр
Юҡ итерҙәй ҡарыуһыҙ,
Ҡаҙ ҡундырған батыр һин![112]
Аҡ һөйәге сыныҡҡан,
Күңеле һиңә береккән,
Ҡылысың һөрткән Ынйының,
Олатайҙар һүҙенә
Иҫкә алмай эш итеп,
Эйелгән башын юҡ иткәс,
Ҡылысың һөртөр һылыуҙы
Инде ҡайҙан табырһың?
Таяныс булып Тораға,
Уралдың ҡыу утына
Ут һалдырып көл иткәс,
Утты ҡайҙан утларһың?

Ҡисеү бирмәҫ Иҙелгә,
Баҫма булып бейҙәргә,
Торанан Иҙел кистергәс,
Һыуына ҡан ҡойҙорғас,
Һыуҙы ҡайҙан эсерһең?

Ыласындай Уралдың
Батырҙарын Торанан
Ҡыу иттергәс, Мораҙым,
Һунарға ат менгәндә,
Ниндәй ҡошто сөйөрһөң?

Мораҙым:

— Урҙанан мине Уралға
Олаҡтырған шом булды;
Тора ханға дуҫ булыу
Алда торған сер булды;
Нарыҫ бейҙең торлағы
Муйыныма уралған
Йыланды табыр ер булды.

Биләнсек башы биш тирәккә
Билге төйҙөм йорт өсөн;
Биш бейәгә бер ҡолон
Мин тиленем һөт өсөн;
Табыныма ил йыйып,
Көрәгәмде тултырып,
Иш һайларға үҙемә
Ханға ҡаршы яу өсөн,
Тора бейҙең еренә
Еле ҡаҡтым ил өсөн.

Тыныс ятҡан Урҙаны
Ынйыттым мин ҡон өсөн;
Ыласын ҡунмаҫ Урҙаға
Яйрап түлен йәйергә
Ҡаҙ ҡундырҙым ил өсөн;
Морон төртөр Сатмырға
Атҡа менеп туҡһаңлап,
Ҡул һуҙмаҫҡа бөтә илгә
Шомом һалдым ил өсөн.

Эйелгән баш Ынйыны,
Башын сабып, юҡ иттем,
Дошманға тип ҡайраған
Ҡылысымды тубарып,
Маяҡ теккән биләнгә
Ҡылыс уктатҡан өсөн.

Хан ҡыҙынан айырылһам,
Күҙе йәшле, ғүмергә
Илап йөрөгән, Уралдың
Һылыуын һайлап һөйөрмөн.

Ҡыныға ҡылыс тыҡҡанды
Тора күреп ут һалһа,
Ҡара һыуға* ҡан ҡойһа,
Йөрәген ярып, һөҙгө итеп,
Тондороп битем йыуырмын;
Уралыма ут һалһа,
Ҡаны менән һуғарып,
Йәшел үлән сығарып,
Үртәндән ут утлармын.

Таҙа йөрәк, һылыу йөҙ,
Мораҙым булып танылғас,
Ҡара арғымаҡ урынына
Толпар һайлап ат менгәс,
Иҙелдән һыу эсермен.
Ете ырыуҙың төйәге
Уралымдың дошманы
Тораны ҡыуһам Уралдан,
Яҙығымды йолармын[113].

Был һүҙҙәрен ишеткәс,
Иҙеүкәй барын төшөнгән,
Бөтә халыҡтың алдында
Мораҙымды ҡосаҡлап,
Йөрәгенән һөйләгән:
— Торомтайҙай йылғыр ҡош булмаç,
Турғай ҙа тибер, — ҡаҙ алмаç[114].
Сүлдә лә үçкән Мораҙым
Тора ла бейҙән хур булмаç.
Тәлтермәç тигән йүгерек уҡ
Батырға яуҙа иш булмаç.
Аҡ һөйәкле үçкән бей
Яу батырға ҡуш булмаç.
Атанан тыуған ул бала[115],
Ул үçтермәй, атаның
Ҡәҙерен белер ул булмаç;
Әсәнән тыуған ҡыҙ бала,
Ҡыҙ үçтермәй, әсәнең
Ҡәҙерен белер ҡыҙ булмаç.

Атанан тыуған ир бала,
Иле лә һөймәй, ир булмаç;
Иле лә һөймәç ир-батыр
Илһеҙ ҙә йөрөп дан алмаç;

Ил тибәргән дан батыр
Донъяла мәңге ҡала алмаҫ.

Бауҙа ла торған талпынып
Аҡ шоңҡарҙай, һының бар;
Илгә лә ҡылдың ҙур яҙыҡ;
Егет тә булып елкенеп,
Атыңа менеп яу сабып,
Атаң да тыуған Уралда
Ғәйрәтең һалып, дан сәсеп
Аҡлай ҙа торған ҡоноң бар.

Иҙеүкәй һүҙен тыңлағас,
Мораҙым ултырып илаған.
Атҡа менеп, яу асып,
Иҙел буйҙарын буйлап,
Дошман бейҙәрҙе тарап,
Димде, Симде, Иҙелде,
Бөтә Урал армытын
Таҙартырға бейҙәрҙән,
Алмас ҡылысын үбеп,
Бөтә илдең алдында
Иҙеүкәйгә һүҙ биргән.

## XXIII. Яйыҡ батырҙың бисәһе, улы менән Иҙеүкәйгә килгәне; Иҙеүкәйҙең мең баштарын Балҡан тауға йыйғаны; Туҡ батырҙың әсәһенә ҡымыҙ биргәне, әсәһенең ятып үлгәне[116]

Иҙеүкәй атҡа менгәндә,
Бөтә илде йыйғанда,
Мең баштарын билдәләп,
Батырҙарын бүлгәндә,
Яйыҡ батырҙың кинйә улы —
Туҡ батыр ман әсәһе
Иҙеүкәйгә килгән, ти.

— Иҙеүкәй килгәс Уралға,
Мораҙым киткәс тағы ла,
Ҡаяла ятып мүкләнгән,
Ҡояш ашап миктәлгән
Шылып төшкән ҡомташтай,
Иттән өйгән күбәләй,
Ауыҙы тешһеҙ кәмшәйгән,
Асыу менән сырайы,
Ҡаны ҡасып, йыйырылған;

Ил илаған күҙ йәше
Күҙен ҡаплап, һулыған
Нарыҫ бей ҙә түҙәлмәй,
Йөрәге ярылып, йығылған.

Аҙнай, Ҡасҡын, Ҡаныҡай,
Биҡҡол батыр йөҙҙәрен —
Ҡеләйле йыйып барыһын,
Үҙенә һайлап һыу башын,
Меңенә төйәк яһаған[117].

Яйыҡ батыр улдары:
Әлшәй, Аслай, Ташлыбай,
Ҡаип, Ҡармыш, Суракай,
Сурай, Идрис — барыһы
Бер әсәнең балаһы.
Йәш бисәнән тыуғанға
Туҡ батырҙы ситләтеп,
Һигеҙе генә мең булып,
Нарыҫ бейҙең төйәген,
Тау яғалай итәген,
Үҙҙәренә билдәләп,
Ҡуныш итеп һайлаған, —
Тип, Туҡ батырҙың әсәһе
Иҙеүкәйгә һөйләгәс,
Иҙеүкәй, Туҡты йыуатып,
Былай тиеп әйткән, ти:

— Атанан етем ҡалғандың
Йөрәген һары алмайса,
Күҙе йәшкә мансылып,
Дошман, дуҫын айырып,
Урманда уҡ юнмайса,
Ҡара төндөң эңерен
Үҙе таңға бормайса,
Өлкәр менән Сулпанды
Тағы айырып белмәйсә,
Тимер ҡаҙыҡ йондоҙон
Юлға билдә ҡылмайса,
Батырмын тип ир-егет
Яуға атын менерме?
Һайыҫҡандай сыбарҙы,
Һынамаған ир йыйып,
Батыр яуға сабырмы?

Атаң алып әсәңде,
Намыҫын тапап бер илдең,
Үҙенә уҡ төҙәтте.
Күҙгә сыҡҡан арпалай,

Сит ҡандан тыуған тиеп,
Һине тағы был илдә
Ағаларың ситләтте[118].
Ҡара көндө тыуғанға,
Ауырлыҡтар күргәнгә,
Илең өсөн атаңдың
Һырҡырап аҡҡан ҡандары
Ҡыҙ йәшеңә ҡушылып,
Йөрәгеңә һөрөм булғанға,
Егетлек йәшең үҙеңдең
Билеңә ҡорман быуҙырып,
Урал битен саңлатып,
Ҡойон-дауыл уйнатып,
Алғыр бөркөттәй үҙеңде
Ҡыйғыр итеп танытты.

Атанан туғыҙ тыуһаң да,
Бер ҡашыҡтан ейһәң дә,
Маңлай тирең сығарып,
Яуҙа бергә булһаң да,
Үнгәнле батыр булһаң да,
Яңғыҙ ҡалдың терәкһеҙ;
Яңғыҙ ҡалып нөгөрҙән*,
Ас ауыҙынан ем көткән
Бала ҡоштай тилмереп,
Күҙемә ҡарап килгәнһең;
Уғым ҡанға буярға
Күҙең текәп килгәнһең.

Иҙеүкәй тигән атымды
Ырыҫыңа шоңҡар итәйем,
Батыр тигән даныңды
Үҙеңә юлдаш итәйем;
Яңғыҙ ҡара көнөңә
Йәнем ҡорбан итәйем;
Ҡола атым сапҡан юл
Ерекмәҫ юл итәйем.
Булат ҡылысым һурғанда,
Ил теләге тигәндә,
Баш эймәһә атам да,
Ҡоро күнәк күтәреп
Юлыма сыҡһа[119] әсәм дә,
Нарыҫ төйәге эсендә
Ҡан дарьянан бер йылға
Ҡушлап ағыҙып китәйем! —
Тиеп асыуын сәсеп,
Иҙеүкәй атҡа менгән, ти,
Батырҙарын эйәртеп,
Нарыҫҡа ҡарап елгән, ти.

Нарыҫка барып туҡтағас,
Меңбаш булған батырҙың
Барын йыйып алған, ти.
Нарыҫ бейҙең йәйләүе
Балкан тауға киткән, ти.

Иҙеүкәй килгәс, меңбаштар
Үҙ мендәрен йыйған, ти.
Тыу бейә һуйып, ил йыйып,
Шапырып ҡымыҙ йыйышып,
Данлы ҙур туй ҡорған, ти.
Алдыр-алдыр тултырып,
Иҙеүкәй ман Мораҙымға
Тәүҙә башлап биргән һуң,
Меңбаштарын ал тотоп,
Аяҡсылар алдырҙы
Барына биреп сыҡҡан, ти.

Туҡ батырға Иҙеүкәй,
Бүтән батырҙар һымаҡ,
Ҙурлап алдыр бирҙергәс,
Аяҡсы биргән алдырҙы
Туҡ батыр ҡулға алғас,
[Әсәһенә текәлеп,]
Ошо һүҙен әйткән, ти:
— Ҡыҙ булһаң да, тайшанмай,
Аҫау тотоп менгәнһең;
Ҡаҙаҡ иле, киң илдә
Батырын да күргәнһең;
Сая, сая буйланың,
Ҡоҙоҡ та һыуын һыуланың;
Атам атҡан йөҙөктө
Бүләгем тип алғанһың[120].

Ҡарсыға түш, ҡуян бот,
Моңдаһы ман һигеҙ күҙ
Күп йылҡыға ҡарата
Йүгереклеген белдереп,
Һебәһе мән аҡтанан*,
Егәр* билдәй, ҡалҡыуыраҡ,
Осло соңка, ҡуш урай,
Ҡамыш ҡолаҡ, осло эйәк,
Сыпыш ҡойроҡ, ҡырас ял,
Ҡарсыға морон, киң танау,
Ата бөркөт ҡабаҡлы,
Ҡубаға ҡабырға, суртан тән,
Киң янбашлы, тар бөйөр,
Күнәктәрен уйнатып
Һыуға барған ҡыҙ һымаҡ,

Текә баҫып, баш ташлап,
Йылғыр атлап, бышҡырып,
Әлән-йөлән ҡаранып,
Ҡолаҡтарын ҡайсылап,
Ҡара төндә йылтындап.
Алғыр бүре күҙендәй,
Күҙ бәбәген сытлатып,
Күҙ аҡтарын аҡайтып,
Ауыҙлыҡ сәйнәп, асыуҙан
Ауыҙҙарын күпертеп,
Менгән кеше, ҡартлығын
Онотоп, йәшкә әйләнгән,
Күргән кеше, һоҡланып,
Күргән ерҙә таң ҡалған,
Елгәндә саң уйнатҡан,
Сапһа, ҡоштай елкенеп,
Артынан дауыл уйнатҡан
Алма сыбар ат менеп,
Атамды һөйөп ҡасҡанһың.

Ҡаҙаҡ иле киң илдә
Батырын да күргәнһең,
Урамал сабып ерендә,
Ҡымыҙлыҡ йыйып саянда,
Күс-күс булып йәй күсеп,
Тирмә ҡороп, ҡуй һауып,
Күжә* эскән иленде,
Тыуып үҫкән ерeнде,
Ҡарағым* тигән ағанды,
Айнам* тигән әсәнде,
Тамырым тигән дуҫынды,
Йөҙ ҡараһын* ҡалым тип,
Йәштән алған бейеңде[121],
Ҡоҙоҡ, ҡоҙоҡ һыу биргән,
Бала өйрәктәй һыу ингән
«Табан тал» тигән уйыңды[122], —
Барын ташлап киткәнһең.
Ҡотон биргән атаңа,
Һөтөн биргән әсәңә,
Туйың көткән илеңә, —
Барына дошман булғанһың[123].

Йөрәгең етмәй, ҡолонға
Һирпеп ҡороҡ һалмаған,
Маталмаған* бейәгә
Күнәк тотоп килмәгән,
Ҙур мөгөҙлө ҡусҡарҙың
Алдынан ҡузын* алмаған,
Кирәгә табын ҡомлаған

Һуҡыр сысҡан-күҫәне
Ҡаялағы айыуҙай
Һанап, сыр-сыу һикергән;
Күҙ бәйләнһә, тирмәнән
Сығып һыу ҙа эсмәгән,
Ҡурсаҡ менән туй яһап,
Кейеҙ йәйеп уйнаған
Бер ҡыҙ бала булһаң да,
Атам менән йәнәшә
Күп яуҙарҙа булғанһың.

Себен тешләп киткәндә,
Күҙ ҡабағың шештереп;
Йәйҙең эҫе көнөндә
Мороноң ҡанап, иҫ юйып;
Көҙгө ҡырау төшкәндә,
Елән ташлап, тун кейеп;
Еләҫ елдәр иҫкәндә,
Дауыл килә тип, сыу килеп,
Ышыҡ эҙләп йүгереп
Үҫкән генә әсәйем
Бейә һауымы араһы[124]
Аш-һыу күрмәй торғанда,
Эҫе йәштәрең түгеп,
Май, ҡорт һорап илаған;
Ырашҡы яуып торғанда,
Ҡар бураны өргәндә,
Ыҙғырыҡ ел иҫкәндә,
Ас бүреләр йыйылып,
Шаулап олоп торғанда;
Яурыныңдан дошмандың
Уғы үтә сыҡҡанда;
Йәйге селлә көндәрҙә
Һыу табалмай ҡаңғырып,
Тамаҡтарың кипкәндә;
Өс-дүрт көндәр буйына
Тел өҫтөнә һалырҙай
Бер киҫәк нан* күрмәйсә
Асҡа тилмереп йөрөгәндә,
Атама юлдаш булғанһың.
Ҡара көндө яҡты тип,
Атам менән көлөшөп,
Ҡая ташын түшәк тип,
Йола буйса буй алып,
Туғыҙ айҙа табырҙы
Ете айҙа тапҡанһың,
Миңә әсә булғанһың;
Артыҡ бүкән булдың тип,
Мине ороп ташламай, —

Ҡарағым тип йыуатып,
Мине һөйөп яратып,
Йөрәгенде һыҙлатып,
Иң башыңа мине артып,
Үҙең яуға сапҡанһың.

Мең башының аяғын,
Әсәм, һиңә бирәйем;
Минең урынға аяҡ баҫ;
Һинең урында торайым;
Ошо еңгән туйымды
Һинең туйың тиәйем;
Батыр итеп үҫтергәс,
Шатлыҡ күр һин, тиәйем.
Бөтә ырыу йәйгәндә,
Үҙ тоҡомон күргәндә,
Күстән ҡалған ҡарасайҙай*,
Бер яңғыҙың торғанда,
Ҡаҙаҡ ҡыҙынан тыуған, тип
Ер-һыу бирмәй был илдә
Яңғыҙым ҡаңғырып торғанда,
Күҙең һалып йөҙөмә,
Аҡыл биреп үҙемә,
Аҡ шоңҡарҙай талпынған,
Таң сулпандай балҡыған,
Тимер ҡаҙыҡтай тайшанмай,
Монар баҫҡан көнөмдә,
Буран баҫкан юлымда
Маяҡ ҡаҡҡан ҙур ҡашҡа —
Иҙеүкәй батыр ҡашында
Аһым һөйләп торғанда,
Аҙашмаҫлыҡ юл һалып,
Батыр итеп күргәндә,
Һинән алда мин эсеп,
Илдә данлы буламмы?
Һинең бәҫең китәреп,
Һинең улың буламмы? —
Тигән һүҙен бөткән дә
Әсәһенә үҙенең
Алдырын ул биргән, ти.

Әсә шатлыҡҡа түҙмәй,
Тәмләп-нитеп тә тормай,
Ҙур алдырҙы бер тындан
Төп күтәрә эскән, ти.
Балаһына алдырын
Ҡайтарып та бирәлмәй,
Күҙ алдары ҡарайып,
«Ағыу булды был, балам,

Абайламай эсмә!» — тип,
Һүҙен бөтөр-бөтмәҫтән
Йығылып йән биргән, ти[125].

Быны күргәс, Иҙеүкәй, барына күҙ йүгертеп, тағы бер ҡат әсәгә ҡарап, ҡаты асыуланып, ошо һүҙен әйткән, ти:

— Бей гүренә инһә лә,
Минән ҡурҡып йөрәге
Түҙмәй йығылып үлһә лә,
Күләгәһе һаман да
Балҡан тауҙың буйында
Тороп ҡалған — күрәмһеҙ?
Булат ҡылысын тотоп,
Ҡола ат менеп, теш ҡайрап,
Алдығыҙға кем килде, —
Уны барың беләмһеҙ?

Ҡуш урҙаға баш булған,
Ҡуш айҙарлы мырҙалар
Һарауыслаған өй ҡороп,
Алтын тәхет өҫтөндә
Арыҫландай баҡырынған;
Кейгәне ебәк, ҡамҡа тун,
Менгәне толпар ат булған;
Өс-дүрт быуын буйына
Мираҫтан-мираҫ ҡалдырып,
Башынан сылым кипмәйсә,
Ил өҫтөнә бей булған;
Алтын табаҡтан аш ейеп,
Мамыҡ түшәк өҫтөндә
Ятҡан ерҙән һуҙылып,
Ҡол ҡулынан һыу эскән;
Туғыҙ ай буйы күтәреп,
Йә, хоҙай, тип ҡыҙ табып,
Ярҙамсым тип ул табып,
Төн йоҡоһон ҡалдырып,
Бәғерем тип йыуатҡан,
Ҡулына алып тирбәткән,
Һөт имеҙгән әсәне;
Арҡаларын бөкөрәйтеп,
Маңлай тирен һыпырып,
Себеш туйҙырған тауыҡтай,
Көнөн-төнөн соҡсоноп,
Ас балаға ем эҙләп,
Көн үткәргән атаны —
Барын талап ҡол иткән;
Батыр булыр баланы
Етем-еҫер ҡалдырып,

Албаҫтылай ҡурҡытып,
Ғазраилдәй йән һорап,
Үҙен хоҙай таныткан[126],
Аҡ Урҙала хан булып,
Туҡтамыш тигән дан алып,
Ил талаған бер ханды
Тәхетенән осороп,
Арҙаҡланған аҡ тәнен
Ҡара ерҙең аҫтында
Ҡорт-ҡуңғыҙға ем иткән,
Урал буйын, Урҙаны
Таң ҡалдырып дан сәскән
Иҙеүкәй тигән ир килде!

Иҙеүкәй һуғып айыуҙы,
Илдә батыр булманы;
Ҡүҙ йәшенә екетеп,
Ҡерпеген ҡойған әсәне
Үлтереп ҡашҡа булманы.
Битенә килер оятты
Үҙе белеп йыуарҙай,
Биленә ҡорманын быуып,
Уғын атып дошмандың
Ал табынын быуырҙай
Иҙеүкәй тигән батыр ҙа
Әсәнән шәрә тыуғанда,
Ер һелкетеп күкрәгән
Ҡалҡып сыҡҡан болоттай,
Атанан батыр тыуманы!

Үҫеп килгән балаһын
Хандар тартып алғанда;
Бил бөкөрәйтеп әсәнән
Һыу ташытҡан сағында;
Ухылдатып атанан
Утын ярҙырған сағында;
Ҡатындарҙың, тол ҡалып,
Йөрәге һыҡтаған сағында;
Илде бүреләй талап,
Батырҙарын һуйҙырып,
Ҡан йылғалар аҡҡанда;
Ҡүҙ йәшенән йыйылып,
Күлдәр хасил булғанда;
Ай Уралым, Уралым,
Уралым тип, илем тип,
Илем тиеп, халҡым тип,
Иҙеүкәй — Иҙеүкәй булды ул!

Ошо һүҙен әйткән дә,
Ҡылысын алып, Иҙеүкәй
Һаба-турһыҡтың барын
Пыран-заран ярған да,
Ыулы ҡымыҙ көрөнөн
Балҡан тауҙан ағыҙып,
Күлде ап-аҡ яһаған.

(Был туйҙан һуң халыҡтар
Ул күлдән һыу эсмәгән,
Үткән-һүткән юлсыға;
Асылы күл, һыу алма, тип,
Атың һуғарып, тағы ла
Атһыҙ тороп ҡалма, тип
Әйтеп торор булғандар.
Шул көндән һуң был күлде
«Асылы күл»* тигәндәр.)

## XXIV. Иҙеүкәйҙең яуҙа яра алғаны, улына васыят әйтеп, Урал батыр ҡылысын биргәне; Мораҙымдың ҡалған-боҫҡан дошманды ҡырғаны, ҡобайырҙың тамам булғаны

Нарыҫтан киткәс, Иҙеүкәй
Иҙел, Нөгөш, Семдәрҙең*
Барлыҡ илдәрен туплап,
Тора бейгә яу асҡан,
Иҙеүкәй мән Мораҙым
Ике яҡлап Тораның
Яуын ҡымтып алған, ти,
Урал аша Син яҡка
Тора бейҙе ҡыуған, ти.

Иҙеүкәй мән берлектә
Яуҙа булған мәлендә,
Фирҙәүескә уҡ тейеп,
Донъя ҡуйған — үлгән, ти.
Иҙеүкәй мән Мораҙым,
Бөтә батыр берлектә,
Бер типһәндә гүр ҡаҙып,
Фирҙәүесте күмгән, ти.

Бынан һуң да Иҙеүкәй,
Ҡаты яуҙарҙа булып,
Аяҡһыҙ-ҡулһыҙ ҡалһа ла,
Яу ташламай һаман да,
Йөҙ дошманға ҡаршы

Яңғыҙ тороп һуғышҡан.
Атаһын бирмәй дошманға,
Әрсәләп дошман яуынан,
Иҙеүкәйҙең йәненә
Мораҙым килеп өлгәшкән.

Мораҙым килеп еткән һуң,
Батыр улына Иҙеүкәй
Һуң ҡат текләп ҡараған да
Аҙаҡ һүҙен әйткән, ти:
— Балам, йөҙөң йыуҙың һин,
[Инде, улым, шуны бел]:
Уралымда ҡан ҡойған,
Күп йәштәрҙе түктергән
Тора бейҙең шәүләһе
Тыуған илдә ҡалмаһын!
Батыр, батыр бул, балам,
Хаҡты әйтер бул, балам,
Илдә ҡашҡа бул, балам, —
Ил атаңдан көлмәһен!

Юлың ҡалһын Уралда,
Даның ҡалһын иләндә,
Батырлығың ил күреп,
Һиндәй булам тиешеп,
Йәш үҫмерҙәр һоҡланһын,
Илгә килгән дошманға
Йөрәкләнһен, уҡ атһын!

Иңемә таҡҡан ҡылысым —
Быуын-быуын буйына
Урал батырҙан ҡасып,
Күп күлдәрҙең эсендә
Йәшәп килгән дейеүҙе
Тураҡлаған ҡылыс был!
Урал батыр улдары
Атаһы ман килгән һуң,
Дейеү-пәрейгә ҡаршы
Ҡаты яуҙар асҡан һуң;
Бөтә күлгә ыу һалып,
Аждаһа-йылан ҡасҡан һуң,
Урал батырҙың улы,
Яра сабып Ирәмәлде,
Иҙел һыуын ағыҙған[127]
Бик боронғо ҡылыс был.

Иҙел батыр ҡартайғас,
Тотор улы булмағас,
Уралға дошман берәүгә

Ҡалмаһын тип юлдашҡа,
Иҙел төбөнә һалғас,
Батырын көткән ҡылыс был!

Быуын-быуын үткән һуң,
Илдә яуыз күбәйеп,
Ырыуыны ҡыйратып,
Илдә күп ҡан ҡойолоп,
Ҡәберҙә ятҡан Иҙелдең
Күҙенә ҡандар тамған һуң;
Ҡаяла ятып йоҡлаған,
Йөрәгендәге утында
Иттән ҡурҙаҡ яһаған,
Ҡая ташын ҡосаҡлап,
Үкһепултырып илаған,
Күҙенән йәш ағыҙып,
Бал ҡорттарын һуғарған,
Ярҙамына көс эҙләп,
Тынмай, күп юл буйлаған
Һабрау төшөнә инеп,
Иҙел серен һөйләгән:
«Иҙел, Иҙел тигәнең —
Тау аҫтында быулығып,
Сыға алмай тынсығып,
Булатым менән Уралды
Бер саҡ яра сапҡан һуң,
Тауҙан сығып, атлығып,
Ағып киткән йылға ул.
Ямантауҙы уртанан
Ярып сыҡҡан йылға ул:
Һыуы менән һуғарып,
Һеҙгә эсә булған ул;
Иҙелде Иҙел яһаған,
Көләс йөҙҙәй көлдөрөп,
Яман тауҙың бейеген
Аша ҡырҡып ағыҙған
Булатты мин ташлағас,
Һыу төбөнә ала ла
Тут алдырмай һаҡлай ул;
Ҡырсынынан һыҙҙырмай,
Юшҡынынан ҡомлатмай,
Ил һаҡларҙай батырҙың
Тыуасағын көткәндәй,
Ялтыр көйө һаҡлай ул», —
Тип, төшөндә әйткән һуң[128],
Һабрау торған һиҫкәнеп.

Ҡаяла ятҡан Һабрау,
Ошо төшөн күргән һуң,

Ырғып тороп ултырған;
Алып ҡулына таяғын,
Ҡаяға баҫып аяғын,
Ауға осор бөркөттәй,
Һабрау шунда уйланған.
Шунан, төн-көн йокламай
Һарыҡ көткән байғошто,
Һыйыр көткән серҙәште,
Йылҡы көткән ҡорҙашты,
Урманында уҡ юнып,
Аласығына ут яғып,
Уралда ау ауларға
Һаҙаҡ һуҡкан ҡыҙашты
Барып күреп һөйләшкән.

Бер аласыҡ эсендә
Һаҙаҡ һуҡкан урында,
Атаһы ман бер егет
Икәү-ара даулашҡан, —
Шуға Һабрау юлыҡкан.
Атаһы, улынан зарланып,
Һабрауға ҡарай һүҙ асҡан:

— Бына, уҙаман, был улым —
Донъяла күргән бер балам.
Беҙҙә һунарсылар күп:
Ҡуян атып, ит ейә,
Ҡош-ҡорт атып тағы ла
Мендәргә тип, йөн йыя.
Менеремә атым юҡ,
Бүре быуыр һарыҡ юҡ,
Айыу ватыр ҡортом юҡ, —
Минең балам көн һайын
Һаҙаҡ һуға бүрегә,
Һыҙма ҡора айыуға;
Ҡуян ат һин тир булһам,
«Айыу менән бүреһе —
Икеһе илгә бәлә.
Илгә дошман булғандар —
Миңә лә дошман улар», — тип
Алйыта бит был бала.

Был һүҙҙәрҙе ишеткәс,
Һабрау ҡарт өндәшмәй,
Атаһына шауламай,
Шуҡ егеттең янында
Бер нисә көн ҡунған да,
Яйын тартып белгән дә,
Батырлығын һиҙгән дә,

«Әйҙә, Үмәр ҡустым», — тип,
Бергә алып киткән дә
Иҙел батыр булатын
Эҙләп табып биргән, ти.
Үмәр — батыр булған, ти,
Ҡүҙ йәштәрен күптәрҙең
Булат менән һөрткән[129], ти.
Был Үмәрҙең бер улы —
Ғәзиз әүлиә булған;
Анан тағы әүлиә —
Баба Төкләҫ тыуған, ти.
Атанан балаға буты* —
Ҡомартҡы булып килгән, ти.
Баба Төкләҫтән тороп
Тора бейгә ҡалған һуң,
Булат менән күптәрҙең
Ҡүҙ йәштәрен ҡойған һуң,
Һабрауҙан ҡылыстың
Төпсөп серен белгән һуң,
Атамдың ҡонон юллап,
Тора бейгә килгәндә
(Миңә ул саҡ ни бары
Ун биш кенә йәш булғанда),
Тора бейҙең ҡулынан
Йыға һелкеп алған һуң,
Миндә ҡалған ҡылыс был!

Батыр улым Мораҙым,
Бына ошо ҡоралым
Инде һиңә бирәйем;
Башым гүрҙә ятһа ла,
Илде һаҡлап яу асҡан
Батырлығың күрәйем.
Үлһәм, мине аҡ нарға
Үлегемде артырһың,
Нарым ҡайҙа сүктиһә,
Шунда мине күмерһең.

Минең менән күп саҡтар
Яуҙа булған юлдаштар
Яуҙа менгән яу атын
Ҡайҙа утҡа ебәрһә,
Эҫе көндө себенләп[130],
Төнөн ҡайҙа юшаһа, —
Шул урында батырҙар
Ырыу-ырыу йәшәһен!

Бөтә Урал буйҙарын
Үҙеңә ҡуныш итерһең.

Уралда үҫкән батырҙы,
Күҙе йәшле еҫерҙе
Үҙеңә ҡорҙаш итерһең.
Яуҙан ҡайтҡан сағыңда,
Уң ҡолағың ни ерҙә
Ҡәкүк тауышын ишетһә,
Шунда ҡышлаҡ төҙөрһөң.

Бары ла һине дуҫ күреп,
Яманлығың әйтмәһә,
Ил зарыны ишетеп,
Һиңә кәңәш бирмәһә,
Шул табының эсендә
Үҙеңә дошман табырһың!

Иҙеүкәй һүҙен бөткән һуң,
Иҙеленән бер йотом
Һыуҙы уртлап йотҡан һуң,
Илдең көнө батҡандай,
Буйын монар алғандай,
Ҽтем тороп ҡалғандай,
Ышыҡ булған Уралдың
Бар ҡаяһы ишелеп,
Ергә ҡолап төшкәндәй,
«Иҙеүкәй, Иҙеүкәй!..» — тип һөйөп,
Яуы илап торһа ла,
Ғазраил, «уф» тимәй,
Иҙеүкәйгә ҡул һалған.
Күбәләктәй аҡ йәнен
Шул урында алған, ти.

Иҙеүкәйҙең кәүҙәһен
Аҡ нарына аҫҡан һуң,
Аҡ нары алып киткән һуң,
Күп ҡаялар үткән, ти,
Күп һыуҙарҙы кискән, ти,
Бөтә яуҙы эйәртеп,
Нарыҫ тауға еткән, ти.
Шунда туҡтап, ҡаранып,
Нарыҫ тауҙың итәге
Бер түбәгә сүккән, ти.
Ҡобауҙағы* инәгә
Килеп һарыған бал ҡорттай,
Ете ырыуҙың барыһы:
Бисә-сәсә, балаһы,
Йәш-елкенсәк, ҡарт-ҡоро
Кәфенләнгән Иҙеүкәйҙе
Сыр-сыу һырып алған, ти.

Иҙеүкәйҙе күмгән һуң,
Атанан етем ҡалған һуң,
Асыуланып Мораҙым
Тора бейгә ҡаршы
Тағы атҡа менгән, ти.
Шул асыуҙан дошманды
Ҡуй-һарыҡтай тунаған.
Тора бейҙе ҡулға алып,
Бөтә бейен берлектә,
Атаһы үлгән урында
Ботон ботса тураған.
Иҙел, Нөгөш, Яйыҡта,
Урал армыт буйында —
Бөтә ырыу ерендә
Ҡалған-боҫҡан дошманды,
Берен ҡуймай эҙәрләп,
Ҡыраҡ һалып бөткән, ти.
Мораҙым яуҙан бушағас,
Ҡылысын һөртөп, бит йыуғас,
Ынйы менән Иҙеүкәйҙең
Ҡәбере булған Нарыҫҡа
Кире ҡайтып төшкән, ти.

Үҙ торлағын был ерҙән
Атаһы алдында йөҙ йыуған[131],
Бары Урал буйында
Батыр булып ил өсөн
Яуға киткән урыны —
Төкләҫ тауға күсергән.

Иҙеүкәйҙән ҡалған һуң,
Мораҙым Иҙел, Уралда
Ил батыры дан алып,
Төйәләҫ һыуы буйында
Оҙаҡ ваҡыт йәшәгән.

Мораҙымдан бер бала —
Ҡаҙанғол тигән ир бала,
Ҡаҙанғол улы — Ҡаҙаҡкол,
Ҡаҙаҡколдың улынан
Ҡасҡын тигән ул тыуған.
Ҡасҡын илгә һыймағас,
Ул да Урал буйлаған;
Илен яҡлап яуҙарҙа
Батыр булып ҡатнашҡан;
Шул яуҙарҙың берһендә,
Һаҡмар һыуы буйында,
Ҡулға алынып дошмандан,
Үлтерелеп хур булған.

# ИЗЕГЕ

Борон-борон заманда әбей менән бабай булған, ти. Уларҙың бер улы булған, исеме Изеге булған, ти.

Былар өсәүләп тора ятканда, әбей менән бабай үлеп киткәндәр. Изеге донъяһын ташлап сығып китә, эш эҙләп.

Шунан был Туҡтамыш тигән хандың иҫәпһеҙ-һанһыҙ көтөүҙәренә барып сыға ла шунда малайлыҡҡа инергә була.

Хан унан төбәшеп һораша:

— Һин ниндәй кеше? Исемең кем?

— Мин малайлыҡка ялланырға йөрөйөм. Исемем — Ҡарабай[132].

— Ярай алай булһа, һарыҡ көтөүен көтөрһөң.

Хан һәр саҡ шулай төбәшеп һорашып ала икән, сөнки күрәҙә уға: «Ханым-солтаным, әжәлең һинең Изеге тигән кешенән булыр. Бик һаҡланып йөрө», — тигән булған икән.

Изеге ҙурайып, егет ҡорона тула. Хан шулай ҙа бынан шикләнә. Бер ваҡыт шулай көтөүҙәрен ҡарап йөрөгәндә, Изеге бынан йылҡы көтөүенә күсереүҙе һорай. Хан бының үткерлегенә иҫе китә.

— Һинең исемең Ҡарабаймы? Алдамайһыңмы? Изеге түгелме һин?

— Юҡ, мин — Ҡарабай, ҡайҙа ул миңә изгелек тейеү!

Хан быны йылҡы көтөүенә, 12 көтөүгә ебәрә. Изеге китә йылҡы көтөүлегенә. Бара, 12 көтөүсе малай. Былар бер-берен тыңламай икән, иреш тә һуғыш, ти. Изеге ҡарап йөрөй-йөрөй ҙә бер көндө 12 малайҙы йыйып алып былай ти:

— Давай, беребеҙҙе ҡазый итеп ҡуяйыҡ. Ҡазый булған кеше хандың бер тыу бейәһен һуйып туйларға тейеш. Ҡалғандарыбыҙ ҡазыйҙың һәр һүҙен тыңларға тейеш булабыҙ.

Быны ишеткәс, бөтә малай ҡурҡышып китә:

— Булдыра алһаң, әйҙә үҙең бул, беҙ һинең һүҙеңдән сыҡмаҫбыҙ, — тиҙәр.

Изеге риза була. Хандың тыу бейәһен тотоп ала, килеп һуйып ташлай. Малайҙар булышалар. Ҙур ҡаҙанға һалып тороп бешереп ашайҙар. Изегенең батырлығына иҫтәре китеп, бының һәр бер һүҙен тыңлап ҡына тора башлайҙар[133].

Бына бер заман ханға барырға ваҡыт етә. Барып, көтөүҙәр тураһында хәбәр итеп, аҙыҡ алып килергә кәрәк.

Изеге килеп хандың ишеген асып ебәреү менән, йоҡлап яткан хан ырғып килеп тора, ти.

Изеге бер туҫтаҡ ҡатыҡты төп күтәрә һемереп эсә лә, аҙыҡ алып, иптәштәре янына ҡайта.

Изеге килгән һайын, хан шулай тертләп, ырғып килеп тора икән. Ҡатыны был хәлгә аптырай башлай, ханға әйтә:

— Шул бер йолҡош көтөүсе килгән һайын, ырғыйһың да тораһың, әллә ҡурҡаһыңмы шунан? — тип һорай.

— Бушты һөйләмә, нишләп мин ҡурҡайым да, нишләп ырғып торайым! Мин үҙем бер нәмә лә һиҙгәнем юҡ, — ти хан.

— Ярар, мин һинең үҙеңә күрһәтәйем әле, — ти бисәһе.

Икенсе ваҡыт, Изеге килер көндө, ҡатыны ханды күпмәгә ҡуша тегеп ҡуя, Изеге ишекте асып ебәреү менән, хан күпмәһе менән бергә ырғып килеп тора ла уянып китә. Шунан ғына хан ҡатынына ышана[134].

Ҡатын Изегенең ҡыйыулығын һынар өсөн ҡатыҡты түрбашҡа ҡуя[135].

— Ана, түрбашта ҡатыҡ ултыра, алып эс, — ти.

— Туғыҙ йыл көтөүеңде көттөм — турғай башындай нәмәңде түрбашыңдан алып ҡапманым. Алып бирһәң, эсәм, бирмәһәң — юҡ, — ти Изеге.

Ҡатын ҡатыҡты алып бирә. Изеге ҡатыҡты бысағы менән турай ҙа туҫтағын күтәреп эсеп сығып та китә[136]. Теге ҡатын ҡатыҡты әмәлләп ултыртҡан икән. Изеге быны һиҙгән була.

Ҡайтып малайҙарын йыйып ала ла:

— Мин бында бер көн дә тора алмайым, миңә китергә кәрәк. Кем минең менән китергә теләй? — тип һорай. Ун бер малай Изеге менән китергә булып, аттарына менгәндәр[137], ти. Бер малай бармай ҡалған, ти. Былар сығып киткәс, теге малай ат менән ханға сапҡан, ти. Ханға килеп етеп, иптәштәрен ошаҡлай[138]. Хан йәһәт кенә күрәҙә килтертә. Күрәҙә:

— Ханым, ул егет Ҡарабай булмаған, ул Изеге булған. Айыл башы биреп дуҫлашҡан Янбай дуҫы[139] бар. Шул ҡайтарып алһа, алыр, бүтәнде тыңламаҫ. Әгәр ҡайтарып алып күңелен күрмәһәгеҙ, һеҙгә яҡшылыҡ булмаҫ[140], — ти [ҙә һамаҡларға тотона]:

Ул китер ул, китер ул,
Сын Тимерханға [141] етер ул;
Сын Тимерхан ҡул бирһә,
Хаҡ тәғәлә юл бирһә,
Әйләнеп килеп етер ул.
Туҡтамыш хандан туғыҙ ул,
Туғыҙын да һуғыр башына,
Ҡан һырғалар ҡашына.
Туҡтамыш хандың туҡалаҡ башын
Ҡанъяғаһына бәйләп юртыр ул[142].

Хандың ҡото осоп, Изегенең Янбай дуҫын саҡырта:

— Ни теләһә лә, шуны бирермен, кире ҡайтһын. Ҡалай итеп булһа ла алып ҡайтығыҙ Изегене! — тип, үҙенең туғыҙ улын эйәртеп сығарып ебәрә[143], ти.

Ә Изегеләр инде Иҙелдең арьяғына сығып, тамаҡ туйҙырып ултыралар, ти. Былар яҡын барырға ҡурҡып, үҙҙәре бер ергә боҫоп яталар ҙа Янбайҙы ебәрәләр, ти. Янбай барып:

— Ҡайтһана, Изегем, ҡайтһана,
Ҡайтып та Иҙел кисһәнә,
Ҡайтып та Иҙел кисһәнә! —

тигән.

Изеге яуап биргән:

— Ай, Янбайым, Янбайым,
Мин ҡайтмамдыр, ҡайтмамдыр,
Ҡайтып та Иҙел кисмәмдер,
Ҡайтып та Иҙел кисмәмдер.

Янбай:

— Ай, Изегем, Изегем,
[Ҡайтһана, Изегем, ҡайтһана,
Ҡайтып Иҙел кисһәнә.
Ҡыйғас ҡамыш ҡолаҡлы,
Ут сығарыр тояҡлы,][144]
Эйәренең ҡашы алтын,
Йүгәненең башы алтын,
Ҡойошҡаны ҡойма алтын,
Өҙәңгеһе һум алтын,
Ҡаҙығын аҡ ҡалайҙан ҡаҡтырған,
Туҡмағын һум алтындан һуҡтырған.
Хан һиңә ат бирә ләү,
Шуны ла алып менһәнә.

Изеге:

— Ай, Янбайым, Янбайым,
Мин ҡайтмамдыр, ҡайтмамдыр,
Ҡайтып та Иҙел кисмәмдер,
Ҡайтып та Иҙел кисмәмдер.
[Ҡыйғас ҡамыш ҡолаҡлы,
Ут урындай тояҡлы,
Эйәренең ҡашы алтын,
Йүгәненең башы алтын,
Өҙәңгеһе өҙә алтын,
Ҡойошҡаны ҡойма алтын]
Ат бирһә лә, менмәмдер,
Таҡым ҡото киткәндер.

Янбай:

— Ай, Изегем, Изегем,
Һәнекәйҙән һаҡлыраҡ,
Ҡемекәйҙән* күрклерәк[145],
Хан үҙ ҡыҙын бирә ләү,
Аны ла алып ҡосһана.

Изеге:

— Ай, Янбайым, Янбайым,
Мин ҡайтмамдыр, ҡайтмамдыр,
Хан үҙ ҡыҙын бирһә лә,
Аны ла алып ҡосмамдыр,
Ҡосағымдың ҡото киткәндер.

Янбай ҡурҡыта:

— Ай, Изегем, Изегем,
Туктамыш ханда туғыҙ ул,
Туғыҙы ла һуҡһа башыңа,
Ҡан һырғалар ҡашыңа!

Изеге:

— Ай, Янбайым, Янбайым,
Тыңҡылдама, Янбайым,
Маңлайыңды уярым,
Бүректәй алып һелкәрем,
Бүҙәнәләй йолҡарым.
Һеҙ туғыҙға беҙ һигеҙ,
Килер булһаң, кил, дуңғыҙ,
Китер булһаң, кит, дуңғыҙ! —

тип, Изеге Янбайға ынтыла биреп ҡуя, ти. Тегендә боҫоп ҡарап ятҡан хандың туғыҙ улы, Изегенең киҙәнгәнен күреп, ырғып торалар ҙа ҡасалар.

Изегеләр артабан юл тоталар. Китеп баралар, китеп баралар, иптәштәре берәм-берәм артҡа ҡала башлай. Изеге, быны һиҙеп:

— Ай, иптәштәрем, мине оҙатҡанығыҙ өсөн рәхмәт. Инде ҡайтҡығыҙ килһә, ҡайтығыҙ. Мин үҙем дә китәрем, — тип, теләр-теләмәҫ кенә килгән иптәштәрен кире ҡайтарып ебәргән, ти.

Бер үҙе Изеге китеп бара, китеп бара. Алда бер яу[146] ята, ти. Изеге яуға теймәй, ирәктән боролоп үтеп китеп барғанда, яубашы бер кешеһен ебәрә:

— Бар, барып алып кил анау кешене. Бынан әҙәм үтә алмай торғайны. Моғайын, Изегелер, килһен, — ти.

Изеге, иҫе лә китмәй:

— Һинең артыңдан барып йөрөргә минең ваҡытым юҡ! — тип, туктамай ҙа китә бирә.

Яубашы ҙурырак илсе ебәрә. Уға ла килмәй Изеге. Өсөнсө илсе ебәргәс кенә, Изеге яубашы эргәһенә бара. Яубашы дейеү батшаһы булған икән.

— Һин кемһең? — тип һораған була батша.

— Мин — Ҡарабай.

— Түгел бит! Һин Изеге!

— Изегене мин дә ишетә бeләм. Аны бер ыңғай 80 бот бойҙай[147] күтәреп йөрөй ала тип әйтәләр. Түбәһендәге соҡорға 40 бот, ике яурынының башына 20-шәр бот һыя, тиҙәр.

— Ярар, алай булһа, мин һиңә, Ҡарабай, бер бейә бирәм, шуны йәһәт кенә һуй ҙа бешер! — тигән яубашы. Үҙенең ҡырҡ кешеһенә лә бер бейә биреп шуны һуйырға ҡуша.

Изеге бейәне йылға буйына етәкләп алып бара ла ҡаҙан аҫтына ут яғып ебәрә, бейәне йығып сала һалып һуя бара, йыуып ҡаҙанға һала бара, ти.

Изеге, итте бешереп, барып әйтһә, теге 40 кеше ҡаҙанды аҫмаған да ти әле[148]. Яубашы:

— Һин — Изеге! Изеге генә шулай эшләй ала, — ти.

— Туҡта әле, һин аңла: мин бер үҙем генә, һөйләшер кеше юҡ, һүҙһеҙ генә эшләйем дә эшләйем, эш тиҙ ырай. Ә тегеләрҙең береһе бер һүҙ әйтһә, утыҙ туғыҙы тыңлап тора. Ҡырҡ кеше ҡырҡ ауыҙ һүҙ һөйләһә, ҡайҙа китә? Эш ҡайғыһы буламы ни!

— Ярар, һинең һүҙең хаҡ, — ти ҙә дейеү ике бейәне ашап бөтөп ҡуя[149]. Изеге лә әҙерәк ауыҙ итә.

Дейеүҙең сымылдығында мосолман ханы Сын Тимерхандың ҡыҙы булған икән, шуны яулап алып килә икән дейеү. Дейеү тегенең тубығына ятып хырылдап йоҡоға китә, ти. Ҡыҙ күҙҙәрен мөлдөрәтеп Изегегә ҡарай. Изегенең йөрәге түҙмәй, ҡыҙҙы ҡотҡарырға була.

Уғын ала килеп, дейеүҙең биленә тоҫҡап, керешен тартып ебәрә — кизе ыҫҡынмай. Тағы тарта, тағы ыҫҡынмай. Көйөп китеп тартып ебәрһә, зый итеп ҡала, дейеүҙең бил һөйәген өҙә ата ла ҡуя[150]. Дейеүҙең ғәйрәте бөтә[151]. Дейеү Изегегә һүҙ ҡуша:

— Изеге, миндә 40 ир көсө бар. Йөрәк майымды һуйып алып башыңа яп, 40 ир көсө һиңә күсер, — тигән булып хәйләләй.

Изеге инде ул хәйләне аңлай. Дейеүҙең йөрәк майын һыҙырып алып күбәләй ташҡа яба — таш майҙай иреп китә. Шул тиклем зәһәрле булған икән тегенең йөрәге![152]

Шунан дейеүҙе үлтереп, дейеү батырҙарының ҡолаҡтарынан алып баштарына зыңҡылдата төкөтөп үлтереп бөтә. Ғәскәрен, хандың ҡыҙын алып, Изеге Сын Тимерханға китә.

Сын Тимерхан ҡыуанысынан ҡыҙын Изегегә биреп, туй яһап ташлай. Изеге ҡатыны менән донъя көтөп тора башлай. Быларҙың бер ир балалары тыуа. Уға Әлбәкмырҙа тип исем ҡушалар. Әлбәкмырҙа ай үҫкәнде көн үҫеп, ҙурайып китә, атаһынан да мыҡты, көслө ир була.

Бер ваҡыт шулай атаһы:

— Әйҙә, улым, көс һынашып ҡарайыҡ, — тип, далаға алып сығып китә.

Изеге барып, бер ағасты эйеп, ботаҡтарын бер һыпырғанда таҙартып сыҡҡан, ти. Әлбәкмырҙа унан да йыуанырак ағастың ботағын түбән ҡарай һыпырып төшөргән[153], ти.

Изеге, бик ҡәнәғәт булып, элек-электән уйлап килгән уйын үтәмәк булып, улы менән ҡайтып китә. Ҡайтҡас та Изеге ханға инә:

— Улыбыҙ хәҙер ир ҡорона тулған батыр булған. Электән ала торған яуым[154] бар. Улым менән шуны барып алмаҡсы булдым. Ризалыҡ бир, ханым, — тип һорай.

Сын Тимерхан ризалыҡ бирә. Изеге, Әлбәкмырҙа йыйынып сығып китәләр Туҡтамыш хандың ерҙәренә. Туҡтамыш хандың туғыҙ улын ҡырып бөтөп, ханды эҙләйҙәр, таба алмайҙар. Юҡ хан! Ул ҡасып өлгөргән икән. Изеге Туктамыш хан артынан төшә. Теге урманға инеп йәшенеп ятҡан икән.

Ағас башында бер ҡош саҡыра ла саҡыра, ти:

— Туҡтамыш хан бында! Туҡтамыш хан бында! — тигән һымаҡ килеп сыға, ти, тегенең саҡырыуы.

Туҡтамыш хан:

— Ай эттәгенәһе, тоттора инде мине был яуыз, — тип шөрләп үҙе ҡысҡыра башлай, ти:

Ҡыҙғатау тигән ҡыҙыл ҡош,
Күп саҡырма, бер саҡыр!
Ҡыҙғатау тигән ҡыҙыл ҡош,
Күп саҡырма, бер саҡыр![155]

Изеге урманда эҙләп йөрөп ятҡанда хандың тауышын ишетеп ҡала ла, шул тауышҡа барып, теге хандың ҡолағынан һөйрәтеп алып сығып китә йортона. Шунан Изеге ханды үлтереп, һәнекәйҙән һаҡлырак, кемекәйҙән күрклерәк ҡыҙҙарын алып, арбаһын егеп, уртаға үҙе ултырып, артынан Янбай дуҫы менән Әлбәкте эйәртеп ҡайтып китә, ти.

Бара торғас, Янбай Әлбәккә һүҙ ҡуша:

— Бына мин ҡарап-ҡарап килдем дә һиңә әйтмәксе булдым әле, — ти. — Һин нимә беләһең? Белмәйһең, аңһыҙ һин. Ике ҡыҙ уртаһына йәш кеше һин ултырырға тейеш! Ә атаң, ҡарт булһа ла, үҙе ултырып алған, — тип, Әлбәккә дошман һүҙе бирә.

Әлбәк бик ҡыҙыу була. Уны-быны уйлап тормай, арттан бара килеп, атаһының башына ҡамсы менән берҙе тартып ебәрә — атаһының ике күҙе атылып килеп сыға. Әлбәк Изегене арбанан һөйрәп төшөрә лә ике ҡыҙ уртаһына үҙе ултырып ҡайтып китә[156].

Ә өйҙә ҡалған Әлбәктең ҡатыны һынсыл булған, ти. Әлбәктең эшен һиҙеп, сәңгелдәктә ятҡан балаһының аҫтына сәнескәк сыбыҡ — әлморон һала ла, үҙе мейес артына йәшенә. Әлбәк ҡапҡа эсенә килеп инеү менән балаһының шарылдап илағанын ишетә лә, ен-яға туҙып, өйгә килеп инә.

Ҡатыны мейес артынан сатырлап килеп сыҡты, ти:

— Ә-ә-ә, балаң йәлкеме ни? Йәнең сығамы балаң өсөн? Ә һин, дошман һүҙенә төшөп, атаңды нишләттең? Һәр кемдең үҙ балаһы үҙенә ана шулай ҡәҙерле була ул! — тип әрләп ташланы, ти, тегене.

Әлбәк бер һүҙ өндәшмәй торҙо ла, башына һуҡҡан һымаҡ, кире әйләнеп сыҡты ла китте, ти. Һыбай сабып барып етеп, атаһын күтәреп торғоҙҙо, ти. Шунан дошман һүҙенә төшөп атаһын харап иткәненә әсе үкенеп, атаһын йөкләп алып ҡайтып китте, ти. Атаһын йөкләгән көйөнсә, Әлбәк батыр шәһәрҙе өс тапҡыр әйләнеп сығып, атаһының ризалығын алып[157], татыу ғына донъя көтөп киттеләр, ти.

Мин уларҙа ҡунаҡта булдым, бик шәп туйланылар. Сатан бейә һуйып, Саҙалыны саҡырғандар, ала бейә һуйып, Ала Байталды саҡырҙылар, үҙебеҙ ҙә бергә булдыҡ. Кисә барып, бөгөн ҡайттыҡ[158].



## ИҘЕЛ ЙОРТ

[1]

Әй Иҙел йорт, Иҙел йорт,
Әй Иҙел йорт, Иҙел йорт;
Атам кейәү булған йорт,
Атам кейәү булған йорт;
Әсәм килен булған йорт,
Әсәм килен булған йорт;
Ас тамағым туйған йорт,
Ас тамағым туйған йорт;
Ҡүстән ҡалһам, ҡурған йорт[1],
Ҡүстән ҡалһам, ҡурған йорт.
Балтырғаны беләктәй,
Балтырғаны беләктәй;
Һарағыһы* ҡонандау*,
Һарағыһы ҡонандау,
Сыбар үгеҙ йөрәктәй,
Сыбар үгеҙ йөрәктәй,
Йөрәктәй, ау, йөрәктәй[2].
Һайрай ҙа ҡоштары, һандуғастары!

[2]

Иҙелде алыр, Димде алыр,
Иҙелде алыр, Димде алыр,
Был кәүерҙән* ни ҡалыр?
Был кәүерҙән ни ҡалыр?
Ҡыу ағастай ҡыуарған,
Ҡыу ағастай ҡыуарған,
Ҡарҙай башы ағарған,
Ҡарҙай башы ағарған,
Ҡарт һанына кем кергән,

Ҡарт һанына кем кергән —
Был кәүерҙән шул ҡалыр,
Был кәүерҙән шул ҡалыр.

[3][3]

— Торһана ла, ҡыҙым, торһана,
Торһана ла, ҡыҙым, торһана,
Ҡешәнле аттар кешнәшә,
Ҡешәнле аттар кешнәшә.
— Ҡешәнле аттар кешнәшһә,
Уғрыларға юлыҡһын!
— Торһана ла, ҡыҙым, торһана,
Торһана ла, ҡыҙым, торһана,
Ҡүрше-күлән геүләшә,
Ҡүрше-күлән геүләшә.
— Ҡүрше-күлән геүләшһә,
Ике күҙе тиң сыҡһын!
— Торһана ла, ҡыҙым, торһана,
Торһана ла, ҡыҙым, торһана,
Ҡотанда ҡуйҙар нырҙаша*,
Ҡотанда ҡуйҙар нырҙаша[4].
— Ҡотанда ҡуйҙар нырҙашһа,
Ас бүрегә юлыҡһын!
— Торһана ла, ҡыҙым, торһана,
Торһана ла, ҡыҙым, торһана,
Ҡүс ярағын күрһәнә,
Ҡүс ярағын күрһәнә,
Монаятты* йыйһана,
Монаятты йыйһана.
Яуға улъя булмайыҡ,
Яуға улъя булмайыҡ;
Ҡүс ярағын булъяйыҡ*
Ҡүс ярағын булъяйыҡ.
Ҡүлек* ҡулда булһайы,
Ҡүлек ҡулда булһайы,
Һаҙаҡ-һауыт ҡулдайы,
Һаҙаҡ-һауыт ҡулдайы.
— Ҡүс ярағын күрмәһә,
Абышҡалар ҡороһон!
Монаятын алдырһа,
Һәмтерәп* яуға ҡол булһын!
Булъямаһа яраған,
Ҡәүер алһын йыйырын*!
Ҡүлек ҡулында булмаһа,
Баҡтансылар ҡороһон!
Һаҙаҡ-һауыт булмаһа,
Ирмен тигән ирҙәрҙең

Бүре тартһын йоронон[5]
Йоронон, ау, йоронон!

[4]

Әй юртайыҡ, юртайыҡ,
Әй юртайыҡ, юртайыҡ[6],
Терәү ҙә һалып[7] юртайыҡ,
Терәү ҙә һалып юртайыҡ.
Иҙелгә кире ҡайтайыҡ,
Иҙелгә кире ҡайтайыҡ;
Иҙелде сығып ятайыҡ,
Иҙелде сығып ятайыҡ[8].
Алдыбыҙҙы ағартҡан,
Алдыбыҙҙы ағартҡан —
Аяҙ микән, таң микән?
Аяҙ микән, таң микән?
Артыбыҙҙы ҡарайтҡан,
Артыбыҙҙы ҡарайтҡан —
Болот микән, саң микән?
Болот микән, саң микән?
Саң микән, ау, саң микән?..

[5]

Әй төш күрҙем, төш күрҙем,
Әй төш күрҙем, төш күрҙем,
Төшөмдә ҡыҙыл ут күрҙем,
Төшөмдә ҡыҙыл ут күрҙем,
Ут яғалай шеш күрҙем,
Ут яғалай шеш күрҙем,
Шеш башында ит күрҙем,
Шеш башында ит күрҙем,
Йыйырылған ҡойҡаһы,
Йыйырылған ҡойҡаһы,
Ҡарайып көйгән суңҡаһы,
Ҡарайып көйгән суңҡаһы,
Имәнесле баш күрҙем,
Имәнесле баш күрҙем,
Баш күрҙем, ау, баш күрҙем.
— Әй төш күрһәң, төш күрһәң,
Әй төш күрһәң, төш күрһәң,
Төшөңдә ҡыҙыл ут күрһәң,
Төшөңдә ҡыҙыл ут күрһәң,
Ут яғалай шеш күрһәң,
Ут яғалай шеш күрһәң,
Шеш башында ит күрһәң,
Шеш башында ит күрһәң,
Йыйырылған ҡойҡаһы,

Йыйырылған ҡойҡаһы,
Ҡарайып көйгән суңҡаһы,
Ҡарайып көйгән суңҡаһы,
Имәнесле баш күрһәң,
Имәнесле баш күрһәң,
Үҙ башыңа, ҡарт убыр!
Үҙ башыңа, ҡарт убыр![9]

6

Торомтай* тигән тойғон ҡош,
Торомтай тигән тойғон ҡош
Ауанан* килеп төштө, ти,
Ауанан килеп төштө, ти;
Бармаҡ баштай бал ҡорто,
Бармаҡ баштай бал ҡорто
Бауырын өҙөп сыҡты, ти,
Бауырын өҙөп сыҡты, ти;
Әлемтәй менән Ҡоломтай,[10]
Әлемтәй менән Ҡоломтай
Ҡыуа килеп етте, ти,
Ҡыуа килеп етте, ти;
Бүлтеректәй бүреләй,
Бүлтеректәй бүреләй,
Илде бүлеп бөттө, ти,
Илде бүлеп бөттө, ти.
Бөттө, ти, ау, бөттө, ти.



## МАМАЙ ХАН ХИКӘЙӘТЕ

Иҙел буйында Сыңғыҙ хандың уландары яу менән үткән һуң, йәнә бик күп заман киткән һуң, Мамай хан[1] ил биләгән. Мамайҙың атаһы Муса хандың ике ҡатыны булып, беренсе ҡатынынан ете ул, икенсе ҡатынынан биш ул тыуған. Мамай икенсе ҡатындан тыуған бишенсе ул, кинйә ул булған[2].

Мамай яу сабырға яратыр, һәммәһен ҡырыр-ҡыйратыр, барсаһын баш эйҙереп үҙенә ҡаратыр иманһыҙ бер яу батыр булған. Мамай үткән бер ерҙә халайыҡ ҡырылған, ауыл үртәлгән, ҡаланың көлө күккә осҡан.

Урак[3] атлы бер ғәскәр башы Мамайҙың тоғро юлдашы булған. Улар икәүләп донъяның аҫтын өҫкә килтереп йөрөгәндәр.

Мамай менән Урак, донъяны шулай иңләп тә буйлап ҡыйратып йөрөй торғас, Ҡаф иленә* барып сығалар. Халкын ҡыралар. Ҡаф

ханын үлтерәләр. Ошо Ҡаф илендә Мамайҙың үҙенә лә донъя менән хушлашырға тура килә. Уның ғәскәрен тамам тар-мар итәләр. Үҙен тотоп үлем язаһына хөкөм итәләр. «Күпме илде, күпме халайыҡты нахаҡҡа ҡанға батырып, мөлкәтен талап, торлағын үртәп үттең һин, яуыз Мамай! — тиҙәр. — Халыҡ ҡаны, үкһеҙ балалар күҙ йәше, ҡарт-ҡоролар ҡарғышы ебәрмәй ул. Хәҙер үҙендең башыңды ҡырҡыр мәл етте. Ни әйтерең бар? Әйтер һүҙеңде әйтеп ҡал!» — тиҙәр.

Шунан һуң Мамай үҙенең һуңғы һүҙен ошо рәүешле һамаҡлап әйткән, ти:

Иҙел башы Ирәмәл тау —
Минең атам Мусаның
Иле ҡунған ере ине;
Яйыҡ башы ҡара урман —
Минең атам Мусаның
Йәй йәйләгән ере ине;
Ҡыҙыл*, Өйсүк*, Биштамаҡ* —
Минең атам Мусаның
Ҡыш ҡышлаған ере ине[4].

Табаны яҫы тарлан буҙ —
Минең атам Муса хан
Менеп йөрөр аты ине.
Даусы менән даулашыр,
Даулашыр ҙа яу асыр —
Минең атам Муса хан
Шундай дана зат ине.

Иле илегеп ҡунған ер,
Ҡышын ҡышлап, торған ер,
Йәйҙәрен йәйләгән ер,
Бейәләр бәйләгән ер,
Билгә ҡылыс таҡҡан ер,
Киреп уғын атҡан ер,
Күп ғәскәргә баш булып,
Алыҫтарға сапҡан ер, —
Бары ла ҡалған ата-бабайҙан,
Бары ла ҡала хәҙер Мамайҙан...

Бына ошо һуңғы һүҙҙәрен әйткәс, ир яманы Мамайҙың башын өҙә сапҡандар, ти.





# МӘРГӘН МЕНӘН МАЯНҺЫЛЫУ

Уралдың һылыу ҡыҙҙарын,
Ҡара ҡусҡыл сейәләй
Янып торған йөҙҙәрен,
Шәлкемләгән ебәктәй
Шоморт ҡара сәстәрен,
Сал бөркөттәй кәпәйеп,
Ҡалҡып торған түштәрен,
Атта уйнап сыныҡҡан,
Бал ҡортондай, билдәрен,
Ҡырсын ташҡа һибелгән
Көмөштәй сыҡҡан моңдарын,
Айҙай ҡыйғас ҡаш аҫты,
Ҡыуғалы һылыу күлдәрҙәй,
Ҡерпек үтә һөҙөлөп,
Йылмайыусан күҙҙәрен
Һылыуҙарҙың белгән һуң,
Айҙай Урал һылыуы
Маянды бер күргән һуң,
Нуғай хан[1] уй туплаған,
Маянды алайым тип,
Атаһынан һораған.

Йәндәй күргән балаһын
Берәү тотоп бирерме?
Уралдың күҙ ҡараһы
Маян тигән һылыуын
Уралдың үҙ буйында
Һөймәгән ир булырмы?

Хан, алам тип, яу асҡан, —
Маянһылыу, бирелмәй,
Шырлыҡ урманға ҡасҡан.

Маян атаһы Нәзершә
Йәштән батыр булһа ла,
Күп яуҙарҙы күрһә лә,
Дошман уғы тейгән һуң,
Сулаҡ булып бер ҡулы,
Һуҡыр булып бер күҙе,
Ярты батыр ҡалған һуң,
Инде ҡорбаш* булырлыҡ
Көсө юғын һиҙгән һуң,
Зар илаған халҡына,
Йыйып, былай тигән ул:

— Уралда тыуҙым ир булып,
Йәштән үҫтем хур булып,
Барың күреп беләһең,
Күрмәгәндәр — ишетеп.
Ҡанлы яуҙың башында
Данлы батыр һаналып,
Ҡилмешәк хан яуынан
Ҡан илаған илемде
Ҡурсып, яуҙа күп сапҡан
Мине барың беләһең.
Аҙаматтар, хәҙер ҙә
Һис йөрәгем ҡайтмаған,
Һаҙаҡ тотоп атырҙай
Уң ҡулым тик һынған һуң,
Үлем билдәһе булған
Башыма сал ҡунған һуң,
Бер быуындың бөтөнө —
Йәшем йөҙгә еткән һуң,
Яуға сабып батырҙар
Иҫәбенән сыҡҡан һуң,
Уралдың йәш үҫмере,
Типһә тимер өҙөрҙәй
Ирҙәр үҫеп еткән һуң,
Ҡор башын мин берәүгә
Тапшырайым, ҡустылар.

Халыҡ шунда һөйләшеп,
Ыласын үтмәҫ уғынан,
Айыу китмәҫ ҡулынан,
Мәргәнлектә дан тотоп,
Үҙ исемен юғалтып,
Бөтә тирә илдәрҙә
«Мәргән» тигән дан тотҡан
Йәш батырҙы билдәләп,
Ҡор башы, тип, ҙур һанап,
Яуға сыҡмаҡ булғандар.
Мәргән ҡорбаш булған һуң,

Оран һалған Уралға,
Атҡа менеп, барыһы
Ирәмәлгә килергә.
Маян күргәс Мәргәндең
Яуға батыр йыйғанын,
Яу сабырға йыйынып
Һаҙаҡ ҡайрап йөрөгәнен,
Йүгереп йортона ҡайтҡан,
Атаһына һүҙ асҡан:

— Сереҥ йәшереп баландан,
Бойоғоп торма, атаҡай;[1]
Сәсем оҙон булһа ла,
Йөрәкһеҙ тимә, атаҡай[2];
Ярты өлөшлө булһам да,
Йөрәгем ҡуш, атаҡай;
Ҡыҙ ир-егет булмаҫ, тип
Ҡәмһетмәсе, атаҡай.
Илде яуҙар баҫҡанда,
Барыһы атҡа менгәндә,
Мин дә атҡа менәйем,
Яу сабайым, атаҡай.

Быны ишеткәс, Нәҙершә
Әйткән ҡыҙы Маянға:

— Илдең күрке, балаҡай,
Атҡа менгән ир булыр,
Яуға сапҡан ир булыр,
Ил һаҡлаған ир булыр.
Илдең ыуы*, балаҡай,
Илде һатҡан ир булыр,
Серҙе һатҡан ир булыр,
Яуҙан ҡасҡан ир булыр.

Ай, балаҡай, ҡыҙ бала,
Ҡуш йөрәкле булһаң да,
Ҡулға һаҙаҡ алырҙай,
Дошман яуын ҡырырҙай,
Үнгән* менән дошмандың
Яуын кире ҡағырҙай,
Атың уйнап барғанда,
Дошман таңға ҡалырҙай,
Шүлгән менән Мәсемде
Ҡыйралдырған Һәүбәндәй,
Ҡая ярып һыу биргән
Иҙел менән Яйыҡтай,
Бабсаҡ ҡонон эҙләгән
Күсәк бейҙәй түгелһең.

Яуға барам, тиһәң дә,
Дошманыңа яу асып,
Илдең ҡонон алырҙай,
Яуға батыр түгелһең.

Маян әйткән атаға:

— Ирлек тигән атама —
Батырға тамға түгел ул.
Оҙон сәсле ҡыҙ булыу —
Хурлыҡҡа тамға түгел ул.
Алпамышаны ҡойонан
Барсын алған түгелме?
Нәркәс һылыу көрәштә
Яйыҡты йыҡҡан түгелме?
Данлы аҡбуҙ толпарын
Нәркәс алған түгелме?

Иҙел — минең һыулауым,
Яйыҡ — минең йәйләүем,
Урал — минең төйәгем,
Мине бәпләп* үҫтергән;
Биттәрендә уйнатып,
Ҡәпәс өсөн төлкөһөн
Йыл аша бер түлләтеп,
Тун итергә бүреһен
Йәйенә өс түлләтеп,
Ит итергә ҡуянын,
Моң өйрәткән ҡоштарын
Урманында үҫтергән;
Сәскә менән биҙәлгән
Туғайында йыуаһын,
Быуат-быуат ил моңон
Моңлай торған ҡурайын
Тағы һаҡлап үҫтергән.
Шул Уралды яу баҫҡас,
Яу сабыуҙан тайшанып,
Ятып ҡалған булырмы?
Яуға сапмай, дошмандан
Өркөп ҡалған булырмы?

Аҡбуҙ атың бир, атай,
Үҙем яуға сабайым.
Ҡөнөм бөтһә, атаҡай,
Түшәгеңдә үлгәнсе,
Батырҙар менән китәйем,
Бер табандан торайым,
Илем өсөн үләйем.

Ата әйткән шул ерҙә:

— Улай булһа, балаҡай,
Серем һөйләп бирәйем,
Асып һиңә йөрәгем.
Урал буйы был яҡҡа,
Тамъян, Бөрйән, Ҡыпсаҡҡа,
Ашҡаҙар, Дим, Яйыҡҡа
Указ килгән Нуғайҙан:
Бары миңә баш эйһен,
Һылыу ҡыҙҙан бер нөгәр*,
Айыры тояҡ биш көтөү[3],
Йылҡыһынан ун өйөр
Бирегеҙ, тип, яһаҡҡа.

Йортомдан берәү ат менеп,
Яуға ҡаршы сыҡмаһа,
Миңә хурлыҡ, балаҡай.
Ҡорал тотҡан ир күреп,
Ҡолаҡтарын ҡайсылап,
Ашауҙан ҡалып буҙ толпар
Йөрәкһеп тора, балаҡай.
Ярар, ҡыҙым, мен атҡа.
Ҡул ҡаушырып тормағыҙ,
Аяҡҡа баҫҡан ир, ҡатын —
Барың атҡа менегеҙ!

Рөхсәт алғас атанан,
Маян шунда ат менгән;
Мәргәнде эҙләп табып,
Батырҙар менән бергә
Яуға бараһын әйткән.

Мәргән һөйгән Маянын
Күргәс тағы шатланған,
Шунда төйәк туплаған;
Ҡорал кейеп, ат менеп,
Илдән батыр йыям тип,
Маянды шунда ҡалдырып,
Ил аралап киткән, ти.

Мәргән илдә йөрөгән һуң,
Күп ерҙәрҙе үткән һуң,
Бөтә батырҙы йыйып,
Былай оран һалған, ти:

— Әйт, тиһәгеҙ, әйтәйем,
Тыңлағыҙ һеҙ, аҙамат,

Минең әйткән һүҙҙәрем —
Нәҙершәнән аманат.
Указ килгән был яҡҡа,
Урал буйы халыҡҡа,
Тамъян, Бөрйән, Ҡыпсаҡҡа,
Мал-тыуарҙан күп төрлө
Бирегеҙ, тип, яһаҡҡа.
Мал-тыуарҙан яһағын,
Һорағанын түләнек,
Шулай ҙа ул ҡуйманы,
Яуын асты был яҡҡа.

Аҙаматтар, белегеҙ,
Уралып ятҡан Уралтау —
Беҙҙең һөйгән илебеҙ.
Ай Уралтау, Уралтау!
Уралып ятҡан Уралтау!
Һаҡланған ил яуында,
Яуға сабыр батырҙар
Ат өйрәткән буйында.
Ай Уралтау, Уралтау —
Атабыҙ кейәү булған ер,
Әсәбеҙ килен булған ер,
Ҡендегебеҙ киҫкән ер.
Балтырғаны беләктәй,
Һарынаһы еләктәй,
Йылғалары көмөштәй,
Тәмле һыуын эскән ер.

Ялбыр ҡойроҡ, утлы күҙ
Бүреһе күп Уралтау;
Ҡыҫҡа ҡойроҡ, шеш ҡолаҡ
Ҡуяны күп Уралтау;
Майлап ҡуйған ҡайыштай
Йыланы күп Уралтау;
Алпан-толпан атлаған
Айыуы күп Уралтау;
Ҡыҙ балалай биҙәнгән
Төлкөһө күп Уралтау;
Ояларға урыны мул
Ҡоштары күп Уралтау;
Балығы аттай уйнаған
Йылғаһы күп Уралтау;
Баҡаһы ҡуйҙай һыулаған
Күлдәре күп Уралтау;
Сырҡыратып буйында
Йылҡы көткән Уралтау;
Мөңрәтеп буйында
Һыйыр көткән Уралтау.

Ай Уралтау, Уралтау,
Һине һөймәҫ йән булмаҫ,
Байлығы күп Уралтау!

Уға ынтылған халыҡтарҙың
Уйы төрлө, аҙаматтар!
Ҡаланан сыҡҡан сауҙагәр
Малың талар — бур булмаҫ;
Маңлай тирен һыпырып
Эш эшләгән, мал эҙләп,
Тамаҡ аҫырар, — ҡол булмаҫ;
Нөгәр* йыйып үҙенә
Яу асмаған дошманға —
Малын йыйып ятһа ла,
Үҙ малына бей булмаҫ;
Ил һаҡларға яу аҫкан,
Гүргә башы инһә лә,
Ҡурайҙарҙа уйналып,
Ил теләндә маҡталып,
Йырҙарында йырланып,
Йөрәгеңдә миң булып,
Исеме мәңге һаҡланып,
Быуаттар буйы юғалмаҫ.

Ай Уралым буйында
Һыуын эскән йән булып,
Атын менгән ир булып,
Ҡыҙын ҡоскан йәр булып,
Уралға яу килгәндә,
Дошман ҡулын һуҙғанда,
Яуҙан ҡурҡып тормаһын!
Илар күҙ ҙә бер саҡта,
Йәше кибеп, көлөр ул.
Яуға сапкан батыр ҙа,
Дошман киткәс иленән,
Аттан төшөп, Уралдың
Биттәрендә уйнар ул.
Ғүмер һанап, йылың да
Алты айын ҡыш итә,
Алты айын йәй итә,
Урмандағы ҡоштар ҙа
Тырышып, айҙар ултырып,
Ап-аҡ ҡына йоморткаһын
Һауала һайрар ҡош итә.

Алтай, Урал типһәнен,
Сыңғыҙ хан да яу асып,
Үҙ ҡулында ҡол итеп,
Бөтә улын бей иткән,

Ҡейемен ебәк, ҡамҡа* иткән,
Атын арғымаҡ иткән.
Бәҫле була ҡама тун,
Һылай-һыйпай кейгән һуң;
Өҫтәге бәҫле ҡама тун
Сепрәк була туҙған һуң.
Түрҙә ултырған Сыңғыҙҙың
Талап илде бей булған
Балаһының күбеһе,
Илһеҙ ҡалып, хур булған.
Бейлек киткәс өйөнән,
Халҡы киткәс ҡулынан,
Түше аршын бикәһе
Түшәк йәймәҫ йәр булған.
Алтын Урҙа биләгән
Туҡтамыш тигән балаһы
Иленә таянып ат менгән.

Инде һеҙгә аҙаҡ һүҙ:
Аңлағандар һүҙемде,
Уҡ-һаҙаҡтарын алып,
Яуға ҡаршы ат менер;
Атҡа менмәй ҡалыусы
Уралымда ят булыр.

Ай Уралым, Уралым,
Ҡая башың үлгәне —
Башың монар алғаны.
Ай менән көндөң үлгәне —
Тонйорап барып батҡаны.
Ҡара ерҙең үлгәне —
Ҡар аҫтында ҡалғаны.
Уралымдың үлгәне —
Буйын дошман алғаны.
Ир-егеттең үлгәне —
Илен дошман алғаны.

Тағы уйлап ҡарағыҙ,
Минең һүҙҙе тыңлағыҙ:
Иҙел, Үҙән — ике һыу,
Икеһенең араһы
Мәңге ҡуныш* булырмы?
Был ҡуныште ултырып,
Мәңге тыныс булырмы?
Ҡуныш итеп тотһаҡ беҙ
Уға Мәскәү батшанан
Түрә, бейҙәр мал алып,
Яғалай ҡала һалырға
Беҙгә ҡарай юл алыр[4].

Иҙелде алһа, юлды алыр,
Уралды алһа, илде алыр,
Яйыҡты алһа, йәнде алыр,
Йәндән башҡа ни ҡалыр?
Бөтә илгә ҡул һалыр,
Урал буйын саң алыр.
Йәй йөрөргә яҡшы, тип
Арғымаҡты, атты алыр;
Һыбайлыға яҡшы, тип
Юрға менән бyҙҙы алыр.
Уның менән туҡтамаç,
Уралда моңлап йырлаған,
Йәндәй күргән ҡыҙҙы алыр.
Йылҡылары сырҡырап,
Һыйырҙары мөңөрәп,
Ҡуй-һарығы ҡуңырап,
Ҡөтөү-көтөү йөрөгән,
Яуҙан ҡалған бер бәрән
Мең ҡуй булып үрсегән,
Ил һаҡларға ат менеп,
Яуҙа үлгән батырҙар
Бары шунда күмелгән,
Йәндәй күргән Уралдың
Барын биләп, бей булыр.
Тарҡау йөрөгән бар ирең
Ҡуй көтөргә ҡол булыр.
Был һүҙҙәрҙе ишеткәс,
Халыҡ, күҙенә ҡан һауып,
Бары атҡа менгән, ти;
Ҡулына уҡ-һаҙаҡ алып,
Мәргән менән киткән, ти.
Мәргән илдән килгәнсе,
Илде туплап бөткәнсе,
Нуғай ханы, яу йыйып,
Нәҙершәнең йәйләүен
Ҡапыл килеп баçкан, ти;
Һылыу ҡыҙҙарҙы сүпләп,
Маянды ла бергә алып,
Мал-тыуарҙы әләктереп,
Алып ҡайтып киткән, ти.

Мәргән быға түҙмәгән,
Бар батырын туплаған,
Нуғай хандың өçтөнә
Яуы менән ыҡлаған.
Мәргән үҙе юл сабып,
Батырҙарын эйәртеп,
Хандың көсөн белергә,
Яйыҡ аша кисеүҙең

Ҡайҙалығын күрергә
Яйыҡ буйына барған, ти.
Бар кисеүен билдәләп,
Нуғай илен аралап,
Күп халыҡтарҙы күргән, ти;
Хан ҡулында зарыҡҡан,
Яһаҡ түләп интеккән
Күптәр барын белгән, ти.
Мәргән батырҙы күргәс,
Уның хәлен һорашып,
Ҡатын-ҡыҙы — барыһы
Зарын һөйләп илашҡан.

Мәргән барының зарын
Инде асыҡ белгән һуң,
Бынау һүҙҙәрен әйткән:

— Илем бынан йыраҡта,
Урал тигән данлы ил,
Беләләрҙер был яҡта.
Мин үҙем бер йырсымын,
Ханға барам ҡунаҡҡа.
Һеҙгә тағы шуны әйтәм:
Был хан барып Уралға,
Илде талап ҡайтҡан, ти;
Ҡатын-ҡыҙын, малдарын,
Талап алып киткән, ти.
Мәргән тигән бер батыр
Уралдан килә яу менән,
Илен баҫҡан был ханға —
Батыр йыйып, дау менән.
Һеҙ ҙә бергә ойошоп,
Ул Мәргәнде көтөгөҙ;
Бергә ҡушылып, яу асып,
Яуыз ханды ҡолатып,
Рәхәт ғүмер итегеҙ[5].
Был һүҙҙәрҙе ишеткәс,
Бары бергә һөйләшкән,
Ат саптырып һәр яҡҡа,
Мәргән менән бер төптән
Яу асырға ойошҡан.

Мәргән барған сағында
Нуғай хандың туйы икән;
Тирә-яҡтан бай йыйып,
Алып ҡайтҡан ҡыҙҙарын
Һата торған көнө икән.

Хан һарайы алдында,
Ауыҙлыҡ сәйнәп, сапсынып,
Аҡбуҙ аттың торғанын
Маян күргәс, шунда уҡ
Мәргән килгәнен белгән,
Унан ханға асыуҙан:
«Яйыҡ башы елле ул,
Терәкһеҙ тирмә ҡорҙормаҫ;
Иҙел башы шаулы ул,
Толпарһыҙ аша кистермәҫ;
Урал тауы даулы ул,
Ҡанһыҙ ханлыҡ йәйҙермәҫ.
Уралда яу күп булған,
Ил өҫтөнә ут тулған,
Батый хан да ҡул һуҙған,
Барыбер аҙаҡ юҡ булған», —
Тигән һүҙен әйткән һуң,
«Бөгәсә бер төш күрҙем,
Тыңла, ханым, юрарһың», —
Тип, ханға белдермәйенсә,
Мәргәнгә сер аңлатып,
Төш күрҙем, тип һөйләгән:
— Бейек ҡая башынан,
Ҡара урман эсенән
Берәү килә икән, тим.
Көлөп барҙым янына,
Күрешергә уйлаһам,
Ҡулын һуҙмай икән, тим.
Менгән аты талыҡҡан,
Атын күргәс егеттең,
Үҙен күргәндәй булдым, —
Мин күргәндәге түгел,
Өҫтө-башы алышҡан,
Төҫө лә бик асыулы
Ҡомһорап тора икән, тим.
Һунарсы тиһәм, ҡулында
Һис бер һуҡҡы күренмәй;
Яусы тиһәм, тағы ла
Юлдаштары күренмәй.
Шишмәгә барып һыу һоҫтом,
Атына барып һыу бөрктөм, —
Аты һалҡын алманы;
Тәгәс менән һыу бирһәм,
Аты тағы эсмәне.
Ни булыр икән, ханым?
Был төшөмдө юраһаң,
Килгән ҡунаҡтарындың
Күңелдәрен табырһың, —
Тигәс, хан да һүҙ асып,

Ҡунаҡтарға күҙ һалып,
Юрауҙарын һораған.

Хандың һүҙен ишеткәс,
Маян, төш тигән булып,
Һүҙҙе үҙенә терәгәс,
Мәргән, хандан һүҙ һорап,
Төш юрарға керешеп,
Бынау һүҙҙәрҙе әйткән:

— Мин үҙем, оло ханым,
Төш юраусы түгелмен.
Уралда ҙур дан тотҡан
Ишми тигән йырсымын.
Ҡыҙҙың төшөн юраусы
Бүтән берәү күренмәй,
Уртаға һалып һөйләгәс,
Юрамай тура килмәй.

Бейек ҡая, шыр урман —
Ил арҡалау, һылыуҡай.
Ҡаянан килгән ул егет —
Күҙе йәшкә мансылған,
Ҡулы бәйле берәүҙең
Өмөтө ул, һылыуҡай.
Ҡулың һуҙып барһаң да,
Ҡулын бирмәй тороуы —
Сер һаҡлау ул, һылыуҡай.
Атына һыу бөркһәң дә,
Тире ҡатмау атының —
Яу көтөү ул, һылыуҡай.
Ҡулында һуҡҡы булмауы,
Үҙе ҡомһорап тороуы —
Асыуланған иленең
Яу асырға килеүен
Көтөүелер, һылыуҡай, —

тигәс, хан Мәргәнде һөйләүҙән туҡтатҡан, ти.

Мәргәндең һүҙен ишеткәс, бөтә ҡунаҡтар Мәргәнде ҙур йырсы тип, уның туйҙа бер йыр йырлауын һорағандар. Ҡунаҡтар һорағас, Мәргән дә күнгән. «Йырҙы аҙаҡ йырлармын, хуп күрһәгеҙ, мин һеҙгә бер егеттең бер ҡыҙҙы яратҡанын һөйләп бирәйем», — тип, үҙ уйын икенсе бер егеттең башынан кискән нәмә итеп һөйләргә керешкән, ти.

— Ул ҡыҙ үҙе һылыу булған, бөтә илдә данлы булған. Һөйгән егете батыр булған, үҙе йырсы булған, ирек, һөйөү йыры йырлап йөрөгән. Ҡыҙҙың һөйөүе күктә иҫкән йылғыр елдәрҙән дә көслөрәк тә, ҡанатлы ҡоштарҙан да ирекләрәк булған. Шул һылыуҙы бер хан килеп тотҡон иткән. Һөйгән егете, быға түҙмәй, бөтә илде йөрөп, ба-

тырҙар йыйып, ханға ҡаршы яу күтәрергә ант иткән, ти. — Шунан Мәргән бер аҙ тынып торған да, тәрән итеп тын алып, дауам иткән:

Әсәһе килен булған,
Атаһы кейәү булған,
Үҙен данлы батыр итеп,
Тәрбиәләп үҫтергән,
Көләс йөҙлө һылыуын
Иркәләп тә үҫтергән
Тыуған илен, һөйгән ҡыҙын
Бирерме батыр егет,
Ҡара гүрҙә ятмаһа?!
Тапатырмы ерен дошмандан
Таянған да иле һау булһа?!

Мәргәндең был һүҙен ишеткәс, хан асыуланып:

— Мин хан тапарлыҡ батыр ҙа, дан алырлыҡ батыр ҙа күргәнем юҡ был яҡта. Йырсы, әйткән һүҙҙәрең әкиәттер ул, булмаһа, — тигән икән, Мәргән шул ерҙә, артта ҡалған халҡының килеп еткәнен күргән дә:

— Урал ашып, яу асып,
Юшап яткан йылҡының,
Мөңрәп йөрөгән һыйырҙың
Барын алып пол* ҡылған,
Яуға сапҡан батырын
Һуйып, ҡатынын тол ҡылған,
Гөлдәй һылыу ҡыҙҙарын
Барын алып ҡол ҡылған
Нуғай, илдең ирҙәрен,
Ҡәпәс кейгән балдарын*,
Көләс йөҙлө ҡыҙҙарын —
Барын ҡоллап, хан булған.
Күҙ йәш түккән үҙ халҡын
Яҡлай торған батыр мин,
Ә түгел тик йырсы мин.
Уралымды талаған
Яуыз хандан ҡономдо
Ала торған батыр мин!
Халыҡтың аҡҡан күҙ йәшен
Ҡаның менән йыуырһың,
Талап алған малдарың
Йәнең менән түләрһең.
Ҡуйың көткән ярлыға
Тәхетең биреп үлерһең.
Шул күҙ йәше хаҡына,
Ата-баба ҡонона,
Илемә биргән һүҙемә
Ҡара ҡаны был хандың

Яуап булһын антыма, —
Тиеп ханға ынтылған да
Башын сабып осорған.

Бөтә бәйле ҡолдарҙы,
Таланған бар малдарҙы —
Барын биреп ҡолдарға,
Илдәренә оҙатҡан.
Нуғай хандың ханлығын
Мәргән шулай ҡолатҡан.



# ТАРҒЫН БАТЫР

Борон башҡорт араһында Тарғын исемле батыр булған. Үҫеп егет булғас, үҙенә яраҡлы ҡыҙ эҙләп киткән был бер заман. Менгәне — толпар, уҡ-һаҙағы муйынында, ти, бының.

Был шулай китеп барғанда, бер далала Аҡсахан халҡы күсеп бара икән. Егет арттарынан ҡыуып етә. Иң алда Аҡсахандың Аҡъюныс исемле ҡыҙы бара. Янында 40 кәнизәк ҡыҙы бар, ти. Улар үҙҙәре бер төркөм. Тарғын үтеп барғанда, ҡыҙҙар, «Ай бынау егетте!» — тип, ҡыҙығып ҡалалар, ти. Тарғын әйләнеп иң алдағы ҡыҙға ҡараһа, ҡыҙға күҙе төшә. Ҡыҙ:

— Һин кем булаһың, егет, ҡайҙа китеп бараһың? — тип һорай.

Егет:

— Мин Тарғынмын, үҙемә лайыҡ ҡыҙ эҙләйем, — тип яуап бирә.

— Ә мин — Аҡсахандың ҡыҙы Аҡъюнысмын. Мин лайыҡ булһам, миңә һин лайыҡһың, — тигән ҡыҙ.

Тарғын тағы әйләнеп килгәндә, былар тирмәләрен ҡороп ултыралар, ти. Тарғын килә лә ханға һүҙ ҡуша:

— Ҡыҙың Аҡъюнысты миңә бирһәң, мин ҡабул итер инем, — ти.

— Юҡ, мин андай аҙғын кешегә бирмәйем, — ти хан, ҡыҫҡа ҡуя.

Тарғын Аҡъюнысҡа барып әйтә. Шунан, ҡасайыҡ тип, кәңәш итәләр былар. Аҡъюнысты толпарға мендерә лә алып ҡаса Тарғын. Кәнизәк ҡыҙҙар ханға барып хәбәр итәләр. Хан: «Кем дә кем [арттарынан] етеп алып ҡайтһа, шуға ҡыҙымды бирәм», — тип, халҡына иғлан тарата.

Бөтә халҡы ҡыуа сыға.

Толпарҙар күккә аралашып килгән саң күрәләр.

— Ах, ҡыуғын килә, толпар менгән кеше икән, — ти Тарғын.

Ҡыҙ:

— Беҙҙә ҡарт Ҡужаҡ тигән кеше бар. Шунан башҡа толпар менгән кеше юҡ, шул булыр, — ти. — Әммә шәпле кеше, ете йәштән яу алып килгән кеше. Хәҙер йәше алтмыш биштә, һиңә торошлоҡ итә алмаҫ, — ти.

Теге яҡынлап килгәс, Тарғын ҡыҙҙы ҡалдырып, далаға ҡайыла ла уҡ атымы ерҙән ҡарап тора. Ҡарт Ҡужаҡ ҡыҙға килеп етә.

— Ә, Акъюныс, килдем бит! Тәнендә бер генә миңең булһа ла, алмайым, — ти. (Үҙенең миндә эше юҡ, боҙолғанмы икәнен ҡарағыһы килә инде ҡартластың.)

Ҡарт Тарғынға килә лә:

— Әүәлге киҙәк* минеке, һуңғы киҙәк һинеке, — ти. Атышырға теләй.

Тарғын аттан төшөп, ҡартҡа нәүбәт бирә. Ҡарт Ҡужаҡ атып ебәрә. Тарғындың яурынында егерме биш уҡ һалынған һаҙаҡ булған икән, барыһын да сылтырата атып ебәрә. Тарғын атына менә лә ҡарт Ҡужаҡҡа сабып килә:

— Нигә уғымды атаһың, хәҙер тотоп һине мин ватам, — ти. Ҡарт:

— Тороп тор әле, тағы минең ике ата торғаным бар. Тауҙай атың менән тауҙай үҙеңде күрмәй атҡаным юҡ, — ти. — Бер атҡанда уғыңды аттым, икенсе атҡанда атыңды, өсөнсө атҡанда үҙеңде атамын, — ти.

Тарғын китә лә бара. Ҡыҙға килә. «Әйҙә, киттек», — ти.

Ҡыҙ ҡартҡа әйтә:

Әй, ҡарт Ҡужаҡ, ҡарт Ҡужаҡ,
Атың башын тарт, Ҡужаҡ.
Һаҡал шыртың ҡыуарып,
Буйға бөткән тамырҙың
Бары берҙәй сыуалып,
Алайым тип тормошоң,
Мине күреп ҡыуанып.
Үлтерһәң дә тимәймен,
Тиңдек бирһәң һөймәймен,
Борон Ҡужаҡ булһаң да —
Инде ятҡан ҡыу тиҙәк.

Шул ерҙә ҡарт Ҡужаҡ асыуланып, баш бармағын тығып, танауын айырып ебәрә.

— Акъюныс, һин атайыңа бер бүләк бир. Һинең өсөн һуғышып танауымды йырттым, тиермен. Мин һине һөйгәнеңә ҡушып китәмен, — ти.

Ҡыҙ һул ҡул бармағындағы именнәй[1] алтын йөҙөгөн алып, ҡарт Ҡужаҡҡа бирә. Ҡарт Ҡужаҡ, Тарғынды саҡырып алып, ҡыҙҙы уға биреп ебәрә лә ҡайтып китә. Ҡайтып етһә, хан янында һис кем юҡ, бер үҙе ҡалған булған.

— Йә, ҡыуып еттеңме?

— Еттем, — ти. — Мин алтмыш бишкә еткәс, ҡыҙ миңә киләме ни, ҡушып киттем үҙҙәрен, — ти. — Быны бүләге, — тип, йөҙөктө бирә. — Һуғышып танауымды йырттым, — ти.

Тарғын Аҡъюныс менән иленә ҡайтып бара. Шул ваҡытта бер татар ханын ҡалмыҡ ханы яулап килә икән, татар ханына Тарғындар тап булған. Татар ханы бик үтенә, беҙгә ярҙам ит, ти.

Шул ерҙә Аҡъюнысты ҡалдырып, Тарғын ҡалмыҡ ханына атышка китә. Ҡалмыҡ ханына ҡарап уҡ ебәрә. Бер йыуан тирәккә үтәләй батып керә уҡ. Ҡалмыҡ кешеләре атып ҡарай ҙа, тирәктең яртыһына ла үткәҙә алмайҙар[2]. «Ай, беҙҙән дә шәп кеше бар икән»[6] — тип, кире ҡасалар. Тарғын ҡырҡ кеше менән генә ҡыуалап киткән тегеләрҙе. Ҡыуалап, Болғар тауы тигән бер тауға менгәндәр. Ҡалмыҡтар күренмәгәс, Тарғын бер тирәккә менеп ҡараған. Унан да күренмәгәс, йығылып төшөп, имгәнгән[3]. Ҡырҡ кеше алып ҡайтабыҙ тиһәләр ҙә, күтәреп торғоҙа алмағандар. Шунан татар ханына килеп әйткәндәр.

Татар ханы:

— Ҡайталмаҫлыҡ булғас, үлһә — үлһен. Ҡатыны бик һәйбәт әле, — тигән. Аҡъюныс, үҙем алып ҡайтам тип, Тарғын эргәһенә килгән. Килһә, толпар сапсынып тора, ҡошо ла, эте һәпәләй ҙә ас, һаҡлап торалар. Ҡыҙ килеп быға өләң* әйтә башлаған:

Болғар, Болғар, Болғар тау,
Молдорап ятҡан ҡорғор тау,
Ҡандай ерҙән йығылмай,
Бер тирәктән йығылып...[4]

Тарғын шул һүҙгә ғәрлеге килеп[5], ҡапыл һикереп тора. Биле тайған икән, [һикереп торған ыңғайға] биле урынына ултырған, кеше булған да киткән. Шунан икәү күрешеп, ҡыуанышып, татар ханына киләләр.

— Атаңа нәләт, эт нуғай!
Айалымды*, үҙемде,
Ялтыратып күҙеңде,
Ташлап киттең йортоңа.

Мин һиңә изгелек итһәм, һин миңә яуызлыҡ уйланың, — ти, — инде мин һине әнә менән тунайым, — ти. Хан үтенә:

— Мин ханлығымды ла, бөтөн булған малымды, еремде бирәмен, ҡабул ит, — ти.

Шул ергә Тарғын хан булған. Үҙе бер яуға китеп, Тарғын үлеп ҡалған.

Аҡъюныс шул илдә үлгән. Бер кәшәнә эшләп, Аҡъюнысты шул кәшәнәгә ҡуйғандар. Ул кәшәнә хәҙерге көндә лә Масы эргәһендә[6].



# ТАРҒЫН МЕНӘН ҠУЖАҠ

Башҡорт илендә Аҡсахан тигән хан[1] булған. Был бер көн йыйын ҡорған. Йыйынға батырҙар килгән. Нуғайҙарҙан Тарғын тигән йәш батыр килгән. Батырҙар көрәш тотҡандар. Шунда Тарғын өҫтөн сыҡҡан.

Аҡсахандың Аҡйондоҙ тигән ҡыҙы була. Ҡыҙ быны күргән дә атаһына әйткән:

— Атай, вәғәҙәңде үтә, Тарғын батыр еңеп сыҡты, мине шуға бир, — тигән.

Аҡсахан:

— Мин килмешәккә биреү өсөн ҡыҙ үҫтермәнем, — тигән.

Шунан Тарғын батыр Аҡйондоҙ менән һөйләшеп ҡасып китергә булғандар. Уңай ваҡыт тап килтереп, икеһе ике арғымаҡты алып, былар ҡасып киткән.

Шунан Аҡсахан, халыҡты йыйып:

— Тарғын, яуыз нуғай, минең хөрмәтемде бысратты, ҡыҙымды урлап ҡасты. Барып ҡыуып етегеҙ ҙә икеһен дә алып килегеҙ. Кем дә кем икеһен дә тотоп килтерә, ҡыҙым шуға булыр, — тигән.

Баҙнат итеп барыусы батыр булмағас, бер алтмыш биш йәштәге ҡарт — Ҡужаҡ батыр бармаҡ булған. Үҙе кеүек ҡарт арғымаҡҡа менгән дә, ҡоралын тағып, киткән был. Әй киткән, әй киткән, тегеләрҙең артынан барып еткән. Етһә — тегеләр бер ағастың төбөндә ял итергә ултырғандар, ти.

Ҡужаҡ әйтә:

Әй, Тарғын, һин — килмешәк,
Ат янында һин — ишәк,
Ҡунаҡ ҡәҙерен белмәгән,
Намыҫ атын менмәгән,
Аҡсаханды кәмһеткән,
Аҡйондоҙҙо хур иткән,
Илгә ҡайғы килтергән,
Көнгә ҡара төшөргән,
Яуыз уйҙа булғанһың,
Ҡара ҡулың һуҙғанһың,
Тороп баҫ һин ҡаршыма,
Мин етермен башыңа!

Тарғын, шул саҡ һикереп тороп, Ҡужаҡҡа былай тигән:

— Әй, ҡарт Ҡужаҡ, ҡарт Ҡужаҡ,
Атың башын тарт, Ҡужаҡ,
Һаҡал шыртың ҡабартып,
Сал сәсеңде ағартып,
Ҡыҙ артынан килдеңме?
Әй, ҡарт Ҡужаҡ, ҡарт Ҡужаҡ,
Атың башын тарт, Ҡужаҡ,

Ҡалтыратып йөҙөндө,
Бүрбайҙағы биҙеңде,
Алышыр өсөн килдеңме?
Ҡыҙ артынан килдеңме?
Алышыр өсөн килдеңме?

Ҡужаҡ:

— Әй, Тарғын, һин — килмешәк,
Батыр түгел, һин — ишәк,
Мин башыңа етермен,
Ҡыҙҙы алып китермен,
Сыҡ каршыма, күрәйем,
Башың ҡырҡып бирәйем!

Шунан Аҡйондоҙ, былар араһына килеп инеп, Тарғын яклы булып, Ҡужаҡка ҡарап әйтте, ти:

— Әй, ҡарт Ҡужаҡ, ҡарт Ҡужаҡ,
Атың башын тарт, Ҡужаҡ,
Алтмыш бишкә еткәндә,
Дәртең-ушың бөткәндә,
Ҡыҙҙы алмаҡ булаһың,
Ҡыҙға тоҙаҡ ҡораһың.
Аҡйондоҙҙоң аҡ тәне
Һиңә булмаç, ҡарт Ҡужаҡ,
Һиңә булмаç, ҡарт Ҡужак,
Борон Ҡужаҡ булһаң да,
Инде яткан ҡыу тиҙәк[2].

Инде нишләргә? Ҡарт Ҡужаҡ уғын ала:

— Әйҙә, көс һынашайыҡ, — ти.

Тарғын:

— Мин һинең кеүек тиҙәк менән көс алышып та тормайым, — ти.

Ҡужаҡ әйтә:

— Мин һинең кеүек маңҡаға уғымды әрәм итеп тә тормаç инем, Аҡсахандың үтенесе бар, шуны атҡарырға кәрәк, — ти. — Әйҙә, көслө булһаң, тәүҙә һин атып ҡара, — ти.

Тарғын әйтә:

— Юҡ, һин ат, барыбер һинеке теймәç, — ти.

Шулай оҙаҡ ҡына һатыулашып, бер-береһен кәмһетеп торғандан һуң, былар уҡтарын икеһе лә бер юлы атырға булалар.

Бына ике яктан бер-береһенә ҡаршы уҡ атылып китә. Тарғындың уғы Ҡужаҡ янына яҡын да килмәй, әллә ҡайҙа ситкә китә. Ҡужаҡтың уғы Тарғындың ҡолаҡ япрағын ғына өҙҙөрөп китә. Тағы аталар былар, тағы шул уҡ хәл: Тарғын уғы теймәй, Ҡужаҡтыҡы Тарғындың икенсе яҡ ҡолаҡ япрағын өҙҙөрөп китә. Тарғын быға бик хурлана, ғәрлеге килә. Ошо хәлдә Аҡйондоҙҙоң күҙенә күренергә оялып, арғымағын-ниһен ташлап, Тарғын ҡасып китә.[3]

Ҡарт Ҡужаҡ Аҡйондоҙҙо атаһы ҡулына алып ҡайтып тапшыра. Аҡсахан вәғәҙәһе буйынса ҡыҙҙы Ҡужаҡҡа биреп, туй үткәрә. Мәжлес бик шәп була. Ҡарт Ҡужаҡ шулай итеп йәш кәләш менән әле булһа йәшәп ята, ти.[4]

Инде Тарғын хәленә килгәндә, ул шул китеүҙән ҡабат был яҡҡа әйләнеп ҡайтмай. Нуғай ханына килеп, ғәскәренә баш булып, һуғышҡа китә. Шулай ҡыҙыу һуғыш барған саҡта, Тарғын батырҙың биле һынып китә лә йығылып ҡала. Ғәскәре ҡасып таралып бөтә. Тарғын яланда япа-яңғыҙ ҡырҡ көн, ҡырҡ төн ята. Инде үләм, инде үләм, тигән саҡта ғына шундағы бер тирәк башына ҡарға килеп ҡуна. Ҡарғаның тауышына күҙен асып ебәрһә, ҡарға быға:

— Әй, Тарғын һин, Тарғын һин,
Батырлығың һалдың һин,
Илдән тороп ҡалдың һин,
Ҡыҙҙан ҡолаҡ ҡаҡтың һин,
Ялан тырмап яттың һин,
Намыҫыңды һаттың һин, — ти.

Тарғын, быны ишеткәс, намыҫланып һикереп тора ла, билен үҙ ҡулы менән тотоп, урынына ултырта. Ҡарғаны атып алып, итен бешереп ашай ҙа, бер аҙ хәл алғас, Аҡйондоҙҙо эҙләп китә. Килә был элекке урынына, килһә — Аҡсахан йортоноң эҙе лә юҡ, бөтә иле менән был урындан күтәрелеп күсеп киткән. Ары бара Тарғын, бире бара, Аҡсахан илен таба алмай, кире ҡиблаға таба йүнәлә. Нуғай ханын эҙләп китә был хәҙер. Шунан бер диңгеҙ буйына килеп, Нуғай ханды таба. Таба ла: «Йәнеңме, малыңмы?» — ти.

Тарғын батыр шул ерҙә үҙен ташлап киткән өсөн Нуғай ханының тиреһен энә менән тунап, язалап үлтерә лә, уның урынына үҙе хан булып ултыра.[5] Шунан был билһеҙ хан күпме йәшәгәндер, уныһын белмәйем, атайымдан һорап ҡалмағанмын, үҙе белеп әйтмәгән. Үҙе белеп әйтмәгәс, миңә барып етмәгән.

Иртәк бөттө, үҙем ҡалдым, ҡолағымды һеҙҙең яҡҡа һалдым.[6]



## ЕК МӘРГӘН

Ҡасандыр Ағиҙелдең кинәт боролош яһаған[1] аҡ ярына ҡаршы йәшел туғайҙа Туғыҙаҡ әбей үҙенең балалары берлән йәйләргә уйланы.

Ағиҙел үҙенең бөтә сафлығы берлә ялтырап күренерҙәй сырт ергә биҙәкле аҡ тирмәне ҡорҙолар. Туғыҙаҡ әбей тирмә ишегенән

ҡарағанда Ағиҙел аҡ уҡа кеүек йылҡылдай, унын тыныс өҫтөндә уйнап йөрөгән шаян сабаҡтарҙың яһаған түңәрәктәре бер-бер артлы яһалып, юғалып тора ине. Был хәтле асыҡ урындан Туғыҙаҡ әбей шомланып: «Ай-һай, балалар, тирмәне бигерәк яуҙың күҙенә тектек, һуңы яҡшы булһа ярар ине», — тиһә лә, балалар: «Әй әнием, беҙ бар саҡта, яуҙың күҙе һуҡыр», — тинеләр. Һиҙгер күңелдең шомо был һүҙ менән бөтмәһә лә, үҙенең батыр балаларына ышаныуы әбейҙе йөрәкләндерҙе.

Тирмә ҡоролдо, урын ҡотланды. Туғыҙаҡ әбей туғыҙ улына туғыҙ йүкә ҡыҙау* биреп урманға ебәрҙе.

Туғыҙаҡ әбей бер атаҡлы яу башының бикәһе ине. Ул саҡта Иҙел буйы батырҙарының көстәрен һынай торған майҙан Яйыҡ буйы берлә Сулман* аръяғы ине. Туғыҙаҡ әбейҙең бейе лә, яу саба торған атаҡлы батырҙарын йыйып, Ағиҙел менән Сулман буйына йыраҡ яуға киткән ине. Яу башы шул китеүҙән ҡайтманы. Туғыҙаҡ әбей шул ваҡыттан һуң туғыҙ улын ҡанат аҫтына йыйып, Ҡорос тигән туғайға күсеп килде. Был туғайҙағы ағасына һыя алмай торған шоморт, ҡарағат, миләш һәм тырыш бал ҡорттарының йәш йүкә сәскәһенән генә йыйған саф балдары уларҙы туйҙыра, таштан ташҡа һикереп шылтыраған һалҡын шишмә уларҙы һуғара ине. Ағиҙел һыуы кеүек тыныс аҡҡан ҡайғыһыҙ тормош үҙ көйөнсә аҡты. Туғыҙаҡ әбей ҙә туғыҙ улының майҙан күрергә ваҡыттары еткәнен һиҙеп, уларҙы өйләндерҙе. Шул көндән һуң йәш батырҙар аталары юлынан яуға йөрөй башланылар. Йәш көстәрҙең һәр бер тәжрибәһе уңа ине. Туғыҙ арғымаҡ берлә китеп, туҡһан ат яу малы алып ҡайтҡан саҡтары аҙ булманы. Ул ваҡыттарҙа бөтөн Ағиҙел буйында телдән телгә туғыҙ батыр әкиәттәре һөйләнә, улар тураһында маҡтау йырҙары шаулай ине. Бөтөн Сулман буйында туғыҙ батыр яуынан ҡоттары осмаған, таң атҡанда йәндәренән имен булған бер өй ҡалмаған ине.

Замандар үтте. Туғыҙаҡ әбейҙең кескәй генә өйөндә туҡһан йәнле бер ғаилә булды. Ҡәҙерле нәнә* үҙенең шаян торондарының* уҡ-йәйә берлә уйнағандарын рәхәтләнеп ҡарап тора, уларҙың тура атыуҙарына һөйөнә ине.

Бына бер көндө туғыҙ батыр Сулман буйҙарынан хисапһыҙ күп яу малы берлә ҡайттылар. Был олуғ шатлыҡ көнөнөң хәтере өсөн батырҙар туй яһанылар.

Йәйге төн ине. Киң болон, ҡуйы ҡара урман, тыныс Ағиҙел үлем йоҡоһо берлә йоҡлайҙар; урман артынан яңы уянған ярты айҙың шыйыҡ яҡтыһы һыу өҫтөндә шомло рәүештә емелдәй. Бейек йүкә ағасының әллә ҡайһы бер ерендә шомло ябалаҡ һирәк-һирәк кенә ҡысҡырып ҡуя ине.

Туғыҙаҡ әбейҙең йөрәге тиҙ шомланды. Ләкин батырҙар туй хәтере өсөн эселгән ҡолмаҡлы* балдан бер ни һиҙмәҫлек рәүештә арып йоҡлағандар ине. Туғыҙаҡ әбейҙең һиҙгер ҡолағына һыу өҫтөндә шап-шоп иткән бер тауыш ишетелде. Шул арала уҡ: «Әй тәңрем! Тиҙ, балаларым, ишкәк тауышы ишетелә — яу бар, тиҙ тороғоҙ!» — тип ҡысҡырһа ла, батырҙар ятҡан аҡ тирмәне көнсө* яу солғап алды. Туғыҙаҡ әбейҙең ҡәҙерле эргәһе* йығылды. Күптән

түгел бөтөн Сулман буйына йоҡо бирмәй торған, Урал буйҙарында маҡтау йырҙары йырлана торған туғыҙ батыр хәҙер урындарынан юғалдылар. Уларҙың алтын-көмөштәре, уҡ-йәйәләре — бары ла дошман кәмәләре өҫтөнә тейәлеп йөҙөп китте. Ҡуптән түгел Туғыҙаҡ әбейҙең тура атыуҙарына һөйөнөп торған шуҡ торондарының өҫтөндә хәҙер йырткыс ала ҡарғалар, төйләгәндәр осоп йөрөйҙәр ине.

Ләкин аңҡау дошман ҡәҙерле эргәне тамырынан һеперә алманы. Яу килгәнде һиҙгән туғыҙынсы килен, үҙенең ике йәшлек балаһын алып, ҡасып өлгөрә алды. Ул да, туғайҙың бер ситенә барып, үҙенең батыры һағышынан һарғайып үлде. Тик уның күкрәк һөтөн имә торған бала ғына иҫән ҡалды. Ул үҙенең ейегән* анаһының ҡоро имсәген һурып ята ине.

Ҡем белә, әллә тәҡдир уны хурлыҡ менән бөткән ҡәҙерле эргәнең үсен алыр өсөн иҫән ҡалдырғандыр. Әллә туғыҙ батыр фажиғәһен шатланып һөйләгәндәрҙең башына һау ҡалдырғандыр. Нисек кенә булһа ла, ул иҫән ине. Уға мәрхәмәтле ҡыр ҡуяндары туҡлыҡлы үләндәр өҙөп килтерәләр, йомшаҡ күңелле, йыуаш ҡоштар төрлө емештәр бирәләр ине. Ул үҙенең иптәш ҡоштары, януарҙары араһында үҫте, үҙенең ни өсөн былай яңғыҙ икәнен белмәйсә үҫте. Уны тәбиғәт үҙе аҫрап үҫтерҙе.

Ул ун йәшенә еткән саҡта теләһә ниндәй айыуҙарҙы бер ҡулы берлә күтәреп ырғыта ине. Ҡара урман халкы уның күләгәһенән ҡурҡа ине. Була ине шундай саҡтар, ул бейек яр өҫтөнә үҫкән шыма ҡарағайҙарҙың башына менеп ҡарай: сикһеҙ-ҡырыйһыҙ ҡара урман бөтөн ҡараңғылығы менән уның алдында ята; әллә ҡайҙарҙан көмөш таҫма кеүек һуҙылып килгән Ағиҙел борғоланып-һырғаланып ялтырай; йыраҡта йәшел ашъяулыҡ кеүек аландар, туғайҙар күренә, көн сығышында томан араһына ғына бейек тауҙар аларып тора. Бына уның сыҙамһыҙ ярһыу күңеле шул ерҙәрҙе лә күргеһе килә, унда ниҙәр барын белгеһе килә. Ләкин ҡоро ҡул берлә генә барыу ҡурҡыныс төҫлө тойола ине.

Көндәр үтте. Бер көндө ул үҙенең тыуған тирмәһенең харабаһына барып сыкты. Унда әллә ниндәй уҡ-йәйә һыныҡтары, ватыҡ өҙәңгеләр, ярылған ҡаҙандар, шулар араһында ялтырап ятҡан аҡ һөйәктәр күрҙе. Уның күңеленә был минең туғандарым, аталарым торған урын түгел микән тигән уй килде. Аяҡтарын һуҙып шул урынға ултырҙы ла, ҡара урманға төшөп барған ҡара ҡыҙыл ҡояшҡа ҡарап, әллә ниҙәр уйлана башланы. Уның тирәһендәге йүкә ағастарында мең төрлө йырсы ҡоштар, мең төрлө көйгә һалып, үҙҙәренең моңло йырҙарын йырлайҙар; ҡояштың һуңғы нурҙары тоноҡ һыу өҫтөндә һары алтын кеүек емелдәйҙәр; сикһеҙ ҡара урман ҡурҡыныс бер ололоҡ берлә тына, ҡабара ине. Үкһеҙ батыр үҙенең тыуған эргәһе өҫтөндә ата-аналарының һөйәктәре янында батырҙарса ҡаты бер йоҡоға китте.

Төшөндә уға шәп арғымаҡҡа атланған ҡорос уҡ берлә ҡаты йәйәһен иңенә аҫҡан бер ҡарт батыр күренде.

Ҡарт батыр үкһеҙҙең янына килеп: «Әй Ағиҙел буйының көслө ҡулы, атаҡлы батыры! Һин ҡайҙа ятырға белгәнһең, балам. Сурлы* яуының башына тыуған батыр балам, мин — һинең атаң. Тор уры-

ныңдан, бына бынау йүкә ағасының аҫтында һиңә атаңдан ҡалған уҡ-йәйә бар. Ана, анау туғайҙа эйәһен юғалтҡан атаңдың арғымағы бар. Ал һин шул уҡты, атлан шул атҡа, кит көн батышына. Шунда һин үҙеңдең даныңды, малыңды табырһың. Тик шуны онотма: был урын — һинең тыуған урының, бында һинең ҡәҙерле нәнәң, батыр аталарың, һөйөклө аналарың, иркә туғандарың йәшәгәндәр. Улар үҙҙәренең дандарын ата-бабанан ала килгәндәр. Шул нәҫелдең атағын юғалтма, балам, һиңә шул бөтә туғандарыңдан сәләм. Иҫән бул, батыр балам Ек. Һинең исемең Ек[3] булһын, йәйәң ныҡ булһын!» — тине лә күҙҙән юғалды.

Ек уянғас, атаһы ҡушҡан уҡ-йәйәне ҡаҙып алып, туғайҙа йөрөгән арғымаҡты тотоп менде лә көнбайышҡа йүнәлде. Ул ваҡыттарҙа көнбайышындағы башҡорттар Ҡазан ханына «дан»[4] түләйҙәр ине. Ек шул башҡорттарҙы ҡул аҫтына йыйҙы ла Ҡазан ханына дан түләүҙән туҡтатты. Ул, үҙенең ҡул аҫтындағы егеттәр менән яу сабып, Ҡазан хандарын аҙ аптыратманы. Ектең уғы бушҡа осмай ине. Ул әгәр ҙә дошмандың күҙенә атып һуҡыр ҡалдырырға теләһә, ул эш булмай ҡалмай. Инде дошмандың алғы тештәрен һындырырға уйлаһа, һындырмай ҡалмай ине. Була ине шундай ваҡыттар, ул, һунарға сығып, осоп барған ҡыр ҡаҙҙарының бер генә ҡауырыйын өҙөп төшөрөргә уйлай һәм эшләй, ҡасып барған төлкөнөң бер ҡолағынан атып икенсеһенән сығара ине. Уның шул тура атыусылығы өсөн уны Мәргән тип атанылар.

Ек Мәргәндең исеме тиҙ арала йырҙарға ҡушылып әйтелә башланы. Ектең исемен ишетеү күп батырҙарҙың эсен ҡайната, уның үҙен күреү уларҙы ҡурҡыта. Урал тауы аръяғында булған ҡырғыҙ[5] батырҙары, Яйыҡ буйының атаҡлы бейҙәре, Ҡазан ханының атамандары уның уғына осрауҙан ҡурҡалар ине.

Заман үтте, һыуҙар аҡты. Бер ваҡыт Ҡазан ханы, иң көслө ғәскәрен йыйып, Ек Мәргән өҫтөнә һуғыш асты. Ек Мәргән дә үҙенең тоғро, ышаныслы иптәштәре берлән ҡаршы сыҡты. Ҡурҡыныслы һуғыш башланды. Ек үҙенең алдындағы ғәскәрҙең берәм-берәм йығыла барғанын күреп, һуғышҡа ҡыҙыға, ул үҙен үҙе белмәҫтән алға бара. Хандың ғәскәрҙәре лә ҙур оҫталыҡ берлән аталар, ләкин Ек уларҙың уҡтарын һиҙмәй ине. Күп һуғышҡас, Ек үҙенең иптәштәрен ҡарайым тип, артына боролһа, иптәштәренең барыһы ла ерҙә ятҡанын күрҙе — уның батыр юлдаштары үлеп бөткән ине. Шунан һуң Ек хан ғәскәренә үҙ ирке берлән бирелде. Екте ғәскәр Ҡазан ҡалаһына алып китте. Ҡазанға барғас, уны хан ҙур таш һарайға яптырып ҡуйҙы.

Берҙән-бер көндө Ҡазан ханының һунарға бара торған күленә яңғыҙ аҡҡош төшкән тип хәбәр иттеләр. Һунарға һәүәҫле хан тиҙ ара үҙенең мәргәндәрен йыйҙырҙы ла, шул аҡҡошто үлтермәйсә генә атып алып, һарай күленә ебәрергә ҡушты. Хан барлыҡ мәргәндәре берлән күл буйына килде. Ләкин һис бер атыусы уғының яңылыш китеүенән имен түгел ине. Хан ни хәтле әйтеп ҡараһа ла, ҡулына ышанып эшкә барыусы булманы. Бары ла хандың ҡаты асыуынан ҡурҡалар ине.

Шул ваҡыт мәргәндәр араһынан береһе сыҡты ла: «Падишаһым, солтаным! Ындай нескә эште эшләр кеше Ҡазан илендә әле етешмәгәндер. Бында Ағиҙел буйынан килгән атаҡлы бер мәргән бар. Ул, осоп барған ҡарсығаны атып, бер генә ҡаурыйын һындырырға уйлаһа, шуны эшләй. Уның уғы бушҡа ла китмәй һәм яңылышмай. Һеҙҙең был олуғ эшегеҙҙе ул ғына башҡарһа башҡара алыр!» — тип, ханға Екте ғарыз* итте. Хан шундуҡ Екте саҡыртып алды ла үҙенең йомошон һөйләне.

Ек Ҡазан ханлығы ҡул аҫтында шундай еңел эшкә лә батырлығы еткән кешеләр юҡлыҡты күреп көлдө. Унан һуң ҡорос уҡлы көмөш йәйәне ҡулына алды ла:

— Батыр хан, мин күл өҫтөндә тик торған ҡошто атыуҙы мәргәнлегемә кәмселек һанаймын. Һеҙ элек ул ҡошто ҡурҡытырға ҡушығыҙ. Ул осҡан ваҡытта ҡай еренә атырға ҡушһағыҙ, башымды алдығыҙға ҡуйып, йомошоғоҙҙо үтәйем, — тине.

Хан йәш батырҙың был һүҙенә рәхмәт әйтеп, унан һун аҡҡоштоң йыуан ҡаурыйынан өсөһөн өҙҙөрөргә ҡушты.

Аҡҡошто ҡурҡыттылар. Ҡурҡаҡ ҡош, үҙенең тотҡонлоҡҡа эләгәсәген һиҙенеп, бар көсө берлә һауаға күтәрелә башланы. Ул арала Ек Мәргән дә көмөш йәйәнең ебен сиртте. Күп тә үтмәй, аҡҡоштоң өс ҡаурыйы һауала йылғыйлап* осоп күлгә төштө. Бисара ҡош та артыҡ оса алмайса, күлдең бер ситенә төшөп, йөҙә башланы.

Хан Ектең был оҫталығы, батырлығы өсөн уға ирек бағышлап, Ағиҙел буйына ҡайтарып ебәрҙе. Ек, Ҡоросҡа ҡайтып, үҙенең батырлығын йыраҡ илдәргә хәтле белдергәс, аталары янына ҡайтып китте[6].



## ҠЫПСАҠ ЕГЕТЕ МЕНӘН БАШҠОРТ ҠЫҘЫ

Бик борон заманда Ҡыпсаҡ тигән бер ҙур иләү булған, тиҙәр. Ул боронғо бер башҡорт иләүе икән. Шул иләү-илде, һәр яҡлап яу килеп, маҙаһыҙлап торған, ти.

Берҙән-бер көндө Танып* тигән һыу буйында һылыу бер башҡорт ҡыҙы керҙәр сайҡап торғанда, эргәһенән йылҡылдап торған аҡбуҙ атҡа атланған бер ҡыпсаҡ егете үтеп бара икән. Ул атын һуғарырға булып, һылыуға былай тигән:

— Танып буйы һылыуҙарын күҙләп китәм,
Бирсе, һылыу, күнәгеңде, толпарыма һыу эсерәм;
Сәфәремдән имен-аман урап ҡайтһам,
Танып буйы бер һылыуын бисәм итәм.

Быға ҡаршы ҡыҙ шулай яуап биргән:

— Ҡыпсаҡ иләү егетенең
Арҡаһында думбары бар бүҙәнәләй,
Салбарына зәр һалдырған,
Йөҙ ҡуйы, мең тәүәһе* бар нәмәләй!

Егет:

— Арҡамда ризыҡлыҡ думбарым бар,
Яуға ҡаршы барырлыҡ дарманым бар,
Тирә-яҡҡа, халайыҡҡа киң таралған
Батыр тигән исем алған ҙур даным бар.

Ҡыҙ:

— Йән аямай яуға барған батыр егет,
Минән һиңә шулдыр теләк:
Алыштарҙа еңеп сығып, аман ҡайтһаң,
Һинең менән ҡауышырға минең теләк.
Вәғәҙәгә төҫөм итеп минән һиңә ошо бүләк, —

тип, сиккән ҡулъяулыҡҡа төргән көмөш йөҙөк бүләк иткән, ти.

Яу ҡырында ҡалҡан булыр һинең бүләк,
Иҫән-аман ҡайтһын, тиеп теләә теләк,
Хуш, һылыуым, вәғәҙәле йәрем минең,
Юлдарымда, яҙмышымда бул һин терәк, —

тип, егет һамаҡлап әйткән дә, һылыуын ҡаты ҡыҫып үпкәс, атына атланып яуға сапҡан, ти.





# МОРАҘЫН МЕНӘН БУҺҠЫН

Мораҙын менән Буһкын бер ата, бер әсә балалары булған. Икеһе лә бай булған. Буһкындың ҡустыһы Мораҙын батыр ҙа булған. Мораҙын — Бөрйәндә, Ирәндек һыртында, Буһкыны, иген сәсеүгә зауыҡ итеп, Дим буйында йәшәгән.

Мораҙын, ағаһы Буһкынға кеше ебәреп: «Бәхетеңде тупраҡҡа болғама! Донъяла мал сарыу даһинан нәрҫә бармы?[1] Илгә ҡайт!» — тип әйтһә лә, Буһкын ер игеүен ташлап ҡайтмаған.

Мораҙын йылҡыһының хисабын үҙе лә белмәгән, йылҡысылары ла белмәгән. Йылҡысылары йылкы теүәлләгәндә, Ҡәҙермәт уяһына өйөрөп ҡуйып, йылҡыһының теүәллеген белгән, ти...[2]

Мораҙын тураһында халыҡ телендә түбәндәге ҡобайыр йөрөй:

[Буһкын:]

Биләнсәк башы биш ҡыуаҡ,
Биләнсәк башы биш ҡыуаҡ
Билге төйҙөң, Мораҙын,
Билге төйҙөң, Мораҙын;
Астаналы ҡаҙандан[3],
Астаналы ҡаҙандан
Маһайыуҙы уйланың,
Маһайыуҙы уйланың.
Биш бейәгә бер ҡолон,
Биш бейәгә бер ҡолон
Һин тиленең, Мораҙын,
Һин тиленең[4], Мораҙын;
Ҡарт әсәңде, йәш итеп,
Ҡарт әсәңде, йәш итеп,
Иргә бирҙең, Мораҙын.
Ҡаптырғаңа — ҡалтаңа,
Ҡаптырғаңа — ҡалтаңа
Көмөш сабып[5], Мораҙын,
Көмөш сабып, Мораҙын,

Алтын-көмөш тултырып,
Алтын-көмөш тултырып
Арҡаландың, Мораҙын,
Арҡаландың, Мораҙын.
Ҡара ыласын ҡау иттең,
Ҡара ыласын ҡау иттең[6],
Ҡошто ҡайҙан сөйөрһөң?
Ҡошто ҡайҙан сөйөрһөң?
Ҡара арғымаҡ ҡатырҙың,
Ҡара арғымаҡ ҡатырҙың,
Атты ҡайҙан менерһең?
Атты ҡайҙан менерһең?
Менерһең, ау, менерһең?

[Мораҙын:]

Биләнсәк башы биш ҡыуаҡ,
Биләнсәк башы биш ҡыуаҡ
Билге төйһәм — ил өсөн!
Астаналы ҡаҙандан,
Астаналы ҡаҙандан
Маһайыуҙы уйлаһам,
Маһайыуҙы уйлаһам, —
Донъя яптыҡ[7], көн өсөн.
Биш бейәгә бер ҡолон,
Биш бейәгә бер ҡолон
Мин тилеһәм, — йорт өсөн!
Ҡарт әсәмде, йәш итеп,
Ҡарт әсәмде, йәш итеп,
Иргә бирһәм, — дан өсөн!
Ҡаптырғама — ҡалтама,
Ҡаптырғама — ҡалтама
Көмөш сапһам, — күрк өсөн!
Алтын-көмөш тултырып,
Алтын-көмөш тултырып
Аркаланһам, — өлт өсөн!
Ҡара ыласын ҡау итһәм,
Ҡара ыласын ҡау итһәм,
Шоңҡар һайлап сөйөрмөн.
Ҡара арғымаҡ ҡатырһам,
Ҡара арғымаҡ ҡатырһам,
Толпар һайлап менермен,
Менермен, ау, менермен!



# СУРА БАТЫР

Яуға китеп барамын,
Ҡазан илен аламын,
Ҡазанға китеп барамын.
Мин Ҡазанға барғансы,
Ҡар яумағай, ҡан яуғай;
Мин Ҡазанға барған һуң,
Ҡан яумағай, ҡар яуғай.

Ҡанатбайҙың алаты,
Ҡултығында ҡанаты,
Яуҙы күрһә, сәйнәй, ти,
Ҡуй-һарыҡтай әйҙәй, ти.
Анауыл менән мынауыл,
Ике уртаһы ҡарауыл.
Буҙса турғай булайым,
Ҡапҡаһына ҡунайым,
Тулып ятҡан дошмандың
Ҡайһы берһенә булайым.

Өйҙә бармы ир заты,
Йортта бармы ир заты?
Ир-ат — батыр ҡанаты,
Ир-ат — яуҙың ҡанаты.
Өйҙә ята ҡыҙ-ҡортҡа,
Түрҙә ята — ҡыҙ-ҡортҡа;
Ҡатын булһа сара юҡ,
Әгәр иркәк булғанда,
Булыр ҙа ине бер тотҡа!
Яуға китеп барамын,
Ҡазан илен аламын,
Ҡазан илен алған һуң
Ҡайтып ҡылысым һаламын.



## СҮКЕМ БАТЫР

Сүкем батыр ир ине,
Сүкем батыр ир ине,
Дошмандарға күкрәк киреп,
Ҡаршы сығыр ир ине.
Сикәһенән ҡан сыҡһа,
Тирем сыға, тир ине,
Елкәһенә уҡ тейһә,
Ямғыр яуа, тир ине.

Ошбу һалйот ерендә
Киң өйөрҙәр йөр(ө)гәндә,
Шул малдарҙы таларға
Күсем хан яуы килгәндә,
Ҡамсат бүркен ҡыңғартып,
Уҡ-һаҙаҡтарын тағып,
Сүкем сыҡҡан яу һалып,
Арғымаҡка атланып.

Дөлдөл кеүек осҡан ул
Буҙъюрға ман сапҡанда,
Таш-ҡаяны ватҡан ул
Һаҙағынан атҡанда.

Гәүерҙәр* уйланылар
Башҡорт ерен таларға,
Сүкем кеүек батырҙарҙы
Хәнйәр менән ҡаҙарға.
Сүкем батыр бирмәне
Тыуған-үҫкән ерҙәрен,
Ҡурпылы тибендәрен,
Йылҡылы өйөрҙәрен.
Юлдаштары бөтһә лә,
Миәс һыуын кискән ул,
Унда булған дошмандарҙың
Муйындарын киҫкән ул.

Күкрәк киреп ҡаршы сыҡҡан,
Бер ҡурҡыуҙы белмәгән,
Шуға уны туған халҡы
Тәкбир* әйтеп ерләгән.

Сүкем батыр ир ине,
Бик яныуар ир ине,
Башҡорттарҙың араһында
Таң йондоҙо шикелле
Һүнмәй торған ир ине.
Ҡарсығалай йылғырлыҡта
Ил эсендә бер ине.

# БАЯЗИТ БАТЫР

Илдәрҙә күп батырҙар:
Ҡейек аулар батыр бар,
Дошманды яулар батыр бар,
Илен һаҡлар батыр бар.
Илен һөйгән батыр йән
Дошманын еңмәй ҡайтырмы?
Иленә дошман килгәндә,
Тирмәгә инеп ятырмы?
Баязит тигән сор* мәргән,
Мәргәнлек үтмәй кемдәрҙән.
Үкенесе ҡалыр бәндәнең
Үтеп киткән көндәрҙән.
Дошман яуы килгәндә,
Ҡарттар оран биргәндә,
Уҡ-һаҙағын ҡулға алып,
Батырҙар атҡа менгәндә,
Баязит батыр килгән дә,
Һикереп атҡа менгән дә,
Юртып, елеп үткән дә,
Сәмләнеп яуға киткән.

Илдәрҙә күп батырҙар:
Ҡейек аулар батыр бар,
Илен һаҡлар батыр бар.
Баязит батыр ир ине,
Батырҙан батыр Баязиттәй,
Арыҫлан һынлы батыр бар.
Баязит батыр ир ине,
Күкрәгенән ҡан сыҡһа,
Тирем сыға тир ине.
Баязит батыр ир ине,
Яу ҡайтарыр ир ине,
Нуғай мырҙа ғәскәрен
Ҡуй-һарыҡтай тураҡлап,
Ҡан ҡалтыратып, онтаҡлап
Иленә ҡайтыр ир ине.
Баязит батыр ир ине, ау,
Баязит батыр ир ине.



## АҠШАМ БАТЫР

Бер йәшемә килгәндә,
Бүре кеүек елкендем;
Ике йәшкә еткәндә,
Игәүҙән уҡ һайланым;
Өс йәшемә еткәндә,
Осҡан ҡоштай талпындым;
Биш йәшемә еткәндә,
Билем быуып бәйләнем —
Билдәле булдым илемә;
Алты йәшкә еткәндә,
Аҡ балтырым төрөлгән,
Уймаҡтай ауыҙым[1] бөрөлгән,
Көрәшкә төштөм бер үҙем;
Ете йәшкә еткәндә,
Егет булдым етлегеп;
Һигеҙ йәшкә еткәндә,
Һикереп сыҡтым атлығып;
Туғыҙ йәшем тулғанда,
Турат менеп елдем мин;
Ун йәшемә сыҡҡанда,
Уң билемдә һаҙағым,
Һул билемдә ҡылысым,
Ҡаршы барҙым дошманға,
Затым өсөн, ил өсөн.
Атым булды Аҡшам батыр,
Яуға киттем ил өсөн,
Яуҙан илемә даным ҡайтыр,
Елеп менгән атым ҡайтыр,
Дошмандарым боҫоп ятыр,
Атым менең Аҡшам батыр.



## КӨБӘК БАТЫР

Борон заманда беҙҙең илгә ҡалмыҡ яуы сыҡҡан. Көбәк батыр, кәләш әйттереп, туй яһайым, тип ятканда, шул айҡан кәләшен кейәүләй алмай яуға ҡаршы киткән.

Ҡалмыҡ яуын ҡайтарып илгә ҡайтҡас, кәләшен кейәүләргә барған. Кәләшенә ҡауышҡас, Көбәк батырҙың күңеле булып етмәгән. Кәләше, шуның күңелен тултырам тип, ҡобайыр менән һөйләп, хәлен аңлатҡан:

Көбәк — батыр тинеләр,
Көбәк — батыр тинеләр;
Ир арыҫланы тинеләр,
Ир арыҫланы тинеләр;
Тиҙ үк килә тинеләр,
Тиҙ үк килә тинеләр;
Илен-йортон тыныслап,
Илен-йортон тыныслап,
Яуҙан килә тинеләр,
Яуҙан килә тинеләр,
Тинеләр, ау, тинеләр.
Көбәк батыр — бик батыр,
Көбәк батыр — бик батыр.
Үңәре* менән күренгәс,
Үңәре менән күренгәс,
Булат ҡылыс, һайманы,
Булат ҡылыс, һайманы.
Ялтырап күҙгә эленгәс,
Ялтырап күҙгә эленгәс,
Йүгерҙем дә йығылдым,
Йүгерҙем дә йығылдым;
Эйелдем дә бөгөлдөм,
Эйелдем дә бөгөлдөм;
Кейемемде тапманым,
Кейемемде тапманым;
Йотом ҡымыҙ татманым,
Йотом ҡымыҙ татманым.
Имән ағас — ҡаты ағас,
Имән ағас – ҡаты ағас
Инеп китеп...
Шунда өҙөлдө, ау.



## ТҮЛГӘН БАТЫР

Ҡарсаҡ* юртмаҫ ҡалындан
Ҡарғып үтеп барамын;
Төлкө юртмаҫ төләйҙән
Төндә үтеп барамын;
Ябалаҡ осмаҫ яландан
Яңғыҙ үтеп барамын;
Асы күл менән сөсө күл,

Унан да үтеп барамын.
Ай, күлдәр бар, күлдәр бар, —
Ат саптырып еткеһеҙ;
Яғалай бөткән екән тал —
Ырғыһа, ҡуян үткеһеҙ,
Унан да үтеп барамын.
Балҡан тауҙың башынан,
Асылы күлдең ҡашынан,
Унан да үтеп барамын.

Яйыҡ ҡайҙа, яй ҡайҙа,
Йәйелеп ятҡан мал ҡайҙа?
Сүккән төйә күренмәй, —
Дошман яуы алып киткән,
Шуны ла юллап барамын.
Шуны юллап барамын, ау,
Дошмандан үс аламын.



## СТАРШИНА МӘСӘҒҮТ

Старшина Мәсәғүт,
Старшина Мәсәғүт,
Ары ла тороп әйтте, ти,
Бире лә тороп әйтте, ти:
Указ килгән беҙҙәргә,
Указ килгән беҙҙәргә
Атанан тоҙ алырға,
Батшалыҡҡа һалырға[1].
Ошбу иғлан таралһын
Урал буйы халыҡҡа;
Тамъян, бөрйән, ҡыпсаҡҡа,
Ҡүрше ятҡан аппаҡҡа,
Яр юлдашым һупаҡҡа.
Өндәй ҙә өндәйҙер,
Өндәй ҙә өндәйҙер
Был кәүре* кем,
Аҡ ҡалпаҡҡау,
Аҡ ҡалпаҡҡау!
Ҡемһәләй, һәллеүәләй![2]

Айҙын да нуғай ерендә,
Уайҙын да нуғай ерендә,

Тамъяндарҙың илендә,
Данлы ҡыпсаҡ ерендә,
Яй тапҡан бөрйән илендә
Урал тауҙай тау булмаç,
Урал тауҙай тау булмаç;
Ҡалаға ингән бур булмаç,
Хеҙмәт иткән хур булмаç[3]
Ҡазыйлы* илдәй ил булмаç[4].
Ҡасмайыҡ, уландар, ҡасмайыҡ,
Ҡасмайыҡ, уландар, ҡасмайыҡ!
Кемһәләй, һәллеүәләй.





# ҠАРАС МЕНӘН АҠША

Борон Яйыҡ буйында, хәҙерге Науруз ауылы ултырған ерҙә (элекке Тамъян-Ҡатай кантонында) Ҡарас тигән бер мәргән уҡсы булған. Бер ваҡыт бер төркөм ҡаҙаҡтың туғайҙағы йылҡы көтөүен ҡыуып алып китеүен күргәндәр. Быны ишетеү менән Ҡарас, тиҙ генә үҙенең буҙ ҡашҡаһын менә һалып, утыҙлап һыбайлы эйәртеп, ҡаҙаҡтар артынан баҫтыра сапҡан, ти. Ҡыуып еткәс, Ҡарас барымтасыларҙың башлығы алдына сығып туҡтаған да ҡобайыр менән былай тип әйткән, ти:

Балаһы Ҡушкилдененң, Ҡарасымын,
Яу килһә, алға сапҡан барасымын*,
Атҡыстар йыйылышып майҙан тотһа,
Һәр ваҡыт беренсегә талашсымын.
Йөрмәгән ҡырҙан ҡырға атҡан уғым,
Ҡалъяным ике якта әле лә туғын[1];
Һырт биреп, ҡурҡаҡтарса ҡаса бирмә,
Ҡотолмаҫ ҡасҡан менән ни бар тубың.
Ҡарасҡа ҡул күтәргән ниндәй ирһең?
Атаң кем, ырыуың кем, ҡайһы ерһең?
Ҡараһам тал буйыңа — батырҙарса,
Күргәс үк, ялт әйләнеп туҡтай бирҙең.
Атыңды әйт, был донъянан юйырмын мин,
Уғымды ҡыҙыл ҡанға буярмын мин.
Илеңдә аша тыуған батыр булһаң,
Хур итмәй, тәрбиәләп ҡуйырмын мин.
Менгәнем — аҫтымдағы ҡашҡа, тимен,
Ҡан түкмәй, илеңде һин күрер булһаң.
Күк, ала — күп йылҡыны ташла, тимен.
Ҡаҙағым, батыр булһаң, бирсе киҙәк*,
Уғымды мин атырмын һиңә төҙәп;
Теләгән урыныңды һайла, батыр,
Ҡыуғыға[2] — боронғонан әүүәл киҙәк.

Йылҡыларҙы ҡыуып алып китеп барыусы барымтасылар башлығы ла, Ҡараҫҡа яуап итеп, һис ҡурҡыуһыҙ-ниһеҙ, шулай тип әйткән, ти:

Күп йөрәктәр шыулаған
Аҡша тигән атымдан;
Батырлыҡ ман түрәлек
Шәжәрә килгән затымдан.
Ай-һай һалып йырланың,
Килә һалып яҡындан;
Батырмын тип маҡтандың,
Һынашмай тороп, ҡапылдан.
Аҡша батыр тигәндә,
Күп батыры ҡалмыҡтың
Яҙа ине аҡылдан.
Саяндай саға һөйләнең,
Һиҫкәнмәйсә, таҡылдап;
Аҡша һынлы батырҙан
Ҡулдағы малды ҡайтарып
Алһаң, — алған сығырһың
Аҡ яулыҡлы ҡатындан!
Алты аластың эсендә
«Аҡша батыр...» тигәндә,
Аблай хандың батыры
Йығыла ине атынан.
Үҙең бер йәш балаһың —
Уттай геүләп янаһың;
Килә һала айҡаштың,
Байҡамай батыр самаһын.
Киҙәгеңде ал, балам,
Бер киҙәктән юйылһаң[3],
Һерәйеп ҡатып ҡалаһың.
Күгәреп ятҡан күк арҡа, —
Торған ерҙән күрһәтәм
Атышыр ерҙең самаһын.
Ҡан түкмәй, балам, тарта бир
Ҡыҙыулап килгән юлыңдан,
Татымай үлем язаһын.
Батырға кергән күп малды
Һаҙаҡлы йөҙ ҡаҙаҡтан
Яңғыҙың ҡалай алаһың?

Ҡарас быны ишетеү менән, Аҡша самалап күрһәткән арҡаға сабып барып етә һалып, атышыуға яһана башлай. Ат өҫтөндә көйө янын ҡороп, ҡулына һаҙағын алып уйға ҡала. «Тәүҙә мин уның ҡалъянындағы һаҙаҡтарын ҡыра атайым: мәргәнлегемде күреп, бәлки, ҡан түкмәйенсә, малды именлек менән генә ҡалдырып китерҙәр», — тип уйлай. Ҡулындағы һаҙағын ҡалъянына кире һалып, «ҡуҙы яурын» тигән икенсе бер һаҙағын ала. Шунан, атырға уҡта-

лып, «кыҙы яурын» менән короулы янына карап, былай тип әйтемсәген әйтә:

Йылан башлы киң яным, тарткан сакта,
Шытырлап һыныпп китһәң — һиңә хурлык[4].
Кыҙы яурын — корос башак, бәлдегәндә*,
Тайшайып, кырын китһәң — һиңә хурлык.
Туғыҙ толом ак ебәк, туғыҙ үрем,
Сиралып, серкеп китһәң — һиңә хурлык.
Серәнеп тартып та мин алалмаһам,
Билдәле, ул вакытта миңә хурлык.
Кыҙы яурын-корос башак тейгән сакта,
Каклығып, өҙәлмаһаң — һиңә хурлык.
Калъянды өҙгәнсе аталмаһам,
Билдәле, ул вакытта миңә хурлык[5].

Карас шулай ти ҙә, өҙәңгегә баҫыңкырап бәлдәй биреп, янын тартып ебәрә. Акшаның уң яклап аҫылған калъянындағы һаҙактар пара-пара* туҙып, сыра-сыра юлып, ян-якка осоп барып төшәләр. Акша быға ғәжәпһенеп: «Күрҙегеҙме был баланы, атышыуына карағанда, бик яман күренә. Калмыктың Ванишлихай батыры менән осрашканда кыймылдамаған йөрәгем һулк-һулк итеп калды ғуй», — ти. Шунан һуң, үҙенең киҙәге буйынса, Караска атырға йыйына. Акша атыр алдынан яны менән һаҙағына былай ти:

Кыҙы яурын кыу йәйә,
Тарта алмаһам, миңә хурлык;
Тарткан сакта, сатнаһаң;
Ул вакытта һиңә хурлык;
Тоҫкаған ергә тейгеҙмәй,
Яҙа тартһам, миңә хурлык.

Ашыу-ашыу бил икән,
Аша бер һуккан ел икән;
Кашкайып торған убала
Һынаша торған ир икән.
Как эйәрҙең кашы, тип,
Как йөрәктең төҫө, тип,
Үлер ерең ошо, тип,
Тоҫканы батыр һаҙағын.

Акша батыр бәлдәп атып ебәргән. Һаҙак Карастың өҫтөндәге һауытын[6] үтеп каҙалырға өлгөрмәй калған, Карас уны йәһәт кенә тотоп алып, калъянына һалып куйған, ти.

Хәҙер киҙәк Караста. Ул әҙ генә уйланып торғандан һуң, һаҙағының башағын бәке менән монап һындырып ала, сөнки башак һаҙакка һауыттың дүңгәләге аша эскә үтеп инергә камасаулай. Шунан Карас башакһыҙ һаҙағының осон бишкә телә лә Акшаға

тоҫҡап ата. Һаҙаҡ һауыттың биш дүңгәләгенән биш нәҙек уҡ булып үтеп, Аҡшаның күкрәген селтәр һымаҡ итеп үтәләй тишеп сыға. Аҡша батыр, уй-бай тип, ергә йөҙ түбән атынан ҡолап төшә. Аҡшаның юлдаштары Ҡараска ташланырға өлгөрә алмайҙар: шуны ғына көтөп торған ҡыуғынсылар уларға ата башлайҙар.

Аҙаҡ килеп, үҙҙәренең башлыҡтарын һәм бер нисә кешеһен юғалтҡан барымтасылар йылҡы көтөүен ҡалдырып ҡайтып китергә мәжбүр булалар.

Аҡшаны, йығылған урынында ҡәбер ҡаҙып, күмеп ҡуялар. Ҡәбере өҫтөнә таштан ҡурған өйәләр. Батырҙың баш осона билдә итеп бер һаҙаҡ ҡаҙап ҡуйғандан һуң, Ҡарас шулай тигән, ти:

Заманында күп тартыш күргәнһең һин,
Донъянан күп батырҙы һөргәнһең һин;
Башҡорттоң аҡсыстарын тиңгә алмай,
Тарпандан алты аласта йөрөгәнһең һин.
Һауытты йырта атыр ир икәнһең,
Батырҙың ашып тыуған бере икәнһең;
Ил һүтеп, үҙеңә тиң таба алмай,
Сыҙамай йөрәгеңә йөрөгәнһең.
Ҡашҡайып киҙәк бирҙең ҡаршы тороп,
Ҡөрәштең батырҙарса түште киреп;
Һауытты серегән боҙҙай итә яҙҙың,
Ҡитмәне әҙ-әҙ генә өҫтән туҙып.
Бынан һуң һинән батыр күрмәҫ күҙем,
Урынлы, маҡтанһаң да, әйткән һүҙең;
Ут йөрәк арыҫландай Аҡша батыр,
Ҡуяйым тәрбиәләп мин дә үҙем.
Таш менән ҡурған итеп ҡаҙҙым гүрең,
Аталыр исемең менән яткан урын;
Бер һаҙаҡ баш осоңа ҡаҙап ҡуйҙым,
Әйтһендәр: «Батыр үткән беҙҙән борон»[7].



## БИЛАЛ МЕНӘН ДҮСӘН

Борон бер ваҡыт ҡаҙаҡтар, яу һалып, Тунғатар йортондағы башҡорттарҙың 1500 йылҡыһын әйҙәп алып киткәндәр. Шунан һуң башҡорттар үҙҙәре ҡарымтаға барғандар. Бик ныҡ яу булған. Шунан бер башҡорт ҡартының Билал тигән бер улы, Дүсән тигән бер кейәүе[1] ҡаҙаҡтарға әсир төшөп ҡалғандар. Был яуҙа башҡорттар ҡаҙаҡтарҙы Күксәтауға тиклем ҡыуғандар. Айҙарбәк тигән ҡаҙаҡ

байының 1500 баш йылҡыһын алып ҡайтып өләшкәндәр. Йән башына 18 йылҡы тейгән[2]. Шул яуҙа улы менән кейәүе ҡаҙаҡтарҙа әсир ҡалған башҡорт ҡарты ҡобайыр әйткән.

Йүгереп мендем ел тирмәнгә, яным ай,
Ҡуласала туғын юҡ, яным ай!
Ята торғас иҫемә алдым, яным ай,
Билал менән Дүсән юҡ, яным ай!

Мижа ҡыуаҡ һигеҙ талын, яным ай,
Ҡырҡып алдым уҡ-һаҙаҡҡа, яным ай.
Бына тигән егеттәрем, яным ай,
Тотолоп ҡалды ҡаҙаҡта, яным ай.

Абылай хандың ай дөйәһе, яным ай,
Ята торғас көйшәнде, яным ай.
Ята торғас иҫемә алдым, яным ай,
Билал менән Дүсәнде, яным ай!

Алыҫтин ҡарай күренгән, яным ай, —
Йопар тауҙың сауылы, яным ай.
Һағыш менән һарғайған, яным ай,
Бай Тунғатар ауылы, яным ай!

Алыҫтин ҡарай күренгән, яным ай, —
Күксәтауҙың мешәлеге, яным ай.
Күп халайыҡ эстәрендә, яным ай, —
Батыр туған иҫтәлеге, яным ай!

Теҙелеп төшөп һыу эсә, яным ай,
Күксәтауҙың кейеге, яным ай.
Күҙҙәремде һарғайтты, яным ай,
Билал менән Дүсәндең көйөгө, яным ай!

Илле йәшкә еткәндә, яным ай,
Инкелдәтте туғаным, яным ай.
Күкрәк тулған күҙ йәшем, яным ай,
Инде ҡалды ҡыу башым, яным ай!



# ЕРӘНСӘ СӘСӘН

Бер көн ҡаҙаҡ байҙары менән Әбелхәйер хан башҡорт тарханы Аҡмәмбәткә ҡунаҡҡа килгән. Килгәс, Аҡмәмбәткә:

— Һинең атаң менән беҙҙең аталар һәр ваҡыт татыу йәшәгән. Һин был Яйыҡ буйынан, беҙҙең һыулауҙан кит, үҙеңә тыныс булыр, ҡыш тибенлеккә кәрәк тиһәң, Ирәндектә, Әтәстә* малың ҡышлатырһың. Мин бүтән халыҡты нисек өркөтөргә белермен. Улар үҙҙәре лә ҡасыр, — тигән.

Аҡмәмбәт, малын ҡурсып, Уралға китмәк булған. Айырым байҙарҙы, үҙе менән алып китеүҙе аңлатыу өсөн, «ҡунаҡ күрергә» Әбелхәйер хандар янына саҡырған. Ерәнсә сәсән был хәлде белгән дә саҡырмаһалар ҙа килгән. Шунда байҙар менән хан: «Халыҡты ыҙғытаһың», — тип, Ерәнсәгә үҙ шелтәләрен әйтә башлағандар икән, Ерәнсә Әбелхәйер ханға былай тигән:

Мин әйтмәйем, күп әйтә, әү,
Күп — сүп түгел, шул әйтә, әү,
Әй, күп — сүп түгел, шул әйтә.

Күп эсендә кем сүп түгел, әү,
Күп һүҙен һәм[1] шул әйтә.
Күп тигәнем халыҡ булыр,
Тоткан юлы хаҡ булыр,
Әй, һүҙе һөттән аҡ булыр.
Яҡшыға ышыҡтай тау булыр, әү,
Яуызға ҡаршы яу булыр.

Күп эсендә баламын, әү,
Һеҙҙең күҙгә ҡарамын[2], әү,
Әй, һеҙҙең күҙгә ҡарамын.
Күп һүҙен әйтер баламын, әү,
Үлгәнсе күптә ҡаламын.

Хоҙайым һеҙҙе яратҡан,
Күптеме һеҙгә ҡаратҡан,
Әй, күптеме һеҙгә ҡаратҡан?
Күптең дә барыр ере гүр,
Аҙҙың да барыр ере шул.

Хан булып та белмәһәң, әү,
Шәжәрәү асып күрмәһәң, әү,
Әй, күреп тә аңлар булмаһаң,
Һөйләйем, ауырға алмаһаң, әү,
Илемә ҡәһәр һалмаһаң.

Хандар ҙа тыуған, хан булған, ти,
Берәү ҙә түгел, күп булған, ти,
Әй, берәү ҙә түгел, күп булған.

Яманлығын әйтмәйем, әү,
Яҡшыһы булырын көтмәйем.

Әбелхәйер тигән хан булған,
Һин түгел, борон хан булған[3],
Әй, бүлгеләнмәҫ ҙур булған.
Тоҡомонан Ибраҡ бар булған,
Себергә килеп хан булған.
Атаһы ерен тарлатҡан, ти,
Тота алмайса тарҡатҡан, ти,
Әй, тота алмай тарҡатҡан.
Себерҙә үҙен һайлатҡан, ти,
Ханлығын киңәйтмәй тарайтҡан.
Күсеп тә килгән күсендә[4], ти,
Көсөмө[5] тыуған күсендә, ти,
Әй, ҡар ҡаплаған ҡыуышында.
Көслөгә ҡаршы көрәшкәндә, ти,
Көсөм дә ҡалған күсемгә, ти.

Себерҙән туҙып ҡасҡанда, ти,
Арбаһы һаҙға батҡанда, ти,
Әй, аптырап һаҙҙа ятҡанда,
Муйынына боғалаҡ таҡҡан да, ти,
Йәне сыҡҡан, ти, арҡанда.

Аблай тигән дә ул ине, ти,
Төйә лә көткән ҡол ине, ти,
Әй, ҡаты ла тотҡан ҡул ине.
Мин, мин, тигән, мин, тигән, ти,
Аҡ шоңҡарҙай ир, тигән, ти,
Әй, донъяла мин бер, тигән.
Дошмандан өрөкмәй кил, тигән,
Йәнегеҙ алам, бир, тигән, ти.

Бармы берәйһе күренгән, әү,
Ҡамҡа тунға төрөнгән, әү,
Әй, ҡамҡа тунға төрөнгән?
Бары ла гүргә һөрөлгән, әү,
Кәфенгә сырмап төрөлгән!

Күптән сүптәй алынған, әү,
Башына ташы ҡағылған, әү,
Әй, битенә ҡара яғылған!
Уларҙан һуң да табылған, әү,
Ханға шулай яҙылған!
Мин әйтмәйем быны — күп әйтә,
Миңә түгел, әү, һиңә әйтә,
Әй, миңә түгел, һиңә әйтә:

Ханмы беҙҙән, ти, мал көтә,
Ханмы беҙҙән, ти, ҡан көтә?

Ҡайғыһыҙ йоҡо йоҡлаған, ти,
Ҡарыуһыҙ мал туплаған, ти,
Әй, ҡарыуһыҙ мал туплаған
Ҡүп-күҫәген һутлаған, ти,
Табынына ҡарай ыҡлаған.

Аҡмәмбәт тә аш һалған, ти,
Аш һалмаған, баш һалған, ти,
Әй, халыҡ та уға таш яҙған.
Хан да кире сыға алмаҫ, әү,
Ҡисеүенә халыҡ таш һалған.





*Атанан тыуған ир бала,*
*Иле лә һөймәй, ир булмаç:*
*Иле лә һөймәç ир-батыр*
*Илһеҙ ҙә йөрөп дан алмаç;*
*Ил тибәргән дан батыр*
*Донъяла мәңге ҡала алмаç.*

(«Иҙеүкәй менән Мораҙым»)



Теге (Ҡарт Ҡужаҡ) яҡынлап килгәс, Тарғын, ҡыҙҙы ҡалдырып, далаға ҡайыла ла уҡ атымы ерҙән ҡарап тора. Ҡарт Ҡужаҡ ҡыҙға килеп етә.

(«Тарғын батыр»)



*Йән аямай яуға барған батыр егет,*
*Минән һиңә шулдыр теләк:*
*Алыштарҙа еңеп сығып, аман ҡайтһаң,*
*Һинең менән ҡауышырға минең теләк.*

(«Ҡыпсаҡ егете менән башҡорт ҡыҙы»)



*Яуға киттем ил өсөн,*
*Яуҙан илемә даным ҡайтыр,*
*Елеп менгән атым ҡайтыр.*
*Дошмандарым боҫоп ятыр,*
*Атым минең Аҡшам батыр.*

(«Аҡшам батыр»)



*Шунан Ҡарас башаҡһыҙ һаҙағының осон бишкә телә лә Аҡшаға тоҫҡап ата. Һаҙаҡ... Аҡшаның күкрәген селтәр һымаҡ итеп үтәләй тишеп сыға... Аҡшаны, йығылған урынында ҡәбер ҡаҙып, күмеп ҡуялар.*

(«Ҡарас менән Аҡша»)



*Ҡараһаҡал атым бар,*
*Ҡан илаған халҡым бар...*
*Дошмандарҙы ҡыуырға*
*Илемә биргән антым бар.*

(«Ҡараһаҡал»)



*Салауат батыр ир ине,*
*Менгән аты кир ине.*
*Дошман менән алышҡанда*
*Ил эсендә бер ине.*

(«Салауат батыр»)



*Наполеонды еңеп, һуғыш бөткәс, уландары ҡайтҡанда, Байыҡ йөҙ ҙә ике йәштә булған, ҡурайҙа «Байыҡ» көйөн уйнап, батырҙарҙы ҡаршы алған.*

(«Байыҡ Айҙар сәсән»)



# ҠАРАҺАҠАЛ

I

Ай Уралым, Уралым!
Бөтә данды үҙеңә
Йыйып үҫкән Уралым!
Дүрт аяҡлы януарға
Төйәк булған Уралым!
Яусыл булған атама
Ата булған Уралым!
Йүнсел булған әсәмә
Ватан булған Уралым!
Икеһен бергә йоп ҡылып,
Түл йәйҙергән Уралым!
Урмандарың үҫтереп,
Ҡош үрсеткән Уралым!
Һылыу ҡыҙҙай биҙәнеп,
Дошман күҙен ҡыҙҙырып,
Яу астырған Уралым!
Атамды яу саптырып,
Әсәмде тол ҡалдырып,
Ике күҙен йәшләтеп,
Ҡәйнә булған Уралым!
Хәҙер һиңә ни тием?
Битең илгә ят иттең,
Урман, туғай, ҡырыңды
Баяр тигән дошмандың
Заводына яй иттең[1].
Ирҙәреңдең үлгәне —
Буйың дошман алғаны,
Аҡҡа тиреҫ төшкәнде[2]
Уҡый алмай торғаны.
Бол-бол өйрәк, бол өйрәк

Болдороп осор, күл кипкәс;
Батыр-батыр ирҙәрең
Мөлдөрәп ҡалыр, һин киткәс.
Күл яғалай күк тирәк,
Күк тирәктең һыны юҡ —
Япраҡтарын ҡойған һуң;
Күгәреп ятҡан Уралдың
Буйында хәҙер йәме юҡ —
Баяр завод ҡорған һуң.
[Аҡ батша ул тигәнебеҙ —]
Шундай яман дошман ул,
Йәйәү килер йортоңа,
Яғалы сәкмән кейҙерер,
Бал, май яғыр морононда.
Ҡырҡмай ағыҙыр ҡаныңды,
Үлтермәй алыр йәнеңде,
Ҡағыҙға яҙыр малыңды,
Иҫәпкә алыр барыңды,
Илеңде алыр ҡулыңдан,
Ғәскәр алыр улыңдан;
Тик һеҙҙе* түргә сығарып,
Башыңа ауыр эш төшһә,
Һис ни килмәҫ ҡулыңдан[3].
Сәйет, Ҡөсөм батырҙар
Ҡөндәй белде был эште,
Ҡыҙыл ҡанға буялып,
Йән аямай яу асты.

II

Ҡөсөм батыр еңелгәс,
Юлдаштары тарҡалғас,
Юрматы ара ырыуҙа,
Торлаҡ тапмай илендә,
Һәләүектең буйында,
Шыр урмандар эсенә,
Ҡая таштар ҡуйынына,
Нияз батыр, бисәһе
Бергә ҡасып ҡотолған.

Яйыҡ, Иҙел һыулаған ул,
Бөтә Уралды буйлаған.
Бармаған ер ҡуймаған
Яу ҡайтарып өҙлөккән,
Күп таланып бирлеккән*,
Дошман яуы утынан
Йәйләүҙәре көл булған,
Йорт-ерҙәре ерәккән

Илен аралап йөрөп,
Ҡан йәш менән илаған,
Итәк тулы етемле
Тол ҡатындарҙы күреп,
Ҡан түкөрөп һөйләп тә,
Муйырылған* нөгәрен*
Ҡабат туплай алмаған.
Нияз өмөт өҙмәгән,
Тархандарға баш эйеп,
Ҡул ҡаушырып тормаған —
Ҡөйөҫ-көйөҫ* яу асҡан;
Дошманына сер бирмәй,
Ҡул-аяғын бәйләтмәй,
Тау-урманда йәшәгән.
Бисәһе менән икәүләп
Күп тормаған ҡаяла,
Өсөнсөгә иптәшкә
Улы тыуған донъяға.
Бала тыуған ирәбе,
Ҡышҡы һыуыҡ саҡта ла
Ул һис яфа күрмәгән.
Йәйен, ҡышын ҡаяла,
Ҡышҡы ыҙғыр һыуыҡта,
Яҙғы, көҙгө ямғырҙа
Бирешмәйсә бер нигә,
Ай, көн һанап был бала
Уйнап, көлөп йыуанған.

Миңле булған эйәге,
Тәлгәш булған һөйәге,
Батыр булған йөрәге.
Икәү-ара һөйләшеп,
Ата менән әсәһе,
Миңе боҙолор, тип уны
Миңлеғол тип атаған.

Атаһы юҡта әсәгә
Ҡыңғыр-ҡыңғыр иш[4] булған,
Күңел асҡан, йыуатҡан.
Илағанда балаһы,
Ҡулына алып һамаҡлап:
«Егет кенә булыр ҙа,
Алтын ғына булыр ҙа,
Көйһәң, көйөк асыр ул,
Һөйһәң, күңел асыр ул.
Собханалла*, машалла*,
Яман күҙҙән һаҡлаһын,
Яман артаҡтан* ҡурҡмай,
Батыр булып йәшәһен.

Сәйет, Ҡөсөмгә оҡшаһын,
Йөрәктәре ҡуш булһын,
Аҫау менеп, һаҙаҡ алып,
Илде яуҙан һаҡлаһын», —
Тип бәүеткән әсәһе.

Улын күреп һоҡланып,
Ҡулына алып һикертеп:
«Егет булып үҫәм дә
Атҡа менәм, тип тора.
Һаҙаҡ алып, яу сабып,
Дошман ҡырам, тип тора.
Егет кенә булыр ҙа,
Батыр ғына булыр ҙа,
Ыласындай йылғыр булып,
Дошман яуын ҡырыр ҙа.
Сәйет батыр ҡаны бар,
Ҡөсөм батыр ҡоно бар,
Яуға сапмай ҡалмаҫҡа
Олатайҙар йыры бар.
Һыу-һүл юлын быуа алмаҫ,
Маяҡһыҙ ҙа юл яҙмаҫ, —
Ҡуңыр буға юлы[5] бар.
Илгә сыҡһа аҙашмаҫ,
Мең эсендә яңылышмаҫ,
Ҡараһаҡал тип торған
Эйәгендә миңе бар», —
Тип яратҡан атаһы.

III

Аталы-уллы икәүһе
Яңғыҙ йәшәп ятмаған,
Урал буйы илкәйен
Нөгәр йыйып тапаған.
Ун биш йәшкә еткәндә,
Миңлеғол да, ир һымаҡ,
Һаҙаҡ алып ҡулына,
Айҙа* тағып биленә,
Атҡа менгән батырҙай,
Ил батыры Ҡөсөмдәй,
Төшкән улар юлына.
Ҡөйөҫ-көйөҫ яу асҡан
Ил һатыусы түрәгә.
Себер юлы Шиғанға,
Ҡыпсаҡ иле Юлдашҡа,
Тамъян-Ҡатай Таймаҫҡа

Барып уҙғас, Миңлеғол
Ялан яҡҡа юл тотҡан.

Ашҡаҙарҙың буйында,
Еләк бешкән сағында,
Туғай, типһән, яланда
Ҡыҙҙар уйыны осратҡан.
Баныу тигән бер һылыу
Йырлап еләк биргән һуң,
Миңлеғол да һылыуҙы
Бер күреүҙә оҡшатҡан.

Ике йәштең йөрәге,
Икәү-ара теләге
Ата-әсәгә сиселгән.
Ҡыҙ атаһы Мәүлетбай,
Бик хуп күреп был эште,
Ҡыҙ ҡолағын тешләткән[6].

Миңлеғолдоң килгәнен
Һиҙеп ҡала түрәләр,
Ҡабат килеүен аңдып,
Һаҡсыларын ҡуялар.

Был серҙе халыҡ һиҙгән һун,
Минлеғолға еткергән.
Миңлеғол да һаҡ булып,
Күҙгә салынып йөрөмәгән.

Тархандар тик ятмаған,
Көс һораған батшанан:
«Миңлеғол, Нияз, Алдар
Тағы нөгәр йыялар,
Заводтарҙы баҫалар,
Көйөҫ-көйөҫ ҡуҙғалып,
Беҙгә яуҙар асалар», —
Тип оран һалып, түрәләр
Ат саптырған Өфөгә[7].

Ғәскәр килгән Өфөнән,
Урман тулған яу менән.
Тархандар ҙа ҡушылып,
Миңлеғолдо, Ниязды
Тоторға тип ҡанлашып,
Урал буйын, шырлығын,
Ҡая, тау-таш эстәрен
Эҙләгәндәр тет итеп.

Миңлеғолдо, Ниязды
Халҡы яуҙан ҡурсыған:
Ҡатын-ҡыҙса кейендереп,
Ҡосағында һаҡлаған.

Миңлеғол тик ятмаған,
Иҙел буйлап күтәрелеп,
Бөрйәндәрҙең батыры —
Яҡшығол батырға барған.
Унда йыйған ҙур йыйын,
Һәр ергә ат саптырып,
Батырҙарҙы саҡыртҡан
Әйтер өсөн үҙ уйын.
Йыйылғандар батырҙар,
Ҡатындарса кейенеп,
Йыйын төҫөн йәшереп,
Тау уйыны төҫ биреп,
Ҡатын-ҡыҙҙар ҙа килеп,
Йырлап, уйнап йөргәндәр;
Йыйында һүҙ беркеткәс,
Әйтер һүҙҙәрен әйтеп,
Уй-серҙәрен аңлашҡас,
Миңлеғол да хушлашып,
Ары ҡарай юл алған.

Иҙел, Нөгөштө ташлап,
Яйыҡ аша сыҡҡан ул,
Уңлы-һуллы тағы ла,
Илекте* лә кискән ул,
Ҡабды* буйы ҡаҙаҡта
Бер йыл ғүмер иткән ул.
Мал ҡараға баҫҡас та,
Тағы алға киткән ул.
Табанталды* тирәләп,
Тағы ғүмер иткән ул[8].

Ил аралап йөрөгән,
Күп батырҙарҙы күргән,
Сәйет тигән батырҙың
Ҡәбере барлығын белгән,
Уны зыярат ҡылған[9].
Бында оҙаҡ тормаған,
Уйыл* буйлап үрләгән.
Эмбе* буйы аймаҡта
Бер нисә ҡыш ҡышлаған.
Арал диңгеҙ яғалай,
Тоҡораҡ батырҙа булған,
Булатҡа ла ҡатышҡан,
Аму-Даръя буйында

Ноғос батырҙа булған.
Былар менән һөйләшкән,
Алға һалып һүҙ һөйләп,
Бөтә серҙе аңлашҡан.

Был батырҙар ҙа илендә
Хандан зарлана икән,
Нисек итеп яу башларға
Аптырашталар икән.
Миңлеғол да быларға
Үҙ серен әйткән икән.
Өсәү-ара уйлашып,
Ҡалмыҡ батыр Сунаға,
Ҡалмыҡ иле ханына
Бармаҡ булып һөйләшкән.
Суна батыр бай икән,
Ҡартан тигән ҡустыһы
Ҡалмыҡтарҙың ханы икән.

Былар өсәү һөйләшеп,
Миңлеғолдоң кемлеген
Ханға ҡапыл әйтмәҫкә
Һүҙ беркетеп ҡуйғандар.

Йыйындарҙа булғандар,
Ат өҫтөндә уйнағанда
Миңлеғолдан алдыны
Һис бер батыр булмаған.
Ҡалмыҡ ханы шунда уҡ
Миңлеғолдо үҙ иткән,
Һарайында ҡалырға
Уны бик тә димләгән.
Ике батыр, Миңлеғол,
Өсәү-ара һөйләшеп,
Хандың тәкдиме менән
Уның бында ҡалыуын
Хуплап ҡулай тапҡандар.

Ҡартан үҙе бай икән, —
Тик улы бер ҙә юҡ икән.
Шуғамылыр Миңлеғолдо
Бик яратып йөрөткән.

Ҡартан хандың булған, ти,
Матый атлы бер ҡыҙы.
Ул Миңлеғолдо яратҡан,
Миңен күреп, һоҡланып,
Йәш-елкенсәк араһында
«Ҡараһаҡал» тип атаған.

Ҡараһаҡал булып Миңлеғол
Ҡышын-йәйен был илдә
Китмәйенсә һис ҡайҙа,
Хан улындай йәшәгән.
Хан балалары менән ул
Ҡышын бергә уҡыған.
Йәйен сыҡһа ат менеп,
Ил аралап йөрөгән.
Үҙе батыр, үҙ зирәк,
Белем алған һәр яҡтан,
Ҡараһаҡал тигән даны
Ишетелгән йыраҡтан.
Аму-Даръяһы буйлап,
Диңгеҙгә таба аҡҡан
Үргәнестән Солтан хан да,
Быныӊ данын ишетеп,
Ҡартан менән икәүһен
Ҡунаҡ итеп саҡыртҡан.
Китергә тип, Ҡараһаҡал
Менәр атын тотҡанда,
Сөм-ҡара күҙ, оҙон сәс,
Ҡырлас танау, томбойоҡ түш,
Урта буйлы, нәҙекәй бил —
Матый ҡарап торған да,
Атҡа атланғас егете,
Көләс йөҙөн балҡытып,
Ҡулына ҡамсы һуҙғанда,
«Тиҙ ҡайтырһыӊ бит, батыр?» —
Тип ҡыҙыныӊ әйткәнен
Әсәһе ишетеп ҡалған да,
Бындай хәлдәрҙе элек тә
Күргеләгән булғанға,
Ҡыҙы өсөн һиҫкәнеүен
Ҡартан ханға әйткән, ти.
Тегенеһе тыңлаған,
Атҡа атланыр сағында
Бисәһе мән икәүләп,
Ҡыҙын бирмәү юлдарын,
Һыуындырыу сараһын
Тирә-яҡлап уйлашҡан.

Миңлеғол ман Ҡартан хан
Юл тотҡандар алыҫҡа,
Үргәнестә йәшәгән
Солтан ханға ҡунаҡҡа.
Былар килеп еткәндәр,
Хан һарайы алдында
Бик күп халыҡ күргәндәр.
Хандыӊ булған өс улы,

Икеhе — хан, ти, ҡалмыҡта,
Үҙ янында ҡалғаны —
Ҡинйә улы Солтандың —
Ҡуптән түгел үлгән икән.
Шуның ҡырҡын уҡырға
Бөтә халыҡ килгән икән.
Мал hуйылған аш-hыуға,
Ярыштарҙа алға сыҡҡан
Йүгерек атҡа, батырға
Бүләккә тип бәйге ҡуйылған[10].

Ошо оло бәйгелә
Миңлеғол да ҡатнашҡан;
Ат өҫтөндә уйнағанда,
Билдән алып көрәшкәндә,
Унан өҫтөн табылған
Һис бер батыр булмаған.
Майҙан бөткәс, хуш иткәс,
Миңлеғолдоң был даны
Бөтә илгә таралған.

Борон хандар заманында
Хандың ханға барыуы,
Бик күп малға алмашып,
Беренән батыр алыуы,
Үҙ илендә ул батырҙы
Ҡорбаш итеп ҡуйыуы
Ғөрөф-ғәҙәт hаналған.
Күп хандар ана шулай
Батыр йыйып дан алған;
Ғәскәр туплап, илдәр баҫып,
Хисапhыҙ байлыҡ йыйған.
Солтан улы Ишми ҙә,
Шул йоланы хуп күреп,
Миңлеғолдо нисек тә
Үҙ ҡулына алырға
Башын ватҡан, уйланған.
Күпме ваҡыт үткән hуң,
Ҡартан ханға килгән ул,
Миңлеғолдо күргән ул.
Тоҫҡап килгән мәрәйен[11]
Миңлеғолға әйткән ул.

Хандар йолаhы менән
Берәү төбәп hораhа,
Кире ҡағыу булмаған, —
Батыр өсөн мал ғына
Теләгәнсә hораған.

Ишми хан да Ҡартандың
Һорағанын ҡаҡмаған.

[Ишми, Ҡартан, Миңлеғол]
Өсәү-ара һүҙ асып,
Эште уртаға һалып,
Кәңәш-төңәш ҡорғанда,
Үргәнестән Солтан хан да
Килеп ингән араға,
Һүҙен әйткән Миңлеғол,
Серен тамам асмайса:

«Мин — Уралдың балаһы,
Һеҙгә әйтер һүҙем бар;
Минең һүҙҙе ҡаҡһағыҙ,
Бүтән төрлө уйым бар.
Мин тыуғанмын яу менән,
Ҡойонғанмын ҡан менән,
Ҡан күреп мин күҙ астым,
Ил талаусы залимдарға,
Йәш булһам да, яу астым.
Күп яу күргән илемдең
Батырҙары күп үлгәс,
Ҡара күмергә ҡалып,
Йорто-ере күп янғас,
Һатлыҡ тархандар аша
Мин дә яңғыҙлатылғас,
Ваҡытлыса йортом ташлап,
Килеп сыҡтым һеҙҙең илгә.
Ун дүрт йыллыҡ ғүмеремде
Мин үткәрҙем был илдә[12].
Күрҙем байын, ярлыһын,
Ҡан илаған, көлгәнен, —
Һанап сыҡтым барыһын.
Һыҡтаған мең йөрәккә —
Ил биләгән ханзада.
Ҡол биләгән бер батша,
Берәү килә иҫәптә:
Сыңғыҙ булды атағыҙ,
Муйырылыу күрмәне,
Дүрт-биш быуат эсендә
Син* сигенән — Алманға*,
Алтайҙан Уралтауға
Яуын асып ҡул һуҙҙы;
Сыңғыҙ хандың улдары —
Ете яты, ейәне —
Барыһы ла хан булды,
Күңеле нимә көҫәһә,
Бар теләге — үҙенсә,

Ҡан илаған күҙ йәшен
Бер балаһы күрмәне.
Уралдан аҡҡан һыуҙарҙың
Бөтә буйын буйламай
Сыңғыҙ тоҡомо ҡалманы.
Урыҫ, сыуаш тимәне,
Ҡыра һуҡты барыһын.
Етем ҡылыу баланы,
Тол ҡалдырыу бисәне,
Иле менән ҡол итеү
Булды улар йолаһы.
Ай, ул хандарҙан, хандарҙан
Күҙ йәштәре күп аҡты!
Минең тыуған Уралымда
Ниндәй ирҙәр булманы, —
Тик уларҙың береһе лә,
Хандар юлына баҫып,
Ҡан ҡойҙороп йөрөмәне.
Минең тыуған Уралым
Хан, тархандан тапалды,
Халҡым имен торманы.
Инде шуны белегеҙ:
Сыңғыҙ балаларынан
Азат булған батшалыҡ —
Мәскәү илен биләгән,
Баяр, тархан туплаған
Батша талай илемде:
Тартып ала еремде,
Ауырлата көндәрен,
Һуя батыр ирҙәрен.

[Ай, Солтан хан, Солтан хан,]
Зөнгөр[13] ханы Ишмигә
Ата булһаң, һүҙең әйт,
Ҡалмыҡ ханы Ҡартанға
Тамыр булһаң, һүҙең әйт.
Беренә ата булһаң һин,
Беренә тамыр булһаң һин,
Кәңәш итеп һүҙең әйт:
Мине батыр ҡылһындар,
Ҡоралды көс бирһендәр;
Мин ҡайтайым Уралға,
Яу асайым дошманға!»

Миңлеғол һүҙен бөткәс,
Өс хан бергә уйлашып,
Үҙ-араһы һөйләшеп,
Миңлеғолға көс биргән.

IV

Миңлеғол тоткан юлын
Урал буйға ҡарата,
Ҡаҙаҡ ханы ерендә
Күп яһаған ҡуналҡа.
Миңлеғол үҙен сер тоткан,
Кем икәнен әйтмәгән,
Ҡараһаҡал батыр, тип
Барған ерҙә дан алған.
Ҡасҡы башҡорттоң барын
Ҡаҙаҡ илендә эҙләп,
Үҙ ҡулына туплаған.
Ҡараһаҡал белемле,
Үҙе сәсән, батыр ир,
Тигән данлы хәбәре
Бөтә илгә таралған.

Ҡаҙаҡ ханы Әбелхәйер
Быны ишетеп шомланған,
Ҡараһаҡалдың кемлеген,
Белер өсөн теләген
Үҙ янына саҡырған.
Ҡараһаҡал шул саҡта
Ханға килеп ҡунаҡҡа,
Үҙен алып аулаҡҡа,
Тәүҙә хандан һорашҡан
Ни хәл барын был яҡта.
Тел төбөнән һиҙгән ул
Хандың тоткан ырайын,
Башҡорт илен үҙенә
Ҡаратырға уйлауын[14].

Серен белеп шул ерҙә
Былай тигән ул ханға:
«Зөңгәр хандың кесе улы
Солтангәрәй булам мин[15].
Атам үлгәс, ағайым
Тәхетен алды үҙенә;
Ғәскәр йыйып, яу асып,
Килмәк булды илеңә.
Мин күнмәнем был эшкә,
Эштәр китте талашҡа;
Үҙемә ғәскәр эйәртеп,
Сығып киттем был яҡҡа.
Уйымда юҡ хан булыу,
Йә булмаһа бер хандың
Яу менән илен алыу.
Был илгә аяҡ баҫҡас,

Тирә-яҡты һорашҡас:
«Башҡорт иле — Урал тау —
Батырҙары ил һаҡлап,
Күп йыл буйы яу күргән,
Баяр, тархан, түрәнән
Иле-һыуы таланып,
Ҡанлы йәшкә мансылған,
Ир-егеттәр һуйылып,
Ҡатын-ҡыҙы тол ҡалған,
Морон төртөр берәүҙе
Тирәһендә тапмаған,
Яҡлаусыһы булмаған
Етем-еҫер күбәйгән,
Ҡанға батҡан ил ул», — тип
Һөйләүсенән ишеткәс,
Аҙаҡ тамсы ҡанымды,
Күбәләктәй йәнемде,
Ҡараһаҡал данымды
Ярҙам итеп уларға
Бирмәк булдым Уралға.

Инде һин дә шуны бел:
Урал — һинең буҫағаң,
Буҫағаңды яу баҫҡан;
Мәскәү иле батшаһы
Буҫағаңа ҡул һалған;
Ерен алып Уралдың,
Ҡазаматтар ҡорҙорған.
Уралдағы ҡазамат
Хан, вәзиргә өй булыр;
Илендәге бар халҡың
Ҡуй көтөргә ҡол булыр».

Был һүҙҙәрҙе ишеткәс,
Хан тәрән уйға ҡалған,
Вәзирҙәрен йыйнаған;
Ғәскәр йыйып иленән,
Ҡараһаҡалға эйәр, тип,
Бер вәзирен димләгән[16].

V

Ҡараһаҡал ғәскәрҙе
Алып киткән Уралға;
Үҙенең ул кемлеген
Һис әйтмәгән берәүгә.
Яйыҡ аша сыҡҡан, ти,
Эйек* аша ауышып,

Яман тауға еткән, ти.
Ырғыҙлының* буйында,
Түкән батыр йәйләүен
Эҙләп килеп тапҡан, ти.
Түкән менән күрешеп,
Башҡаларҙан сер һаҡлап,
Урмандағы ҡаскының
Барын шунда туплаған.
Барыһына эш ҡушып,
Үҙе Иҙел буйынан
Юғарыға ыҡлаған.

Ырғыҙ бите — ҡая, урман,
Көсөм яуы сағында
Ҡасып йөрөгән батырҙың
Күбе шунда йәшәгән.
Ҡараһаҡал йәш саҡта,
Күп тапҡырҙар яу асып,
Көсөн шунда нығытҡан.
Ҡылысы һынған батырҙар,
Ире үлгән ҡатындар
Йәнен шунда һаҡлаған.
Тәфкиләүҙең яуында,
Уралда ут сыҡҡанда,
Яман тауҙың буйына
Бөтә йәнлек ыҡлаған;
Аҡай батыр тотолғас,
Уның яуы баҫылғас,
Антон тигән иптәше
Шунда килеп ҡышлаған.
Тархан, бейе — барыһы
Уны тентеп эҙләгән, —
Иҙел буйы ҡаянан
Эҙләһә лә тапмаған.
Күп батырҙар юғалғас,
Илде баҫып ҡан менән,
Баяр, тархан ҡулға алғас,
Антон күптән эс тартҡан:
Көндөҙ илгә сыҡмайса,
Мәмерйәлә[17] тик ятҡан.

Ҡараһаҡал ил гиҙгән,
Ҡаскыларҙан һорашып,
Антон янына килгән,
Ҡараһаҡалды күргәс,
Антон яу асмаҡ булған.
Ҡараһаҡал Антондың
Кем икәнлеген белгәс,
Уны дошман күрмәгәс,

Уны ҡурҡытмаҫ өсөн,
Бар ҡоралын ташлаған.
Антон эште аңлаған,
Ул да ҡаршы атмаған.

Ҡараһаҡал килгәндә,
Антон ҡасҡы бисәһе,
Еләк йыйған ерендә
Тархандарға осрап,
Үлтерелгән саҡ булған.
Ҡараһаҡал ҡыҙғанған,
Беләктәрен һыҙғанған,
Көрәк алып ҡулына,
Бергә ҡәбер ҡаҙышҡан.
Үҙ йолаһы буйынса
Антон күмгән бисәһен.
Бейек ҡая башында
Икәү aулаҡ ултырып,
Һырҡыраған йөрәктән
Антон барын һөйләгән:
— Аҡайҙар бит дан алды,
Ил таныны батыр тип.
Ил ойошто бер булып,
Был яу азат итер тип,
Батша яуы башланғас,
Ил дә йәнен аямай
Яу өҫтөнә ташланғас,
Батша яуын ҡыйратып
Сигендерә башлағас,
Батша фарман таратып,
Күп халыҡты алданы:
«Яу баҫыуҙа ҡатышҡан
Мишәр, типтәр, татарҙың
Барыһына түләүһеҙ
Боласылар еренән,
Ҡаза күрһә, малынан
Буш бирәм», — тип алданы[18].
Ҡазан татары менән
Башҡорттарҙың үҙ-ара
Ҡоҙа булыуын тыйып,
Фарман килде тағы ла[19].
Бына ошо фармандар
Таркау һалды араға.
Ышанғандың барыһы
Шундуҡ сапты ҡалаға.
Антон барын һөйләгән.
Ҡараһаҡал, Антондан
Бөтә эште аңлағас,
Ҡәләм-ҡағыҙын алып,

Ете ырыуҙан атаҡлы
Батырҙарҙы саҡыртып,
Ҡыҙҙар тауының битен
Төйәклеккә күрһәтеп,
Ҡаяла ултырып хат яҙған.

VI

Хәбәр алғас батырҙар,
Ҡасып-боҫоп булһа ла,
Бере ҡалмай килгәндәр;
Танытмаҫҡа үҙҙәрен
Бисә кейеме кейгәндәр.
Һаҡлар өсөн йыйынды,
Ҡыҙ-ҡырҡын да уйнарға
Бергә йыйылып килгәндәр.
Күҙҙәренә ҡан һауған
Батырҙарҙың йөҙөнә,
Ирҙәренән тол ҡалған
Ҡатындарҙың күҙенә
Ҡараһаҡал күҙ һалған.
Етемлектә, хурлыҡта
Йөрәге һырҡырап, моң ташҡан
Ҡыҙ-ҡырҡындың йырынан
Ҡараһаҡал батыр ҙа,
Илен күргәс хисләнеп,
Бынау һүҙен әйткән, ти:

«Ай Уралтау, Уралтау,
Урал тигән данлы тау,
Беҙгә төйәк булған тау.
Уралын биргән батырҙар
Уралға ул булырмы?

Ай Уралтау, Уралтау,
Урал тигән бейек тау,
Беҙгә әсә булған тау.
Битен монар баҫканда,
Һөтө булған Иҙелен
Улын һуйған дошманы
Йәйерәп эсеп ятҡанда,
Бөҙрә сәстәй урманын
Дошман ҡырҡып ятҡанда,
Еләҫ таңын йылытып,
Сығып килгән ҡояшта
Дошман йылынып ятҡанда,
Һылыу ҡыҙҙай түшенә
Дошман завод һалғанда,

Түҙеп торһа батырҙар,
Яуға сыҡмай тик ҡалһа,
Уға улан булырмы?

Ай Уралтау, Уралтау,
Урал тигән данлы тау —
Тыуып үҫкән илебеҙ.
Ил улының күкрәге
Һөттән дә аҡ булыр ул;
Йылғыр аҡкан Иҙелдән,
Тиңәштерһәң, пактыр ул.
Ил дошманын күргәндә,
Асыу тулыр күңеленә,
Ҡаршы яуға сыҡҡанда,
Ҡурҡыу алмаҫ йөрәген,
Ҡоростан да ныҡ булыр.

Ай Уралтау, Уралтау,
Урал тигән данлы тау,
Илгә төйәк булған тау,
Күп яуҙарҙа ҡан менән
Битен йыуған Уралтау,
Күп батырҙар буйында
Ат уйнатҡан Уралтау.
Йырсыһын да үҫтергән,
Батырын да үҫтергән,
Батырға йәр булырҙай
Ҡыҙҙарын да үҫтергән,
Ҡурайын да уйнатҡан,
Ҡыҙҙарынан йырлатҡан,
Әсәләрҙән ҡарғатҡан,
Күҙ йәшенән етемдең
Мансып ҡарғыш яҙҙырған
Бик күптәнге Уралтау, —
Баяр заводын һалһа,
Тархан йәйләүен ҡорһа,
Бей бисәһе уйнаһа,
Беҙгә төйәк булмаҫ ул,
Күгәреп ятҡан киң Урал
Малыңа үреш булмаҫ ул.
Алпанлаған айыуы,
Бесәй күҙле бүреһе,
Тауҙа уйнаған төлкөһө,
Күлендәге шәшкеһе,
Урмандағы ҡош-ҡорто,
Һыуындағы балығы
Беҙгә һунар булмаҫ ул.
Бер ҡоластай ҡәберлек
Ул да тыныс ҡалмаҫ ул:

Өҫтөн һөрөр, ер ҡылыр,
Һине эшләтеп ҡол ҡылыр.

Быға са уңмаҫ яуҙарҙы
Бер хоҙанан тимәгеҙ,
Яуҙы, илде муйырған —
Араға дошман ингәне,
Илде ятҡа биргәне;
Бер туғандай таҡ булып,
Яуға атын мингәндең
Йөрәген дошман бүлгәне;
Сер һөйләгән дуҫтарың,
Түшәктәге һөйгәнең,
Бер имсәктәш туғаның
Ситкә серең биргәне;
Илде дошман алыуы —
Мөлдөрәгән күҙ менән,
Алданылған иш менән,
Япраҡ ҡойған тирәктәй,
Гөлө төшкән һабаҡтай,
Батырҙың яңғыҙ ҡалғаны».

Был һүҙҙәрен батырҙың
Барыһы мауығып тыңлаған.
Ҡараһаҡал шул ерҙә
Яу көнөн билдәләп,
Бөтә батырҙы табып,
Тарауылға* килергә —
Барына ла хат биреп,
Барын илгә оҙатҡан.

Иҙел, Нөгөш, Яйыҡта,
Һаҡмар, Ҡаҫмарт, Эйектә,
Димдә, Үҙән буйында
Йәйләүсенең бары ла
Ҡараһаҡал хаттарын
Ҡабат-ҡабат уҡыуын
Күргән батырҙар ҡайтып,
Йәше, ҡарты йыйылып,
Ҡараһаҡал исеме
Телдән телгә туҡылған.
Һыртҡыраған йөрәкле,
Илен һөйөр теләкле,
Ат менерҙәй батырҙың
Бары бергә тупланған,
Ишетеп ҡалған һәр яҡтан
Халыҡ сапсан* йыйылған.
Ҡараһаҡал атаһы —
Нияз батыр төйәге,

Бөтә ырыу берләшеп,
Тарауылға ыҡлаған.

## VII

Алдынан ҡош уҙғармаҫ,
Ҡая, һыуҙы шәй күрмәҫ*,
Майор түрә атына
Сабыуында ал бирмәҫ
Үтә һылыу ҡара ат
Йөҙ егерме батырҙы
Ҡоткарырға майорға
Бүләк итеп бирелгәс, —
Толҡа тапмай сит ерҙә,
Иҙел аша йөҙөп сығып,
Ҡасып ҡайтҡан ҡара ат,
Майор ҡыуып килеп,
Алырға даулашһа ла,
Ҡабат уға бирелмәй, —
Ырыу аты һаналған,
Тирә-яҡта дан тотҡан
Әмәкәс батырҙың аты[20]
Тамъян иле — данлы илдән
Ҡараһаҡал батырға
Бүләк итеп ҡуйылған.
Ҡарат данлы Уралда,
Тамъян, Бөрйән, Ҡатайҙа,
Уралда аҡҡан һыуҙарҙың —
Барыһының буйында.
Ҡара атты күргәс халыҡ,
Ҙур бүләк был, тиешеп,
Тамъяндарҙы хуплаған.
Нияз төйәге йәм алған,
Халыҡ бары ҡалҡынған,
Ҡараһаҡалдың килеүен
Түҙемһеҙ көтөп ҡалған.

Ҡараһаҡал килгәнен,
Уралда ил гиҙгәнен
Тархан, баяр ишетеп,
Янаралға белдергән.
Ҡаҙаҡ ханы Әбел дә
Уҫал уйын туплаған,
Янаралға сер итеп,
Ҡараһаҡал батырҙың
Уй-серҙәрен һөйләгән.

Янарал хәйлә ҡорған:
Атаһы менән тотолған
Аҡай улы Абдулланы
Ҡазаматтан сығарып,
Бүләк биреп, өгөтләп,
Ҡараһаҡалды тоторға,
Йә булмаһа, атырға тип,
Ат мендереп оҙатҡан.
Абдулла киткән Уралға,
Бөтә ырыуын йыйып,
Ҡараһаҡалды көткән
Нияз янына килеп,
Абдулла һүҙ асҡан, ти,
Ошолай тип әйткән, ти:
«Батша менән атайым
Баярҙарҙы ҡыуырға,
Күп теләгән[21] батырҙы
Илгә һайлап ҡуйырға,
Тархан, түрә — берәүһе
Быға ҡаршы килмәҫкә,
Быға са яуҙа булғандар
Үҙ иленән ҡасмаҫҡа
Ҡағыҙ яҙып килеште.
Ҡараһаҡал килгән, ти,
Хан булырға йөрөй, ти,
Үҙенә батыр йыя, ти.
Был килмешәк кешене
Батшаға тотоп бирергә,
Уға эйәреп, ил һатып,
Батшаға яу асам тип,
Ҡабат атҡа менмәҫкә, —
Тип һүҙ биреп батшаға,
Килмәт менән атайым
Тамға һалды ҡағыҙға».

Ишеткән һуң был һүҙҙе
Халыҡ бик тә шомланған,
Ҡараһаҡал хаҡында
Төрлө һүҙҙәр башланған.

Аҡай яуы Абдулла
Ышаныслы ир булғас,
Хәҙер килеп үҙ һүҙен
Ҡараһаҡалға ҡаршы
Һис тайшанмай һөйләгәс,
Нияз да бик уйланған,
Абдулла һүҙе раҫ, тип,
Ҡараһаҡалға ҡаршы
Яу асырға димләгән.

Ҡараһаҡал тәү башта,
Өфөгә барып яу асып,
Айһыҙ ҡараңғы төндә
Аманат ятҡан күптәрҙе
Ҡазаматтан ҡотҡарған.
Ҡире Уралға әйләнеп,
Нияз янына килгәс,
[Баяғы һүҙгә ышаныпͺ]
Нияз быға яу асҡан.
Ҡараһаҡал еңгән һуң,
Нияз эште аңлаған,
Үҙенең улы икәнен
Яу баҫылғас танығаң.

Ил йыйылған тағы ла —
Ҡарты, йәше бары ла.
Тамъян иле — данлы ил,
Бөтә халыҡ алдында
Ҡараһаҡал батырға
Ырыу аты Ҡара атты
Бүләк итеп биргән, ти.
Атты алғас Ҡараһаҡал:
«Ай Уралтау, Уралтау!
Бите яуҙы күп күрҙе,
Иле ҡанын күп ҡойҙо,
Батырҙары күп үлде,
Батырҙарҙың батыры
Ҡараһаҡал ир килде!» —

тип, халыҡ алдында Ҡара атты ҡосаҡлап, беләгенән ҡан сабып ант иткән, ти.

VIII

Ҡараһаҡал ат менгәс,
Иҙелдән һыу эсергән;
Көсөм ҡәберенә барып,
Ҡәбер ташын ҡосаҡлап,
Ташҡа йөҙөн тейҙергән;
Дошман уғы теймәһен тип,
Тупраҡ һипкән атына.
Ҡара аттың күҙҙәре
Илде күреп алдында
Йәшләнгәндәй күренгәс,
Ҡарат түҙмәй торғанға
Көсөм ҡәбере һелкенеп
Йәнләнгәндәй һиҙелгәс,
Ҡараһаҡал үҙе лә,
Беләгенән ҡан сабып,
Ил алдында ант биргәс,

Батырға ғүмер теләп,
Бары оран күтәргән.
Батыр ҙа күҙ алдында
Улы Ҡорбан атаның,
Килене тол әсәнең,
Үкһеҙ етем баланың
Һыктап торған йөрәген,
Ҡанлы йәшле күҙҙәрен,
Алама кейем эсендә
Шыр ялангас тәндәрен
Күргәс, йәне түҙмәгән,
Күҙенә ҡан һауҙырып,
Әйтер һүҙен әйткән, ти:

«Алпанлаған айыулы,
Тупаҡ ҡойроҡ бүреле,
Сатаҡ мөгөҙ боланлы,
Ыласын, ҡыйғыр, бөркөтлө,
Ирәмәл, Айтас һөтөндәй,
Иҙел, Яйыҡ, Һаҡмарлы,
Йылҡылары юшаған,
Һыйыр, һарыҡ көйшәгән,
Ырыу-ырыу эркелеп,
Йәйләүҙәрҙә йәйләгән,
Батырҙары ил зарын
Ҡурайында уйнаған,
Һылыуҙары йырлаған,
Төрлө моңға мансылып,
Ҡошо-ние һайраған
Урал тигән илем бар,
Урал тигән ерем бар,
Урал тигән әсәм бар.
Батыр булып ат менһәм,
Маяҡһыҙ ҙа яҙлыҡтырмаҫ
Ҡуңыр буға юлы бар.
Атҡа мендем, алла, тип,
Әҙер торам, яуға тип.
Ҡылысынан ҡан тамған,
Һайҙағынан ыу тамған,
Ҡатындарҙы тол иткән,
Балаларҙы ҡол иткән,
Йорт-ерҙәрҙе көл иткән
Дошманымда ҡоном бар.

Ай Уралым, Уралым,
Батырын да тыуҙырҙың,
Һылыуын да тыуҙырҙың.
Батыр — батыр булыр ул
Яуға һаҙаҡ атҡанда;

Дошманына ил бирмәҫ,
Ҡыҙыл ҡанға батһа ла!
Һылыу — һылыу булыр ул,
Батырға әсә булһа,
Яуға киткән улына
Аҡтыҡ атын бирһә ул!
Түрә булып ил һатһа,
Уралға ул булырмы?
Табын йыйып, аш ашап,
Ҡоҙа йыйып, туй яһап,
Яуҙан ҡаскан батырҙы
Һөйгән һылыу булырмы?
Иҙеленән һыу эскән,
Уралында ҡыҙ ҡосҡан,
Бала үҫтереп, көн иткән,
Яуға үҙе бармаһа,
Барғанға уң бирмәһә,
Уп-туп* килеп арала,
Айбанһа дошман яуынан,
Ытырғанһа иленән,
Ил батыры булырмы?
Уралға ул булырмы?
Урал әсә булырмы?»

Был һүҙҙәрҙе ишеткәс, бөтә халыҡ үҙ араһындағы ғәйепле кешеләрҙе тикшерә башлаған. Ҡараһаҡалға аш-һыу биргәндәр, ҡунаҡ иткәндәр. Аҙаҡ күп кеше унын менән яуға китергә булған.

IX

Ҡараһаҡалға эйәреп, халыҡ яуға китергә әҙерләнгән саҡта, Тамъян-Ҡатайҙа дан тоткан Морат мулла менән Мәсғүт старшина Теләүкәй тигән берәүҙе тотоп алып килгәндәр, ти. Морат мулла Ҡараһаҡалға ҡарап, шулай тип әйткән, ти:

«Илдән илгә дан тотоп
Килгән батыр икәнһең,
Динде тотмаҫ ағаңа
Ҡаршы яуға сыҡҡанһың.
Солтангәрәй атың бар,
Дөлдөлдәй* ҡара атта
Ултырырҙай һының бар.
Мәккәлә* лә булғанһың,
Унда хаж да ҡылғанһың,
Пәйғәмбәрҙең юлынан
Ҡәғбәгә* лә барғанһың.
Атҡа мен һин, алла тип,
Ҡылысың тот, яуға тип,
Ислам динен йәйергә

Күктән төшөр Ғайсаһың[22],
Ислам динен көсәйтеп,
Юлын асып бирергә,
Йәьжүждәрен* ҡырырға,
Өлөшлөнән булырға,
Ҡөрьән менән йөрөргә
Ебәрелгән илсе һин».

Шулай һүҙен әйткән һуң, Морат мулла менән Мәсғүт старшина Ҡараһаҡал менән күрешкәндәр. Төрлө бүләктәр алып килгәндәр икән, уны биргәндәр. Унан Теләүкәйҙе күрһәтеп, Ҡараһаҡалға былай тигәндәр, ти:

«Азамат, бына был егет
Беҙҙең илдә тыумаған,
Үҙе эттәй бер ярлы,
Дин тигәнде белмәгән,
Дин китабын һөймәгән,
Йорто-ере янғанда,
Бар нәмәһен алғанда,
Ҡөрьәнде лә алмайса,
Йәненән артыҡ күрмәйсә,
Ҡөрьән өсөн утҡа инеп,
Үҙен шаһит ҡылмайса,
Донъя малын ҡыҙғанып,
Ҡөрьәнде утҡа ташлап,
Гонаһ-шомлоҡ төшөрлөк
Яман эште эшләгән.
Үҙе ҡасҡы был кеше
Ситтән килеп һырышҡан.
Быны кәрәк һуғырға
Ил халҡының алдында,
Ҡөрьән көлө янында;
Бисәһен тол ҡалдырып,
Балаларын хур ҡылып,
Үҙенә рәжем* яһап,
Ҡәберлеккә күммәйсә,
Эткә, ҡошҡа ташларға».

Был һүҙҙәрҙе ишеткәс,
Ҡараһаҡал йылмайып,
Теләүкәйҙе халыҡтың
Ҡаршыһына баҫтырып,
Мәсғүт менән Моратҡа
Былай яуап ҡайтарған:

«Ҡөрьән хаҡы, аҙамат,
Алла хаҡы тип beләм.
Алла өсөн ғәйепле
Гүрҙә бирер яуабын.

Егет менән алланың
Араһына инмәгеҙ:
Был егет бит Ҡөрьәнде
Уҫаллыҡтан яҡмаған,
Юрый утҡа атмаған, —
Ғәйебе бар, тимәгеҙ!

Уралды яу баҫҡанда,
Батырҙарҙың күҙенә
Иле ҡарап торғанда,
Бишектәге бала ла,
Әсәһендә талпынып,
Ат менәм, тип торғанда,
Яу сабырҙай егетте,
Уҡ атырҙай егетте
Әрәм итеп буламы?
Батыр тапҡан әсәнең
Йәшен ҡойоп буламы?
Сәңгелдәктә, илем тип,
Әүелдәгән балаһын
Етем ҡылып буламы?
Дүрт аяҡлы толпар ҙа
Һөрөнмәйсә буламы?
Ирмен тигән ирҙәр ҙә
Яңылышмайса буламы?

Ҡараһаҡал атым бар,
Ҡан илаған халҡым бар,
Йортом-ерем көл иткән,
Ҡатын-ҡыҙҙы, баланы,
Яуға ат биргән атаны —
Берен ҡуймай ҡол иткән,
Ил һаҡларға ат менеп,
Яуға сапҡан батырҙың
Тоҡомдарын юҡ иткән,
Батыр ҡаны һуғарған
Уралымда туй иткән
Дошмандарҙы ҡыуырға
Илемә биргән антым бар!

Ҡараһаҡал барында,
Ил һөйөүсе һуйылмаҫ,
Старшина, тарханға,
Янаралға, баярға,
Ат уйнатып, ил талап,
Уралымдың битендә
Һукмаҡ һалып йөрөргә
Ҡабат һис юл ҡуйылмаҫ!
Юлдаш булып ат менеп,

Беҙҙең ҡуйынға инеп,
Йөрәгенән ул батыр
Ытырғанһа иленән,
Алтын алып дошмандан,
Батырҙарын омпайтһа*,
Бағауылһыҙ ил эсен
Арҙандарға* өң итеп,
Илгә тарҡау тыуҙырһа,
Күп яуҙарҙа биреккән
Илдә өҙлөк тыуҙырһа,
Ул кешеләр Уралда
Торор торлаҡ табалмаҫ!»

Был һүҙҙәре батырҙың
Ҡолаҡтарға туҡылған.
Ҡанһыраған йөрәкле,
Азатлыҡҡа зарыҡҡан,
Ат менерҙәй барыһы
Ҡараһаҡал артынан
Ил һаҡларға ат менеп,
Дошман яуына ҡаршы
Күкрәк киреп уҡталған.
Ҡараһаҡал яу асҡан,
Ҡиске йылғыр елдәрҙәй
Ҡараһаҡал ораны
Бөтә илгә таралған;
Барлыҡ тархан, баярҙың,
Янаралдың, батшаның
Йөрәгенә шау һалған.

## X

Ҡара толпар баҡыр күҙ
Батыр өсөн яралған;
Уны менгән батыр ҙа
Бер уҡталып сапҡандуҡ,
Дошман ҡорҙай таралған.
Ҡара аттың керпеген
Дошман саңы саңлаған.
Тәфкиләү аты күҙен
Ил һөрөмө ҡаплаған.
Ҡараһаҡал яу күргәндә
Ҡая-таш тип тормаған,
Уҡтар гөжләп торһа ла,
Йәнен аяп тормаған.
Батыр һөңгө күтәрһә,
Ҡанатлы ҡоштай осҡан,
Ҡарат менгән батырға
Бөтә дошман таң ҡалған.

Ҡейек менмәҫ ҡаянан
Ҡара толпар юл һалған;
Ҡараһаҡал яу аҫһа,
Ҡаҙға осҡан ыласындай
Батша яуын айҡаған.
Ҡарат сабып киткәндә,
Ҡая таштар онталып,
Еленән ағас йығылған;
Алдында яу күргәндә,
Йән аямай ынтылып,
Батша яуын тапаған.
Ҡараһаҡал ҡылысы
Йөҙ мең дошманды ҡырғас,
Бөтә дошман таң ҡалған.
Баҡыр күҙле ҡара ат,
Ҡараһаҡал аҫтында
Бәрҙе балыҡтай уйнап,
Теҙгененән тотҡанда,
Иркә ҡыҙҙай буйлаған.
Батыр оран биргәндә,
Ҡаяларҙа боҫоп ул,
Ҡолағы аша батырҙан
Уҡ һалдырып аттырған.
Батыры ятып ял итһә,
Тирә-яғын күҙәтеп,
Бер нәмәнән һиҫкәнһә,
Батырын сапсып уятҡан.
Күп яуҙарға сапҡанда
Батыры дошман уғынан
Ун ике тапҡыр йығылғас,
Бер саҡта ла батырын
Ерҙә ятҡырып ҡалдырмай,
Һәрмәй һалып биленән,
Үҙ тыуына килтергән.
Яуҙан сарсап ҡайтҡанда,
Ҡыҙҙар тәгәс алғандар.
Бауырына һыу һибеп,
Тирен һалҡын алдырып,
Батыр менән икеһен
Маҡтап йырлап торғандар.

XI

Ҡараһаҡал ораны
Урал илен туплаған,
Иҙел буйын, Нөгөштө,
Дим, Ашҡаҙар яланын,
Ҡара Иҙел тамағын

Дошмандарҙан әрсегән.
Урал, Урал — әсә ул
Һыуын эскән батырға;
Иле менән берлектә
Дошманына ҡарышы
Намыҫ менән көрәшкән
Батырына ата ул.

Бағауылһыҙ ил эсе
Арҙандарһыҙ буламы?
Күп яуҙарҙа биреккән
Ил талыҡмай буламы?
Күп яу менән һыҙланған
Ил өҙлөкмәй буламы?
Күп ауырып миктәгән
Илем тигән Уралың,
Атам тигән Уралың,
Әсәм тигән Уралың
Етем ҡалмай буламы?

Урал, Урал — торлаҡ ул
Буйын буйлап йәшәргә,
Торлаҡ тигән йылы урын
Үгәй улһыҙ буламы?
Етем булған үгәй ул
Үгәйһетелмәй буламы?
Торлаҡ тигән йылы урын
Һылыу ҡыҙһыҙ буламы?
Һылыу ҡыҙға һоҡланған
Яңғыҙ берәү буламы?
Һылыуымын мин тигәндең
Йөҙө айҙай булһа ла,
Йөрәгенең һылыуын
Маңлай күҙе күрәме?
Ил батыры тигәнең
Бергә яуға ат менеп,
Һаҙаҡ алып ҡулына,
Уғын тоҫҡар мәрәйен
Күҙе менән күрһә лә,
Йөрәге тоҫҡар мәрәйҙе
Маңлай күҙе күрәме?

Ил батыры янында,
Уның һөйгән илендә
Батыр мин тип һөйләгән,
Бер табында ашаған,
Бергә ҡурай уйнаған,
Иҫәбе күп булһа ла,
Яуға ҡаршы барғанда

Бер күңелдән тормаһа,
Ҡылды ҡырҡҡа ярырҙай
Ҡараһаҡал батырың
Яңғыҙланғас нөгәрҙән,
Аяғы таймай ҡаламы?

Ил ҡаплаған дошманға
Яңғыҙ батыр яу булмаҫ!
Яңғыҙ толпар тояғы
Дошманына шау булмаҫ!
Ил ҡаплаған дошманға
Батыр яуы эсендә
Ярҙамсылар табылғас,
Ҡараһаҡал батыр ҙа
Артҡа сикмәй нишләһен?
Тарҡауланғас батырҙар,
Ил ҡалдырып дошманға,
Аҙра итмәй нишләһен?
Урал битен һаҡларға,
Дошманынан әрсергә,
Күҙенә ҡан һауҙырып,
Төнөн-көнөн яу сапҡан
Ҡараһаҡал батыр ҙа,
Яңғыҙланғас илендә,
Ҡулын тартмай нишләһен?

«Ҡараһаҡал китһә лә,
Батырым күп үлһә лә,
Илем үлмәҫ һис ҡасан,
Ҡанды күргән батырҙар
Яйыратмаҫ дошманды,
Тағы ҡыуыр бер ваҡыт», —
Тигән һүҙе батырҙың
Миңдәй ҡалды илендә.
Нисек яуға сабырға —
Уралында буйлаған
Юлы ҡалды ерендә.



# ЮЛАЙ МЕНӘН САЛАУАТ

Салауат атаһы — Юлай,
Юлай атаһы Аҙналдың
Атаһының атаһы
Олатай тип йөрөгән
Шәғәле Шаҡман булған[1].
Ул бик данлы ир булған:
Иван батша сағында
Ҡазанды ла алышҡан,
Иван батшаға барып,
Ил исеменән ант биреп,
Үҙҙәре илгә бей булып,
Башҡорт ерен сикләтеп,
Болан тиргә яҙҙырып,
Исемдәрене теркәп
Йөрөүсе дүрттең берәүһе,
Себер юлы буйында,
Ете ырыуға баш булып,
Тархан булған бай кеше.
Илгә сыҡһа, түрә ул,
Күп волосҡа хужа ул,
Батшаға барһа — түрҙә ул,
Ни һөйләһә — телендә,
Ни эшләһә — ҡулында,
Барын, үҙе тигәнсә,
Эшләп килгән тархан ул.
Күскән йылға буйында
Юлды тигән батырҙы,
Үҙенә баш эймәгәс,
Заводсы ҙур байҙарға
Ҡаршы тороп көрәшкәс,
Янаралға, батшаға
Ошаҡ теҙеп — хат яҙып,

Көслө ғәскәр килтереп,
Юлдының үҙен, бисәһен,
Бала-сағa, юлдашын —
Барын тотоп аҫтырған;
Йортон-ерен яндырып,
Көлөн күккә осороп,
Юлды ауылын бөтөрөп,
Юлды исемен юйҙырып,
Үҙ ырыуын йәйҙереп,
Ете йортҡа баш булып,
Бер кеше һүҙ әйтә алмай,
Килгән баяр, түрәгә
Ер һатһа ла, өндәшмәй,
Туҡһан йәшкә еткәнсе
Тархан булып, яйрап,
Бөтә Урал буйында
Байҡыш йыйған кеше ул.

Шул саҡлы бай булған ул:
Эйәр, йүгән, өҙәңге,
Билгә быуған ҡәмәре,
Бисәһенең сулпыһы
Тос алтындан эшләнгән.
Байлыҡ менән дан тотҡан,
Бөтә бейҙе ҡулға алған,
Килгән-киткән заводсы,
Ер алырға теләүсе
Шәғәләнең алдынан
Уҙып бер эш ҡылмаған.

Ул үлгәс тә балаһы,
Балаһының балаһы,
Себер юлы буйында
Элекке Юлды ауылына
Шәғәле тип ат ҡушып,
Атанан улға мираҫтай
Бейлектәрен ҡалдырып,
Йәшәп килгән барыһы.

Шәғәленең һуңында,
Балаһының улынан
Аҙналы тип аталған,
Тағы данлы ир тыуған.
Өс уҙаман бей булған,
Күп байлыҡтарҙы йыйған,
Данлы йорттарҙа тыуған,
Ҡайҙа барһа Аҙналға
Ишектәр асыҡ булған.
Атаһы ла тырышҡан,

Йәйен өйҙә уҡырға
Ауыл муллаһы тотҡан.

Ҡышын уҡып ҡалала,
Урыҫса ла белгән ул,
Ике ҡәләм белеүсе
Уралда бер булған ул.
Бөтә яҡтан дан менән
Ҡулындағы аймаҡты
Ҡул осонда тотҡан ул.

Аҙналының ҡыҙҙары,
Берәү түгел, күп булған,
Балаһының кинйәһе
Юлай тигән ул булған.
Юлай атҡа менгәс тә,
Тирә-яҡта ҙур данлы,
Иң атаҡлы ир булған.
Аҙналы баш булһа ла,
Юлай егет булған һуң,
Атаһының юлына
Ҡаршы төшә башлаған.
Быны белгәс, түрәләр,
Атаһының дуҫтары,
Завод тотҡан байҙары,
Бара торғас, Аҙналдан
Барыһы ла эс тартҡан.
Төрлө яҡтан һөйләшеп,
Баяр-түрә берләшеп,
Юлай өсөн Аҙналға
Ошаҡ-маҙар итешеп,
Аҙналының аҙактан
Түрәлеген алғандар.

Түрәлектән ҡалған һуң,
Аҙналы бар эштәрен
Юлайына тапшырған[2].
Юлай ҙа сер бирмәгән:
Ҡабат ерҙе һатмаҫҡа,
Заводсыға бирмәҫкә,
Алыш-биреш итмәҫкә
Тигән уйын туплаған.

Заводсылар сер бирмәй,
Бүтән түрәләр менән
Алыш-биреш яһашып,
Ҡунаҡ булып һыйлашып,
Үҙ эштәрен бар иткән.
Ерен алып халыҡтың,

Заводтарын ҙурайтып,
Һаман ҡулдарын һуҙған.
Заводсылар мал түгеп,
Күп түрәне ҡулға алып,
Юлайҙы сит күрһәтеп,
Кеше үтә һүҙ биреп,
Унан халыҡты өркөткән.
Заводсылар ҡулға алған
Түрә-һәрә бей булғас,
Заводсылар халыҡ ерен
Буштан-бушҡа талағас,
Бара-тора ил халҡы
Бөтә эште аңлаған:
«Былай булһа, эш харап,
Ерҙе алалар талап,
Ҡул ҡаушырып тормайыҡ,
Әйҙә барып Юлайға,
Кәңәш-төңәш итәйек!» —
Тип йыйылып, күмәкләп,
Ат саптырып килгәндәр.
«Урманды буш ҡырҡалар,
Һунарсының йәнлеген
Заводсыға ҡунаҡҡа
Килеп йөрөгән түрәләр
Бушҡа тартып алалар», —
Тиеп, Юлай алдына
Бары килеп илаған.

Юлай тәүҙә шашмаған,
Янаралға, батшаға
Барына ла хат яҙып,
Хатҡа ҡаршы батшанан,
Янаралдан — барынан
Йүнле яуап алмағас,
Юлай йыйған ҙур йыйын,
Йәшен, ҡартын, олоһон,
Һис берәүҙән тайшанмай
Һөйләп биргән дөрөҫөн:

— Йәшенеп-боҫоноп барығыҙ
Һөйләйһегеҙ зарығыҙ.
Тыңланым мин барын да,
Аңланым мин барын да,
Йәш-елкенсәк, ҡарт-ҡорҙоң
Йөрәктәге уйын да.
Бына хәҙер мин һеҙгә
Һис берәүҙән тайшанмай,
Заводсыға һатылған

Түрәләрҙән ҡаушамай
Һөйләп бирәм барыһын:

Ҡулдән көшөл типтем тип,
Әтәлге ҡош маҡтаныр,
Мәңге ҡыйғыр була алмаҫ;
Ярҙан сысҡан типтем тип,
Көйгәнәк ҡош маҡтаныр,
Мәңге йәтсә була алмаҫ;
Шырҙа ҡуян типтем тип,
Ҡара бөркөт маҡтаныр,
Һунарҙа һис яҙлыҡмаҫ
Ҡәттә мәргән була алмаҫ.

Заводсыға һатылып,
Илдең ерен һатыусы,
Ауырлыҡты күрмәүсе,
Алдында һине ағартып,
Артта ҡара яғыусы,
Битендә ике йөҙ булып,
Ике телле булыусы,
Ил ғәйебен ҡаплаған
Уҡа сапан кейеүсе
Яман түрә һис сакта
Илгә таяныс булмаҫ;
Һәр саҡ халҡым тиеүсе,
Халыҡтың ғәмен йыйыусы,
Халыҡ ғәмен йыям тип,
Урманда уҡ юныусы,
Илде дошман баҫҡанда,
Уҡ-һаҙағын ҡайраусы
Батыр менән тиң булмаҫ.

Ил батыры шул булыр:
Һүҙе унын бер булыр,
Ҡукрәгендә ул ирҙең
Һәр сағында иле өсөн
Бары яҡшы уй булыр.
Ул егеттең эсендә
Эйәрләнгән ат ятыр,
Ундай аға ил тотһа,
Илгә дуға тултырыр;
Яман аға ил тотһа,
Илгә дошман тултырыр.

Илгә аға булырҙай,
Атанан алтау тыуһа ине;
Атам бей тип маһаймай,
Юлын һайлай белһә ине;

Илдең аҡҡан күҙ йәшен
Үҙ йәшендәй күрһә ине;
Ҡорман быуып биленә,
Һаҙаҡ тоҫҡап дошманға,
Һуҙған ҡулын дошмандың
Ҡире ҡағып торһа ине;
Битенә килгән оятты
Үҙе белеп йыуһа ине.
Алты яман тыуғансы,
Яҡшы берәү тыуһа ине,
Илгә аға булһа ине,
Ил башында торһа ине;
Иле уға иркәләп,
Бәхет табып торһа ине.

Беҙҙә хәҙер ил тотҡан,
Илгә аға булырҙай
Бер батыр ҙа юҡ һымаҡ,
Ил аралап йөрөһәң,
Халыҡ күренә тағы ла
Аптыраған ил һымаҡ.
Илгә аға булғандар
Ил күкрәгендә уйнайҙар,
Илһеҙ үҫкән ир һымаҡ.
Ил серенә һыймайҙар,
Өлгөһөҙ бескән тун һымаҡ.

Илдең күп яуҙар менән
Ҡаҡшағанын beләһеҙ.
Баярҙарҙан таланып,
Йонсоғанын беләһеҙ.
Һикһән йәшенә еткәндә
Талған күҙен секрәйтеп,
Ҡатҡан билен бөкрәйтеп,
Һыу ташыған әсәләй
Ил ҡалғанын күрәһеҙ.
Туҡһан йәшенә еткәндә
Ҡатҡан билен бөкрәйтеп,
Туҡырандай туҡылдап,
Ябалаҡтай уһылдап,
Утын ҡырыҡҡан аталай
Буласағын беләһеҙ.

Ҡиске йылғыр еле лә,
Таңғы еләҫ еле лә
Иҫмәй туҡтап ҡалғанда,
Тымыҡ айлы төндәрҙә,
Тал төбөнән йылмылдап,
Шылтырап аҡҡан шишмәләй,

Батырына йылмайып,
Серен әйтеп моңланған
Һылыуҙарҙың тол ҡалып,
Батырҙары ситлектә,
Балалары бишектә
Хур булырын беләһеҙ.

Яу-ни булһа, ат менеп,
Ат һөрөнөп, йығылып,
Битегеҙ ҡанға буялып,
Яуҙа үлеүҙән ҡурҡаһыҙ.
Илен һөйөп әйләнгән
Ҡаялы шыр урмандан
Мәңге ерекмәҫ юл һалған
Ҡуңыр буға быҙауҙың
Тоҡомо[3] булған һыйырҙан
Һөт эсерлек берегеҙ
Илгә батыр түгелһеҙ.
Ил ҡаплаған диңгеҙҙең
Батшаһына яу асып,
Торор ерен батшаның
Ат күҙендәй күл иткән,
Урал тауын бар иткән
Урал тигән батырҙы
Барығыҙ ҙа беләһеҙ.

Ирәмәл ярып, Иҙелдә,
Уйташ уйып, Яйыҡта
Йылға ағыҙған улдарҙы —
Иҙел, Яйыҡ батырҙы
Тағы ишетеп беләһеҙ.
Барымтаһын эҙләгән
Атаһының ҡаны өсөн,
Ҡан илаған иленең
Етем-еҫер хаҡы өсөн,
Мәсем ханды тураған
Сура улы һәүбәнде,
Ете ырыуға баш булған
Юрматы, Ҡыпсаҡ, Табынды,
Ҡыуаҡан, Әйҙе, Ҡатайҙы
Һәм дә Тамъян батырҙы
Тағы ишетеп беләһеҙ...

Ул батырҙар бары ла
Яланғас тыуған әсәнән,
Имсәк һорап илаған,
Бишегендә тирбәлеп,
Бәпләү күргән әсәнән.
Береһе лә кәм түгел,

Ҡыҙ һөймәҫлек ир түгел,
Бары беҙҙәй һөйөлгән
Уралдағы һылыуҙан.
Шулай ҙа улар ятмаған,
Илгә дошман килгәндә,
Ҡул ҡаушырып тормаған;
Ҡолонсаҡтай уйнаған
Балаларын йыуатып,
Иркә серен һөйләгән;
Һөйгән йәрен илатып,
Туғыҙ айҙай күтәреп,
Татлы йоҡо ҡалдырып,
Һөт имеҙгән әсәһен,
Маңлай тирен һыпырып,
Буй үҫтерткән атаһын,
Йөрәктәрен һыҡтатып, —
Барын ташлап ат менгән.

[Юлай һүҙен бөткәстән]
Бөтә халыҡ уйлашып,
Үҙ-араһы һөйләшеп,
Яу асырға тупланған,
Юлай Урал буйлағас,
Иҙеленән һыу эскән,
Уралда ат уйнатып,
Төлкө кәпәс кейгәндең,
Өйөр йылҡы көткәндең,
Үҙендәй күп ирҙәрҙең
Уйы бер тип ышанып,
Заводсыға яу асҡан.
Старшина, түрәләр
Һаман илдә бей булған,
Халыҡты батша яғына
Төрлө яктан арбаған.
Юлай яуҙы асһа ла,
Күп тырышлыҡ итһә лә,
Яуға ҡаршы торһа ла,
Аҙаҡ түҙмәй еңелгән;
Йәш бисәһен бергә алып,
Ҡая ташҡа һырылған;
Ҡая, урман эсендә,
Ете йылдың ҡышында
Күп ауырлыҡтар күреп,
Ике балалы булып,
Һаман ҡасып йөрөгән[4].

Мәскәүҙең ҙур батшаһы, бөтә боласыларҙы ярлыҡайым, тип илгә хәбәр ташлағас, был хәбәргә ышанып, бары йыйылып бергә ҡайтырға булғандар. Юлай иленә ҡайтҡас, тирә-яҡтан халыҡ

килгән, бик ҙур шатлыҡ, туй булған. Юлай ҡайҙа ғына барһа ла, түрә-һәрә уны бик ныҡ күҙәтеп торған.

Бер аҙ торғас, Юлайҙың өсөнсөгә тағы ла йәш бисәһенән ул тыуған. Халыҡты йыйып туйлаған, Салауат тип исем ҡуштырған[5]. Шул туй барған сағында ғәскәр менән янарал*, яҡын-тирә түрәләр сабып килеп төшкәндәр.

«Батша һеҙгә ебәрҙе, беҙҙең илгә сит илдән яу килә бит, — тигәндәр. — Һалдаттарға ат кәрәк, яуға барыр ир кәрәк, батша халыҡтың һорауын һис аямай бирәсәк», — тигән һүҙҙе бөтә халыҡ янаралдан ишеткәс, үҙ-араһы һөйләшеп, бирергә булғандар. Атаһы менән әсәһе лә, ҡайны менән ҡәйнәһе лә, «яуға бар» тип димләгәс, Юлай ҡарыулашмаған. Йылҡы өйөрөн туплатып, яҡшы атын һайлаған. Бөтә халыҡ йыйылып, Юлай менән башҡаларҙы яуға оҙатҡан[6].

Бер йылдан артыҡ йөрөп, Юлайҙар ҡайтҡандар. Юлай менән киткәндәрҙең күп кенәһе үлеп ҡалған. Юлай ҡайтҡас, тирә-яҡ халыҡ һорашырға килгән. Юлай килгән халыҡҡа үҙенең күргәндәрен энәһенән ебенә теҙеп һөйләгән. Юлайҙың ҡайтыуын атаһы бейә һуйып туйлаған.

Юлай яуҙа дан алған,
Батшанан миҙал алған,
Былай данлы булған һуң
Үҙ йортонда халҡынан
Түрә булып һайланған[7].

Юлай яуҙан ҡайтҡанда,
Салауат та атлаған;
Ярым-ярты һаҡаулап
Һөйләшә лә башлаған[8].

Салауаттың буй-һыны,
Йәше үҫкән, көн һанап,
Батырлығы, йыл һанап,
Һаман ҙурая барған...
Иң бәләкәй сағында
Үҙ һүҙле бала булған;
Әсәһе урын һалһа,
Бер әкиәт һөйләтмәй
Урынына ятмаған.
Әсәһе менән эйәреп
Һыуға ғына барһа ла,
Бар нәмәне тикшергән.
Айғыр, әтәс талашын,
Тәкә, үгеҙ һөҙөшөн,
Күктә ҡоштар тибешен
Аҙаҡ сиккә саҡлы ул,
Бер яғының еңгәнен
Күрмәйенсә аҙағын,

Китмәй ҡарап торған ул.
Ҡарап ҡына ҡуймаған,
Аҙағынан тағы ла
Еңеү менән еңмәүҙең,
Көслө менән көсһөҙҙөң
Сәбәбенең барын да
Төпсөп һорап белгән ул.

Ете йәшкә еткәндә,
Бәйгеләргә барғанда,
Ниндәй ҡырыҫ атты ла
Ҡурыҡмай менеп сапҡан ул.
Менгән аты бәйгелә
Уҙмай килһә арт булып,
Килмәйенсә майҙанға
Кире ҡайтып киткән ул.
Бер бәйгегә барһа ул,
Алдын килгән аттарҙы,
Алдын сапҡан батырҙы,
Шунда күреп ҡайтһа ул,
Әбей-һәбей, бер ҡартмы, —
Кемде генә күрһә лә,
Яҡшы аттар, батырҙар
Тураһында әкиәт
Һөйләтергә уларҙы
Өйгә алып ҡайтҡан ул.

Ун йәшенә еткәндә,
Йәш-елкенсәктәр менән
Уйын-маҙар булғанда,
Үҙенә нөгөр* йыйып,
Үҙенән йәшкә өлкәнде
Үҙ артынан эйәрткән,
Берәй аулаҡ өй булһа,
Унда уйын ҡоролһа,
Уйын ашы йыйырға
Арала һүҙ ҡуҙғалһа,
Бөтә эштә баш булып,
Бик ярлыға йоморҡа,
Ҡошо барға бер тауыҡ,
Бай булғанға бер һарыҡ —
Уйын ашы билдәләп,
Үҙе башлап йөргән ул,
Үҙе лә алып килгән ул.

Салауат йәштән үҙһүҙле,
Үҙе һөймәҫ кешегә
Күңеле ҡаты булһа ла,
Бынау ярлы, был бай тип,

Һис айырып тормаған.
Ҡөтөүсене, ялсыны
Һис ваҡытта һүкмәгән,
Тырнаҡ менән сиртмәгән.
Быҙау имһә ҡушылып,
Бейә имеҙһә ҡушлатып,
Ата-әсәһе ялсыға
Екерергә башлаһа,
Нисек итеп булһа ла
Ялсы аралар ир булған.

Ун биш йәшкә еткәндә,
Һис йыйындан ҡалмаған,
Йыйындағы батырҙар
Ниндәй данлы булһа ла,
Ҡөрәшергә ҡурҡмаған.
Ун биш йәшкә еткәндә,
Тирә-яҡта Салауат
Данлы батыр ир булған.
Салауаттың һөйгәне
Йәш саҡтан уҡ ат булған;
Нуҡта теймәҫ аҫауҙы
Үҙе тотоп өйрәткән.
Һунарға сыҡһа тағы,
Ҡуян-маҙар атмайсы,
Бүре, айыуҙы ғына
Тап итергә тырышҡан.

Йыйындарҙа булғанда,
Йырсы, сәсән, ҡурайсы
Ҡайһы алдын булдиһә,
Алдынлыҡҡа сығыуҙың
Бар сәбәбен һөйләткән.
Һыу буйына барҙиһә,
Һыу ингәндә сумышып,
Ҡош атҡанда осороп,
Осҡан ҡошҡа атышып,
Мәргәнлектә һынашҡан;
Ат өҫтөндә уйында,
Ерҙә ятҡан һумлыҡты
Сабып килеп алып ул,
Һәләтлектә уҙышҡан;
Йырсы менән йырлашып,
Сәсән менән әйтешеп,
Һамаҡ әйтеп сайҡашып,
Моңло йырҙа, йор һүҙҙә
Алдынлыҡты үлсәшкән.

Шулай итеп ул үҙен
Төрлө яҡтан һынаған;
Үҙенә ул иптәште
Шул юл менән һайлаған.

Уның иң йәш саҡтан уҡ
Бергә йөрөгән иптәше
Берәү түгел, дүрт булған.
Уларҙан һис ҡыҙғанмай,
Атһыҙына ат биреп,
Тунһыҙына тун биреп,
Ятһа, торһа — бергәләп,
Бер табаҡтан аш ейгән.
Салауат йәйен шулайтып,
Бәйге-йыйында йөрөп,
Көрәштә ҙур дан алып,
Яҙлы-көҙлө ҡош сөйгән;
Ҡырпаҡ һунар төшкәс тә,
Бүре, айыуға йөрөп,
Йылдың ҡалған айында
Салауат уҡыуҙа булған.
Татарса ла уҡыған,
Урыҫса ла уҡыған,
Аҙналдан ҡала Уралда
Ике ҡәләм белеүҙә
Ул икенсе ир булған.

Салауаттың атаһы
Элек яуҙа булғанда,
Ямантауҙың буйында
Ике балаһы тыуып,
Мәмерйәлә үҫкәндәр.
Яҡты донъя күрмәйсә,
Үҙҙәрендәй ауылда
Бала барын белмәйсә,
Айыу балаһы һымаҡ,
Таш тәгәрәтеп уйнаған;
Ата-әсәһе күмәкләп,
Шунда ҡасып ҡышлаған.

Салауат ауға сыҡҡанда
Ошо ергә тап булған.
Ҡая ташына баҫып,
Салауат уйға талған;
Иптәштәре оранын,
Яғалай үткән айыуҙың
Ужарын да тоймаған.
Тәрән итеп көрһөнөп,
Ҡая ташҡа ултырып,

Ата-әсәһе күргәнен
Күҙ алдына килтереп,
Күҙ йәштәрен йөрәктән
Керпегенә сығармай,
Иптәштәре алдында
Батырлығын юғалтмай,
Эсендәге серҙәрен
Һис берәүгә аңлатмай,
Йәйәһенең керешен
Талыҡһа ла бушатмай,
Киң күкрәк ташҡанын
Шунда йырлап ебәргән:

«Уралҡайым, һинең буйың йәмле,
Ҡаяларың ниңә уйҡыллы?
Балаларын ҡурсып ҡосаҡлаған
Әсәйҙәрҙең ҡуйыны шикелле.

Ағиҙелкәй аға тау аралап,
Ул тирәлә һыуы һалҡындыр;
Уралымдан йыраҡ киткән һайын,
Буйҙары ла ут та ялҡындыр.

Уралҡайым, һайрай ҡошҡайҙарың
Тыңлаһам да, телен белмәйем.
Тәсбих әйтә микән үлгәндәргә,
Тип эсемдән генә уйлайым.

Туғайыңды сом-сом күлдәр уйған,
Ҡыуға менән керпек ҡыйылған;
Һыукайҙарың күктән, әллә ерҙән,
Әллә күҙ йәшенән йыйылған.

Ҡаяларҙан төшһәм, һаҙға батам,
Ҡара талдар үҫкән үҙендә;
Төҫтәре лә йәмһеҙ, еҫе тәмһеҙ —
Ҡан һөҙөгө сыға ла йөҙөндә.

Һаҙҙарында талдар бейек үҫмәй,
Күк ҡояшын ҡая ҡаплаймы?
Әллә үҙәгенә ысынлап та
Ҡара ҡандар ҡатып ҡалғанмы?

Күлдәреңде һинең ниңә улай
Һылыу ҡыуғаларың ураткан?
Оҙон керпектәрен йәшләндереп,
Әллә һылыуың берәү илатҡан?

Һандуғаҫкайҙарың ниңә һәр саҡ
Һаҙлыҡтарға ҡуныпп һайраусан?
Батыр ҡанын ҡойған яуыз фарман
Шунда килгән мәллә һарайҙан?..»

Шул саҡ бының янына
Уйламаған, көтмәгән,
Был тирәлә күренмәгән
Бер ҡарт килеп һүҙ ҡушҡан.
Сәләм биреп һаулашып,
Ата-әсә, тоҡомон
Салауаттан һорашҡан.
Салауат тәү эс тартҡан,
Баштан-аяҡ был ҡартҡа
Күҙен йүгертеп сыҡҡан.

«Маңлайында йөйө бар,
Уң ҡулында — өс бармаҡ,
Ҡалғандары ҡырҡылып,
Яралары ит үреп,
Әллә ҡасан уңалған.
Сәс, һаҡалы ағарған,
Йөҙө кипкән, һап-һары,
Өҫтө-башы таушалған,
Әллә күпме ямаулы.
Аусы тиһәң — ҡорал юҡ,
Көтөүсе тиһәң — тағы ла
Һис бер яҡын-тирәлә
Мал-тыуарҙың өнө юҡ.
Ҡарап торған күҙҙәре —
Ҡаҙалырҙай уҡ төҫлө;
Һүҙ ҡушҡанда һүҙҙәре —
Күпте күргән ир төҫлө», —
Тип Салауат уйлаған.
Иптәштәре йыйылғас,
Ҡарт, һорашып барын да,
Үҙе белгәнсә һынағас,
Ошолай тип һүҙ асҡан:
— Салауат тигән исемең,
Ишетеп беләм ҡолаҡтан.
Йәшең бала булһа ла,
Ишетеләһең йыраҡтан.
Исемеңде ишетеү
Белеү түгел йөрәктән.
Тоҡомоңдо аҡтарһаң,
Һайлап алып теҙгәндәй,
Бары — тархан, бары — бей.
Һиңә тоҫҡап килеүем —
Һине күреү, тик бер уй.

Йырың тыңлап торғайным,
Уйың йөрөй йыраҡта.
Урал тауын ҡараһаң,
Тарбаҡ-тарбаҡ таралған.
Һәр тарбаҡтың ҡуйынында
Бер батыры яралған;
Унан аҡкан һыуҙарҙың
Барында батыр ҡойонған.
Урал тауы буйында
Талай юлдар күреремһең.
Ҙур һыуының буйында,
Ҡырлас сағыл яғалай,
Тархандарҙа мал көткән
Ҡөтөүселәр моңлаған,
Өҙөк-өҙөк берләм юл,
[Уны ла һин күрерһең.]
Урал аша үҙәктән
Туғай ярып һуҙылған,
Яуға сапкан батырҙы,
Ҡул-аяғын бығаулап,
Ситкә туҡмап оҙатҡан,
Илде ҡанға буярға,
Малын хаҡһыҙ таларға,
Батырҙарын һуйырға,
Балаларын аҫырға,
Йорт-ерҙәрен үртәргә
Яуыз хакимдәр килгән
Бик боронғо иҫке юл,
Уны ла һин күрәһең.
Батый хан да уҙған юл,
Олатайың Шәғәле
Ажырайып йөрөгән юл;
Ат йөҙҙөрөп күҙ йәшкә,
Ошаҡ тейәп артмаҡҡа,
Олатайың Аҙналы —
Ул да йөрөгән оло юл;
Сергеһенән ҡан йөҙөп,
Ужар сәсеп дан алған,
Тәфкиләү ҙә йөрөгән юл;
Ғазраилдәй Сергәйев[9], —
Күҙенә ҡан һауҙырып,
Бары шунан үткән юл,
Әле булһа, ул юл бар.

Ҡая бите аҡланда,
Шыр урмандар эсендә,
Ҡыйғас ҡаштай һыҙылған,
Тар булһа ла, һис сакта
Үлән үҫеп етекмәҫ,

Юшҡын төшөп ерекмәҫ,
Илен һөйгән батырҙар
[Ил-көн тиеп, ҡан ҡойоп,
Яуға сапҡан юл да бар][10].

[Ул юл, белһәң, Салауат,]
Батырҙарҙың атының
Тояғы менән ҡаҙылған;
Күп батырҙар һөйәге
Маяҡ итеп ҡаҙалған.
Сәйет, Күсем, Аҡайҙар,
Ҡараһаҡал, Батырша —
Бары шунан буйлаған;
Иле өсөн азатлыҡ
Шул юл буйлап даулаған.

Бына мин дә шул юлдан
Буйлаған бер ҡарт инем;
Ат өҫтөндә сапҡанда
Елем менән дошманды
Йыға торған ир инем.
Утын киҫеп урманда
Бармағымды сапманым;
Уртаҡ һөйөп һылыуҙы
Көндәш менән һуғышып,
Тамағыма аш эҙләп,
Айыу менән һуғышып,
Маңлайымды ярманым.
Илем һаҡлап яу сабып,
Дошман уғын һиҙмәҫтәй,
Ҡылысынан айбанмай
Яуға сабыр ир инем.

Был ҡарт оҙаҡ һөйләшкән,
Бергә ултырып уйлашҡан,
Тик әйтмәгән кемлеген;
Салауатҡа ҡул биреп
Белдергән ул берлеген.
Салауат, ҡартты ҡыҙғанып,
Үҙе менгән толпарын
Ҡартҡа биргәс килтереп,
Ҡарт ҡулына алмаған.

Ҡарт:

— Ҡустым, атың кәрәкмәй,
Һинең атың менмәйем.
Атаң үҙем күрмәйсе,
Уның серен белмәйсе,
Ҡул тамырын тотмайсы,

Атың менеп, икендең
Арағыҙға шомло уй
Бер күреүҙә һалмайым, — тигән.

Ҡарт хушлашып айырылғас,
Атаһының өйөндә
Барын күрергә булғас,
Ҡарттан ҡалғас, Салауат
Оҙаҡ итеп уйлаған,
Ҡарттың әйткән һүҙенең
Төп-тамырын аңлаған.
Күҙ йүгертеп Уралдың
Бөтә буйын ҡарағас,
Тауыш-тынһыҙ баш баҫып,
Тәрән уйҙарға талып,
Өнһөҙ-ниһеҙ ултырған,
[Иптәштәре алдында
Салауат һүҙ башлаған:][11]

— Урман-ара алпанлап,
Умарта ватып йөрөгән —
Беҙ айыу тип һанаған —
Айыу түгел икән дә!
Урмандағы мәсе күҙ,
Һарыҡ быуып йөрөгән,
Тупаҡ ҡойроҡ, күк һыртлы —
Бүре түгел икән дә!
Беҙ дошман тип таныған,
Таң йоҡоһон ҡалдырып,
Төнөн йөрөгән ҡаҫҡылар
Дошман түгел икән дә!..

[Шул сағында урманда]
Балта тауышы шаңҡыған.
Бер һүҙ әйтмәй Салауат,
Эйәк ҡағып барына,
Асыу менән ымлаған;
Атҡа менгән һикереп,
Китәр яғын белдереп,
Һүҙһеҙ ҡамсы һелтәгән.
Ҡая буйын яғалап,
Шыр урманды аралап,
Тауыш сыҡҡан урынға
Барып сыҡҡан туралап.

Барһа, — баяр кешеләре
Сом[12] буйының урманын
Турап-ырҡып яталар!
Салауат тыйғас уларҙы,

Әйтешкәндәр һүҙҙәрҙе,
Һуғыш киткән арала,
Ярышҡандар баштарҙы!

Ҡырҡыусылар ҡасҡандар,
Ҡайтып оран һалғандар,
Атҡа атланып барыһы
Юлға ҡаршы сыҡҡандар.
Салауаттар ҡуймаған,
Барын ҡырып һалғандар.

Баярҙың бер кешеһе Салауатты танығаһ. Салауат өйгә ҡайтыуға, баярҙар Юлайға килеп еткәндәр. «Һинең улың яу менән утар баҫты. Хәҙер Өфөгә, янаралға барабыҙ», — тип ғауға күтәргәндәр. Шул саҡ ат һөрөмөн осороп, күҙенә ҡан һауҙырып, Салауаттар ҡайтып төшкән. Олатаһы менән атаһы Салауатты саҡырып алып, һис бер һүҙ әйтмәҫтән, уңлы-һуллы сикәләп тә алғандар. Олатаһына ла, атаһына ла Салауат һис һүҙ ҡатмаған. Тирмәнән сығып, тегеләрҙе көткән. Баярҙар сығып атҡа менгәс, ошо һүҙен әйтеп ҡалған:

— Атамдан мине һуҡтырып,
Ярҙай халыҡ алдында
Намыҫымды таптатып,
Күңелегеҙ булмаһын!
Атам мине һуҡһа ла,
Мин атымдан төшмәмен;
Урманда уҡ юнғанда
Айыуға тип юнмамын.
Урал буйы урманда,
Ат уйнатҡан баярҙың
Бер ҡараһын күрһәм дә,
Аҫтын өҫкә килтермәй,
Ҡул ҡаушырып ҡалмамын!

Баярҙар Салауатты юҡ итергә теләһәләр ҙә, уны урманда аңдып атып үлтерһәң, илдә ҙур ғауға ҡубыр, бөтә башҡорт ат менеп, өҫкә тағы яу булып ташланыр, тип уйлағандар. Аҙаҡ сиктә мал биреп, уны үлтерергә кеше яллағандар. Баяр ҡушҡан кешеләр Салауатты юҡ итергә яйын эҙләгәндәр. Салауат быларға яңғыҙы тап булмаған.

Илгә сыҡҡан сағында был кешеләрҙең береһе Салауатҡа тап булған. Салауат менән һаулашҡас, һунарға сыҡҡайным, тип һөйләгән. «Анауҙа яңғыҙ айыу ята», — тип алдап, Салауатты тау битләүендә бала уйнатҡан ата-инәле айыуға тоҫҡаған.

Салауат, яңғыҙы уҡталып, бер айыуҙы һуҡҡанда, икенсеһен күрмәгән. Икенсе айыу Салауаттың һул беләген маҡтыған. Ҡанға батһа батҡан батыр, әммә айыуҙарҙы ебәрмәгән: шул урында икеһенең дә иҙмәһен иҙгән. Ә теге кеше, инде Салауат үлер тип, баярҙан һөйөнсө алырға утарға сапҡан.

Салауат батыр үлмәгәс,
Зәғифләнеп ҡалмаған,
Һаман заводсыларға
Ҡыҫымын яһап торғас,
Заводсыға дуҫ булған
Күп тархандар берләшеп,
Салауатҡа ҡарышы
Кәңәш туплай башлаған.

Салауатҡа йәш саҡта
Һағынбай тигән тархан
Гөлбәзир тигән ҡыҙын
Бирмәк булып туй яһап,
Ҡолағыны тешләтеп,
Юлай менән икәүһе
Ҡоҙалашып йөрөгән.
Баяр менән Юлайҙың
Аралары һыуынғас,
«Баяр ҡуймаҫ, Юлайҙы
Түрәлектән төшөртөр,
Якшы булһам баярға,
Баяр мине түрә итеп
Янаралдан һайлатыр», —
Тип уйлаған Һағынбай,
Саҡырһа ла ҡунаҡҡа,
Бармаҫ өсөн Юлайға:
«Оло улың үлгән һуң,
Көндәш итеп ҡыҙыма,
Салауатка катынға
Килененде алған һуң,[13]
Салауатка ҡыҙымды
Кире ҡайтам биреүҙән», —
Тип, ҡунаҡка бармаҫка,
Салауат, Юлайҙар менән
Аралашып йөрөмәҫкә
Һылтау тапҡан Һағынбай.
Салауат сер бирмәгәс,
Заводсыға бөтөнләй
Башҡорттарҙың ерендә
Һунарға ла йөрөргә,
Мал-тыуарын көтөргә,
Ағас ҡырҡып алырға
Ирек бирмәй башлағас,
Заводсылар йыйылып
Кәңәш-төңәш иткәндәр:
«Ҡапыл яуға бармайсы,
Һағынбайҙы димләшеп,
Салауатҡа кәләшкә
Гөлбәзирҙе бирҙереп,

Ҡоҙа-аҙна яһашып,
Ҡулға алайыҡ», — тигәндәр,
Һағынбай күнгән был эшкә —
Гөлбәзирҙе бирергә
Салауатҡа кәләшкә.

Еңгәһе үтә кәңәште
Гөлбәзир ҙә ишеткән,
Салауатҡа илсе итеп
Бер егетте ебәргән.
Һағынбай ҙа Юлайға
Ҡоҙа булыу уйыны
Үҙе барып һөйләгән.

Йылҡы елегә төшөп,
Һыйыр-һарыҡ яланға
Әллә ҡасан ҡыуылып,
Ҡояш һөңгө буйындай
Күтәрелгән сағында,
Атҡа атланып Салауат
Килеп төшкән елдереп
Һағынбай аймағына.
Туғай аша үткәндә,
Сыр-сыу килеп, гөрләшеп,
Еләк йыйған ҡыҙҙарҙы
Күреп ҡалған Салауат.
Күмәк ҡыҙҙар араһында
Бер ҡыҙ менән Гөлбәзир
Ҡуш мунсаҡтай икәүләп
Килеүҙәрен танығас,
Аттан төшөп Салауат,
Ҡуш теҙгенен атының
Эйәр ҡашына шаҡарып,
Атын сылбырҙан тотоп,
Ҡырын ятып үләнгә,
Ҡыҙҙар килеүен көткән.
Бер ҡыуаҡҡа еткәс тә,
Ҡыҙҙар шунда туҡтағас,
Араһынан берәү ҙә
Салауатты күрмәгәс,
Ҡыҙҙар күҙҙән юғалғас,
Салауат та түҙмәгән,
Оран биреп ҡыҙҙарға,
Ошо йырын йырлаған:
«Урал буйҡайының, ай, туғайы
Яңғыҙ егеттәргә йәм бирмәҫ;
Икелә генә һөйгән бергә уйнаһа,
Һыуҙар ҡороп, ҡая ярылмаҫ».

Салауат йырын ишеткәс,
Бөтә ҡыҙҙар шул саҡта,
Яуап биргәндәй итеп,
Йырлағандар ҡыуаҡта.
Урал буйлап шаңҡыған
Салауаттың тауышын
Таный һалып, Гөлбәзир
Килеп сыҡкан был яҡҡа;
Салауатты күргәс тә,
Иркәләпме баласа,
Наҙланыпмы ҡыҙҙарса,
Әллә ҡурҡып, әллә өркөп,
Салауаттың янына
Килмәй торған оҙаҡлап.
Юл буйында килгәндә,
Салауаттың күңелендә
Тыуған хисе-хыялы —
«Осрашһаҡ аулаҡта,
Гөлбәзирем, күргәс тә,
Ҡосағыма ташланыр,
Бөтә серҙәрен һөйләп,
Күҙҙәрен йәшләндерер», —
Тигән тәмле уйҙары —
Бары юҡҡа сыҡкандай
Булған төҫлө тойолған.

Салауат та һүҙ ҡушмай,
Гөлбәзир ҙә һаулашмай.
Күҙгә күҙҙәр ҡарашып
Оҙаҡ ваҡыт торғандар.
Аҙаҡ килеп Салауат,
Үпкәләгән төҫлө итеп,
Ошо йырын йырлаған:
— Ағымдарға ҡаршы тулҡын төҫлө,
Түшкәйҙәрең ниңә тулҡына?
Ысынлап та әллә үҙе шулай,
Әллә ҡурҡыуҙарың тойола?
Бешеп кенә килгән алмаларға
Алһыу типкән төҫлө йөҙҙәрең;
Алланыуы — әллә һылыу төҫө,
Әллә асыу тотҡан уйҙарың?

Ҡыуғаларҙан аша күлгә төшкән
Ай нурындай күҙең тойолдо;
Ай битендә типкән миңдәр төҫлө,
Әллә күңелең шулай уйылды?

Яҙғы ҡояштарға ҡыҙған тауҙың
Һағымындай буйың елпенде;

Әллә елдәй күреп килеүемде,
Йөрәк гөлөң шуға һелкенде?

Һандуғасты яҫҡыр ҡарсығаға
Ҡилеүемде, һылыуым, оҡшатма;
Уҫал уйҙар менән килгәндер, тип,
Йөрәгеңде, һылыуым, һыуытма.

Ҡошҡа сөйгән йылғыр ҡарсыға ла
Өстән артыҡ ҡошто яҫҡымай.
Ата-әсәңдән мин дә өс һораным,
Күп ҡабатлау миңә оҡшамай.

Гөлбәзир:

— Туғайҙарҙы баҫҡан көн томраһын,
Ҡөтәм, елдәр иҫеп баҫһын тип;
Тыныслыҡтар һаҡлап һүҙ ҡушманым,
Талпынған да йөрәген баҫһын тип.

Урал тауҡайҙарын аша сығыу
Батырҙарға кәртә юлмы ни?
Ҡаф тауындай ата бейлектәрен
Ҡыҙға еңеү анһат эшме ни?

Ҡыҙ баланың наҙы, батырҡайым, —
Сәскәләрҙең наҙы, тиңдәше;
Ҡырау тейгән сәскә төҫлө була,
Көнөн бүлһә уның көндәше.

Ҡәкүк ҡоштары ла миҙгел һайлай,
Сәскә бөтһә, теле талыға;
Һинең сәскәң дә бит егетен һынай,
Ниңә унан күңелең ялыға?

Ҡейек ҡаҙҙар ҙа бит кире ҡайта,
Тыуған еркәйҙәрен һағынып;
Һөйгән ҡыҙың мин үк түгелме ни?! —
Ата-әсәмдән һора ҡағынып.

Салауат:

— Бала саҡтарымда әсәң һинең
Ҡулдарыңдан тотоп үптерҙе;
Уҡа таҡыя алып баштарыма,
Ҡейәүкәйем, тип үк кейҙерҙе.

Мин үпкәндә йөҙөң алланманы,
Ни әйтергә телең белмәне;
Һин дә бала инең, мин дә — бала,
Йөрәгебеҙ бер ни һиҙмәне.

Ҡыҙыл таңдар төҫлө һыҙылып атты,
Бала эңере бөткәс, уйҙарым;
Урал аша ҡалыҡкан ҡояш төҫлө,
Күҙ алдыма килде буйҙарың.

Ата-әсәң уйым кире ҡаҡкас,
Күңел сөйҙөм Урал буйына;
Йырҙарымды көсләп күп йырланым,
Берәүһенә түгел, йөҙөнә.

Күҙҙәремде һирпеп күп йүгерттем
Урал ҡыҙҙарының йөҙөнә.
Ҡыйғыр ҡоштай күңелем кире ҡайтты,
Мөрхәтһенмәй, кире өйөмә.

Уралымда ҡыҙҙар күп булһа ла,
Йөрәгемдең сәбе һин генә.
Мин дә һиңә шулай булам икән,
Ҡафтау булыр тигеҙ юл ғына.

Гөлбәзир:

— Ҡошҡайҙар ҙа һайрай, йөрәге ташһа,
Моңон сәсә, тормай көн һайлап;
Егеттәр ҙә һылыуын ысын һөйһә,
Атҡа менә, тормай юкты уйлап.

Ҡара бауыр төлкө, ташҡан йөҙө
Түл сәсергә ҡырлас тауҙарҙа;
Батыр егеттәр ҙә ҡанға йөҙә
Һылыуы өсөн кәрәк саҡтарҙа.

Урал тауҙа үҫкән һылыу ҡыҙҙар
Үҙ батырын һөймәй булырмы?
Ҡыҙ күңелен алғас батыр егет,
Ҡыҙ буйһонмай тороп ҡалырмы?

[Салауат менән Гөлбәзир,
Икәү-ара йырлашып,
Уй-хистәрен аңлашып,][14]
Ҡыҙҙар менән йыйылып,
Бергә уйнап-бейешеп,
Көндө лә кис иткәндәр.
Гөлбәзирҙәр ҡайтҡан һуң,
Киске һыйыр һауғанда,
Салауат та кисләтеп,
Гөлбәзирҙең атаһы
Һағынбайҙың йортона
Килеп төшкән [ат менеп.

Салауат килгән] сағында,
Һағынбайҙың йортонда
Баяр, тархан, түрәләр
Ултырғандар һөйләшеп;
Юлай улы Салауатҡа
Гөлбәзирҙе бирергә
Бөткәндәр, ти, килешеп.
Салауат быға күнмәһә,
Баярҙарға ҡаршы
Ҡөрәшеүен ҡуймаһа,
Янаралдан көс алып,
Салауатты тоттороп,
Илдән ситкә ҡыуҙырып
Ҡотолорға, тынырға,
Ҡуйғандар, ти, нығытып.
Салауат ингәс тирмәгә,
Бүренән ҡурыҡҡан һарыҡтай,
Бары тынған, шым булған;
Заводсылар кисекмәй,
Атын ектерә һалып,
Ҡитеү яғын ҡараған.

Һағынбай ҙа таң менән
Тирә-күрше йәйләүгә
Ат саптырып, халыҡ йыйып,
Тыу бейәләр һуйҙырып,
Салауаттың килеүен
Данлы итеп туйлаған.
Ике-өс көн буйына
Бөтә тирә йәйләүҙә
Уйын-көлкө шау булған.
Салауат ҡайтыр саҡ еткәс,
Йәш-елкенсәк, ҡарт-ҡоро,
Бисә-сәсә, ҡатын-ҡыҙ,
Бөтә тирә йәйләүҙән
Бала-саға — барыһы,
Берәү ҡалмай, йыйылғас,
Салауат атына менгәс,
Бөтәһе мән һаулашып,
Ошо һүҙҙәрен әйткән:

— Атамдан ҡарт-ҡороһо,
Әсәмдән ҡарт барыһы,
Яҡты йөҙ мән ҡаршы алып,
Йылы һүҙ мән аш биреп,
Мине ҡунаҡ иттегеҙ.
Салауат, Салауат тигәне,
Баяр, байҙың ҡурҡышып,
Юлбаҫар ул тигәне, —

Мин инде шул Салауат!
Урал — илем тигәндең,
Урал — атам тигәндең,
Урал — әсәм тигәндең,
Заводсылар күкрәкте
Тапай хәҙер тигәндең,
Яуыз түрә, тархандар
Илде һата тигәндең,
Салауаттың айбары
Баярҙарҙы өркөтөп
Яҡшы булды тигәндең,
Мораҙым менән Күсемдәй,
Ҡараһаҡал, Аҡайҙай
Булыр әле тигәндең
Мин — Салауат тигәне.

Олатайҙар, әсәйҙәр!
Ағай, ҡусты, һылыуҙар!
Бейә һауып, һабанан
Ҡымыҙ ҡойоп һыйлаусы,
Йәшлек дәртен иҫкә алып,
Уйнап, көлөп йырлаусы,
Көләс йөҙлө еңгәләр!
[Ишетегеҙ, белегеҙ:]
Илде талар баярға,
Бесәй усы миҙалға
Илде һатҡан түрәгә,
Иҙеленән һыу эсеп,
Уралында ҡыҙ ҡосоп,
Мал-тыуарын үрсетеп,
Йылҡыларын эркелтеп,
Ил ҡайғыһын онотоп,
Рәхәт ятҡан байҙарға,
Бай тупһаһын ялаған,
Яҡшатланып яраған,
Улар йырын йырлаған,
Ил хәсрәтен белмәгән,
Ғәмһеҙ ятҡан ирҙәргә, —
Ҡара ҡанға батһам да,
Уларға юл ҡуймаҫҡа,
Илде һатҡан яуыздарҙы
Түшәгендә һуйырға;
Йәшенеп-боҫоп, иленең
Ауыр көнөн белмәүсе,
Ил йөҙөнән көлөүсе,
Ике телле ирҙәрҙең
Яуыз телен ҡырҡырға
Илем өсөн ант иткән

Салауат батыр мин булам,
Салауат батыр мин булам![15]

Шулай тигән дә Салауат, бары менән хушлашып, ҡайтып киткән...[16]

Салауат ҡайтып төшһә, атаһына, ер һатыуҙы һорап, заводсынан илсе килгән икән. Юлай ил халҡын йыйған, кәңәш бара, ти. Берәүҙәр: «Һатайыҡ. Барыбер баяр урманды баҫып ала, ҡырҡып бөтөрә, туғайға малын ебәрә бит», — ти. Ә икенселәре: «Юҡ, һатмайыҡ!» — тип тартҡылаша икән. Салауат ер һатыуға ҡырҡа ҡаршы һүҙ әйткән. Халыҡтың күбеһе Салауаттың һүҙен хуплаған, «Былай булғас, булмаҫ инде», — тип, Юлай баяр илсеһен буш ҡайтарып ебәргән.

Заводсылар тик ятмаған, һаман босоҡ эҙләгән. Ике арала ҡанлы һуғыштар булып торған. Заводсылар һалдаттар килтертеп, көс туплаған, Салауат та һиҙенеп, бар һунарсыны йыйған, атһыҙына ат биреп, үҙенә беркетеп ҡуйған.

Салауаттың уйҙарын аталары ла һиҙенеп ҡалған. Бер көн шулай иртә таң менән Салауаттың ат эйәрләп йөрөгәнен әсәһе күреп ҡалған да атаһына әйткән. Юлай кәңәш биреү уйы менән Салауатҡа шулай тип һүҙ асҡан:

— Ошо осорҙа бик, балам,
Тының һалҡын һиҙелә,
Атҡа менгән көндәрең
Бары ҡанлы күренә.
Баярға балта сабыу —
Батшаға ҡаршы барыу;
Уның килер бүләге —
Ҡанға батып юғалыу.
Баяр ҡылһа насарлыҡ,
Аҙыраҡ сабыр итәйек,
Яҙған ғаризаларҙың
Яуабыны көтәйек.
Һин йәшһең әле, мин иһә
Илдә күп яу булғанды,
Ил күмергә әйләнеп,
Урал ҡанға буялып,
Батырҙары туралып,
Анау көнгө ҡарт төҫлө,
Күбе ҡулһыҙ, аяҡһыҙ,
Танау, күҙһеҙ, ҡолаҡһыҙ
Булып зәғиф ҡалғанды
Ишетеп түгел, күргәнмен.

Ете йыл йөрөнөм мин,
Немец яуында булып;
Шунда алған дан менән

Ғәйебемде юйған һуң,
Илдә түрә булдым мин[17].
[Һиҙеп торам уйыңды:]
Атты һайлап алғанһың,
[Эйәрләп тә ҡуйғанһың,]
Янаралдың алдында
Миҙал биргән батшама
Минең биргән антымды
Инде боҙмаҡ буламһың?!
Ҡайт һин, улым, ул уйҙан.

Салауат:

— Атай, күп йыл серәштем
Ҡаршы төшмәй һүҙеңә,
Атай, инде юл ҡуйҙым
Үҙем тапҡан уйыма.
Атай, анау бармаҡһыҙ,
Йөйлө маңлай ҡарт саҡлы
Күп яу күреп, ил гиҙгән,
Байлыҡ менән дан тотҡан
Ҡарт булһаң да, белмәйһең.
Мин йәш булып ат меней,
Батыр булып көрәшеп,
Айыу һуғып дан алып,
Урал буйы йәйләүҙе,
Аҡ тирмәләрҙе һайлап,
Атым елгән сағында,
Оло юлдар буйында
Күтәрелгән саңдарҙың
Ниндәй саңдар икәнен,
Ул юлдарҙан, ил талап,
Ниндәй бейҙәр елгәнен —
Ике ятып, бер уйлап,
Башыма ла алманым.
Инде һайлап көтөүҙән
Күк бүртәне менгәнгә,
Атайым, һин шомланма.
Бер атыма атланып,
Урал аша артылып,
Йөрөп ҡайтам әйләнеп.
Атаҡайым, тел төбөң
Миҙалыңды һаҡлауҙа,
Илгә талау килһә лә,
Миҙалыңды яҡлауҙа.
Атам — түрә, тархан, тип,
Баяр, батша дуҫы, тип,
Ил талаусыны күрһәм,
Ҡул ҡаушырып тормамын,
Тота килеп түрәгә

Ҡулым бәйләп бирмәмен.
Бөтә халыҡ ут йотоп,
Ере-һыуы таланып,
Зар илашып торғанда,
Яйрап ятып тирмәмдә,
Ҡаҙы-ял мин иммәмен.
Илем кисһә ҡан йылға,
Мин дә бергә кисермен;
Илем янһа утында,
Мин дә бергә яны рмын;
Илем итһә ҙур туйын,
Саҡырылған ҡунаҡтай,
Мин дә бергә туйлармын.

Салауат киткән Уралға,
Иҙел ашып Яйыҡҡа,
Ил аралап һәр ерҙә
Осраған күп иргә.
Баяр ҡолдарын күргән,
Уларҙың хәлен белгән,
Хур ителеп яуҙарҙа,
Танау, теле ҡырҡылып,
Ҡолаҡһыҙ, телһеҙ ҡалған
Тәү осраған сал ҡарттай
Ирҙәрҙең барын күргән[18].
Баяр, тархан, батшанан,
Зар илаған халыҡтарҙың,
Асыулы йөрәктәрҙең
Күп икәнен дә белгән.
Бер-ике йыл йөрөгән,
Барын күреп аңлаған,
Әсе-сөсө барыһын,
Шунда бергә татыған.
Илгә кире ҡайтҡанда,
Типһә тимер өҙөрҙәй
Ун ете йәшлек ир булған;
Дуҫы менән дошманды
Айырырҙай сос булған!

Юлай алған шул заман
Батшанан бер ҙур фарман.
Шул фарманды тотоп,
Был хаҡта кәнәш көтөп,
Ҡесе булһа ла, аҡыллы
Салауатҡа килгән, ти,
Ошо һүҙен әйткән, ти:
— Янаралдың хаты бар:
«Әбей батшаға ҡаршы
Йәмәлкә тигән берәү

Батша булып сыҡҡан, ти.
Илдән батырҙар йыйып,
Йәмәлкәгә ҡаршы яуға
Кеше ебәр һин», — тигән.
Улым, бар һин шул яуға,
Бөтә ғәйебең юйырһың,
Миндәй, миҙал алырһың,
Үҙеңә дошман булғандың
Өҫтөнән бей булырһың.

[Атаһын тыңлапмылыр,
Башҡаһын уйлапмылыр,
Салауат киткән дауға тип,
Дауға ҡаршы яуға тип.
Атама — дан типмелер,
Уйым — башҡа типмелер,
Тағып алған түшенә
Атаһының миҙалын.][19]
Батша яуына барып
Салауат та ҡушылған.
Салауаттың миҙалын
Бары күреп аптырап,
Янаралдар һөйләшеп,
Ғәскәргә меңбаш* итеп
Билдәләп үк ҡуйғандар.
Уны шунда тотмайсы,
Бүгәс яуына ҡаршы
Яу асырға ҡушҡандар.

Юшатырҙың* башына
Салауат барып еткәндә,
Ҡояш байып, кис булған;
Ҡунарға тип, барыһы
Шунда атынан төшкән.
Шунда ятҡан сағында,
Баҫмалатып артынан,
Йөйлө маңлай, теге ҡарт —
Тупыс бармаҡ аҡ сал ҡарт —
Ҡыуып килеп етешкән.
Салауаттан барыһын
Шунда һорап белешкән.

Ҡарт:

— Ауға сыҡҡан һунарсы,
Барыр ерен белмәйсә,
Ниндәй йәнлек түлләүен
Айыра асыҡ күрмәйсә,
Атҡа менеп сыҡмаҫ ул.
Яуға сапҡан батыр ҙа,

Маңлай ҡуяр дошмандың
Тотҡан уйын белмәйсә,
Уҡ-һаҙағын атмаҫ ул.
Әсәнән тыуған шәр* бала
Ҡейем кейеп биҙәлә;
Табаҡ-һауыт башҡанан
Ашауҙары төрләнә;
Ҡейем-кейемде таныл,
Бер табаҡтан ейҙереп,
Сер һөйләшеп дуҫлаша.
Атаның алтын табағы
Мираҫ булған балаға
Таш табаҡтан ейгән ир
Һис тә серҙәш булмаҫ ул.

[Дошманым тип, һаҙағынды
Һин тоҫҡаған батыр ир] —
Таш табаҡтан ейгән ир!
Үҙе менән табаҡташ
Ҡан илаған урыҫты,
Татар, башҡорт, сыуашты
Алтын табаҡтан ейгән
Әбей батша ҡулынан,
Уға табаҡташ булған
Баяр, тархан, бейенән
Азат итәм барын тип,
Уҙаҡ йыйып ат менгән.
Алып килдем артыңдан
Бына унын яҙғанын,
«Азат булһын бары!» — тип,
Илгә оран һалғанын.

Ҡарттың һүҙен ишеткәс,
Бүгәс хатын уҡығас,
Түшендәге миҙалын
Атып бәргән Салауат.
Таң аттырған ҡарт менән,
Атҡа менгән таң менән,
Яу асмайса Бүгәскә
Тура барған нан* менән,
Бүгәсәүгә ҡушылғас,
Бөтә эште аңлашҡан.
«Беҙҙең теләк бер», — тиеп,
Унын яҡҡа ауышҡан.

Шулай көн артынан көн үтеп, Салауат Бүгәсәүҙең һәр халыҡҡа азатлыҡ, оло ғәҙеллек юллаған ғәйрәтле батыр булыуына тамам ышанғас, тағы ғәскәр тупларға тип, атаһына кәңәшкә ҡайтып киткән. Ул ҡайтҡанда, бында йәнә бик күп ирҙәрҙе атҡа атланды-

рып, яуға оҙатырға торалар икән. Шул саҡ Салауат килеп сыҡҡан да, барыһына оран һалып, ошо һүҙен һөйләгән:[20]

— Уҙамандар, ҡустылар!
Өләсәйҙәр, еңгәләр!..
Батшаға яу асҡан ир —
Бүгәс тигән ир икән,
Ҡараһаҡал, Күсемдәр,
Аҡай, Батырша, Ҡилмәт,
Тағы башҡа батырҙар,
Быуат-быуат яу асып,
Уралда ҡоштай һайрарға,
Һыуҙа балыҡтай йөҙөргә,
Ирек эҙләп, ҡан киҫеп
Сапҡан юлдан бара икән;
Батша һөйгән байҙарҙы,
Янаралды, һанатты —
Бөтәһен дә юҡ итеп,
Ҡан илаған байғошто;
Татар, мишәр, сыуашты,
Башҡорт, урыҫ — барыһын,
Динен, ҡанын айырмай,
Азат итәм, ти икән,
Үҙем күреп һөйләштем,
Бөтә Урал буйында,
Ете ырыу эсенә
Фармандарын өләштем.
Бөтә ырыу аңланы,
Уҡ-һаҙағын ҡайраны,
Илен һөйгән берәү ҙә
Бармайым, тип торманы.

Илем тигән ир батыр,
Атын менеп, теҙгенен
Һулаҡайға тартһын ул;
Ил эсендә түш йәйгән
Бөтә баяр, тарханды
Дошманым тип белһен ул;
Суҫҡа көткән урыҫты,
Йылҡы көткән башҡортто,
Һыйыр көткән татарҙы,
Йөн тетеүсе сыуашты —
Барыһын да бер тигеҙ,
Үҙенә дуҫ итһен ул.
Быуат-быуат түгелгән
Ҡандан тыуған батыр, тип,
Үҙен яҡшы белһен ул!
Ташҡа һалып баштарын,
Ҡан эсендә йоҡлаған,

Төшөн күреп уяныып,
Ағыу сәскән убырҙың
Үңәсенән сал бөркөт
Ҡымтып алды тигән төш —
Ошо икән, тиһен ул;
Илдең янған күмерен
Ҡулға алып, ат менеп,
Батша, тархан ҡәһәре —
Ошо күмер, тиһен ул.[22]

Юлай:

— Миҙал алып ант бирғәс,
Аҡ батшаға яу асып,
Дошман булмам, балаҡай;
Һүҙем ташлап яу асһаң,
Ата булмам, балаҡай!

Салауат:

— Һин батшанан дан алып,
Миҙалыңа ант иткән,
Батша яҡлы түрә һин.
Ил күкрәген талаусы,
Ил батырын һуйыусы,
Биш атанан бей булып,
Илдә байлыҡ йыйыусы
Тархандар тоҡомо һин.
Әгәр илде яҡлаһаң,
Илгә аға булырһың;
Әгәр илдән айырылһаң,
Илгә дошман булырһың.
Илгә дошман кешегә
Мин дә дошман булырмын.
Йортон-ерен үртәрмен,
Ҡан йөҙҙөрөп барыһын,
Илдең ҡонон алырмын.

Бөтәһе лә шау килеп, айбар сәсеп, Салауатҡа эйәргәс, Юлай ҙа ҡарыулашмаған, бергә атҡа менгән.[23]

Салауат киткән яу менән,
Заводсыға дау менән.
Бүгәс килеп еткәнсе,
Батша яҡлы тарханды,
Баярҙарҙы өркөтөп,
Яҡын-тирә заводтың
Хужаларын ҡыйратып,
Барын ҡулға алған ул.
Бүгәс менән ҡушылғас,
Бүгәс уны маҡтаған,

Күп ғәскәргә баш итеп
Уны тағы һайлаған.

Бик күп яуҙа ҡатышып,
Ҡаршы килгән дошманды
Ыласындай типкән ул.
Күкрәгенә уҡ тейеп,
Аттан ҡолап ауһа ла,
Йәйәү тороп ҡалһа ла,
Ҡаршы килгән дошманды
Ҡуй-һарыҡтай ҡырған ул.
Күп яуҙарҙа булған һуң,
Күп яралы булған һуң,
Хәлдән тайып ятҡан һуң,
Көстән тороп ҡалған һуң,
Дошман тамырын ҡоротмай,
Иртә яуҙан сыҡҡанға
Тәрән итеп көрһөнөп,
Йөрәге ташып, ярһынып,
Бынау йырҙы йырлаған:

«Һауаларҙа осҡан, ай, яғылбай
Ҡыялап та оса, ҡош күрһә.
Яуҙарынан ҡалған батыр егет
Ҡыуана ла икән, төш күрһә.
Өйөр ҙә генә йылҡы араһында
Һөйөп менгән атым бүртә ине;
Дошман яуҙарына, ай, сапҡанда,
Ҡайғыларым бары бөтә ине.

Ыласын да оса, күсте ҡыя,
Ҡанаттары талғас, бер төшә;
Ыласындай төҫлө батырҙар ҙа
Бер төшмәһә, аттан бер төшә».
Күп еренән яралы
Салауат башын күтәреп
Атҡа ҡабат менә алмай,
Яуға ҡаршы саба алмай,
Өйҙә ятҡан зарланып.
Араға дошман тулған һуң,
Яуға барған ирҙәрҙең
Теләге сыбар булған һуң,
Баярҙың бар ҡолдары
Баяр киткәс етәр тип,
Башҡорттары баярҙы
Үҙ еремдән ҡыуғас тип, —
Бер табандан тормайса,
Бары йортон ҡайғырткас,
Юлай ҙа ары бармайса,

Иленә кире ҡайтҡан һуң,
Көс таралған Бүгәстең,
Көсө бөткән Бүгәстең.

Балтаға һап ҡушылмай,
Яңғыҙ урман киҫмәҫ ул;
Ят ҡолаҡһыҙ өй сере
Ситкә оран булмаҫ ул;
Юлға сыҡҡан юлдашың
Бер табаҡтан аш ейеп,
Ысын серҙәш булмаһа,
Яуҙа ҡулдаш булмаҫ ул.
Бүгәстең дә юлдашы,
Алтын алып дошмандан,
Бүгәсте лә хур иткән.
Бүгәс бөткәс, Салауат
Яңғыҙ оран һалһа ла,
Бер миктәлгән иленән
Батыр йыйып алһа ла,
Ялмап килгән ялҡынға
Һаман ҡаршы торһа ла, —
Яңғыҙ батыр яу ҡаҡмаҫ.
Салауат — Салауат булһа ла,
Яңғыҙ батыр дошмандың
Яуына ҡаршы көс булмаҫ.
Күскән йылға буйҙарын,
Ямантауҙың уйҙарын
Батша яуы ҡаплаған;
Ат менәлмәҫ Салауат,
Биш йөҙ һыбай килһә лә,
Уны уратып алһа ла,
Ҡул ҡаушырып тормаған, —
Һаҙаҡтары бөткәнсе,
Ҡылыстары һынғансы,
Күкрәгендә яраһы
Егермегә тулғансы,
Йығылып иҫтән тайғансы,
Өс йөҙ кешене ҡырған![24]
Шунан һуң ғына батыр
Салауат ҡулға алынған,
Ҡулы-аяҡтарына
Тимер бығау һалынған.

Йөҙө ҡанға батһа ла,
Түрә-һәрә тыйһа ла,
Башына һуғып торһа ла,
Батырлығын юймаған,
Халыҡ менән Салауат
Былай тиеп хушлашҡан:

— Ер күкрәген ҡар ҡаплап,
Үләнен ҡауҙан яһаһа,
Ҡояшлы яҙҙың ямғыры
Тағы сәскә аттырыр.
Илдән Салауат китһә лә,
Дошман ҡойған был ҡандар,
Илде яуҙан һаҡларҙай,
Дошмандан ҡон алырҙай
Тағы батыр арттырыр!



## САЛАУАТ БАТЫР

Салауат батыр ир ине,
Менгән аты кир ине,
Яуға саҡырып өндәгәндә
Тауыштары көр ине;
Ҡаршы килгән яуҙарға
Ҡаршы сығыр ир ине,
Ҡаршы сығыр ир ине.

Салауат батыр ир ине,
Менгән аты кир ине,
Дошман менән алышҡанда
Ил эсендә бер ине;
Халҡы өсөн көн ине,
Дошман өсөн төн ине,
Дошман өсөн төн ине.

Салауат батыр ир ине,
Менгән аты кир ине,
Яурынына уҡ тейһә,
Себен тешләй, тир ине;
Күкрәгенән ҡан сыҡһа,
Тирем сыға, тир ине, ау,
Тирем сыға, тир ине.



# БАЙЫҠ АЙҘАР СӘСӘН

## I. Байыҡ сәсәндең ҡаҙаҡ аҡыны Бохар менән әйтешкәне

Байыҡ Салауаттың атаһы Юлай, унын атаһы Аҙналы менән Әй буйын биләгән Байназар хандың улы булған. Байназар тархандың биш улы булған: өлкәне — Байыҡ, икенсеһе — Таныл, өсөнсөһө — Тайып, дүртенсеһе — Ҡайып, бишенсеһе — Танһыҡ. Сәсән телле Байыҡ атаһынан йәшләй айырылған, ил гиҙгән. Үҙ алдына көн иткән Тайыбы Аҙналы тархандың ҡыҙын урлаған да был диярҙа* тормаған, ҡаҙаҡ араһына тайған. Танып менән Ҡайыбы бер яуҙа ғәйеп булған. Байназар төпсөгө Танһыҡ менән көн күргән.

Танып менән Ҡайып ғәйеп булған яуҙа Байыҡ та, Юлай ҙа булған. Яуҙан һуң, алай итеп-былай итеп, атаһы Юлайҙы аҡлаған. Байыҡ, морон төртөр ер тапмай, ҡаҙаҡ араһына ыҡлаған. Шунда йөрөгәндә, Байыҡтан ҡаҙаҡ сәсәндәре[1] көлөп, мыҫҡыл итергә уйлап, былай тигән:

— Истәк* булдың, бар булдың,
Киң далала зар булдың.
Үҙеңә йомаҡ әйтәйем,
Тапһаң, улым итәйем,
Тапмаһаң, ҡолом итәйем:
Көндөҙ ҡуйым көтөрһөң,
Кисен йөнөн тетерһең,
Йоҡом ҡалды тимәҫһең —
Көндөҙ сырым итерһең.
Киң далала ҡуш ағас,
Ҡуш ағастың ҡуш башы —
Бер ҡаҙанға һыймаҫтай
Ҡуш ҡусҡарҙың ҡуш башы
Бар икән ил ҡашҡаһы*.

Ат башындай ҡаҡ ерҙән
Яра төшкән аҡ түгел,
Ай менән көндәй икәүһе,
Яңғыҙланған таҡ түгел.

Байыҡ:

— Киң далам, тип әйткәнең —
Иленән ҡасҡан был истәк
Маҡтаһын, тип көткәнең —
Мин дә күргән ер икән,
Һин дә белгән ер икән.
Ағас-таштан тыу булғас,
Өҫтөн япҡан нар ҡылған,
Сағыл тауҙан ҡыу булғас,
Шараҡ ҡыҙҙай һын булғас,
Ҡомдан сөйәлдәй тау ҡылған,
Һум елендәй һөт аҡмаҫ,
Һыуһаған йотом һыу тапмаҫ
Дала тигәнең шул икән.
Турһыктай бурһыҡ үҫтергән,
Ҡарһаҡтың барын буҫтырған*,
Бутаһын юйған нары ман
Ишәктән моңло ҡысҡырған
Бүтән моңо булмаған,
Һип-һил торған сүл икән.
Ҡаяла талпынған бөркөтөн,
Толпарҙа елкенгән егетен
Алмаштырған бер бөтөн,
Алмаштырған бер бөтөн, —
Төйә өҫтөндә ялпаңлап,
Ҡолаҡсыны һәлпәңләп,
Ҡаҙаҡ тигән ир икән.

Ҡуш ағасым тигәнең —
Киң далала ҡуш ылаш;
Ҡаҙағыңды киптергән
Киң далала Ҡуш Алаш[2] —
Ҡуш ағастың ҡуш башы,
Тап алаштың ҡашҡаһы* —
Бер ҡаҙанға ҡуш антын
Һалып бергә ҡайнатҡан,
Туҡалдай кейәү һайлатҡан
Абылай солтан хан икән.

Шунан һуң ҡаҙаҡ бейҙәре Байыҡты тоторға әҙләй башлаған. «Илгә айҙар, йөрәккә хәнйәр булырға итә икән», — тип юҡ итергә уйлағандар. Байыҡ ҡасҡан, кире Уралға ҡайтҡан.

## 2. Байыҡ сәсәндең Салауат батырға әйткәне

Күп һыуҙар аҡҡан, күп йыл үткән. Байыҡ сәсән айҙар булып, Аҙналы улы Юлай старшина булып дан тотҡан. Берҙән-бер көн Байыҡ мәмерйәнән сығып, Ҡылыс тауҙың башына менеп, уйлап ултырған да Юлайға бармаҡ булып юлға сыҡҡан. Китеп барғанда, һунарға сыҡҡан Салауатҡа тап булған. Иҫән-һаулыҡ һорашҡан. Салауат үҙен танытып, Байыҡтың кемлеген һорағас, Байыҡ былай тигән, ти:

Һөйләһәм, һүҙ оҙайыр,
Тыңлаһаң, һинең тағы ла
Ҡолағың шәмдәй төҙәйер;
Кем булһа ла булайым,
Шуны әйтеп уҙайым:

Ил тигәндең кеме юҡ,
Кеме юҡ та, ние юҡ:
Ҡарты ла бар был илдең,
Йәше лә бар был илдең;
Туғы ла бар был илдең,
Асы ла бар был илдең;
«Бир»ҙән бүтәнде белмәгән
Бейе лә бар был илдең.
Кешенең зарын ағыҙған
Йыры ла бар был илдең.
Ҡыҙы ла бар был илдең,
Наҙы ла бар был илдең;
Ҡыҙ алам тип, туҡмалған
Таҙы ла бар был илдең.
Күсе*лә бар был илдең,
Көсө лә бар был илдең,
Күсен ситтәр талағас,
Үсе лә бар был илдең.
Урманы күп, тауы күп,
Ере алтын был илдең;
Йылғаһы күп, күле күп,
Һыуы һалҡын был илдең;
Матуры бар был илдең;
Йылғаһынан һыулаған,
Тупрағында аунаған,
Урал буйын буйлаған,
Ат өҫтөндә уйнаған,
Ҡыҙҙың һылыуын һайлаған,
Тыуған ерен һаҡлаған,
Ир намыҫын һатмаған
Батыры бар был илдең[3].

Илдең ире, тиһеңме,
Таланған күстән айырылған —
Шуларҙың бере, тиһеңме?
Туҡмалып таҙ ҡалған,
Ҡаны ағып һаҙ булған,
Яуызды күрһә, ҡарйыған,
Йөрәгенән матҡыған,
Асыуҙа ҡайнап сыныҡҡан,
Уралда аунап ереккән,
Ҡанһыраған арыҫландай
Ҡаңғырып йөрөгән ҡартыңмын!
Аты юҡҡа — атымын,
Яуызға һаман ятымын.
Торор йорто юйылған,
Балалары һуйылған,
Батырҙары ҡыуылған
Ил сәсәне, ҡартымын.
Атҡа менеп сабырҙай
Юлдаш эҙләп юлыма,
Ҡаяла башаҡ ҡайрашыр
Ҡорҙаш эҙләп ҡонома,
Ҡаңғырып йөрөгән ҡартыңмын.
Айҙар тигән атым бар,
Ҡулымдан ҡорал һалмаҫҡа
Илгә биргән антым бар!

Салауат тигән исемең
Ишетеп беләм ҡолаҡтан,
Исемеңде ишетеү —
Белеү түгел йөрәктән.
Юлыма тап килгән һуң,
Әйтә торған һүҙем бар.

Уралда үҫкән күп батыр,
Бары буйын буйлаған,
Ат өҫтөндә уйнаған,
Ҡаяла башаҡ ҡайраған,
Егет булып бары ла
Һылыу ҡыҙын һайлаған, —
Бары ла үткән, ҡалмаған.
Батырын тапҡан ил ҡалған,
Батырҙар сапҡан юл ҡалған.

Батырҙар сапҡан ил тигән,
Хандар сапҡан ҡол тигән.
Йөҙ егерме ауылды
Ҡыуҙай үртәп көйҙөргән,
Ил өҫтөнә яу ҡыуған,
Ил таларға дау һалған,

Илде ҡанға йөҙҙөргән,
Тәфкиләү ҙә сапҡан, дан тигән.
Ат йөҙҙөрөп күҙ йәшкә,
Ошаҡ тейәп тиктәҫкә,
Олатайың Шәғәле,
Унын улы Аҙналы,
Улар ҙа сапҡан, мал тигән.

Ҡол теләгән ҡол алған,
Мал теләгән мал алған,
Яу теләгән яу һалған —
Бары ла үткән, ҡалмаған.
Хан башын да ер йотҡан,
Тәфкиләүҙе лә ер упҡан,
Шәғәлене лә ҡуймаған,
Унын башына ил еткән,
Аҙналыны ла аҙаҡтан
Янаралы эт иткән.
Бары бөткән, ҡалмаған, —
Ҡаяға тамған ҡан ҡалған,
Батырҙар сапкан юл ҡалған,
Дошманға бысаҡ ҡайраған
Бөтмәй торған ил ҡалған.

Аҙналының балаһы
Инде Юлай ни көтә?
Яумы көтә, данмы көтә?
Атаһы юлын эҙләйме?
Батырҙар юлын күҙләйме?
Өйөнә табан барайым,
Йөҙөнә күҙ һалайым,
Йөрәге нисек һуҡҡанын
Тел төбөнән беләйем.
«Батырҙар юлы ереккән,
Саң баҫҡан, эҙләп тапманым,
Ҡылысы үтмәҫ, тутыҡҡан,
Ҡаяла ҡайраҡ тапмамын», —
Тиһә: «Бына — мин! — тирем, —
Батыр юлын буйлаған,
Ат өҫтөндә уйнаған
Алдыңа килгән ҡарт, — тирем, —
Ат өҫтөндә сапҡанда,
Алдыма дошман баҫҡанда,
Елем менән дошманды
Ҡолата килгән ҡарт!» — тирем.

Байыҡтың һүҙен ишеткәс, Салауат та аңлаған. Байыҡ ҡартты үҙе менән бергә алып ҡайтып киткән.

Юлай менән өсәүһе һөйләшеп, һүҙ үткәндәрен саҡырып, бергә кәңәш төйнәшеп, яу башларға булғандар.

Һуғышта былар еңелгән. Башлыҡтары Пугачев та, Салауат менән Юлай ҙа — бары ла ҡулға алынған. Әлеге Байыҡ ҡарт меҫкенгә тағы ла ҡасҡын булып йөрөргә генә ҡалған. Артынан эҙәрләү төшкәс, кемгә генә барһа ла, бары ла ҡурыҡҡас ҡурсыуҙан, Байыҡ бөтөнләй күҙ йырған. Берәү күрмәгән, белмәгән, ғәйеп булып юғалған.

## 3. Байыҡ сәсәндең ҡайтанан килеп сыҡҡаны, халыҡҡа туғанлыҡты аңлатҡаны

Күп йылдар үткән, күп һыуҙар аҡҡан. Яуҙа ғәйепләнгәндәрҙең аҫылдары аҫылған. Һөргөнгә ебәрелгәндәрҙең ҡайһылары ҡайтышып, тыныс торам тигәндә, тағы ла бер ғауға ҡупҡан. «Французлар яу асҡан. Мәскәүҙе килеп баҫҡан, батша ҡасҡан», — тигән хәбәр таралған. Ил ҡарттары йыйылып, түрә-һәрә һөйләшеп, ат-хат еткән ерҙән саҡырып, илде йыйғандар. Батша фарманын уҡып, кәңәш-төңәш иткән саҡта, ҡәбер төбөнән сыҡҡан кешеләй, башын-күҙен йөн баҫҡан, аҡ һаҡалы биленән ашҡан Байыҡ та йыйынға килгән. Танығандар булғандыр. Берәү бер һүҙ әйтмәгәс, барыһы ла аптырап, Байыҡҡа ҡапланып ҡарағас, Байыҡ былай тигән, ти:

Алыҫтан ҡарайып күренгән
Тулҡын да тулҡын тигәнем,
Ҡотоусәләр өйөргән
Йылҡы микән? — тигәнем, —
Тулҡын түгел, ил икән,
Ил йыйылған ер икән.
Ат саптырып йыйҙырған
Туй тигәне — шул микән?

Сәләм бирһәм, алмаҫтай,
Һүҙемә ҡолаҡ һалмаҫтай
Күҙгә салынған күбегеҙ
Ябай түгел, бей һымаҡ;
Араға һалған һүҙегеҙ
Балалай түгел, ир һымаҡ[4].
Ниңәлер һүлпән туйығыҙ —
Үлек сығыр өй һымаҡ!

Мин дә әйтһәм берәй һүҙ,
Туйға килгән ир һымаҡ,
Һүҙем ҡырын ҡаҡмаҫһыҙ,
Ҡағырҙай ир юҡ һымаҡ.

Арағыҙҙа кем булһын:
Тарханмы, кәрәк бей булһын,
Миңә тимәһә, тау ярыр
Ҡылыс тотҡан ир булһын, —

«Мин уҙаман», — тиерҙәй,
Һунарым алып, ҡарт булып,
Ҡанъяғаһын төйөрҙәй,
Түргә ултырып, баш тотоп,
Баш ҡойҡаһын ейерҙәй[5],
Барыбер бераү табылмаҫ!
Булһа ла, күҙемә сағылмаҫ,
Аҙамат булып танылмаҫ!

Күп йәшәгән ни белгән,
Күпте күргән шул белгән!
Шулай ҙа йөҙгә еткәндә
Белгәнем әйтеп үтмәһәм,
Хатам күҙгә төрткәнде
Тағы ла әйтеп үлмәһәм,
Үле тәнем, йыуылып,
Һыу менән генә аҡланмаҫ!
Яманаттан бүтәнем[6]
Ил телендә һаҡланмаҫ!
Ҡәберем күргән — уба, — тир,
Иҫкә лә алмаҫ, һоҡланмаҫ!

Йөҙ йыл буйы уйлаған,
Халыҡҡа шулай һөйләгән,
Ҡанға аунап эҙләгән,
Бер уйым бар тапмаған,
Һыуға ла төшөп аҡмаған,
Һаҙға ла төшөп батмаған,
Мин генә түгел эҙләгән,
Күптәр сапҡан, тапмаған.
Ул уйымдың эсендә —
Көнләшеү түгел тарлыҡтан,
Зарлыҡ та түгел ҡартлыҡтан, —
Өнө сыҡмай, ҡапланған
Ил теләге ҡарлыҡҡан.
Өҫтө ҡанға тапланған
Ил теләге тарлыҡтан.

«Хан, хан, — тигән күп ирҙәр, —
Алып килә дан, — тигән, —
Ҡаны башҡаға ҡан, — тигән, —
Беҙ алырбыҙ дан», — тигән.
Сыңғыҙ килгән: «Мин! — тигән, —
Мин ҡунаҡмын», — тимәгән.
Ил өҫтөнә ҡул йәйгән,
«Мин китәмен», — тимәгән,
Улын, бейен үҫтергән,
Ҡара ҡошон тотторған,
Барынан ант иттергән;
«Илдең ҡанын эс, — тигән, —

Сергенән ҡанда кис, — тигән, —
Ҡанын, динен һорама,
Бары беҙгә ҡол, — тигән, —
Эт һанындай хан үсһен,
Яуызлыҡта дан үсһен,
Беҙгә терәк шул», — тигән.
Быуын-быуын үткәндә,
Хандар килеп киткәндә,
Хандан илгә ни ҡалды?
Эркелеп ҡандан һаҙ ҡалды,
Ил таланып таҙ ҡалды,[7]
Өҫтөндә бөтмәҫ зар ҡалды.

Олатайҙар дихайға*
Мәскәүгә баш эймәгән,
Яҡла тип, Аҡ батшаға
Бушҡа тик ант бирмәгән!
Ай, ант, тигән, ант, тигән,
Антың йотма, тот, тигән,
Ярлыҡамаҫ ят, тигән,
Ятҡа анттан ҡайт, тигән.
Туғанға биргән аҡ антын
Менер аттай көт, тигән.
Ай, ят, тигән, ят, тигән,
Ят тигәнде бел, тигән,
Ул ят тигән — кем тигән?

Һыйлашҡанда дуҫ яҡшы,
Һөйөшкәндә ҡыш яҡшы,
Китапҡа оҙон һүҙ яҡшы,
Яуға менһәң, буҙ яҡшы;
Башыңа бәлә килгәндә,
Яман булһа ла күргәндә,
Үҙ туғаның — шул яҡшы:
Ике туған талашыр,
Атҡа менһә, ярашыр!
Туған, туған, тигәс тә,
«Ул туған кем?» — тигәс тә,
«Ата, әсә бер булған
Ҡарындашмы?» — тигәс тә,
Берәүҙең яңғыҙ балаһы
Кемде ҡарындаш тир икән?
Әсә лә һөттәш булмаһа,
Ҡеме һыуҙаш — шуны әйтер,
Йылғала һыуҙаш булмаһа,
Ҡеме ерҙәш — шуны әйтер.
Бер әсәнән түлләгән
Ҡыҙҙан бажа булмаһа,
Бер тупраҡты еҫкәгән
Ҡыҙҙан бажа — шуны әйтер.

Бер йылғанан һыулаған,
Бер тупраҡта аунаған,
Әсәләй күреп шул ерҙе,
Ырыҫын шуға төйнәгән,
Төйәкләнеп, туҡланып,
Йәндәй күреп, һоҡланып,
Йыр йырлаған, көйләгән,
Моңын-зарын үҙ-ара
Бер-беренә һөйләгән, —
Ирме булһын, ҡыҙ булһын,
Батшамы ул, кем булһын,
Шул тупраҡта тулләһен,
Илде ҡурсып үрләһен —
Бер туғаның шул булыр.

Мәскәүҙә ҡупҡан шау, тиҙәр,
Килеп баҫҡан яу, тиҙәр.
Француз булһын, кем булһын, —
Ситтән килгән ят булыр.
Унан илгә ҡот булмаҫ,
Баҫҡан ере ут булыр,
Үҙе Сыңғыҙҙай эт булыр.

Ил сигенә ят баҫҡан,
Ҡунаҡ түгел, яу аҫҡан.
Мәскәү бит оран һалған:
«Аҡ батшаға ант биргән
Ирҙәр менһен ат!» — тигән.
Батша бит һөрән һалған:
«Илде баҫты ят!» — тигән.
Минең дә һүҙем шул булыр:
Ант боҙғанға ни булыр? —
Таяныр терәге юҡ булыр,
Ҡаңғырып йөрөр Байыҡтай,
Тынлыҡ тапмай хур булыр.

Байыҡты танып, һүҙен дә ишеткәс, бөтә халыҡ умарта ҡортондай гөжләшеп күтәрелеп киткән.

## 4. Халыҡтың ир-егеттәрҙе французларға ҡаршы яуға оҙатҡаны

Йөҙйәшәр Байыҡ сәсәнден һүҙен ишеткәс, кантон башлыҡтары ат-хат еткән ергә сабарҙар саптырып, сер алышып, Иҙел терһәге Көнгәккә йыйылырға булып һүҙ ҡуйышҡандар, ти. Йәштәр, ат һайлап, нуҡта һуғылмаған аҫауҙарҙы тотоп өйрәткән. Урманда уҡ юнып, аласыкта ҡыҙаштар һаҙаҡ һуғып, тана-турпы һуйып — ит ҡаҡлап, эркет ҡайнатып — ҡорот йәйеп, ҡаймаҡ яҙып — май тас-

ҡып, тире ыҫлап — турһыҡ тегеп, көн-төн ағытмай бейә һауып — ҡымыҙ йыйып, кейем-һалым тайярлап*, яуға әҙерләнгәндәр. Байыҡ та, үҙенең атын эйәрләп, ҡулына ҡылысын тоттороп, улы Әхмәтте яуға кейендергән.

Ҡантон башлыҡтары — ҡор башы, ҡош семәрен тоттороп, батырҙарын — мең башы, ырыу ағасы семәрен тоттороп, ырыу уҙаманын — йөҙ башы, яу япрағы менән берәүҙе алдан сабар итеп, яуға ат менгәндәр. Бөтә ҡарт-ҡоро, бисә-сәсә, әбей-һәбей, ҡыҙ-ҡырҡын, бишектән төшкән, түшләп шыуған, аяҡҡа баҫҡан бала-сағаның бере ҡалмай, оҙатырға килгәндәр.

Әбей-һәбейҙәр, яуға китеүселәрҙең юлы ҡыҫҡа булһын тип, тегәр еп биргәндәр. Бисә-сәсәләр, күкрәктәрегеҙгә уҡ-һөңгө теймәһен тип, ирҙәренең түштәренә тәңкә теккәндәр. Ҡыҙ-ҡырҡындар, сер һаҡлаусы булығыҙ тип, егеттәргә нағышлы янсыҡтар биргәндәр. Бары ла уңышлы юл теләп, аҙаҡ шулай йырлағандар:

Әбейҙәр:

— Әрмеләргә китә, ай, башығыҙ,
Буҙ балалар, инде хушығыҙ.
Йылдарығыҙ айҙан тиҙ үк үтеп,
Иҫән йөрөп ҡайтһын башығыҙ.

Ҡыҙҙар:

— Атҡайҙарға менеп, беҙҙе ташлап,
Урал ашып яуға китерһеҙ,
Һай, йәнкәйем, ҡалдырып шул нәҙек билкәйең;
Киткән юлығыҙға ҡарай-ҡарай,
Күҙкәйҙәрҙе талдырып көтөрбөҙ,
Һай, йәнкәйем, онотмағыҙ нәҙекәй билкәйең.

Яу йөргәндә, сабып тирләгәндә,
Шыбаҡшыған тирең һөртөгөҙ,
Һай, йәнкәйем, хәтерләрһең нәҙек билкәйең;
Биргән урамалды ҡомартҡы итеп
Ҡалтағыҙҙа бергә тотоғоҙ,
Һай, йәнкәйем, хәтерләрһеҙ нәҙекәй билкәйең.

Урал армыттарын семәрләгән
Нағышлы ла янсыҡ бирәбеҙ,
Һай, йәнкәйем, еҫкәгәндә аңҡыр илкәйем;
Ил намыҫы бергә шул янсыҡ та
Йөрәгегеҙҙә торһон, тиәбеҙ,
Һай, йәнкәйем, айбарығыҙ көтә илкәйем.

Яуға ат менгән ир-егеттәр шулай йырлап яуап ҡайтарғандар:

Ата-бабаларҙың ҡанын һыулап
Үҫкән сауҡаларҙан уҡ юндыҡ,
Һай, илкәйем, йәмле еркәйем;

Дошмандарҙы сыр-сыу, ай, айҡарбыҙ,
Буҙ толпарҙан һайлап ат megдек,
Һай, илкәйем, йәмле еркәйем.
Яуҡайҙарға китәбеҙ, ант бирәбеҙ,
Намыҫыбыҙ яуҙа һаҡларбыҙ,
Һай, илкәйем, тыуған еркәйем;
Батырҙарҙан ҡалған йолаларҙы
Ҡанлы яуҙа беҙ ҙә аҡларбыҙ,
Һай, илкәйем, тыуған илкәйем.

Иң аҙаҡ олатайҙар шулай йырлаған:

Аткайҙарға менеп яуға китегеҙ,
Аҡлағыҙ ҙа иткән антығыҙ,
Һай, илкәйем, илкәйемдең батыр иркәйе;
Тәңкәләр ҙә төҫлө сылтырашып,
Шат көлөшөп, еңеп ҡайтығыҙ,
Һай, иркәйем, һағынып көтөр һеҙҙе илкәйең.
Ҡош юлдары ҡалҡһа күк йөҙөндә,
Ҡейек ҡоштар осор төньяҡтан,
Һай, илкәйем, батырҙарын көтөр шул саҡта;
Ҡоштар үтһә, һеҙҙән беҙ көтөрбөҙ,
Сәләм килә, тип үк, йыраҡтан,
Һай, иркәйем, хатың уҡыр илең шул саҡта.

Наполеонды еңеп, һуғыш бөткәс, уландары ҡайтҡанда, Байыҡ йөҙ ҙә ике йәштә булған, ҡурайҙа «Байыҡ» көйөн уйнап, батырҙарҙы ҡаршы алған.



## ТӘҮЕШ МӘРГӘН

Һай, тием, субар, тием, субар,
Һай, тием, субар, тием, субар.
Тибенгән аттан тир сығыр;
Аҡ мамыҡтан буҙ сығыр;
Аҡыллы ирҙән һүҙ сығыр.
Ай, аҙамат һәм бейҙәр!
Йәшлектә тәүбә ҡылығыҙ,
Тәүбәгеҙ һеҙҙең таш киҫер;
Тура ла биреп тәүбә итәйек тигәнсе,
Йөрөк* аттай дулай ҙа дулай,
Донъя үтер, ай, донъя үтер.

Бер-бер генә тауҙар бейек булыр,
Бер-бер генә тауҙар бейек булыр;
Арҙа ғына менән ҡолъя* тигән кейек булыр,
Арҙа ғына менән ҡолъя тигән кейек булыр;
Төркөстанға киткән Тәүеш мәргән,
Төркөстанға киткән Тәүеш мәргән
Һағынған саҡта көйөк булыр, ау,
Һағынған саҡта көйөк булыр!

Мин артымды ҡараһам,
Мин артымды ҡараһам,
Сағым ҡалҡҡан саң булды;
Һибәлтәмде ҡараһам,
Гел гөлйөгән мал булды.
— Бер айҙаным сапһана, Тәүеш мәргән,
Ҡоралайҙы туҙҙырсы,
Ҡоба сүлдәр саң булһын,
Питербур менән Мәскәүгә
Хатҡа ла ғынай яҙған дан булһын,
Дан булһын, ау, дан булһын!

Һай, бер әҙәмде бай итер,
Бер әҙәмде юҡ итер;
Байҙарҙың кейенгәнен-кейгәнен
Ҡамҡа менән суҡ итер,
Ашағанын-эскәнен
Ҡаҙы менән ял итер;
«Йә, бер аллам, йә бер ҡаҙир!» — тигән саҡта,
Берәүҙең яңғыҙ ҙа яңғыҙ башын
Юҡ итер, ау, юҡ итер!



## ПЕРОВСКИЙ ЙӘЙЛӘҮЕ

Перовскийҙың йәйләүе —
Был донъяның ожмахы,
Был донъяның ожмахы.
Аҡ мәсеттәй йорт һалдырған,
Янарал шул хужаһы, ау,
Һис ниҙә юҡ нужаһы.

Аҡ сарлаҡлы йорто тора
Бейек тауҙың башында,

Бейек тауҙың башында.
Офицерҙар, полковниктар
Перовский ҡашында, ау,
Перовский ҡашында.
Перовский йөрөп ята,
Төрөпкәһен борлатып,
Төрөпкәһен борлатып.
Ярандары күңел аса,
Юртаҡ аттар уйнатып, ау,
Юртаҡ аттар уйнатып.

Үҙ хөкөмө — үҙ ҡулында,
Бигерәк ғәййәр түрә икән,
Бигерәк ғәййәр түрә икән.
Бер екереп ебәрһә лә,
Үҙәккә үткәрә икән, ау,
Үҙәккә үткәрә икән.

Йәйләүенә бик ереккән,
Кәйефтәре хуш икән,
Кәйефтәре хуш икән.
Ырымбурҙан хат ташырға
Булһасы бер ҡош икән, ау,
Булһасы бер ҡош икән!
Ҡанатлы ҡошҡа — фарман юҡ,
Хыялдары буш икән,
Хыялдары буш икән.
Уйлай торғас, тапты түрә,
Һай, үҙендә баш икән, ау,
Һай, үҙендә баш икән.

Ниңә юҡҡа ялынырға
Һауалағы ҡош-ҡортҡа,
Һауалағы ҡош-ҡортҡа.
Ниең етһен, эт әрһеҙе,
Далалағы башҡортҡа, ау,
Далалағы башҡортҡа.

Ырымбур — йәйләү араһы
Йөҙ егерме саҡырым,
Йөҙ егерме саҡырым.
Саҡырым һайын атлы башҡорт
Хаттар илтә саптырып, ау,
Хаттар илтә саптырып.
Ҡулдан ҡулға күсә-күсә,
Ырымбур етә хаттар,
Әйләнеп килә хаттар.
Һай, янарал ҡыуана һуң:
«Молодец, — ти, — башҡорттар, ау,

Молодец, — ти, — башҡорттар!»
Башҡорт ҡабат атын ҡыуа
Манма тиргә батырып,
Манма тиргә батырып.
Ҡыумаҫ ине, әмер — ҡаты,
Ник ҡыумаһын, бахырың, ау,
Ник ҡыумаһын, бахырың...





# АҢЛАТМАЛАР

Башта тексҡа ҡағылған мәғлүмәттәр (әҫәрҙе ҡасан, ҡайҙа, кемдән кемдең яҙып алыуы, архив сығанағы, йәғни ҡулъяҙманың һаҡланыу урыны, шифры, тәү башлап ҡайҙа баҫылыуы һ. б.) бирелә.

Унан һуң текста тәртип һандары менән билдәләнгән һүҙҙәргә, мотивтарға, эпизодтарға, строфаларға ҡарата иҫкәрмәләр яһала. Бында варианттарҙың идея-эстетик һәм поэтик үҙенсәлектәрен тикшереүселәргә билдәреү маҡсатында, текстологик сағыштырыуҙар үткәрелә, айырымлыҡтары күрһәтелә. Әҫәрҙе яҙып алыусының тексҡа ҡарата иҫкәрмәләрен һаҡлау кәрәкле табылып, улар ҙа ошонда бирелде. Иҫкәрмә авторҙары аҙаҡ йәйәләр эсендә күрһәтелә.

Иҫкәрмәләрҙән һуңғы бүлекте **варианттар** хаҡындағы мәғлүмәттәр, уларҙың ҡыҫҡаса йөкмәткеһе тәшкил итә.

Текста йондоҙсоҡ менән билдәләнгән боронғо һүҙҙәргә, географик һәм этнографик *төшөнсәләргә* аңлатмалар **һүҙлектә** бирелә.

## ШАРТЛЫ ҠЫҪҠАРТЫУҘАР:

*Аҡманов* — Акманов И. Г. Башкирские восстания в XVIII в. Учебное пособие. Уфа: БГУ, 1987.

*Батырлар жыры, 1987* — Ҡазаҡ халыҡ әдәбиәте: Батырлар жыры. Т. 3. / Төҙөүсеһе М. Тумарова, яуаплы редакторы Ж. Агишев. Алматы: Жазушы, 1987.

*Батырҙар тураһында эпос* /Төҙөүсеһе М. Буранғолов. Ә. Ҡотош редакцияһы. Өфө: Башгосиздат, 1943.

*Башҡорт шәжәрәләре, 1960* — Башкирские шежере / Составитель, перевод текстов, автор вводного слова и комментариев Р. Г. Кузеев. Өфө, 1960.

*БХИ, 1954* — Башҡорт халыҡ ижады, 1 том / Төҙөүсеһе, редакция, кереш мәҡәлә һәм аңлатмалар биреүсе Ә. И. Харисов. Өфө, 1954.

*БХИ, Риүәйәттәр, легендалар* — Башҡорт халыҡ ижады: Риүәйәттәр, легендалар / Төҙөүсеһе, инеш мәҡәлә һәм аңлатмалар авторы Ф. А. Нәҙершина; яуаплы редакторы Ҡирәй Мәргән. Өфө, 1980.

*БХИ: Эпос, 1-се китап* — Башҡорт халыҡ ижады: Эпос, 1-се китап / Төҙөүсеһе, инеш мәҡәлә һәм аңлатмалар авторы М. М. Сәғитов; яуаплы редакторы Ә. И. Харисов. Өфө, 1972.

*БХИ: Эпос, 3-сө китап* — Башҡорт халыҡ ижады: Эпос, 3-сө китап / Төҙөүсеһе, инеш мәҡәлә һәм аңлатмалар авторы Н. Т. Зарипов; яуаплы редакторы Ғ. Б. Хөсәйенов. Өфө, 1981.

*БХИ: Әкиәттәр, 3-сө китап* — Башҡорт халыҡ ижады: Әкиәттәр, 3-сө китап / Төҙөүселәре Нур Зарипов, Марат Минһажетдинов, аңлатмалар Лев Бараг менән Нур Зариповтыҡы, яуаплы редакторҙары Ә. И. Харисов менән Ғ. Б. Хөсәйенов. Өфө, 1978.

*БХИ: Әкиәттәр, 4-се китап* — Башҡорт халыҡ ижады: Әкиәттәр, 4-се китап / Төҙөүсеһе Әхмәт Сөләймәнов, аңлатмалар Лев Бараг менән Әхмәт Сөләймәновтыҡы, яуаплы редакторы Салауат Галин. Өфө, 1981.

*Гвоздикова* — Гвоздикова И. М. Салават Юлаев. Исследование документальных источников. Уфа, 1982.

*Греков, Якубовский, 1950* — Греков Б. Д., Якубовский А. Ю. Золотая Орда и ее падение. М.: Изд-во АН СССР, 1950.

*Ғилми архив* — Рәсәй Фәндәр академияһы Өфө ғилми үҙәгенең ғилми архивы.

*Ғәбитов. Ҡыҫҡаса үрнәктәр* — Хәбибулла Ғәбитов. Халыҡ әҙәбиәтенән ҡыҫҡаса үрнәктәр // «Яңы юл» журналы. 1923, № 2 — 3.

*Д.* — дело, һаҡлау берәмеге.

*Живая старина, 1897* — Тюркская сказка о Идыге / Публ. Г. Потанина // Живая старина. Вып. III и IV. СПб., 1897.

*Жирмунский. Тюркский эпос* — Жирмунский В. М. Тюркский героический эпос. Л.: Наука, 1974.

*ЗИРГО* — Записки Императорского русского географического общества.

*Йыйылма текст* — «Иҙеүкәй менән Мораҙым» эпосының йыйылма тексы (түбәндә «Бүтән варианттар» бүлегенән 10-сы вариантты ҡарағыҙ).

*Н. Иҫәнбәт яҙмаһы* — «Иҙеүкәй менән Мораҙым» эпосының Нәҡи Иҫәнбәт тарафынан яҙып алынған тексы (түбәндә «Бүтән варианттар» бүлегенән 7-се вариантты ҡарағыҙ).

*Ногайская хрестоматия* — Ногайско-кумыкская хрестоматия / Сост. М. Османов. Спб., 1883. (Ноғай һәм ҡумыҡ телдәрендә.)

*ПСЗ* — Полное собрание законов Российской империи.

*Радлов. Образцы...* — Образцы народной литературы тюркских племен, изданные В. Радловым. В девяти частях. СПб., 1887 — 1907.

*ТТӘИ* — Рәсәй Фәндәр академияһы Өфө ғилми үҙәге Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты.

*ТХИ: Дастаннар* — Татар халыҡ иҗады: Дастаннар / Төзүчесе, кереш мәкалә һәм аңлатмалар авторы Әхмәтова Ф. В. Гыйлми редакторы Госманов М. Г. Ҡазан, 1984.

*ЦГАЛИ* — Центральный государственный архив литературы и искусства.

* * *

*Бор. т.* — боронғо төрөксә.
*Ғ.* — ғәрәпсә.

*Диал.* — диалект.
*Ҡаҙ.* — ҡаҙаҡса.
*Монг.* — монголса.
*Т.* — төркисә.
*Ф.* — фарсыса.

## Иҙеүкәй менән Мораҙым

Эпостың был тексы ике баҫма буйынса билдәле.

Беренсеһе 1940 йылда «Ҡыҙыл Башҡортостан» гәзитенең 26 апрелдән алып 23 майға саҡлы һандарында (№ 95 — 98, 100, 101, 103 — 108, 110 — 116) баҫылған. Ҡулъяҙмаһы Ғилми архивта һаҡлана: ф. 3, оп. 12, д. 220, стандарт ҡағыҙҙа 232 бит.

Гәзиттә лә, ҡулъяҙмала ла әҫәрҙең исеме аҫтына «Башҡорт халыҡ эпосы. Мөхәммәтша Бурангол тарафынан яҙып алынған варианттарҙың береһе» тип ҡуйылған, яҙып алынған теләндә (Дим һөйләшендә: һ урынына — ç, л урынына — ҙ, т. Мәçәлән: һөйләү — һөйҙәү, һайлау — һайҙау, эшләү — эштәү, тояҡлы — тояҡты) бирелеүе хаҡында иҫкәрмә яһалған, әммә ҡайҙан, ҡасан, кемдән яҙып алыныуы әйтелмәгән.

Ошо текст, Нур Зарипов тарафынан һөйләшкә хас фонетик айырмалыҡтары әҙәби тел нормаһына һалынып, 1994 йыл Башҡортостан «Китап» нәшриәтендә айырым китап булып сыкты. Был томға ла ошо текст алынды.

Икенсеһе шулай уҡ 1940 йылда «Октябрь» (хәҙерге «Ағиҙел») журналының 6 һәм 7 — 8-се һандарында баҫылған. Исеме аҫтына шулай уҡ «Башҡорт халыҡ эпосы. Был вариант Дим һәм Туҡ-Соран буйҙарында йәшәүсе башҡорттарҙан үҙҙәренең һөйләү теле буйынса Мөхәммәтша Бурангол тарафынан яҙып алынған һәм шул телдә үҙгәртелмәй бирелә» тип иҫкәрмә яһалған. Фольклор фондында ҡулъяҙмаһы ла, машинкала баҫылған тексы ла һаҡланмаған.

Сағыштырыу шуны күрһәтә: был ике текст (артабан аңлатмаларҙа һәм инеш мәҡәләлә һүҙ сыкканда, беренсеһе «гәзит баҫмаһы», икенсеһе «журнал баҫмаһы» тип исемләнә) асылда бер үк вариантты тәшкил итә. Уларҙың нигеҙендә 1910 йылда Ғимаҙи Ҡаскыновтан алынған 1762 йылғы яҙма (инеш мәҡәләлә килтерелә) ята булыр. XVIII быуатта уҡ яҙып ҡалдырылған ошо боронғо варианттан файҙаланып, сәсән журналда баҫылған тексты тәүҙә төҙөгән булырға тейеш. Сөнки унын машинкала баҫылған күпселек бите гәзит өсөн төҙөлгән ҡулъяҙмаға ингән.

Текстарҙың икеһе лә бер үк төрлө башланып, бер үк төрлө тамамлана, персонаждар, сюжет ағышы, үҙәк эпизодтар асылда шулай уҡ бер төрлө. Айырма — журнал баҫмаһында ҡайһы бер эпизодтар ташланып, ҡалған эпизодтар ҙа тарыраҡ һүрәтләнеп, текст ныҡ ҡыҫҡартылған.

[1] Ҡулъяҙмала һәм гәзит баҫмаһында ҡобайыр рим цифрҙары менән егерме алты (XXVI) бүлеккә бүленгән. Был баҫмала бүлектәргә, йөкмәткенән сығып, исем бирелде.

[2] *Ҡыпсаҡ, Ҡатай, Тамъян, Юрматы, Табын* — эпик геройҙар. Легендаларҙа һәр башҡорт ырыуы үҙенең башланғыс тарихын йыш ҡына шул исемдәге батырҙар эшмәкәрлегенә илтеп бәйләй. Бында ла ана шул легендар ырыу башлыктары кәүҙәләнә.

[3] *Хандан илсе булған, ти.* — Туҡтамыш менән берләшеп, үҙ илен талаған башҡорт бейе тарихта билдәле түгел. Әммә ҡайһы бер шәжәрәләрҙә Шәғәле бей исеме осрай. Мәҫәлән, «Юрматы ырыуы башҡорттарының шәжәрәһе»ндә ул «Чыңғыз хан заманындан ҡалған ханлар» исемлегендә Аҡһаҡ Тимер хандың замандашы итеп һаналып, башта халҡы күп булған өсөн бей тип йөрөтөлөүе, аҙаҡ, һижры менән 811 (хәҙерге йыл хисабы менән 1408 — 1409) йылда юрматы башҡорттары өҫтөнән хакимлыҡ итеүсе Әмәт Хәмәт хандан бей исеме алып, Шадлыҡ һыуы буйында урынлашыуы әйтелә. — Башҡорт шәжәрәләре, 1960, 27 — 28-се биттәр.

[4] *Күп һаҡланған* — халыҡ һаҡланған, йәғни дошман яуынан ышыҡланған, йәшенеп ҡалған.

[5] Йомаҡ әйтеп, батырҙарҙың тапҡырлығын һынау — башҡорт халыҡ эпосында һәм әкиәттәрендә традицион күренеш. Мәҫәлән, «Бағлан таҙ һәм хан ҡыҙы» тигән әкиәттә хан ҡыҙы үҙен яусылап килгән егеттәрҙе йомаҡ әйтеп һынай (БХИ: Әкиәттәр, 4-се китап, № 47: «Балҡантаҙ». Аңлатмалар бүлегендә (365-се бит) варианттары ла күрһәтелгән). Ундай йомаҡтар халыҡта үҙ аллы әҫәр рәүешендә лә йөрөй. Мәҫәлән, әле әйтелгән әкиәттәге йомаҡ үҙе генә 1925 һәм 1952 йылда ике тапҡыр яҙып алынған (Ғилми архив, ф. 3, оп. 12, ф. 302, 17-се ҡғҙ; ф. 3, оп. 12, д. 237, 84-се ҡғҙ). Шуға таянып, «Иҙеүкәй менән Мораҙым» эпосындағы Һабрау ҡарттың йомағы һәм Иҙеүкәйҙең яуабы «Ике сәсән» тигән исем аҫтында баҫылған. — БХИ, 1954.

[6] Квадрат йәйә эсендәге биш юл йыйылма текстан алынды. Ҡулъяҙмала ул өс юлдан тора:

Инде, Иҙеү, һиңә әйтәм:
Ҡораҡташ булып эшендә,
Күпте күргән ҡартыңмын.

Бында логик ҡаршылыҡ һиҙелә, икенсе юлдың мәғәнәһе аҡланмай.

[7] *Үмәр батыр* — башҡорт халыҡ эпосында был исем тәү башлап күренә. Ҡаҙаҡтарҙың Ч. Вәлиханов яҙып алған «Идука би» эпосында изге «Баба Үмәр» исемендә булып, ул Идүкәнең олатаһы итеп күрһәтелә: изге Баба Үмәрҙең улы — Баба-Тукты-Чачты-Азиз (беҙҙең вариантта — Ғәзиз баба), униң һыу батшаһы ҡыҙынан тыуған улы — Идукә. (Ҡарағыҙ: Сочинения Чокана Чингисовича Валиханова, под редакцией Н. И. Веселовского. — ЗИРГО по отд. этнографии, т. XXIX, СПб., 1904; Сказание об Едиге и Токтамыше (текст на казах. яз.). — ЗИРГО по отд. этнографии. Приложение к тому XXIX, СПб., 1905.)

Н. Иҫәнбәт яҙмаһында (7-се вариант) Мораҙымдың тыуған илде данлаған әйтемендә «Баба Ғөмәр атай» тип ҙурлап телгә алына.

[8] *Төкләҫ* — төрки халыҡтарының эпик ижадында сағылған легендар ҡарт, әүлиә. Әммә ул йыш ҡына Баба Туҡлы Чашлы Азиз тип (төрлө халыҡта төрлөсә яҙыла) йыйылма исеме менән берләштерелеп тә йөрөй.

[9] *Тора бей* башҡорт шәжәрәләрендә, легендаларҙа һәм тарихи риүәйәттәрҙә Торахан исемендә йөрөй. Ҡайһы бер легенда йәки риүәйәттәрҙә башҡорт ханы, икенселәрендә нуғай ханы тип атала. «Бөрйән, Ҡыпсаҡ, Үҫәргән һәм Тамъян ырыуҙарының шәжәрәһендә» «башҡорт халҡына билистиҡлал» (йәғни бойондороҡһоҙ) хан булыуы әйтелә, Стәрлетамаҡ янын-

дағы Торатау (шәжәрәлә — «Тура тағ») унын торған ере («анын сарае урындыр») итеп күрһәтелә («Башкорт шәжәрәләре», 1060, 77-се бит).

Р. Г. Кузеев, риүәйәттәргә таянып, Тура ханға Башкортостандын бөтә көньяғында һәм Үҙәк райондарҙа йәшәгән Кыпсак, Бөрйән, Юрматы, Үсәргән, Тамъян, Мең һ. б. кәбиләләрҙең буйһоноуын әйтә (шунда ук, 199-сы бит, 20-се аңлатма).

1883 йыл Өфөлә сыккан «Справочная книжка Уфимской губернии» тигән китапта, халык телендә йөрөгән легенда һәм риүәйәттәргә таянып, Торахан тураһында шулай хәбәр бирелгән:

«...Турахан, рассказывают, был потомок Чингиза и был под властью Сибирского хана Кучума (әле әйтелгән шәжәрәлә Күсем Тура хандың улы тип күрһәтелгән), но потом, поссорясь с Кучумом, со всей ордой, в числе 8000 кибиток, откочевал к г. Уфе, где простоял 4 месяца около горы, названной — городскою — «Туратау» (Тура — боронғо төрки телендә нығытма, крепость. — *Н. З.)*. Здесь недостаток в корме заставил хана удалиться на р. Слак, где, думая навсегда остаться, он построил себе дворец и мечеть. Турахан пришел сюда с оружием и, сделав башкир данниками, сам над собой признал власть царя Казанского. Когда русские покорили Казань... и стали посылать войско в Башкирию, тогда хан удалился к нынешнему г. Стерлитамаку. В 2,5 верстах от Стерлитамака на северо-восток близ горы «Тура-тау» виден остаток земляного вала, называемого «ногайским». (Әйтелгән китап, 333 — 334-се биттәр.) Тағы: «...здесь Турахан только простоял несколько месяцев, успев устроить этот вал, — как новые тревожные слухи об успехах русского оружия заставили его бежать и отсюда куда-то на юг, где основал свою самостоятельную орду». (Шунда ук, 343-сө бит.)

Журнал баҫмаһында Тора бейгә түбәндәгесә характеристика бирелә:

Тора бей ҙә данлы ир,
Туғыҙ йәштә әүлиә,
Утыҙ йәштә ил гиҙгән
Ғәзиз баба улының
Иң кинйәһе Төкләҫтән
Тыуып калған дана ир.
Төкләҫ бабанан тыуып,
Төйәләҫ, Һакмар йәйләүҙә
Данын сәскән ир булыр,
Ахыр сиктә атаһын
Үҙ йәйләүенә куйып,
Үҙе Иҙел буйлаған.
Тора бейҙең йәйләүе
Нөгөш, Иҙел тамағы,
Һәләүек — Нөгөш араһы,
Симдән тағы Димгәсә —
Уның булған төбәге.

(Октябрь, 1940, № 6, 31-се бит.)

[10] *Дәмми бей* (кульяҙмала *Дим бей)* тарихта билдәле шәхес түгел. Ч. Мусин вариантында (8-се вариант) беҙҙең ата-бабаларыбыҙға саклы Дим буйында йәшәгән бей итеп күрһәтелә.

[11] *Яйыҡ, Келәйле* — эпик геройҙар.

[12] *Ҡотло* — Иҙеүкәйҙең атаһы, тарихта билдәле кеше түгел. «Идиге» эпосының башҡа халыҡтарҙа йөрөгән ҡайһы бер варианттарында Ҡотло-ҡая (Ҡутлуғая, Ҡутлу-ҡая, Ҡутлу-ҡыя) исемендә Туҡтамыш хандың һунар ҡоштарын ҡараусы.

[13] *Ҡолға биргән* — ҡоллоҡҡа биргән.

[14] *Майҡы бей* тураһында «Ҡесе Табын халҡының нәсебнамәһе»ндә шундай мәғлүмәт бар: «...Майҡы Сыңғыҙ хандың иң ҙур бейҙәренән булып, Сыңғыҙ хандың ҡағиҙә өсөн тамға, ағас, ҡош, оран һәм һауыт алмыш. Тамға — һепертке миҫаллы ҡабырға, ағас — ҡарағас, ҡош — ҡарағош, оран — Салауат, һауыт — сәйғәр. Был Майҡы Сыңғыҙҙы ханлыҡҡа күтәреүҙә сәбәпсе булған. Шуның өсөн уға рәхмәт әйтелеп, салауат бирелгән. Шуның өсөн ҡағиҙәле Майҡы бей тиҙәр...» (М. Өмөтбаев. Йәдкәр. Өфө, 1984, 216-сы бит.) Майҡы бей исеме эпостың бүтән варианттарында осрамай.

[15] *Ҡуян йылы* — Көнсығыш (шул иҫәптән, мосолман) халыҡтарында ҡабул ителгән календарҙа 12 йыл бер циклды (мөсәлде) тәшкил итә. Һәр йыл бер хайуан (йәнлек) исеме менән аталған. Ҡуян йылы — мөсәлдең дүртенсе йылы. Бишенсеһе — лыу (крокодил) йылы. Боронғоларҙың хөрәфәте буйынса, лыу йылында ыҙғыш, ғауға, һуғыш көтөлгән.

[16] Тора бейҙең был яуабы журнал баҫмаһынан алынды. Ҡулъяҙмала ул нисектер төшөп ҡалған.

[17] Боронғо хөрәфәткә таянып, аяҙ йылды халыҡ ямғыр теләп яланға сыға, бер нисә көн буйы ауылдағы бөтә ҡаҙанды һыуға һалып ҡуя торған булған.

[18] Журнал вариантында Тора бейҙең Иҙеүкәйгә ризалыҡ биреүе шиғри телдә шулай аңлатыла:

Ҡәңәш-төңәш иткән һуң,
Тора бей ҙә күнгән, ти.
Туҡтамышҡа яу аһа (Иҙеүкәй),
Ике яҡ та ҡаҡшаһа,
Был ырыуҙың барыһын
Үҙемә ҡол итермен,
Теләгемә етермен, —
Тиеп уйлап ҡалған, ти.

(Октябрь, 1940, № 6, 33-сө бит.)

[19] Журнал баҫмаһында Иҙеүкәй атаһы менән Һабрау ҡартты күреп һөйләшеү теләге менән Туктамышҡа китә һәм хан һарайында ҡала.

[20] Ҡулъяҙмалағы VI — VII бүлектәр бында бергә ҡушылды.

[21] *Ҡуңыр буға быҙауы* — «Ҡуңыр буға» хикәйәтендә кәүҙәләнгән изгелекле мал образы. Кейәүгә сыҡҡан ҡыҙға бирнә итеп бирелгән Ҡуңыр буға, ялан яҡтарын ерһенмәй һәм насар ҡарағандары өсөн эйәһенә асыу итеп, үҙенән үрсегән бөтә көтөүҙе эйәртеп, Урал һырты аша ҡыҙҙың атаһына ҡайтып китә. Ана шул малдар үткән юл Көньяҡ Уралда әле лә «Ҡуңыр буға (йәки Ҡәнифә) юлы» тип йөрөтөлә.

[22] *Аҡбуҙ толпар* — әкиәттәрҙә һәм ҡобайырҙарҙа сағылған мифик ат. Был урында Урал батырҙың аты (Аҡбуҙат) тураһында һүҙ бара.

[23] *Урал батыр* — шул исемдәге эпос геройы. Ҡарағыҙ: БХИ, Эпос, 1-се китап.

[24] *Ете ырыу* — көньяҡ-көнсығыш башҡорттарының ете ырыуҙан тороуы «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу», «Алдар менән Зөһрә», «Күсәк бей» хикәйәттәрендә, шулай уҡ ҡайһы бер легендаларҙа һәм йырҙарҙа ла телгә алына. Ғилми әҙәбиәттә ете ырыу тураһында тулыраҡ мәғлүмәт «Башҡорт шәжәрәләре» китабында (194-се бит, 4-се иҫкәрмә) бирелгән.

[25] *Бер етем ир* — «Аҡбуҙат» эпосының төп геройы Һәүбән күҙ уңында тотола. Унда Сура батыр Урал батырҙың ейәне итеп күрһәтелә. Йоҡлап ятҡан ерендә уны Мәсем хан үлтереүе, ә ҡатынын (Һәүбәндең әсәһен) Шүлгән күлгә ташлауы әйтелә. Етем ҡалған Һәүбән, үҫеп егет булғас, Шүлгәндән Аҡбуҙатты алып сыға, әсәһен һәм Ҡаһҡаһа, тарафынан урланған ер ҡыҙҙарын ҡотҡара; Шүлгән батшаһын ташбаҡаға, дейеүҙәрен ярғанатҡа әйләндерә.

[26] *Яуға барған батырҙың кәпәсе берлек — тиң түгел* — баш кейеменең (кәпәс) берлеге батырҙарҙың берҙәмлеген, бер-береһенә тиңлеген аңлатмай әле тигән мәғәнәлә.

[27] *Туҡһан (Туҡһанбай), Сәфәр, Аҙнай, Ҡасҡын, Биҡҡол, Ҡаныҡай* — легендар батырҙар, Келәйле батырҙың йөҙ башлыҡтары. Легендала хәҙерге Бишбүләк, Миәкә райондарындағы ауылдар шул батырҙар исеме менән аталған, тиелә (Ғилми архив, ф. 3, оп. 12, д. 230, 19-сы бит).

[28] *Ыршаҡ бей* — тарихта билдәле шәхес түгел.

[29] *Ҡан ерән* — ҡан төҫлө, ҡыҙғылт-ерән ат. «Алпамыша» эпосының М. Буранғолов яҙып алған вариантында Алты йәшәр Алпамыша, үҙенең йылҡы өйөрөндә йүгерек ат тапмағас, Ҡалтабаның ерән атын һорай: «...Ҡыл ерәнең бирсе, ағай, бирсе, ағай!» — ти. Бында сәсән ҡыл ерән төҫөнә «ҡыҙыл йәки ҡан ерән мәғәнәһендә» тип аңлатма биргән һәм текста артабан атты «ҡан ерән» тип алған. (Ғилми архив, ф. 3, д. 445, 104-се бит.)

[30] *Ҡадирбирҙе* — Туҡтамыш хандың улы, тарихта билдәле шәхес. Эпостың бүтән милли варианттарында ла шул исемдә телгә алына.

[31] *Ынйыбикә менән Кинйәбикә* — Туҡтамыш хандың ҡыҙҙары. Н. Иҫәнбәт вариантында — Әнәкә менән Кәнәкә; Ҡ. Улъябаев һәм 1927 йыл «Башҡорт аймағы»ның 4-се һанында Ғ. Вилданов баҫтырған өҙөктәрҙә Ғәнәкә менән Тутай; Ч. Вәлиханов яҙып алған ҡаҙаҡ вариантында — Ханәкә менән Танәкә. Башҡа яҙмаларҙа исемдәре әйтелмәй.

[32] XIV быуат башында Алтын Урҙа дәүләте икегә — Аҡ Урҙаға һәм Күк Урҙаға бүленә. Эпоста ана шул тарҡалыш сағыла.

[33] Биш ағай-эненең аталарынан ҡалған бер баш мал өсөн ыҙғышыуы эпостың бүтән милли варианттарында ла бар. Айырмаһы — мираҫ булып ҡалған мал ат түгел, ә аҡһаҡ кәзә. Ә бәхәсте хәл итеү барыһында ла бер төрлө. 1897 йылда Г. Потанин тарафынан баҫтырып сығарылған ҡаҙаҡ вариантында был бәхәстең әкиәт стилендә һүрәтләнеүе ҡыҙыҡлы:

«Жили пятеро братьев с одной хромой козой на всех. Решили разделить ее между собой. Закололи. Старшему досталась голова, следующим трем братьям — три ноги, а младшему — хромая нога. Из этих частей выросли пять коз. Каждый пас свою козу. Однажды козы старших братьев потравили у соседей ниву. Всю вину старшие братья свалили на младшего. Владелец нивы пошел с жалобой к хану. Старшие братья оправдались, а младший был осужден пойти на четыре года в работники к хозяину нивы».

Артабан кинйә ҡусты Ҡуйсыбайға (Иҙеүкәйҙең йәшерен исеме) тап була. Ул тегеңә йырлай-йырлай үҙ юлына китергә ҡуша, ә ағаларына: «Ҡустығыҙ аҡланған өсөн, шатлығынан йырлап китеп бара», — ти. «Юҡ, ул түгел, беҙ аҡландыҡ», — тиҙәр ағалары. «Улай булғас, әйҙәгеҙ ҡабаттан ханға барабыҙ», — тип, Ҡуйсыбай быларҙың барыһын да яңынан Туҡтамышҡа алып килә лә бәхәсте үҙе хәл итә. Ҡуйсыбай хөкөмөнөң ғәҙеллегенә ышанып, хан кинйә ҡустыны аҡлап, тегеләрҙең дүртеһен дә иген хужаһына ялсы итеп ебәрә. (Живая старина, 1897. — Вып. III — IV. С. 299.)

Бер туған ағай-энеләрҙең аталарынан ҡалған кәзә өсөн ыҙғышыуҙары тураһындағы был сюжет төрки халыҡтары ижадында төрлө жанрҙарҙа осрай, әммә ғәҙел хөкөм һәр ваҡыт аҡыллы геройға беркетелә. Мәҫәлән: «Ерәнсә сәсән хикмәттәре» — БХИ: Әкиәттәр, 4-се китап. 43 — 44-се биттәр.

[34] *Оан* — ҡулъяҙмала шулай. Бәлки, боронғо грек ҡалаһы Юнан?

[35] *Ғәли батыр* — Мөхәммәт пәйғәмбәрҙең кейәүе, дини хикәйәт-ҡиссаларҙа ислам динен таратыусы-пропагандалаусы ғәйрәтле батыр.

[36] *Ябраил* — фәрештә; ғәрәпсә — Жибрил, христиан динендә — Гавриил.

[37] Ч. Вәлиханов яҙып алған ҡаҙаҡ вариантында был бәхәс Кен-Жанбай менән аусы Күкжалды араһында тыуа. Яйыҡ йылғаһы буйындағы үҙ ерендә Жанбай бер ҡуян күреп ҡала ла ҡоралын алып килергә өйөнә йүгерә. Ул әйләнеп килгәнсе, ҡуянды Күкжалды атып ала. Идигә (бында Иҙеүкәйҙең исеме шулай) үҙе менән бергә уйнап йөрөгән малайҙарҙың береһенә ҡуянды тоттора ла, Жанбай ҡуянды күпмерәк алыҫлыҡта күргән булһа, шул самараҡ барып баҫырға ҡуша. Жанбай теге малай ҡулындағы ҡуянға атырға тейеш. Әгәр ҡуянға түгел, малайға тигеҙһә, уға ҡон түләргә тейеш; яҙа атһа, ҡуян аусыға була. Был хөкөм менән килешмәйенсә, низағсылар Туҡтамыш ханға китә. Туҡтамыш Идигәнең хөкөмөн ғәҙел тип таба (ЗИРГО, т. XXIX. С. 236 — 237; текстың ҡаҙаҡсаһы — ЗИРГО, приложение к т. XXIX. С. 4 — 5).

Ҡуян тураһындағы бәхәс Г. Потанин варианттарында ла (беренсеһендә һәм өсөнсөһөндә) бар.

Ҡаҙаҡ варианттарынан айырмалы булараҡ, беҙҙең был вариантта һунарсыларҙың малай ҡулындағы ҡуянға атырға ҡурҡыуҙарына Иҙеүкәйҙең баһадирҙарса ҡыйыулығы-мәргәнлеге ҡаршы ҡуйылған. Әммә ҡоштоң ҡайһы һунарсыға бирелергә тейешлеге яуапһыҙ ҡалдырылған.

[38] Бер бала өсөн ике ҡатындың бәхәсләшеүе ҡаҙаҡ варианттарында ла (Г. Потанин һәм Ч. Вәлиханов, 2-се вар.) бар. Хөкөм барыһында ла бер төрлө. Был сюжет Библиянан уҡ билдәле булып, унда бәхәсте тап ошо эпостағыса хәл итеү Соломонға, ә Ҡөрьәндә Сөләймән пәйғәмбәргә теркәлә. Ҡош-ҡорттар һәм ел батшаһы Сөләймән пәйғәмбәр тураһында мосолман халыҡтарында күп төрлө риүәйәттәр һәм хикәйәттәр таралған. Был образға бәйле мотивтар «Буҙйегет» һәм «Сәйфелмөлөк» ҡиссаларында ла сағыла (БХИ: Эпос, 3-сө китап).

«Идиге» эпосының әле әйтелгән ҡаҙаҡ варианттарында йәнә бер бәхәс — ике ирҙең бер дөйә ҡолоно өсөн ыҙғышыуҙары килтерелә. Был, асылда, ике ҡатындың бер бала өсөн талашыуҙары тураһындағы сюжеттың ише булып тора. Был бәхесте Иҙеүкәй (Идиге) шулай хәл итә: ирҙәргә үҙҙәренең дөйәләрен алып килергә ҡуша ла ҡолондо бик яман туҡмарға тотона

(йәки һыуға батырырға итә). Ҡолондоң бик әсе аҡырыныуына дөйә-әсә балаһын саҡырып яҡларға килә, тегеһе тик тора. Тимәк, ҡолон — ошо дөйә хужаһыныҡы. Был бараба татарҙары вариантында ла бар (Радлов. Образцы... ч. IV. С. 27 — 45).

[39] Иҙеүкәйҙең ғәҙел хөкөмдәре эпостың күпселек варианттарында урын алған. Әммә уларҙа юғарыла әйтелгән низағтарҙы Иҙеүкәй (Идигә, Идүкә) малай сағында хәл итә. Беҙҙең С. Мирасов һәм Н. Иҫәнбәт яҙып алған варианттарҙа ла шулай, тик быларҙа ул низағ-бәхәстәр конкрет миҫалдарҙа күрһәтелмәй. Көтөүсе малайҙың (йәш егеттең) ғәҙәттән тыш зирәклеге, ғәҙел хөкөмгә һәләте тураһындағы хәбәр Туҡтамышҡа килеп етә, һәм хан егетте саҡыртып алып, һарайҙа баш хөкөмсө итеп ҡуя (6-сы, 7-се варианттарҙы ҡарағыҙ).

М. Буранғолов яҙмаһында Иҙеүкәйҙең хөкөмдәре алдағы бүлектә ханбикәнең хәүефле төшөнән һуң бирелгән. Ханбикәнең төшө эпик конфликт төйөнө булыуын иҫәпкә алһаҡ, «хөкөм» эпизодтарын ошонан һуң һүрәтләү композицион йәһәттән урынһыҙ булып күренә, сюжет үҫешен ныҡ тотҡарлап тора. Шуға күрә Иҙеүкәйҙең «хөкөмдәрен» герой менән хан һәм уның яҡындары араһындағы мөнәсәбәттәрҙе ҡуйыртҡан сәбәптәрҙең бер өлөшө һанап, ул эпизодтарҙы ошо урында айырым бүлек итеп биреү хәйерле табылды.

[40] Хан ҡыҙының Иҙеүкәйгә ғашиҡ булыуы Г. Потанин баҫтырып сығарған ҡаҙаҡ варианттарының беренсеһендә лә сағыла: ә икенсе һәм өсөнсө варианттарында Идегегә Туҡтамыштың ҡатыны ғишыҡ тота (Г. Потанин. Тюркская сказка о Идыге // Живая старина, вып. III и IV. СПб., 1897). Ханбикәнең Идегегә ғишыҡ тотоуы А. Диваев вариантында ла бар.

[41] Иҙеүкәйҙең баяғы хөкөмдәре ҡулъяҙмала ошонан һуң бирелгән (39-сы иҫкәрмәне ҡара).

[42] Ҡулъяҙмала бүлек тулыһынса сәсмә телдә, гәзит баҫмаһында — теҙмә формала.

[43] *Кукрәгендә — ҙур бысаҡ.* Дини хөрәфәткә таянып, үлгән кешенең өҫтөнә бысаҡ һалыр булғандар.

[44] Бында ҡулъяҙманың XI— XII-се бүлектәре бергә ҡушылды.

[45] *Ҡайғылатып ужарын* — йөҙөнә ҡайғырыу сырайы сығарып.

[46] Ханбикәнең был (икенсе) төшө һәм уны үҙенең юрауы Н. Иҫәнбәт яҙмаһында ла бар. Айырмаһы — төштә күргән нәмәләр, поэтик аныҡлауыстарҙан башҡа, үҙҙәре генә һанала:

« — Эй, оло хан,
Бөгәсә бер төш күрҙем,
Һиңә хәтәрле эш күрҙем,
Ҡабырғала ҡан күрҙем,
Тибенгеңдән тир күрҙем,
Ҡиң маңлайың, киң битеңдең
Йыйырылғанын мин күрҙем,
Туҫтағандай тулы күҙең
Йомолғанын мин күрҙем,
Ҡатып ҡалған ҡойҡаһы,
Ҡарайып көйгән соңҡаһы,
Һөйәкһеҙ ҡыубаш күрҙем.

Туктамыш хан:

— Бөгәсә һин төш күрһәң,
Ҡабырғала ҡан күрһәң,
Тибенгемдән тир күрһәң,
Ул ни булыр, бай бисәм, ау,
Ул ни булыр, бай бисәм?»

Ханбикәнең юрауы — сәсмә телдә: «Иҙеүкәй һинең башыңа етәсәк, һин уны, ҡайһылай ҙа булһа, илеңдән ҡыуҙыр, йә берәр хәйлә ҡор ҙа уны үлтерт. Юғиһә, үҙең юҡ булаһың, — ти» (Н. Иҫәнбәт яҙмаһы, 42 — 43-сө биттәр).

Был төш айырым рәүештә лә яҙып алынып, Х. Ғәбитовтың 1923 йыл «Яңы юл» журналында баҫылған «Халыҡ әҙәбиәтенән ҡыҫҡаса үрнәктәр» тигән мәҡәләһендә килтерелгән. Йөкмәткеһе нигеҙҙә бер булһа ла, формаһында иғтибарға лайыҡ үҙенсәлектәре бар:

1) ханға мөрәжәғәт иткән беренсе юл төшөп ҡалып, төш «Әй, төш күрҙем, төш күрҙем» тип башлана;

2) һәр юл ике тапҡыр ҡабатлана;

3) һүҙ составы һәм төҙөлөшө яғынан тәүге строфа бындағынан шаҡтай айырыла:

Әй, төш күрҙем, төш күрҙем. (2 ҡат)
Төшөмдә *ҡыҙыл ут* күрҙем. (2 ҡат)
*Ут яғалай шеш* күрҙем. (2 ҡат)
*Шеш башында* ит күрҙем. (2 ҡат)

4) бында һәм Н. Иҫәнбәт вариантында Туҡтамыш хан төштөң нимәгә булыуын ханбикәнән һораһа, Х. Ғәбитов миҫалында ул һорау төш тыңлаусының асыулы кисереше менән алмаштырылып, насар төштө төш күреүсенең үҙенә юрау менән тамамлана:

...Имәнесле төш күрһәң,
Үҙ башыңа, ҡарт убыр!
Һыу йоҡмаҫ ҡыубаш убыр!

(«Яңы юл», 1923, № 2 — 3, 61 — 62-се бб.)

Бындай үҙенсәлектәр өҙөктөң халыҡ телендә үҙ аллы йәшәүенән тыуған, әлбиттә.

[47] Иҙеүкәйҙе ағыу йәки иҫерткес эсемлек эсереп үлтерергә теләү — эпостың бөтә варианттары өсөн уртаҡ мотив. Айырма — башҡарыу рәүештәрендә. Мәҫәлән, Ч. Вәлиханов яҙып алған ҡаҙаҡ вариантында ханбикә ҡатыҡҡа үҙ һейҙеген ҡатнаштырып бирә. Ошоға оҡшашлы хәлде тағы Г. Потанин баҫтырып сығарған ҡаҙаҡ варианттарының өсөнсөһөндә һәм башҡорттарҙа Улъябаев вариантында осратабыҙ. А. Диваев яҙып алған ҡаҙаҡ вариантында был мотив башҡасараҡ: Туҡтамыш ҡатынының кәнәше менән Идигәгә бурһыған һарыҡ бауыры бирәләр, уны ашаған, йәнәһе, ауырып үләсәк. Идигә уны ваҡ ҡына киҫәктәргә турап ашай, әммә бер ни

булмай, иҫән ҡала. Шунан ханбикә бер һауытҡа үҙенең һейҙеген һалып ҡуйып, шуны иртәгәһен Идигәгә эсерергә ҡуша. Идигә һауыттан уң яҡҡа ла, һул яҡҡа ла бер аҙын һибә лә, ҡалғанын эсеп, һүҙһеҙ генә сығып китә. (135 — 136-сы иҫкәрмәләрҙе ҡарағыҙ.)

[48] Вәлиханов яҙмаһында Идекә, ҡатыҡты бысаҡ менән дүрткә телеп, уртаһын болғата ла, күтәреп эсә. Улъябаев вариантында хан ҡыҙҙары «бәүел иткән» балды Иҙеүкәй «күҙен йомоп, аяҡ өҫтө тороп, бер тындан» эсеп бөтә.

Эпик геройҙың, үҙ дошманына ҡарата асыуын белдереп, ҡатыҡты тураҡлап эсеүе — төрки халыҡтарының эпик ижадында киң таралған мотив. Ул «Күсәк бей» эпосында ла осрай. Мәҫәлән, 1939 йыл Бөрйән районы Иҫке Собханғол ауылында Рәхмәт Исламғоловтан Али Карнай яҙып алған «Бабсаҡ бей менән Ҡарағоломбәт бей» тигән вариантта Бабсаҡтың улы Күсәк, атаһының ҡонон юллап, Ҡарағоломбәткә килеп ингәс, Ҡарағоломбәттең ҡатыны уға ҡатыҡ һалып бирә. Күсәк бысаҡ менән ҡатыҡты дүрт өлөшкә бүлеп, бер өлөшөн «аш хаҡы өсөн» генә эсеп сығып китә. (Ғилми архив, ф. 3, оп. 12, д. 300.)

[49] Ч. Вәлиханов вариантында ханбикәнең «ҡатыҡ татлымы?» тигән һорауына Идекә: «Әгәр дә идуси (һауыты) иски булмаса тавур (ярарлыҡ) икән», — тип яуап бирә лә, шулай уҡ сығып китә. (ЗИРГО, XXIX томға ҡушымта, ҡаҙаҡса текст, 9 — 10-сы биттәр.)

[50] Ҡаҙаҡ варианттарында һәм Н. Иҫәнбәт яҙмаһында Иҙеүкәйҙең ҡылығын ханбикә аңлата.

[51] Артабан ҡулъяҙмала Ынйыбикәнең һарай ҡыҙҙарына Иҙеүкәйҙең мәргәнлеген маҡтап һөйләүе, шул саҡ Кинйәбикәнең, илап, атаһы менән әсәһенең Иҙеүкәйҙе үлтерергә йыйыныуҙарын апаһына йыр менән әшкәртеүе, шунан һеңлеһенән төпсәшеп һорашҡандан һуң, Ынйының туй барған ергә сығып йүгереүе, ләкин ул бында килеп еткәнсе, Иҫәнбайҙың кирәгә тирәләп йөрөп, Иҙеүкәйгә уны көткән яман эш (заговор) хаҡында иҫкәртеп өлгөргәнлеге хикәйә ителә. Әҙәбиләштерелгәне ныҡ һиҙелгәне һәм сюжет ағышына һис ни өҫтәмәгәне иҫәпкә алынып, машинкала бит ярымлыҡ был эпизодты алып ташлау хәйерле һаналды. Йыйылма текста ла уға урын бирелмәгән.

[52] Ч. Вәлиханов вариантында Идекәне алты йәшлек дуҫы Аңғысын шулай уҡ йыр менән иҫкәртә; батырҙың Тарлан буҙын әҙерләп, башҡа аттарҙың һул яҡ өҙәңгеләрен киҫеп сыға (ЗИРГО, XXIX томға ҡушымта, 11-се бит).

Ошоға оҡшаш Аңғыһын исемен К. Улъябаев һөйләгән башҡорт вариантында ла осратабыҙ. Ул да Иҙеүкәй атының (исеме әйтелмәй) «айыл тартмаларын тартып», башҡаларҙыҡының «менер яҡ өҙәңгеләрен ҡырҡып» сыға ла, түбәндәге әйтемсәген әйтеп, Иҙеүкәйҙе иҫкәртә:

Минең дә исемем Аңғыһын,
Байҡап та бер эс һуңғыһын.

(Ғилми архив, ф. 3, оп. 12, д. 230, 5-се бит.)

Н. Иҫәнбәт варианттарында Иҙеүкәйҙе иҫкәртеүсе — уның дуҫы, Туҡтамыштың ҡоло Ыласын. Ул да, ҡунаҡ аттарының ауыҙлыҡ-өҙәңгеләрен

киҫеп, Иҙеүкәйҙең Буҙтолпары менән үҙ атын әҙерләп, мәжлескә инә лә йыр менән шулай аңлата:

Табаны ялпаҡ Буҙтолпар,
Төн ҡайтыуға көн һиңә,
Ҡара бөркөт ҡанатынан
Әҙерләнгән йөн[1] һиңә.
Миңә ваҡыт көйләргә,
Һиңә ваҡыт һөйләргә,
Өҫтөңдәге ҡамҡа туның
Түрҙә ултырған бейҙәргә.
Минең атым Ыласын,
Минең көйҙө беләһең.

(Н. Иҫәнбәт яҙмаһы, 43-сө бит.)

[53] Ҡ. Улъябаев вариантында Иҙеүкәй, атҡа менгәс, Туҡтамышҡа асыулы әйтемен әйтә:

Был барғандан барырмын,
Был барғандан барырмын.
Сә Тимер ханға барырмын.
Хоҙай тәғәлә юл бирһә,
Сә Тимер ханға барырмын.
Башыңды бауҙай киҫермен,
Ҡаныңды һыуҙай түгермен.
Утауыңды ауҙарып,
Турылығыңды туҡым ҡылырмын.
Сығарағыңды һындырып,
Уғыңды утын ҡылырмын.
Табаныңды телеп, ҡыл ҡуйып,
Ҡуй күтенә һалырмын.

(Әйтелгән фонд, д. 230, 5-се бит.)

Н. Иҫәнбәт яҙмаһында Иҙеүкәй Ыласын йырынан һуң, «ҡапыл ырғып тора ла, бер аяғын тупһаға, икенсе аяғын Буҙтолпарҙың өҙәңгеһенә баҫып, «Хуш булығыҙ!» тип, мәжлес менән хушлаша. Улар (мәжлестәгеләр. — *Н. З.)* Иҙеүкәйҙе күрергә өлгөрмәйҙәр, уның артынан улы Мораҙым да осҡан ҡош кеүек күҙҙән юғала». (Н. Иҫәнбәт яҙмаһы, 44-се бит.) 137-се иҫкәрмәне лә ҡарағыҙ.

[54] Ҡулъяҙмала был эпизодтар XII бүлеккә ингән.

[55] Ҡулъяҙмала был һүҙҙәр — теҙмә формала. Әммә оҙон (бер бит) һәм стилистик ҡытыршы булғанлыҡтан, төп мәғәнәһен һаҡлап, прозаға әйләндерелде.

[56] Туҡтамыш хандың батырҙарға мөрәжәғәте байтаҡ вариантта урын ала. Ч. Вәлиханов яҙмаһында, мәҫәлән, Туҡтамыш туғыҙ батырға (Исантай

---

[1] *Йөн* — ҡулъяҙмала шулай.

улы Ҡудайбирдегә, Муйтандарҙың ике батырына (исемдәре әйтелмәй), Арғындар башлығы Ҡара Ҡужаға, Ҡара Ҡыпсаҡҡа, Аҡбалтыр улы Уваҡ-ҡа, Мунжур улы Чуваҡҡа, Кинкәстең улы Жанбайға) айырым өндәшеп, һәр береһенең характер үҙенсәлегенә, йә батырлыҡ данына баҫым яһай.

Н. Иҫәнбәт вариантында түбәндәгесә:

«...Туҡтамыш хан, батырҙарын юл-ярағы күреп, Иҙеүкәйҙең башын киҫеп, үҙенә алып ҡайтырға ҡуша. Был эште үҙенең батырҙарынан Мөйтән бейҙең улы Байсаҡ[1] бейгә тапшырырға уйлай.

Туҡтамыш хан Мөйтән бей улы Байсаҡ бейгә:

Ҡуш-ҡуш бысаҡ аҫынған,
Ҡушлатып яндар тағынған,
Күскәндә күскә баш булған,
Илгә атын аттырған,
Салтанатын хан улынан арттырған,
Мөйтәндән тыуған Бапсаҡ би
Дошманға ҡаршы бар, тине.
Барып йәнен ал, тине.

Юрматы улына:

Күскәндә күсте һаҡлаған,
Йөрәгенә ышанып,
Муйынына һаҙаҡ таҡмаған,
Яу туҙанын күргәндә,
Яуға болоттай үкергән,
Юрматы улы Ҡарағым,
Ҡараңғыла сырағым,
Бар, бауырым, барһана,
Дошманға ҡурҡыу һалһана!

Ир Ҡарабай батырға:

Тамъяндарҙың башы һин,
Ир Ҡарабай батырым,
Һин бер тороп тулғансы,
Булат ҡылыс ҡулға алсы!

Ҡара ҡыпсаҡҡа:

Ҡараңғыла юл асҡан,
Хөфейәлә* һүҙ тапкан,
Яурының киң, олпатлы,
Арыҫландай сифатлы,
Әҙәм телен алмаған,
Үҙ ырауы* булмаһа,

[1] Ҡулъяҙмала «Байсаҡ» тип яҙылған. (Машинкала баҫылған нөсхәһендә лә шулай.) Тик һуңынан кемдер ғәрәпсә .. (й) хәрефенә өсөнсө түрткөнө өҫтәп, «п» хәрефенә әйләндергән, «Бапсаҡ» килеп сыҡҡан (Н. З.).

Ҡушыу менән йөрмәгән,
Ҡара ҡыпсаҡ ҡаҙанысым,
Һин бер тороп ҡуҙғалсы!

Ҡатай улы менән Табын улына:

Ҡарт арыҫландай ҡашғарған,
Күп ҙур эштәр башҡарған,
Көн дә һеңгө һындырған,
Һеңгөгә кеше мендергән,
Ил күңелен тындырған,
Алмаған яу ҡуймаған,
Эсһә, ҡанға туймаған,
Ҡатай улы Тыуағым,
Табын улы Сыуағым
Икегеҙ берҙәй ҡуҙғалың,
Дошманды ҡулға алың!

Шәғәле улы Шаҡманға:

Уғын ҡырыҡ нарға аҫтырған,
Батырлығын башҡанан арттырған,
Мәжлесемдәге иркә һин,
Кәңәшемдә урта һин,
Шәғәли улы Шаҡманым,
Дошмандарға бар, тине,
Йөрәктәрен яр, тине.

(Н. Иҫәнбәт яҙмаһы, 44 — 46-сы биттәр.)

Н. Иҫәнбәт 1557 йылда башҡорттарҙың Рус дәүләтенә ҡушылыуы тураһында Иван Грозный тарафынан бирелгән грамотала Шәғәли Шаҡман исеменең булыуын иҫкәртеп үтә. Ҡалған батырҙарға ҡарата шундай аңлатма бирә:

«Бында Туҡтамыш хандың батырҙары, Янбайҙан башҡаһы, бар ҙа башҡорттар тип күрһәтелә: Мөйтән би — Сынғыҙ хан тарафынан Башҡортостанға ҡуйылған би булып, башҡорттарҙы 12 ырыуҙы бер йорт итеп короусы һәм идара итеүсе ул булған тип һөйләйҙәр. (Был турала айырым легендалар бар.) Юрматы, Тамъян, Ҡыпсаҡ, Ҡатай, Табын һүҙҙәре — башҡорт ырыуҙарының исемдәре. Был исемдәр бөгөндә лә ошолай. Башҡорт иле ул сағында Алтын Урҙа ҡарамағында булғанға башҡорт ырыуҙарының батырҙары һарай тирәһендә булған булыуы мөмкин һанала. Икенсе яктан, Туктамыштан 150 йыл һуң йәшәгән Шәғәли Шаҡмандың бында йөрөүе халыктың үҙенең ҙур ҡаһармандарын, ҙур ваҡиғалар менән бәйләп, аңларға яратыуҙарынан килә» (Шунда уҡ).

[57] *Хызыр* — ғәрәпсә «хидр» (йәшел) һүҙенән. Легендар пәйғәмбәр, әүлиә, изге ҡарт. Яҡын Көнсығыш һәм Урта Азия халыҡтарының, шулай уҡ башҡорт халыҡ ижадында, бигерәк тә — героик эпоста һәм әкиәттәрҙә, ап-аҡ һаҡаллы, йәшел таяҡлы ҡарт һынында алға баҫтырыла. Йыш ҡына «Хызыр-Ильяс тип атала, бик ауыр хәлдә ҡалған геройға, етемдәргә, саф

күңелле ғашиктарға мөғжизәле ярҙам күрһәтә. Христиан халыктары ижадында — «Илья-пророк».

[58] Строфала телгә алынған *Ҡарағоломбәт, Бабсаҡ, Күсәк* — «Күсәк бей» эпосында кәүҙәләнгән геройҙар. Ләкин ул әҫәрҙә Ҡарағоломбәттең бала һуйып хан булыуы әйтелмәй. Ҡарағоломбәттең ағаһы — Аҡҡоломбәт, уның кесе улы (кинйәһе) Бабсаҡ булыуы шулай уҡ шик тыуҙыра. Сөнки «Күсәк бей» геройҙары Ҡарағоломбәт менән Бабсаҡ — икеһе ике ырыу (бөрйән һәм ҡыпсаҡ ырыуҙары) батырҙары. Бында башҡорттарҙың меңле ырыуына баш булырға тырышып, үҙ-ара низағлашҡан бер туған нуғай мырҙалары Ҡаракилмәт (Ҡарағоломбәт) менән Аҡһаҡ Килмәт хаҡында меңле ырыуы шәжәрәһенә ингән риүәйәт күҙ уңында тотола булһа кәрәк (Башҡорт шәжәрәләре, № 111). Күрәһең, геройҙарҙы оҡшаш исемле булыу арҡаһында, «Күсәк бей» поэмаһы менән риүәйәттәге ваҡиғалар буталған.

Ҡобайырҙа «ырыуын бүре йән яһаған» тигән юл иғтибарҙы тарта. Ҡарағоломбәттең йыртҡыс тәбиғәтен аныҡлаусы «бүре йән» эпитеты «бөрйән» этнонимына бығаса һис ҡайҙа әйтелмәгән яңы мәғәнә индерә. «Күсәк бей» эпосында «бөрйән» этнонимы Бабсаҡ улы Күсәк бейҙең Ҡарағоломбәт ырыуын ҡырып бөтөрөп, тик бер йәнде (Ҡарағоломбәттең көтөүсе малайын) ярлыҡап ҡалдырыуы менән аңлатыла.

[59] *Аблай хан* — рус йылъяҙмаларында шул исемдәге Себер ханы (царевич Сибирский) булһа кәрәк, Н. Иҫәнбәт вариантында — «Абыл хан». Ләкин Себер ханлығы XV быуаттың 20-се йылдарында барлыҡҡа килгән.

[60] *Ҡарахан* — X — XI быуаттарҙа Ҡараханидтар дәүләтен башлап ебәргән хан (955 йәки 956 йылда үлгән) булһа кәрәк. Һәр хәлдә Сыңғыҙ хандан бер нисә быуатҡа һуңыраҡ йәшәгән Аблай (Абыла) ханды, «унан аҙаҡ» күпкә элегерәк булған Ҡараханды бер епкә теҙгәндәй телгә алыу фольклорҙа йыш күҙәтелгән анахронизм күренеше булып тора. Эпостың бүтән версияларында ла Һабрау үҙенең ғүмерендә күп хандарҙы күреүен әйтә.

[61] *Йөҙҙән йәшем үткәндә, ...ҡоро һөлдә йөрөгәндә...* — варианттарҙа Һабрау ҡарттың йәше төрлөсә: С. Мирасов вариантында уға 185 йәш, Н. Иҫәнбәт яҙмаһында — 195, Ҡаҙаҡтарҙың Вәлиханов яҙып алған бер вариантында 185, икенсеһендә 500 йәш, ә Диваев яҙмаһында хатта «мең йәшкә кергән ҡарт» тип әйтелә.

Ҡарттың йәшен ҙурайтып, ифрат күп йәшәгән кеше итеп күрһәтеү халыҡтың үҙ сәсәнен ололауын, аҡһаҡалдар аҡылын, уларҙың күпте белеүен үҙенсә дәлилләргә тырышыуын сағылдыра. Бындай хәлде башҡа эпостарҙа ла осратабыҙ. Мәҫәлән, «Аҡбуҙат» эпосында Тарауыл ҡарт йәше әйтелмәһә лә, шулай уҡ бик оҙаҡ йәшәп, күп быуындарҙы күргән, күпте белгән ҡарт булып һүрәтләнә. Әммә Һабрау ҡарттың күп йәшәп, ҡоро һөлдәгә ҡалыуы Баба Төкләҫтең ҡарғышы менән бәйләнгән булыуы ла мөмкин (XIII бүлекте ҡарағыҙ).

Башҡорт һәм башҡа төрки халыктары ижадында Һабрау йәки Тарауыл шикелле ил ҡарттары менән бер рәттән шулай уҡ күп йәшәгән Әүлиә, күрәҙәсе образы ла осрай. Мәҫәлән, «Алдар менән Зөһрә» эпосында Зөһрәгә тап булған сихырсы ҡарт 167 мөсәл (бер мөсәл 12 йыл) ғүмер йәшәгән, йәғни ике мең дүрт йәшкә еткән. Әммә былары, тегеләрҙән айырмалы рәүештә, ғәҙәттә тылсымға, көҙрәтле сығанаҡҡа таянып эш итәләр.

[62] Ҡулъяҙмала, гәзит һәм журнал баҫмаһында, йыйылма текста ла шулай, «Тәхетеңә мираҫың» тип бирелгән. Дөрөҫө «вариҫың» булырға тейеш.

[63] *Сатмыр хан* — Урта Азия тарихында билдәле булған Тамерландың (Аҡһаҡ Тимерҙең) халыҡ ижадында сағылған исеме. Башҡа варианттарҙа — *Сә Тимер хан.* Са (сә) фарсыса шаһ (батша) һүҙенән боҙолоп, исемдәргә алдан ҡушылғанда (префикс) иң яҡшы, иң юғары, беренсе тигәнде аңлата. Бында ла шул уҡ яһалышта: Са + тмыр (тимер) + хан. Икенсе осраҡта Аҡһаҡ Тимерҙең *Сын-Тимер хан* тип исемләнеүе фарсыса алъялғауҙың һуңға табан төркиләшеп китеүен күрһәтә.

[64] *Иҙелдән...* — был урында Ағиҙел түгел, Волга йылғаһы.

[65] Н. Иҫәнбәт яҙмаһында Туҡтамыштың батырҙарға үпкә һүҙе һәм вәғәҙәһе юҡ. Мөрәжәғәте бойороҡ формаһында:

Эй, туғыҙ ир, туғыҙ ир,
Миңә мөдәт бирегеҙ,
Һеҙ, туғыҙ ир, Иҙеүкәйҙе
Ҡашыма алып килегеҙ.

(52-се б.)

[66] Журнал баҫмаһында Иҙеүкәй артынан Янбай ғына, Н. Иҫәнбәт яҙмаһында туғыҙ ир ҡыуа сыға. Араларында — Янбай. Ч. Вәлиханов, В. Радлов варианттарында ла шулай. Г. Потанин, Ә. Диваев варианттарында — Янбай (Джанбай) үҙе генә.

[67] Ҡулъяҙмалағы XIII — XIV бүлектәр бында бергә ҡушылды.

[68] *Иҙелдең аръяғында Иҙеүкәйҙең аттан төшөп торғанын күргәндәр.* Варианттарҙың барыһында ла тип әйтерлек Иҙеүкәй артынан ҡыуа сыҡҡан батырҙар ҡасҡынды, ул Иҙелде кисеп, теге (арғы) яғына сыҡҡас, ял итеп ятҡанында (ял итергә туҡтағанында) ҡыуып етәләр. Һорау тыуа: бында ниндәй йылға һәм уның ҡайһы яғы (һул яҡ ярымы, әллә уң яҡ ярымы) күҙ уңында тотола?

Билдәле булыуынса, Волга йылғаһы боронғо төрки телендә «Итил» (Идил) тип аталған. Ләкин «Иҙел» (Идел) атамаһы, ғөмүмән, ҙур, киң йылға тигәнде лә аңлата. Сарай-Беркенең Итил (Волга) йылғаһының түбәнге ағымында — һул яғында урынлашыуын, ә Иҙеүкәйҙең Сәмәрҡәндтә йәшәгән Сатмыр ханға китеүен иҫәпкә алабыҙ икән, уның Иҙел кисеп, теге яғында туҡталыуы мөмкин түгел. Сөнки был бөтөнләй кире яҡты аңлата.

Иҙеүкәйҙең көнсығыш тарафҡа йүнәлеүе Ч. Вәлиханов яҙмаһында дөрөҫ күрһәтелгән кеүек: «...Волга менән Урал араһында далала туҡтала», тиелә унда (ЗИРГО. Т. 29. С. 242). Ләкин артабан ҡыуа сыҡҡан туғыҙ ир, «Волгаға килеп еткәс, Идегенең ултырғанын күрә», Жанбай Идегенең «Волганы кисеп», Туҡтамышҡа ҡайтыуын үтенә. Тимәк, бында ла шул уҡ ҡапма-ҡаршылыҡ һиҙелә.

Беҙҙең текста иһә Иҙеүкәйҙең Яйыҡты үтеп, Иҙел аръяғында туҡталыуы әйтелә. Был осраҡта Иҙелде «Ағиҙел» тип фараз итергә мөмкин. Сөнки башҡорт халыҡ телендә һәм фольклорҙа, бигерәк тә йырҙарҙа Ағиҙел ғәҙәттә «Иҙел» тип кенә атала.

[69] Башҡа варианттарҙа Янбай Иҙегенең янына уҡ барып етмәй, ә йылға аша ҡаршы ярҙан тороп һөйләшә. Н. Иҫәнбәт, С. Дауыт, С. Миржанова яҙып алған варианттарҙа ла шулай.

[70] Иҙеүкәй — Янбай диалогы эпостың бөтә милли варианттарында шиғыр менән бирелә. Шуныһына ғәжәп итерлек: варианттар төрлө милләт вәкилдәренән төрлө ваҡытта яҙып алыныуҙарына ҡарамаҫтан, йөкмәткеһе яғынан ғына түгел, шиғри төҙөлөшө, төп поэтик деталдәре һәм психологик мотивтары менән дә бер-береһенә бик яҡын. Ә М. Буранғолов, Н. Иҫәнбәт, Ч. Вәлиханов варианттарында ул хатта һүҙмә-һүҙ тип әйтерлек ҡабатлана. Был оҡшашлыҡ Аҡмулла өлкәһе Кокчетау өйәҙе Серембет ауылында Бийсенбе(к) исемле ҡаҙаҡтан Г. Потанин яҙып алып русса баҫтырған вариантта ла бик асыҡ күренә: «...Джанбай с другого берега говорит ему (Эдыге): Вернись, Эдыге! Будешь мед пить. Тохтамыс подарит тебе белую лошадь» (бозат). Эдыге ответил ему, он не поедет. Джанбай говорит, что Тохтамыс даст ему девицу. Эдыге отвечает, что все-таки не поедет. Джанбай говорит, что Тохтамыс даст ему белого сокола. Тогда Эдыге рассердился и пропел (артабан ҡаҙаҡ теләндә):

Ҡенистынг олы кек Джанбай,
Аҡылынг джок бок Джанбай,
Ҡамчи тіер мойнынга,
Ҡан соргалар койнынга,
Сен тертоу мен джангыз
Даменг болса кел, Джанбай!

Тогда Джанбай испугался и вернулся домой».
(«Живая старина». Вып. III и IV. СПб., 1897, С. 309 — 310.)

Иҙеүкәй — Янбай диалогы «Иҙеке менән Жанбайҙың ҡобайырҙары» исемендә Тамъян (хәҙерге Баймаҡ) һәм Йылайыр кантондарында йәшәгән башҡорттарҙан Ғ. Вилданов айырым рәүештә лә яҙып алған. Ул фонетик үҙенсәлектәре менән тулы көйгә түбәндәгесә:

Иҙеке менән Жанбайҙың ҡобайырҙары:

Жанбай шунда һөйҙәҙе,
Һөйҙәгәндә был тиҙе:
«Ҡайт, Иҙекем, ҡайтһана,
Ҡайт, Иҙекем, ҡайтһана;
Ҡайтып бер Иҙел кисһәнә,
Һар аяҡты һары балды
Һарҡытып уҡ эсһәнә!
Ғәнәкә менән Тутайҙың[1]
Икәүһен берҙәй бирә лә,
Берәүһен һайҙап ҡосһана!
Ат бирә лә менһәнә;
Эйәренең ҡашы алтын,
Йүгәненең башы алтын;
Ҡолонда имгән, тайҙа имгән,
Ҡонанында арҙа имгән,

[1] 31-се иҫкәрмәне ҡарағыҙ.

Дүнәнендә өйрәткән,
Ебәктән нукта һөйрәткән;
Бишлеһендә биш бейәгә ебәргән,
Алтыһында ат иткән,
Етеһендә еткергән,
Етеп тә болан һуктырған;
Ут урынындай тояҡты
Айғыр, бөркөт ҡабаҡты,
Ҡыҫыр йылан тамаҡты,
Ҡыҫка бәкәл, өкә аяҡ,
Муйындары бер ҡолас,
Ҡуян йөнлө, бута күҙ,
Ҡыҫка кикел, туғай ял, —
Ат бирелә менһәнә!..»

[Иҙекә]:

«Ҡит, кит, Янбай, кит, Янбай!
Аҡылың дау юҡ, юҡ, Янбай,
Ҡайтып бер Иҙел кисмәм мин;
Ғәнәкә менән Тутайҙың
Икәүһен берҙәй бирһә лә,
Берһен һайҙап ҡосмам мин!..

Был барғандан китәрмен,
Был барғандан китәрмен,
Сын Тимер ханға етәрмен;
Сын Тимер хан ҡул бирһә,
Ходай тәғәлә юл бирһә,
Сын Тимер хандан көс алып,
Әнекә менән Күнәкәне
Ал яй ҙа был яй итәрмен!
Башыңды бауҙай киҫәрмен;
Ҡаныңды һыуҙай түгәрмен;
Утауыңды айҙарып,
Турылығыңды туҡым ҡыларммын!..
Саңрағыңды һындырып,
Уғыңды* утын ҡылармын;
Табаныңды телеп ҡыл ҡуйып,
Ҡуй күтенә һалармын!..»

(«Башҡорт аймағы», 1927, № 4, 47 — 48-се биттәр.)

К. Улъябаев вариантында диалог башлыса Ғ. Вилданов яҙмаһына тура килә. Был икеһенең дә бер тирәлә (хәҙерге Баймаҡ районында) яҙып алыныуы һәм текстың башҡарыусы сәсәндәр телендә 40-сы йылға тиклем артыҡ үҙгәрешһеҙ һаҡланыуы менән аңлатыла. 1959 йыл Ә. Сәйфуллиндән яҙып алынып, ошо томда баҫылған вариант был диалогтың беҙҙең көндәргәсә шаҡтай тулы һаҡланыуын раҫлай.

[71] Ҡулъяҙмала XIII бүлек тамамлана.

[72] Ҡулъяҙмала XIV бүлек ошо юлдан башлана.

[73] *Күк бурҙай.* — Эт образы башҡорт эпосында башҡа әҫәрҙәрҙә лә (мәҫәлән, «Заятүләк менән Һыуһылыу»ҙың 1938 йыл «Октябрь» журналының 6-сы һанында баҫылған һәм 1967 йыл Йылайыр районы Мәксүт ауылында Н. Шонҡаров яҙып алған варианттарҙа) осрай. Унда ла эт эпик геройҙың юлдашы булып һүрәтләнә.

[74] Был бүлектәге ваҡиғалар башҡа варианттарҙа юҡ. Улар, бәлки, 1762 йылғы ҡулъяҙмала булғандыр. Бурanғолов ҡулында бүтән вариант булыуы ла ихтимал.

Эҙләнә торғас, йыйылма текстың тәүге ҡараламаһында (күрһәтелгән фонд, д. 224) беҙгә билдәле булмаған бер варианттың машинкала баҫылған рәттән туғыҙ (50 — 58) бите табылды. (Йыйылма текстың 45, 48 — 50, 58 — 60, 123 — 125-се биттәренең таҙа яғына яҙылған.) Унда Иҙеүкәйҙең Сатҡы күлендәге һыу батшалығында Аҡбуҙат ат менән Урал батыр ҡылысы һаҡланыуын белеүе һүрәтләнә. Һыуһылыу, Иҙеүкәйҙе үҙе янында ҡалдырырға теләп: «Атамдан ялынып һораһам, ул рөхсәт итер, һин Урал батырҙың Аҡбуҙ атын менеп йөрөрһөң», — ти. Иҙеүкәй, Һабрау әйткән ат менән ҡылыстың бында һаҡланғанын белеп, бик шатлана һәм Һыуһылыуҙан аттың ҡайҙалығын һорай. Ҡыҙ әйтмәй, уны атайым менән һаҡсы ғына белә, ат янына атайымдан башҡа кеше бара алмай, ти. Ни эшләргә, ҡайҙан юл табып сығырға белмәй аптырап торғанда, Иҙеүкәй янына бер эт килеп сыға. Иҙеүкәй: «Был байғош та бында әсир микән әллә?» — тип, эттең башынан һыпырһа, эт уны эйәртеп бер мәмерйә алдына алып килә... Был 9 бит ана шулай эпостың ошо бүлегенә килеп тоташа. Айырымлыҡтар хаҡында түбәндәге иҫкәрмәләрҙе ҡарағыҙ.

[75] Ат ҡойроғонан йәки ялынан ҡыл алыу — тылсымлы әкиәттәрҙә йыш осраған мотив. Әкиәттәрҙә ул аттың үҙен саҡырыу өсөн ҡулланылһа, бында, артабан күренеүенсә, үлене терелтеү, телһеҙҙе һөйләштереү, һаңғырауҙы ишеттереү өсөн кәрәк була.

[76] Эпоста һайыҫҡанды убыр утына әйләнеүсе, кешеләргә бәлә-ҡаза килтереүсе мифик зат— ҡөҙрәтле ҡош рәүешендә алға баҫтырыу башҡорттарҙың бик боронғо ҡараштарын, тылсым эйәләренә ышаныуҙарын сағылдыра.

[77] Квадрат йәйә эсендәге строфа, бик әһәмиәтле булғанға, табылған туғыҙ биттән алынды.

[78] *Һул күҙен йоморға* — донъяға бер (уң) күҙе менән генә ҡарап, тик ыңғайҙы ғына күрергә тигәнде аңлата.

[79] *Иң доғамдың иркәһе* — доғаның (теләктәрҙең) иң яҡшыһы, изгеһе бағышланған кеше, Төкләҫтең кесе улы.

[80] *Эт һөйгән тоҡом* — бында, күрәһең, ҡайһылыр бер боронғо төрки (йә монгол) ырыуының тотем булараҡ эткә табыныуы сағыла.

[81] *Ҡола төҫө ҡайтҡандыр* — Иҙеүкәй атының — «Аҡһаҡ ҡола» эпосында Шүлгән күлдән сыҡҡан затлы ҡола йылҡы нәҫеленән булыуына ишара.

Халыҡ ижадында күҙ асып йомғансы ғәҙәттән тыш үҙгәрештәрҙең булыуы бер ҙә ғәжәп түгел: ул боронғо халыҡтың тылсымға ышаныуына бәйләнгән. Ләкин бында Иҙеүкәйҙең ҡан ерән атының ҡолаға әйләнеүен ҡарттың текстағыса аңлатыуы нисектер ышандырып етмәй: ул халыҡтың эпик ижад традицияһы менән ярашып етмәгән төҫлө.

Теге 9 биттә Иҙеүкәй болан тиреһенә яҙылған китапта «ҡанға мансып яҙылған серле һүҙҙәрҙе» күреп таң ҡалғандан һуң, ҡарт уға һандыҡ эсенән

йәнә бер аҫҡысты алырға ҡуша. «Әҙәм көсө етмәҫлек» шул аҫҡысты алып, Иҙеүкәй бер һарайҙы барып аса. Асып ебәрһә, «ер һелкенеп, күк күкрәгәндәй тауыш сыҡҡан. Һарай эсендә ауыҙынан күбек, күҙенән ут сәсеп, ажғырып торған Аҡбуҙ атты күргән, ти». Ошоноң менән беҙгә билдәле булмаған текстың 58-се (табылған өлөшөнөң 9-сы) бите тамамлана. 59-сы һәм ҡалған биттәре табылманы. Сәсмә телдә хикәйә ителгән был эпизодты логик рәүештә дауам итһәк, Иҙеүкәйҙең Урал батырҙың Аҡбуҙ атын тау ҡыуышлығынан алып сыҡҡанлығы аңлашыла. Артабан был фараз Иҙеүкәйҙең баяғы эт һәм һайыҫҡан ярҙамында Урал батырҙың имән төбөнә күмелгән (йәғни сит күҙҙәрҙән йәшерелгән) яу кейемен табыуы менән раҫлана.

[82] Ҡулъяҙмала — XVI бүлек.

[83] Иҙеүкәйҙең Сатмыр ханға барышлай Ҡабардинға тап булыуы, унан Сатмыр хандың урланған ҡыҙын ҡотҡарып, уны атаһына илтеп биреүе — күпселек варианттар өсөң уртаҡ мотив. Был мотив башҡорт һәм ҡаҙаҡ фольклорында «Тимерхан» исемендә билдәле әкиәтте хәтерләтә (ҡарағыҙ: БХИ: Әкиәттәр, 3-сө китап, № 25; текска аңлатмалар — 327 — 328 бб.). Әммә бында уның социологик күҙлектән эшкәртелгәнлеге һиҙелә. Сағыштырығыҙ:

Н. Иҫәнбәт вариантында Иҙеүкәй үҙенең 18 яраны менән Сатмыр ханға китеп барышлай 41 батыр менән бер ҡыҙға осрай. Иҙеүкәй, был ҡыҙҙың (исеме әйтелмәй) Сатмыр хан ҡыҙы икәнен, уны был батырҙар (исемдәре шулай уҡ әйтелмәй) урлап алып китеп барғандарын белеп: «Йә йәнегеҙҙе бирегеҙ, йә урлаған ҡыҙығыҙҙы бирегеҙ!» — ти. Тегеләр уҡтарын алып атырға йыйына башлағас, Иҙеүкәй менән Мораҙым (Иҙеүкәйҙең 18 яраны эсендә Мораҙым да бар) тегеләргә аталар. Мораҙымдың уғы икәүһенең кәүҙәһен үтеп, өсөнсөһөнә ҡаҙала; Иҙеүкәйҙең уғы ҡыҙҙы алған батырҙы үлтерә. Башҡалары ҡыҙҙы ташлап ҡаҫҡас, Иҙеүкәй ҡыҙҙы ҡотҡарғас, Сатмыр ханға сапҡын ебәрә. Сатмыр хан Иҙеүкәйҙе ҙур хөрмәт менән ҡаршы ала, ҙур туй яһап, ҡыҙын уға бирә, үҙен вәзир итеп ҡуя. (Н. Иҫәнбәт яҙмаһы, 61 — 62-се биттәр.)

Ҡ. Улъябаев вариантында: «Иҙеүкәй, Туктамыштан китеп, бик күп ваҡыттар барғас, бер тауҙың башында бер сатыр күренә. Шул сатырға ҡарап китә. Барһа, ебәк сатыр эсендә бер егет йоҡлап ята. Егеттең янында бер ҡыҙ, ебәк яулыҡ менән себен ҡундырмай егеткә елпетеп ултыра. Иҙеүкәй (бында Иҙеүкәйҙең исеме Иҙеүкәй, Иҙекәй, Иҙеге тип, өс формала әйтелгән) сатыр янына аты менән барып, ҡыҙҙан һорай:

— Был кем? — ти.

Шул ваҡыт ҡыҙ әйтә:

— Был — ҡалмыҡ батыры, мин — Сә Тимерхандың ҡыҙы, — ти.

Иҙекәй әйтә:

— Бында нишләп килеп ултыраһың?

Ҡыҙ әйтә:

— Ошо ҡалмыҡ батыры атамды баҫып, мине алып килеп ултыра.

Иҙекәй әйтә:

— Әгәр ҙә мин ҡалмыҡ батырын үлтерһәм, ата йортона һәм миңә барырға ризамыһың?

Ҡыҙ әйтә:

— Әгәр ҙә үлтерә алһаң, бик риза булыр инем. Был ҡалмыҡ батыры — бик сиктән сыҡҡан батыр, көслө. Үлтерә алмаҫһың.

Шул ваҡыт Иҙеүкәй:

— Уятып үлтерәйемме, әллә йоҡола көйө үлтерәйемме? — ти:

Ҡыҙ әйтә:

— Уятма, уятһаң, үлтерә алмаҫһың; йоҡлаған көйө үлтер, — ти.

Шул ваҡыт Иҙекәй ат өҫтөнән ҡалаҡ башаҡлы уғы менән үңәсенә ата. Ҡалмыҡ батыры ырғып тора ла Иҙеүкәйгә йәбешә. Иҙегене ебәрмәй, атынан төшөрөп алып, икәүһе алышып көрәшә башлай. Ҡалмыҡ батырының үңәсенән ҡаны ҡойолоп йөрөй. Шулай ҙа Иҙеүкәйгә бирешмәй. Иҙеүкәй ҡыҙға ҡарап әйтә:

— Әгәр ҙә минлек булһаң, ҡалмыҡ батырының сәсенән тотоп, үңәсенең ҡырҡылмаған яғына тарт, шаҡар, — тигәс, ҡыҙ ҡалмыҡ батырынын сәсенән тотоп, үңәсенең ҡырҡылмаған яғына ҡарай тарта. Башы әйләнеп төшә лә, ҡалмыҡ батыры үлә. Шунан ҡыҙҙы алып, Иҙеүкәй батыр Сә Тимерханға ҡарап китәләр. Сә Тимерханға барып, ҡыҙын тапшырған. Сә Тимерхан Иҙеүкәйҙе кейәү итеп, ҡыҙын бирә». (Күрһәтелгән фонд, д. 230, 7 — 8-се биттәр.)

Был эпизод бүтән милли варианттарҙа ла ошолай батырҙар әкиәте стилендә һүрәтләнә.

[84] Ҡулъяҙмала — XVII бүлек.

[85] Иҙеүкәйҙең төшө Н. Иҫәнбәт менән Ч. Вәлиханов яҙмаларында ла осрай. Айырма шунда: 1) Вәлихановта Идекә был төштө Са Тимерханға килгәндә Дәү Ҡабандин-Алп (томда Қабардин) менән осрашҡансы күрә; Иҫәнбәттә — Сатмыр хандан көс алып, улы менән бергә Туҡтамышҡа ҡаршы яуға сыҡҡас. 2) Текстағы айырымлыҡтар: Вәлихановта — Идүкә күккә аҡ шоңҡар булып осоп менә, фәрештә менән һөйләшкәндән һуң, бер «куңғыр» ҡаҙҙы тотоп, Тур тауына алып килеп түш итен ашай («...Тур тауына ҡунубмән, түс итенә туйубмән, ул ни булур, ун житем?»); Иҫәнбәттә — төштөң дүртенсе юлы ике юлдан тора («Оса торған ҡош булдым, Күккә табан остом мин»), ә алтынсы юл («Түшен түшемә ҡуйып») юҡ.

[86] Вәлиханов яҙмаһында төштө Идекәнең 17 юлдашынан «күп йәшәгән ҡарт» юрай. Н. Иҫәнбәттә — «Төш юраусы ҡарт». Һәр өс вариантта төш нигеҙҙә бер үк мәғәнәлә юрала. Айырма ҡайһы бер юлдарҙың икенсерәк сиратлашыуында һәм ҡайһы бер һүҙҙәрҙең башҡалығында ғына.

[87] Квадрат йәйәләге өс юл ҡулъяҙмала төшөп ҡалған. Журнал баҫмаһынан алып тултырылды.

[88] Ҡулъяҙмала төшөп ҡалған өс юл журнал баҫмаһынан алынды.

[89] Ҡулъяҙмала — XIX бүлек.

[90] ...*бисәһен* — ағайыңдың бисәһен, йәғни еңгәңде.

[91] Ҡулъяҙмала — XX бүлек.

[92] *Ҡадир ханға* — Туҡтамыштың улы Ҡадирбирҙегә.

[93] Н. Иҫәнбәт яҙмаһында Туҡтамыш хан ҡыҙҙарының исемдәренә бәйләп, иҫкәрмәлә шундай бер легенда килтерелә:

«...Ҡырым татарҙары (дөрөҫөрәге — ҡарайымдар) араһында «Ханәкә ҡыҙ» тураһында бер легенда йөрөй. Быныһында ҡыҙҙың исеме Әнкәжан тип йөрөтөлә. Ул шулай: Туҡтамыш хандың Сәләхетдин исемле бер ғәскәр башлығы Әнкәжанға ғашиҡ була. Ләкин Туҡтамыш хан был егетте ҡыҙына тиңһенмәгәс, Сәләхетдин би үҙенең 40 егете менән килеп, ҡыҙҙы урлап китә. Артынан хандың туғандары сыға. Сәләхетдин би хәҙерге Баҡсаһарайҙан өс саҡрым ерҙә торған «Чығут кәлә» тауҙарының түбәндәге Ҡарайым

шәһәренә килә һәм хан ҡыҙы исеменән ҡапҡаны асырға һорай. Шул уҡ Әнкәжанға ғашиҡ булған Ҡарайым руханийы Йәш Әрәби уларҙы ҡалаға кертә. Был «Чығут ҡәлә» бейек ҡоймалар, таш ҡаялар менән әйләндерелгән булып, һуғыш өсөн бик ныҡлы крепость урынын тота. Сәләхетдин 40 егете менән Туҡтамыш хан ғәскәренә ҡаршы тора. Ахырынан теге Әрәби, Әнкәжандың үҙенеке була алмауын күреп, ҡапҡаны аса. Шәһәр алына, яраланған Сәләхетдинде тотоп шул уҡ Чығут ҡәлә башындағы «Чикле ҡоба» тигән ер аҫты мәғәрәһенә ябалар. Нәнкәжан (артабан ҡыҙ исеме шулай яҙылған. — *Н. З.)* таш ҡаянан ташланып үлә. Сәләхетдин әлеге мәғәрәлә үлтерелә. (Был мәғәрә хәҙер ҙә шунда.) Туҡтамыш хан Чығут ҡәлә түбәһендә Нәнкәжанға торба* һалдырып, шунда күмдерә. Ә Чыгут ҡәлә — был ҡырҡ ир иҫтәлеге өсөн халыҡ араһында «Ҡырҡир» тип атала.

Нәнкәжандың торбаһы хәҙерге көндә лә Чығут ҡәлә башында ултыра... Ишегендә төрлө хәдистәр яҙылған. Торба эсендә мәрмәрҙән бер һандыҡ таш булып, замандар уҙыу менән юйылғыланған шул яҙыуҙар уҡыла: «Һеҙә рузиател мөләкәтел мығҙиматы... Нәнкәжан ханым бинте Туҡтамыш хан...»

Был эпитафиялағы исемде Ғ. Аҡчуҡраҡлы «Ханәкә-Енәкә» һәм «Нәнкәжан» рәүешендә уҡып була, ти. (Ҡарағыҙ: Ғ. Аҡчуҡраҡлының Ҡырым Раскупи материалдарынан.) Шул уҡ легенда Ғ. Аҡчуҡраҡлы «Нәнкәжан ханым төрбәһе» тигән хикәйә итеп, 1899 йыл Петербург, Бураганский тарафынан баҫтырылған. Шул уҡ легенданан алып, татар яҙыусыларынан Ғ. Шәрәфи «Нәнкәжан» тигән поэма яҙған. («Аң», 191 номерлы) һәм Ҡотой тарафынан «Нәнкәжан» тигән пьеса яҙылған.

Эпитафиянан күренгәнсә, «Нәнкә» йәки «Ханәкә» 841-се һижериҙә үлгән тиһә, ҡояш йылы менән 1435 йылда үлгән була. Туҡтамыш хан үҙе 1405 йылда үлтерелгәнгә күрә, ҡыҙы үҙенән 30 йыл һуң ҡалып, урта йәштәрендә йәки ҡартайып үлгән була. Шулай булғас, юғарылағы легенда тарихи факттар менән дөрөҫләнмәй. Ләкин Туҡтамыш хандың был исемендә бер ҡыҙы факт булып ҡала.

Инде «Ханәкә» тигән исем ул ваҡыттарҙа юғары синыф ҡыҙҙары араһында таралған булыуын башҡа миҫалдар менән дә күреп була. Мәҫәлән:

Ғосман бер хафиз ҡыҙ инем,
Ханәкә Солтан ата инем,
Сахниан кимәс аҙ инем,
Сабата тапмай барамын.

(Ҡарағыҙ: Һ. Атласов, «Ҡаҙаҡ тарихы».)

Быларҙан башҡа, башҡорт араһында «Ҡырыҡ егет» тигән бер күсерек тә йөрөй. Бының юғарғыға мөнәсәбәте бармы-юҡмы, торғоҙолманы». (Н. Иҫәнбәт яҙмаһы, 53-55-се биттәр.)

Эпосҡа Сәләхиҙең хан ҡыҙын урлап ҡасыуы һәм аҙаҡ Кинйәбикәнең Ҡырымда ҡаянан ташланып үлеүе хаҡындағы хәбәр ошо легенданан килеп ингән булыуы мөмкин. Эпик әҫәрҙәрҙә былдай хәл йыш осрай, һәм ул сәсәндәр ижадында тәбиғи, законлы һанала.

[94] *Ҡамҡалы кул ҡом сәуад.* Ҡушма исемдең тәүге һүҙе ҡулъяҙмала *ҡомҡалы*(?) тип, һуңғыһы *сыуат*(?) һәм *сауыт*(?) тип, ике төрлө яҙылған. Һәр осраҡта хата яҙылышҡа иҫәпләп, ғәрәпсә *сәуад* (ҡара — «черный»,

«темный») һүҙенә төҙәтелде. Шулай дөрөҫ булһа, «ҡамҡалы һәм ҡара ҡомло күл» мәғәнәһе аңлашыла.

Ҡ. Улъябаев вариантында был исем *«Ҡамҡалы күл ҡом сыуаҡ»* тип яҙылған. Быныһында, киреһенсә, «яҡты ҡомло күл» мәғәнәһе аңлашыла. «Сәуад» һүҙенең халыҡҡа аңлашылмауын иҫәпкә алып, ҡобайырҙы башҡарыусы сәсәндәр аҙаҡ шуға ауаздаш үҙ һүҙҙәре менән алыштырған булыуҙары мөмкин.

[95] Туҡтамыштың ҡамышлыҡҡа ҡасыуы, баш осонда бер ҡоштоң (Ч. Вәлихановта Ҡыҙғыч ҡус) сарҡылдап осоуы, ҡошҡа Туҡтамыштың ялбарып өндәшеүе байтаҡ варианттарҙа ҡабатлана. Был, күрәһең, эпостың халыҡ араһында киң таралған өлөшө булып, ул айырым рәүештә лә яҙып алынған. Башҡорт матбуғатында уның Тамъян һәм Йылайыр кантондарында яҙып алынған бер варианты тәү башлап Ғ. Вилданов тарафынан түбәндәгесә баҫтырылған:

Ҡыҙғатау тигән ҡош
Ҡанатың да, муйының буш;
Ҡамсы лау етәр муйыныңа;
Ҡан сурғалар ҡуйыныңа.
Һин дә айырылырһың күлеңдән,
Мин айырылырмын күбемдән!..
Күбемдән ау, күбемдән!..

(Башҡорт аймағы, 1927, № 4, 48-се бит.)

Ҡ. Улъябаев вариантында ошо уҡ әйтелештә ҡабатлана. Айырма тик икенсе юлдағы «буш» һүҙенең баш тип, өсөнсө юлдағы «етәр» һүҙенең тейәр тип, дүртенсе юлдағы «сурғалар» һүҙенең сорғалар тип яҙылыуында ғына. (Күрһәтелгән фонд, 16-сы бит.)

20-семе, 30-сымы йылдарҙа ул түбәндәгесә яҙып алынған:

Ҡыҙғатау тигән ҡыҙыл ғош,
Ҡыҙғатау тигән ҡыҙыл ғош,
Ҡыҙғанма минән күлеңде,
Ҡыҙғанма минән күлеңде,
Ҡыҙғанһаң да күлеңде,
Мин дә киттем илемдин,
Мин дә киттем илемдин,
[Һин дә китерһең күлеңдин.]
Атып та ебәрһәм, үләрһең,
Шешкә ҡундырһам, көйәрһең,
Ауу көйәрһең, ауу...

(Ғилми архив, ф, 3, оп. 12, д. 302, 18-се бит. Ҡемдең, кемдән яҙып алыныуы әйтелмәгән. Ғәрәп графигында яҙылып, айырым битте тәшкил итә.)

[96] Ҡыҙғатауҙың яуабы башҡа варианттарҙа осрамай.

[97] *Сарға төшөп юллаған,* йәғни йәнлектәрҙең күп тапалған эҙенән барып, юл яҙлыҡтырған.

[98] Башҡа варианттарҙа Туҡтамышты Мораҙым үлтерә, Урҙаға башын киҫеп алып ҡайта.

[99] Иҙеүкәй менән Мораҙым араһында ыҙғыш тыуҙырыу — күп варианттарҙа ҡабатланған уртаҡ мотив. Айырма шунда: башҡа варианттарҙа (мәҫәлән, Ч. Вәлиханов, В. Радлов, Н. Иҫәнбәт яҙмаларында), Мораҙым Туҡтамышты ҡыуа киткәс, Янбай (Н. Иҫәнбәттә — Ҡадирбирҙе) Иҙегене хандың ике ҡыҙын да үҙенә алырға ҡоторта. Мәкерҙе аңламайынса, Иҙеге риза була.

[100] Н. Иҫәнбәт яҙмаһында «Иҙеүкәйҙең Туҡтамыш хандың ҡыҙын уң ҡулы менән, Сатмыр хандың ҡыҙын һул ҡулы менән ҡосаҡлап ултырғанын» күреп, Туҡтамышты үлтереп ҡайтып төшкән Мораҙым «асыу менән бер ҡысҡырып атаһына киҙәнеүгә (нимә менән киҙәнеүе әйтелмәй), атаһының күҙе сыға (Н. Иҫәнбәт яҙмаһы, 64-се бит).

Ч. Вәлихановта шулай уҡ Туҡтамышты үлтереп ҡайтҡан Нуралин, атаһын «иренен ҡыҙартып, күҙен буҙартып, ике ҡулын ике ҡыҙҙың өҫтөнә һалып» ултырған хәлдә күреп, «ә!» тип ҡысҡырғанда, Идегенең күҙе сыға, «мә!» тигәндә, ҡулы һына. (Әйтелгән XXIX томға ҡушымта, ҡаҙаҡса текст, 36-сы бит.)

[101] *Иҫәнгә* — Иҫәнбайға.

[102] *Күҙ йәшенә тау булдым,* йәғни тауҙан аҡҡан йылғалай, күҙ йәшен күп ағыҙҙым.

[103] *Ер булдым* — хур булдым.

[104] Ҡулъяҙмалағы XXI – XXII бүлектәр бында бергә ҡушылды.

[105] *Атаға һаҙаҡ ҡайраһа* — ... һаҙағын атаһына ҡаршы ҡайраһа, тип аңларға кәрәк.

[106] *Сәсем оҙон булһа ла...* — бик боронғо заманда сәс кешенең йәне йәки магик көс урыны тип иҫәпләнгән (ҡарағыҙ: Пропп В. Я. Исторические корни волшебной сказки. Л., 1986. С. 41). Һуңынан, патриархат заманында, ҡатын-ҡыҙҙы кәмһетеүсе «Сәсе оҙон — аҡылы ҡыҫҡа» тигән мәкәл тыуған.

[107] *«Мин — Сыңғыҙ!»* — монгол телендә «сыңғыҙ» бөйөк тигәнде аңлата.

[108] *Үгәбәй (Угэдей, Угедай)* — Сыңғыҙ хандың төп (баш) бисәһенән өсөнсө улы (1229 — 1241).

[109] *Көҙгө саҡ йөнө ҡупмаған* — көҙгә саҡлы йөнө (йөн төбөндәге сайыры) ҡупмаған.

[110] *Сығтай (Чагатай, Чегатай)* — Сыңғыҙ хандың төп (баш) бисәһенән икенсе улы.

[111] *Етмештек (етмешлек?)* — М. Буранғоловтың аңлатыуынса, «егерме тин». Алтын Урҙа дәүләте тарихына ҡараған китаптарҙа быңдай аҡса берәмеге телгә алынмай, халыҡ телендә лә һаҡланмаған.

Алтын Урҙа дәүләтендә XIV быуатта аҡса берәмектәре булып *дирһәм* һәм *динар* йөрөгән. *Дирһәм* — көмөш тәңкә (монета), бер мыҫҡал (4,26 г) көмөштөң өстән бер ауырлығына тигеҙ (=1,42 г); *динар* — шулай уҡ көмөш тәңкә, 6 дирһәмгә, йәғни ике мыҫҡал көмөш ауырлығына тиң.

[112] Строфаның мәғәнәһе бик асыҡ түгел. Беренсенән, Иҙеүкәйҙең Туҡтамыштан һуң Урҙаны үҙенеке итеп һанауы («Урҙама»), икенсенән шул Урҙаны «ыласын ҡунмаҫ ҡарағас» образында поэтиклаштырыуы аңлашылмай. Әгәр символик рәүештә «Ҡарағас»ты — Урҙа тип, «Ыласын»ды ил батыры тип уйлаһаҡ, ул саҡта «ыласын ҡунмаҫ ҡарағаска ҡаҙ ҡундырыу»ҙы, шул уҡ аналогияға таянып, Урҙаға халыҡ туплауҙы йәки, тағы ла асығыраҡ итеп әйткәндә, Урҙаны халыҡтың үҙ ҡарамағына, үҙ ҡулына тапшы-

рыуҙы аңларға ҡала. Ләкин был демократик идея Мораҙымды шелтәләү тәртибендә әйтелгәнлектән, эпик герой Иҙеүкәйҙең халыҡсан характерын аңлатыуҙа ҡаршылыҡ тыуҙыра. Бүтән варианттарҙа был символик образдың «ҡаҙ ғына ҡунмаҫ ҡарағаска ҡаҙ ҡундырҙың, Мораҙым» формаһында әйтелеүе лә, шаҡтай ҡаршылыҡлы булып, төрлөсә аңлауға юл ҡалдыра.

[113] Иҙеүкәй-ата менән Мораҙым-улдың диалогы, күрәһең, йөкмәткеһендә ата культы (атайҙы ололау, тыңлау, хөрмәт итеү) һәм шуға бәйләнешле әхләҡи проблемалар сағылғанға күрә, эпостың төрки халыҡтар араһында шаҡтай тулы һәм киң таралған өлөшө булып тора. Башҡорттарҙа ул тәү тапҡыр М. Өмөтбаев тарафынан яҙып алынған. Ҡарағыҙ: Мөхәммәтсәлим Өмөтбаев. Йәдкәр (Текстологик эштәрҙе башҡарыусы, төҙөүсе, баш һүҙ яҙыусы, аңлатмалар биреүсе Ғиниәт Ҡунафин, яуаплы редакторы Ғайса Хөсәйенов. Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1984. 182 — 184-се биттәр).

Ошо уҡ диалог бик ҡыҫҡарған формала Ғ. Вилданов тарафынан «Тунғатар йортонда башҡорт ауыҙынан» яҙып алынып, «Ҡобайырҙар башҡортса» тигән мәҡәләһендә «3-сө ҡобайыр» итеп килтерелгән:

— Яҙғы ҡауға ут һалһаң,
Яҙғы ҡауға ут һалһаң,
Утты ҡайҙан утларһың?
Атайыңдин оло бабаңдың
Күҙене һуғып сығарһаң,
Аны ла нисек юларһың, ау?

— Яҙғы ҡауға ут һалһам,
Ут яҡтыһын утларым!
Атайымдин оло бабамдың
Күҙене һуғып сығарһам,
Алты айлыҡ кәрбәне алты айҙанһам,
Аны ла юлармын, ау!..

(Башҡорт аймағы, 1927, № 4, 42-се бит.)

Н. Иҫәнбәт яҙмаһында һәм ҡаҙаҡ варианттарында ла яҙыҡты ҡәрбәгә барып йолоясағы әйтелә.

[114] ...*ҡаҙ алмаҫ* — ҡаҙҙы тибеп ала алмаҫ.

[115] ...*ул бала* — ир бала.

[116] Был бүлектә сағылған ваҡиғалар Ч. Мусиндан яҙып алынған легендаға (8-се вариант) тура килә.

[117] *Ҡеләйле* — Ч. Мусин һөйләгән легендала: Уралдан килеп, Дәмми бейгә ҡаршы һуғышыусы эпик герой булып кәүҙәләнә. Башта уҡ күреп үткәнебеҙсә, эпоста Ҡеләйле йәш Иҙеүкәйҙең Дәмми бейгә ҡаршы көрәшендә мең башы булып ҡатнаша. *Аҙнай, Ҡасҡын, Ҡаныҡай, Бикҡол* (һәм тағы *Сафар, Туҡһанбай)* — Ҡеләйле батырҙың йөҙ башлыҡтары (сотники). Дим йылғаһы башында ер һайлап ултырған был батырҙарҙың ауылдары (хәҙерге Бишбүләк һәм Миәкә районДарында) улар исеме менән аталып, улар «Ҡеләйле меңе» тип йөрөтөлә. (Күрһәтелгән фонд, оп. 12, д. 230, 20-се бит.)

[118] *Ағаларың ситләтте.* — Артабан аңлашылыуынса, Туҡ батырҙың әсәһе — ҡаҙаҡ ҡыҙы, ул үҙ ырыуының ризалығынан тыш Йайыҡ батырға

сыға. (Ч. Мусин һөйләүе буйынса ла шулай.) Борон ырыуҙың ризалығынан башҡа икенсе ырыу кешеһенә тормошҡа сығыу әҙәрлекләнгән, ырыу менән ырыуҙы дошманлаштырған. Бында ана шул йола сағыла.

[119] Боронғо хөрәфәт (ышаныу) буйынса, юлға сыҡҡанда буш күнәккә осрау уңышһыҙлыҡҡа юрала.

[120] Был строфа Ч. Мусин вариантынан алынды. М. Буранғоловтың ҡулъяҙмаһында һәм гәзит баҫмаһында аңлайышһыҙ:

Ҡыҙ булһам да, тайшанмай,
Илдә булған йоланан,
Ата, әсәңдең ужарын
Алдыңа ҡорған бала тип,
Ҡаф тауындай кәртәнән
Йөрәгеңә маһайып,
Атам биргән йөҙөктө
Бүләгем тип алғанһың.

[121] *Йәштән алған бейеңде,* йәғни боронғо ғөрөф-ғәҙәт буйынса, бала саҡта уҡ һөйләшеп (ҡолағың тешләтеп) ҡуйған егетеңде.

[122] *«Табан тел» тигән уйынды,* йәғни шул исемдәге уйһыу (уйпат) ерҙе.

[123] 118-се иҫкәрмәне ҡарағыҙ.

[124] *Бейә һауымы араһы* — бейә һауҙырыуҙан туҡтап (һыуалғас), икенсе йылға ҡолонлап, яңынан һауҙыра башлағанға тиклем, йәғни көҙҙән яҙға тиклем.

[125] Ч. Мусин вариантында шиғыр Туҡ батырҙың һүҙе менән тамамланып, эпизод сәсмә телдә шулай ослана: «...Һиңә улың буламмы?» — тип йырлаған да, Туҡ үҙенә биргән туҫтаҡты әсәһенә биргән. Әсәһе ҡымыҙ эсеү менән шунда уҡ йығылып үлгән. Туҡты үлтереү өсөн ағалары асы (ағыу) һалып биргән булған. Халыҡ береһе лә эсмәгән, бары ла ҡурыҡҡан, һыуында берәр нәмә барҙыр тип шикләнгәндәр. Туҡ менән ағалары араһында яңынан асылашыу — дошманлыҡ киткән, былар тағы һуғышҡандар. Туҡтың әсәһе Балҡанды шунда күмгәндәр, шуға күрә тауының исеме — «Балҡан»; ағай-эне асылашҡан — дошманлашҡан урын булған тип, шул туғайлыҡты «Асылы» тип атағандар. Шуға күрә Балҡан тау эргәһендәге күлде лә «Асылы күл» тип йөрөтәләр». (Әйтелгән фонд, 23-сө бит.)

Ч. Мусин вариантында бынан һуң Туҡ батырҙың, бында йәшәмәй ҡалмыҡтарға ҡаршы яу асып, уларҙан еңелгәс, Иҙеүкәйгә йәнә ярҙам һорап килеүе хикәйә ителә.

[126] *Үҙен хоҙай таныҡан,* йәғни үҙен алла дәрәжәһендә тотҡан.

[127] *Иҙел һыуын ағыҙған.* «Урал батыр» ҡобайырында Урал тауы буйында кешеләр күбәйеп, хайуандар һәм йәнлектәр, ҡош-ҡорт ишәйеп, эсер һыу етмәй башлағас, Урал батырҙың улдары, ҡылыстары менән тау ярып, Иҙел, Һаҡмар, Яйыҡ, Нөгөш йылғаларын барлыҡҡа килтерәләр.

[128] *Төшөндә әйткән* — Һабрау ҡартҡа төшөндә был һүҙҙәрҙе Урал батырҙың улы Иҙел батыр әйтә. Үлгән батырҙарҙың, төшкә инеп, серҙе асыуҙары һәм, ғөмүмән, теге йәки был (ғәҙәттә, төп, иңғай) геройҙың төш күреүе, төшөндә мөһим нәмәне белеүе — төрки халыҡтарҙың эпик ижадында киң таралған мотив. Мәҫәлән, ҡырғыҙ халҡының эпик ҡомартҡыһы «Манас» эпосын һөйләүселәр (жомаҡсылар — «сказители») төштәрендә Манас-

ты күреүҙәрен һәм Манастың үҙе хаҡында йырларға ҡушыуын әйткәндән (тасуирлағандан) һуң ғына эпосты һөйләргә тотоноуҙары, йә булмаһа «Буҙъегет» поэмаһында Буҙъегеттең төшөндә әллә ҡайҙағы Мысыр батшаһының ҡыҙына ғашиҡ булыуы, «Ек Мәргән»дә Ектең төшөндә атаһы менән осрашыуы, «Иҙеүкәй менән Мораҙым» эпосында ла бер нисә тапҡыр төш күреү эпизодтары эпик традицияның тотороҡлолоғон раҫлайҙар.

[129] *Күҙ йәштәрен күптәрҙең булат менән һөрткән* — образлы әйтем. Халыҡты талаусы дошмандарҙы тар-мар итеп, күҙ йәше ағыҙыуҙы туҡтатҡан (бөтөргән) тигәнде аңлата.

[130] Дим буйындағы Себенле ауылының исеме шунан ҡалған, тиҙәр. *(М. Б.)*

[131] *Атаһы алдында йөҙ йыуған* — был осраҡта «йөҙ йыуыу» йөҙҙө ағартыу, гонаһтан арыныу мәғәнәһендә.

## Изеге

*(Әкиәтләшкән версия)*

1959 йыл Башҡортостандың Ейәнсура районы Байдәүләт ауылында Сәйфуллин Абдулла Хәлил улынан (1897 йылғы) Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтының ғилми сотрудникгы диалектолог Сәриә Миржанова яҙып алған. Информаторҙың әйтелгән ауылда пожарник булыуы, ҡыш көндәрендә һунарға йөрөүе хаҡында иҫкәрмә бирелгән: Ғилми архив, ф. 3, оп. 23, д. 5, 16 — 25-се биттәр.

Ошо уҡ вариант 1967 йылда шул уҡ Байдәүләт ауылында 70 йәшлек Хәсәнова Тутыя әбейҙән Әнүр Вахитов тарафынан яҙып алынған. — Ғилми архив, ф. 3, оп. 65, д. 2: «1967 йылғы фольклор экспедицияһы материалдары», 13 — 18-се биттәр.

Вариант Тутыя әбей тарафынан ҡыҫҡараҡ һөйләнһә лә, Сәйфуллин Абдулла бабай башҡарыуында әйтелмәй ҡалған ҡайһы бер деталдәре менән ҡыҙыҡлы. Айырымлыҡтары түбәндә иҫкәрмәләрҙә күрһәтелә.

Әкиәт йоғонтоһо эләккән был вариант «Иҙеге» эпосының уртаҡ мотивтарын һәм һуңғы быуаттарҙа башҡорт халыҡ аңында тыуған үҙенсәлекле эпизодтарҙы, мөһим деталдәрҙе сағылдырыуы менән ҡыҙыҡлы.

[132] Эпоста Иҙегенең бүтән исемдә үҫеүе башҡа варианттар буйынса ла билдәле. Мәҫәлән, Г. Потанин баҫтырып сығарған ҡаҙаҡ варианттарының тәүгеһендә *Ҡойчыбай* исемендә йөрөй. Нуғайҙарҙың бер вариантында — *Ҡобоғол* (Семенов. Туземцы северо-восточного Кавказа, СПб., 1895. С. 418), М. Османов баҫтырған «Туктамыс хандың хикәйәте» тигән вариантта — *Ҡубаул* (Османов. Ногайско-кумыкская хрестоматия. СПб., 1883. С. 32 — 49).

[133] Ошоға оҡшаш эпизод юғарыла телгә алынған Г. Потанин баҫмаһында осрай. Унда быҙау көтөп йөрөгән малайҙар араларынан берәүһен хан итеп һайларға булалар. Эдигәнең (Потанинда уның исеме шулай) тәкдиме буйынса, хан булған малай быҙау һуйып ашатырға тейеш. Быға көтөүсе малайҙарҙың береһенең дә йөрәге етмәгәс, Эдигә үҙе көткән быҙауҙарҙың береһен һуйып ашата ла хан була. (Живая старина, вып. III и IV, СПб., 1897. С. 307). Тутыя әбей һөйләүендә был эпизод юҡ.

[134] Был эпизод «Иҙеге» эпосының күпселек вариантында, шул иҫәптән, Хәсәнова Тутыя һөйләүендә лә, бында һүрәтләнгән менән берҙәй рәүештә тип әйтерлек сағыла.

[135] Т. Хәсәнова һөйләүендә: «Берҙән-бер көндө ул (хандың бисәһе — *Н. З.*) бер туҫтаҡ ҡатыҡҡа кесе яраү итә лә, уны ултыртып ҡуя. (47-се иҫкәрмәне ҡарағыҙ.)

[136] Т. Хәсәнова һөйләүендә, Изеге был быҫраҡ ҡатыҡты эсмәй, ә иҙәнгә күтәреп бәрә лә сығып китә. (47 — 49-сы иҫкәрмәләрҙе ҡарағыҙ.)

[137] М. Буранғолов вариантында Иҙеүкәй, күк бурҙайҙы эйәртеп, бер үҙе киткәйне. Улъябаев вариантында ла бер үҙе китә. А. Сәйфуллин һөйләүендә иһә, Изегегә эйәреп, уның ун бер (Т. Хәсәнова һөйләүендә — һигеҙ) иптәшенең Туҡтамыштан китеүе ҡайһы бер ҡаҙаҡ варианттары менән уртаҡ мотив булырға оҡшай. Мәҫәлән, Ч. Вәлиханов яҙып алған варианттарҙың икенсеһендә, Эдигегә эйәреп, 9 иптәше китә. Г. Потанин баҫтырып сығарған икенсе вариантта 7 иптәше (единици) китә. Башҡорттарҙың Н. Иҫәнбәт яҙмаһында иһә Иҙеүкәй улы Мораҙым менән китә.

[138] *Ошаҡсы малай* (бүтән бер вариантта ла юҡ), күрәһең, артабанғы ваҡиғаларҙы бәйләү өсөн генә индерелгән.

[139] Т. Хәсәнова һөйләүендә, Янбай — Иҙегенең дуҫы булыу менән бергә «хандың ҡапҡа ҡарауылсыһы». Быныһы инде бүтән бер вариантта ла осрамаған деталь. Ҡырым татарҙарынан В. Радлов яҙып алған бер вариантта Янбай шулай уҡ Әдигәнең (унда исеме шулай) дуҫы итеп күрһәтелә (Радлов. Образцы..., ч. VII. С. 105).

[140] Хәсәнова Тутыя һөйләүендә, тәүҙә Туҡтамыштың үҙенең төш күреүе хаҡында әйтелеп, хан «төш юраусы әбейҙе» саҡырта. Төш юраусы әбей шарт ҡуя: «Бер һарыҡ һуйып ашатһағыҙ, юрайым, ти. Һарыҡты тотканда, «Бәрә-бәрә-бәрә!» тип саҡырығыҙ. Ниндәйе килһә, шуны тотоп һуйығыҙ!» — тигән, ти. Саҡырһалар, ҡутырлы ғына һарыҡ килгән. Шуны һуйып әбейгә ашатҡандар ҙа, Туҡтамыш хан төшөн һөйләгән. Әбей төш юрай башлаған, ти...»

[141] *Сын Тимер хан* — Сатмыр хан. 63-сө иҫкәрмәне ҡарағыҙ. Т. Хәсәнова ауыҙынан был исем «Сымтырмыр» һәм «Сынтырмыр хан» тип ике төрлө яҙып алынған.

[142] Т. Хәсәнова һөйләүендә «Хаҡ тәғәлә юл бирһә» тигән юл юҡ. «Әйләнеп килеп етер ул» тигәндән һуң социаль яҡтан һәлмәгерәк фекер әйтелә:

Әйләнә алмай ятҡан иленде
Әйләндереп китер ул.
Тулғана алмай ятҡан иленде
Тулғандырып китер ул.
Туҡтамыш хандың туҡалаҡ башын
Ҡанъяғаһына артып юртыр ул.

[143] *Үҙенең туғыҙ улын эйәртеп ебәрә* — башҡа варианттарҙа осрамаған деталь: 53-сө һәм 137-се иҫкәрмәләрҙе ҡарағыҙ.

[144] Бында һәм артабан квадрат йәйә эсендәге юлдар, теүәллек өсөн, Т. Хәсәнова тексынан алынды.

[145] Т. Хәсәнова һөйләүендә:

Айһылыуҙан һаҡлыраҡ,
Көнһылыуҙан күрклерәк.

[146] *Бер яу* — Т. Хәсәновала «бер булк» (полк). Һөйләүсе артабан уны «Был дейеү була. Ул Сыңғыҙ ханға ҡоҙа булып китеп бара, ти», — тип аңлата. (83-сө иҫкәрмәне ҡарағыҙ.)

[147] *80 бот бойҙай...* — Иҙеүкәйҙе тасуирлауҙа бүтән варианттарҙа күренмәгән гипербола Т. Хәсәнова һөйләүендә береһе генә ҡалған, уныһы ла боҙолған: «Иҙегенең түбәһендә соҡор бар, шул соҡорға ҡырҡ бөртөк тары һыя тигән, ти».

[148] Эпик геройҙың мал һуйып, аш әҙерләүҙә таһыллығын һынау (ул Т. Хәсәнова һөйләгән текста ла бар) — ғөмүмән, героик эпосҡа характерлы булған был традицион мотив батырҙар тураһында ғы экиәттәрҙә лә осрай. Мәҫәлән, күп тапҡыр баҫылған «Аҡъял батыр» һәм «Алсудар менән Ҡирсудар» тигән экиәттәрҙе ҡарағыҙ (БХИ: Экиәттәр, 3-сө китап).

[149] *Дейеү бер үҙе ике бейәне ашап бөтөп ҡуя* — батырҙар тураһындағы экиәттәрҙә был шулай уҡ традицион мотив.

[150] Т. Хәсәнова һөйләүендә, Изеге йәйәһен тартҡанда, менгән сыбар аты тубыҡтан ергә бата.

[151] Т. Хәсәнова һөйләүендә, Изегенең уғы дейеүҙең биленә ҡаҙала. «Дейеү ырғып тора, Изегенең атының ҡойроғона йәбешә. Дейеүҙең ҡатыны (бында унын Сын Тимерхандың ҡыҙы булыуы әйтелмәй әле. — *Н. З.*), Изегегә ымлап, шаҡара тарт, ти. Изеге атын шаҡара тарта. Дейеүҙең биле һына, сыбар аттың ҡойроғо өҙөлә. Шуға ла сыбар аттың ҡойроғо сонтоҡ булып ҡалған, ти». Г. Потанин баҫтырып сығарған ҡаҙаҡ варианттарының икенсеһендә лә ошо сонтоҡ ҡойроҡло аттарҙың барлыҡҡа килеү мотивы сағыла. — Живая старина. Вып. III — IV. С. 303.

[152] *Зәһәрле булған тегенең йөрәге.* — «Тимерхан», «Тимершаһи» экиәттәренең ахырында ла ошо мотив сағыла. Ҡарағыҙ: БХИ: Экиәттәр, 3-сө китап, № 25, аңлатмалары — 327 — 328-се биттәр. В. Радлов Себер татарҙарынан яҙып алған «Аҡ Күбәк» тигән эпоста ла шул уҡ мотив бик асыҡ кәүҙәләнә:

«Аҡ Күбәк йоҡлап ятҡан Манғышты (хан батырын) ҡылыс менән башын сабып өҙөргә итә, ләкин ҡылысы үтмәй, тегене йоҡонан ғына уята. «Мә, минең ҡылыс менән юғарыраҡ күтәреп сап!» — тип, Манғыш үҙ ҡылысын бирә. Шул саҡ Хызыр пәйғәмбәр (50-се иҫкәрмә) килеп сығып, Аҡ Күбәкте иҫкәртә: «Күтәреп сапма, үҙенден башыңды киҫәрһең. Ерҙән йылдырып башын киҫ!» — ти. Шулай итергә булғанда, Манғыш: «Туҡта!.. Башымды киҫкән һуң, йөрәгемде йот! Пәлүән (бәһлеүән) булырһың. Ҡарыным киҫеп, эсәгемде алып, биленә ура, шунан минең ҡылысым һиңә үтмәҫ булыр», — ти.

Манғыштың башын өҙөп, йөрәген йоторға торғанда, йәнә Хызыр пәйғәмбәр килеп, Аҡ Күбәкте үлемдән һаҡлап ҡала. (В. Радлов. «Образцы...», г. IV, 145 — 146.)

[153] *...һыпырып төшөргән.* — Т. Хәсәнова һөйләүендә ата менән улдың көс һынашыу эпизоды һүрәтләнмәйенсә, «Изеге улын көслө булырға өйрәтә. Ағастарҙы йолҡалар, көрәшәләр», — тип кенә хәбәр ителә.

[154] *Яу (яуым)* — был урында ҡон, үс, дау мәғәнәһендә.

[155] Был вариантта Туҡтамыштың урманға ҡасыуын, әммә бында ла ҡошҡа ялбарыуын 95-се иҫкәрмәлә килтерелгән миҫалдар менән сағыш-

тырһаҡ, ҡыҙғатау ҡош образының байтаҡ варианттарҙа даими һаҡланыуы аңлашыла.

[156] Т. Хәсәнова һөйләүендә Янбай: «Эй, мынау ҡартлас ике ҡыҙҙың уртаһында ултырып ҡайтып килә. Бына тигән йәш егет барҙа», — тип, ҡыҙыу ҡанлы Әлбәкмырҙаның көнсөллөгөн тыуҙыра. 99 һәм 100-сө иҫкәрмәләрҙе ҡарағыҙ.

[157] Гонаһты йыуыу эпизоды, телгә алынған варианттарҙан нык айырылып (101-се иҫкәрмәне ҡарағыҙ), Г. Потанин баҫтырып сығарған варианттарҙың икенсеһенең аҙағында бирелгән өҫтәмәгә яҡын килә. Султангазин тигән кеше ярҙамында ҡаҙаҡтарҙан яҙып алынған был өҫтәмәлә шул хаҡта әйтелә: Әҙигәнең улы Нуралының Нурзеин исемле улы тыуған. Эсәһе малайҙы тукмап интектергән. Нуралы, улын йәлләп: «Ниңә уны тукмайһың?» — тип һорағас, ҡатыны: «Үлһен, тим. Сөнки һин атайыңды ни эшләткән булһаң, ул да, үҫкәс, һине шулай итәсәк», — тип яуап биргән. Шунан һуң Нуралы уйға ҡалған да, үҙенең ҡаты бәғерле булыуына үкенеп, атаһынан ғәфү үтенергә булған. Ул тиренән ҡап тектереп, үҙен шул ҡапҡа һалдырған да, атаһы янына барып еткәнсе, таяҡ менән туҡмап барырға ҡушҡан. Шулай туҡмап килтереп еткергәс, Нуралы атаһынан ғәфү итеүен һораған. Әҙигәнең күҙҙәре инде булмаһа ла, улын йәлләп илаған, имеш. (Әйтелгән журнал, 304-се бит.)

[158] *Саҙалы, Ала Байтал* — Ейәнсуралағы ауыл исемдәре; *үҙебеҙ ҙә* — йәғни, Байдәүләт ауылы кешеләре.

## Эпостың башҡортса бүтән варианттары

1. *Борынғы башҡортларның өләңләре.* Табын башҡорттарынан Мөхәммәтсәлим Өмөтбаев яҙып алып, шул исемдә үҙенең «Йәдкәр» тигән китабында баҫтырған (Ҡазан, 1897, 83 — 84-се биттәр; яңы баҫмаһы — Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1984, 182 — 184-се биттәр). Өҙөк Туктамыш хандың ҡыҙы өсөн Иҙеүкәй менән Мораҙымдың асыуланышыуҙарын сағылдыра (99-сы, 100-сө иҫкәрмәләрҙе ҡарағыҙ).

2. Ошо уҡ өҙөк Фазыл Туйкиндың әҙәбиәт кисәләре өсөн «Нардуған» исемле йырҙар йыйынтығында баҫылған (Өфө, 1915). Быны Ф. Туйкин үҙе яҙып алғанмы, әллә М. Өмөтбаев яҙмаһын күсереп баҫтырғанмы — был турала мәғлүмәт юҡ. Айырма — Туйкин баҫмаһында телдең шактай еңелләштерелеүендә генә.

3. *«Богатырь Едиге»* исемендә XIX быуат ахырында йәки XX быуат башында А. Г. Бессонов яҙып алған. Ҡайҙа, кемдән алыныуы әйтелмәгән. Руссаға тәржемә ҡулъяҙмаһының фотокопияһы Рәсәй Фәндәр академияһының Өфө ғилми үҙәге китапханаһында һаҡлана: № 78389.

Текст сәсмә телдә. Башланғысы Ч. Вәлиханов яҙып алған ҡаҙаҡ вариантына яҡын. Ләкин артабан Туҡтамыш урынына Тимерхан (йәғни Аҡһаҡ Тимер) алыныуы, ҡайһы бер башҡа эпизодтарҙың да буталыуы, йөкмәткелә социаль мотивтарҙың йомшартылыуы, шау әкиәт стилендә һөйләнеүе менән башҡа варианттарҙан нык айырыла.

Ҡыҫҡаса йөкмәткеһе:

Борон заманда Тимерхан исемле бер хан йәшәгән. Уның ир балаһы булмаған. Хандың йылҡы көтөүселәре кеше аяғы баҫмаған сахра яландан

ап-аҡ биләүгә төрөлгән бер ир бала алып ҡайтып бирәләр. Хан уны үҙенә ул итеп ҡабул итеп, кеше аяғы баҫмаған ерҙә табылғаны өсөн, Едиге тип исем ҡуштырған.

Йыл үҫәһен көн үҫеп, оҙон буйлы, матур йөҙлө Едиге алты йәшендә, ат менеп, һунарға йөрөй башлаған. Едигенең йөрөшө, йөҙө шул тиклем етди булған, ул тирмәгә килеп ингәндә, Тимерхан йоҡлап ятҡан еренән ҡурҡып ҡалтыранып уяна икән.

Тимерхан, Едигене үлтерергә булып, бер көндө халыҡты йыя. Йылҡы көтөүселәр был хәлде Едигегә белдерәләр, менеп ҡасырға ат бирәләр. Йыйылған халыҡ Едиге артынан ҡыуа сыға. Едиге ҡыуыусыларҙың күбеһен үлтергәс, ханға уның 40 кешеһе генә кире ҡайта.

Көнөн-төнөн бара торғас, Едиге кеше аяғы баҫмаған бер сахра яланға килеп сыға һәм шунда ҡырағай аттарҙы (тарпандарҙы) һуйып ашап бер үҙе йәшәй. (Ошо урында Едигенең үҙенең аты ла бик шәп ат булыуы, уға һәр ваҡыт тоғро юлдаш булыуы тураһында хәбәр ителә.)

Берҙән-бер көндө атын менеп китеп барғанда, Едиге күп ғәскәргә тап була. «Һин кем?» — тип һорайҙар бынан. Едиге: «Мин бер юлаусы», — тип яуап ҡайтара. «Улай булғас, бар үҙ юлыңа», — тип, быны ебәрәләр. Бара торғас, икенсе урынға күсеп китеп барыусы халыҡҡа осрай. Иң арттан ҡара юрғаға атланып, ике күҙенән йәш ағыҙып, бер ҡыҙ килә. Тимерхандың ҡыҙы, ә ҡара юрға Едиге бала саҡта менеп йөрөгән ат икән. Тоҡту-Азе тигән батыр Тимерханды баҫып алып, ҡыҙын әсир итеп, үҙе менән алып китеп бара икән.

«Элекке уҡ-йәйәм һынғайны, хәҙер яңыны эшләп алып киләм дә, Тоҡту-Азене үлтереп, һине ҡотҡарам. Һин Тоҡту ятҡан тирмәнең кейеҙҙәрен һәр яҡтан күтәреп ҡуй», — ти ҙә, Едиге уҡ яһарға китә. Мышы мөгөҙөнән ян бөгөп ултырғанда, алты ҡолас ала бейәһен менеп, Тоҡту-Азе килеп сыға.

— Нишләп ултыраһың?

— Һине атып үлтерергә ян бөгәм.

Тоҡту-Азе быға иғтибар итмәй, үҙ юлына китә.

Едиге ян бөгөп, уҡ юнып, ауылға әйләнеп килһә, Тоҡту-Азе үҙ тирмәһендә «өскә бөгөлөп» йоҡлап ята. Ҡыҙ тирмәнең кейеҙҙәрен күтәргәс, Едиге кирелеп тартып уҡты атып ебәрә, Тоҡту-Азе ятҡан ерендә өс киҫәккә өҙөлә. Шулай ҙа ул һикереп тороп, Едиге атының ҡойроғона йәбешә, ҡойроҡ төптән үк өҙөлөп тороп ҡала (83, 150 — 152-се иҫкәрмәләрҙе ҡарағыҙ).

Тимерхандың ҡыҙын Тоҡту-Азенан ҡотҡарып алып киткәс, далала Едиге яңынан бер ғәскәргә тап була. Быныһы Тимерхандың Тоҡту-Азе артынан ҡыуа сығарған яуы икән. Яу башлығы үҙҙәре менән ҡайтырға димләй, Едиге ризалашмай. Ҡыҙ өсөн тәҡдим ителгән бүләктәрҙән дә баш тартып, Едиге үҙ юлына китә.

Тимерхан ғәскәренә «Дошман хан» яуы ҡаршы сығып, хан ҡыҙын талап алып китә. Быны ишетеп, Едиге «Дошман хан»ды туҙҙырып, Тимерхандың ҡыҙын тағы ла ҡотҡара. Ҡыҙҙы яу башлығына тапшырып, үҙе йәнә сығып китә.

Тимерхан төшөндә дошман яуынан ҡыҙын бер кешенең ҡотҡарыуын күрә. Иртән уянһа, үҙ ғәскәренә ҡаршы сыға. Яу башлығы ҡыҙҙы үҙебеҙ ҡотҡарҙыҡ тип алдай. Тимерхан ышанмай, «Дөрөҫөн әйтмәһәгеҙ, барығыҙҙың да башын саптырам», — тип ҡурҡыта. Шунан һуң ғына яу башлығы дөрөҫөн һөйләй.

Тимерхан, Едигене үҙенә саҡыртып, кешеләр ебәрә. Едиге ҡайтмай. Тимерхан үҙе килгәс кенә, Едиге үҙенең бер кеме лә — ырыуы ла, ата-әсәһе лә — булмауы тураһында йырлай (әммә йыры текста юҡ). Тимерхан еренә ҡайта.

Хан 30 көн төрлө уйындар, 40 көн туй үткәреп, ҡыҙын Едигегә бирә. «Шунан һуң Едиге бик күп батырлыҡтар күрһәткән, тик мин улары хаҡында онотҡанмын, һеҙ мине ғәфү итегеҙ инде бының өсөн» тигән һүҙҙәр менән текст тамамлана.

4. 1923 йылда Хәбибулла Ғәбитов «Яңы юл» журналының 2 — 3, 4 һәм 5 — 6-сы һандарында «Халыҡ әҙәбиәтенән ҡыҫҡаса үрнәктәр» тигән дөйөм баш аҫтында бер нисә ҡобайыр баҫтырған *(46-сы иҫкәрмәне ҡарағыҙ)*. Ҡемдән, ниндәй шарттарҙа яҙып алыныуы, ниндәй ваҡиғаларға бәйләп һөйләнеүе хаҡында мәғлүмәт бирелмәгән; ҡулъяҙмаһы ла һаҡланмаған.

5. 1927 йыл «Башҡорт аймағы» журналының 4-се һанында Ғәбделәхәт Вилданов «Ҡобайырҙар башҡортса» тигән дөйөм баш аҫтында «Иҙеүкәй менән Мораҙым» эпосына ҡараған өс өҙөк баҫтырған;

*Беренсеһе* — Иҙеүкәй менән Мораҙымдың Туҡтамыш хандың ҡыҙы өсөн асыуланышлы булыуҙарын сағылдырған шиғри диалогҡа ҡарай *(113-сө иҫкәрмәне ҡарағыҙ)*.

*Икенсеһе* — Иҙеүкәй менән Янбай диалогы *(70-се иҫкәрмәне ҡарағыҙ)*.

*Өсөнсөһө* — Иҙеүкәйҙән ҡасҡан Туҡтамыш хандың ҡыҙғатау тигән ҡошҡа ялбарып өндәшеүен һүрәтләй *(95-се иҫкәрмәне ҡарағыҙ)*.

6. *«Иҙеүкәй менән Мораҙым»* исемендә 20-се йылдарҙа тамъян йәки түңгәүер башҡорттарынан Сәғит Мирасов яҙып алған. Б. Өмөтбаев тарафынан русаға тәржемәһе 20 — 30-сы йылдарҙа башҡорт музыкаль фольклорын өйрәнеүсе И. В. Салтыковҡа тапшырылып, уның «История и анализ башкирских песен (при ближайшем участии С. Мирасова и Б. Умутбаева)» тигән ҡулъяҙма хеҙмәтенә ингән: Ғилми архив, ф. 3, оп. 61, д. 25: «Материалы Искусствоведческой секции Общества по изучению национальной культуры Башкирии (1926 — 1936 гг.)», л. 29 — 41.

Вариант Иҙеүкәйҙең (бында уның исеме — Иҙүкә) ата-бабаларын һөйләү менән башлана: атаһы — Баба Төкләҫ, олатаһы — Баба Ғәзиз, әсәһе — һыу батшаһының ҡыҙы. Малай сағында уҡ Иҙүкә — ғәҙел хөкөмсө. Даны таралғас, Туҡтамыш хан үҙенә ала һәм һарайҙа хөкөмсө итеп ҡуя.

Һарай эсендә Иҙүкә менән булған хәлдәр, хан бисәһенең төш күреүе, Туҡтамыштың Иҙүкәне үлтертергә теләп мәжлес үткәреүе, Ласын тигән дуҫының Иҙүкәгә йыр менән иҫкәртеүе, Иҙүкәнең ҡасыуы, Туҡтамыштың үҙ батырҙарына мөрәжәғәте, батырҙарҙың береһенең дә һис ни әйтә алмауы, туғыҙ батырҙы эйәртеп, Янбайҙың ҡыуа сығыуы, Иҙел буйында Иҙүкә менән Янбай диалогы — былары бөтәһе лә башлыса Нәҡи Иҫәнбәт вариантындағыса *(7-се вариантты ҡарағыҙ)*. Айырма — һабрау урынына бында 185 йәшлек Урал улы Манғут тигән ҡарт сығыш яһай.

Туҡтамыштан ҡасып, Иҙүкә Сатмыр ханға килә (юлда Ҡабардин батырға осрауы был вариантта юҡ), уның ҡыҙын ала, улдары тыуа, уға Мораҙым тип исем ҡушалар.

Мораҙым 12 йәшкә еткәс, малайҙар унан «килмешәк» тип, «һеҙҙе Туҡтамыш хан ҡыуып ебәргән бит!» тип мыҫҡыл итәләр.

Бынан һуңғы хәлдәр — Иҙүкә менән Мораҙымдың Туҡтамышты килеп ҡыйратыуҙары, хан ҡыҙы өсөн Иҙүкә менән Мораҙым араһындағы низағ,

Мораҙымдың Мәккәгә барып гонаһын бөтөрөүе һәм атаһына килеп ғәфү үтенеүе — бары ярты битлек хәбәр рәүешендә генә һөйләнә.

«Иҙүкә Дим буйында үлгән. Уның ҡәбере Нарыҫ тауы янында (Йылайыр районы Темәс волосында)» тигән юлдар менән тамамлана. Дөрөҫөндә, Нарыҫ тауы — Миәкә районында *(Ә. С.)*.

7. *«Иҙеүкәй менән Мораҙым»* исемендә татар совет шағиры һәм драматургы Нәҡи Иҫәнбәт тарафынан 1928 йылда яҙып алынған. Ғәрәп графигында ҡулъяҙмаһы, Н. Иҫәнбәттең үҙенең шаҡтай киң аңлатмалары, башҡа варианттар менән сағыштырыуҙары һәм «Иҙеүкәй менән Мораҙым» күсереге тураһында» тигән инеш мәҡәләһе менән бергә Ғилми архивта һаҡлана: ф. 3, оп. 12, д. 232 (текст — 36 бит, инеш мәҡәлә — 24 бит. Биттәр стандарт ҡағыҙҙан күпкә ҙурыраҡ). Ошо уҡ папкаға эпостың Тел, әҙәбиәт институтының тапшырыуы буйынса шағир Маҡсуд Сөндөклө тарафынан татарсаға тәржемә ителгән тексы төпләнгән: латин шрифтлы машинкала баҫылып, стандарт ҡағыҙҙа 37 бит. Ҡулъяҙманың латин шрифтлы машинкала башҡортса баҫылған өс данаһы һаҡлана: беренсе дана — ф. 3, оп. 12, д. 223; инеш мәҡәлә — 34 бит, текст, аңлатма һәм сағыштырыуҙар — 42 бит. Икенсе һәм өсөнсө даналары — оп. 12, д. 225 һәм 231. (Түбәндә ҡыҫҡаса йөкмәткелә килтерелгән өҙөктәр, иҫкәрмәләрҙәге сағыштырма миҫалдар ошо башҡортса текстан алынып, йәйә эсендә бит һаны ҡуйыла.)

Был тексты ҡайҙа кемдәрҙән яҙып алыуы хаҡында Н. Иҫәнбәт түбәндәге мәғлүмәттәрҙе бирә:

«Мин был күсеректең легенда өлөшөн тамъяндын Күсем ауылы (Башҡортостандың хәҙерге Әбйәлил районында — *Н. З.*) һәм Бөрйәндең Төрөкмән, Нуғай ауылдарынан (Башҡортостандың хәҙерге Баймаҡ районында. — *Н. З.*) һөйләтеп күсереп алдым. (1928)[1]. Минең ҡулда был күсеректең бер нисә варианты йыйналды. Былар араһынан мәшһүрерәк булғанын нигеҙ итеп алдым».

Артабан шундай иҫкәрмәләр яһай:

«Быларҙан тыш мин Сәғит Мирасовтың Ғәҙелша ауылы (хәҙерге Баймаҡ районы — *Ә. С.*) Ҡәҙерғол ҡарттан һөйләтеп яҙып алған тексы һәм Дауыт Юлтыйҙың Туҡсоран ҡурайсыһы Батырхан ҡарттан һөйләтеп алған тексы менән таныштым. Улар минең ҡулдағы материалдарға ҡаршылыҡ итмәнеләр, киреһенсә, бик аҙ үҙгәреш менән бер бөтөндөң өлөштәре булыуын күрһәттеләр. Мин үҙ тексымда уларҙан файҙаланған урындарҙы күрһәтә барҙым һәм быға тиклем матбуғатта сыҡҡан әйтемдәрҙе юл аҫтына индереп (йәғни аңлатмаларҙа — *Н. З.*), сағыштырыуҙар яһай барҙым. Ошолай уҡ, был башҡорт күсерегенең күрше халыҡтарҙың шул әйтемдәге күсеректәренә оҡшашлығы ни дәрәжәлә икәнен уҡыусылар үҙҙәре хөкөм итһендәр өсөн, урыны-урыны менән уларҙы ла күрһәткеләй барҙым. Унан һуң, мин был материалдарҙы тик йыйнаусы булып ҡына эшләнем. Билгеле, мин һис бер әйтемдәрен үҙгәртмәнем. Икенсе варианттары булһа, күрһәтә барҙым. Күпме ирешкәнмендер, уҡыусылар хөкөм итерҙәр» (Ҡулъяҙманың машинка баҫмаһы, 33 — 34-се биттәр).

---

[1] Ошонан һуң ҡулъяҙмала: «Күсемдә Сәлим хәлфә, Төрөкмәндә Бикбулатов, Нуғайҙа Ғәли Мәһәҙиевтәр һөйләне» тигән һөйләм бар. Ләкин уны автор һуңынан ниңәлер һыҙған. (Ҡулъяҙма, 24-се бит.)

Әйтелгәндәрҙән шул аңлашыла: беренсенән, эпостың был варианты бер тирәлә (Башҡортостандың көньяҡ-көнсығыш райондарында һәм Туҡсоран буйында) яҙып алынған бер ише өҙөктәрҙән (легенда-хикәйәт һәм ҡобайыр-әйтемдәрҙән) тупланған; икенсенән, тексты төҙөгәндә йыйыусы (Н. Иҫәнбәт), халыҡтан яҙып алынғандарға таянып, бик һаҡ эш иткән, һис ниндәй үҙгәртеүҙәр индермәгән.

Н. Иҫәнбәт үҙенең *ҡулъяҙмаһын* 1930 йыл башында Ғилми йәмғиәткә (1932 йылдан Тел һәм әҙәбиәт ғилми-тикшеренеү институты) тапшырған. Хеҙмәттең титул битендә түбәндәге яҙмаларҙы (резолюцияларҙы) уҡырға мөмкин:

1. Түбәнге һул яҡ мөйөштә:

*Редколлегия ағзаһы Ғөбәй Дәүләтшин иптәшкә*

Ғилми йәмғиәт идараһы һеҙгә ошо китапты уҡып сығып, тейешле тәғризде[1] биреүегеҙҙе һорай. Был әҫәр йәмғиәттең тел һәм әҙәбиәт секцияһында ҡаралып, ғилми йәмғиәт планы буйынса баҫыуҙа тейеш тапты.

Ғилми секретарь: ДАУЫТ ЮЛТЫЙ

*17/1-30.*

2. Өҫкө һул яҡ мөйөштә:

Секретарға:

Ип. Әмировҡа баш һүҙ яҙырға бирергә. Срогы 5 ғинуар 1935 й.

Ғ. Амантаевтың ҡултамғаһы һәм дата — 29 декабрь 1934.

Ғ. Дәүләтшин был хеҙмәт тураһында үҙ фекерен әйткәндерме-юҡмы, йәки Әмиров шул ҡәҙәр ҡыҫҡа срок (бер аҙна) эсендә уға ҡарата баш һүҙ яҙа алғандырмы — уныһын әйтеүе ҡыйын. Был хаҡта бер ниндәй мәғлүмәт һаҡланмаған. Әммә Н. Иҫәнбәттең ҡулъяҙмаһын, уның ҡайһы бер биттәренең поляларына яҙылған замечаниелар буйынса, Афзал Таһиров, Ғабдулла Амантай, Мәүлетҡолов һәм тағы кемдәрҙер уҡыуын белеп була. Был замечаниелар инеш мәҡәләләге йә ҡаршылыҡлы, йә бик үк теүәл булмаған фекерҙәргә ҡайтып ҡала. Бәлки, шуғалыр, әҫәр үҙ ваҡытында донъяға сығарылмай ҡалған. Һуңынан, 30-сы йылдар ахырында, ҡулъяҙма машинкала баҫтырылып, архивҡа тапшырылған. Тексттың татарсаға тәржемәһе 1940 йыл «Коммуна» газетаһының 28 — 29 апрель һандарында баҫылған.

Ҡыҫҡаса йөкмәткеһе:

Вариант «көндәрҙән бер көн тәңренән 9 йәшендә әүлиәлек бирелгән Баба Ғәзиз улы Баба Төкләҫ *(8-се иҫкәрмә)*, 16 йәшлек Иҙеүкәйҙең уйға ҡалып ултырыуын күреп, улының аҡылын һынау өсөн: «Ҡара әле, улым, һиңә бер йомаҡ әйтәм: һин шуның йәбешкеһен таба алһаң, мин һиңә үҙ күңелеңә ярарҙай донъяла бер матур ҡыҙ алып бирәйем», — тип, йомаҡ әйтеү менән башлана. (М. Буранғолов вариантында Иҙеүкәйгә был йомаҡты Һабрау ҡарт әйтә. *(5-се иҫкәрмәне ҡарағыҙ.)*

---

[1] **Тәғриз** — отзыв, рецензия.

Йомаҡтың яуабын әйткәндән һуң, Иҙеүкәй, атаһы вәғәҙә иткән ҡыҙ урынына, «бөтә донъяны бер әйләнеп сығырға» рөхсәт һорай. Атаһы риза булып, Иҙеүкәйгә бер йөҙөк менән бер ат бирә лә: «Ошоларҙы үҙең менән тот, айырылма, хур булмаҫһың!» — тип ҡала.

Иҙеүкәй бер даръя ситендә «донъяла тиңе булмаған» бер ҡыҙҙың, һыу инеп, сәсен тарап ултырғанын күреп, ҡыҙ артынан арғымағы менән бергә һыуға сума; күҙен асып ебәрһә — алтын тәхет өҫтөндә баяғы ҡыҙ ултыра.

Ҡыҙ:

« — Һин минең яланғас тәнемде күрҙең. Мин хәҙер тәңремә гонаһлы булдым. Мине үҙеңә алып, минең гонаһымды юй», — ти (39-сы бит).

Иҙеүкәйҙең риза булыуы, ҡыҙҙың сәсен тарағанда — башына, күлмәген һалғанда — тәненә, итеген һалғанда аяғына ҡарамаҫҡа шарт ҡуйыуы. Башта риза булһа ла, аҙаҡ Иҙеүкәйҙең был шартты тотмауы: «...сәсен тарағанда, башына ҡараһа, сәсен башынан алып, алдына һалып тарап ултыра; күлмәк сискәндә, тәненә ҡараһа, ҡултыҡ аҫты тишек булып, үпкә-бауырҙары күренеп тора; итеген сискәндә, аяғына ҡараһа, аяғы ҡыр кәзәһенең аяғы кеүек йөнлө (ҡулъяҙмала шулай, 39-сы бит. Дөрөҫө: «кәзә тояғы кеүек ике айыры», булырға тейеш).

Шарттың боҙолғанын белгәндән һуң, ҡыҙ: «...Инде бергә тора алмайбыҙ. Ваҡыты етеп, ҡорһаҡтағы балам тыуһа, уны был даръя ситенән эҙләп табарһың, хуш!» — тип, күҙҙән юғала (39-сы бит).

Иҙеүкәй, арғымағына атланып, «күҙ асып — күҙ йомғансы» ер өҫтөнә сыға, күп эҙләнеп йөрөгәндән һуң «аҡ ебәккә уралған» балаһын таба. «Бер бәрәүҙән йәберләнгән» халыҡтарҙың Иҙеүкәйгә хөкөмгә килеүе (ләкин ниндәй хөкөмдәр булыуы әйтелмәй), Иҙеүкәйҙең ил эсендә ҙур дан алыуы әйтелә[1].

Иҙеүкәйҙең «аҡыллылығын, батырлығын, сәсәнлеген» ишетеп, Туҡтамыш хандың уны үҙенә саҡыртыуы һәм «яурындары таҡталы, төймә бауы тартмалы» тун, күк тарлан (ат), «тотор бауы һум алтын» аҡ шоңҡар биреп, ҡор башы* итеп ҡуйырға вәғәҙә итеүе. Иҙеүкәйҙең ризалашып бында ҡалыуы һәм, «ҙур туй яһап», улына «Мораҙым» тип исем ҡуштырыуы (41-се бит).

Йылдар үтә килә, Туҡтамыш хандың бисәһе «Иҙеүкәйҙең үҙ атаҡлығы менән Туҡтамыш ханды күләгәлә ҡалдырыр, көндәрҙең берендә Иҙеүкәйҙе хан итеп күтәрерҙәр тип» ҡурҡыуға төшөүе һәм, Иҙеүкәйҙе бынан нисек тә ҡыуҙыртыу иҫәбе менән, ханға төш һөйләүе, уны үҙе үк Иҙеүкәйгә ҡаршы юрауы *(46-сы иҫкәрмәне ҡарағыҙ)*.

---

[1] Ошо урында Н. Иҫәнбәт түбәндәге иҫкәрмәне бирә: «Иҙеүкәй менән Мораҙым» күсерегененең бер нисә беркетмәһе (тексы) ҡаралып, бында хәтле яҙылышында С. Мирасовтың беркетмәһе яҡын итеп алынды. Мирасов үҙ беркетмәһен Ғәҙелша ауылы, хәҙер Баймаҡта тороусы 73 йәшлек Ҡәҙерғол Биктимер улынан һөйләтеп алыуын яҙа.

Инде бынан башлап Иҙеүкәй менән Янбайҙың әйтешкән еренә хәтле Дауыт Юлтый материалдары менән файҙаландым. Юлтый иптәш үҙ беркетмәһен Абдул (Егәнлек) ауылы (Туҡсоранда) ҡурайсы Батырхан Самбытов ҡарттан алыуын күрһәтә. Күсеректең тулы сығыуына ярҙам итешкән был иптәштәргә ҙур рәхмәт уҡып үтәм». (40-сы бит.)

Туҡтамыш хандың, «иҫерткес эсемлектәр» эсереп, Иҙеүкәйҙе үлтертергә теләүе, Ыласындың йыр менән Иҙеүкәйгә иҫкәртеүе *(52-се иҫкәрмә)*. Эште аңлап, Иҙеүкәйҙең ҡасыуы *(53-сө иҫкәрмә)*.

Туҡтамыш хандың батырҙарға мөрәжәғәте *(56-сы иҫкәрмә)*.

Иҙеүкәй артынан ҡыуа сығырға батырҙарҙың береһененең дә ҡыйыулығы етмәгәс, Туҡтамыш хандың «үҙенең алтын арбаһына аттарын ектереп», «илдең иң өлкән кәңәшсеһе атаҡлы Һабрау йыраусыны» саҡыртыуы, 195 йәшлек Һабрау ҡартты «бик ҙурлап» ҡаршы алыуҙары һәм Туҡтамыш хандың, түбәндәге әйтемен әйтеп, уға «алтын аяҡ» менән һары бал биреүе:

Һабрау килә, тинеләр,
Һабрау килә, тинеләр,
Һур ауыҙлы, һур күҙле,
Сап иренле, тинеләр.
Һай, тием, собар, тием, собар,
Тибелгән аттан тир сығар.
Аҡ мамыҡтан буҙ сығар,
Аҡыллы ирҙән һүҙ сығар.
Йөҙ тукһан биш йәшәгән,
Йәне, һөйәге ҡаҡшаған,
Аҙыуҙарын теҙҙереп,
Аҡ ебәк менән бәйләгән,
Һүҙҙе уйлап һөйләүсе,
Һәр бер эште көйләүсе,
Ил өлкәне Һабрау би,
Ҡәңәш һиндә ҡалды инде.
Нуғай иле ауыр йорт[1]
Аптырауға әйләнде,
Йыраусы ҡартым, йырла йыр,
Йырламаһаң, һынай бир!

(47 — 48-се биттәр.)

Һабрауҙың яуабы — М. Буранғолов вариантынан айырылмай тип әйтерлек.

---

[1] Дауыт Юлтый материалдарында:

Урал буйы ауыр йорт
Аптырауға әйләнде,
Урал улы Манғутым,
Ҡәңәш һиндә ҡалды инде.

(4-се биттә Н. Иҫәнбәт иҫкәрмәһе.)

Был бик әһәмиәтле иҫкәрмә. Бында, беренсенән, Н. Иҫәнбәт Иҙеүкәйҙең даръя төбөнән сығып Янбай менән булған диалогына саҡлы Д. Юлтый яҙмаһы нигеҙгә алыныуы хаҡында юғарыла иҫкәртеү яһап үтһә лә, был урында унан ситләшеүе аңлашыла. Икенсенән, иң мөһиме — Д. Юлтый вариантында, күрәһең, Урал буйы тураһында һүҙ бара. Туҡтамыштың Һабрау ҡартҡа «Урал улы Манғутым» тип өндәшеүе шулай уҡ иғтибарға лайыҡ.

Һигеҙ ирҙе эйәртеп, Янбайҙың Иҙеүкәй артынан китеүе. Иҙеүкәй менән Янбай диалогы — Буранғолов варианты менән берҙәй *(70-се иҫкәрмәне ҡарағыҙ).*

Үҙенең 28 яранын эйәртеп, Иҙеүкәйҙең Сатмыр ханға китеүе, юлда 41 батырға тап булыуы, уғрыларҙан ҡыҙын ҡоткарып, Сатмыр ханға кейәү һәм вәзир булыуы *(83-сө иҫкәрмә).*

«Сатмыр хан: — Илемдә дау ҡырынан яу булһа, Иҙеүкәй, һин бөтөр, — ти. Иҙеүкәй дауҙы бөтөрә, яуҙы ҡыра. Күберәк яуҙарҙа Мораҙым баш булып, ҙур дан тота. Сатмыр хан быларға таянып, яй ғына, тыныс ҡына йәшәй» (62-се бит).

Бер көндө Мораҙым: «Әй, ата, беҙҙе Туҡтамыш хан әрләне лә, хурланы ла. Беҙ унан үсебеҙҙе алырға тейеш булып ҡалдыҡ. Дошмандан ҡурҡып ситтә йәшәү ирлек түгел, Туҡтамыш хандың илселәренә биргән һүҙеңде онотма», — тип, Иҙеүкәйҙең иҫенә төшөрә.

Иҙеүкәйҙең, «ҙур ғәскәр әҙерләп, бер Урҙаға — Мораҙым, бер Урҙаға үҙе баш булып», Туҡтамышҡа ҡаршы һуғышҡа китеүе, юлда төш күреүе *(85 — 86-сы иҫкәрмәләр).*

Туҡтамыштың ҡасыуы, Мораҙымдың ҡыуа сығыуы. Ҡадирбирҙенең: «Әй, Иҙеүкәй, Туҡтамыш һарайы ҡулында сағында, улыңды ниңә көтәһең? Һеңлемде үҙеңә генә ал», — тип, Иҙеүкәйҙе ҡотортоуы *(99-сы иҫкәрмә).*

Мораҙымдың Туҡтамышты үлтереп ҡайтыуы һәм, вәғәҙәһен боҙған өсөн, атаһының күҙен сығарыуы *(100-се иҫкәрмә).*

Иҙеүкәй менән Мораҙым диалогының тәүге өлөшө, нигеҙҙә, Буранғолов вариантындағыса; Мораҙымдың үҙ яҙығын ҡәғбәгә барып йоларын әйткәндән һуң, Иҙеүкәйҙең яуабында шиғри йәһәттән төҙөк булмаған өс әйтем килтерелә (улар 113-сө иҫкәрмәлә килтерелгән өҙөктәрҙе хәтерләтә).

Диалогтың шунан һуңғы өлөшө түбәндәгесә:

Мораҙым:

— Мин тормамын, тормамын,
Атым башын бормамын.
Яманға юлдаш булмаһам,
Хәҙерләнгән юлымнан
Туҡратмаһын хоҙайым.
Мин баш эйеп йөрөнөм,
Ҡәҙеремде белмәнең,
Теләгемде бирмәнең,
Вәғәҙәңдә торманың.
Хуш, һау булың, ҡарт атам.
Ҡайта тупҫа баҫмамын.
Атамдың минән көлгәне —
Мораҙымдың үлгәне.

Иҙеүкәй:

— Айҙы беленер көндән һуң,
Көндө беленер айҙан һуң.
Айҙың моңло булғаны —
Битен монар алғаны,
Көндөң моңло булғаны —
Битен болот алғаны.

Бейек тауҙың үлгәне —
Башын томан алғаны.
Ай менән көндөң үлгәне —
Тонйороп барып батҡаны.
Ҡара ерҙең үлгәне —
Ҡар аҫтында ҡалғаны.
Баланан хурлыҡ күргәне —
Шул була атаның үлгәне.
Үлмәгәндә ни үлмәй,
Яҡшының аты менән
Уның яҙған хаты үлмәй.

Мораҙым:

— Мин ун йәшкә килгәндә,
Осор ҡоштай талпынған,
Ун бер йәшкә килгәндә,
Яуға ҡаршы ҡалыҡҡан,
Ун ике йәш килгәндә,
Артымда туҙан уйнаған,
Алдымда дошман илаған.
Ун өс йәшкә килгәндә,
Күп улъя алып, үҙенә мал иткән.
Ун дүрт йәшкә килгәндә,
Күп батырҙы ҡол иткән.
Ун биш йәшкә килгәндә,
Атаһы уның һөйгәнен алып хур иткән.
Төкләҫ улы Түрәнең,
Иҙеүкәй улы Мырҙаның
Бер ҡат бағы һынған һуң,
Ҡире ҡайтыр уйы юҡ.
Ағың миңә кәрәкмәй,
Бағың[1] миңә кәрәкмәй;
Гәүер баҫһын иленде,
Дошман алһын ереңде!
Был китеүҙән китермен,
Китеп Иҙел кисермен,
Нарыҫ тауға етермен,
Шунда ғүмер итермен.

Иҙеүкәй:

— Аҡ шоңҡарҙың балаһы
Бауҙа тора талпынып,
Баулы шоңҡарҙай талпынма,

---

[1] *Бағ* — баҡса, *бағ-тағ* (баҡса-тау) һүҙҙәренең был рәүешле әйтелештәре төшлөк яҡ төрөк телендә *ри* төркөмөнә хас булып (Самойлович материалдары ҡараламаһы), был төркөмдән булмаған башҡорт теленә бындай әйтелештәрҙең килеп кереүе был күсеректең төшлөк яҡ төрөк нуғайҙарҙан килеүен күрһәтә *(Н. Иҫәнбәт иҫкәрмәһе)*.

Ғәйрәт ҡунған һының бар,
Бәхетең китер арҡылып.
Торомтайҙан йылғыр ҡош булмаҫ,
Турғай ҙа тибеп, ҡаҙ алмаҫ,
Атҡынан[1] йөрөк уҡ булмаҫ,
Атһаң күбә[2] боҙолмаҫ.
Бабһыҙ* булған аҡ толпар
Сапһа ла бауырын яҙа алмаҫ.
Тикһеҙҙән* тыумай тик* батыр
Яуға һөңгө һуҙалмаҫ.
Ҡарыҡланған ҡашҡалар[3]
Яу ситенә олашмай,
Арыҫландай алышмай,
Ҡыҙартып күҙен ҡыҙалмаҫ.
Әй, әле лә әлә-әлә булмаҫ,
Бәлә лә бәлә бәлә булмаҫ.
Атанан тыумай ул булмаҫ,
Әсәнән тыумай ҡыҙ булмаҫ.
Һөнәрһеҙ һине күрә алмаҫ.
Илдән илгә елбүк* үтһәң дә,
Был донъялар һиңә ҡалмаҫ.

Мораҙым:

— Өҙән, Өҙән, Өҙән һыу —
Бабам ғүмер иткән йорт,
Төйәләҫтең араһы —
Төйә менән тулған йорт,
Ырыҡтының араһы —
Йылҡы менән тулған йорт,
Бейә һауған һөтлө йорт,
Ҡымыҙ эскән ҡотло йорт,
Өҙөкләп һуккан һум тимер
Миңә хәнйәр булған йорт.
Ынйы-мәрйен таҡҡан йорт,
Акбуҙ атка менгән йорт,
Атам-анам тыуған йорт.
Ун ике ырыуҙы йыйған йорт,
Өлкән бер туй ҡылған йорт.
Ултыра инек яйлашып,
Ҡолон бейә бәйләшеп,
Һауыт-һаба тултырып,
Тик ҡәрҙәште йыйып утырып.
Дәүран ғүмер һөргән йорт,
Әльәман бул, мин китәм.

---

[1] *Атҡы* — тоҙ ҡолаҡлы уҡ *(Н. И.)*.
[2] *Күбә* — тимер кейем *(Н. И.)*.
[3] *Ҡарыҡланған ҡашҡа* — һуғыштан ғәйрәте ҡайтмаған батыр *(Н. И.)*.

Боронғолай ҡаршылап
Ҡуналманыҡ ҡыуышҡа,
Килә алманыҡ килешкә,
Ата-ананы шунда ҡалдырып,
Киткәнбеҙ беҙ ян йортҡа.

Был барғандан барырмын,
Үҙ илемдә урын алырмын,
Дошманды ҡырҙа табармын,
Яуға ҡаршы сабармын,
Үтенеп алып ут яҡһам,
Юлымды тәңре уңдырһа,
Ҡадирбирҙе һолтанды
Мин ҡалдырмам тәхеттә,
Бөтә йыйған малларын
Килеп улъя ҡылырмын! —

тип атына атланып, үҙ урҙаһына:

— Атамды теләгәндәр бында ҡалһын, мине теләгәндәр минең менән барһын! — ти. Шунан 17 батыр Мораҙымға ҡушылып китәләр. Иң элек Ҡадирбирҙе һолтан Урҙаһына йөрөп, уны барып баҫалар. Мораҙым Ҡадирбирҙе һолтанға әйтә:

Мин — мин инем, мин инем,
Ат өҫтөндә булғанда,
Үкереп торған ир инем.
Якшыларға йоп инем,
Ямандарға күп инем.
Әжәл менән аңлашкан
Мин — үлем юҡ тир инем.
Хан балаһы аҡ һөйәк,
Ата дошман һин инең.
Аңдыған яуың мин инем.
Ҡайһы бер ерҙә ҡан ҡойоп
Тураҡлаһам тир инем.
Мин — мин инем, мин инем,
Дошманға ҡаршы торғанда,
Уҫал арыҫлан инем.
Ҡай батырҙан кәм инем?
Бары менән тиң инем.
Ир әйҙәгән ир инем.
Көндәрҙең көнө булғанда,
Ил ҡоллаһам тир инем.
Нуғайлының иленә
Ирекһеҙ керһәм тир инем.
Иҙелдә яткан ҙур илгә
Мал тултырһам тир инем.
Һиндәй залим хандарҙы,
Ҡарыны йыуан биҙәрҙе,

Айыуҙай тауышын аҡыртып,
Ҡатын-ҡыҙын баҡыртып,
Улъя ҡылһам тир инем.
Ҡабырғаһын һындырып,
Буйынан аҡкан ҡара ҡан
Ат бауырынан түгелеп,
Ҡаныңды эсһәм тир инем.
Бүленә үҫкән иленде
Өрөккән ҡуйҙай итермен;
Айырыла үҫкән иленде
Айырылған ҡуйҙай итермен!

Ҡадирбирҙенең илен туҙҙырып, үҙенең батырҙары менән берлектә, бабаһы, баба Төкләҫ йорто булған Дим буйына[1] китергә була.

Мораҙым:

Айҙан яҡты нәмә юҡ,
Ҡара болот баҫмаһа,
Әҙәм ғәрибе шул булыр —
Ҡайтып илен тапмаһа.
Киң яурынды уҡ алмай,
Атҡан уғым юғалмай.
Мин барамын, барамын,
Үҙ илемде аламын.
Балтырғаны беләктәй,
Һарнаһы алма, еләктәй,
Йылғаһы көмөш улаҡтай,
Балығы һимеҙ ҡурҙаҡтай,
Ағасы айҙай күренгән,
Япрағы ергә түгелгән,
Ботағы көмөш алҡалай,
Япраҡтары ҡалҡалай;
Атам кейәү булған ер,
Анам килен булған ер,
Кендегемде киҫкән ер,
Ҡолонсаҡ айғыр булған ер,
Ятып ҡалған бер бәрәс
Мең ҡуй булып үргән ер.
Былар҄ы Иҙел ҡараған,
Өйөрө буйға таралған,
Балығы айҙай тулаған,
Баҡаһы ҡуйҙай һыулаған,
Ун ике йортто һуғарған,
Һыуы тәмен һалмаған,
Эсмәгән йән ҡалмаған,

---

[1] Хәҙерге Өфө тауҙары һәм Дим буйҙарында Нуғай хандарынан Төкләҫ һәм уның балалары йәшәгән. Бында «баба Төкләҫ йорто» тип аталыуы шунан булһа кәрәк (*Н. И.*).

Яйыҡ, Иҙел, Димдәрҙең,
Һаҡмар, Эйек, Әйҙәрҙең,
Атам барын мәкан иткән ер.
Атам торған бейек тау
Бабам Төкләҫ һарайын.
Иҙелдә тороп уҡ атһа,
Яйыҡҡа барып юғалған;
Үҙе тауҙа ултырып,
Ун ике биҙе үлтергән;
Ун ике биҙе үлтергән,
Тигәненә еткергән;
Табаны ергә теймәгән
Толпарҙан башҡа ат менмәгән,
Хөрмәтләшкән дуҫында,
Артығым китте тимәгән.
Баба Ғөмәр[1] атайҙан,
Әүлиә Төкләҫ бабайҙан
Дәүран ғөмөр һорарбыҙ.

(Диалогтың бында күсерелгән һуңғы өлөшөндә поэтик яҡтан байтаҡ айырымлыҡтар, ә демократик йөкмәткеһе менән М. Буранғолов вариантына яҡынлыҡ һиҙелә. Уртаҡлыҡ — һәр икеһендә лә тыуған илде яҡын күреү, илгә, халыҡҡа хеҙмәт итеү данлана.)

Артабан Мораҙымдың үҙ батырҙары менән Уралға ҡайтып, Дим буйында Нарыҫ тау тирәһендә урынлашыуы һәм шунда «12 йорт башҡорт менән Нуғай иленең ханы» булыуы әйтелгәндән һуң, вариант шулай тамамлана:

«Мораҙым йәй йәйләп, ҡыш ҡышлап, һунар сығып, ҡош атып, ау аулап, йылҡы бәйләп, ун ике йорт биләп көн итә башлай.

Мораҙымдың Ҡаҙанҡап исемле бер улы була. Берҙән-бер көндө әсәһе Ҡаҙанҡапты һуғып илата. Мораҙымдың быға бик асыуы килә. Бисәһе Мораҙымға әйтә:

— Атаңа ни ҡылһаң, һинең алдыңа ла шул килер, һин атаңа ни күрһәтмәнең, был беҙгә ни күрһәтмәҫ! — ти. *(157-се иҫкәрмә.)*

Шул һүҙ менән Мораҙымдың үҙ атаһы, уға күрһәткән эштәре, йолонмаған яҙыҡтары иҫенә килеп төшә. Шунан һуң юл кәрәк-яраҡтарын күреп, йыраҡ юлға сыға. Иң элек тәңре өйө ҡәғбәгә* барып, ун ете әйләнеп, яҙығын йолғас, атаһы янына килә, унан бәхиллек һорай. Мораҙымдың яҙығы йолоноп, ҡылған доғаһы ҡабул булып, атаһы ҡарт Иҙеүкәйҙең һуҡыр күҙҙәре асылған була. Иҙеүкәй Мораҙымға бәхиллеген биреп, Мораҙым уны үҙ иленә алып ҡайтып, бергәләп йорт биләйҙәр. Иҙеүкәй Мораҙымдан бик риза була.

Иҙеүкәй:

Мораҙым да булһаң булдың һин,
Егет дәүерен данлы һөрҙөң һин,

---

[1] 7-се иҫкәрмәне ҡарағыҙ.

Болотҡа еткән Нарыҫ тауҙы
Елебүк тә елебүк үттең һин!
Ай ҡашында бер йондоҙ
Чаһарҙа балҡый тыуҙың һин!
Ҡағиҙәлелер был табын,
Ятҡа йоҫоҡ булдың һин! — ти.

Иҙеүкәй оҙаҡ тормай үлеп, Нарыҫ тауҙың битенә күмелә. Мораҙым атаһы үлгәндән һуң, Төйәләҫ буйына килеп үлә.

Унаң ғүмер иткән тауы бөгөнгө көндә лә «Мораҙым тауы» тип атала. Мораҙым тауы Йылайыр кантоны Төйәләҫ һыуы буйында, Төрөкмән ауылы менән Төпән ауылдары араһында булып, ошо тау башындағы зыярат — ана шул Мораҙым хан зыяраты тиҙәр. Тирә-яҡтағы башҡорттар шул тауға ҙур хөрмәт менән ҡарайҙар.

Иҙеүкәйҙең күмелгән Нарыҫ тауы Дим буйы, Миәкә ауылы янындағы ҡуш тау булып, унаң зыяратынан шишмә сығып ағып ята, ти. Халыҡ шул шишмәне әүлиә кендегенән ағып сыҡҡан һыу, имеш, бик күп ауырыуҙарға шифа, имеш, тип һыуынан файҙаланалар, ти».

Күренеүенсә, варианттың бөтөмөндә дини йоғонто һиҙелә.

8. *«Илеүкәй, Келәйле, Яйыҡ батырҙар тураһында»* тигән исем менән 30-сы йылдар башында Башҡортостандың Миәкә районы Әбеш ауылы муллаһы 70 йәшлек Чаһаръяр Мусиндан М. Буранғолов яҙып алған. Ҡульяҙмаһы һакланмаған. Латин шрифтындағы машинкала баҫылған. Текст проза менән аралаш ҡобайырҙан тора. — Ғилми архив, ф. 3, оп. 12, д. 230, 20 — 26-сы биттәр.

Был, асылда, эпос геройҙарына ҡарата легенда һәм риүәйәттәрҙән ғибәрәт. Тәүге өлөшөндә борон Дим буйында йәшәгән Дәмми бей менән Ыршаҡ бейгә ҡаршы яу менән Яйыҡтан Яйыҡ батыр, Иҙелдән Илеүкәй батыр, Уралдан Келәйле батыр килеүе, теге бейҙәрҙе һуғышып еңгәс, үҙ-араһы ерҙе бүлешеп, йөҙ башлыҡтарын ауыл-ауыл тарҡатып, Дим буйына ултырыуҙары хикәйәләнә, Дим буйындағы ауылдар шул йөҙ башлыҡтары исеме менән аталыуы хәбәр ителә.

Артабанғы ваҡиғалар (Яйыҡ батырҙың оло ҡатынынан тыуған һигеҙ улы менән йәш бисәһе ҡаҙаҡ ҡыҙынан тыуған улы Туҡ батыр араһында ер өсөн талаш һәм Асылы күл легендаһы) китапта баҫылған тексттың XXIII бүлегендә шаҡтай тулы сағыла.

9. *«Туҡтамыш хан менән Иҙеүкәй ваҡиғаһы»* исемендә Баймаҡ районы Баймырҙа ауылы уҡытыусыһы Ҡотлоюл Улъябаевтан Сәлим Дауытов яҙып алып, 1940 йылдың 9 ғинуарында Тел һәм әҙәбиәт институтына тапшырған. Исеменең аҫтына, йәйәләр эсендә «Иҙеүкәй һәм Мораҙым. Әкиәт» тип ҡуйылған. Латин шрифтындағы машинкала баҫтырылған, 8 бит (2 дана). Текст сәсмә һәм шиғри телдә. 9-сы биттә 7 һүҙгә аңлатма һәм «аттарҙың йәшкә бүленеше» бирелгән. — Ғилми архив, ф. 3, оп. 12, д. 230, 2 — 10-сы биттәр (бер дана) һәм 11 — 19-сы биттәр (икенсе дана).

Башлана:

«Туҡтамыш хан булған, унаң ҡулында Иҙеүкәй тигән ҡол булған. Аҙаҡтан ул бей булып исемләнеп китә.

Иҙеүкәй үҙе бик баһадир, шундай көслө бер батыр була. Туҡтамыш хан унаң батырлығынан һәр ваҡыт ҡурҡыр булған. Иҙеүкәй кергән ваҡытта, Туҡтамыш хан ҡурҡҡанлығынан урынынан шыуа бирел ултыра. Хан

үҙенең шыуғанлығын бер ҙә һиҙмәй. Мәгәр хандың ҡатыны быны һиҙә. Туҡтамыш ханға:

— Һин Иҙеүкәй ҡолдан ҡурҡаһың бит, — ти».

Артабан хандың Иҙеүкәйҙән ҡурҡыуы, бер вәзиренең кәңәше менән «бер сараяҡҡа бал ҡойҙороп, шул сараяҡҡа Ғәнәкә менән Тутайҙан (хандың ҡыҙҙары. — *Н. З.*) Иҙеүкәйҙең күҙ алдында бәүел ҡылдырып», балды Иҙеүкәйгә эсереүҙәре *(47-се иҫкәрмә),* асыулы әйтемен әйтеп, Иҙеүкәйҙең Са Тимер ханға сығып китеүе, Янбайҙың ҡыуа сығыуы һәм, башҡа варианттарҙан айырмалы рәүештә, Иҙеүкәйҙе кире бороп алып ҡайтыуы, ҡайтҡас, Туҡтамыштың Иҙеүкәйгә ҡыҙын биреүе тураһында хәбәр итеп, ялған туй үткәреүе, бында Иҙеүкәйҙең «эсеп мас» булыуы, дуҫы Аңғыһындың Иҙеүкәй атының эйәр айылдарын тартып бәйләп, башҡаларҙың өҙәңгеләрен киҫеп сыҡҡандан һуң, йортҡа инеп:

«Минең дә исемем Аңғыһын,
Байҡап та бер эс һуңғыһын», —

тип, йыр менән Иҙеүкәйҙе иҫкәртеүе хикәйәләнә. Шунан эште аңлап, Иҙеүкәй ҡуҙғалғас, хандың ҡатыны «кейәү ҙә кейәү» тип, Иҙеүкәйҙең алдына алдыр тотоп килеп баҫҡан икән, теге кире һирпеп ебәрә лә ишеккә ҡарап ынтыла. Хандың әҙерләп ҡуйған кешеләре тегене сығармаҫҡа йәбешә. Иҙеүкәй уларға көс бирмәй, тирмә өйө менән ҡуша һөйрәп, тышҡа сыға ла атына менә, Са Тимер ханға барасағын әйтә *(52 — 53-сө иҫкәрмәләрҙе ҡарағыҙ).*

Иҙеүкәйҙең юлда ҡалмыҡ батыры менән осрашыуы; уны үлтереп, Са Тимер хандың ҡыҙын азат итеүе һәм атаһына илтеп биреүе *(83-сө иҫкәрмәлә тулы килтерелә).*

Был вариантта Иҙеүкәй Са Тимер хандың ҡыҙына өйләнеп, Мораҙым ошонда тыуа, үҫеп еткәс, яу менән Туҡтамыш ханға китә. Ҡамҡалы күл Ҡом сыуаҡ тигән күл буйында *(94-се иҫкәрмә)* Туҡтамышты үлтерә, башын алып ҡайта.

Тамамлана:

«Туҡтамыш хандың башын күреп, (Иҙеүкәй) Мораҙымдан һорай:

— Муйынын эймәнеме?

— Эйҙе.

— Эйелгән муйынды ҡылыс киҫәме? Эйгәс, ниңә үлтерәһең, тереләй тотоп алып ҡайтһаң булмаймы? — тип, Мораҙымды ҡамсы менән баштан аша һуға. Шул ваҡыт Мораҙымдың бер күҙен сығара һуға. Шунан һуң Мораҙым бер күҙҙән һуҡыр булып йөрөй.

«Эйелгән муйынды ҡылыс киҫмәй» тип әйткән һүҙ шунан ҡалған тип һөйләйҙәр» (9-сы бит).

Мораҙымдың Иҙеүкәйгә түгел, ә киреһенсә — Иҙеүкәйҙең Мораҙымға һуғып күҙен сығарыуы башҡа варианттарҙа осрамай.

10. *Иҙеүкәй менән Мораҙым* — йыйылма текст. Башҡорт шағирҙары Рәшит Нигмәти, Баязит Бикбай, халыҡ сәсәне Мөхәммәтша Буранғолов һәм тарихсы Әбүбәкер Усмановтар тарафынан төҙөлгән. Нигеҙгә М. Буранғоловтың газетала баҫылған варианты алынған.

Ғилми архивта йыйылма текстың бер нисә варианты һаҡлана:

1) Ф. 3, оп. 12, д. 224 — тәүге вариант булһа кәрәк. Латин графигында машинкала баҫтырылған, төпләнгән, 166 бит. Машинканан һуң ҡыҫҡартылған һәм яңынан өҫтәлгән биттәре күп. Титул битендә: «Иҙеүкәй менән

Моразым (Башкорт халкынын героик эпосы)»; текстын hунгы битендә: «Ошбу мөнәжәтне Институтнын үтенеүе буйынса яздылар Ғәбдрәшит Ниғмәтуллин, Баязитдин Бикбаев, Мөхәммәтша Буранғолов. 1940 сәнә, октябрнең 23-се йәүмендә, Уфа шәһәре».

2) Ф. 3, оп. 12, д. 222 — әле әйтелгән текстың машинкала баҫтырғандан һуңғы 3-сө данаһы. Төпләнгән, 145 бит. Титул битенә «Өфө, 1940» тип өҫтәлгән, һуңғы биттәге иҫкәрмә юҡ.

3) Ф. 3, оп. 12, д. 229 — рус графигында машинкала баҫтырылған һуңғы ике вариант бергә төпләнгән, бөтәһе 384 бит.

Беренсеһе — асылда йыйылма текстың өсөнсө варианты, 158 бит: текст — 152 бит, һүҙҙәргә аңлатма — 6 бит. Текст элеккеләрҙән әллә ни айырылмай, эпиграф һәм башлауҙан тыш 15 ҡобайырҙан (бүлектән) тора. 1941 йылда Башҡортостан китап нәшриәтендә баҫтырып сығарыу өсөн әҙерләнгән. Титул бите: «М. Ғафури исемендәге Башҡортостан тел һәм әҙәбиәт ғилми-тикшеренеү институты. Иҙеүкәй менән Мораҙым, башҡорт халыҡ героик эпосы. Башгосиздат, художестволы әҙәбиәт секторы, Өфө, 1941». Икенсе биттә: «Эпостың йыйылма вариантын төҙөнөләр: Р. Ниғмәти, Б. Бикбай, М. Буранғол, Ә. Усманов». Йыйылма текстың ҡыҫҡаса йөкмәткеһе һәм иҫкәрмәләрҙәге сағыштырыуҙар ошо вариант буйынса бирелә.

Икенсеһе — әҙәбиләштерелгән вариант. Баҫтырып сығарыуға тегеһе, күрәһең, ҡабул ителмәйенсә, яңынан эшләнеп, ике данаһы нәшриәткә тапшырылған. Титул битенә «Ә. Усманов һүҙ башы менән» тип өҫтәлгән. Төҙөүселәрҙең фамилияһы күрһәтелмәгән. Күләме — 236 бит, эпиграф, бағышлау һәм 15 ҡобайыр. Һуңғы бер нисә бит һәм һүҙлек-аңлатма юҡ. Күрәһең, вәғәҙә ителгән «һүҙ башы» ла яҙылмаған.

4) Ф. 3, оп. 12, д. 227 — йыйылма текстың өсөнсө варианты буйынса руссаға һүҙмә-һүҙ тәржемәһе. Ҡулъяҙма, 213 бит. Титул бите: Башкирский эпос. Идукай и Мурадым. (Подстрочный перевод.) Тәржемәсеһе һәм йылы күрһәтелмәгән.

1940 йылдың ахырында — 1941 йылдың I кварталында рус шағиры Александр Роммдың «Иҙеүкәй менән Мораҙым» эпосын руссаға тәржемә итеү өҫтөндә бик бирелеп эшләгәнлеге билдәле. ЦГАЛИ-ҙа унын архивында юғарыла әйтелгән һүҙмә-һүҙ тәржемәнең машинкала баҫылған бер данаһы һаҡлана. — ЦГАЛИ, личный фонд Р. И. Ромма. Ф. 1495, оп. 1, ед. хр. 183. А. Роммдың Мәскәүҙән Өфөгә Ә. Усмановҡа һәм Х. Хамматовҡа яҙған хаттарынан уға был (һүҙмә-һүҙ) тәржемәне Морат Ғәлиев әҙерләгәнлеген һәм артабан тәржемә эшләү өсөн Роммды ҡәнәғәтләндергәнен белеп була. (Шунда уҡ, ед. хр. 103 һәм 104.) Шул уҡ архивта А. Роммдың художестволы тәржемәһенең ҡараламаһы (йыйылма текстың I — 7-се бүлектәре) һаҡлана (ед. хр. 26). Тәржемә тамамланмаған. А. Ромм Бөйөк Ватан һуғышында һәләк була.

1940 йыл «Советская Башкирия» газетаһының 29 сентябрь һанында А. Новиков тәржемәһендә бер өҙөк баҫыла.

## Йыйылма текстың ҡыҫҡаса йөкмәткеһе

*Эпиграф* — «Бөйөк тауҙың үлгәне...» тигән ҡобайырҙан 8 юл. Баҫылған: БХИ: Эпос, 3-сө китап, 164 — 165-се биттәр.

*Бағышлау* — «Ишет быны ҡартыңдан» тигән ҡобайыр өҙөгө. — БХИ: Эпос, 3-сө китап, 164-се бит.

*Беренсе ҡобайыр* (4 — 7-се биттәр). Уралды данлау — «Ай Уралым, Уралым» тигән ҡобайыр. — БХИ: Эпос, 3-сө китап, 153 — 155-се биттәр.

*Икенсе ҡобайыр* (7 — 22-се биттәр). Данлы Уралда «батыр, ғәҙел аҡыллы» Төкләс тигән ир (8-се иҫкәрмә) йәшәгәне, бала-сағаһыҙ булып, бик оҙаҡ «бер хоҙайҙан» ул һорағаны, Ағиҙел буйында йәйләгәндә улы тыуғас, уға, «ун ике йорт ырыуға балам иҙеү булһын тип, илгә килгән дошманды Ағиҙелдәй быуһын тип», Иҙеүкәй исеме ҡушҡаны.

Иҙеүкәйҙең эпик бала сағы: өс айлыкта сәңгелдәккә һыймауы, өс йәшендә ун йәшлектәр менән уйнауы, сәкән алып туп һуҡһа, тубы күҙҙән юғалыуы һ. б.

Иҙеүкәйҙең үкһеҙ үҫкән Ыласынды малайҙар туҡмауынан айырып ҡалғаны һәм уның менән мәңгелеккә дуҫлашҡаны.

Бер заман сәкән һуғыш уйнағанда, малайҙар янына 175 йәшлек бер ҡарттың (Һабрау) килеп сығыуы, малайҙарҙың оло кешегә сәләм биреп ҡаршыламауҙарына үпкәләүе һәм уға Иҙеүкәйҙең яуабы:

Йөҙ етмеш биш йәшең бар,
Күпте күргән башың бар,
Үҙең һана, олатай:
Беҙ егерме балабыҙ,
Унар йәштән барабыҙ,
Барын ҡушһаң кем өлкән,
Үҙең һана, олатай (15-се бит).

Малайҙың тапҡыр яуабына хайран ҡалып-һоҡланып, «ир булырһың, улым» тип, ҡарттың үҙ юлына киткәне. (Был эпизод ҡаҙаҡтарҙан Ч. Вәлиханов һәм Г. Потанин яҙып алған варианттарҙа ла осрай. Айырма шунда: Ч. Вәлиханов вариантында яланда уйнап йөрөгән 90 малай эргәһенән оло йәштәге ике ир үтеп бара. Малайҙар сәләм бирмәгәс, былар: «Ник сәләм бирмәйһегеҙ?» — тип өндәшәләр. Малайҙар өсөн Идеге: «Беҙ — 90 малай, йәшебеҙҙе бергә ҡушһаҡ, һеҙҙең икегеҙҙекенән күберәк була», — тип яуап ҡайтара. — ЗИРГО по отделении этнографии, т. XXIX: Сочинения Чокана Чингисовича Валиханова. Изданы под редакцией Н. И. Веселовского. СПб., 1904, с. 236, или приложение к этому тому: «Сказание об Едигее и Тохтамыше», издал проф. П. М. Мелиоранский. СПб., 1905.

Г. Потанин яҙмаһында малайҙар һаны 40 һәм улар быҙау көтәләр. Үтеп барған кеше — Туҡтамыш хандың вәзире Жанбай. Ҡалған яғы — Вәлихановтағыса. — Живая старина, вып. III и IV. СПб., 1897, с. 307.

Икенсе ваҡыт Иҙеүкәйҙең алтмыш бала менән бергәләп ағас атҡа атланып уйнағаны, бер малайҙың өс тапҡыр (өс көндә) иптәшенең атын урлағаны, Иҙеүкәйҙең уға:

Инде юлдаш булмайыҡ,
Арабыҙҙан ҡыуайыҡ,
Өйһөҙ бүҙәнә булып,
Ҡайҙа барһа бытбылдап,
Тик йөрөһөн бойоғоп;

Бергәләп аш еймәгеҙ,
Бергә уйын ҡормағыҙ.
Бур байыҡмаҫ, бирән туймаҫ,
Яңғыҙ тирәк өй булмаҫ,
Яңғыҙ бала ир булмаҫ;
Көтөү типкән мал булһа,
Уны сайҙа бүре алыр,
Ил ташлаған ир булһа,
Көнө етмәй гүр алыр, ау,
Көнө етмәй гүр алыр, —

тип хөкөм сығарғаны (20 — 21-се биттәр), башҡаларҙың был хөкөмгә ризалашҡаны. (Был эпизод Ч. Вәлиханов вариантында ла, Бараба татарҙарынан В. В. Радлов яҙып алған вариантта ла, һ. б. варианттарҙа ла осрай. (Айырма: Ҡаҙаҡ һәм Бараба татарҙары вариантында хан булып һайланған Идиге ат урлаусы малайҙың башын киҫергә тип хөкөм сығара һәм был хөкөм шунда уҡ еренә еткерелә.)

Ата-әсәһе үлеп, Иҙеүкәйҙең үкһеҙ ҡалғаны һәм көтөүсе булғаны. Көтөүсе Иҙеүкәйҙең бер ҡолон өсөн даулашҡан ике кешенең бәхәсен хәл иткәне. (Бараба татарҙары һәм ҡаҙаҡ варианттарында ла бар.)

*Өсөнсө ҡобайыр* (22 — 30-сы биттәр). Туҡтамыш хандан фарман менән Янбайҙың килгәне (3-сө иҫкәрмә); Һабрауҙың батырҙар намыҫына тигеҙеп һүҙ әйткәне — томдағыса; Янбайҙың ете ырыу батырҙарын һәм Ыласынды хан һарайына көсләп алып киткәне.

*Дүртенсе ҡобайыр* (30 — 56-сы биттәр). Яңғыҙ ҡалған Иҙеүкәйҙең Һабрау ҡартҡа килгәне, унан кәңәш һорағаны; Һабрау ҡарттың йомағы һәм уға Иҙеүкәйҙең яуабы — ошо китаптағыса.

Иҙеүкәйҙең ил күрергә Урал буйлап сығып киткәне, Һыуһылыу менән осрашҡаны, уның менән Сатҡы күленә төшкәне, күл төбөнән Аҡбуҙатҡа атланып, Урал батыр ҡылысын алып сыҡҡаны.

*Бишенсе ҡобайыр* (56 — 73-сө биттәр). Урал тауҙың ауыр хәлдә ҡалыуына, илде һаҡлап яуға күтәрелер батырҙар тыумауына һыҡтап ултырған Һабрау ҡарт янына Иҙеүкәйҙең яңынан килеп сыҡҡаны, «Бейек тауҙың үлгәне» тигән таныш ҡобайырҙы әйтеп үҙенең батырлығын һиҙҙергәне; Иҙеүкәйҙең билендә Урал батыр ҡылысын, атланған Аҡбуҙ атын күреп, Һабрау ҡарттың шатланғаны һәм «Туҡтамышҡа иш булып» илде талаған Дәмми бейгә ҡаршы сығырға, илдең ҡонон алырға димләгәне.

Иҙеүкәйҙең Дәмми бейгә килгәне, Дәмми бейҙең Иҙеүкәйҙе, һанға һуҡмай, һалҡын ҡаршы алғаны, Уралда батырҙар булыуына шикләнеп ҡарағаны; Иҙеүкәйҙең:

...Тамыры ҡалған урында
Сауыл үҫмәҫ, тиһеңме?
Ыласын үҫкән Уралда
Батыр үҫмәҫ, тиһеңме?.. —

тип, Дәмми бейҙе шелтәләп яуап биргәне — китапта Иҙеүкәй менән Тора бейҙең осрашыу эпизодындағыса.

Иҙеүкәйҙең һүҙҙәренә асыуы ҡабарып, ҡырыҫланып, Дәмми бейҙең Иҙеүкәйҙе һуғышҡа саҡырғаны; Иҙеүкәй бер үҙе, ә Дәмми бей үҙенең ярандарын эйәртеп, Ағиҙел буйы бер ҡалҡыулыҡҡа атышҡа сыҡҡаны, икәү-ара киҙәк алышҡаны, Иҙеүкәйҙең уғы Дәммиҙең күкрәген тишеп, аты менән ҡуша күккә сөйгәне; Дәмми бей ярандарының ҡасҡаны, Иҙеүкәйҙең уларҙы Урал батыр ҡылысы менән тураҡлап бөткәне. Дәмми бей ҡулы аҫтында интеккән халыҡтарҙың азатлыҡҡа сыҡҡаны, рәхәт тора башлағаны.

*Алтынсы ҡобайыр* (73 — 85-се биттәр). Берҙән-бер көндө бында Янбай килеп сығып, Дәмми бейҙең тар-мар ителеүен Туҡтамышҡа хәбәр иткәне. Туҡтамыштың: «Ул бейгә ҡаршы сығырлыҡ ир Уралда юҡ ине, уны һарайға алырға кәрәк», — тип, Иҙеүкәйҙе үҙенә саҡыртҡаны; Иҙеүкәйҙең: «Һарайында тороп, Туҡтамыш хандың бөтә хәлен белермен, көсөн һынармын», — тип уйлап, ханға киткәне.

(Йыйылма текстың тәүге вариантында Иҙеүкәй Алтын Урҙаға барышлай бер күлдә яңынан аҡҡоштарға осрауы, араларынан береһененең ярға йөҙөп килеп: «Иҙеүкәй, һин моратыңа еттең, балам ул булды, мә, ал инде», — тип, аҡҡош кейемен һалдырып, Иҙеүкәйгә ул тоттороуы, Урҙаға килеп еткәс, Иҙеүкәйҙең башта Ыласын дуҫына инеп, балаһын уның ҡарамағына тапшырыуы, Мораҙымдың Ыласындың үлгән улы Нуретдин исемендә үҫеүе әйтелгән. Ләкин аҙаҡ былар һыҙылған. — Әйтелгән фонд, д. 224, 71-се бит.)

Туҡтамыш хандың Иҙеүкәйҙе ололап ҡаршы алыуы, Сәләхтең көнсөллөгө һәм шуға бәйле башҡа ситуациялар — бөтәһе лә ошо китаптағыса.

*Етенсе ҡобайыр* (85 — 91-се биттәр). Хан һарайында Иҙеүкәйҙең Ғәҙәкә (китапта Ғәнәкә) исемле ҡол ҡыҙға яҡын мөнәсәбәте, Ғәҙәкәнең Иҙеүкәйҙән бала табыуы һәм шуға бәйле ҡалған ситуациялар нигеҙҙә китаптағыса. Айырма шунда ғына: был эпизодтар йыйылма текста алғараҡ күсерелгән.

*Һигеҙенсе ҡобайыр* (91 — 96-сы биттәр). Көнсөл Сәләхтең Ханбикәгә Иҙеүкәй хаҡында ғәйбәт һөйләүе, Ханбикәнең төшө һәм шуға бәйле рәүештә Иҙеүкәйгә ҡаршы ҡоролған тоҙаҡтар — нигеҙҙә шулай уҡ китаптағыса.

*Туғыҙынсы ҡобайыр* (97 — 118-се биттәр). Туҡтамыш хандың Иҙеүкәй артынан ҡыуа сығыуҙарын һорап, батырҙарға мөрәжәғәт итеүе һәм шунан һуңғы ваҡиғалар — китаптағыса. Айырма шунда: беренсенән, Иҙеүкәй — Янбай диалогы шаҡтай әҙәбиләштерелгән; икенсенән, Янбайҙың Иҙеүкәй артынан Уралға килеп етеүе бында бирелмәгән.

*Унынсы ҡобайыр* (118 — 122-се биттәр). Мораҙымдың бала сағы — китаптағыса, тик алғараҡ күсерелгән.

Туҡтамыш хандың бәйге үткәреүе, был бәйгелә толпарға атланып, Мораҙымдың беренсе килеүе һәм шул саҡ:

> ...Туҡтамыш тигән ҙур хандың
> Һарайына керербеҙ,
> Мал-мөлкәтен, байлығын
> Илгә бүлеп бирербеҙ! —

тип, атаһын эҙләп сығып китеүе, Уралда Иҙеүкәйҙе табыуы; Иҙеүкәйҙең Уралда йыйған ғәскәре менән Мораҙымды Туҡтамышҡа ҡаршы оҙатып, үҙенең Сатмыр ханға ярҙам һорап сығып китеүе.

*Ун беренсе ҡобайыр* (122 — 127). Иҙеүкәйҙең Сатмыр ханға барышлай 40 ҡалмыҡ батырына тап булыуы, уларҙы ҡырып, Сатмыр хандың ҡыҙын азат итеүе.

Сатмыр ханға килеүе, унан ярҙам һорауы, Сатмыр хандан ғәскәр алып, Туҡтамышҡа яуға сыҡкас, юлда Иҙеүкәйҙең төш күреүе — китаптағыса.

*Ун икенсе ҡобайыр* (127 — 134). Туҡтамыш хандың ҡарауыл тауы. Мораҙымдың ҡарағош ҡанаты яһап, шул тауға менеүе. Күҙәтсенең быны айыра алмауы һәм «был ҡарасҡы ҡарағош булып сыҡты, ханым тыныс булһын», — тип, ханға сапҡын ебәреүе (шундай эпизодтар Ч. Вәлиханов яҙмаһында ла бар).

«Урал батыр ҡылысын йәшендәй уйнатып, Аҡбуҙатта ер-күк яңратып килеүсе» Иҙеүкәйҙең яуы уң яҡтан, «тауышы менән таш ярған, дошмандың үтен һыта ҡараған ыласын күҙле, ҡуш йөрәкле» Мораҙымдың яуы һул яҡтан, «ҡара сәүкә кеүек ябырылып», Аҡ Урҙаны баҫып алыуы. Өс көн, өс төн һуғыш барыуы.

Туҡтамыш хандың, туры атына атланып, ҡасып сығып китеүе. Ҡалғандарҙың берәүһенең дә ҡаршылыҡ күрһәтмәйенсә, Иҙеүкәй менән Мораҙымды ололап ҡаршы алыуҙары; Иҙеүкәйҙең Мораҙымды Туҡтамыш артынан ҡыуа сығарыуы.

Туҡтамыштың ҡамыштар араһында боҫоп ятыуы, ҡыҙғатау ҡоштоң, балаларын ҡыҙғанып, Туҡтамыштың баш осонда осоуы. Туҡтамыштың атына һәм ҡошҡа өндәшкәне:

Битәр тыпырсынма, туры ат,
Көн-төн ҡалһам, торорһоң;
Битәр дерһелдәмә, һум йөрәк,
Иҙеүкәй икәү, мин яңғыҙ,
Алышҡанда тынырһың;
Һулҡылдама, аҡ һөңгөм,
Алышҡан ерҙә һынырһың!
Тулҡынланма, тоноҡ һыу,
Байҙарымдың йылҡы өйөрө
Бер уртлаһа, ҡорорһоң,
Батҡаҡ булып ҡалырһың!

Ҡыйҡылдама, ҡыҙғатау ҡош.
Тауышың зарлы, байғош ҡош,
Ҡанатың — ҡыу сыбыҡ,
Муйның буш, морноң ҡуш,
Утлау тулы малым юҡ,
Ояң тулы йоморткаң,
Итәкләп алыр улым юҡ.
Мин айырылдым илемдән,
Айырылһаң үҙ күлеңдән,
Һин дә миндәй булырһың!

(131-се бит).

Ҡошҡа ҡарап, Мораҙымдың Туҡтамышты табыуы; атышҡа сығыуҙары: Туҡтамыштың «туғыҙ тотам» уҡ менән өс тапҡыр Мораҙымға атыуы,

өсөһөндә лә уктарҙың кире каклығыуы; Мораҙымдың кылыс менән Туктамыштың башын сабып өҙөүе, башты канъяғаһына бәйләп, Урҙаға алып кайтыуы.

Юлда «тирәккә башын шакарып бәйләп куйылған» бер атка һәм йоклап яткан бер кешегә осрауы. Был кешенең Мораҙымды карғауы.

*Ун өсөнсө кобайыр* (134 — 141). Туктамышты кыйратыу шатлығынан һарайҙа ҙур туй. Колдарҙы азат итеү, улъя итеп алынған малдарҙы халыкка өләшеү.

Иҙеүкәйҙең хандың оло кыҙын, никах укытып, үҙенә алыуы. Янбай менән Кадирбирҙенең, ата менән ул араһында низағ тыуҙырырға теләп, хандың кесе кыҙын да үҙенә алырға димләүҙәре, Иҙеүкәйҙең баш тартыуы, Мораҙымға вәғәҙә итеүе. Артабанғы вакиғалар китаптағыса.

*Ун дүртенсе кобайыр (141 — 146).* Үҙ батырҙарын эйәртеп, Мораҙымдың Уралға кайтыуы, атаһын яманлауы, Һабрау карттың Иҙеүкәйҙе яклауы — китаптағыса.

Уралға Кадирбирҙенең һөжүме, Мораҙымдың уны кыйратыуы һәм, атаһына барып, ғәфү үтенеүе, бәхиллек һорауы. Иҙеүкәйҙең ғәфү итеүе һәм васыяты — китаптағыса. Бергәләп Уралға кайтыуҙары.

*Ун бишенсе кобайыр* (146 — 152). Каршы алырға йыйылған халык алдында Иҙеүкәйҙең әйткәне (китапта Иҙеүкәйҙең Тук батырға әйткән һүҙҙәренә тура килә).

Урал батырҙың Акбуҙ аты менән алмас кылысын Мораҙымға тапшырыуы (һүҙҙәре китаптағыса).

Иҙеүкәйҙең үлеүе, Нарыҫ тауға күмеү. Халык алдында Мораҙымдың анты:

— ...Атам кәбере кашында
Ант итәмен ер үбеп:
Иҙеүкәй үлде, ил калды,
Ил барында, ир таймаҫ,
Кылыс болғап кулымда,
Ат уйнатып болонда,
Иҙеү булып илемә,
Дау астырмам илемә,
Яу баҫтырмам еремә,
Ағиҙелем кистермәм,
Көмөш һыуын эсермәм,
Энйе тешле, ай йөҙлө,
Сәсе иңен каплаған,
Ерҙә көндәш тапмаған,
Аккоштай ак куңелле,
Иҙел камышы кеүек,
Зифа буйлы кыҙҙарҙың
Намыҫына кер төшөрмәм!

Коҙғон һымак талымһыҙ,
Шәр һөлөктәй затһыҙҙы,
Һайыҫкандай һанһыҙҙы,
Төлкө һымак ике йөҙ,

Сауҙагәрҙәй ике тел,
Атанан бирәгәй тыумаған,
Йортона терәк булмаған,
Ҡәкүктәй төйәк тапмаған,
Бытбылдыҡтай бытбылдап,
Оят белмәҫ һатлыҡты
Табында аш ейҙермәм,
Йылы кейем кейҙермәм!

Ай Уралым, Уралым,
Уралып ятҡан Уралым,
Ил һаҡлаған ҡоралым,
Ошо антымда тормаһам,
Илемә иҙеү булмаһам,
Ҡаяң ишелеп өҫтөмә
Һөйәгемде онтаһын,
Емтегемде эт ейеп,
Талымһыҙ ҡоҙғон туҡланһын!

(151 — 152-се биттәр.)

Ошонон менән тамам.

11. *Ҡырҡ нуғай батыры.* Легенда. 1981 йылда Өфөлә Илбулдин Фәсхетдиндән (1924 йылғы) Ғайса Хөсәйенов яҙып алған. Легендала ҡырҡ нуғай батырҙары араһында Иҙеүкәй менән Мораҙым батырҙың да булғанлығы, ҡара халыҡ араһынан сыҡҡанлығы, төмән (ун мең ғәскәр) башлығы булғанлыҡтары һәм хәҙерге Ырымбур өлкәһе Буранлы ауылы янындағы тауҙа ҡәберҙәре барлығы әйтелә. Һабрау йырау телгә алына. — Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтының ҡулъяҙмалар фонды. Археография һәм фольклор тупламаһы, 1982, 32 — 33-сө биттәр.

## Төрки телле башҡа халыҡтарҙың баҫма варианттары

### Ҡаҙаҡтарҙың:

1. 1820 йылда «Сибирский вестник» журналында (ч. X, с. 189 — 204) Г. И. Спасский тарафынан йөкмәткеһе урыҫса буталсыҡ һөйләнгән версия.

2. *Идүкә-бий.* 1842 йылда Чокан Вәлиханов, үҙенең атаһы менән бергәләп, өс варианттан төҙөгән йыйылма текст // ЗИРГО. Приложение к тому XXIX: Сказание об Едигее и Токтамыше. Киргизский текст по рукописи, принадлежавшей Ч. Ч. Валиханову / Издал проф. П. М. Мелиоранский. СПб., 1905. «Идыге» исемендә урыҫсаға Ч. Вәлихановтың үҙенең тәржемәһе // ЗИРГО. По отделению этнографии, том XXIX: Сочинения Чокана Чингисовича Валиханова / Изданы под редакцией Н. И. Веселовского. СПб., 1904. С. 233 — 264.

3. *Эдигей.* Урыҫсаға Ч. Вәлиханов тәржемәһе // ЗИРГО. По отделению этнографии, том XXIX. С. 265 — 273. Ахырында (272 — 273-сө биттәрҙә)

Эдигейҙең нәҫеле һәм Баба Төкләҫтең сығышы тураһында нуғай риүәйәте бирелгән.

4 — 7. *«Тюркская сказка о Идыге»* тигән дөйөм исем аҫтында Г. Н. Потанин баҫтырып сығарған дүрт вариант // Живая старина. Вып. III и IV. СПб., 1897. I вариант — 301 — 304-се б.; II вариант — 301 — 304-се б.; III вариант — 304 — 312-се б.; IV — 312 — 313-сө биттәр.

8. *Идига-батыр.* Башҡортостандан сыҡҡан билдәле этнограф Әбүбәкер Диваев тарафынан яҙып алынған. Татарса тәржемәһе // «Шура» журналы, 1917, №15, 16; Ҡаҙаҡ телендә //Диваев А. А. Батырлар, Т. 1 — 6. Ташкент, 1922.

### Ҡарағалпаҡтарҙың:

1. *Сказание об Едигее и Тохтамыше.* Каракалпакская народная поэма. Запись И. А. Беляева // Протоколы заседаний и сообщений членов Закаспийского кружка любителей археологии и истории Востока. Вып. 3. Ашхабад, 1917.

2. *Едиге.* Эрполат жырауҙан Ҡаллы Аимбетов яҙып алған. 1937 йыл Мәскәүҙә ҡарағалпаҡ телендә баҫылған. 150 б.

### Нуғайҙарҙың:

1. 1830 йылда Әстрхан нуғайҙарынан Алибек Шарапов яҙып алып, А. Ходзьконың «Народная поэзия Персии» тигән китабында инглиз телендә баҫылып сыҡҡан. Лондон, 1842. Һуңынан 1885 йыл «Кавказ» газетаһының 287-се һанында баҫылған.

2. *Туктамыш кандың хикайәте* // Ногайско-кумыкская хрестоматия М. Османова. СПб., 1883.

3. *Эдиге-Кубугул.* Дағстанда йәшәгән нуғайҙарҙан яҙып алынған // Семенов Н. Туземцы Северо-Восточного Кавказа. СПб., 1895. С. 418 — 454.

4. М. Алейниковтың «Поверья ногайцев» тигән мәҡәләһендә килтерелгән бик үҙенсәлекле версиянан бер өҙөк: һунарсы Ҡотлоҡая урманда албаҫтыға («албаслы») тап була, ирен үлтереп, шул «урман ҡатыны»на өйләнә, улдары тыуа, уға *Эдиге* тип исем ҡушалар. Эдиге батыр булып үҫә. // Сборник материалов для описания местностей и племен Кавказа. Вып. III. Тифлис, 1893.

5. *Адига.* Ҡырым нуғайҙарынан яҙып алынған // Радлов В. В. Образцы..., ч. VII. С. 198 — 201.

6. *Токтамыш-хан* // Сборник материалов для описания местностей и племен Кавказа. Вып. XXVII. Тифлис, 1900.

7. *Кубыгул.* Әкиәтләшкән вариант // Ногай эртегилер / Төҙөүсеһе С. А. Калмыкова. Черкесск, 1967. 124 — 133-сө биттәр.

8. *Эдиге.* Ногайская народная поэма / Перевод с ногайского Ф. Сидахметовой // ж. Половецкая луна. 1991, № 1. С. 38 — 64.

Татарҙарҙың:
А. Себер татарҙарынан:

1. *Мырат пи.* Телеуттарҙан (Таулы Алтай) яҙып алынған ата менән улдың низағлашыуына ҡараған өҙөк (бишәр юллыҡ 21 строфа). Әммә бында Мырат әсәһе менән асыуланыша // Радлов. Образцы..., ч. 1. СПб. С. 200 — 204.

2. *Идәгә пи.* Бараба татарҙарынан яҙып алынған // Радлов. Образцы..., ч. IV. С. 27 — 45. Хәҙерге татар әҙәби теленә тәржемәһе. — «Совет әдәбияты» журналы (Казан), 1940, № 4 — 5.

3. *Токтамыш хан* // Радлов. Образцы..., ч. IV. С. 128 — 136.

4. *Токтамыш хан.* Ишем тамағында яҙып алынған // Радлов. Образцы..., ч. IV. С. 195 — 204.

5. *Идегей.* 1919 йылда Тарск өйәҙе Яланкүл ауылында Зәйнетдинов Ситдиҡ ҡарттан Ниғмәт Хәкимов яҙып алған // Тюркологический сборник, 1972. М.: Наука, 1973.

Б. Ҡырым татарҙарынан:

1. *Идәгә би* // Радлов. Образцы..., ч. VII. С. 99 — 122.

2. *Әдигә.* — Шунда уҡ. 146 — 149-сы биттәр.

3. *Әдигә.* — Шунда уҡ. 154 — 166-сы биттәр.

4. Төрөк ғалимы Сәадат Чагатай тарафынан йәш сағынан бирле Анкарала йәшәүсе Ҡырым ҡартынан яҙып алынған текст. Төрөк һәм немец телендә.

В. Татар әҙәби-яҙма телендә:

1. *Идгәй белән Нуретдин.* Тарихи хикәйә. Казан, 1914. 32 б. М. Османовтың «Ногайско-кумыкская хрестоматия»һында баҫылған текстың сәсмә телдә әҙәбиләштерелгән күсермәһе.

2. *Татар халыҡ дастаны Идегәй.* Нәки Иҫәнбәт тарафынан төҙөлгән йыйылма текст // «Совет әдәбияты» журналы, 1940, № 11, 12.

3. *Идегәй. Татар халыҡ дастаны.* Инеш мәкәләһендә әйтелгәнсә, 1941 йылда Тел, әҙәбиәт һәм тарих институтының Ғилми советы ҡарары нигеҙендә әҙерләнгән «яңы тәнҡиди текст» / Башҡарыусылар. — Н. Иҫәнбәт (төҙөүсе), Х. Ярми һәм Ш. Маннур (редакторлау). Инеш мәкәлә Илбарис Надировтыҡы. Казан: Татарстан китап нәшрияты, 1988, 254 б.

4. *Идегей. Татарский народный эпос.* / Перевод Семена Липкина. Научный редактор М. А. Усманов. Его же послесловие «О трагедии эпоса и трагедиях людских». Казань: Татарское книжное издательство, 1990.

## Иҙел йорт

«Иҙел йорт йәки Иҙелгә яу буһканда» тигән исем менән Хәбибулла Ғәбитовтың «Халыҡ әҙәбиәтенән ҡыҫҡаса үрнәктәр» тигән мәкәләһендә ҡобайырҙарға беренсе миҫал итеп килтерелгән. — «Яңы юл» журналы,

1923, № 2 — 3, 61 — 62-се биттәр. Аҙағында: «Ҡаҙаҡтар сабыуыл яһағанда, тау башҡорттары Иҙелгә ҡаскандар. Шуның айҡаны менән әйтелгән йыр», — тип иҫкәрмә яһалған. Ғилми баҫмаһы — БХИ: Эпос, 3-сө китап, 41 — 44-се биттәр.

Икенсе бер варианты «Иҙел йорт» исемендә 1922 йылда татар фольклорсыһы Хужа Бәдиғ тарафынан, үҙенең әйтеүенсә, «башҡорт эсенән» яҙып алынған һәм «Әҙәби ярҙәм мәжмуғәсе» тигән йыйынтыҡтың икенсе китабында баҫылған (Ҡазан, 1922). Текста башҡорт теленең фонетик үҙенсәлектәре тулыһынса һаҡланмаған. Айырмаһы иҫкәрмәләрҙә күрһәтелде.

[1] *Ҡустән ҡалһам, ҡурған йорт* — башҡаларҙан (халыҡтан) айырылып ҡалһам, ышыҡ булып һаҡлар (ҡурсыр) йорт. Х. Бәдиғ вариантында был юл юҡ. Унда һәр юл быңдағыса ике тапҡыр ҙа ҡабатланмай.

[2] *Һарағыһы ҡонандау, сыбар үгеҙ йөрәктәй* — был юлдар Х. Бәдиғ яҙмаһында шиғри яҡтан килешһеҙ, орфографияһы ла хата:

Сараҫаҫы ҫобар
Ҡонан үгеҙ йөрәктәй.

[3] Был бүлек варианттарҙың икеһендә лә һуңынан бирелгән. Ҡобайырҙың йөкмәткеһенә ҡарағанда, уның урыны ошонда булырға тейеш.

[4] Бәдиғ яҙмаһында был юҡ — *Ҡуҡанда ғына ҡуй нерләшә.* Ошоға ҡыҙҙың яуабы менән вариант тамамлана.

[5] *Йорон* — тун итәгенең йыртылып һәлберәп төшкән киҫәге. Был урында ир кешенең ағзаһына кинәйә (Х. Ғәбитов иҫкәрмәһе).

[6] Х. Бәдиғ яҙмаһында строфа: *Әйҙә, Иҙелгә ҡайтайыҡ,* тип башлана.

[7] *Терәү һалып...* — дошманды тоткарлап тороу өсөн, артҡа ғәскәр ҡалдырып сигенеү.

[8] Бәдиғ яҙмаһында — *Яйыҡ сығып ятайыҡ.*

[9] Бәдиғ яҙмаһында яуаптың һуңғы юлы — *Үҙ башыңа ҡарт өбмә.*

[10] *Әлемтәй менән Ҡоломтай* — быларҙы Х. Бәдиғ «Ҡалмыҡ исемдәре» тип, Х. Ғәбитов «Ҡаҙаҡ исемдәре» тип аңлата.

## Мамай хан хикәйәте

1970 йылда Силәбе өлкәһе Миәс ҡалаһында йәшәүсе 69 йәшлек (1901 йылда тыуған) Хәҙисә Ҡусабаеванан Әхнәф Харисов яҙып алған. — Ғилми архив, ф. 3, оп. 63, д. 13, 19 — 20 б. Баҫылған: «Ағиҙел» журналы, 1972, 5-се һан; БХИ: Эпос, 3-сө китап, 44 — 45-се биттәр.

**Вариант:** *Ҡырҡ нуғай батыры.* Легенда. «Иҙеүкәй менән Мораҙым» ҡобайырының 11-се вариантына бирелгән аңлатманы ҡарағыҙ.

[1] *Мамай* ҙа, уның атаһы *Муса* ла, хикәйәттә ҙурлап, хан тип аталған. Был тарихи дөрөҫлөккә тура килмәй. Сөнки Алтын Урҙа империяһы тарҡалғандан һуң барлыҡҡа килгән монгол һәм төрки дәүләттәрендә Сыңғыҙ хан нәҫеленән сыҡҡан уландар ғына был титулға эйә булғандар.

[2] Нуғай һәм ҡаҙаҡ варианттарында ла Мусаның ике ҡатынынан 12 улаһы булған. Ғәмәлдә иһә Мусаның биш ҡатыны булып, уландары утыҙға яҡын иҫәпләнгән. — Жирмунский. Тюркский эпос. *С. 422.*

[3] *Урак* — хикәйәттең Нуғай варианттарында Мусаның ейәне. Атаһы Әлшағир үлгәндән һуң, Мамай ғаиләһендә үҫеп, унының яуҙарында ҡатнаша.

[4] Строфа М. Османов баҫтырған вариант менән һүҙмә-һүҙ тура килә. Айырма тик Ирәмәл тау исемен *Ирәмән,* Өйсүк йылғаһын *Уйшук* тип, ә ҡалған һүҙҙәрҙе нуғайса яҙыуҙа ғына.

## Бүтән телдә баҫылған варианттары

1. *Мирза Мамайҙың хикәйәте* // Ногайская хрестоматия. 50 — 70-се биттәр.

2. *Орак Мамай.* Ҡырым татарҙарынан В. В. Радлов яҙып алған // Радлов. Образцы... ч. VII.

3. *Мирза-Мамай.* Урыҫ теленә тәржемә // «Сб. материалов для описания местностей и племен Кавказа». Вып. XXVII. Тифлис, 1900.

4. *Мамай.* А. Сикалиев яҙмаһы // Сорок ногайских богатырей. С. 53 — 109.

5. *Орак мен Мамайдың хикаясы.* Казан, 1908. Ҡаҙаҡ варианты.

В. М. Жирмунскийҙың мәғлүмәттәренә ҡарағанда, Ҡаҙағстан Фәндәр академияһының фольклор архивында был хикәйәттең һигеҙ варианты һаҡлана. Шуларҙан иң тулыһы Ҡыҙыл Орда өлкәһендә Нуртуған (Ҡазанҡап) аҡындан яҙып алынған. — Жирмунский. Тюркский эпос. 400-се бит.

6. *Урак белән Мамай.* 1940 йылда Новосибирск өлкәһендә Ибраһимов Нурмөхәмәттән (1865 йылда тыуған) яҙып алынған // ТХИ: Дастаннар: 99 — 101-се бит. Томды төҙөүсе Ф. В. Әхмәтованың әйтеүенсә, был 1908 йыл Ҡазанда баҫылған варианттың бер өҙөгө булып тора.

## Мәргән менән Маянһылыу

Башҡортостандың Көйөргәҙе районы Бабалар ауылында Ғиниәт Бикмурзиндан 1917 йылда М. Буранғолов яҙып алған. Ҡулъяҙмаһы һаҡланмаған. Латинса машинкала баҫтырылған бер нөсхәһе — Ғилми архив, ф. 3, оп. 12, д. 226, 2 — 22 биттәр. Тәү тапҡыр «Батырҙар тураһында эпос» йыйынтығында баҫылған. Ғилми баҫмаһы — БХИ: Эпос, 3-сө китап.

[1] *Нуғай хан.* Һүҙ XIII быуаттың 60 йылдарынан алып ахырына саҡлы 40 йыл буйына Алтын Урҙа дәүләтендә ҙур роль уйнаған мәшһүр төмән (10 мең ғәскәр) башлығы Нуғай (Ногай) тураһында түгел, ә XV быуаттың I-се яртыһында берҙәмлеге тамам ҡаҡшаған Алтын Урҙа биләмәләрендә барлыҡҡа килгән үҙ аллы ханлыҡтарҙың береһе — Нуғай ханлығы (Ногайская орда) тураһында бара. Эҫәрҙә ошо урҙаның ханы үҙенең исеме менән түгел, ә *Нуғай хан,* йәки *Нуғай ханы* тип кенә атала.

[2] *Сәсем оҙон булһа ла, йөрәкһеҙ, тимә, атаҡай...* — «Иҙеүкәй менән Мораҙым» тексына 106-сы иҫкәрмәне ҡарағыҙ. Кәмһетеү йолаһы «Шәриғәт» ҡанундарында «законлаштырылып», ҡатын-ҡыҙға мал йәки башҡа нәмә бүлгәндә ярты, йәки унан да аҙыраҡ өлөш сығарыр булғандар.

[3] *Айыры тояҡ биш көтөү,* йәғни һыйыр, һарыҡ малынан биш көтөү.

[4] Мәскәү батшаһынан шикләнеү, әлбиттә, һуңынан урыҫ батшалығының ҡыҫымы, колониаль политикаһының көсәйеүе осоронда өҫтәлгән.

[5] Һуңғы биш юл китап баҫмаһында төшөрөп ҡалдырылған.

## Тарғын батыр

1938 йылда Башҡортостандың Баймаҡ районы Икенсе Этҡол ауылында 60 йәшлек Ғәтиәт Хисамовтан, «Башҡорт халыҡ әкиәте» тип, Ғәйнан Әмири яҙып алған. — Ғилми архив. ф. 3, оп. 10, д. 30, 153 — 157-се биттәр; БХИ: Эпос, 3-сө китап.

[1] *Именнәй* — урыҫса «именное» һүҙенән. Йәғни исеме яҙылған йөҙөк.

[2] Тарғын уғы *бер йыуан тирәккә утәләй батып керә, ә ҡалмыҡ батырҙары... тирәктең яртыһына ла уткәҙә алмайҙар* — эпоста һәм әкиәттәрҙә хәл иткес алыш-көрәш алдынан антогонист батырҙарҙың ошо рәүешле көстәрен һынау мотивы «Әлеүкәй» әкиәтендә лә осрай.

[3] *Имгәнгән* — ҡулъяҙмала «ранин булған».

[4] Ҡыҙҙың һамағында тамамланмағанлыҡ һиҙелә.

[5] *Ғәрлеге килеп* — ҡулъяҙмала «досат итеп».

[6] *Масы эргәһендә* — хикәйәтте башҡарыусы «Яйыҡтан ары масы татары бар. Троицк ҡалаһына яҡын ауыл», — тип аңлатма биргән.

## Тарғын менән Ҡужаҡ

1959 йылда Ҡурған өлкәһе Әлмән районы Аҫҡар ауылында Саттаров Рәхимйән менән Бәширов Муллағәлиҙән (йәштәре әйтелмәгән) Ҡирәй Мәргән яҙып алған. — Ғилми архив. ф. 3, оп. 12, д. 1, 21 — 26-сы биттәр. Р. Саттаров тексы — БХИ: Эпос, 3-сө китап.

Бында ла Р. Саттаров варианты алынып, тегеһенең айырмалыҡтары иҫкәрмәләрҙә күрһәтелә.

[1] Башҡорт тарихында *Аҡсахан* тигән хандың булғаны билдәле түгел. Хикәйәттең «Ир тарғын» исемендәге ҡаҙаҡса варианттарында Аҡсахан (ҡаҙаҡса *Аҡшахан*) Ҡырымдағы 40 хандың өлкәне тип күрһәтелә.

[2] М. Бәширов вариантында Аҡйондоҙ был һүҙҙәрен туй мәжлесендә, уны ағыулы бал эсереп үлтерер алдынан әйтә. Тик шиғырҙың алтынсы һәм һуңғы ике юлы юҡ.

[3] М. Бәширов һөйләүендә «һатыулашыу» диалогы юҡ. Үҙ-ара мәсхәрәләшкәндән һуң, әкиәттәрҙәгесә, башта алышалар, унан көрәшәләр, һуңынан уҡ менән атышалар. Барыһында ла Ҡужаҡ өҫтөн сыға. Шунан ҡыҙҙы Тарғын ҡулынан тартып алып, Ҡужаҡ ҡайтып китә.

[4] М. Бәширов вариантында Аҡйондоҙ туйҙа бер аҙ ҡыҙып алған Ҡужаҡты ағыулы бал эсереп үлтерә. Шунан атаһы Аҡсахан янына килә лә: «Минең башыма һин еттең», — тип, шул ерҙә үҙе лә ағыу эсеп үлә. Был эпизод Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу, Таһир менән Зөһрә һәм Буҙйегет менән Ҡарасәстең фажиғәле мөхәббәттәрен иҫкә төшөрә.

[5] Тарғындың Нуғай ханлығына килеүе М. Бәширов һөйләүендә бик ҡыҫҡа, «Нуғай ханын үлтереп, үҙе шунда хан булып йәшәп китә», — тип кенә әйтелә.

[6] Бындай бөтөм ҡобайыр һәм хикәйәттәр өсөн түгел, ә әкиәт жанры өсөн хас. М. Бәшировтың да сюжет тамамланғас, һамаҡлап:

Иртэгем бөттө иртэрэк,
Тағын бер-ике кэрэк!
Ишеткэнде һөйлэп ебэр,
Һөйлэгэнде көйлэп ебэр, —

тип ослап ҡуйыуы — был, күрэһең, был тирэлэге экиэт («иртэк» ҡаҙаҡтарҙа, шулай уҡ төрки телле халыҡтарҙың күпселегендэ экиэт тигэнде аңлата) традицияһында тыуған өҫтэлмэ, сюжет ахыры менэн бэйлэнмэгэн бөтөм булып тура. Эпик эҫэрҙе өҫтэлмэ рэүештэ экиэт алымы менэн тамамлап ҡуйыу хэҙерге заманда йыш ҡына осрай.

## Бүтэн телдэге варианттары

**Ҡаҙаҡса:**

1. *Ир Тарғын.* 1859 йылда Марабай йырауҙан Н. И. Ильминский яҙып алып, 1862 йылда Ҡазан университетында баҫылып сыҡҡан версия. 1879, 1883, 1923, 1939, 1957, 1958, 1977 йылдарҙа ҡабатлап баҫылған һэм М. О. Эүезов исемендэге Эҙэбиэт һэм сэнғэт институтында эҙерлэнгэн күп томлыҡ «Ҡазаҡ халыҡ эдебиеты» йыйынтығының «Батырлар жыры»ның 3-сө томына (Алматы, 1987) индерелгэн.

2. *Ир Тарғын* // Радлов. Образцы... ч. III. С. 119 — 166.

3. *Тарғын батыр жыры.* 1935 йылда Нуркасим йырауҙан Э. Ыспанулы яҙып алған. Вариантта Тарғын батырҙың Аҡшаханға килгэнгэ тиклемге тормошо хикэйэлэнэ // Батырлар жыры, 1987.

4 *Ир Тарғын.* Руссаға Д. Н. Саркин тарафынан тэржемэһе / Оренбург, 1904.

Был баҫма варианттарҙың һэм башҡа текстарҙың архивтарҙа һаҡланған ҡулъяҙмалары тураһында мэғлүмэт «Ҡазаҡ ҡолжазбаларының ғылыми сипаттамасы» тигэн китаптың I-се томында / «Батырлар жыры», Алматы, 1975. 61 — 73-се б.) бирелэ.

**Нуғай телендэ:**

*Эр Тарғун.* 1967 йыл Дағстанда Ашим Сикалиев яҙып алған // Труды КЧНИИ. Серия филологическая. Вып. VI. Черкесск, 1970. С. 18 и 20.

А. Сикалиевтың эйтеүенсэ, Ҡарачай-Черкесск экономика, тарих, тел һэм эҙэбиэт ғилми-тикшеренеү институтының фольклор фондында йэнэ бер нисэ яҙма текст һаҡлана. Шул иҫэптэн:

*Эр Тарғын* // Соьз ҡаҙнасы. Нуғай халыҡ йырҙары, экиэттэре, эйтемдэре, мэҡэлдэре һэм йомаҡтары. Дүрт томлыҡ ҡулъяҙма / Төҙөүсеһе А. Джаныбеков.

*Эр Таргун.* 1967 йыл Ставрополь крайы Нефтекум районында А. Сикалиев яҙып алған текст.

## Ек Мэргэн

XX быуат башында башҡорт яҙыусыһы Фэйзи Вэлиев (1892 — 1940) Башҡортостандың көнбайыш районодарында йэшэгэн башҡорттарҙан яҙып алып (телдэн башҡарыусыһы эйтелмэгэн), «Жик Мэргэн. Халыҡ хикэйэсе»

тигән исем менән Ҡазанда татар телендә сыҡҡан «Аң» журналының 1916 йылғы 14-се һанында баҫтырған. Аҙаҡ СССР Фәндәр академияһының Ҡазан филиалы Тел, әҙәбиәт һәм тарих институтында әҙерләнгән «Борынғы татар әдәбияты» хрестоматияһына (Ҡазан, 1963) һәм күп томлыҡ «Татар халыҡ ижады» йыйынтығының «Дастаннар» томына (1984) индерелгән. Башҡортса ғилми баҫмаһы — БХИ: Эпос, 3-сө китап, 63 — 66-сы биттәр; руссаға тәржемәһе — БНТ, т. 1, 491 — 496.

[1] *Ағиҙелдең кинәт боролош яһаған* урындары күп. Иң «кинәте» — көньяҡ-көнбайышҡа ағып килгән еренән, Көнгәк тауын уң яҡта ҡалдырып үткәс, ҡапыл төньяҡҡа боролоуылыр.

[2] *Көнсө* — дөрөҫө ҡонсо, йәғни ҡон, үс алыусы яу.

[3] *Ек* — боронғо төрки телендә *ег* «яҡшы», «изге», «изгелекле» тигәнде аңлатҡан.

[4] *Дан* — урыҫса «дань», йәғни яһаҡ.

[5] *Ҡырғыҙ* — элек ҡаҙаҡтар ҙа «ҡырғыҙҙар» тип йөрөтөлгән.

[6] *Аталары янына ҡайтып китте* — үлеп, «теге донъяға» китте.

## Ҡыпсаҡ егете менән башҡорт ҡыҙы

Башҡортостандың Саҡмағош районы Имәнлекүл ауылында тыуып-үҫеп, һуңғы йылдарында Өфөлә йәшәгән Моратов Назимдан 1974 йылда Ғайса Хөсәйенов яҙып алған. «Был — миңә йәш ваҡытымда Латифа ҡартинәйем һөйләгәндәрҙән хәтерҙә ҡалғаны ғына», — тип иҫкәрткән Моратов // БХИ: Эпос, 3-сө китап. 66 — 67-се б.

## Мораҙын менән Буһҡын

Ғәбитов. Ҡыҫҡаса үрнәктәр; БХИ: Эпос, 3-сө китап, 67 — 69-сы биттәр.

[1] *Донъяла мал сару даһинан нәрҫә бармы?* — Журнал баҫмаһында шулай. Контекстан «Донъяла мал аҫырауҙан да әһәмиәтлерәк эш бармы?» тигән һорау аңлашыла.

[2] Малды уя йәки кәртәләнгән яланға (ялан кәртәгә) тултырып теүәлләү-иҫәпләү — күплекте күрһәтеүҙә ҡулланылған традицион гипербола, батырҙар тураһында экиәттәрҙән килгән уртаҡ мотив. *Кәҙермәт уяһына* ҡарата Х. Ғәбитов: «Ирәндек тауы буйында әйләнәһе ун һигеҙ саҡрым уйпат ер», — тип иҫкәрмә яһаған. Бына шундай ҙур уйпатҡа нисә мең баш йылҡы һыйыуын үҙегеҙ иҫәпләп ҡарағыҙ.

[3] *Астаналы ҡаҙан* — доға-фатиха төшкән бәрәкәтле ҡаҙан (Х. Ғәбитов иҫкәрмәһе).

[4] *Тиленең* — контекстан «тилеттең» (йәғни имеҙҙең) мәғәнәһе аңлашыла.

[5] *Көмөш сабыу* — зиннәтләү, нағышлау.

[6] *Ҡау иттең* — зарыҡтырып йөнөн ҡойҙороу, төләтеү.

[7] *Донъя яптыҡ* — донъя яптығы, йәғни кәрәк-ярағы.

## Сура батыр

1960 йылда Ырымбур өлкәһе Люксембург районы Ҡолман (Ҡаръян) ауылында Мөхәммәт Агишевтан Ҡирәй Мәргән яҙып алған. — Ғилми архив, ф. 3, оп. 21, д. 3, 172-се бит; БХИ: Эпос, 3-сө китап, 69 — 70-се биттәр.

**Варианттары:**

1. Ғәбитов. Ҡыҫҡаса үрнәктәр, 64 — 65-се биттәр.

2. *Сура батыр йыры.* Сибай ҡалаһында ҡурайсы Бикбулатов Сәйфулланан 1939 йә 1940 йылда Х. Хамматов яҙып алған. Бары биш юллыҡ өҙөк. — Ғилми архив, ф. 3, оп. 12, д. 207, 31-се бит.

3. «Сура батыр» эпосының ҡаҙаҡ, нуғай варианттарында урын алған бер мотив — ***арыҫландың бүре яралаған бейәне ашамауы*** — тамъян-ҡатай башҡорттарының бер шәжәрәһендә сағыла // Көнсығышты өйрәнеү институтының Санкт-Петербург бүлеге ҡулъяҙмалар фонды. В 2622.

**Башҡа телдә баҫылған варианттары:**

1. *Чура батыр хикәяте* // Турецкая хрестоматия, 1862. 41 — 45-се биттәр; ТХИ: Дастаннар. № 16.

2. *Ҡыссаи Чура батыр.* Ҡазан. 1884.

3. *Шора батыр* // Ноғай халыҡ йырлары / Төҙөүсеһе С. А. Ҡалмыкова. М., 1969. 67 — 81-се биттәр.

4. *Шура батыр.* Киргизская былина // Сборник материалов для статистики Сырдарьинской области. Т. IV. Ташкент, 1895. С. 60.

5. Юлдаш. *Чура батыр.* Татарса әҙәби вариант // «Аң» журналы. 1916, № 5.

6. *Шора батыр* // Батырлар жырларының жыйнағы. Икенче жыйнаҡ. Алматы, 1934.

## Сүкем батыр

1936 йылда «Яңы юл» колхозы ағзаһы Янмурзин Әсҡәр бабайҙан яҙып алынған. Ләкин бабайҙың йәшәгән районы, ауылы, йәше әйтелмәгән, яҙып алыусыһы ла билдәле түгел. — Ғилми архив. Ф. 3, оп. 73, д. 24, 1 — 3-сө биттәр; БХИ: Эпос, 3-сө китап, 70 — 71 биттәр.

Әҫәрҙең сығанағы тураһында мәғлүмәт бирелгән: «Ул (йәғни Янмурзин Әсҡәр. — *Н. З.*) быны Ҡоломбәт ауылының тарихсыһы Барый тигән кешенән отоп алған... Унда 1600 йылда яҙылған ҡулъяҙма китап һаҡлана, тиҙәр. Ул китап ҡарындыҡтан яһалған булған, һәм һәр нәҫелдә йәшәгән аңлыраҡ кеше үҙе йәшәгән осорҙа ни нәмәләр булған, шул турала түкмәй-сәсмәй яҙып барған, тиҙәр. Унда Башҡортостандың бер оҙон тарихы яҙылған. Сүкем батыр тураһында ҡобайыр ҙа шул яҡта китаптан алынған. Барый Свердловскиҙа йәшәй».

Текст ахырында Сүкем батыр тураһында шундай риүәйәт хәбәр ителгән:

«Сүкем батырҙы Россия менән Польша һуғышы ваҡытында йәшәгән, тип һөйләйҙәр. Долмат, Ҡайырҙы һәм Миәс буйына килеп (Силәбе өлкәһе), Күсем хандың яуҙары һалйот башҡорттарының ерҙәрен, малдарын та-

лағандар. Башҡорт халҡынан үҙҙәре теләгәнсә көлгәндәр, үлтергәндәр. Былдай хәлгә түҙә алмағас, башҡорттар дошман сафтарына ҡаршы восстание һағандар. Уның менән Сүкем етәкселек иткән. (Сүкем — Гөлөк батыр менән бер туған, игеҙ.) Восстание өс йылға тартылған. Башҡорт уксылары дошман һалдаттарын өс йыл буйына ҡыйратҡандар. Долматов крепосын ватҡандар. Һуңынан Сүкемдең армияһы тарҡаулана башлаған, һәм бер үҙе Миәс буйында һуғышҡанда үлтерелгән.

Сүкемдең тыуған ауылы — Тәрһән (бәлки, Силәбе өлкәһендәге Тәһрән күл ауылы? — *Н. З.*), «Яңы юл» колхозынан дүрт километр йыраҡлыҡта хәҙер Чкалов исемендәге колхоз.

## Баязит батыр

1961 йылда Куйбышев (хәҙер Һамар — Самар) өлкәһе, Оло-Чернигов районы Таллы ауылында 69 йәшлек Ғатауылла Заһиҙуллиндан Ҡирәй Мәргән «Баяс батыр» тип яҙып алған. Ләкин текста Баяс исеме бер ҙә телгә алынмай. — Ғилми архив. Ф. 3, оп. 21, д. 6. 52 — 53-сө биттәр; БХИ: Эпос, 3-сө китап, 71 — 72-се биттәр.

*Баяс батыр* тураһында риүәйәт варианты 1971 йыл Саратов өлкәһе, Перелюб районы Ҡунаҡбай ауылында яҙып алынып, БХИ-ның «Риүәйәттәр һәм легендалар» китабында (1980) һәм, ҡабатлап, был баҫманың 2-се томында (1997) баҫылған. Йөкмәткеһе түбәндәге «Ҡарас менән Аҡша» хикәйәтен хәтерләтә.

## Аҡшам батыр

1960 йылда Ырымбур өлкәһе Юлтый ауылында 93 йәшлек Аллабирҙе Юлтыевтан Ҡирәй Мәргән яҙып алған. — Ғилми архив. Ф. 3, оп. 21, д. 3. 169-сы бит; БХИ: Эпос, 3-сө китап, 72-се бит.

[1] *Аҡ балтыр һәм уймаҡтай ауыҙ* — ир-батырҙар һынына хас түгел. Был портрет һыҙаттары, күрәһең, батырҙарҙың әле йәш булыуын аңлатыу өсөн алынған.

## Көбәк батыр

Ғәбитов. Ҡыҫҡаса үрнәктәр; БХИ: Эпос, 3-сө китап, 73-сө бит.

Ҡобайыр ахырындағы күп нөктә оят һүҙҙе аңлата булһа кәрәк.

## Түлгән батыр

1960 йылда Ырымбур өлкәһе Ҡолман ауылында Мөхәммәт Агишевтан Ҡирәй Мәргән яҙып алған. — Ғилми архив. Ф. 3, оп. 21, д. 3, 171-се бит; БХИ: Эпос, 3-сө китап, 74-се бит.

## Старшина Мәсәғүт

1973 йылда Баймаҡ районы Таһир ауылында Хәйбуллин Барый Мәғсүм улының көйләп һөйләүе буйынса музыка белгесе Фәрит Ҡамаев (1944 — 1992) магнитофон таҫмаһына яҙып алған. Бында ошо текст баҫыла. — БХИ: Эпос, 3-сө китап, 74 — 75-се биттәр.

30-сы йылдар башында Барый Хәйбуллиндың атаһы Мәғсүм Әптрәҙаҡ улы Хәйбуллиндан шул уҡ Таһир ауылында яҙып алынған тексы ла һаҡланған. — Ғилми архив. Ф. 3, оп. 12, д. 301, 32 — 33-сө биттәр.

Сағыштырыу шуны күрһәтә: М. Хәйбуллин «Старшина Мәсәғүт» ҡобайырынан һуң «Маҡтаныу», «Алланың ҡөҙрәте шундайҙыр...» һәм «Арыны әйт тә бирене әйт...» тигән әйтемдәрҙе һәм «Урал» бәйетен яҙҙырған. Был репертуарҙы атаһы нисек башҡарған булһа, Барый Хәйбуллин да, асылда, шул составта һөйләгән. Айырма шунда ғына: ҡобайырҙы ул старшина Мәсәғүттең халыҡҡа мөрәжәғәте менән түгел, ә урындарын алмаштырып, икенсе строфаһы менән башлаған.

Ҡобайырҙың йәнә **ике варианты** билдәле:

*Беренсеһен* 20-се йылдарҙа Ғ. Вилданов Тамъян-Ҡатай кантоны (хәҙерге Әбйәлил районы) Әбулғази ауылында яҙып алған һәм 1927 йылда «Башҡорт аймағы» журналының 4-се һанында баҫылған «Ҡобайырҙар башҡортса» тигән мәҡәләһендә «6-сы ҡобайыр» тип килтергән.

*Икенсеһен* 1952 йылда шулай уҡ Әбйәлил районында Рәми Ғарипов яҙып алған. — Ғилми архив. Ф. 3, оп. 12, д. 273, 81-се бит.

[1] *Атанан тоҙ алырға, батшалыҡҡа һалырға* — был ике юл варианттарҙың барыһында ла үҙәктә тора, әммә мәғәнәһе төрләсә. Р. Ғарипов яҙмаһында бындағыса әйтелгән беренсе юлды (*Атанан тоҙ алырға*) «ата тоҙ», йәғни ҙур киҫәк-киҫәк таҙа тоҙ, тип аңлаһаҡ, Хәйбуллиндарҙың һөйләүендә тоҙҙо яһаҡ өсөн батшалыҡҡа, йәғни ҡаҙнаға, тапшырырға бойороу аңлашыла. Р. Ғарипов яҙмаһында икенсе юл — *Батшалыҡҡа ҡалырға.* Тимәк, был вариантта тоҙ алыу мотивы Рус дәүләтенән айырылмаҫҡа идеяһы менән тоташа, мәғәнә бермә-бер ҙурая.

Ғ. Вилданов яҙмаһында был ике юл өс юлдан тора:

*Батшалыҡҡа алырға,*
*Унан барып тоҙ алырға,*
*Аҡ ҡалпаҡҡа һалырға.*

[2] Строфаның һуңғы алты юлында старшина Мәсәғүттең Указға мөнәсәбәте сағыла. Әммә Ғ. Вилданов менән Р. Ғарипов яҙмаларында ул юҡ. Строфа «Гемһәләй, гемһәләй, һәллеүүәләйт, һәллеүүәләйт» (Р. Ғарипов яҙмаһында — кем һәләй һәллеүәләй) тигән юлдар менән ослана. Ымлыҡҡа ҡоролған бындай ритмик бөтөм Әбйәлил районында башлыса Ғ. Вилданов яҙып алған әйтемдәрҙә лә осрай. Ул бер фекерҙең (строфаның) тамамланыуын белдереү менән бергә башҡарыусы сәсәнгә бер аҙ тын алып тороу (пауза яһау) мөмкинлеген тыуҙыра.

[3] *Хеҙмәт иткән хур булмаҫ* — Ғ. Вилданов яҙмаһында «Байға торған хур булмаҫ».

[4] *Ҡазыйлы илдәй ил булмаҫ* — бер хужалы, бер хөкөмлө илдең өҫтөнлөгөн аңлата.

## Ҡарас менән Аҡша

Күрәһең, 20 — 30-сы йылдарҙа (һәр хәлдә 1940 йылдан да һуң түгел) яҙып алынған. Латинса машинкала баҫтырылған текст — Ғилми архив. Ф. 3, оп. 12, д. 307, 50 — 56-сы биттәр; БХИ: Эпос, 3-сө китап, 75 — 78-се биттәр.

[1] *Туғын* — тығыҙ, тығыҙлап тултырылған.

[2] *Ҡыуғыға* — малды ҡыуып алып китеүсегә.

[3] *Юйылһаң*, йәғни атып та тейҙерә алмаһаң.

[4] ... *һиңә хурлыҡ* — түбәндә килтерелгән варианттарҙа «һиңә намыҫ».

[5] М. Буранғолов яҙмаһында («Ҡарас сәсән») бынан һуң ике юл бар:

Ҡаҙаҡҡа мәргәнлекте белдерәйем,
Ҡаҙағым, һынар өсөн торҙоң алыҫ.

[6] *Өҫтөндәге һауытын* — ваҡ тимер дүңгәләстәрҙән тегелгән күлдәк, һуғыш кейеме, кольчуга.

[7] Әүәле яуҙа үлгән батырҙарҙың ҡәберенә уҡ ҡаҙап китер булғандар. Был йола һәләк булғандарҙың батырлығын хөрмәт итеү билдәһе итеп һаналған. Н. Рычков 1771 йылда Ырымбурҙан Ҡаҙағстанға сәйәхәтендә уҡ-һаҙаҡ, һөңгө ҡаҙалған зыяраттарға осрауын яҙа. Шундай зыяраттарҙың береһен ул Ырғыҙ йылғаһы буйында осрата. (Дневные записки путешествия капитана Николая Рычкова в Киргис-Кайсацкую степь в 1771 году. СПб, 1772. С. 16.)

**Варианттар:**

1. *«Ҡарас сәсән»* исемендә М. Буранғоловтың «Фольклор ижадсылары» тигән ҡулъяҙма хеҙмәтендә килтерелә. — Ғилми архив. Ф. 3, оп. 12, д. 445, 17 — 22-се биттәр. Ҡасан, кемдән алыныуы әйтелмәгән. Был томдағы варианттан әллә ни айырылмай, тик легенда өлөшө ҡыҫҡараҡ һәм 4 — 5-се иҫкәрмәләрҙә күрһәтелгән үҙенсәлектәр бар. Ҡаҙаҡ батырының әйтеме — ҡаҙаҡса.

2. *«Башҡорт ҡашҡалары»* исемендә Башҡортостандың хәҙерге Учалы районы Науруз ауылында Әхмәтша Солтановтың Ғәли Байғаринда һаҡланған иҫке ҡулъяҙмаһынан күсереп алып, Г. Вилданов 1925 йылда «Башҡорт аймағы» журналының 1-се һанында баҫтырған. Күрәһең, ҡулъяҙманың үҙендә булғандыр, хикәйәттә сағылған ваҡиғаға ҡарата түбәндәгесә тарихи мәғлүмәт бирелгән:

«Ваҡиға 1750 йылдарҙа [булған].

Хәҙерге Тамъян-Ҡатай кантоны Науруз ауылы башҡорттарының төп аталары Айбағыш, Көнбағыш исемле ике туған булған. Айбағыштан Килдеш исемле атҡыс-мәргән тыуып, заманында тиңһеҙ булған. Көнбағыштан Ҡушкилде тыуып, ул да атҡыс булған. Ҡушкилденән Ҡарас исемендә бер улан ҡалған. Ҡарас та атаһы һымаҡ уҡ-һаҙаҡҡа бирелеп, йәштән батырлыҡ, атҡыслыҡ исемен алып, һәр ваҡыт Килдеш батыр менән бергә яу ҡайтарып, яу сабып йөрөгән. Боронғо киң тормошта атҡыстар йыйылышып майҙан тотҡандар. Килдеш менән Ҡарастан алда һис кем булмаған. Ул ваҡыттарҙа хәҙерге Тамъян-Ҡатай кантонындағы Килмәк ауылы булған, Верхнеурал ҡалаһы ла булған. Тик ул урында бер нисә генә өй булып, пост

өсөн ел тирмәне рәүешендә кәҫтән өйгән бер сасауай[1] булған. Хәҙерге ундағы Буғаҙаҡ, Сабаҡлы күлдәре башҡорт йәйләүҙәре урыны булған. Иҫле күлдән көнбайыш яҡтан Урал арҡаһына сығыуға, урман ҡалын, ағас күплектән, мөмкин булмаған. Иҫле күле ҡаҙаҡтар яғынан башҡорт йәйләүенең сиге булған. Ул ваҡыттарҙа башҡорт халҡы үҙҙәре теләгәнсә мал аҫрап, күсмәлек менән тереклек иткәндәр. Ауыл булып ултырыу булмаған. Аҡтыҫтар айыу, болан, төлкө, бүре, һыуһар кеүек йәнлектәр аулап, төн яғындағы йәрминкәләргә алып барып һатҡандар. Әгәр ҙә башҡорттарға ҡаҙаҡ, ҡалмыҡ йәки урыҫтар яғынан ҡыйынсылыҡ килһә, башҡорт ҡашҡалары*, батырҙары менән ҡаршы тороп яу ҡайтарғандар. Ул ваҡыттарҙа яу ҡайтарыуҙа Барын ырыуынан Ҡалмантай батыр, Тамъян ырыуынан Янай батыр, Тиләү ырыуынан Килдеш, Ҡарас батырҙар булған. Ошо батырҙарҙың исемдәре күңел тарихында һаҡланып килеп, улар һәм уларҙың миҙгелдәре әлдә лә булһа халыҡ телендә йөрөй. Улар тураһында һамаҡтар, йырҙар йырлана, ҡурайҙарҙа тарталар.

Ул заманда барымта, ҡарымҭа заманы булған. Һәр милләт көсө еткәнен талап, тартып алып китә биргән. Башҡорттар менән ҡаҙаҡтар ҙа тыныс тора алмағандар. Бер-берененең малын тартып алып китеүҙе ҙур улъя күргәндәр. Иленә мал алып ҡайтһалар, ҙур шөһрәт тапҡандар. Малдың киткәне тиҙлектә беленеп, ҡыуғын төшһә, арала ҡанлы һуғыштар, күп ҡырылыштар булған. Мына шул йөмләнән ҡаҙаҡ ҡашҡалары менән башҡорттарҙың Ҡарас ҡашҡаһы араһында булған яу һалышыуҙы мында яҙып үтәбеҙ». («Башҡорт аймағы», 1925, № 1, 78 — 79-сы биттәр.)

М. Буранғолов аңлатыуынса, Ҡарас батырҙың нәҫел ебе Ҡобағош сәсәнгә барып тоташа. — Ғилми архив. Ф. 3, оп. 12, д. 445, 21-се бит.

Аҙаҡ, ҡобайыр тексынан һуң, Ғ. Вилданов әҫәргә ҡарата үҙенең ҡайһы бер фекерҙәрен яҙып үтә. Шуларҙан түбәндәге иҫкәрмәһе, Ә. Солтанов ҡулъяҙмаһының тарихына ҡағылғанлыҡтан, иғтибарға лайыҡ:

«Ҡарас батыр тураһында юғарылағы һүҙҙәр Әхмәтша Солтанов, Ғәбделғәзиз Наурузовтың һөйләүенән яҙып алған Ғүмәр Күкбурин тигән кешенең «Башҡорт мәргәндәре» исемендә бер тарихи әҫәре булып, Ҡарас батыр тураһындағы мәғлүмәт шунан алынған булыуы аңлашыла. «Башҡорт мәргәндәре» тигән әҫәр хәҙер ҙә һаҡланып-һаҡланмауы билдәһеҙ»... (Шунда уҡ, 85-се бит.)

Хикәйәт түбәндәгесә башлана:

«Йәйҙең күңелле ваҡытында, һәммә башҡорт йәйләүҙә торғанда, майҙың 25-тәрендә Айбағыш өйөндә күп халыҡ шау килеп ҡымыҙ эсеп ултырғанда, йылҡысы килеп, тирмә һыртынан «Малды яу ҡыуып алып китте!» — тип ғауға һала. Ул ваҡытта Килдеш мәргән икенсе бер ауылда була. Ҡарас батыр ҡапыл һикереп тора ла: «Буҙҡашҡаны тотоң!» — тип оран һала. Һәммә халыҡ ат эйәрләй. Ҡарас батыр ҙа өҫтөнә тимер һауытын кейеп алып, уҡ-һаҙағын бәйләп, буҙҡашҡаға менә һалып, инәһенән китеүгә бата һорай. Инәһе бата бирә. Шул ваҡыт Айбағыштың хужа ҡатыны сығып, Ҡарасҡа ҡарап: «Батырым! Әгәр ҙә малдың ярым-яртыһы ҡалһа, бармағыҙ, Килдеш тә өйҙә юҡ, юҡҡа тәләф булмағыҙ; әгәр ҙә малдың яртыһынан күбе киткән булһа, Яйыҡҡа тиклем барып самалағыҙ. Ҡыуыусы

[1] Сасауай — часовой, һаҡсылар торған урын.

бик күп булһа, кире ҡайтырһығыҙ», — ти. Ҡарас батыр, әбейгә ҡарап: «Әсәй! Мин малды алмайынса кире киләсәк түгелмен, уҡ-һаҙағым барында, береһен дә ҡуймам, һеҙ батала тороғоҙ», — тип, буҙкашҡаға ҡамсы тартып, шыу итеп, утыҙлап кеше эйәртеп, яу артынан йүнәлә. Китәр саҡта: «Килдешкә хәҙер генә кеше ебәрегеҙ, тиҙ генә барып етһен. Менә торған күк ала ат киткәнгә оҡшай. Һары аяҡ ҡола атты менһен!» — тип һарнап китә.

Салт төш ваҡытында, хәҙерге Науруз ауылы ултырған ерҙә Яйыҡты сығарып, малды ҡыуып барғанды күрәләр, ләкин ҡаҙаҡтар күп булалар. Йөҙҙән артыҡ. Шул ваҡыт Ҡарас батыр иптәштәренә ҡарап: «Һеҙ минең арттан саҡрым ярым миҡдәрҙә арттараҡ барығыҙ. Мин барып күрәйем, ҡайһы ерҙең ҡаҙағы икән, башлыҡтары кем икәнен беләйем. Әгәр ҙә арала атыш булып китһә, һеҙ берегеҙ ҙә бармағыҙ, мин үҙем яуап бирермен, — ти. — Ләкин миңә бер-бер яҙым булһа, гәүҙәмде дошман ҡулына биреүгә тырышмағыҙ», — ти. Шул һүҙҙәрҙе әйтә лә, буҙкашҡаға ҡамсы тартып, алға йүнәлә. Ҡаҙаҡтар ҙа ҡыуғын төшкәнен белеп, өсәүһе айырылып артта ҡалалар. Бүтәндәре малды ҡыуып баралар. Ҡарас батыр бөркөт һымаҡ төйөлөп, сабып килә, арттарынан етә лә, тауыш ишетелер ерҙә туҡтап, ҡаҙаҡтарға ҡарап түбәндәге ҡобайырҙы әйтә» ... (Ҡобайыр — томдағыса, тик ҡаҙаҡ батырының әйтемен ҡаҙаҡса бирергә тырышҡандыр.)

Вариантта ҡыуғынсыларҙың барымтасылар менән атышы киңерәк һүрәтләнә. Бында әһәмиәтле тойолған шундай бер эпизод бар (орфография һәм тыныш билдәләр журналдағыса ҡалдырылды):

«Ҡарас батырҙың арҡаһына яҡын ғына ҡыуаҡта Зайҙагир сулаҡ исемле бер ҡаҙаҡты йәшереп ҡуялар. Ул сыбар атын ҡамсылап, ҡыңғыраулы айғырын ҡулына алып, сулаҡ ҡаҙаҡ ялмауыҙ һымаҡ өҙөнөп-йолҡоноп сабып килә!!!

«Ҡуарған ҡу истәк! Ордың ғуй ордың алачканы битем менән күренәйен! Бөтөн казаҡты ҡырып бөтөрөп ялғыз Аҡча батырыны ҡалдырсаң булмаймә? Әйтәүер казрәт ғали булсаң да жирмән тигеҙ килайын. Аҡча батырҙың ҡанын алмаған мин булсам донъяда аяҡ басып чулаҡ аталыуымдан ни пайда» тип етеп килгәндә, Ҡарас ҡашка ҡуҙы яурын һаҙаҡты төҙәп ебәрә. Сулаҡтың ботон өҙөп, атының ҡабырғаһын айырып алып китә. Зайҙагир сулаҡ аты менән берҙәй ҡолай. Ҡарас мәргән буҙкашҡаны теҙгенләп Аҡча батырҙың ҡолаған еренә сабып барып янын ҡанъяғаһына бәйләп, ҡалған һаҙағын алып, атын эйәрләй ҙә үҙе мал артынан саба».

Шунан һуң Ҡарас батырҙың туғайлыҡта боçоп ятҡан Мөңгешү исемле бер ҡаҙаҡты атып үлтереүе, малды ҡыуыусы ҡаҙаҡтарға яҡынлашып, уҡ атып берәмләп кәметә барған мәлдә, бында Килдеш батырҙың да килеп етеүе менән уның «Киткәндәре китһен, иленә ҡайтып һөйләрҙәр» тип, Ҡарасты кире саҡырып алып, икәүләп Аҡша батырҙың ҡолаған еренә килеүҙәре һүрәтләнә һәм Ҡарас батырҙың Аҡша батыр тураһында «Күп атыштарҙа булдым, күп батырҙарҙы осраттым, ләкин Аҡша батыр һымаҡ ирҙе күрә алғаным юҡ. Киҙәк һорағанда, ҡаҡшамай, батырҙарса түш киреп киҙәк бирҙе, һәм атҡан уғы һауытты йыртмай аҙ ғына ҡалды. Әгәр икенсе киҙәктә мин йыға алмаһам, энегеҙ Ҡарас был ваҡытта күҙен йомған булыр ине, аша тыуған батыр ир икән», — тип әйткән һүҙҙәре килтерелә.

Аҙаҡ Науруз ауылы тирәһендәге «Аҡса түбә», «Сулаҡ ҡыуағы», «Мәкәш үлгән ҡыуағы» кеүек урын атамаларының хикәйә ителгән ҡанлы бәрелештә һәләк булған ҡаҙаҡ батырҙарының исеменән ҡалғанлығы әйтелә.

3. *«Ҡарас батыр»* исемендә фольклорсы Әхмәт Сөләймәнов Өфөлә тел белгесе Ишмөхәммәт Ғәләүетдиновтан 1969 йылда яҙып алған. Башлыса сәсмә телдә һөйләнгән был вариантта шундай үҙенсәлектәр бар:

а) Ҡаҙаҡ сапҡынсыларының малды ҡыуып алып китеүҙәре Ҡарас батыр һунарға сыҡҡан көндө була. Төп герой өйҙә юҡ саҡта илде дошман килеп баҫыу — эпик ижадта традицион күренеш.

б) Барымтасылар артынан Ҡарас бер үҙе ҡыуа сыға.

в) Батырҙарҙың үҙ-ара танышыуы — ябай, сәсмә телдә. Ҡарастың «Кем һеҙҙең башлығығыҙ, шул сыҡһын әле! Ниндәй атлы батырһың? Ниңә килдең башҡорт еренә?» тигән һорауына ҡаҙаҡ батыры: «Аҡса атлы батырмын, йөҙ ҡаҙаҡҡа бәлемен», — тип яуап бирә. Ҡарас, ҡан түкмәйенсә, малдарҙы ҡалдырып китеүҙе һорағас, Аҡса батыр, маһайып, шулай яуаплай:

Йорт алдында хур ҡалырға,
Ҡыуған малды ҡалдырырға,
Бер истәккә баш әйәргә,
Ҡыҙыл яулыҡ ябынған
Еңгәң бармы ни бында?

г) Батырҙарҙың уҡтарын ырымлап атышыуҙары тулы һаҡланмаған. Ҡарас батыр беренсеһендә Аҡса батырҙың эйәр ҡашына ата; тегенең уғын тотоп алып, уртаға һындыра.

д) Хикәйәт, «Башҡорт ҡашҡалары»ндағы һымаҡ, урын атамаларын ошо бәрелештә һәләк булған ҡаҙаҡ батырҙары исеме менән бәйләй.

## Билал менән Дүсән

1925 йыл Тамъян-Ҡатай кантоны (хәҙерге Учалы районы) Тунғатар ауылында 75 йәшлек Хәлил Аҡкужиндан Ғ. Вилданов яҙып алған. — Ғилми архив. Ф. 3, оп. 12, д. 302, 22-се бит; «Башҡорт аймағы», 1927, № 4; БХИ: Эпос, 3-сө китап.

[1] Журнал баҫмаһында исемдәре әйтелмәгән.

[2] Журнал баҫмаһында: «...*Ҡарымтаға барыусыларға 15-әр баш йылҡы тейгән»*.

## Ерәнсә сәсән

1911 йылда Ырымбур губернаһы Ҡайыпҡол ауылында Миңлебай Мәмбәт улы Сәйетовтан М. Буранғолов яҙып алған һәм «Фольклор ижадсылары» тигән хеҙмәтендә Ерәнсә сәсән хаҡындағы көләмәстәрҙән һуң килтергән. — Ғилми архив. Ф. 3, оп. 12, д. 445, 162 — 165-се биттәр; БХИ: Эпос, 3-сө китап. 80 — 82-се биттәр.

[1] *Һәм* башҡорт халыҡ ижадында осрамай тип әйтерлек. Бында боронғо төрки (сығтай) телендәгесә *дә* теркәүесе хеҙмәтен үтәй.

[2] ... *ҡарамын* — һеҙгә генә ҡара, ҡәҙерһеҙ кеше булып күренәмен.

[3] *Һин түгел, борон хан булған* — XV быуаттың беренсе яртыһында йәшәгән үзбәк ханы *Абул-Хайр* күҙ уңында тотола булһа кәрәк.

[4] *Күсендә* — үҙ күсенең (халҡының) эсендә.

[5] *Көсөмө* — Күсем хандың исеме бында шулай яҙылған. *Көсөм,* боронғо төрки телендә *Күсем* «юлбашсы» тигәнде аңлата.

## Ҡараһаҡал

1907 йылда Башҡортостандың хәҙерге Баймаҡ районы Иҙрис ауылында Арғынбаев Ғәбит ҡурайсынан (1861 — 1923) Мөхәммәтша Буранғолов яҙып алған. — Ғилми архив. Ф. 25, оп. 1, д. 7, 24 — 69-сы биттәр. Шаҡтай ҡыҫҡартылып — Батырҙар тураһында эпос, 103 — 142-се биттәр. Ҡулъяҙмала ла, китап баҫмаһында ла текст рим цифрҙары менән ун бер бүлеккә бүленгән, әммә китапта хикәйәләү шаһитлы үткән заман хәбәр ҡылым формаһына күсерелгән: *ятманы, тапаны, яуасты...* М. Буранғолов яҙмаһынан беренсе бүлеген ташлап, ҡалған яғы һүҙмә-һүҙ күсерелеп, машинкала баҫтырылған бер текст Өфө сәнғәт институтының фольклор кабинетында һаҡлана: йыйынтыҡ № 27. Ғата Сөләймәнов. Башҡорт халыҡ көйҙәренең легендалары. 1958, 41 — 89-сы биттәр. Ошо текст философия фәндәре докторы Дамир Вәлиев тарафынан «Ағиҙел» журналының 1988 йыл 5-се һанында донъяға сығарылды.

Бында ғилми архивта һаҡланған текст алынды. М. Буранғолов иҫкәрмәләре йәйәләр эсендә уның инициалы *(М. Б.)* менән билдәләнде.

[1] *... яй иттең* — яйлы булдың, урын бирҙең.

[2] *Аҡҡа тиреҫ төшкәнде* — ҡағыҙҙа яҙылған яҙыуҙы.

[3] *Һис ни килмәҫ ҡулыңдан* — тикһеҙ (затһыҙ, йүнһеҙ) түрәгә йөрөп, эш сығара алмаҫһың.

1736 йылдың 11 февралендә батша указ сығара. Башҡорттарҙың яңынан баш күтәреүҙәрен нисек тә сикләү маҡсатында шундай саралар күрелә: башҡорт ерҙәрен тартып алыу тыйылып, «һатып алыу» рөхсәт ителә; бынан һуң налог түләү системаһы үҙгәртелеп, яңы һалымдар, шул иҫәптән, башҡорттарҙы сик буйы хеҙмәтенә алыу, йөк ташыу һалымы өҫтәлә; 1735 йылғы болаларҙа ҡатнашҡан волостарҙа ҡәҙимге старосталар урынына власҡа «тоғролоҡло» кешеләрҙән старшиналар һәм уларҙың ярҙамсыларын «һайлап ҡуйыу» — асылда воеводалар тарафынан тәғәйенләү индерелә. (Аҡманов, 20 — 23-сө биттәр.) Шул уҡ 1736 йыл башында башҡорттарҙың һан хисабын алыу башлана. (Шунда уҡ, 40-сы бит.)

Ҡобайырҙа шул указға, уға тиклем һәм унан һуңғы әмәлдәргә халыҡтың кире мөнәсәбәте сағыла.

[4] *Ҡыңғыр-ҡыңғыр иш* — ауыр саҡта ҡайғы-хәсрәт уртаҡлаша торған яҡын кеше *(М. Б.).*

[5] *Ҡуңыр буға юлы* — «Иҙеүкәй менән Мораҙым» тексына 21-се иҫкәрмәне ҡарағыҙ.

[6] *Ҡыҙ ҡолағын тешләткән* — бында боронғо йола — ике таныш-белештең, дуҫтарҙың береһенең улынан икенсеһенең ҡыҙының ҡолағын тешләтеп (йәғни тамға һалып ҡуйыу), алдан уҡ ҡоҙалашыу, туғанлашыу йолаһы сағыла.

[7] Ирек даулаусы башҡорттар менән көрәштә уларҙың үҙ түрәләре, батшаға «тоғро» башҡорт феодалдары ла ҡатнашҡан. (Аҡманов, 28-се бит.)

[8] Һуңғы биш строфа (44 юл) ҡулъяҙмала — сәсмә формала, китап баҫмаһында шиғри телгә күсерелгән.

[9] *Зыярат ҡылыу,* йәғни үлгән кешенең ҡәберенә килеп баш эйеү, ул кешенең изге эштәре хаҡында иҫтәлектәр һаҡлауҙы, хөрмәт итеүҙе аңлата.

[10] Борон төрки телле халыҡтарҙа (шул иҫәптән, башҡорттарҙа ла) ҙур тарихи ваҡиғаларға, шулай уҡ үлгән оло шәхестең ҡырҡында, йыллығында унын рухына бағышлап, йыйын-бәйге үткәрер булғандар. Был йола «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу» эпосында ла сағыла.

[11] *Тоҫҡап килгән мәрәйен* — үҙенең уйын-ниәтен. Ҡулъяҙмала: *Үҙең тоҫҡар мәрәйен* (?). Журнал баҫмаһында: *Үҙен тоҫҡар мәрәйен* (?).

[12] *Ун дүрт йыллыҡ ғүмеремде мин үткәрҙем был илдә.* — Тарихтан билдәле булыуынса, Миңлеғол (Ҡараһаҡал) бөтә йәшлеген Урта Азия һәм Ҡаҙағстанда ил гиҙеп үткәрә, төрки телдәрен генә түгел, зөңгөрдәр (13-сө иҫкәрмәне ҡарағыҙ) телен дә яҡшы белә.

[13] *Зөңгөр* — зуун-гар. Ғилми әҙәбиәттә Джунгар (Ойрат) ханлығы.

[14] Әбелхәйер, әгәр башҡорттар унын бер улын үҙҙәренә хан итеп һайлаһалар, уларҙы Мәскәү дәүләтенән айырып алырға, башҡорт ерҙәрен урыҫтарҙан арындырырға вәғәҙә иткән. Башҡорттар быға күнмәгән. (Игнатьев Р. Карасакал, лжехан Башкирии // Труды науч. общ. по изучению быта, истории и культуры башкир при Наркомпросе БАССР, вып. 2. Стерлитамак, 1922. С. 41.) Әбелхәйерҙең аҫтыртын эше-уйы «Ерәнсә сәсән» ҡобайырында асыла.

[15] ...*Солтангәрәй булам мин.* — Билдәле булыуынса, Ҡараһаҡал Башҡортостанға Зөңгөр ханынын улы исемендә ҡайта. 1740 йыл башында башҡорт ханы итеп иғлан ителә. (Аҡманов. 42-се бит.)

[16] Бында, күрәһең, Ҡараһаҡал тирәһенә Зөңгөр һәм ҡаҙаҡ далаларында күп кеше тупланыуы, 82 меңлек ғәскәре Әстрхан диңгеҙе буйында булыуы тураһындағы хәбәр (Аҡманов, 42-се бит) сағыла.

[17] *Мәмерйә* — Бөрйән районы Ҡотан ауылынан Ағиҙел буйлап түбәндәрәк «Антон ҡаяһы» мәмерйәһе. Был ҡая тураһында риүәйәт — БХИ: Риүәйәттәр, легендалар, № 96.

[18] ... *буш бирәм, тип алданы.* — 3-сө иҫкәрмәлә әйтелгән указ күҙ уңында тотола.

[19] *Фарман килде тағы ла.* — Шул уҡ 1736 йылдың 11 февралендә сығарылған Указда башҡорттарҙың Ҡазан татарҙары менән никахлашыуы тыйыла.

[20] *Әмәкәс батырҙың аты* — айырата Юрматы ырыуында киң таралған риүәйәттә данланған легендар ат (Ҡарат). Махсус ойошторолған бәйгелә ул, янарал аттарын уҙып, 120 башҡортто әсирлектән ҡотҡарған, ти. Риүәйәттең 1963 йылда Маҡар (хәҙерге Ишембай) районында яҙып алынған варианты «Башҡорт легендалары» (Өфө, БДУ, 1969) китабында баҫылған (№ 43); руссаға тәржемәһе — БНТ, т. 2: Предания и легенды. Уфа, 1987, № 339. Шул риүәйәттең йырынан өс строфа — БХИ: Йырҙар, 1-се китап. Өфө, 1974, 71-се бит. Ҡараһаҡал тураһында Р. Г. Игнатьевҡа билдәле булған йырҙарҙың береһендә геройҙың ҡара атҡа атланып яу сабыуы эпик стилдә һүрәтләнә (14-се иҫкәрмәлә әйтелгән китап, 48-се бит).

[21] *Күп теләгән* — күпселек, йәғни халыҡ, теләгән.

[22] *Ғайса* — пәйғәмбәр.

**Варианттар:**

1. XIX быуаттың һуңғы сирегендә халыҡ араһында йырланған йырҙарҙың береһен Р. Г. Игнатьев «*Карасакал, лжехан Башкирии* (Эпизод из истории Оренбургского края XVIII столетия)» тигән китабында (Оренбург, 1880) руссаға тәржемә итеп баҫтырған. Ҡайтанан баҫылған: Труды Научного общества по изучению быта, истории и культуры башкир при Наркомпросе БАССР. Вып. 2. Стерлитамак, 1922. С. 48. Бына ул (орфография һәм пунктуация шул замандағыса):

Карасакал — батырь,
Каких мало в свете,
В белой чалме,
На черном коне —
Быстр, он как ветер,
Грозен, как Божья гроза,
Богом хранимый не боится врагов,
Он их побивает
Острой саблей,
Копьем и стрелами:
Они ему в Мекке даны.
Карасакал — батырь,
Карасакал — батырь,
Каких мало на свете.
Он Богом храним:
Ему нипочем
Сотня врагов.
Он идет на сто человек,
Один побивает сто человек.
Ой батырь, батырь,
Божья гроза, пагуба неверных,
Он Богом храним.
Хан, хан Карасакал,
Смотрите,
В белой чалме на черном коне.
Грозно он саблею машет,
Громко правоверных скликает
Идти на врагов,
Идти против неверных.
С ним биться невозможно:
Ему не вредят ни пули, ни стрелы,
Ни копья, ни сабли.
Он Богом храним.

2. «*Ҡара ат тарихы*» исемендә Мөхәммәтша Буранғолов яҙып алған, — ҡасан, ҡайҙа, кемдән икәне әйтелмәгән. Латинса машинкала баҫылған текст Өфө дәүләт сәнғәт институтының фольклор кабинетында һаҡлана: Сборник № 49 — М. Буранғолов. Атты маҡтауға ҡайтып ҡалған йырҙар һәм уларҙың тарихи легендалары. 1912 — 1938 йылдар. 1 — 17-се биттәр.

«Ҡара һаҡал һәм ҡара ат көйөнөң тарихы һәм йырҙары» тигән исем менән 1939 йылда «Октябрь» журналының 8 — 9-сы һанында баҫылып сыҡҡан. Икенсе тапҡыр Дамир Вәлиев тарафынан «Ағиҙел» журналының 1987 йылғы 6-сы һанында баҫтырылған, инеш һүҙҙә «тарихи эпос» тип аңлатылған.

Вариантта Ҡарат тураһындағы лиро-драматик йөкмәткеле риүәйәткә «Ҡараһаҡал» ҡобайырының VII — XI бүлектәре һүҙмә-һүҙ ялғанған.

## Юлай менән Салауат

М. Буранғолов Ғәбит сәсәндән яҙып алған. Ҡулъяҙмаһы һаҡланмаған. 1939 йылда машинкала баҫтырылған нөсхәһе. — Ғилми архив. Ф. 3, оп. 12, д. 226, 98 — 162-се биттәр. Бер аҙ ҡыҫҡартылып, «Батырҙар тураһында эпос» китабында һәм БХИ: Эпос, 3-сө китапта баҫылған. Был баҫмала Ғилми архивта һаҡланған текст тулы көйгә бирелә.

[1] *Атаһының атаһы Шәғәле Шаҡман булған.* — Аҙналының олатаһы тарихта билдәле түгел.

[2] *Юлайына тапшырған.* — Ырымбур губернаһы канцелярияһының документтарына ҡарағанда, Юлай Аҙналин 1762 йылда сотник, 1766 йылда волость старшинаһы була. (Гвоздикова, 183-сө бит.)

[3] *Ҡуңыр буға тоҡомо* — «Ҡуңыр буға» хикәйәтендә һүрәтләнгән затлы һыйыр нәҫеле күҙ уңында тотола.

[4] *Һаман ҡасып йөрөгән.* — 1755 йылда Батырша етәкселегендәге күтәрелеш баҫтырылғас, яуҙа ҡатнашыусыларҙың күбеһе ҡасып йәшәргә мәжбүр була. Ул яуҙа Юлайҙың да ҡатнашҡан булыуы мөмкин. (Гвоздикова, 185-се бит.)

[5] *... өсөнсөгә тағы ла йәш бисәһенән ул тыуған... Салауат тип исем ҡуштырған.* — Эпик ижадта анахронизм күренеше. Допрос материалдарынан күренеүенсә, Юлайҙың өс ҡатыны, ике улы булған. Олоһо — Салауат, ул 1754 йылда (фольклор материалдары буйынса — 1752 йылда) тыуған. (Гвоздикова, 188-се бит.)

[6] *... Юлай менән башҡаларҙы яуға оҙатҡан.* — Ҡобайырҙың элекке баҫмаларында был урында «1756 — 1763 йылдарҙағы Россия менән Пруссия һуғышы («Семилетняя война») күҙ уңында тотола» тип фараз ителә ине. Әммә ул һуғышта Юлай Аҙналиндың ҡатнашҡанлығы билдәле түгел. 1773 — 75 йылдарҙағы Крәҫтиәндәр һуғышы баҫтырылғас, Юлайҙан һорау алыу протоколдарынан күренеүенсә, ул 1771 йылдың ноябрь айында һалдатҡа алынып, Польшала конфедераттар менән һуғышыусы рус ғәскәрҙәренә ярҙамға саҡырылған башҡорт атлылары составында өс йөҙ кешенән торған отряд менән етәкселек итергә тейеш була. Юлай һигеҙ ат эйәртеп һәм мылтыҡ, ҡылыс, һөңгө, уҡ-һаҙаҡ менән ҡоралланып, Өфөгә килә. Уның отряды 1772 йылдың ғинуар урталарында Өфөнән Польшаға китә. Башҡорт атлылары Варшава, Вильно янында һәм башҡа алыштарҙа ҡатнаша. Һуғыш яланында күрһәткән батырлыҡтары өсөн, Юлай Аҙналин миҙал менән (документтарҙа — «специальной наградой») бүләкләнә. (Гвоздикова, 184-се бит.)

[7] *Түрә булып һайланған.* — Һуғыштан ҡайтҡас, Юлай Аҙналин яңынан Шайтан-Күҙәй волосы старшинаһы булып һайлана.

[8] *...һөйләшә лә башлаған.* — Шулай уҡ анахронизм күренеше. Атаһы Польшаға походтан ҡайтҡанда (1772), Салауат 18 — 20 йәшлек егет була, атаһы һуғышта саҡта, уның старшиналыҡ вазифаһын башҡара.

[9] *Сәргәйев* — Александр Сергеев. Батша ғәскәренә һалдат, ат йыйыу маҡсатында Ҡазандан Башҡортостанға ебәрелеп, бында халыҡты ҡурҡытыу өсөн ауылдарҙы тупҡа тотҡан һәм ошо яуызлығы менән башҡорттарҙың 1705 — 1711 йылдарҙа баш күтәреүҙәренең сәбәпсеһе булған комиссар.

[10] Сығанаҡтарҙың икеһендә лә был ике юл түбәндәгесә:

Быуат-быуат бер юлдан
Яуға сабып йөрөгән ул.

Артабанғы строфала һөйләмдең эйәһе юҡ, шуға юл өҫтәлде.

[11] Төп сығанаҡта был ике юл юҡ. Китап баҫмаһында:

Салауат һүҙгә башлап,
Былай тигән шул ерҙә.

[12] *Сом* — Эҫем (Сим) йылғаһы.

[13] *Салауатҡа ҡатынға килененде алған һуң.* — Халыҡ һөйләүенсә, Салауаттың беренсе бисәһе Әминә тәүҙә уның ағаһының бисәһе булған (*М. Буранғолов иҫкәрмәһе*). Тарихи документтарҙан күренеүенсә, Салауат үҙе — Юлайҙың оло улы. Бәлки, уның ике туған ағаһы булғандыр? Һәр хәлдә ағайҙың тол ҡалған бисәһенә өйләнеү — төрки халыҡтарында борондан килгән йола.

[14] Сығанаҡтарҙа тәүге юл (һөйләмдең эйәһе) юҡ, строфа шулай башлана:

Тәрән уйҙар һөйләшеп,
Бергә уйнап-көлөшөп, —

артабан бындағыса.

[15] *«Ишетегеҙ, белегеҙ»* тигән өҫтәмә юлдан һуңғы һөйләм төп нөсхәлә 50, китап баҫмаһында 49 юлға һуҙылып, мәғәнәһе ифрат тоноҡланған.

[16] *...ҡайтып киткән.* — Был һөйләмдән һуң Салауаттың һүҙенә ярлыябағайҙың «бөтә ҡайғы бөткәндәй шатланыуы», тархандарҙың «бошоноуы», баярҙарҙың Һағынбай аша Салауатты үҙ ҡулдарына тотасағына «өмөтләнеүҙәре» тураһында шаҡтай буталсыҡ әйтелә.

[17] *Илдә түрә булдым мин.* — 6 — 7-се иҫкәрмәләрҙе ҡарағыҙ.

[18] *Ҡолаҡһыҙ, телһеҙ ҡалған... ирҙәрҙең барын күргән.* — Билдәле булыуынса, XVII — XVIII быуаттарҙа булған башҡорт күтәрелештәре батша армияһы тарафынан һис аяуһыҙ баҫтырылып, баш күтәреүселәр быға са күрелмәгән рәүештәрҙә ҡаты язалана: ҡулдары сабып өҙөлә, ҡолаҡтары, телдәре киҫеп алына, ҡайһы берҙәре хатта осло бағанаға ултыртыла йә ҡабырғаларынан ырғаҡҡа эләктереп аҫып ҡуйыла. (Гвоздикова, 210 — 212-се биттәр.) Шул замандан телһеҙ ҡалған бер башҡорт образы А. С. Пушкиндың «Капитан ҡыҙы» («Капитанская дочка») романында ла һүрәтләнә, ә «Пугачев тарихы» романында вәхшиҙәрсә язалауҙарҙың күп

миҫалдары килтерелә (Пушкин А. С. Полн. соб. соч. В 10 томах. Т. 8. Л.: Наука, 1978. С. 252).

[19] Йәйә эсенә алынған юлдар сығанаҡтарҙа шиғри яҡтан ҡытыршы булып, мәғәнә асыҡлығы етешмәй. Атаһының миҙалын тағып китеүе тураһында Салауат Мәскәүҙәге допроста үҙе әйтә. (Гвоздикова, 185-се бит.)

[20] Был юлдар сығанаҡтарҙа — теҙмә формала, әммә шиғри төҙөклөк етешмәй.

[21] Был юлдар сығанаҡтарҙа — теҙмә формала, әммә шиғри төҙөклөк етешмәй.

[22] Салауаттың был телмәре быуындан быуынға халыҡ хәтерендә һаҡланып, 20-се быуатта өс тапҡыр яҙып алынған. *Тәү тапҡыр* «Башҡорттар араһында ҡолаҡтан ҡолаҡҡа ҡала килгән Салауаттың нотоғо» тип яҙып алынып, С. Мирасов тарафынан 1922 йылда «Башҡортостан Шуралар йөмһүриәте мәғариф комиссариаты янындағы ғилми-фәнни вә тарихи ойошманың хеҙмәте»ндә баҫылған. (29 — 31-се биттәр.) Урыҫсаға тәржемәһе, «Речь Салавата к башкирскому народу» тип, «Песни и сказания о Разине и Пугачеве» тигән йыйынтыҡта баҫылған / Төҙөүсеһе А. Н. Лозанова. М., 1935. 212 — 215-се биттәр; ҡыҫҡартылып — Пугачев в Среднем Поволжье и Заволжье. Народное творчество, отрывки из литературных произведений, исторические документы / Сост. А. Н. Лозанова. Куйбышевское обл. изд-во, 1947. С. 43 — 44.

*Икенсе тапҡыр,* күрәһең, М. Буранғолов тарафынан яҙып алынып, уның «Башҡорт фольклоры» тигән ҡулъяҙма хеҙмәтендә килтерелгән. — Ғилми архив. Ф. 3, оп. 12, д. 445, 204 — 205-се биттәр. Бөтәһе 20 шиғри юл.

*Өсөнсө яҙмаһы,* 1945 йылда Вәлиулла Ҡоломбәтов тарафынан Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтына тапшырылып, Рәшит Ниғмәти эшкәртеүендә «Бүгәсәүгә ҡушылып, ир-батырға ҡуш булып...» тигән исем менән тәү тапҡыр 1952 йылда «Әҙәби Башҡортостан» журналында, икенсе тапҡыр «Башҡорт поэзияһы» антологияһында (Өфө, 1953; яңы баҫмаһы — Өфө, 1978) баҫылған.

[23] Был һөйләм сығанаҡтарҙа теҙмә формала биш юлдан тора, әммә шиғри төҙөклөк юҡ.

[24] ... *өс йөҙ кешене ҡырған.* — «Салауат батыр тураһында йыр» («Песня о батыре Салавате») тигән мәҡәләһендә Р. Г. Игнатьев, риүәйәттәргә таянып: «Салауат бер һуғышта үҙ ҡулдары менән йөҙҙән ашыу кешене үлтергән; икенсеһендә бер үҙе тотош полкка ҡаршы торған», — тип яҙа. Башкирия в русской литературе. Том. 2 / Сост. М. Г. Рахимкулов. Уфа; 1964. С. 81; шул уҡ исемдә яңы баҫмаһы — Уфа, 1991. С. 280/. Салауаттыҡы тип йөрөтөлгән бер йырҙа ла шул уҡ хаҡта әйтелә:

Я сразился со врагами
И врагов разил,
На меня напало разом
Триста человек.
Я от всех трехсот отбился,
Вынес конь меня
На широкую долину
К светлому ручью.

(Шунда уҡ. С. 284 — 285.)

## Салауат батыр

Күп йыйынтыктарҙа баҫылған ҡобайыр. Ғилми баҫмаһы — БХИ: Эпос, 3-сө китап. 124 бит.

## Байыҡ Айҙар сәсән

1920 йылда Стәрлетамаҡта осрашҡанда Ғәбит сәсәндән М. Буранғолов яҙып алған. — Ғилми архив. Ф. 3, оп. 12, д. 445. 41 — 54-се биттәр (тәүге өс бүлек) һәм 177 — 192-се биттәр (һуңғы бүлек). Тулы текст 1970 йылда Нур Зариповтың «Халыҡ ижадының аҫыл өлгөһө» тигән инеш һүҙе менән «Ағиҙел» журналының 9-сы һанында баҫылған. Ғилми баҫмаһы — БХИ: Эпос, 3-сө китап. 82 — 91-се биттәр.

М. Буранғоловтың иҫкәртеүенсә, был ҡобайырҙы Ғәбит сәсән 20 йәшендә (тимәк, 1876 йылда) ҡурайсы Ишмөхәммәт Мырҙаҡаевтан (1781 — 1878) отоп алған (әйтелгән архив сығанағы, 192-се бит).

[1] *Ҡаҙаҡ сәсәндәре* — М. Буранғоловтың иҫкәрмәһендә «Абылай хандың аҡыны» Бохар йырау исеме әйтелә.

[2] *Ҡуш Алаш* — Ҡуш Урҙа.

[3] Был строфа «Ил тигәндең кеме юҡ» исеме менән 1954 йылда БХИ-ҙың 1-се томында баҫылған (58 — 59-сы биттәр).

[4] *Балалай түгел, ир һымаҡ,* йәғни һүҙегеҙ төйөнө бәләкәй түгел, ир-егеттәр хәл итерлек ҙур мәсьәлә.

[5] *Баш ҡойҡаһын ейерҙәй* — төрки халыҡтарында, шул иҫәптән, башҡорттарҙа ла, борондан килгән йола буйынса, туй-һый мәжлестәрендә баш ите иң хөрмәтле кешегә тотторола.

[6] *Яманаттан бутәнем,* йәғни яҡшы даным, изгелектәрем.

[7] *Ил таланып таҙ ҡалды,* йәғни йолҡошланды, бөтөрөндө, бөлдө.

## Тәүеш мәргән

XX быуаттың 20-се йылдарында Ғ. Вилданов «Тунғатар йорто Ташҡая ауылы башҡорто 70 йәшәр ҡарт ауыҙынан» яҙып алған, «Ҡобайырҙар башҡортса» тигән мәҡәләһендә 2-се ҡобайыр итеп килтергән. — «Башҡорт аймағы», 1927, 4-се һан.

## Перовский йәйләүе

1884 йылда Башҡортостан буйлап сәйәхәт итеп йөрөгәнендә башҡорт ҡурайсыларынан рус яҙыусыһы Ф. Д. Нефедов яҙып алған һәм «Башкирская старина» тигән очергында сәсмә телдә биргән. — Башкирия в русской литературе в пяти томах. Том 1/ Составление, предисловие, биографические справки, комментарии и библиография М. Г. Рахимкулова. Уфа: Башкнигоиздат, 1964. С. 172 — 173; Новое издание того же названия — Уфа: Башкирское издательство «Китап», 1990.

Урыҫсанан башҡортсаға Вафа Әхмәҙиев ҡайтарҙы. — БХИ: Эпос, 3-сө китап, 127 — 128-се биттәр.

Әҫәргә һәм уның геройына ҡарата Нефедов шундай иҫкәрмә яһаған:

«...Самым популярным генерал-губернатором является Перовский... Вы можете услышать от курайчев былины об этом, поистине, герое народного трепета и ужаса... Для него ровно ничего не стоило повесить человека, закопать живым в землю целое семейство муллы и затем самого муллу... Приведу одну былину о Перовском. Это — былина о некоем, своего рода, изобретенном самим Перовским телеграфе из живых людей. Перовский имел обыкновение каждое лето уезжать на дачу в Башкирию, за 120 верст от Оренбурга; до сих пор место дачной жизни башкирского героя из русских чиновников называется «Кочевкою Перовского». (Әйтелгән том, 172-се бит.)



# ТЕКСТАРҘА УРЫН АЛҒАН ТАРИХИ ШӘХЕСТӘР ҺӘМ ЛЕГЕНДАР ПЕРСОНАЖДАР

Аңлатманан һуң бирелгән цифрҙар ул шәхес йә персонаж һүрәтләнгән йәки телгә алынған әҫәрҙең был томдағы рәт һанын күрһәтә.

*Абдулла* — Аҡай батырҙың улы, урындағы батша властары ялсыһы. —21.

*Аблай (Әбләй)* — ҡаҙаҡ ханы Абылай солтан (1710 — 1781). — 21, 24.

*Абдулхайыр, Әбделхәйер* — XVIII быуаттың беренсе яртыһында ҡаҙаҡ ханы (1693 — 1748). — 20, 21.

*Аҙналы* — Салауат Юлаевтың олатаһы. — 23, 24.

*Аҡай батыр* — башҡорт старшинаһы Аҡай Күсемов, 1735— 1740 йылдарҙағы башҡорт күтәрелеше етәкселәренең береһе. — 21, 22.

*Аҡмәмбәт* — башҡорт тарханы. — 20.

*Аҡсахан* — «Ир Тарғын» эпосының ҡаҙаҡ варианттарына ҡарағанда, 40 Ҡырым хандарының береһе. — 6, 7.

*Аҡша батыр* — ҡаҙаҡ батыры. — 18.

*Аҡшам батыр* — легендар батыр. — 14.

*Аҡъюныс йәки Аҡйондоҙ* — Аҡсахандың ҡыҙы. — 6, 7.

*Алдар* — Алдар Иҫәкәйев, 1705 — 1711 йылғы башҡорт күтәрелеше етәкселәренең береһе. — 21.

*Алпамыша* — шул исемдәге эпос геройы. — 5.

*Антон* — урыҫ ҡасағы, Бөрйән районында «Антон ҡаяһы» исемендә киң таралған риүәйәт геройы. Ҡарағыҙ: БХИ: Риүәйәт, легендалар, № 96, 97 һәм текстарға аңлатмалар, 354-се бит. Антон ҡаяһы — Бөрйән районы Ҡотан ауылынан Ағиҙел буйлап түбәнерәк бейек ҡая. Шул уҡ исемдә мәмерйәһе лә бар.

*Бабсаҡ бей* — ҡыпсаҡ ырыуының легендар батыры, «Күсәк бей» («Бабсаҡ менән Күсәк») эпосының геройы. — 5.

*Байназар тархан* — Байыҡ сәсәндең атаһы. — 24.

*Байыҡ Айҙар* — башҡорт халыҡ сәсәне. Фольклор сығанаҡтарына ҡарағанда, 1710 йылда тыуып, Рус-француз һуғышында ҡатнашҡан яугирҙарҙы ҡурай тартып ҡаршы алған. — 22, 24.

*Баныу* — Ҡараһаҡалдың һөйгән ҡыҙы. — 21.

*Барсын, Барсынһылыу* — «Алпамыша» эпосында һүрәтләнгән ҡыҙ батыр. — 5.

*Батый хан* — Сыңғыҙ хандың ейәне, Дунай йылғаһына тиклем көньяҡ-көнсығыш Европаны яулап, Алтын Урҙа дәүләтен ҡороусы хан. — 1, 23.

*Батырша* — мулла Абдулла Әлиев, Батырша Әлиев, 1755 — 1756 йылғы башҡорт күтәрелеше идеологы. — 21, 22.

*Башҡорт ҡыҙы* — исемһеҙ персонаж. — 9.

*Баязит батыр* — шул исемдәге ҡобайыр геройы. — 13.

*Бикҡол* — урындағы легендар батыр. — 1.

*Билал* — 19.

*Бохар* — күренекле ҡаҙаҡ аҡыны Бохар Ҡалҡаман улы (1693 — 1787). — 24.

Бохар аҡын үҙенең күп ғүмерен Абылай солтан һарайында үткәрә, дәүләт эштәрендә ҡатнаша. Дидактик йөкмәткеле өләңдәре халыҡ араһында киң таралған. Ханға хеҙмәт иткән аҡындың ижади ҡаршылығын күрһәтеү яғынан «Ханға яуап бирмәһәм» тип башланған өләңе ҡыҙыҡлы:

Ханға жауап бирмесем,
Ханның көңеле ҡайтады;
Ҡайтара жауап сөйлесем,
Халҡым не деп айтады.
Хан Абылай, Абылай,
Мондай суыҡ хабарды
Сорамасаң, не етеде?
Сораған соң — айтпасам,
Ҡеселегем кетеде.
Енди айтайын, тыңдасаң,
Маған ҡаһар ҡылмасаң...

(Ҡазаҡ әдебиетенең тарихы. II том: XVIII — XIX ғасырлардағы ҡазаҡ әдебиете. Беренше китап. Алматы, 1961.)

Был өләң башҡорттар араһында ла таралған. Бер миҫалы 1961 йылда Ҡуйбышев өлкәһе Таллы ауылында 69 йәшлек башҡорт Заһиҙуллин Ғатаулланан Ҡирәй Мәргән тарафынан яҙып алынған. — Ғилми архив. Ф. 3, оп. 21, т. 6. 54 — 55-се биттәр.

*Буһҡын* — 10.

*Гөлбәзир* — фольклор сығанаҡтарында Салауат Юлаевтың бер ҡатыны. — 22.

*Гөлөк батыр* — Сүкем батырҙың туғаны. — 12.

*Ғайса* — мосолман пәйғәмбәре. Христиандарҙа — Иисус Христос. — 21.

*Ғәзиз баба* — легендар әүлиә. — 1.

*Ғәли батыр* — Мөхәммәт пәйғәмбәрҙең кейәүе, дини хикәйәттәрҙә ислам дине өсөн көрәшеүсе баһадир. — 1.

*Ғәнәкә* — Туктамыш хандың көңө, Иҙеүкәйҙең никахһыҙ ҡатыны, Мораҙымдың әсәһе. — 1.

*Дейеү* — мифик зат. — 1.

*Дәмми бей* — легендар башҡорт бейе, һатлыҡ йән. — 1.

*Ек Мәргән* — эпик герой. — 8.

*Ерәнсә* — башҡорт, ҡаҙаҡ, ҡарағалпаҡ, нуғай, татар халыҡтары ижадында ғәҙеллекте яҡлап, яуызлыҡҡа ҡаршы сығыусы аҡыл эйәһе, легендар сәсән. Йыш ҡына мәрәкә лә кеше. — 20.

*Ибраҡ* — XV быуаттың икенсе яртыһында Себер ханы Ибраһим. Күбеһенсә Ибаҡ исемендә билдәле. — 22.

*Иван батша* — Иван Грозный. — 22.

*Иҙел* — эпик герой Урал батырҙың улы. — 1, 5, 21.

*Иҙеүкәй* — Алтын Урҙала ун мең ғәскәр башлығы, тарихи әҙәбиәттә күбеһенсә Едигей исемендә билдәле (1352 — 1419). Төрки халыҡтары ижадында Идиге, Изиге, Идыге, Идегә, Әдигә, Едиге, Идегәй исемдәрендә йөрөй. Һәр осраҡта «изге», «ҡайғыртыусан кеше» тигәнде аңлата. — 1, 2.

*Иҫән, Иҫәнбай* — легендар персонаж. — 1.

*Ишмихан* — Жунгария (ҡалмыҡ) ханы улы. — 21.

*Йәмәлкә, Бүгәс, Бүгәсәү* — Дон казагы Емельян Пугачев, 1773 — 1775 йылғы Крәҫтиәндәр һуғышының юлбашсыһы. — 22.

*Келәйле батыр* — легендар-эпик персонаж. — 1.

*Килмәт* — 1704 — 1711 йылғы башҡорт күтәрелешендә актив ҡатнашҡан, 1735 — 1740 йылғы күтәрелештә уның бер етәксеһе булған Юрматы волосы старшинаһы Килмәк батыр (Килмәк абыз) Нурушев. Күрәһең, исеме халыҡ телендә шулай үҙгәргән. — 21.

*Кинйәбикә* — Туҡтамыш хандың кесе ҡыҙы. — 1.

*Көбәк батыр* — легендар батыр. — 15.

*Көсөм (Күсем, Кучум)* — Себер ханы. — 22.

*Көсөм батыр* — 1705 — 1711 йылғы күтәрелеш етәкселәренең береһе Көсөм Түләкәйев. — 21, 22.

*Күк ҡола* — Иҙеүкәй аты. — 1.

*Күсәк* — «Күсәк бей» эпосының төп геройы. — 5.

*Күк бурҙай* — Иҙеүкәйҙең юлдашы. — 1.

*Ҡабардин* — ҡалмыҡ ханы, йәки батыры, эпик образ. — 1.

*Ҡайып* — Байназар тархандың дүртенсе улы, Байыҡ сәсәндең ҡустыһы. — 24.

*Ҡаныҡай* — легендар батыр, йөҙ башы. — 1.

*Ҡарабай* — Туҡтамыш хан ҡаршыһындағы бер батыр. — 1.

*Ҡарас* — тамъян-катай башҡорттарының танылған батыры, сәсән (XVII б.). Уның хаҡында риүәйәт — БХИ. Т. 2. — 18.

*Ҡарат* — ҡара төҫтә легендар ат. — 21.

*Ҡараһаҡал* — 1735 — 1740 йылдарҙағы башҡорт күтәрелешенең етәксеһе Миңлеғол Юлаев. — 21, 22, 24.

*Ҡартан* — легендар ҡалмыҡ ханы, Суна батырҙың ҡустыһы. — 21.

*Ҡасҡын* — легендар батыр. — 1.

*Ҡатай* — ҡатай башҡорттарының легендар ырыу башлығы. — 1, 22.

*Ҡотло* — Иҙеүкәйҙең атаһының ҡыҫҡартылған исеме, тулыһынса — *Ҡотлоҡая*. — 1.

*Ҡужаҡ* — эпик персонаж. — 6, 7.

*Ҡыпсаҡ батыр* — ҡыпсаҡ башҡорттарының легендар ырыу башлығы. — 1.

*Ҡыпсаҡ егете* — 9.

*Мамай хан* — Нуғай урҙаһының ханы Ших-Мамай, Муса хандың улы, тарихи Идегәнең бүләһе. — 4.

*Матый* — Ҡартан хандың ҡыҙы. — 21.

*Маянһылыу* — Мәргәндең һөйгән ҡыҙы. — 5.

*Миңлеғол* — Ҡараһаҡалдың төп исеме. — 21.

*Мораҙым* — тарихи Идегәнең кесе улы Нуретдиндың башҡорт эпосында алынған исеме. Башҡаса эпик варианттары: Мырат бей, Нураддин, Нуралин. — 1.

*Морат* — мулла. — 21.

*Мөйтән бей* — үҫәргән ырыуы башҡорттарының легендар атаһы. — 1.

*Муса хан* — XVI быуатта Нуғай ханы (1509 йыл тирәһендә үлгән), Мамай хандың атаһы. — 4.

*Мәргән* — эпик герой. — 5.

*Мәсем хан* — «Аҡбуҙат» эпосында кешеләргә дошман зат, хан-тиран булып һүрәтләнгән эпик персонаж. — 5, 21, 22.

*Мәүлетбай* — 21.

*Нияз-батыр* — фольклор сығанаҡтары буйынса Ҡараһаҡалдың атаһы. — 21.

*Ноғос батыр* — 21.

*Нуғай ханы* — уртаҡ исем. — 5.

*Нәҙершә* — легендар батыр. — 5.

*Нәркәс* — фарсыса «Нарцисс» һүҙенән, «һыу ҡыҙы» тигәнде аңлата. «Аҡбуҙат» эпосында һыу батшаһының ҡыҙы. — 5.

*Салауат* — башҡорт халҡының милли геройы Салауат Юлаев (1754 — 1800). — 22, 23.

*Сатмыр хан* — төрки халыҡтарында Аҡһаҡ Тимер (Тимур), тарихи сығанаҡтарҙа Тамерлан (Храмой Темир) исемендәге танылған Урта Азия хакимы (1336 — 1405). Төрки телдәрендә башҡасараҡ исеме: Са-Тимир-хан, Сын-Тимир-хан. Сатмыр — «Са» (фарсы телендә «бөйөк» тигәнде аңлата) һәм «тимер» һүҙҙәренән яһалған ҡушма исем. Бүтән варианттары: Са-Тимир (Темир)-хан, Сын-Тимер-хан. — 1.

*Сүкем батыр* — башҡорттарҙы Себер ханлығына ҡаршы күтәреүсе легендар батыр. — 12.

*Солтангәрәй* — Ҡараһаҡалдың ялған исеме. — 21.

*Солтан хан* — Үргәнестә үзбәк ханы. — 21.

*Суна батыр* — легендар ҡалмыҡ ханы. — 21.

*Сура батыр* — эпик герой. Урал батыр ярсығы Һәүбән батырҙың атаһы. — 21, 22.

*Сығтай* — Сыңғыҙ хандың улы Чагатай (Чегатай). — 1.

*Сын Тимер хан* — ҡара: Сатмыр хан. — 2.

*Сыңғыҙ хан* — берҙәм монгол дәүләтенә нигеҙ һалған тарихи шәхес, данлы полководец. «Сыңғыҙ» бөйөк тигәнде аңлата. Үҙ исеме — Тэмуджин, йәки Темучин. 1155 йыл тирәһендә тыуып, 1227 йылда үлгән. — 1, 4, 5, 23, 24.

*Сәйет (Һәйет) батыр* — 1681 — 1683 йылдарҙағы башҡорт, татар һәм Урал ҡалмыҡтары күтәрелешендә актив ҡатнашҡан башҡорт старшинаһы. — 21, 22.

*Сәләхи, Сәләхетдин* — Туҡтамыш хандың бер ғәскәр башлығы. — 1.

*Сәргәев* — 1705 йыл башында батша ғәскәренә ат йыйырға һәм башҡорт болаларын баҫтырырға тип Башҡортостанға ебәрелгән Ҡазан ҡалаһы комиссары. Ул, башҡорттарҙы ҡоттарын алып тынысландырмаҡ булып,

юлайҡан ауылдарҙы тупҡа тотоп яндырған, ҡыйраткан, быгаса ата-баба күрмәгән яуызлыҡтар эшләп, халыҡтың яңы күтәрелешенә сәбәпсе булған. — 21.

*Табын батыр* — табын башҡорттарының ырыу башлығы. — 1.

*Таймаҫ* — башҡорт тарханы. «Таймаҫ Шаимовтың тархан булғаны» тигән легендала (БНТ. Т. 2: Предания и легенды. № 242) батшаға хеҙмәт итеүсе булараҡ, 1735 — 1740 йылдарҙағы күтәрелеште баҫтырыуҙа ҡатнаша. — 21.

*Тайып* — Байназар тархандың өсөнсө улы, Байыҡ сәсәндең ҡустыһы. — 24.

*Тамъян* — тамъян башҡорттарының легендар ырыу башлығы. — 1, 23.

*Танһыҡ* — Байназар тархандың бишенсе улы, Байыҡ сәсәндең кесе ҡустыһы. — 24.

*Таныл* — Байназар тархандың икенсе улы. — 24.

*Тарғын батыр* — эпик герой. — 4, 5.

*Теләүкәй* — 21.

*Тоҡораҡ* — 21.

*Тора бей, йәки Торахан* — «Иҙеүкәй менән Мораҙым» эпосына 9-сы иҫкәрмәне ҡара. — 1.

*Төкләҫ баба* — күп йәшәгән изге ҡарт. — 1.

*Туғыҙаҡ әбей* — эпик персонаж. — 8.

*Туҡ батыр* — эпик персонаж. — 1.

*Туҡтамыш* — Алтын Урҙа ханы (? — 1406). — 1, 2, 8.

*Туҡһан* — легендар батыр. — 1.

*Туҡән* — урындағы батыр. — 21.

*Тәфкиләү* — исеме йырҙарҙа ҡәһәрләнгән полковник Ҡотломөхәмәт Тәфкилев (Тевкелев). 1735 — 1740 йылда башҡорттар күтәрелешен баҫтырыуҙа айырата яуызлыҡ күрһәтә. — 21, 22, 24.

*Тәүеш Мәргән* — 25.

*Үгәҙәй* — Сыңғыҙ хандың баш бисәһенән өсөнсө улы. — 1.

*Үмәр батыр* — легендар әүлиә. — 1.

*Ураҡ* — Муса хандың ейәне (1548 йылда үлгән). — 4.

*Урал батыр* — шул исемендәге эпос геройы. — 1, 21, 22.

*Фирҙәүес* — Сатмыр хандың ҡыҙы. — 1.

*Ханбикә* — Туҡтамыш хандың бисәһе. — 1.

*Хыҙыр* — ғәрәпсә «хидр» (йәшел) һүҙенән яһалған исем. Төрки, бигерәк тә, Урта Азия халыҡтары ижадында (әкиәттәрҙә һәм эпик әҫәрҙәрҙә) оҙон йәшел таяҡҡа таянған, башына аҡ сәллә ураған изге ҡарт, пәйғәмбәр. Йыш ҡына Хыҙыр Ильяс исемендә йөрөй. Ҡөтмәгәндә пәйҙә булып, сүлдә аҙашҡандарға юл күрһәтә, бигерәк тә етем балаларға, ҡазаға төшкәндәргә, ғашиҡтарға ярҙам итә. — 1.

*Һабрау* — йөҙҙән ашыу ғүмер кисереп, күпте күргән, күп белгән изге ҡарт, легендар йырау, сәсән. Ҡаҙаҡ фольклорында *Сыпра-жырау, Сафар-дау* исемендә кәүҙәләнә. — 1.

*Һағынбай* — тархан, фольклор сығанаҡтарында Салауат Юлаевтың бер ҡайныһы. — 22.

*Һәүбән* — «Аҡбуҙат» эпосында төп герой, Сура батырҙың улы. — 1, 5, 21, 22.

*Шиһан* — эпик персонаж. — 21.

*Шүлгән* — шул исемдәге күлдә дейеүҙәр батшаһы. — 1, 5.

*Шәғәле* — Туҡтамыш яҡлы феодал. — 1, 22.

*Шәғәле улы Шаҡман* — Туҡтамыш ханға хеҙмәт итеүсе бер батыр. — 1.

*Ынйыбикә* — Туҡтамыш хандың оло ҡыҙы. — 1.

*Ыршаҡ бей* — тарихи сығанаҡтарҙа күренмәй. Өршәк йылғаһы атамаһынан алынған исем булһа кәрәк. — 1.

*Юлай* — Салауаттың атаһы, Шайтан-Күҙәй волосы старшинаһы, улы менән бергә 1773 — 1775 йылдарҙағы Крәҫтиәндәр һуғышында актив ҡатнашҡан Юлай Аҙналин (1729 йәки 1730 — 1797). — 22.

*Юлдаш* — 1705 — 1711 йылғы башҡорт күтәрелешендә актив ҡатнашҡан Юлыш батыр булһа кәрәк. — 21.

*Юрматы* — шул исемдәге башҡорт ҡәбиләһенең легендар башлығы. — 1.

*Ябраил* — Алла менән кешеләр араһында йөрөүсе фәрештә, ғәрәпсә — Жибрил, христиандарҙа — Гавриил. — 1.

*Яйыҡ* — Урал батырҙың улы. — 1, 5, 21.

*Яйыҡ батыр* — эпик персонаж, Иҙеүкәйҙең яҡын юлдашы. — 1.

*Яҡшығол* — урындағы батыр. — 21.

*Янбай* — эпик персонаж, Туҡтамыш хан һарайында хеҙмәт итеүсе батыр. Эпостың башҡа телдәге варианттарында — «Кек Джанбай», «Көн Джанбай», «Жанбай». — 1.

*Әй* — шул исемдәге ҡәбиләнең легендар батыры. — 22.

*Әлбәкмырҙа* — тарихи Идегенең улы Мораҙымдың (Нуралиндың) икенсе бер исеме. — 2.

*Әмекәс* — легендар Ҡараттың хужаһы. — 21.

# ҺҮҘЛЕК

**Абау** — М. Буранғолов менән Х. Ғәбитов был һүҙҙе «битте йыйырсыҡ баҫыу» тип аңлаталар. Ҡ. Улъябаев, ҡартлыҡтан теш төшөү, ти. Ҡурҡыуҙы, сирҡаныуҙы белдергән «абау» ымлығы ла тәү мәлдә шул мәғәнәлә, йәғни ҡартлыҡтан кеше йөҙөнөң, сырайының боҙолоуы, ныҡ йәмһеҙләнеүе мәғәнәһендә йөрөгән булыуы ихтимал.
**Аҙыра** *ҡаҙ.* — хужаһыҙ, етемһерәп ҡалыу.
**Айҙа** — ай балта.
**Айна** *ф.* — көҙгө.
**Аҡта** *ҡаҙ.* — бестерелгән ат.
**Алап** — һөрән, хәбәр.
**Алас, алаш** *бор. т.* — текста «урҙа» мәғәнәһендә.
**Алатау** — Ҡаҙағстандың көньяҡ-көнсығышындағы мәшһүр тау.
**Алман** — Германия.
**Алуш** — Ҡырымда Алушта ҡалаһы янындағы тау.
**Аму** — Амударья йылғаһы.
**Арҙа** — ике-өс йәшенә тиклем инәһен имеп йөрөгән тай йәки башмаҡ.
**Арҙан** *диал.* — арлан, ата йыртҡыс йәнлек.
**Артаҡ** *бор. т.* — ҡурҡыныс йән эйәһе; йыртҡыс.
**Асылы күл** — Башҡортостандың Дәүләкән районындағы был күл тураһында халыҡ хәтерендә күп төрлө легендалар һаҡланған. «Заятүләк менән Һыуһылыу» эпосында һыу аҫты батшалығы итеп һүрәтләнә.
**Ашҡаҙар** — Стәрлетамаҡ ҡалаһы янында Ағиҙелдең һул ҡушылдығы.
**Ауа** *ҡаҙ.* — һауа.
**Аял** *ҡаҙ.* — бисә, ҡатын.
**Бабуған (Бабуғай-яйла)** — Ҡырымдағы тау һырты.
**Бабһыҙ** — тәрбиәһеҙ.
**Байман** — иркенлек, рәхәтлек; бәхетле тормош.
**Балдарым** *диал.* — балаларым.
**Балҡаш** — Балхаш күленән ағып сыҡҡан йылға.
**Баһат** — дәһшәт.
**Биҙәл** — абруй.
**Бирлегеү, бирегеү** *диал.* — имгәнеү, хәлһеҙләнеү, миктәү.
**Биштамаҡ** — Яйыҡ (Урал) йылғаһы тамағынан үрҙәрәк бер түбә, ҡалҡыулыҡ.
**Бөйҙә** — ҙур бысаҡ.
**Булъяу** *ҡаҙ.* — самалау, байҡау; әҙерләү.
**Бышым** *диал.* — һирәк һуғылған киндерҙән ике ҡатлап тегелгән бишек төбө.
**Буҫыу** — өркөү, ҡасыу, боҫоп ҡалыу.
**Буты, бут** — ҡиммәтле бүләк, ҡомартҡы.

**Бәлдеү** — йәйәне кирелә биреп тартыу.

**Бәлә тау** — Башҡортостандың Мәләүез районы Аптыраҡ ауылы янында Ағиҙелгә яҡын тау.

**Бәпләп** — иркәләп, тәрбиәләп үҫтереү.

**Гәүер** — икенсе дин кешеһе, кафыр.

**Ғарыз** *ғ.* — бер эш йә хәл тураһында телдән, йәки яҙып, тейешле урынға еткереү, үтенесте белдереү. **Ғарыз итте** — тәкдим итте.

**Дөлдөл** — Мөхәммәт пәйғәмбәрҙең кейәүе Ғәли батырҙың ҡанатлы мифик аты.

**Дәүмәт** *ғ.* — табыш, файҙа мәғәнәһендә.

**Егәр** — бурҙай эт.

**Ейегеү** — сереп тарҡала башлау.

**Ейеү** — ашау.

**Елбүк** — елеп үк.

**Ете ят** — алыҫ (ете быуын аша) туған.

**Илек** — Көнбайыш Ҡаҙағстандағы йылға.

**Иртеш** — Иртыш йылғаһы.

**Ирәмәл** — Башҡортостандың көнсығышында (Белорет районы менән Учалы районы араһында) ятҡан тау. Уның көнсығыш яғынан Ағиҙел йылғаһы башлана.

**Ирәндек** — Башҡортостандың көньяҡ-көнсығышындағы мәшһүр тау.

**Йоғом** — бәрәкәт.

**Йөҙ башы** — йөҙ яугир башлығы (сотник).

**Йөрөк** *диал.* — йүгерек.

**Йыйырын** — бер ҡәбиләнең ҡыҙҙатынына фәрд (бер бөртөк; яңғыҙ; айырым зат, шәхес, берҙәнберәү) булған, шуның бер ағзаһы иҫәпләнгән ҡатын.

**Йылғыйлау** — ҡауырһындың һауала ҡыйғыслап, тирбәнеп төшөүе.

**Йәьжүж** — мәжүси; **Йәбжүжмәьжүж** — дини ҡараиса, ерҙе ябып, донъя ҡырып килгән бик яман ҡырағай ике халыҡ.

**Келәгә бей** — аҫтыртын бей.

**Кемекәй** — кем дә булһа берәү. Текста «кемдән дә», «һәр кешенән» тигән мәғәнәлә.

**Киҙәк** — сират.

**Килтә** — терәк.

**Көш** *диал.* — ултырҙаш, серҙәш, кәңәштәш.

**Күжә** *ҡаҙ.* — тары, арпа, бойҙайҙы ҡайнатып яһаған эсемлек.

**Күксәтау** — Ҡаҙағстандың Урал менән сиктәш көньяҡ-көнбайышындағы тау.

**Күлек** *бор. т.* — артмаҡлы мал: ат, дөйә.

**Күс** *бор. т.* — ырыу, халыҡ.

**Күсәм** — юл башлаусы, юлбашсы.

**Күһәбә** — айышһыҙ, аңғармай эшләнгән.

**Көйөҫ-көйөҫ** *диал.* — көтмәгәндә, ҡапылтын *(М. Б.)*

**Көҫәү, көһәү** *диал.* — ныҡ теләү.

**Кәрәлек** — Куйбышев өлкәһендәге йылға.

**Кәмзәйтеү** *диал.* — кәмәнәйтеү, салшайтыу, бер яҡҡа ҡыйшайтыу.

**Кәүер** — гәүер, кафыр. Ислам диnendә булмаған кеше.

**Ҡабды** — Көнбайыш Ҡаҙағстандағы йылға.

**Ҡамҡа** — ҡара ебәктән тышланып, ең остары һәм итәге ҡама менән уратылған затлы тун.

**Ҡара** *ҡаҙ.* — мал. — **Йөҙ ҡараһын** — йөҙ баш малын.

**Ҡараби (Ҡараби-яйла)** — Ҡырымдың көньяҡ яр буйында, Ялта ҡалаһынан көнсығыштараҡ, тау һырты.

**Ҡарағым** *ҡаҙ.* — ҡәҙерлем, күҙ нурым.

**Ҡаракиҙеү** — холера ауырыуы.

**Ҡарасай** — ҡараса, ҡыр өйрәге.

**Ҡарсаҡ** — ҡарһаҡ, дала төлкөһө.

**Ҡаҫмарт** — Һаҡмар йылғаһының уң ҡушылдығы.

**Ҡара һыу** *диал.* — аҡмай ятҡан һыу, күл һыуы; яуын арҡаһында, һыу баҫыу.

**Ҡаф иле** — хәҙерге Феодосия ҡалаһы. 1266 йылда Алтын Урҙа ханы Менгу-Тимур был ҡаланы биләү хоҡуғын Генуэ сауҙагәрҙәренә бирә, Феодосия Ҡаф исемендә уларҙың сауҙа колонияһына әйләнә. 1768 — 1774 йылдарҙағы рус-төрөк һуғышында

Рәсәй тарафынан яулап алынғандан һуң, ҡалаға элекке Феодосия исеме ҡайтарыла.

**Ҡашҡа** — көсө һәм һүҙе менән абруй ҡаҙанған, алдан йөрөгән ирегет.

**Ҡаяҡ** *бор. т.* — ҡайыҡ, кәмә.

**Ҡиндыраҡ, ҡындыраҡ, ҡынйыраҡ** *диал.* — тиренән тегелгән; киндер бышымынан бөрөп бәйләнә торған аяҡ кейеме.

**Ҡобау** — инә ҡортто яба торған ситлек.

**Ҡоҙа-аҙна** — ҡоҙа-ҡоҙағый.

**Ҡолмаҡ** *диал.* — ҡомалаҡ.

**Ҡолъя** — архар тәкәһе.

**Ҡонандау** *диал.* — ҡонандай.

**Ҡораҡташ, ҡораҡлаш** *диал.* — ҡорҙаш, серҙәш.

**Ҡор башы, ҡорбаш** — ғәскәр башлығы.

**Ҡуҙағай** — кейеменә маһайып, матурмын, тип йөрөүсе, ҡупшы.

**Ҡузы** — һарыҡ бәрәсе.

**Ҡуныш** — торлаҡ ҡороп йәшәгән урын.

**Ҡускар** — һарыҡ тәкәһе.

**Ҡуһан** — ике араны үлсәү берәмеге. Ике аҙым — бер ҡуһан. Ҡайһы бер һөйләштәрҙә «ҡуһай» тип әйтелә.

**Ҡыҙау** — тубал.

**Ҡыҙыл** — Урал йылғаһының һул яҡ ҡушылдығы.

**Ҡыраға** — үс һаҡлаусы; кенә тотоусы, мәкерле.

**Ҡыртым** — ғәйбәт һөйләп, кеше араһын боҙоу.

**Ҡыурау** — бөлөү.

**Ҡәғбә** — мосолмандарҙың Мәккә ҡалаһында (Ғәрәбстан) хаж ҡыла торған урыны, изге храм. Шунда барып хаж ҡылған кеше хажи һанала.

**Ҡәҙер төн** — ислам дине аңлатыуынса, рамаҙан айында күк ҡабағы асылып, фәрештәләр ергә төшкән төн. Был төндө йоҡламай һаҡлап үткәргән кешенең теләген алла ҡабул итә, ти.

**Ман, мән** — менән.

**Маңдау** — маң булыу, йәғни ниндәйҙер уй менән онотолоп ултырыу.

**Машалла** *ғ.* — алла ни теләһә, шул; шәп.

**Матау** — һауҙырмаған бейәнең арт аяҡтарын тышау.

**Мең башы, меңбаш** — мең һалдаттан торған ғәскәр башлығы, тысячник.

**Миктәлеү** — интегеү, яфа сигеү; өҙлөгөү.

**Монаят** — мал-тыуар, бөтә милек.

**Мөрхәт** *диал.* — мөмкинлек (мөрхәтһенмәү — хушһынмау).

**Мөҫөрәтеү** — өмөтләндереү.

**Муйырыу** — юғалтыу, айырылыу.

**Мәҙе** — эңер; ситләтелгән мәғәнәһе — ҡайғы, илгә төшкән ҡараңғылыҡ.

**Мәккә** — Ғәрәбстанда Мөхәммәт үҙен пәйғәмбәр тип иғлан иткән ҡала, мосолмандарҙың хаж ҡыла торған урыны.

**Мәрҙәҫ** — хуплау ауазы.

**Мәс ҡылыу** — иҫертеү.

**Нан** *ҡаҙ.* — икмәк.

**Нарыҫ** — Башҡортостандың Әлшәй районы Дим буйындағы тау.

**Нимәрә** — ейән йәки ейәнсәрҙең балаһы, бүлә, бүләсәләр; дүртенсе быуын балалар бер-береһенә ҡарата **нимәрәләр** була.

**Нөгөр, Нөгәр, Нөкәр, Нүкәр** — хан (ҡор йәки мең башы) эргәһендәге һаҡсы ғәскәр, шул ғәскәрҙәге кеше.

**Нөгөш** — Ағиҙелдең урта ағымындағы уң ҡушылдығы.

**Нырҙашыу** — ҡуй-һарыҡтарҙың көтөүе менән ҡурҡышып баҡырыуҙары.

**Нәнә** *диал.* — нәнәй, өләсәй.

**Омпайтыу** *диал.* — алдау, һемәйтеү.

**Осҡалаҡ** *диал.* — остандаҡ, һикрәндәк.

**Өйсүк** (*ҡаҙаҡса* Уйшүк) — хәҙерге Ҡаҙағстандағы Гурьев ҡалаһы урыны.

**Өләң** *ҡаҙ.* — йыр, шиғыр.

**Пара-пара** *ф.* — киҫәк-киҫәк.

**Пол** (*ф.* **пул**) — аҡса. Текста табыш, килем мәғәнәһендә.

**Рәжем** *ғ.* — кешене биленә тиклем ергә күмеп, таш менән бәреп үл-

тереү. Боронғо ғәрәптәрҙә гонаһлы кешене язалау ысулы.

**Сағут** — Ҡырымда боронғо бер ҡала, тау башындағы нығытма (ҡәлғә).

**Сағыра** — үтер юл булмаған урман, тау-ташлыҡ.

**Сапаҡ** — телгә оҫта, тапҡыр һүҙле; сәсән.

**Сапсан** — бик тиҙ, йәһәт, етеҙ, сос, йылғыр.

**Сая, сай** *бор. т.* — ҡороған йылға үҙәне.

**Сем** — Эҫем (Сим) йылғаһы, Ағиҙелдең күп һыулы уң яҡ ҡушылдығы.

**Син** (Цин) — Ҡытай.

**Собханалла** ғ. — алланы данлау. Ғәжәпләнгәндә, һоҡланғанда әйтелә.

**Солтанат** — солтанлыҡ, батшалыҡ дәрәжәһе; мөһәбәтлек, олпатлыҡ.

**Сор** *ҡаҙ.* — аҡ йөҙлө.

**Сулман** (*татарса* **чулман**) — Ҡама (Ҡама) йылғаһы.

**Сурлы** — ҡарғалған, хур күрелгән.

**Сурлыҡ** — хурлыҡ.

**Сәмсә** — ҡатын-ҡыҙҙарҙың сигелгән аяҡ кейеме.

**Сәңгел** — бишек тағыу өсөн пружина урынына ҡулланылған һығылмалы ағас. Күрәһең, сәңгелдәк (бишек) һүҙе шунан хасил булған.

**Табантал** — Ҡаҙағстандың көнбайышындағы йылға.

**Тайярлап** — йүнәтеп (йүнләп, әҙерләп).

**Таҡ, тағ** *бор. т.* — тәхет.

**Таҡталы** — яурыны сигелгән (хандар кейеме).

**Талай** — ваҡыт күрһәткес: бер талай, бер күләм, талай ваҡыт. Күп мәғәнәһендә лә ҡулланыла: талай халыҡ, талай ер. «Иҙеүкәй менән Мораҙым» тексында йәйәүле ике һунарсыға ҡарата әйтелә.

**Таныл** — Ағиҙелдең түбәнге ағымында уң яҡ ҡушылдыҡ.

**Тарауыл** — Бөрйән районында Иҫке Усман (элекке исеме — Иҫке Тарауыл йәки Тарыуал) ауылы янындағы аҡлан. «Аҡбуҙат» эпосында — «Тарауыл аҡланы».

**Тартмалы** — ҡаптырмалы.

**Таһҡау** — кәйефенә ҡарап, үҙ яғына ауҙарыу.

**Таша** — таяныс; нығытма, крепость.

**Таш маяҡ** — Ағиҙел буйында Ырғыҙлынан түбәнерәк бейек бер ҡая таш бар. Был тирәлә уны Урал батыр ултыртып киткән «Таш маяҡ» тип йөрөтәләр (*М. Буранғолов иҫкәрмәһе*). Хәҙер ул күбеһенсә Муйнаҡ (муйыны аҡ) таш исемендә йөрөй.

**Тегмә** *диал.* — һәр.

**Тернәкселдәр** — үҙ ҡул көсө менән көн күргән, тырыш хеҙмәт кешеләре.

**Тик** — затлы.

**Тикһеҙ** — затһыҙ.

**Тинке** *диал.* — тиклем, хәтле.

**Торба (төрбә)** — кәшәнә, мавзолей.

**Торомтай** — төҫө-һыны ҡарсығаға оҡшаған, әммә унан бәләкәйерәк йыртҡыс ҡош. Турғайҙан башҡаны тибә алмай.

**Торон** — баланың балаһы, ейән.

**Төйәләҫ** — Башҡортостандың Баймаҡ районында башланып, Урал йылғаһына килеп ҡойған йылға; Башҡортостан картаһында — «Худолаз».

**Тур тауы** (*фарсыса* — **Туры Сина, Турсина**) — Синай ярымутрауындағы Сина тауы. Дини әҙәбиәттә, шул иҫәптән, Ҡөрьәндә, 7-се сүрә, 139-сы аятта һөйләнеүенсә, алланы күрергә тип, Муса пәйғәмбәр менгән тау. Дини әҙәбиәт аша инеп, легендаларҙа изге тау дәрәжәһендә йөрөй.

**Түнәс** — Ҡырымдағы бер йылға.

**Тыуаса (тыуа)** — бүлә йәки бүләсәрҙең улы; **тыуасар** — ... ҡыҙы.

**Тыума** — 1. Бүләнән тыуған ир бала.

2. Никахһыҙ табылған бала (тума).

**Тәкбир** ғ. — ололау.

**Тәүә** — дөйә.

**Уған** *бор. т.* — алла.

**Уйыл** — Силәбе өлкәһендәге йылға.
**Указ** — ҡобайыр тексына һуңғыраҡ дәүерҙә урыҫ теле аша килеп ингән төшөнсә, «фарман» тигәнде аңлата.
**Уп-туп килеү** — баш-баштаҡланыу.
**Урамал** — яулыҡ.
**Ут** — йәшел үлән.
**Утлатыу** — үләнгә ебәреү, ашатыу.
**Утау (атау)** — 1. Байбисә тора торған аҡ тирмә.
2. Төйәк.
**Үҙән** — Ағиҙелдең юғары ағымында (Белорет районы) һул ҡушылдыҡ.
**Үнгән** — рухи ҡыйыулыҡ, батырлыҡ.
**Үңәр** — кейәү егете.
**Хөфейә** *ғ.* — сер, аҫтыртын кәңәш.
**Хәжә** — игелекһеҙ; таш йөрәк.
**Хәзәр** — Урта Азияла боронғо Хорезм дәүләте.
**Һаҡмар** — Урал йылғаһының иң ҙур ҡушылдығы.
**Һарағы** *диал.* — һарына.
**Һауыр** — оса ите.
**Һыла** — дүрт-биш йәшлек миләш һайғауы.
**Һәләүек** — Башҡортостандың Ишембай районы Уразбай (Һәләүекбаш) ауылынан алыҫ түгел тау араһында башланып, Стәрлетамаҡ янындағы Шәке тау (Йөрәк тау) итәгендә Ағиҙелгә ҡоя.
**Һәмтерәү** — илдән айырылып ихтыяжда ҡалыу, зар-интизар булыу.
**Һәнекәй** *диал.* — сәтәкәй.
**Һәнәш (һанаш)** *диал.* — һанға һуғыусы, үҙенә тиң күреп, фекер уртаҡлашыусы, рухи тиңдәш.
**Шайҙау** *диал.* — шәйләү, алдан әҙерләнеү.
**Шихан** — Стәрлетамаҡ янындағы тау.
**Шүлгән** — Башҡортостандың Бөрйән районындағы киң билдәле күл. Был «төпһөҙ» күл хаҡында байтаҡ легендалар йөрөй, «Урал батыр» һәм «Аҡбуҙат» эпосында ул һыу батшалығы, дейеүҙәр ояһы итеп күрһәтелә. Ә «Аҡһаҡ ҡола», «Ҡара юрға» хикәйәттәрендә унан бик күп йылҡы малы сығыуы һүрәтләнә.
**Шыбаҡ** — шыбан, урман ҡырҡҡанда орлоҡҡа ҡалдырылған төҙ, таҙа ағас.
**Шәй күрмәү** — бер нәмәгә лә һанамау, иҫәпкә алмау.
**Шәр** — шәрә.
**Ырай** — рухи теләк, кәйеф.
**Ырғыҙ** — Һамар өлкәһендәге йылға. Һ. Дәүләтшинаның мәшһүр «Ырғыҙ» романы шул йылға буйында йәшәгән башҡорттар тормошонан алып яҙылған.
**Ырғыҙлы** — Башҡортостандың Бөрйән районында Ағиҙелдең һул ҡушылдығы. Шунда Ырғыҙлы ауылы урынлашҡан.
**Ыу** — ағыу. **Илдең ыуы** — илдең ҡороуы, бөтөүе.
**Эйек** — Һаҡмар йылғаһының уң яҡ ҡушылдығы.
**Эмбе** — Ҡаҙағстандың көнбайышында Эмба йылғаһы.
**Эргә** — ниргә, бураның бер ҡаты.
**Әй** — Башҡортостандың төньяҡ-көнсығышында Ҡариҙелдең һул ҡушылдығы.
**Әтәс** — Магнитогорск ҡалаһы янындағы тау исеме. Халыҡ телендә — **Аташ** йәки **Отас** «ут ташы» тигәнде аңлата.
**Юшатыр** — Башҡортостандың Күмертау районындағы һәм Ырымбур өлкәһендәге йылға.
**Яйыҡ** — Урал йылғаһының боронғо (1775 йылға тиклем) исеме.
**Ямантау** — Башҡортостандың Белорет районындағы тау.
**Янарал** — генерал.
**Ярандар** — хан янында йөрөгән кешеләр-юлдаштар.
**Яса** — закон. Сыңғыҙ хандың ясаһы — 1206 йылда Сыңғыҙ хан булып һайланғанда иғлан ителгән закондар.

## ҺЫҒЫМТА

Башҡорт халҡының эпик ҡомартҡыларының был томға ингәндәре тарихи йөкмәткеле булыуҙары менән айырылып тора. Улар ырыуын, халҡын, Урал тигән илен ҡурсалап, ятбауырҙар менән аяуһыҙ алышҡан батырҙарҙың ҡаһарманлыҡтарын данлай. Башҡорттарҙың, ҡасандыр нуғайҙар менән бер ил булып, шул уҡ ваҡытта уларҙың мырҙаларынан, хандарынан иҙелеп йәшәгән дәүерҙәрендә тыуып, был ике халыҡтың ғына түгел, Урал менән Оло Иҙел (Болғар йылғаһы — Волга) араһындағы һәм Урта Азия, Ҡаҙағстан ерҙәрендә лә мәғлүм булған «Иҙеүкәй менән Мораҙым» эпосында башҡорт батырҙарының Туҡтамыш, Аҡһаҡ Тимер ише хандар менән ҡыйыу алышы тасуирланһа, «Ек Мәргән»дә Ҡазан ханлығы иҙеүенә ҡаршы көрәш сағылып ҡала. Ә инде «Тарғын батыр», «Тарғын менән Ҡужаҡ» ише эпостарҙа нуғай батыры Тарғынға башҡорт батыры Ҡужаҡтың мөнәсәбәте аша башҡорттарҙың нуғай хандарын үҙһенмәүе асыҡ төҫмөрләнә.

«Ҡараһаҡал», «Юлай менән Салауат», «Байыҡ Айҙар сәсән» ише эпик ҡобайырҙар иһә, азатлыҡ тыуы күтәреп, батша хөкүмәтенең колониаль сәйәсәтенә ҡаршы халыҡты изге көрәшкә әйҙәгән тарихи ҡаһармандарҙы данлай. Уларҙа XVIII быуаттың ҡатмарлы тарихи ваҡиғаларына халыҡ баһаһы бирелә.

Томға ингән әҫәрҙәрҙең бер өлөшө сюжетһыҙ ҡобайырҙарҙан ғибәрәт. «Сура батыр», «Сүкем батыр», «Баязит батыр», «Аҡшам батыр», «Көбәк батыр» ана шундайҙар рәтенә инә. Уларҙа ил батырҙары күккә күтәреп идеаллаштырыла, утта ла янмаҫ, һыуҙа ла батмаҫ аҫыл ирҙәр итеп танытыла.

Ниндәй генә темаға бағышланмаһын, тарихи эпостар барыһы ла бер үк фекер, бер үк идея уртаҡлығына эйә: ил намыҫын, ил иркен ҡурсалар ир-егеттәр генә ысын халыҡ батыры тигән исемгә лайыҡ. Ә ил ирке бөтәһенән дә өҫтөн, бөтәһенән дә ҡиммәт һәм һәр ваҡыт актуаль.

## ÖZET


Başkurt Halk Edebiyatı Klliyatın cilodi tarihi destanları içermektedir. Onlarda Başkurt Halkının vatanı olan Ural koramak için duşmanları ile kahramanca savaştıları anlatılmakadır, Türk Dünyasında yayagın «Idewkey ile Muradım» destanında eski zamanlarda Başkurtlar ile Nogaylar beraber birdevlet olarak Ural ile Idil arasında yaşadıklari, Başkurt kahramanların Tuktamış ve Aksak Temir ile mücadele anlatılıyor, «Yek Mergen» dastanmda ise Kazan Hanlıgina karşı yapılan mücadele hakkında söylenmektedir. «Targın Batır», «Targın ile Kujak» gibi destanlar Nogay kahrmanı Targın ve Başkurt kahrmanı Kujak arasındaki ilişkiler vasıtasıyla Baskurtların Nogay Hanlarına dair münaslbetleri acıklaınmaktadır.

Bu ciltteki Halk edebiyatının bir kısml «süjetsiz konusuz kubaır» lardan ibarettir. «Sura Batır», «Sükem Batır», «Bayazit Batır», «Akşam Batır», «Kübek Batır» bu tür destenlardır. Bu eserlerde il batırları ateşte yanmaz, suda batmaz bir kahraman olarak idealize edilmiştir.

«Karahakal», «Yulay ile Salavat», «Bayık Aydar Sesen» gibi kobaırlarda çarlık hükümetinin sömürgelik siyasetine karşı mücadele eden tarihi şahıslar övülmektedir. Onlarda XVIII asrin gerçek tarihi olayları degerlendırilmektedir.

Bu ciltteki destanlarin hepsinde sadece vatan namusunu, ve özgürlüğünü koruyabilen erkekler «Halk Batırı» olarak adlandırılmıştrır. Vatanın özgürlüğü her şeyden üstün, şeyden önemlidir.

# ЗАКЛЮЧЕНИЕ

Эпические памятники башкирского народа, вошедшие в данный том, характеризуются историчностью содержания. Они прославляют подвиги батыров, беспощадно боровшихся с иноземцами, защищая свое племя, народ, Родину, называемую Урал. Если в известном не только между Уралом и Волгой, но и в Средней Азии, Казахстане эпосе «Идеукэй и Морадым», который у башкир появился во времена, когда они жили вместе с ногайцами и претерпевали иго мурз, ханов обеих народов, описывается борьба башкирских батыров с ханами Туктамыш, Аксак Тимер — Тамерлан, то в эпосе «Ек Мэргэн» отражается борьба против гнета Казанского хана. А в эпосах «Таргын батыр», «Таргын и Кужак» через отношение башкирского батыра Кужака к ногайскому батыру Таргыну четко вырисовывается картина неприязненного отношения башкир к ногайским поработителям. Такие эпические кубаиры, как «Карасакал», «Юлай и Салават», «Байык Айдар сэсэн», прославляют исторических героев, призывавших народ к священной войне за свободу против колониальной политики царской власти. В них дается народная оценка сложным историческим событиям XVIII в.

Часть произведений тома — это бессюжетные кубаиры «Сура-Батыр», «Сукэм-батыр», «Баязит-батыр», «Акшам-батыр», «Кобэк-батыр». В них народные батыры идеализируются и представляются благородными героями, не горевшими в огне, не тонущими в воде.

Какой бы теме ни посвящались исторические эпосы, их объединяет одна общая идея: имена настоящих народных батыров заслуживают только егеты, оберегающие честь, свободу страны, а это — превыше всего и всегда актуально.

## SUMMARY

The epic sagas featuring this volume are characterized by their historic value. They glorify heroes who fought a deadly fight with invaders and defended their kin and the land called Urals. The *lthukey and Morathym* saga depicts the Bashkir heroes fight with feudal chiefs like Togtamysh and Timer the Lame. The saga was well-known in the lands between the Volga, Ural, also in Central Asia and Kazakhstan. It was created among the Bashkirs at a timewhen they lived a common life with Nogais and were exploited by their chieftains. The *Yek Margan* saga reflects a battle wilh the Kazan khanate. In the *Targyn Batur* and the like sagas we can clearly see an enmity between the Bashkirs and Nogai chiefs.

The *Qarahaqal*, *Yulai and Salayat*, *Bayic Aidar Sasan* epic poems and like glorify the historic heroes who stirred the people to a holy fight against the colonial policies pursued by the Czarist government.

Part of works included in the volume reter to epic poetry without a plot. As such are cited *Sura Batyr*, *Sukem Batyr*, *Bayazit Batyr*, and so gorth. The epic heroes are greatly idealized there and portrayed as ones who fear no danger whatener.

No matter what is the topicall the historic sagas share the same idea: he deserves the title of a real *Batyr* (hero) who guards the honur, freedom of his nalive land, and this is looked upon as a supreme value.

# ЙӨКМӘТКЕҺЕ


| | | Текст | Аңлатмалар |
|---|---|---|---|
| | Тарих һәм эпос. *Инеш мәҡәлә (Нур Зарипов)* | 5 | |
| 1. | Иҙеүкәй менән Мораҙым | 39 | 305 |
| 2. | Изеге | 171 | 329 |
| 3. | Иҙел йорт | 178 | 355 |
| 4. | Мамай хан хикәйәте | 181 | 356 |
| 5. | Мәргән менән Маянһылыу | 183 | 357 |
| 6. | Тарғын батыр | 197 | 358 |
| 7. | Тарғын менән Ҡужаҡ | 200 | 358 |
| 8. | Ек Мәргән | 202 | 359 |
| 9. | Ҡыпсаҡ егете менән башҡорт ҡыҙы | 206 | 360 |
| 10. | Мораҙын менән Буһҡын | 208 | 360 |
| 11. | Сура батыр | 210 | 361 |
| 12. | Сүкем батыр | 211 | 361 |
| 13. | Баязит батыр | 212 | 362 |
| 14. | Аҡшам батыр | 213 | 362 |
| 15. | Көбәк батыр | 213 | 362 |
| 16. | Түлгән батыр | 214 | 362 |
| 17. | Старшина Мәсәғүт | 215 | 363 |
| 18. | Ҡарас менән Аҡша | 217 | 364 |
| 19. | Билал менән Дүсән | 220 | 367 |
| 20. | Ерәнсә сәсән | 222 | 367 |
| 21. | Ҡараһаҡал | 225 | 368 |
| 22. | Юлай менән Салауат | 254 | 371 |
| 23. | Салауат батыр | 288 | 374 |
| 24. | Байыҡ Айҙар сәсән | 289 | 374 |
| 25. | Тәүеш мәргән | 299 | 374 |
| 26. | Перовский йәйләүе | 300 | 374 |
| | Аңлатмалар | 303 | |
| | Текстарҙа урын алған тарихи шәхестәр һәм легендар персонаждар | 376 | |
| | Һүҙлек | 382 | |

*«Башҡорт халыҡ ижады» йыйынтығы*
*Рәсәй Фәндәр академияһы*
*Өфө ғилми үҙәге*
*«Почет Билдәһе» орденлы Тарих,*
*тел һәм әҙәбиәт институтында*
*әҙерләнде һәм институттың ғилми*
*советы тарафынан баҫырға раҫланды.*

The ep
They glorif
and the lar
heroes figh
well-knowı
Kazakhstar
mon life w
reflects a b
can clearly
The *Q*
glorify the
nial policie
Part of
such are ci
heroes are
whatener.
No ma
deserves th
land, and tl

Литературно-художественное издание

**БАШКИРСКОЕ НАРОДНОЕ ТВОРЧЕСТВО**

**Том 5**

# ИСТОРИЧЕСКИЙ ЭПОС

*(на башкирском языке)*

Рәссамы һәм
биҙәүсе мөхәррире *Азат Мөхтәруллин*
Техник мөхәррире *Зәйтүнә Сыңғыҙова*
Корректорҙары *Гөлфиә Рустиева, Әлфиә Кәримова*

Лицензия 0168, 10.04.96. Йыйырға бирелде 30.09.99. Баҫырға ҡул ҡуйылды 17.04.2000. Ҡағыҙ форматы $60 \times 90^1/_{16}$. Офсет ҡағыҙы. Әҙәби гарнитура. Офсет ысулы менән баҫылды. Шартлы баҫма таб. 24,5+0,25 форзацы + 0,5 йәбештермә. Шартлы буяу отт. 27,0. Иҫәп-баҫма таб. 24,35+ +0,45 форзацы+0,52 йәбештермә. Тиражы 3000 дана. Заказ № 223.

Башҡортостан «Китап» нәшриәте. 450001, Өфө, Левченко урамы, 4а.
Өфө полиграфия комбинаты. 450001, Өфө, Октябрь проспекты, 2.